# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

VIII

ТОМ

## СӘСӘН ҺҮҘЕ

*Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем*
*Илгә әшкәр итәйем.*
*Тыңлаң мине, йәмәғәт,*
*Боронғонан аманат.*
*Аманат йән һаҡлайҙыр,*
*Ят бауырҙан яҡлайҙыр.*

*Урал үҫтергән батыр —*
*Урал батыр тоҡомо.*
*Урал юлын ҡыуған ир —*
*Башҡорт халҡының ҡото.*

*«Урал улы» тигән һүҙ —*
*«Батыр» тигән һүҙ булыр.*
*«Батыр» тигән шул һүҙең —*
*«Урал» тигән һүҙ булыр.*

*Урал — илдең йөрәге,*
*Урал — батыр төйәге;*
*Батыр — илдең терәге.*
*Шулдыр донъя кәрәге.*

*Уралда тыуған батыр —*
*Сағыл таштың бәркөтө,*
*Урал үҫтергән батыр*
*Мең дошманды өркөтөр.*

*Батыр, батыр булһа ла,*
*Мәңге тормаҫ донъяла.*
*Алмашы булған батыр*
*Батыр данын оҙайтыр,*
*Батыр данын оҙайтыр,*
*Дошмандарын аҙайтыр,*
*Утағандай аралап,*
*Берәм-берәм оҙатыр*
*Ҡайтмаҫ ерғә мәңге лә,*
*Ялыҡ еңгән Мәңгеләй...*

# BASHKIR PEOPLE' S CREATIVE ART
# THE EPOS:
## THE İRTECS AND EPİC KOBAJYRS

# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО
# ЭПОС:
## ИРТЭКИ И ЭПИЧЕСКИЕ КУБАИРЫ

# BAŞKURT HALK FOLKLORU
# EPOS:
## DESTANLAR VE EPİK ŞİİRLER

КИТАП
Уфа – 2006

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## VIII ТОМ

## ЭПОС: ИРТӘКТӘР ҺӘМ ЭПИК ҠОБАЙЫРҘАР

КИТАП
Өфө – 2006

УДК 821.512.141-343
ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
Б 28

Мөхәрририәт: *Әхмәт Сөләймәнов* (баш мөхәррир),
*Гөлнур Хөсәйенова* (баш мөхәррир урынбаҫары),
*Рауил Бикбаев, Салауат Галин, Ринат Йосопов, Фәнүзә Нәҙершина, Миңлеғәле Нәҙерголов, Розалия Солтангәрәева, Ғайса Хөсәйенов.*
Текстарҙы һайлап алып, томды төҙөүсе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы, һүҙлек әҙерләүсе — ***Әхмәт Сөләймәнов.***
Томдың яуаплы мөхәррире — ***Рауил Бикбаев.***

*Томды әҙерләүҙә халыҡ-ара йәмәғәт берекмәләре союзы «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» Башҡарма комитетының да өлөшө бар*

**Күсереп баҫҡанда томға һылтаныу мотлаҡ**

Редакционная коллегия: Ахмет Сулейманов (главный редактор),
Гульнур Хусаинова (заместитель главного редактора),
Равиль Бикбаев, Салават Галин, Ринат Юсупов, Фануза Надршина,
Минлегали Надергулов, Розалия Султангареева, Гайса Хусаинов.
Выявление и отбор текстов, составление тома, предисловие, комментарии и словарь — **Ахмета Сулейманова.**
Ответственный редактор — Равиль Бикбаев.

*В подготовку тома внес вклад и Исполком международного союза общественных объединений «Всемирный курултай (конгресс) башкир»*

**При перепечатке ссылка на том обязательна**

**Башҡорт халыҡ ижады.** 8-се том. Эпос: иртәктәр һәм эпик
Б 28 ҡобайырҙар. — Өфө: Китап, 2006. — 492 б.

ISBN 5-295-03927-7 (Т. 8)
ISBN 5-295-01393-6

«Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының был томы, нигеҙҙә, йыйылма эпик ҡомартҡыларҙан төҙөлдө. Улар араһында ғәҙәттә экиәт йыйынтыҡтарына индереп йөрөтөлгән әҫәрҙәр менән бер рәттән «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының быға тиклем баҫтырылмаған текстары бирелде.

УДК 821.512.141-343
ТП – 115/06 ББК 84-4 (2 Рос=Баш)

ISBN 5-295-03927-7 (Т. 8)
ISBN 5-295-01393-6
© Ә. М. Сөләймәнов, төҙөүсеһе, 2006

## МӨХӘРРИРИӘТТӘН

Күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады»ның әле һеҙ ҡулға алған сираттағы йыйынтығы, ҡарамаҡҡа, хронологик яҡтан да, тематика һәм йөкмәтке йәһәтенән дә бер-береһенән йыраҡ торған сюжеттарҙан ойошторолған. Берәүҙәренең яҙма дастанға тартым версияһының дүрт яҙыусы ҡулынан үткән варианты «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпик ҡобайырының башҡорт («Иҙел менән Яйыҡ»), икенселәренең ҡобайыр ҡалыбына ҡойолмошо (Иҙегә хаҡындағы сюжеттың бүтән варианттары), өсөнсөләренең иртәксә һөйләнелгән булыуы («Алып батыр», «Алпамыша»), шулай уҡ был томға ингән әҫәрҙәрҙең араһын алыҫлаштырыуға ғына хеҙмәт иткән кеүек. Әммә, төптән уйлап ҡарағанда, уларға ошо күп төрлөлөктө лә берләштермәле үҙенсәлек тә хас икәненә төшөнөргә була. Быға шул дәлил: улар барыһы ла, асылда, Урал батыр башлаған изге эште дауам итеүселәр, уның изге васыятын ғәмәлгә ашырыусылар булып күҙ алдына баҫалар.

Был том шуныһы менән дә үҙенсәлекле: берҙән, «Иҙел менән Яйыҡ», «Кәртә Мәргән», «Аҡай яуы», «Ҡараһаҡал яуы» иште бик тә үҙенсәлекле әҫәрҙәр беренсе тапҡыр ошонда донъя күрә; икенсенән, унда-бында телгә алынғылаһалар ҙа, быйаса тикшеренеү объекты булыуға ирешә алмаған, үткән быуаттың 40—50-се йылдарында был жанрҙы ҡыйырһытыу шауҡымы арҡаһында, әкиәт йыйынтыҡтарына барып һыйынған, йә әлегәсә уҡыусыларға барып етә алмай, архивтарҙа һаҡланып ятҡан эпик сюжеттар, уларҙың версиялары һәм варианттарына ла урын бирелде.

Томды тикшереүҙә әүҙем ҡатнашып, үҙҙәренең ҡиммәтле фекерҙәре менән уртаҡлашҡан коллегаларыбыҙҙың барыһына ла мөхәрририәт үҙенең оло рәхмәтен күндерә.

## ОҠШАШ БУЛМАҒАН ЭПИК ҠОМАРТҠЫЛАРЫБЫҘҘАҒЫ УРТАҠЛЫҠТАР

Ҡайһы ғына халыҡтың ауыҙ-тел ижадын алма, уларҙың бер үк жанрға йә төргә ҡараған әҫәрҙәре араһында оҡшашлыҡтарҙы, хатта ки уртаҡлыҡтарҙы осратырға мөмкин. Бындай күренештәргә шул әҫәрҙәрҙе ижад итеүсе, һаҡлаусы, үҙ итеүсе халыҡтарҙың йә тарихи яҡтан этник сығыштарының тамырҙашлығы, йә төрлө юлдар менән аралашыуҙары һәм шуның һөҙөмтәһендә, мәҙәниәт өлкәһендәге алыш-биреш һәм үҙләштереүҙәр, йә этнос-ара бер ниндәй бәйләнештәр булмаһа ла, оҡшаш шарттар бер үк төрлө ситуациялар, ихтыяждар, рухи талаптар һәм архетип законсалыҡтары сәбәп ҡылыуы ихтимал. Хатта ки, ҡарамаҡҡа, бер-береһенә оҡшамаған ижади ҡомартҡыларҙа ла уртаҡлыҡ һәм оҡшашлыҡтар табырға була. Бындай билдәләргә миф һәм әкиәттәрҙән ҡала, айырыуса эпик ҡомартҡылар эйә. Халыҡ-ара кимәлдә шулай икән, милли репертуарҙың үҙе эсендә уларға юлығыу һис тә ғәжәп түгел.

Күпселек эпостарҙан айырмалы рәүештә, хатта, ҡайһы бер мифологик башланғыстарҙы биҙәк маҡсатында (орнаменталь) ғына түгел, ә Марксҡа эйәреп әйткәндә, «нигеҙ ташы», һәм «арсеналы» итеп файҙаланған «Урал батыр» эпосы нәҡ ана шундай ҡомартҡыларыбыҙ иҫәбенә эйә. Дөрөҫ, уның «Кеше-маҙар булмаған, Килеп аяҡ баҫмаған» бер әҙәм белмәгән ҡоро ер булыуын хәбәр итеүҙән башланып китмеше был әҫәрҙә ваҡиғаның ҡайҙа барғанын аныҡ әйтергә форсат бирмәй. Уның ҡарауы, Урал батыр менән ҡара көстәр араһында конфликт ҡырҡыулаша бара, сюжет көсөргәнешле үҫеш ала башлау менән, һәм эпостың финалына яҡынлай килә, урын беҙгә бөгөнгө көндә лә мәғлүм конкрет географик объекттар рәүешендә күҙ алдына баҫтырыла: Урал батыр тарафынан үлтерелгән дейеү, аждаһалар өйөлгән ерҙә Ямантау, Янғантау хасил була, Иҙел,

Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар Алмас ҡылыс менән сапҡан тау-таш ярығынан шул егеттәрҙең исемен атама итеп алған йылғалар ағып китә.

«Урал батыр» эпосында ер һәм һыу образы асылда төрлө-төрлө вағыраҡ сюжеттарҙы композицион яҡтан ойоштороу һәләтенә эйә булған образға әүерелгән. Донъя диңгеҙе уратылышындағы билдәһеҙ ер киҫәгенән хәрәкәт итә башлаған Урал батыр диңгеҙҙән ҡоро ер яһай, ә уның Һаҡмар атлы ҡустыһы менән өс улы, һыуға ҡытлыҡ тыуғас, тағы һыу хасил итеүҙәре менән шул ҡоро ерҙе тереклек йәшәрлек итеп, камиллаштыра. Улар Урал бөтөргән диңгеҙҙе яңынан тергеҙмәй, кәрәк миҡдарҙа һыу биреүсе йылғалар хасил итеүҙәре — уларҙы, иҫәп-хисап менән (рациональ) эш итә белеүсе ер һәм һыу балансын һаҡлаусылар рәүешендә күҙалларға сәбәп.

Тимәк, бик борон уҡ тәбиғәт экологияһы проблемаһын күтәргән бабаларыбыҙ Урал батыр менән уның дүрт йылға ярыусы Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш тигән улдары менән Һаҡмар ҡустыһы йөҙөндә тәүге экологтар образын кәүҙәләндергән. Бына шулай уларҙың эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә, эпостың башында телгә алынған билдәһеҙ утрауҙы дүрт яҡтан ураткан диңгеҙ кеүек үк, Ер һәм Һыу образы әҫәрҙең төрлө характерҙағы сюжеттарҙан хасил булған йыйылма сюжетын композицион яҡтан ҡаймалап ҡуя. Ошондай ҡаймаланыш үҙе үк әҫәрҙең төп идеяһын, мәңгелек ғүмер — минең, һинең, уның мәңге ғүмер һөрөүен түгел, ә, түлләнә-түлләнә, быуынға быуын ялғана барыуында тигән фәлсәфәүи идеяны балҡытып ебәрә, шуның ғәмәлгә ашмышының тәүшартын да һыҙыҡ өҫтөнә ала: шул фәлсәфәүи мәғәнәлә йәшәү мәңгелеген тәьмин итеү өсөн Ер һәм Һыу кәрәк.

## 1. Урал батыр васыятын тотоп

«Урал батыр» эпосы мәңгелек ғүмер хаҡындағы фәлсәфәүи идея ғәмәлгә ашһын өсөн, Ер һәм Һыу образдарында һынланған тәүшартты булдырыу — шарт икәнен билдәләү менән генә сикләнмәй.

Мәсьәләнең шул яғы ла бар. Урал батыр, үҙе үлер алдынан васыят әйткәнендә, ни тиклем көс-ҡеүәткә эйә булһаң да, был донъяла барыһын да яңғыҙ-ярым атҡарып булмауын, бергәләп эш ҡылырға кәрәк икәнен төшөндөрә.

Уралдың һүҙҙәрендә, үҙенең башынан үткәндәрҙе яңынан кисереп, кәңәшһеҙ-ниһеҙ һәм яңғыҙ эш ҡылыуына, юлдаш иткән ағаһының яуыз уйлы булып сығыуына үкенесе лә, уландарына бергә-бергә эш ҡылырға нәсихәте лә әйтелгән.

Заманында башҡорт сәсәндәре менән ҡаҙаҡ аҡындарының теленән төшмәгән «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайырында ла, асылда, «Урал батыр» эпосында күтәрелгән проблемалар ҡуйылған.

Шуның иң тәүгеһе — Ер-һыу проблемаһы. «Урал батыр» эпосы мәңгелек ғүмер проблемаһын бар тереклек ғүмер һөрөрлөк Ер-һыу хасил итеп, унда шул тереклек, түл йәйеп, быуын-быуын ғүмер һөрөрлөк шарттар тыуҙырыу юҫығында хәл итһә, «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайыры кеше ҡулы менән камиллаштырылған ерҙе һаҡлай белеү ихтыяжы һәр саҡ мөһим икәнен киҫәтә. Ата балаһы булараҡ, Иҙел быңдай изге бурысты атҡарғанда, яңғыҙ-ярым эш итеү ярамай икәненә яҡшы төшөнгән яңы быуын батыры рәүешендә сығыш яһай.

Ваҡиға реаль географик арауыҡта — Урал буйында барһа ла, мифологик эпос традицияһы буйынса, герой менгән ат — ябай ат түгел, осоу һәләтенә эйә булған толпар. Ул толпарҙың — Аҡбуҙат, Иҙелдең ҡоралының Алмас ҡылыс икәне лә мәғлүм. Ошо ике мифик образ атанан улға көс-ҡеүәт күсеүен символлаштыра. Ә ул юҡ иткән яуыз заттарҙың Урал батырға ҡаршы торған мифик көстәрҙе хәтерләтеүе — Иҙелдең ата юлын ҡыуыусы батыр икәненә ишара. Әммә шуныһы: атаһы әйткән нәсихәти-васыяттың хаҡлығын таныһа ла, уны доғалай ҡабатлаһа ла, шуға күрә Яйыҡ ағаһына ярҙамға ашыҡһа ла, Иҙел батыр тәүҙә — тиңһеҙ һылыу ҡыҙ булып осраған әүермән Еҙтырнаҡ, унан баш-дейеү, өс башлы Ҡара дәү ише ҡара көстәр менән, атаһы кеүек үк, япа-яңғыҙы алыша. Төшө боларып, хәүеф-хәтәр һиҙенеп, Иҙел ҡустыһына ярҙамға ашыҡҡан Яйыҡ та Ялмауыҙ менән яңғыҙ һуғыша. Иғтибар итегеҙ. Торғаны — парадокс: ике ағай ҙа, аталарынан айырмалы рәүештә, яуыз дошмандарға бергәләп ҡаршы сығыу фарыз икәнен яҡшы аңлай, әммә шул бергәләшеү юлында улар менән яңғыҙышар алыша. Күрәһең, был эпос өсән Урал батыр васыятын уның уландарының яҡшы аңлауы, шуны ғәмәлгә ашырыу юлына сығыуҙарын күрһәтеү генә түгел, ҡаршылыҡ осрағанда, уның менән яңғыҙ алышырға ла яйын белеүҙәренә иғтибар иттереү мөһим. Бында, кәңәш ни хәтле аҡыллы булмаһын, уны абсолютлаштырмау аҡыллы һәм ижади ҡулланыу фарыз тигән нәсихәт йәшеренгәненә төшөнөү ҡыйын түгел.

Йәнә шуныһы мөһим. Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар ғүмер биргән йылғаларҙы һыулап, Урал батыр вариҫтары ырыу-ырыу түл йәйгән, дүрт ил ҡорған. Иҙел менән Яйыҡҡа, шул илдәрҙе ҡурсалап, «Урал батыр» эпосының геройы ҡырған яуыз мифик заттарҙың вариҫтары менән алышырға тура килә.

Мифологик башланғыс «Иҙел менән Яйыҡ» эпосында Иҙел батырҙың, Уралдан ҡалған толпарға атланып, уның Алмас ҡылысы менән эш итеүендә һәм юлындағы ҡаршылыҡтарҙың — Еҙтырнаҡ, башдейеү Ҡара дәү, Яйыҡ батыр юлындағыһының Ялмауыҙ рәүешендә кәүҙәләндерелеүендә генә түгел, шул көстәр менән алыш һөҙөмтәһендә лә сағылыш ала. Ә ул һөҙөмтә шунан ғибәрәт: тирә-йүн өр-яңы үҙгәреш кисерә — катаклизмға юлыға — тау-таш ирей, күл, йылғаларҙағы һыу, ҡайнап,

ныуға әйләнә. Бынан тыш ҡобайырҙа Гераклдың икенсе еңеүен һөйләгән иткән грек мифынан таныш мотивҡа ла юлығабыҙ.

Күҙәттә оҡшаш шарттар, оҡшаш ситуация, оҡшаш ихтыяж, уларҙы хәл итеү өсөн, бер үк төрлө ысулдар ҡулланырға мәжбүр итә. Фольклорҙағы оҡшашлыҡтар — үтә оҡшаш образ, мотив, сюжеттар, йыш ҡына бына шулай хасил була. Уны беҙ типологик оҡшашлыҡ тибеҙ. Иҙел батыр юлыҡҡан ситуация ла грек мифы геройы Геракл юлыҡҡан ситуацияға типик яҡтан оҡшаш. Ошо оҡшашлыҡ Геракл ҡулланған ысулды ҡулланырға мәжбүр итә: ул да ҡара дейеүҙең башы ҡыйылып төшкән муйындың төпсөгөн торомбаш менән өтә барып, өтә барып ҡына, уны еңеүгә өлгәшә.

Илде илбаҫарҙарҙан ҡурсалау тигән реалистик идея, ватансылыҡ идеяһы, шулай итеп, «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайырында традицион мифология эстетикаһы күҙлегенән сығып асыла.

## 2. «Урал батыр» ҡобайырының яҡынса шәүлә-проекцияһы тип ҡаралмалы «Алып батыр»ҙың «Иҙел менән Яйыҡ»ҡа ыҡлағаны

«Алып батыр» әҫәренә беренсе тапҡыр Кирәй Мәргән иғтибар иткәйне һәм уны «Алпамыша менән Барсынһылыу» сюжетына барлыҡҡа килгән эпик әҫәрҙәрҙең формалашыу юлында булған бик етди бер баҫҡыс» тип баһалағайны[1].

Үкенескә ҡаршы, был әҫәр «Урал батыр» эпосының Исмәғил Рәхмәтуллин яҙҙырған версияһы менән бер үк яҙмышҡа дусар ителде: уны ла ошоғаса батырҙар тураһындағы әкиәттәр рәтенә индерә килделәр. Уларҙың шундай әкиәттәргә ҡайһы бер оҡшашлыҡтарына өҫтөнлөк биреп, шунан сығып ҡына эш итеүҙең һөҙөмтәһе булды был. Ә бындай формаль оҡшашлыҡтар һәм хатта уртаҡлыҡтар йыш ҡына эпостың эске ҡанунына ҡаршы килмәй. Эпос геройы ла, әкиәт батыры кеүек үк, бала һөйөү бәхетенән оҙаҡ йылдар мәхрүм ир менән ҡатындан, көттөрөп кенә тыуырға, ай үҫәһен — көн үҫеп, сикһеҙ батыр булып үҫергә, кәләш табыу юлында ауыр һынауҙар үтергә мөмкин. Әммә әҫәрҙең структураһына ла, идеяһына ла йоғонто яһамалы — жанр айырмаһын билдәләмәле үҙенсәлектәре лә етәһе. Иң мөһиме, батырҙар тураһындағы әкиәт геройы эшмәкәрлегенең ахыры юғары пафос менән тамамлана. Ул тамамланыш сюжеттың ыңғай сиселеше менән тап килә: герой маҡсатына ирешә, никахлана, байға йә батшаға әүерелә. Әкиәт геройы һәләк булмай. Этногенетик һәм этиологик мотив әкиәткә хас күренеш түгел. Уларға тартым «аңлатмалылыҡтар»ға иһә сиҡ юҡ. Әммә

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1961. — 195-се б.

улар ироник юмор маҡсатында ғына ҡулланылғылауы ихтимал. Әкиәттән айырмалы рәүештә, эпос төп ҡаһармандың үлеме менән тамамланырға ла мөмкин. «Урал батыр» — шуға миҫал. Әммә ул, ошо әҫәрҙең логик дауамы хисабындағы «Иҙел менән Яйыҡ» әҫәренән күренеүенсә, үҙҙе-үҙе* бер ырыу, бер ил булырлыҡ түл йәймәле Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш атлы улдарын, Һаҡмар атлы ике туған ҡустыһын ҡалдыра. Тимәк, бында башҡорт халҡы булып ойошасаҡ ҡәүемдәр күҙ уңында тотола. Шуның кеүек «Алып батыр»ҙың ҡаһарманының да «ете улы булған. Ошо ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән». Тимәк, «Урал батыр» менән «Алып батыр» эпостарында этногенетик һәм этиологик мотивтар бар һәм, иң мөһиме, шуларҙың оҡшашлығы күҙәтелә. Уларҙың икеһендә лә был мотивтарҙың юмор менән тамсы ла уртаҡлығы юҡ. Киреһенсә, улар дөрөҫлөккә дәғүә итә. Мифологик аңдан арынмаған бабаларыбыҙ иһә уларҙы дөрөҫлөктөң үҙе тип белгән, әлбиттә.

Урал батыр үҙенән ҡалыр затҡа, бар терееклеккә донъя диңгеҙенән үҙе яулап алған ҡоро ерҙе ҡалдырһа, Алып батыр менән Барһындан тыуған ете улдан йәйелгән «ете ырыу Урал буйын биләп йәшәгән». Алып батыр хатта шул ете ырыуҙың йәйләүе булырҙай урын ҡалдырыу хәстәрлеген күргән: ул «аяҡ баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти». Шул рәүешле «Алып батыр» эпосында беҙ «Урал батыр»ҙың яҡынса проекция рәүешендәге шәүләһен күргәндәй булабыҙ.

Урал батыр образы эпоста идеаль герой образы эталоны итеп бирелгән. Алып батыр эшмәкәрлеген дә бабаларыбыҙ шул иң күркәм мифологик эпос геройы эшмәкәрлеге күҙлегенән баһаларға, һис юғында, унан өлгө алыусы, уның традицияһын дауам итеүсе — яңы ил ҡорорға һәләтле ҡаһарман итеп күрһәтергә тырышҡан. Кирәй Мәргән «Алып батыр» эпосы «Алпамыша менән Барсынһылыу» күтәргән «теманы сағылдыра торған, ләкин ойошоп етмәгән сюжеттар менән эпос булып формалашҡан варианттарҙы тоташтырып тороусы әҫәр булып йәшәгәндер» тигән фаразын белдергәйне[1].

Алып батырҙы һәм Алпамышаны күҙ алдына килтереү өсөн, шуны иҫәпкә алырға кәрәк. Беренсенән, улар донъяға ғәҙәти булмағанса һәм мөғжизәүи юл менән ярала: Алып «таш эсенән, тауҙы ярып» килеп сыға, Алпамыша һикһән йәшлек әбейҙән тыуа ла, «ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп, бер көнлөк сағында аяҡ атлап, икенсе көнөндә урамға сығып, балалар менән йүгерешеп, бура һуғып, уйнай башлай»[2]. Икенсе

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — 195-се б.

[2] БХИ. / Төҙ., аңлатмалар М. М. Сәғитов, Б. С. Байымовтыҡы; Инеш мәҡ. М. М. Сәгитов, Б. С. Байымов, С. Э. Галиндыҡы; Яуаплы мөхәрр. Э. И. Харисов, С. Э. Галин. — Өфө: Китап, 1999. — 4-се том. Эпос. — 35-се б.

бер вариант буйынса, Алпамыша бер көндә бер йәшлек, «егерме биш көндә егерме биш йәшкә етеп, етмеш аршын булып китә[1]», икенсенән, ултырҙы иһә, уй һиңкетә, йөрөниһә, ер һелкетә»[2], уның буйы — алтмыш аршын, яурыны алты аршын булған. Осо эләгеп, ыштан төбөн йырта, тип, ул эре ҡарағайҙарҙы тамырҙары менән йолҡа-йолҡа, үҙенә юл һала. Ҡәҙимге кешене үгеҙе, һабаны менән кеҫәһенә һалып йөрөтә ала[3]. Алып батырҙың буй-һыны, килбәте иһә былай тасуирлана: «Бармаҡтары — беләктәй, ти. Беләктәре — бүрәнәләй, аяҡтары — кәмәләй, яурыны — яландай киң, кәүҙәһе имәндәй ныҡ, ти»[4]. Шулай булғас «Алып батыр»ҙа йә «Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосында тасуирланған ваҡиғалар ахырында Алып батырҙың йә Алпамышаның Алпамыша ҡаяһына әүерелеүе бик тә ихтимал бит. Шуның менән батырҙың яҡты донъялағы эше тамамланыуына ишара яһала. Батырҙың ҡая-таштан яралып ахырҙа кире ҡая-ташҡа әүерелеүен — асылына кире ҡайта бәндә, тип кенә аңлатыу менән сикләнергә була. Әммә, эстетика күҙлегенән ҡарағанда, былдай сикләнеү сетерекле. Урал батырҙың Урал тауына әүерелеүен хәтергә төшөрһәк, Алып батырҙың ҡая-ташҡа әүерелеүенә аптырайһы түгел.

Алпамыша (йәки Алып батыр) образы башҡорт фольклорында ике кимәлдә һынландырыла. Легендаларға Алпамышаны статик хәлдә күрһәтеү хас. «Күрһәтелеүе» лә — үҙенсә: һәр саҡ уның һын-килбәтенең мөһабәт булыуына иғтибар иттерелә. Тик был юлайы ла тасуирлап тормай ғына эш итә легенда: ул ҡалдырған эҙҙәрҙе, ул эш иткән, ҡағылған нәмәләрҙе телгә алыу менән генә сикләнә.

Хәрәкәттә күрһәтелмәһәләр ҙә, кәүҙәләренең ҙурлығы әйтелмәһә лә, тыңлаусыға бер юлы ике билдәһеҙҙе асыҡлауҙы ҡараған математик мәсьәләне сискән кеүек, эш итергә (иң тәүҙә булған ғына ғәмәли тәжрибәһенән, күҙәтеүҙәренән сығып, Алпамышаға мөнәсәбәтле телгә алынған объекттарҙы күҙ алдына килтереп, «күңелдән иҫәпләү юлы» менән шуларға пропорциональ кәүҙәнең үҙен күҙ алдына килтереп ҡарарға) тура килә. Алпамыша үҙенең ҡынйырағына (аяҡ кейеменә) тулған ҡомдо бушатҡан урында — Илеш яғындағы ике тау («Алпа ҡомо — айыра тау»), итегенең үксәһенән ҡубып — төшөп ҡалған балсыҡ ҡатмағынан Мәсетлеләге Мүсек тауҙары хасил була («Мүсек тауҙары»), ҡәбере лә тотош тауҙы хәтерләтә («Алпамыша

---

[1] БХИ / Төҙ., аңлатмалар М. М. Сәғитов, Б. С. Байымовтыҡы; Инеш мәҡ. М. М. Сәғитов, Б. С. Байымов, С. Ә. Галиндыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов, С. Ә. Галин. — Өфө: Китап, 1999. — 4-се том. Эпос. — 52-се б.

[2] Шунда уҡ. — 54-се б.

[3] Шунда уҡ. — 354-се б.

[4] БХИ / Төҙ. Н. Т. Зарипов, М. Х. Минһажетдинов; Инеш мәҡ. Н. Т. Зариповтыҡы; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Н. Т. Зариповтыҡы. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1978. — 3-сө кит.: Әкиәттәр. — 34-се б.

ҡәбере»)[1]. Шундайыраҡ мәғлүмәт кенә бирә легендалар (ә улар ғәҙәттә топонимик характерҙа була). Аяғының кейеменә тулған ҡомдан йә үксәһенән ҡубып төшкән балсыҡ ҡатмағынан һәм ҡәберенән тау хасил булғас, үҙенең ҡарағай аша баҫып йөрөгәне хаҡында мәғлүмәт алған кешегә әҙ генә фантазияһын эшкә егергә генә ҡала — һәм шул заттың мөһабәт һыны уның күҙ алдына килә лә баҫа. Шулай итеп, сюжетҡа ҡоролмайынса, бына шулай хәбәр итеү менән генә сикләнһәләр ҙә, ул легендаларҙа тәүтормош сәнғәтендә үк мәғлүм булған художестволы образ тыуҙырыу алымы — «өлөш аша бөтөн хаҡында төшөнсә биреү» тип аталмалы алым — оҫта ҡулланылған. Шул — милли ерлектә тыуған образдың донъя мифологияһынан мәғлүм титандар образы менән ассоциациялашыуына үҙе үк төплө дәлил.

Ә эпос геройы булған батыр, бары ана шундай мифик Алып образы менән ассоциациялашҡан өсөн генә, Алпамыша тигән ҡушамат алып, аҙаҡ шул ҡушаматы яңғыҙлыҡ исеме булып китеүе ихтимал.

Эпос Алпамышаһы хәрәкәттә ҡеүәтле, әммә ҡәҙимге кеше кеүек ғаилә-көнкүреш планында ла, социаль тип рәүешендә лә һынландырыла.

## 3. Титандарға тиңләшмәле «оло бурыс үтәр баһадир ир бала мөғжизә юлы менән донъяға килә» мотивының ғәмәлгә ашмышы һәм шул батырҙың ҡайтмаҫ ергә китеүенең дә мөғжизәүи булғаны

Алып, Алпамыша хаҡындағы эпос геройының титандар образы менән ассоциациялашырлыҡ образы формалашыуға, алпамышалар хаҡындағы легендаларҙан тыш, эпос жанрының үҙ тәжрибәһенең дә роле ҙур булғандыр, моғайын. Эпос геройҙары булған Урал батыр һәм уның уландарының да алып-титандар тоҡомонан икәне аңлашыла бит.

Эпос буйынса, Урал батырҙың Яйыҡ атлы баш балаһы — ер йөҙөндә үҙен Тәңренән кәм тотмаған, бар нәмәгә үҙен хужа тип белгән, ни теләһә, шуны ҡыла алған Ҡатил батшаның ҡыҙынан, Иҙеле — Самрау батша менән Ҡояштың ҡыҙынан, мәңге ҡартая белмәҫ Һомай тигән мифик ҡош-ҡыҙҙан тыуһа, Шүлгәндең улы Һаҡмар Самрау менән Айҙың ҡыҙы Айһылыуҙан тыуа була. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының ҡайһы бер версиялары һәм варианттары буйынса, уның төп геройы булған Иҙеүкәй ҙә мөғжизә ярҙамында ярала: ул һыу ҡыҙынан тыуа

---

[1] БХИ / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар яҙыусы Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. К. Мәргән менән Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө: Китап, 1997. — 2-се том: Риүәйәттәр, легендалар. — №№ 37—39.

(«Нәзеүкә менән Моразым». — № 9: «Идигә батыр». — Ҡушымта, № 1).

Әгәр инде эпостарға иң яҡын тороп, поэтика тәңгәлендә алыш-биреш итешеп тороусан жанрға, батырҙар тураһындағы әкиәттәргә, иғтибар итһәк, улар өсөн *«оло бурыс үтәр баһадир мөғжизә юлы менән донъяға килә»* мотивының сюжеты хасил булыуға төп этәреш биреүсе, хатта уларҙың жанр йөҙөн билдәләүсе вазифаһын да үҙенә алыуына төшөнөрбөҙ. Таң батыр үҙе һәм Төш батыр менән Кис батыр — әсәһе бер серле балыҡтың башын ашауҙан, «Алтын сабаҡ» әкиәтенең ике ҡаһарманы — әсәһе хикмәтле балыҡтың кәүҙәһен ашауҙан, алтын башлы, көмөш арт-һанлы булып, донъяға килә; Ҡамыр батыр — ҡамырҙан ярала, Айыуғолаҡ айыу менән ҡауышҡан ҡатындан тыуа[1].

Бына шулай *«оло бурыс үтәр баһадир мөғжизә юлы менән донъяға килә»* мотивы төрлө версияла таралған. Шул фонда һәм шул күҙлектән ҡарағанда, осетин, ҡарасәй нарттары (эпостары) буйынса, уларҙың Сослан, Сосруко ише ҡаһармандары кеүек үк, башҡорттоң «Алып батыр» эпосы ҡаһармандарының да ҡая-таштан яралыуы — мифология өсөн бик тә тәбиғи. Тимәк, был осраҡтарҙа ла беҙ, башҡа бер ни менән дә түгел, бары әлеге традицион мифологик мотивтың күп версия һәм варианттарының береһе менән осрашабыҙ ғына.

Ҡарамаҡҡа, бары формаһы яғынан ғына традицион булмаһа ла, *«Алып батыр ҡаянан ярала (тыуа)»* мотивы йөкмәткеһе һәм эстетик функцияһы йәһәтенән үтә лә традицион: ул да киләсәктә был геройға йәмғиәт, донъя әһәмиәтендәге бурыс йөкмәтеләсәген прогнозлай. Үҙенә кейәү һайлауға бәйге асҡан баһадир ҡыҙҙы еңеп, уны кәләш итеүе, ете ырыу булып йәйелмәле түл ҡалдырыуы — ана шул оло бурыстың ғәмәлгә ашмышы ул. Ә был — баһалап бөткөһөҙ ижтимағи әһәмиәткә эйә булған ҡаҙаныш. Сөнки Барсынһылыуҙың кейәүлеккә кандидаттар турниры асыуы — Кирәй Мәргән, Мөхтәр Сәғитовтар билдәләгәнсә, тәүтормош общинаһы ойоша башланған дәүерҙәргә хас йәмғиәт ҡоролошо формаһы булған әсәлек хакимлығына нигеҙләнгән матриархат шарттарында ғаиләнең ҡатынҡыҙ инициативаһы менән ҡоролоуын сағылдыра. Алып батырҙың ҡәҙимге ҡыҙҙы түгел, ә эпостың варианттары асыҡлай төшкәнсә, төрлө-төрлө ырыуҙан килгән һәр егетте күтәреп, һауаға сойорғотоп тора алған, алты батман ташты орсоҡ урынына алып атырлыҡ баһадир ҡыҙҙы еңеүе — атай кеше ғаиләгә өҫтөнлөк итә башлаған дәүер килеүенең һәм артабан патриархат тәртибен үҙ иткән ырыуҙар хасил булыуының образлы кәүҙәләнешенән ғибәрәт.

---

[1] БХИ: / Төҙ. Н. Т. Зарипов, М. Х. Минһажетдинов; Инеш мәҡ. Н. Т. Зариповтыҡы; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Н.Т. Зариповтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов, Н. Т. Зарипов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1978. — Әкиәттәр. 3-сө кит. — №№ 7, 9, 10, 23.

## 4. Конфликт төйөнөнөң сеймәлгәне, сюжеттың, тармаҡлана-тармаҡлана, бер һыҙатҡа тартылғаны

«Алпамыша менән Барсынһылыу» эпосының И. В. Салтыков архивында һаҡланған «Барсынһылыу» тигән варианты *«Барсынһылыуҙың бәйге асҡаны», «Алпамышаның ат һайлағаны», «билһынашта шул баһадир ҡыҙҙың унан еңелгәне»*, тимәк, *«уның кемгә барыры беленгәне»* кеүек мотивтарҙан ғына тора. Сюжеттың шулай ыҡсымланыуы (эпостың башҡа варианттарына хас булған Алпамышаның әсирлеккә юлығыуы, әсир итеүсе хандың ҡыҙҙарын үҙенә ғашиҡ итеүе, кәләшен яусылаусылар күбәйеүе, әсирлектән ҡотолоуы, кеүек мотивтарҙан арынғанлығы), фекерҙе ситкә сәселдермәй, бер нөктәгә, «Алып батыр» хаҡында әле әйтелгәндәге кеүек, батырға — батыр, матурға — матур тигән идеяға, шул идеяны ғәмәлгә ашырыуҙа ҡыҙ инициативаһына өҫтөнлөк биреләүенә туплауға ғына хеҙмәт итә.

«Барсынһылыу» варианты эпостың ҡайһы бер мотивтарын төшөрөп ҡалдырыу иҫәбенә хасил булһа, «Алпамыша» тигән йыйылма текста улар барыһы ла иҫәпкә алынған. Эпостың башҡорт версияһының бығаса баҫылып сыҡҡан һәм иҫәпкә алынған башҡа варианттарындағы һымаҡ уҡ, бында ла батырҙар тураһындағы әкиәттәр менән уртаҡ мотивҡа, «батыр никахы» мотивына, ҙур әһәмиәт бирелә.

Ҡарамаҡҡа, Алпамышаның Барсын менән көрәшеүе — сюжетты сюжет итеүсе төп конфликт төйөнө, ә үҙе юҡта уның кәләшен һалдырып алырға маташыусыларға үҙенең өҫтөнлөгөн раҫлауы өҫтәлмә конфликт төйөнөн сисеү һымаҡ тойола. Ысынлап та, былдай фекер тыуыуға нигеҙ бар. Әммә шул ике конфликт төйөнөн берләштереүгә, тимәк, сюжетты ҡатмарлаштыра төшөүгә сәбәпсе булған бүтән конфликт башланғыстары ла бар эпоста. Баһадир ҡыҙ менән уны еңгән Алпамышаның туйы — Ҡолтүбән тотҡан иҫәптең юҡҡа сыҡҡаны. Бына шул нигеҙҙә «Алпамыша»ла социаль конфликт тыуа.

Эпостың әле һүҙ барған вариантында сюжеттың Ҡолтүбән — Алпамыша конфликтына нигеҙләнгән һыҙаты Әйләр — Бүләр мөнәсәбәтенең киҫкенләшеүенән тыуған конфликт хасил иткәне менән үрелеп китә. Шул үҙ нәүбәтендә Алпамыша — Әйләр конфликтына сәбәпсе була. Бына шулай сынйырлы реакцияны хәтерләткән ҡатмарлы ситуация килеп тыуа. Иң мөһиме, бөтә бәлә иң ахырғы сиратта Алпамыша иңенә төшә. Ә эштең аныҡы шунан ғибәрәт. Бүләр хандың «тороп, Алпамышаға ҡул биреүе» — бер яҡтан, һис һүҙһеҙ, уның игелекле аҙымы була. Әммә был игелекте ул еңел генә ҡылмай. Ни өсөн тигәндә, үҙен еңгән Алпамышанан еңелгәс, уны йорт кейәүе итеп алып ҡайтҡан ҡыҙы:

— Торсо, атай, торсо, атай,
Тороп, билең быусы, атай,
Өйгә ҡунаҡ алып килдем,
Тороп ҡулың бирсе, атай! —

тип ялбарһа ла, эпостың 1968 йылда Мөхтәр Сәғитов тарафынан Бөрйән районы Яңы Мөсәт ауылы Ҡолдәүләтова Өммөхаяттан (1892) яҙып алған варианты буйынса:

«Арҡа тулы ала бейә,
Туғай тулы туры бейә,
Бирнә итеп бирсе, атай, бирсе, атай!»[1]

тигән өҫтәлмә үтенесен әйтһә лә (ҡайһы бер варианттарҙа өҫтәлмә үтенес, киреһенсә, Алпамыша менеп килгән атты ҡалын итеп алыуҙы һорауҙан тора[2]), эпостың мәғлүм варианттарының барыһында ла атай кеше ошо ситуацияла ялбарыу һәм үтенестәрҙе ҡабул итмәй маташа. Ө. Ҡолдәүләтова варианты буйынса, Алпамышаның Барсынһылыу менән тау башындағы сатырында аулаҡлап ҡына байтаҡ ғүмер бергә йәшәүенә, хатта ҡыҙының буйға үтеүенә ҡарамаҫтан, атаһы: «Кит, минең кейәүгә биргән ҡыҙым да юҡ, кейәүем дә юҡ!» — тип кенә ҡуя. Фәнни яҡтан ҡарағанда, *«никах уҡығанға тиклем ҡауышыу»* мотивының эпик ҡомартҡыларҙа, әкиәттәрҙә тотороҡло ҡабатланыуының этнографик нигеҙе бар, әлбиттә.

Әйләр хандың яу менән килеүенә Барсынһылыуҙың Алпамыша менән ҡауышыуы сәбәп ҡылған. Сөнки улар ошо ҡылығы менән юридик әһәмиәткә эйә булған йоланы — бишек туйын атҡарып тороп, Әйләр хан ҡыҙы Барсын менән Бүләр хан улы Атанды киләсәктә ҡауыштырыу тураһындағы ике яҡлы килешеүҙе боҙа. Ә яу ҡорбанһыҙ булмай. Ана бит «Әйләр хандың иҫәпһеҙ күп ғәскәре... Бүләр хандың ғәскәренә ташлана икән. Улай-былай иткеләгәнсе, байтаҡ ғәскәрҙе ҡырып ташлаған, ти». Һуғыш ҡырында Алпамыша күренеү менән, «Әйләр хандың ғәскәре бөтөнләй ҡырылып бөтә яҙҙы, ти». Шул тиклем ҡорбан, асылда, йоланы яҡлау өсөн бирелгән бит. Тимәк, шул йоланың үтәлешенә айырыуса ҙур әһәмиәт бирелгән. Ошо яҡтан ҡарағанда, Әйләрҙең дәғүәһендә һәм хатта агрессияһында ла хаҡлыҡ бар икәне аңлашылыр.

Хәҙер, Барсынһылыуҙың үтенесенә ахырҙа ҡолаҡ һалып Бүләр хандың, тороп, Алпамышаға ҡул биреүенә — шул күҙлектән ҡарап ҡарайыҡ. Шулай итһәк, ҡыҙына игелек ҡылыуы Бүләр ханға ни тиклем ауыр ҙа, ни тиклем ҙур әһәмиәткә эйә булған игелек икәненә төшөнөүе ҡыйын түгел.

Бына шулай бер үк конфликтта ыңғай башланғыс та, киреһе лә сағыла. Шул уны ҡатмарлаштыра ла.

---

[1] БХИ. 3-сө том: Эпос. — 40-сы б.
[2] Шунда уҡ. — 47-се, 55-се б.

Кейәү һайлау маҡсатында, Барсынһылыуҙың билһынашҡа майҙан асыуы уның үҙенең баһадирҙарға хас көс-ҡеүәткә эйә булыуына ғына бәйләнмәгән. Был бәйгенең этнографик нигеҙе лә бар. Хикмәт шунда: әсәлек хөкөмө хакимлыҡ иткән матриархат дәүерендә, беренсенән, йәмғиәттең тәүге ойошмаһын, ғаиләне ойошторғанда, йәр һайлау хоҡуғына ҡатын-ҡыҙ эйә булған. Ана ни өсөн, ғаилә ҡороу ихтыяжы тыуыу менән, йәғни еткән ҡыҙ дәүере тыуғас та, кейәү һайлау бәйгеһе асып ебәргән икән Барсынһылыу. Быныһы *бер булһа, икенсе яҡтан,* тап ошо акцияла кейәүлеккә дәғүә итеүсене матриархатҡа хас никах алды һынауына дусар итеү йолаһы ла сағылыш алған.

Алпамышаны әсир иткән хандың ике ҡыҙының да, үҙ-ара һис бәхәскә инмәйенсә, уны берҙәй тиң яратыуҙарында ла матриархатҡа хас бер нисә ҡатындың бер ир тотоу йолаһы төҫмөрләнә кеүек. Бындай мотив фольклорҙа осраштырғылай («Ете ҡыҙ ташы» риүәйәте, «Ике бурҙың ҡатыны» тигән новеллистик әкиәт шуға миҫал). Алпамыша хан ҡыҙҙарының мөхәббәтен ҡабул иткән сүрәттә, теге икәүҙә уны уртаҡ ир итеү перспективаһы асылыр ине. Әммә егет был йоланы атҡарыуҙан баш тарта. Шуның менән үк үзенең Барсынына тоғролоғон раҫлай.

## 5. Алпамыша батыр менән Одиссей батша, Барсынһылыу менән Пенелопаның оҡшашлығы: «Ир кеше үҙ ҡатынының туйына ҡайта» мотивы

*«Барсынһылыу үҙенә ир булырға теләүселәргә никах алды һынауы үткәрә»* мотивы, эпостың башҡа тулы варианттарындағы һымаҡ уҡ, «Алпамыша» тигән исем менән теркәлгән тексында ла ике тапҡыр ҡабатлана. Беренсеһе баһадир ҡыҙға ир булырға тик Алпамыша ғына хаҡлы икәнен асыҡлау менән тамамланып, төп сюжеттың төйөнләнешен билдәләһә, икенсеһе шул төйөндөң сиселеше менән тап килә. Барсын менән Алпамышаның яңынан ҡауышыуына бәйле ваҡиғалар халыҡ-ара әкиәт күрһәткесендә «*Ире үҙ ҡатыны туйында*» (AT 974, AA 891) тип билдәләнгән сюжет тибы сиктәрендә тасуирлана.

Грекстың Гомер атлы легендар һуҡыр сәсәне ижад иткән имеш, тип йөрөтөлгән «Одиссея» поэмаһында тасуирланған ваҡиғаларҙың береһендә Одиссейҙың, бер кемгә лә танытмай ғына, үҙенең хәләлбикәһе Пенелопа янына (йәнәһе ул уның ирен яҡшы белгән ят кеше), ҡайтыуы бәйән ителә.

Тотҡондан ҡотолған Алпамыша ла, үҙен танытмай ғына, ҡайтып төшә. Әгәр Одиссейҙы Эвриклея исемле ҡол ҡатын ғына таныһа (ул уның элекке бағымсыһы булып сыға һәм уны аяғынан ғына таный), Алпамыша ла үҙенең кем икәнен үҙен хөрмәт менән телгә алған бер хеҙмәтсеһенә генә (йылҡы көтөүсеһенә) аса.

Үҙен ирҙән ҡалған тол һылыубикә тип белеп, йөрәген яулауға дәғүә итеүсе әрһеҙ ир-атҡа Пенелопа шундай шарт ҡуя: кем дә кем Одиссей батшаның үтә лә типкел янын бөгөп, керешен кейҙереп, уғын, ун ике балдаҡ үтә үтерлек итеп, ата ала, ул бары шул кешегә генә кейәүгә сығасаҡ[1]. Барсынһылыу иһә: «Кем дә кем Алпамыштаның алты таяҡ (оҙонлоғо. — Ә. С.) янын (йәйәһен. — Ә. С.) тартып, алтын башаҡлы, көмөш ҡанатлы биш таяҡ уғы менән ағасты үтә сыҡмалы итеп ата ала, шуға барырға ризамын», — тип шарт ҡуя. Ике осраҡта ла ҡатын, үҙ иренең йәйәһенән атыу түгел, уның үҙенән башҡа донъяла берәүҙең дә керешен дә кейҙерә алмаҫын яҡшы белә, әлбиттә.

*Кейәүҙәр бәйгеһе (турниры)*, йәғни кейәү булырға дәғүәләшеүселәргә юрый ғына *«никах алды һынауы»* ойоштороу йәнә шуныһы менән дә әһәмиәтле. Ике ҡатынға ла, Пенелопаға ла, Барсынһылыуға ла, ул, бары ире ҡайтҡансы (ә улар, әйткәнебеҙсә, быға ныҡ инана), ваҡытты һуҙа биреү, маҙаһыҙлап йөрөүсе әрһеҙ ир-аттан, ваҡытлыса булһа ла, ҡотолоп тороу өсөн генә кәрәк.

Билдәле, был турнирҙа тик ваҡытлыса «ят кеше» роленә ингән Одиссей һәм тик Алпамыша ғына еңеп сыға.

Шулай итеп, Пенелопа ла, Барсынһылыу ҙа, асылында, «бер атыуҙа ике ҡуянды йыға». *Берҙән*, әрһеҙ ир-ат бимазалауынан ҡотола, *икенсенән*, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, уйламаҫтан-нитмәҫтән, үҙ ирҙәрен дә һынай: элеккесә һаҡланғанмы-юҡмы, ирлек ғәйрәте ҡайтмағанмы, йәнәһе.

Кейәү булам, тип ныҡышыусыларға турнир иғлан итеүҙәре менән Пенелопа ла, Барсынһылыу ҙа үҙҙәренең хәләлдәренә еткән ир-аттың донъяла юҡлығына инаныуын да, тик уларға ғына тоғролоҡтарын да раҫлайҙар.

«Алпамыша» сюжеты менән «Одиссея»ның оҡшашлыҡтары хаҡында үзбәк фольклорсылары Ғәзи Алим, Һаҙый Зарифов, шулай уҡ В. М. Жирмунский, башҡорт фольклорсыһы Кирәй Мәргән һ. б. әйтеп уҙғайнылар инде. Был тема күптәрҙе әле лә ҡыҙыҡһындыра. Оҡшашлыҡты «Алпамыша» сюжетын грек эпосына туранан-тура генетик яҡтан бәйләп аңлатырға маташыусылар ҙа табыла тора.

«Алпамыша» сюжеты менән «Одиссея» поэмаһының халыҡ-ара әкиәт күрһәткестәрендә *«Ир кеше үҙ ҡатыны туйында»* тип аталып, Аарне-Томпсон системаһы буйынса АТ 974 (Аарне-Андреевтыҡынса — АА 891) тибы тип тамғаланған мотив тәңгәлендәге оҡшашлыҡты күҙ уңында тотоп, әле 1961 йылда сыҡҡан монографияһында уҡ профессор Кирәй Мәргән: «Был оҡшашлыҡ халыҡ эпосын тикшереүсе ҡайһы бер ғалимдарҙы

---

[1] Кун Н. А. Легенды и мифы Древней Греции. — С. 493—502.

(бында ул әлеге Ғази Алим, Һаҙый Зарифов, В. М. Жирмунский ишеләрҙе күҙ уңында тотҡан булыуы ихтимал. — *Ә. С.*) «Одиссея» менән «Алпамыш» («Алпамыша») араһында, ғөмүмән, параллель эҙләүгә килтерҙе, — тип яҙғайны һәм артабан былна быңдай фекер әйткәйне. — Әлбиттә, был бик мауыҡтырғыс нәмә. Ләкин ул юл менән киткәндә, эпик материалды милли культура традицияларынан айырыу кеүек күңелһеҙ күренешкә килеп етергә мөмкин. Әлбиттә, юғарыла әйткәнсә, эпик репертуарҙың формалашыу процесында ниндәйҙер йоғонтолар булырға мөмкин. Ләкин бындай оҡшашлыҡты (шул нигеҙҙә хасил булған уртаҡлыҡты, тип уҡырға кәрәктер моғайын. — *Ә. С.*). халыҡтарҙың тарихында, ижтимағи үҫеш юлында, ниндәй ҙә булһа мөһим моменттар, оҡшашлыҡтар булыу менән аңлатыу ышаныслыраҡ булыр. «Одиссея» тыуған ерҙә лә, «Алпамыша менән Барсынһылыу» барлыҡҡа килгән ерҙә лә айырым тарихи дәүерҙәр эсендә бер үк төрлө ижтимағи мөнәсәбәттәр урын алған булыуы мөмкин түгелме ни?!»[1] Был фекер менән килешмәү ҡыйын.

Кирәй Мәргәндең: «Геройҙың, күп кенә сәйәхәт иткәндән һуң, ҡайтып килеп, ҡатынының туйына эләгеүе һәм был туйҙағы ярышта йыр менән йәки музыка (уйын ҡоралы) менән еңеп, алдын сығыуы һәм шул арҡала танылыуы эпик әҫәрҙәрҙә йыш ҡына осрай торған деталь»[2], — тип әйткәне лә иҫкермәгән әле.

Күренекле эпос белгесебеҙҙең был һүҙҙәрен шул да ҡеүәтләй. Кәләшенең туйына ҡайтып төшкәс, «Ҡашиҡәрип менән Маһимөһөр» тигән новеллистик әкиәттәрҙең геройы гармун уйнап, «Рәссам менән батша ҡыҙы», «Кәримдең башынан үткәндәр» тигәнeнеке үҙенең башынан үткәргәндәрҙе сағылдырып, картина яҙып үҙен таныта. Ҡатыны туйына ҡайтҡан ир тылсымлы әкиәттәрҙә лә бындай танылыу алымын бик оҫта файҙалана. Был мотив көнсығышта киң мәғлүм Шасанем менән Ғәрип, Ғашиҡ Ғәрип тураһындағы дастандарҙа ла, Добрыня Никитыч менән Алеша Попович тураһындағы рус былиналарында ла, «Янович Стоян» тигән серб-юнак йырҙарында ла, башҡаларҙа ла осрай[3]. Уларҙы нисек «Одиссея» күҙлегенән аңлатмаҡ кәрәк. Әгәр был мотивтың тамырын юллап, тәрәнгәрәк төшә башлаһаҡ, уның генезисы — кешенең теге донъянан, үлектәр иленән, ҡайтыуы тураһындағы мифтарҙың ҡара урманына юлығыр инек.

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — 214—215-се б.

[2] Шунда уҡ. — 214-се б.

[3] БХИ: / Текстарҙы һайлаусы, төҙөүсе һәм инеш мәҡ. авт. Ә. М. Сөләймәнов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Ә. М. Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәрр. С. Ә. Галин. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр, 1981. — 4-се кит. — Әкиәттәр. — №№ 51, 54, 55. — 367-се б.

## 6. Ил намыҫы проблемаһының ғаилә-көнкүреш һәм этик юҫыҡта хәл ителешен сағылдырған эпос

«Тарғын менән Ҡужаҡ» эпосы менән таныш кеше, «Кәртә Мәргән» эпосын уҡып сыҡҡас та, уларҙағы бер уртаҡлыҡҡа иғтибар итмәй ҡалмаҫ. Уртаҡлыҡ тигәндә, текстуаль йә йөкмәтке тап килешен түгел, ә ил намыҫына тиңләп баһаланған ҡыҙ намыҫы идеяһы күҙ уңында тотола. Хәйер, сюжет ҡоролошон сағыштырып ҡарағанда ла, был ике әҫәрҙә ниндәйҙер яҡынлыҡ һиҙелә. «Тарғын менән Ҡужаҡ»та Аҡсахандың ҡыҙын нуғай батыры Тарғын алып ҡаса, «Кәртә Мәргән»дә арҙаҡлы һунарсы Кәртә Мәргәндекен — ҡалмыҡ хануланы урлай. Тик, әгәр ғәрлеге килгән Аҡсахан ҡотҡарыусыға ҡыҙын бирәсәген әйтеп, үҙенсә, бәйге иғлан итһә, Кәртә Мәргән, урланған ҡыҙын йәүкәләй-йәүкәләй, эҙләргә үҙе юлға сыға.

Ҡыҙын алып ҡайтырға саҡырып, батырҙар бәйгеһе иғлан итеүе — хандың һәр атайға хас тойғо — бала ғәзиз тигән хис менән генә түгел, ҡыҙ намыҫын ҡотҡарыу — ил намыҫын һаҡлау, тип белеүе менән дә аңлатыла. Әммә тап шулай бәйге иғлан итеүе — ил намыҫын бизмәнгә һалырлыҡ ошо мөһим проблеманы уның үҙе түгел, ә башҡалар ҡулы менән генә хәл итергә теләүе хаҡында ла һөйләй. Ил башы шундай булғас, уның ҡул аҫтындағы батырҙарға ни һан! Йәш батырҙарҙың бөтәһенең дә хан ҡыҙы артынан сабыуҙан баш тартыуы, уларҙың ҡалмыҡ батыры Тарғындан шөрләүе менән генә түгел, ә «тик мин түгел, был хәүефле эшкә башҡалар башын тыҡһын» принцибынан сығып эш итеүенең һөҙөмтәһе ул. Бәс, шулай булғас, ошо ҡылыҡтары менән улар үҙҙәре үк: «Йәмәғәт, биғәйбә, беҙ намыҫ тигән юғары төшөнсәгә ханыбыҙ тиклем дә эйә түгелбеҙ!» — тип әйткәндәй булалар түгелме? Эйе. Һәр хәлдә, кеше яллап, ил намыҫынан бигерәк үҙ намыҫын яҡлатырға самалаған хан һәм, силәгенә күрә — ҡапҡасы, тигәнгә тап килеп торған ана шул булдыҡһыҙ батырҙар фонында ҡарт Ҡужаҡ ғәрлек ҡатыш сәм менән ғорурлыҡтың үҙе булып кәүҙәләнгәндәй була. Ни өсөн тигәндә, уның ҡыҙ артынан сабыуы, түшәк яңыртыу форсаты сыҡҡанда, шуны файҙаланып ҡалыу теләгенән бигерәк, яуҙарҙа һыналған батырҙың шундай булдыҡһыҙҙарға үс итеп, ил намыҫын яҡлауҙы үҙ өҫтөнә алырға, йәғни гражданлыҡ батырлығына ла, һәләтле икәнен күрһәтә.

Аҡса хан кисергән атайлыҡ тойғоһо Кәртә Мәргәнгә лә хас. Шул уҡ ваҡытта, килмешәктең ҡулынан ҡыҙын ҡотҡарыу өсөн, атҡа менеүе уны Ҡужаҡ батыр менән йәнәш ҡуйырға ла форсат бирә. Шулай итеп, Кәртә Мәргән образында Аҡса ханға ла, Ҡужаҡ батырға ла хас һыҙаттар кәүҙәләнә. Әммә шуныһы, берҙән, ул үҙ балаһының яҙмышын хәл итеү мәсьәләһен башҡалар ихтыярына тапшырыуҙы өнәмәй, икенсенән, бер генә килмешәк батыр менән мәргәнлектә көс һынашҡан Ҡужаҡтан

айырмалы рәүештә, япа-яңғыҙ көйөнсә, бүре өйөрөнә ингән кеүек, ырыуының хас дошманы булғандарҙың өңөнә үк инеп алыша. Уның менән сәм, намыҫланыу тойғоһонан тыш, ҡәһәтләнеү тойғоһо — ант итеү бурысы ла идара итә:

— Мин китәрмен, китәрмен,
Етер ергә етәрмен;
Ярһып оран һалырмын,
Туғаҙаҡхануланын
Турап йәнен алырмын! —

тип ҡәһәтләнә Кәртә Мәргән урланған ҡыҙы артынан юлға сығыр алдынан.

Кәртә Мәргәндең ҡалмыҡтар менән алышы эпоста тасуирланмай. Әммә ләкин ҡалмыҡ хануланы Кәртә Мәргәндең ҡыҙын урларға ниәтләнгәндә, хан һарайын кәнизәктәр менән тәьмин итеп тороусының әйткәне, художестволыҡ яғынан ҡарағанда, былдай мәғлүмәттең бирелеүен, тавтология кеүек, артыҡ ҡабатлау хәленә ҡуйыр ине. Ул иһә хануланға: «Барма, мырҙа, йөрөмә!» — ти ҙә тыйыуының сәбәбен аңлата: уны ауыр һынауҙар көтә, һәләк булыуы ла ихтимал, сөнки шуға уның иманы камил — әгәр ҙә мәгәр Кәртә Мәргән килеп баҫһа, бер кемде лә, бер ниҙе лә имен ҡалдырмаясаҡ.

Кәртә Мәргәндең тотош ҡалмыҡ илен пыран-заран килтереү ихтималы хаҡында иҫкәртеүҙә эпосҡа хас йәнә бер хәҡиҡәт йәшеренгән: эпик традицияға тоғро ҡалып, «Кәртә Мәргән» әҫәрендә лә бер батыр йөҙөндә тотош ырыу кәүҙәләнә булыр.

Ошо әйтелгәндәр ҙә Кәртә Мәргәндең үҙ ҡәһәтен еренә еткереүенә шик тыуҙырмай.

## 7. Эпоста мөхәббәт һәм тоғролоҡ темаһының асылышы

«Алпамыша» эпосының сюжеты үҙенең сиселеше менән экиәттәргә хас «бәхетле финал»ды хәтерләтә. Сиселештең шулай тамамланыуы иң әүәл мөхәббәт проблемаһының әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың, тимәк, төп конфликттың иң мөһим сәбәпсеһе булыуынан һәм ыңғай хәл ителешенән килә. Ә был проблема эпоста өс юҫыҡта ҡарала.

Әлбиттә, эпоста мөхәббәт темаһын асыуҙа Алпамыша менән Барсынһылыуҙың үҙ-ара мөнәсәбәте иң мөһим ролде уйнай. Баһадир ҡыҙ, тәү күреүҙән үк, үҙенә тиң егеткә ғашиҡ була. Юҡһа уға ҡошон осорор инеме лә, өҫтөнә таш тәгәрәтер инеме?! Ҡыҙ бит быны әле танышып та өлгөрмәгән, әммә бер күреүҙә үк ғашиҡ иткән егеттең иғтибарын үҙенә йәлеп итер өсөн эшләй. Ата-әсәһенән фатиха алыр-алмаҫтан, аулаҡлап, уның менән ирле-ҡатынлы булып йәшәй башлауы ла, ата-әсәһе

менән ағаһына килеп, уларҙың Алпамышаға ҡул биреүҙәрен ялбарыуы ла ана шуны ҡеүәтләй.

Сюжеттың бәхетле сиселешен тиҙләтеүҙә «хан ҡыҙҙары әсирлектәге батырға ғашиҡ була» мотивының роле ҙур. Дөрөҫ, Алпамышаны әсирлеккә алған Әйләр хандың ҡыҙҙары тәүҙә уның ҡурайының моңона ғашиҡ була. Әсир егетте үҙ итеүҙәре, уның үҙенә ғашиҡ булыуҙары эпостың әле һүҙ барған вариантында асыҡ ҡына итеп әйтелмәй. Быға беҙ сит-ситләтеп кенә төшөнәбеҙ. Хан ҡыҙҙары ҡайта-ҡайта килеп:

Алпамыша, баҡһана,
Ҡурайыңды тартһана,
Моңландырып өрһәнә,
Ҡыҙҙар күңелен күрһәнә! —

тип, ҡурай уйнаттырыуҙары, Буҙатын таш келәттән сығарып булышыуҙары, ер аҫтынан юл һалып, уның менән осрашып йөрөүҙәре, ни һораһа, шуны атҡарып, ашатып, эсереп, әҙәм рәүешенә килтереп, толпарын да, үҙен дә тотҡонлоҡтан ҡотҡарыуҙары — уларҙың Алпамышаға мөхәббәтенең — һүҙҙә түгел, ғәмәлдә икәненә дәлил ул. Әсир егеткә булышыуҙарын аталары һиҙеп ҡалһа, аяу булмаясағын белә тора, уға изгелек итеүҙән туҡтамауҙары ла, уны үҙҙәренә алып ҡалырға теләүҙәре лә шуның менән аңлатыла.

Өйҙә ятҡан кәләше булыуын, уға тоғролоғон аңлатҡас та, ҡыҙҙарҙың Алпамышаға булышыуҙан туҡтамауы, Алпамыша менән Барсынһылыуҙың мөхәббәте хаҡына үҙ мөхәббәтен ҡорбан итеүе иһә улар йөҙөндә ысын мөхәббәттең башҡалар мөхәббәтенә хөрмәт тойғоһона әүерелергә лә көс таба алыуына мәдхиә кеүек аңлашыла.

Алпамышаның бына шундай мөхәббәттән баш тартыуы, бер яҡтан, уны таш йөрәкле әҙәм тип баһаларға ла урын ҡалдыра. Икенсе яҡтан ҡарағанда иһә, тап шулай шул ихлас ҡыҙҙарҙың керһеҙ мөхәббәтен ҡабул итмәүенән беҙ уның Барсынһылыуҙы ни тиклем нык яратыуын аңлайбыҙ.

Әҙәбиәттә мөхәббәт проблемаһы, ғәҙәттә, ике юҫыҡта ғына, йә никахҡа тиклемге дәүерҙә — егет менән ҡыҙ (һәм улар араһына килеп ҡыҫылған өсөнсө кеше) араһындағы мөнәсәбәттәр юҫығында, йә яратмаған (аралары һыуынышҡан ҡатыны (ире) өҫтөнән икенсе берәү менән сыуалыуын идеаллаштырыу рәүешендә хәл ителә. Ә бына ғаилә ҡорған ир менән ҡатындың саф мөхәббәте темаһын асыуға әҙәбиәттә иғтибар етешеп бөтмәй. Был бушлыҡты тултырыу бурысы, нигеҙҙә, фольклор өлөшөнә төшә. Бер-береһенә мөхәббәт сафлығын һаҡлаған ир һәм ҡатын хаҡындағы новеллистик әкиәттәр, мәҫәлән, тотош бер циклды тәшкил итә. «Ҡашиҡәрип менән Маһимөһөр», «Рәссам менән батша ҡыҙы», «Кәримдең башынан үткәндәр», «Ғафи улы менән Сафи улы», «Ҡырҡтартмасы», «Хәйерсе ҡыҙы», «Батша

булған батша ҡыҙы менән батша малайы» иҙше әкиәттәр ана шундайҙарҙан[1].

«Алпамыша» сюжетына ҡоролған эпос та мөхәббәт темаһын өсөнсө юҫыҡта, йәғни никахлы ир менән ҡатын юҫығында, хәл итеү йәһәтенән ошондай халыҡ новеллаларына яҡын. Шул әкиәттәрҙәге һымаҡ уҡ, бында ла һүҙ үҙенә ғашиҡ булған ҡыҙҙарҙы йөрәгенә яҡын ебәрмәүе һәм, зиндандан ҡотолғас та, Барсынына атлығыуы менән — Алпамыша ла, әрһеҙ ир-атты үҙенә яҡынайтмауы менән уның һөйөклө ҡатыны ла ғаилә ҡорған ирле-ҡатынлы араһындағы оло мөхәббәткә дан йыры кеүек ҡабул ителә.

Донъяуи шарттарҙа барған ваҡиғалар уртаһында ҡайнаған ирле-ҡатынлы башҡа эпик геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәте лә ошо юҫыҡта асыла. Мәҫәлән, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында Иҙеүкәйҙең мөхәббәт проблемаһына шул оло бурыс күҙлегенән ҡарауын аңлауы ҡыйын түгел. Ҡол ҡыҙ Ғәнәкә менән мөхәббәтенең нисек сәскә атыуына эпоста артыҡ иғтибар тупланмауы, бары ошо мөхәббәттең емеше булып Мораҙымдың донъяға килеүенә баҫым яһау ҙа шунан килә. Инде үҙен ғәҙеллекте яҡлаусы, Туҡтамыш ханда хеҙмәттә торһа ла, уның мәнфәғәте менән үҙенең маҡсаттары тап килмәүен күрһәтергә өлгөргән,

Артынан килеп ҡараһаң,
Ике яурын араһы
Батыр йоҡлар саялай;
Алдынан килеп ҡараһаң,
Ҡарсыға ҡабаҡ, талғыр күҙ,
Йөрәгеңә ингәндәй,

исеме «Урал, Урал» тигән һүҙҙән айырылғыһыҙ («Иҙеүкәй, Иҙеүкәй» тигән һүҙ — «Урал, Урал» тигән һүҙ) батырлығы — һынына, йөҙөнә сыҡҡан, ҡырҡыулығы күҙенән билдәле, Иҙеүкәй башлаған эште яңы быуын батырҙары дауам итәсәген аңлата Мораҙымдың донъяға килеүе. Иҙеүкәй өсөн мөхәббәттең бәҫе лә, мәғәнәһе лә бына шунда. Шуға күрә лә хан ҡыҙы Энйенең үҙенә ылығыуына иҫе лә китмәй. Ә инде Сытмыр хандың ҡыҙын әсирлектән ҡотҡарыуы шул арҡала хан кейәүе булып китеүе — традиция һөҙөмтәһе генә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының телдән яҙып алынған варианттарында ханбикәнең Иҙеүкәйгә ғашиҡ булыуы, егеттең уны инҡар итеүе, йәғни «Йософ менән Зөләйха» дастанындағы бер ситуацияға оҡшаш (атап әйткәндә, батша ҡатыны Зөләйханың Йософҡа тәҡәтһеҙ ғашиҡ булыуы уның менән ҡауышырға маташыуын, егеттең иһә баш тартыуын хәтерләткән) хәл ҡабатланыуы, Иҙеүкәйҙең Сатмыр хандың ҡыҙынан тыш, Туҡтамыштың

---

[1] БХИ: Әкиәттәр. 4-се кит. — №№ 51, 54, 55, 61, 62, 64, 65.

ике ҡыҙын да кәләш итеп тота биреүе кеүек эпизодтарҙың йыйылма текста булмауын иһә традиция менән иҫәпләшмәү, тип кенә баһаларға мөмкин. Бындай «төҙәтмә» төҙөүселәрҙең Иҙеүкәй батырҙы ахырғаса мөхәббәт проблемаһына ил алдындағы оло бурыс күҙлегенән ҡараусы, шауҡымға бирелмәүсе, нәфсеһенә баш булыуға һәләтле ир-егет итеп күрһәтергә, уны әхлаҡи тарҡалыштан ҡурсаларға теләүҙән килә, әлбиттә.

Һабрау сәсән өйрәткәнсә, Аҡбуҙат менән Урал батырҙан ҡалған ҡылысты алыу ниәтенән, Һыуһылыуға эйәреп, һыу аҫты батшалығына юлыҡҡан сағында Иҙеүкәй үҙенә был ҡыҙҙың ғашиҡ булыуын белә. Ошо уҡ эпоста ла, шулай уҡ үҙ аллы эпос хасил итеүсе «Илекәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» тигән әҫәрҙәрҙә лә телгә алынған Туҡ батырға әсә булған ҡаҙаҡ ҡыҙы башҡорт егетен яратҡан кеүек үк, һыу ҡыҙы үҙе өсөн ят ҡәүемдән булған Ер улын ярата. Мөхәббәте хаҡына ҡаҙаҡ ҡыҙы ырыуҙаштарының нәфрәтен яулаған кеүек, Һыуһылыу ҙа атаһына биргән антын боҙа.

«Эс бауырым һыҙлатып,
Иҙеүкәй ҙә, Иҙеүкәй, тинем мин;
Көндәй, йөҙөм һулытып,
Күрмәй ҙә, үҙен һөйҙөм мин;
Ергә эйелгән гөлдәрҙәй,
Һиңә буйым бирҙем мин;
Алмалай түшем тертәйтеп,
Үҫеп, ҡаршы алдым мин;
Йәш үләндәй намыҫым
Юлыңа түшәп ҡуйҙым мин;
Атама биргән антымды
Һинең өсөн юйҙым мин...» —

ти Һыуһылыу, Иҙеүкәй өсөн барыһына ла барырға әҙер икәнен белдереп.

Әгәр «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» эпосында ҡаҙаҡ ҡыҙы үҙе һөйгән егете өҫтөнә төшкән бурысты уртаҡлашһа, был эпоста мөхәббәт темаһы проблеманың шулай ҡуйылышына урын ҡалдырмай. Сөнки, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының ҡаһарманы кеүек үк, Ер улы булараҡ, Иҙеүкәй һыу төбөндә ҡала алмай. Эш унда ғына ла түгел. Ул үҙенең ижтимағи тәғәйенләнешен төптән аңлаған шәхес булып сығыш яһай.

«Әсәләй күргән иленә
Дошман ҡулын һалғанда,
Тыуып үҫкән иленә
Дошман килеп баҫҡанда,
Бишектәге бала ла:
«Ат менәм!» —

тип ятҡанда.

Илең ирке дошман ҡулында сағында, илдә һәр кем яуға ынтылып торғанда, батырмын тигән ир кеше ҡыҙ ҡуйынында ҡала алмай. Бына шуны аңғарта Иҙеүкәй. Сөнки ул «Туй көнөнәк яу көнө күплеген белеп үҫкән». Иҙеүкәйҙең шаштырыу алымы менән әйтелгән һүҙҙәренә бына ниндәй мәғәнә һалынған.

Һыуһылыуҙың мөхәббәтенә Иҙеүкәй үҙен «Яу сабырҙай батырҙың барын йыуаш ҡуй иткән» Туҡтамыштың «тәхетен тар-мар» ҡылғас ҡына, хаҡлы тип иҫәпләй. Шуға ла унын «Урал бабам алмасын Ҡулыма мин алайым» тигәне, әгәр Урал батыр космик кимәлдә донъяны үҙгәртеп ҡороп, кешеләр байман табып, тәбиғәт менән һыйышып, һыйынышып йәшәргә шарттар тыуҙырһа, үҙенең өҫтөнә ошо Ер өҫтөндә социаль ғәҙеллек урынлаштырыу тигән оло бурысты алырға тейеш икәкен таныуын аңлата булыр.

Иҙеүкәй образы «Аҡбуҙат» эпосының геройы Һәүбән образына ныҡыраҡ тартҡан. Бер ни тиклем «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының һыу аҫты батшалығына юлыҡҡан ҡаһарманын хәтерләтә биреп ҡуйһа ла, Урал батырҙан ҡалған Аҡбуҙат менән Алмас ҡылысҡа эйә булыуы ла шуға булышҡан. Иң мөһиме шул: «Аҡбуҙат» эпосында мөхәббәт һәм ирегеттең иле алдындағы бурысы айырылғыһыҙ төшөнсәләр икәненә ишара яһалһа, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында был идея тағы ла тәрәнәйә төшкән.

## 8. Сәсән ирҙең өнөнән ҡыл ярырҙай һүҙ сығыр

1944, 1945 йылдарҙа Татарстан менән Башҡортостан партия ойошмаларында идеологик, киң сәйәси һәм агитация эшенең торошо хаҡындағы ҡарарында ВКП(б) Үҙәк комитеты «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосын, феодаль ханлыҡтарҙы данлаусы әҫәр, тип һәм унын сюжетына Татарстанда — яҡташыбыҙ Нәҡи Иҫәнбәт, Башҡортостанда халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловтар яҙған пьесаларҙы ла ҡәтғи тыйҙы, ә уларҙың авторҙарын эҙәрләнеүҙәргә дусар итте.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосын тыйыу үҙ көсөндә саҡта уҡ башҡорт фольклорсыһы Н. Т. Зарипов уны донъяға сығарыу, тикшереү мөмкинлеге хаҡында уйлана башлаған ине инде. Унын Мөхәмәтша сәсән Буранголов тарафынан теркәлгән варианттарының береһен тәүҙә 1989 йылда «Ағиҙел» журналының 3-сө һанында, торараҡ айырым китап рәүешендә лә «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының яңы баҫмаһында ла[1]

---

[1] Иҙеүкәй менән Мораҙым: Тарихи ҡобайыр / Төҙ., инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлек авт. Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. З. F. Урақсин. — Өфө: Китап, 1994; БХИ / Төҙ., инеш мәк., аңлатмалар, һүҙлек авт. Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. З. F. Урақсин. — Өфө: Китап, 2000. — 5-се том: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр.

баҫтырып сығарҙы. Шул баҫмаларҙың инеш мәҡәләләрендә һәм аңлатмаларында был әҫәрҙе яҙып алыу, баҫтырыу тарихы ярайһы ғына тулы яҡтыртылғайны.

Иң әүәл шуны билдәләргә кәрәк. Н. Т. Зарипов «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының өс башҡорт версияһы булыуын асыҡланы. Уның иҫәпләүе буйынса, өс версия бергә йәмғеһе сюжет тулылығы төрлө-төрлө 15 варианттан тора. Үҙенең инеш мәҡәләләрендә төҙөүсе-автор эпостың милли версияларының төп айырмалыҡтары уларҙа мифологик башланғыстарҙың юҡ дәрәжәлә булыуында, социаль проблемаларҙың (бигерәк тә М. Буранғолов варианттарында) көсәйтелеүендә, Иҙеүкәйҙең Алтын Урҙаға ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан башҡорт ҡәбиләләре юлбашсыһы итеп күрһәтелеүендә, төп герой образын тыуҙырғанда, гиперболалаштырыуға ынтылыш булыуында, тип белә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының башҡа ҡәрҙәштәребеҙгә мәғлүм версияларындағы кеүек үк, башҡорт версияларында ла Һабрау сәсән образына мөһим урын бирелгән. Мөһимлеге шуның менән аңлатыла: ҡарамаҡҡа, ваҡиғаның үҙендә ул үҙе тәғәйен генә ҡатнашмай. Шулай ҙа уның булмышына, ағышына һәм сиселешенә, тимәк, яҙмыштарҙың хәл ителешенә, эпостың башҡа персонаждарының береһенә лә, хатта төп геройҙары Иҙеүкәй менән Мораҙымға, уларҙың антиподы Туҡтамыш ханға сағыштырғыһыҙ, ҙур роль уйнай. Йәшәрен йәшәгән 175-тең өҫтөндә (әйткәндәй, төрлө версия һәм варианттарҙа уның йәше төрләнә) барған Һабрау ваҡиғаларҙың иң киҫкен мәлендә генә алғы планға сығарыла һәм уларҙы кешеләр яҙмышында киҫкен боролош яһарға мәжбүр итеүсе рәүешендә күрһәтелә. Бының өсөн уға, Иҙеүкәй йә Мораҙымдан айырмалы рәүештә, ҡылыс болғауҙың да, уҡ-һаҙаҡ менән мәргән эш итеүҙең дә, Туҡтамыш хан һымаҡ, ырыу батырҙарынан төҙөлгән сиреү тотоуҙың да кәрәге юҡ. Уның төп ҡоралы — һүҙ, һүҙҙең дә соҫо, мәргәне, сәпкә тура тейә торғаны.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының төп геройы ғына түгел, башҡа персонаждары ла Урал батырҙың «кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ», «Олоно — оло, тиегеҙ, кәңәш алып йөрөгөҙ» тигәнен еренә еткереп үтәгәндәй итә. Эпоста кәңәшсе бурысы, әлбиттә, иң тәү нәүбәттә, йәше 175-те уҙған Һабрау сәсән өлөшөнә төшә. Бынан тыш, бабалар серен һаҡлаусы исемһеҙ ҡартҡа ла (йыйылма текста иһә уларҙан тыш төп юраусы ҡартҡа ла) йөкмәтелә. (Шуныһын да әйтергә кәрәк: эпостың беҙгә мәғлүм варианттарының ҡайһы берҙәрендә Һабрау сәсән дә, бүтән берәй кәңәшсе лә, ғөмүмән, телгә алынмай.)

Күп кенә хеҙмәттәрҙә Һабрауҙың Иҙеүкәйгә аҡыл өйрәтеүсе булыуына ғына баҫым яһала. Ысынлап та, бындай хәл булғылай. Тик баштараҡ ҡына, Иҙеүкәй Туҡтамыш ханға килгәнсе генә. Ә бына Туҡтамышта хеҙмәттә торғанда Иҙеүкәйҙе әҙәрләү

башланып, хатта уны юҡ итергә йәшерен ниәт төйнәлә башлағас, ни сәбәптәндер, сәсәндең уға мөнәсәбәте кире яҡҡа үҙгәрә лә ҡуя. Был саҡта ул да хан һарайы тирәһендә ураланып, хан табағынан ашап йөрөгән булырға тейеш. Юҡһа, Иҙеүкәй ҡасып киткәс тә, хан уға мөрәжәғәт итә алмаҫ ине. Башта Иҙеүкәйгә аҡыллы кәңәштәр биреүсәнлеге менән беҙҙә симпатия яулаған Һабрау сәсән ошондай хәл иткес мәлдә ни өсөн уға ярҙамға килмәй, киреһенсә, шул батырҙы нисегерәк ҡулға эләктерергә Туҡтамыш ханға кәңәш бирә. Әммә ғилми хеҙмәттәрҙә данлы сәсәндең ошо ҡылығы ни өсөндөр иҫәпкә алынманы. Бәлки Һабрау ул кәңәшен, ҡарамаҡҡа ғына, хан яҡлы булып ҡыланыу өсөн, ә асылда, Иҙеүкәй файҙаһына биргәндер? Юҡ шул. Ҡарт сәсән, нисегерәк итһәң, Иҙеүкәйҙең башына тиҙерәк етергә икәнен дә өйрәтә. Эпостың И. В. Салтыков архивындағы вариантында хан кәңәшсеһе ролен атҡарған сәсән Иҙеүкәйҙе күҙ уңында тотоп:

Ул бик йыраҡ китмәгән,
Ағиҙелгә етмәгән...
Туғыҙ батыр ат менһен,
Артынан тура елһен.
Хәйлә менән юхалап,
(Юҡһа, һинең эш харап),
Бер әмәлен табығыҙ,
Башын ҡырҡып алығыҙ! —

тип, аҡыл өйрәтә. Дөрөҫ, кәңәшсе сәсән бында, Һабрау тип түгел, ә Манғот тип исемләнгән. Әммә хикмәт — исемдә түгел, есемдә. Сөнки ул башҡа варианттарҙа Һабрау ауыҙынан әйттерелгән кәңәште бирә. Н. Иҫәнбәттең йыйылма тексында уның кәңәше былай теркәлгән:

Туғыҙ иреңде ебәр ҙә,
Алдап-йолдап, ҡаршыңа ал!

«Алдап-йолдап» хан Иҙеүкәйҙе ҡаршыһына алдыртһа, ахыры аңлашыла инде: килтереп, ҡаршыһына баҫтырыуҙары ғына бурыс — шунда уҡ Иҙеүкәй үлем язаһына тарттырыласаҡ. Сөнки, Һабрауҙың «аҡыллы кәңәш»ен ишетеү менән, был турала бер һүҙ ҡатмаһа ла, киреһенсә, батыр артынан ебәргән үҙенең ярандарына:

«Әй туғыҙ ир, туғыҙ ир,
Миңә мөдәт* бирегеҙ,
Һеҙ туғыҙ ир Иҙеүкәйҙе
Ҡашыма алып килегеҙ, —

тип, хан Һабрау әйткәнде генә ҡабатлай. Әммә сәсән менән осрашҡансы Мөйтән бей улы Бабсаҡҡа: «Дошманға (Иҙеүкәйгә

Ә. С.) ҡаршы бар... Барып, йәнен ал..,» — тип әйтеүе; Иркарабайға: «Булат ҡылыс ҡулға ал!» — тип өндәшеүе; Шәғәле улы Шаҡманға: «Дошмандарға бар.., Йөрәктәрен яр!» — тип әмер биреүе лә ике төрлө уйларға урын ҡалдырмай.

Эпостың тулы йыйылма тексын төҙөүселәр иһә, Һабрау сәсәнде былдай «ҡырын эштән» «ҡотҡарырға тырышҡандар». Бында ул Туҡтамыш хандың: «Тел аҫтына тел ҡуймай, Кәңәшенде әйт әле!» — тип үтенеүенә яуап итеп бары үҙенең күпте күргән кеше икәнен, Иҙеүкәйҙең асылы кем булыуын төшөндөрөп, уның яңынан килеп, ханлыҡтың аҫтын-өҫкә килтерәсәген күрәҙәләү менән генә сикләнә.

М. Буранғолов вариантындағы һымаҡ уҡ, был йыйылма текстың баштан уҡ аныҡ билдәләнгән социаль яңғырашлы булыуы ла иғтибарҙы тарта. Әммә, М. Буранғолов вариантынан айырмалы рәүештә, эпостың тулы йыйылма вариантында тик социаль йөкмәткелелек аныҡ позициялы, тенденциоз булыуы менән айырыла. Иҙеүкәйҙең Туҡтамыш ханды дошман күреүен башта хуплаусы тип үҙен танытып өлгөргән Һабрауҙың ил аҡылы тигән яҡты йөҙөн һаҡлау маҡсатынан ханға унан «кәңәш бирҙертмәүҙә» лә сағыла был тенденциозлыҡ. Иҙеүкәйҙе нисегерәк тоторға Һабрау кәңәш бирмәгәс, эпостың был вариантында баштараҡ Туҡтамыш хандың Ҡыпсаҡ бейгә барып, уның (Иҙеүкәйҙең) йәнен алырға; Сәләхигә: «Дошманымды тотсале, тотоп, билен бәксәле!» — тип ялбарыулы әмер биреүе лә ғәмәлгә ашмаҫ теләк булып тойолғандай була. Әммә Туҡтамыштың ханлығын Иҙеүкәй туҙҙырасаҡ икәнен күрәҙәләп, Һабрау сәсән:

«Һин ҡорған был һарайҙың
Барын утын ҡылыр ул,
Табаныңды телер ул,
Туралған ҡыл һалыр ул.
Мең бейле Аҡ урҙаға
Килеп ҡанат йәйер ул,
Өйөр-өйөр эркелеп,
Илдән йыйған малыңды —
Барын ҡыуып китер ул», —

тип һүҙен тамамлауы була — Туҡтамыштың хәйлә менән (йәғни, Иҙеүкәй ни теләһә, хан шуны бирер, хатта ханлығынан да өлөш сығарырға әҙер, тип) Иҙеүкәйҙе алып ҡайтыусыға ла ҡыҙын вәғәҙәләп, ете батырын уның артынан оҙатыуға сәбәп итеп күрһәтелә эҫәрҙә. Ханға кәңәш биреүсе Һабраумы ул, Сыпра тип исемләнәме, Манғыт типме, уның һүҙенең һөҙөмтәһе бына шулай Иҙеүкәйҙе эҙәрләргә әйҙәүгә ҡайтып ҡала.

Мәғлүм булыуынса, Иҙеүкәйҙе эҙәрләү ханбикәнең ғүмерҙә лә күрмәгән төшөн, күрҙем, тип ялғанлауынан башлана. Тулы йыйылма текст буйынса, йәнәһе, ул ҡыҙы Энйекәйҙең муйы-

нына быуар йылан уралғанын, ә Туҡтамыш хандың башын яланғас итеп, тәхетен кемдер үртәргә йөрөгәнен күрә була, йәнәһе. Нәҡи Иҫәнбәттең йыйылма тексы буйынса иһә, хандың киң маңлайы йыйырылып, туҫтаҡтай күҙенең йомолғанын, һөйәкһеҙ ҡыу башын күрә була. Ике осраҡта ла үҙ «төшөн» ханбикә үҙе «юрай»: йәнәһе лә баш бей булған Иҙеүкәй тәхеткә үрелә. Шуныһы ҡыҙыҡ, тулы йыйылма текста ханбикәнең ялған төшө өс тапҡыр өс кеше тарафынан юрала: тәүҙә үҙе «юрай», шунан — махсус төш юраусы, ахырҙа — Һабрау сәсән.

Яһалма вә ялған төштө шулай өс тапҡыр юратыу нимәгә хәжәт булғандыр, аңлашылмай. Иң ғәжәпләндергәне шул: ханбикәнең күрмәгән төштө, күрҙем, тип алдап, алдан әҙерләгән «юрауы» ил аҡылын башына туплаған, күрәҙәсе булып та танылған Һабрау сәсәндекенә тап килә. Бына шул хәл сәсәнде лә алдаҡсылыҡта ғәйепләргә ерлек биргәндәй була.

Һабрау образы — бер ни тиклем «Урал батыр» эпосындағы меңйәшәр бабайҙы ла, «Буҙйегет» дастанындағы нәсихәтсе сәсән ролен атҡарыусы исемһеҙ ҡартты (ҡарый мулланы) ла хәтерләтә биреп ҡуя. Йәншишмәне ауыҙ итеү арҡаһында, үлә алмай ҡаңғырған ҡарт:

«Бик күп быуын күрҙем мин,  
Бик күп ерҙә булдым мин,  
Һис нәмәне тоймаған,  
Бер нәмәнән ҡурҡмаған,  
Бала атаһын белмәгән,  
Ата, балам, тимәгән  
Осорҙо ла күрҙем мин», —

тип башлап, башынан ниҙәр кисергән, шуларҙың барыһын да теҙеп сыҡһа, «Буҙйегет»тәге сәсән телле ҡарт:

«Күпте күргән ҡартмын,  
Бер аҙ йырҙы йырлаймын», —

тип, был донъянан уҙған пәйғәмбәрҙәрҙе һанап сыға.

Шулай итеп, эпосты ижад итеүселәр, Һабрау сәсән образын тыуҙырғанда, фольклорҙан мәғлүм сәсән образдарын файҙаланып, уны аҡыл эйәһе, күрәҙәсе, ойоштороусы итеп төрлө яҡлап күрһәтергә тырышҡандар. Ә инде Иҙеүкәйгә мөнәсәбәтенең ҡапыл үҙгәреүе, Туҡтамыш хан мәнфәғәтен яҡлауы уның, яман-мы-яҡшымы, ил тарҡалмаһын тип, уның бөтөнлөгөн ҡайғыртыуынан килә торғандыр, бәлки...

## 9. Иҙеүкәйҙең прототибы кем?

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» («Идегәй», «Иҙиге бей», «Едиге») эпосының тарихи ерлеге һәм төп геройы, башҡа персонаж-

дарҙың прототиптары хаҡында ғилми әҙәбиәттә күҙәтеүҙәр әҙ булмаһы.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының төп геройының прототибы тарихи Идиге (Идике, Идику, Идигу, Едигей) икәнен әйтеп, Н. Т. Зарипов уның Сыңғыҙхан ғәскәре менән Монголиянан килгән манғыт (йәки мангут) ырыуынан булып, тарихи аренала «Туҡтамыш хан менән бер үк ваҡытта тип әйтерлек күренә» башлауын, башта шул хакимда хеҙмәттә тора биргәндән һуң, 1380 йылда Аҡһаҡ Тимергә барып ҡушылып, 1391 йылда уның менән бергәләшеп, Туҡтамышҡа яу сабыуын әйтеп үткәйне инде[1]. Ҡараҡалпаҡстан академигы С. Камаловса, Едиге ҡараҡалпаҡтың манғыт ырыуынан сыға була. «1391 йылда Әмир Тимур менән бергә Алтын Урҙа ханлығына (Туҡтамышҡа) атланыш яһап, уны еңеп, Туҡтамыштың урынына Едигиҙы хан итеп ултырта»[2]. Уның дәүләтендә ҡараҡалпаҡтан тыш ноғайҙар ҙа йәшәгән.

Тарихи сығанаҡтарҙан Едигинең бик хәйләкәр һәм мәкер уйлы полководец булыуы мәғлүм[3].

Ғөмүмән, башҡорт фольклорына Иҙеүкәй исеме менән ерегеп ҡалған Идегей (Едиге) һәм уның тарихи эшмәкәрлеге хаҡында күп яҙылған. Берәүҙәр уны күккә сөйөп ҙурлай, икенселәре, Алтын Урҙаны емереүсе, тип хурлай. Эпос хаҡында һүҙ сыҡҡанда, ошо тарихи шәхес менән әҫәрҙәге Иҙеүкәй образын бутаусылар ҙа, образ хаҡында һүҙ барғанда, прототибына нығыраҡ иғтибар итеү хәлдәре лә осрап тора. Шуға күрә лә татарҙың күренекле фольклорсыһы Фәтих Урмансының: «Эпик Идегей (беҙҙеңсә, Иҙеүкәй. — Ә. С.) образын аңлау өсөн, тарихи Иҙеүкәй ҡылған эштәрҙең барыһын да белеү һәм иҫәпкә алыу кәрәк, тип иҫәпләргә ярамай. Иң әүәл, художестволы әҫәр булараҡ, дастан ысынбарлыҡтағы тарихи ваҡиғаларҙың теүәл сағылдырылыуына дәғүә итә алмай»[4], — тигәне менән килешмәү яҙыҡ булыр ине.

Иҙеүкәйҙең донъяға килеүенең мөғжизәүи күренеш кеүек итеп тасуирланыуы — боронғо эпик традицияға формаль яҡтан эйәреү йә шул традицияға хөрмәт йөҙөнән генә ҡулланылған алым түгел. Әҫәрҙең булмышына, төп геройының тыуымышына мөнәсәбәтле мөғжизәлелек башлангыстарының ҡулланылы-

---

[1] Зарипов Н. Т. Милли азатлыҡ, үҙ аллы дәүләтселек хыялдарын сағылдырған ҡобайыр // Иҙеүкәй менән Мораҙым. — 18-се б.

[2] Камалов С. «Едиге» дастаны һәм тарих // Едиге: Конференция тезислери. — 5—6 сентябрь 2001-ж. Нөкис каласы. — Нөкис, 2001-ж. — 3-че б.

[3] Сафаргалеев М. Г. Распад Золотой Орды // На стыке континентов и цивилизаций: Из опыта образования и распада империй X—XVI вв. — М.: Инсан, 1996. — С. 398—427.

[4] Урманче Ф. Народный эпос «Идигей». — Казань: Фэн, 1999. — С. 142.

шы — уның мөһим ғәмәли эштәр атҡарырлыҡ, шул бурыстың мөһимлек күләме һәм кимәленә бәрәбәр баһадир булып етешерен көнәлгәре күрәҙәләү (прогнозлау) сараһы ғына.

Беҙгә эпостың И. В. Салтыков яҙмаларынан мәғлүм булған версияһының С. Мирас тарафынан яҙып алыныуы билдәле. Ул Ғәзиз бабаның Төкләҫ баба тигән улы кәләш иткән һыу батшаһы ҡыҙы, айырылышҡанда, унан тыуасаҡ улын үҙҙәре тәүҙә осрашҡан ерҙә ҡалдырасағын әйтеүе, шул балаға Иҙеүкә тип исем биреләүе бәйән ителгән прологтан башлана.

Нәҡи Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма текст буйынса, Баба Төкләҫ улы Иҙеүкәй үҙе түгел, ә уның үҙ улы Мораҙым һыу ҡыҙынан донъяға килә. Шул арҡала «мөғжизәүи юл менән донъяға килеү» мотивы үҙенә тәғәйен пролог статусын юғалтҡан.

Әйтелгәндән шул яҡшы аңлашыла. Н. Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма текст Иҙеүкәйҙе, Баба Ғәзиздән тыуған Баба Төкләҫтең улы, тип күрһәтеп, уның изге зат нәҫеленән икәнен икеләтә һыҙыҡ өҫтөнә алыу менән сикләнһә, И. В. Салтыков яҙмаһындағы Иҙеүкәйҙең изге зат нәҫеленән икәне икеләтә һыҙыҡ өҫтөнә алыныуҙан тыш, уны мөғжизә ярҙамында донъяға килгән мифик ҡаһармандар рәтенә ҡуйырға тырышыу ҙа һиҙелә.

Эпостарыбыҙ менән һәм, ғөмүмән, башҡа халыҡтарҙың эпик традицияһы хаҡында әҙме-күпме хәбәрҙар кешенең иғтибарына ташланмайынса ҡалмай торған уларға хас шундай бер уртаҡ билдә бар: эпик сюжетта геройҙың бала сағына бәйле бер йә бер нисә мотив урын алыусан. Әйтәйек, «Урал батыр» эпосы сюжетының экспозицияһында бер туған Шүлгән менән Урал атлы ике малайҙың атай тыйыуына мөнәсәбәте асыҡлана: Йәнбирҙе ҡарт ауыҙ итеүҙе ҡәтғи тыйһа ла, йырткыс ҡанын эсеүе менән Шүлгән үҙенең тоғролоҡ тигән сифатҡа эйә булмаясағын, ә ул ҡанға ороноуҙан тартынған Урал иһә, ата һүҙен — изге һүҙ тип белгән намыҫ кешеһе буласағын көнәлек әйтеп биргәндәй итә.

«Алпамыша менән Барсынһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Бабсаҡ менән Күсәк» эпостарының төп ҡаһарманы буласаҡ ир бала, йәшкә бәләкәй булһа ла, үҙенән оло малайҙарҙы еңә, хатта уларҙың йә аяғын, йә ҡулын һындыра.

Иҙеүкәйгә килһәк, киләсәктә кем булыры изге зат нәҫеленән булыуы икеләтә иҫкәртелеү, мөғжизә юлы менән донъяға яралыуына иғтибар иттереү рәүешендә прогнозланыу өҫтөнә, бала сағындағы ҡыланыштарынан да һиҙелә башлай. Нәҡи Иҫәнбәт вариантында иң башта Иҙеүкәйҙең зирәклеген асыҡлауға иғтибар ителә. Йомаҡ өйөш — йомаҡ сисеш рәүешендәге әйтештә әүлиәлеге мәғлүм атаһына Баба Төкләҫкә ал бирмәй. Артабан эпостың был вариантында Иҙеүкәйҙең бик аҡыллы һәм зирәк, ғәҙел хөкөм сығарыуға һәләтле булыуы, уның «аҡыллылығын, батырлыҡ, сәсәнлеген ишетеп», Туҡтамыш хандың саҡыртып алыуы хаҡында әйтелә.

Эпостың Әбүбәкер Диваев версияһында ла, дүрт әҙип төҙөгән йыйылма тексында ла, башҡа халыҡтарҙа мәғлүм версия-

ғарындағы һымаҡ уҡ, Иҙеүкәйҙең кесе йәштән үк гәҙел хөкөм сығарыуға маһир, бик тә зирәк булыуына иғтибар ителгән. Әммә, Н. Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма варианттан айырмалы рәүештә, унын ул һәләттәре ҡайҙа нисек асылыуы айырым эпизодтар менән иллюстрацияланған, дөрөҫөрәге, тура әйтелмәйенсә, шул эпизодтарҙа асылған. Диваев версияһы буйынса, әле бала сағында Иҙеүкәй бер дөйә балаһына талашыусыларҙың дәғүәһен еңел хәл итә: ул дөйә балаһына һуға — инә дөйәләрҙең береһе уны йәлләй. Хөкөмдар малай шул дөйәнең әйәһен дөйә балаһының да әйәһе тип таба. Икенселәй, миҙә йәбеште, тип, намыҫлы егетте ғәйепләүсе ҡыҙҙың нахаҡты һөйләүен; бер балаға талашҡан ике ҡатындың ҡайһыныһы хаҡты, ҡайһыныһы нахаҡты һөйләүен дөрөҫ әйтеп биреп, ғәйепһеҙ килеш рәнйетелеүселәрҙе язаға тарттырылыуҙан ҡотҡара.

Фольклор ғилемендә, ғәҙәттә, «Сөләймән пәйғәмбәр хөкөмө» тигән исем менән атап йөрөтөлә торған бындай мотив һәм сюжеттар дүрт әҙип төҙөгән йыйылма текста үҙенсәлекле итеп ижади эшкәртелгән. Ә инде унын бик тиҙ үҫеп, тиңдәштәренән көс-ҡеүәте менән айырылып тороуын, өс айлыҡ сағында сәңгелдәккә һыймауы, өс йәшендә ун йәшлектәргә тиңдәш булыуын хәбәр итеү юлы менән дәлилләүҙе хушһынмағандай, оро һуҡҡанда, уны күҙҙән юғалырлыҡ итеп һуға алыуы, усына эләккән һуйыр ташты, он-талҡандай ыуалғансы, ҡыҫа алыуы уны, өс йәшендә «унар йәшәр (йәғни ун йәшлек. — *Ә. С.*) туғыҙ» малайға, «ҡара ҡоштай талпынып», ташланыуы, ул яһап биргән суҡмарға тиңдәштәренең генә түгел, өлкәндәрҙең дә көсө етмәүе, ғәйрәт йәһәтенән экиәттәрҙәге дейеүҙәр көнләшмәле кимәлгә күтәргәндәй итә.

Бына шулай художестволы деталдәрҙе эренән һайлау юлы менән эпик традиция талабына ярашлы рәүештә ил батырына хас сифаттарҙың бик иртә күҙәтелә башлауын асып, әҫәрҙә, әллә кемдең түгел, бары Иҙеүкәйҙең төп ҡаһарман буласағы көнәлгәре билдәләнә.

Эпик геройҙың кесе йәштән башҡалар ғәжәпкә ҡалмалы көскә эйә булыуы, баһадир булып етешеүе, зирәк көтөүсе хеҙмәтен атҡарыуы, аҡыллы хөкөмдарлығы һ. б. хаҡындағы мотивтар — донъя эпикаһына хас күренеш. Ошо хаҡта байтаҡ миҫалдарҙы йәнәш ҡуйып, сағыштырып, ул мотивтарҙың бер эпоста осраҡлы килмәүен Фәтих Урмансы билдәләп үткәйне инде[1]. Шуға күрә мәсьәләнең ул яғына туҡталып тормағанда ла була. Биш йәшлек Иҙеүкәй образын идеаллаштырыу өсөн, уға «тағылған» сифаттар ир ҡорона ингән Иҙеүкәйҙең булмышында нисегерәк кәүҙәләнеш тапты икән? Мәсьәләнең ошо яғына иғтибар итәйек. Был йәһәттән иң әүәл эпостың «Дүр-

[1]Урманче Ф. Народный эпос «Идигей». — С. 29—40.

тенсе ҡобайыры» иғтибарҙы йәлеп итә. Унда беҙ ил хәстәре менән йәшәүсе Иҙеүкәй менән осрашабыҙ. Ҡобайыр уның Һабрауға кәңәшкә килеүен бәйән итә. 175 йәшлек (тулы йыйылма текст буйынса) Һабрау сәсәнде күргәс, Иҙеүкәйҙең Туҡтамыш хан хаҡында:

«Туҡтамыш хан тигәне,
Туҡтамыш хан тигәне,
Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өрөккән ҡуйҙай итте бит:
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итте бит;
Яурынъыбыҙҙан уҡ үтте,
Көнөбөҙҙө юҡ итте», —

тип әйткәне — зарланыу ғына түгел, сәсәндәрсә уй йөрөтөп, асылда, яуыз ханға көнәлгәре хөкөм сығара биреп ҡуйыуы ла ул. Шуға ла:

«Инде, олатай, нишләйем?
Инде, олатай, нишләйем?» —

тип әйткәне яуапты ла үҙ эсенә алған риторик һорау кеүек ҡабул ителә. Шул риторик һорауҙан аңлашылған яуапты Һабрау сәсәндән дөрөҫләттереү, раҫлатыу ғына талап ителә уға. Ә инде 175 йәшлек Һабрау сәсән беҙгә «Яман яҡшы булалмаҫ», «Йырау һүҙе», «Яман әҙәм шул булыр», «Бер, тигәс тә, ни яман» ише үҙ аллы ҡобайырҙарҙан таныш һүҙҙәр менән, уратып-суратып ҡына, яуап биреп, Иҙеүкәйҙең ул әйткән кәңәште ҡолағы менән ишетеүенә ҡарағанда, күңеле менән аңлауына, йөрәге аша хәтеренә бикләүенә иҫән тота.

Ҡарт сәсән тура тоҫҡамай, бора әйтһә лә, уның һүҙенең мәғәнәһе Иҙеүкәйгә яҡшы аңлашыла. Һәр хәлдә, тәү ҡарашҡа, яу сабырға мөмкинлек бармы-юҡмы, шуны белешкәндәй: «Атҡа менергә, уҡ-һаҙаҡ алырға, яуға ҡаршы яу булып бара алабыҙмы?» — тип һорап ҡуйыуы — асылда, ыңғай яуапты ла үҙ эсенә алған һорау ул. Уның шулай икәненә, һәр хәлдә, Һабрау ҡарт шунда уҡ төшөнә. Быны «Һабрау ҡарт йәш Иҙеүкәйҙең ҡыйыулығын, ил өсөн янып йөрөүен күреп» тип башланған фраза ла йөпләй.

Бына шулай интеллектуаль йәһәттән дә, физик яҡтан да һынауҙар үткәндән һуң ғына, Һабрау әйткән тәүге бурысты үтәргә тотона Иҙеүкәй: һатлыҡ Дәммигә ҡаршы яу аса.

Борон, ҡаршы яҡтарҙың батырҙары осрашһа, иң әүәл бербереһенең ҡанын ҡыҙҙырыу, йәнен көйҙөрөү, сәмләндереү маҡсатында, хурлау һүҙе әйтешкәндәр. Дәмми бей менән Иҙеүкәйҙең әйтеше иһә хурлашыу кеүек алыш алды йолаһын атҡарыуҙан мөһимерәк роль дә атҡара. Ул Иҙеүкәйҙең дипломаттарса эш итеү сифатына эйә булыуын да аңлата.

Иҙеүкәйҙең дипломатлыҡ һәләте Туҡтамышҡа хеҙмәттә торғанында, уға бик тә ярап ҡала. Был уның төп ниәт-маҡсатын йәшерә белеүендә; хандан ҡасып киткәс, Янбайҙың хан исеменән биргән татлы вәғәҙәләренә ҡолаҡ һалмай, уның һәр һүҙен юҡҡа сығарыуында; Сатмыр хандың ышаныһын яулау өсөн, уға буш ҡул менән бармауында — ҡыҙын әсирлектән ҡотҡарыуында, шул арҡала яңы хужаһы менән уртаҡ телде тиҙ табыуға ирешеүҙән тыш, уның кейәүе булырға өлгәшеүендә асыҡ сағыла.

«Аҡ күңелле Иҙеүкәй
Ҡан ҡоймайса булмаҫмы,
Дәмми илгә килтергән
Яманлығын юймаҫмы?»

Бына шундай тыныслыҡ көсәүсе миссия менән килә ул Дәмми бей янына. Дәммигә ул: «Көн бөтмәһә, йыл бөтмәҫ: Йыллап быуын уҙар ул, Аңа тышау табылмаҫ!» — тип, ваҡыт фәлсәфәһе аша үҙ булмышына күҙ һалырға тәҡдим итә. Был тәҡдим — дипломаттарса ғына, тел төбө менән бейҙәрҙең өлкәһенә лә, кесеһенә лә халыҡ алдында яуап бирер көн тыуырын иҫкәртеү мәғәнәһенә лә эйә. Әммә Дәмми, быуындан быуынға күсә килгән бейлегенә маһайып, уның һүҙен һанламауын белдереүе менән үҙенең интеллектуаль яҡтан Иҙеүкәйҙән сағыштырғыһыҙ ҡайтыш икәнен асып һала.

Әйткәс, шуныһын да әйтеү кәрәк. Иҙеүкәй менән Дәмми араһындағы яулашыуҙың биреләше йәһәтенән дә тулы йыйылма текст Мөхәмәтша сәсәндекенән ныҡ айырыла. Әйткәндәй, Дәмми бей ҙә, уның кеүек үк, халыҡтың теңкәһен ҡоротҡан Ыршаҡ бей ҙә «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» эпосында ла телгә алына. Был әҫәрҙә әйтелеүенсә, Дәмми бейгә ҡаршы Келәйле батыр көрәш алып бара. Был көрәшкә Иҙелдән килгән Илеүкәй (был әҫәрҙә Иҙеүкәй шулай исемләнә), Яйыҡтан килгән Яйыҡ батыр менән бергәләшеп Ыршаҡ бейҙе еңгәндән һуң ғына, килеп ҡушыла. Эпостың Мөхәмәтша Буранғолов вариантында иһә баштан уҡ ваҡиға Иҙеүкәй ҡулына күсә. Ул:

Урал яғалай иленән —
Иҙел, Яйыҡ буйынан —
Яйыҡ, Келәйле батырҙар
Билге төйгән урынға

бөтә көстө йыя ла

Келәйлене мең башы,
Туҡһан, Сәфәр, Аҙнайҙы,
Ҡасҡын, Бикҡол, Ҡаныҡайҙы
Мең эсендә йөҙ башы[1]

---

[1] БХИ: Эпос. 5-се том. — 60-сы б.

итеп тәғәйенләй һәм, Дәмми бейҙе ҡулға алырға фарман биреп, Яйыҡ бейҙе «Тора бей сигенән Ыршаҡ бейгә ебәрә». Ә Тора бей был ваҡиғаға тиклем, әйтештә йәш Иҙеүкәйҙән еңелеп, уның:

«Ханды байман итеүсе
Яйыҡтағы Шәғәле,
Дәмми бей мән Ыршаҡҡа
Булат ҡылысым тоҫҡаһам,
Тешең ҡыҫып ятырһың»[1], —

тигәне менән килешеп, уға тоғро ҡалырға һүҙ бирһә лә, вәғәҙәһендә тормай.

Иҙеүкәйҙең Ыршаҡ бейгә яу асыуы — батыр ғүмеренең иң мөһим мәле. Сөнки уның өсөн тап шул мәл яҙмыш боролошо мәғәнәһенә эйә булыуы менән дә әһәмиәтле. Был мәл шул яғы менән дә тәрән мәғәнәгә эйә: уға үҙенән бик күп тапҡыр тәжрибәле, яуҙарҙа ал бирмәүе менән дан-шөһрәт ҡаҙанған, шуның өҫтөнә бик тә һаҡ һәм етеҙ, имәндәй кәүҙәле, ҡыйыу һәм тәүәккәл, тапҡыр һүҙгә баҙап ҡалыуҙы белмәгән Дәмми менән алышыр мөҙҙәт етә.

Шуныһын билдәләү ҙә мөһим. Иҙеүкәй үҙенең дошманын, берҙән, объектив баһалай. Икенсенән, сабырлыҡ һәм әхлаҡи яҡтан үҙенең унан өҫтөн икәнен күрһәтә. Хас дошманы булыуына ҡарамаҫтан, Дәммиҙең оло кеше икәнен хөрмәтләү йөҙөнән уға киҙәк бирә, йәғни үҙен сәп урынына ҡуйып, уға беренсе булып үҙенә атырға форсат бирә. Бына шулай, яҙмыш «икенең бере» тигән дилемма алдына баҫтырғанда ла, олоно — оло, тип, кесене — кесе, тип, һәр береһенә үҙ дәрәжәһе талап иткән тиклем хөрмәт күрһәтергә, милли әхлаҡ кодексыбыҙҙың яҙылмаған ҡағиҙәләрен еренә еткереп үтәргә һәләтле итеп таныта Иҙеүкәй үҙен. Быныһы бер булһа, икенсенән, нәҡ ана шул кодекс талап иткәнсә, яу йолаһын да еренә еткереп үтәй ул. Шуларҙы күҙәтеүе аша эпоста уның ни тиклем тотанаҡлы, ни ҡәҙәрле сабырлы икәненә ишара яһала.

Иҙеүкәйҙе идеаллаштырыу шундай дәрәжәгә күтәрелә ки: хатта уның бер уғы бер ғәскәргә торошло итеп күрһәтелә эпостың һүҙ барған версияһында. Һөҙөмтә, әйтелмәйенсә лә, яҡшы аңлашыла. Әммә эпос өндәшмәйсә ҡала алмай. Иҙеүкәй Һабрау сәсән биргән кәңәште артығы менән бойомға ашыра:

Дәмми бейҙән ҡотолоу
Уралдағы халыҡҡа
Таң аҡҡандай булды, ти.
Ете ырыу Уралда,
Һәр урында, аймаҡта,
Шатлыҡ туйы ҡылды, ти.

---

[1] БХИ: Эпос. 5-се том. — 59-сы б.

Иҙеүкәй бына шулай үҙенең ғәҙәттән тыш һәм мөғжизәүи юл менән донъяға тыуыуы, бәләкәс кенә сағында уҡ йәшенә тура килмәгән көс-ғәйрәткә эйә булыуы менән киләсәктә үҙенең ҡаһадир буласағы хаҡында уятҡан өмөттө лә, сәсәнлек, хакимдарлыҡ, хөкөмдарлыҡ һәм дипломатлыҡ һәләте башланғысын да аҡлай.

Иҙеүкәйҙең сәсәнлек, батырлыҡ сифаттары уны Туҡтамыш хан һарайында, аҙаҡ Сатмыр хан (Аҡһаҡ Тимер) яғына күскән дәүерендә лә үҙенең йөпләүен таба. Был дәүерҙә унын полководецлыҡ йөҙөндәге хакимдарлыҡ һәм сәсәнлек йөҙөндәге дипломатлыҡ һәләтенә эйә булыуы йәнә тәрәнерәк асыҡлана.

Балалыҡ дуҫы Ыласын унын Туҡтамыш ханға хеҙмәткә килеүен өнәмәй. Әммә Иҙеүкәй уға: «Һунарһыҙ үҫкән шонҡар ҡош — Ябалаҡҡа төҫ булыр», — тип яуап биреү менән генә сикләнә. Ни өсөн был аҙымға барыуының һәм яуабының серен асып бөтмәүе аҙаҡ ҡына аңлашыла: Иҙеүкәйгә хан янында булыу, унын көслө һәм көсһөҙ яҡтарын эстән белеү өсөн кәрәк булған, имеш. Киләсәктә Туҡтамыштын үҙенә ҡаршы яу асыу өсөн, хандын үҙе янында баш бей сифатында әҙерлек мәктәбе (стажировка) үтә Иҙеүкәй. Ҡырым яуын да, башҡаһын да тармар итә. Шундай еңеүҙәре һөҙөмтәһендә, каруан-каруан ҡыҙыл малдың һарайға ағылып тороуы хандың иғтибарын кәметә, Иҙеүкәйгә иһә шул ғына кәрәк.

Эпостың варианттарындағы бер мотив айырыуса иғтибарҙы тарта. Төп герой Иҙеге тип аталғанында («Иҙеге»), үҙен Ҡарабай тип танытып, Туҡтамышҡа тәүҙә ялсы булып ҡына яллана. Әммә Иҙеүкәй килеп инһә, «Туҡтамыш хан йоҡлап ятҡан еренән һикереп килә лә тора икән, ти». Эпостың «Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй» тигән вариантында әйтелеүенсә иһә, Иҙеүкәй килеп инһә, был хан урынынан шыла биреп ултыра. Ханбикә быны, ҡурҡаҡлыҡ билдәһе, тиһә, хан ышанмай. Шуға күрә лә ханға һиҙҙермәй генә, унын өҫтөндәге кейемен урынына ҡуша тегеп, иҫбатларға тура килә бисәһенә. Был мотив шуныһы менән әһәмиәтле: Иҙеүкәй булмышы һәм аураһы менән үк Туҡтамышты хәүефкә һала. Был иһә Иҙеүкәйҙең тыумышы ғына түгел, булмышы ла — мөғжизәүи, тип раҫлауға бәрәбәр. Ә инде сюжет кимәленән күҙ һалғанда, был мотив шул икәүҙең араһында конфликт төйөрөмләнәсәген көнәлгәре хәбәр итеүсе сигнал менән бер.

Иҙеүкәй яңғыҙ эш итмәй. Бала сағында ул тоғролоҡто уғрылыҡтан өҫтөн ҡуйған уйындаштарына таяна. Бара-тора Һабрау сәсән менән кәңәштәш булыуға ирешә. Туҡтамышта хеҙмәттә торған сағында, уға Ыласын ярҙам итә. Унынһы иһә, хәүеф-хәтәрҙе алдан аңғартып, үлем янағанда, ҡасырға булыша. Ғәнәкәнән тыуған улын үҙенең үлгән улы урынына уллыҡҡа ала. Сатмыр ханға барғас иһә, Иҙеүкәй үҙенең улына, Мораҙымға, таянып эш итә.

Эпостың мәғлүм варианттарының барыһында ла тиерлек, мөхәббәт интригаларына юлығыуы арҡаһында, Иҙеүкәйҙең кисергәндәре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Бәғзе варианттарҙа уға хан ҡатыны ғашиҡ була һәм «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһының геройы батша ҡатынының мөхәббәтен ҡабул итмәгәне өсөн эҙәрлекләүгә юлыҡҡаны һымаҡ уҡ, Иҙеүкәйҙең, ҡол ҡыҙ Ғәнәкәне үҙ күреп, ханбикәнең мөхәббәтен инҡар итеүе арҡаһында тыуған конфликт, ахырҙа Туҡтамыштың башына еткән оло конфликтҡа олғаша.

Ә инде Сатмырхандың ҡыҙын алыу өҫтөнә Туҡтамыштың ике ҡыҙын да ҡосаҡлап ултырыуы — Иҙеүкәйҙең үҙ улы Мораҙым менән конфликтҡа инеүенә сәбәпсе була. Йыйылма текста ул аңлашылмаусанлыҡ арҡаһында килеп сыҡҡан конфликт, тип һылап-һыйпаңҡырап аңлатыла: йәнәһе лә, Иҙеүкәй Туҡтамыштың ҡыҙҙарына уларҙы бала саҡтарынан уҡ белеүе хаҡында һөйләп ултырғанды Мораҙым, былар ҡауышҡандар, тип белгән. Шуға атаһын яралап, уны һуҡыр ҡалдыра була. Сөнки Туҡтамыш ҡыҙҙарының береһен атаһы үҙе үк уға инселәгән була.

* * *

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы төп геройҙың бөтә ғүмерен үҙ эсенә ала. Был яҡтан ул традицион эпостарҙы, әйтәйек, «Урал батыр»ҙы, «Манас»ты хәтерләтә. Урал батыр ер өҫтөн кеше һәм бүтән тереклек мәңге ғүмер итерлек итеп ип-һапҡа килтереп, үҙенән нәҫел ҡалдырып, уларға йәшәү ҡанундарын аңлатҡандан һуң, ҡайтмаҫ ергә китә. Иҙеүкәй ҙә, Һабрауҙың «Урал, Урал» тигән һүҙ — «Иҙеүкәй, Иҙеүкәй» тигән һүҙ икәнен раҫлап, илен хандарҙан һәм уларҙың ҡуштандары булған бейҙәрҙән азат итеп — үҙенең батырлыҡ бурысын үтәп, эстафетаны улы Мораҙым йөҙөндә яңы быуынға тапшырғандан һуң ғына, мәңгелеккә күҙен йома.

### 10. Башҡорт тарихында ҡат-ҡат һыналған хәҡиҡәт

1739—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе Ҡараһаҡал (Миңлеғол Юлаев) хаҡында заманында риүәйәт, йыр, эпос киң таралған булған. Быға уның батыр йөрәкле яу башлығы булыуы өҫтөнә, хаҡ мосолман булыуын, бер нисә тапҡыр Мәҙинәи-Мәккәгә барып, хаж ҡылыуы менән раҫлауы ла ныҡ булышҡан.

Заманында Ҡараһаҡал (Миңлеғол) хажи, Ҡараһаҡал батыр хаҡында ҡобайыры ла, риүәйәттәр ҙә, хатта легендалар ҙа (эйе, эйе, легендалар ҙа, сөнки уҡымышлы кеше булараҡ, ул төрлө кирәмәттәр күрһәтә алған, дошмандарҙың күҙен быуып, хәҙергесә әйткәндә, гипноз ярҙамында уларҙан еңел ҡотола алған) киң таралған булған.

Риүәйәт баһалауынса, Салауат Ҡараһаҡалға кәңәшкә йөрөр булған. Тимәк, үҙе күтәргән ихтилалдан һуң утыҙ йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, Ҡараһаҡал үҙенән һуң күтәрелгән азатлыҡ хәрәкәте менән бәйләнештә торған, тип белгән халыҡ.

Заманында үҙен «Ҡөрьән» һүҙе, шәхси ҡыйыулығы менән азатлыҡ яуына әйҙәгән батырын халыҡ бахыр итеп күрә белмәгән. Салауатты йөҙләп бүре баҫҡанда, уны үлемдән ҡотҡарыусы Ҡараһаҡал була. Тимәк, риүәйәтсә, йәшерен йәшәһә лә, ҡарыулы була Ҡараһаҡал. Тик был — мәсьәләнең бер яғы ғына. Икенсе яғы — шул булыр: йөҙ бүрене еңеүе хаҡында әйтеп, халыҡ уның илаһи көсөнә эйә булыуын да күҙ уңында тотҡан булһа кәрәк. Тик был хаҡта атап әйтмәгән генә. Сөнки заманында уның быңдай һәләте бөтәһенә лә мәғлүм булған. Шуға күрә «йөҙләп бүре ҡамауы» мотивы аллегорик мәғәнәгә эйә булыуы ла ихтимал. Хәйер, был хаҡта асығыраҡ итеп аҙаҡ әйтелер.

«Салауат Юлаев, һуғышып-һуғышып, яңғыҙ ҡалғас, аптырағандың көнөнән» ҡайҙан ғәскәр алырға кәңәш һорағас: «Балам, булдыра, алмаҫһың. Инде халҡыңдан яҙып ҡалғанһың»[1], — ти Ҡараһаҡал. «Ҡараһаҡал» эпосы буйынса Ҡараһаҡалдың, халҡынан яңғыҙ ҡалып, ситкә сығып китеүен бәйән итеү менән тамамланыуын иҫәпкә алғанда, был һүҙҙәрҙең аяныслы үҙ тәжрибәһенән сығып әйтелеүе аңлашыла булыр. Ирекһеҙҙән, шул эпоста Ҡараһаҡал хаҡында әйтелгән шундай һүҙҙәр тел осона килә:

Ил ҡаплаған дошманға
Яңғыҙ батыр яу булмаҫ!
Яңғыҙ толпар тояғы
Дошманына шау булмаҫ!
Ил ҡаплаған дошманға
Батыр яуы эсендә
Ярҙамсылар табылғас,
Ҡараһаҡал батыр ҙа,
Артҡа сикмәй, нишләһен?!

Ҡараһаҡалдың күҙ терәп торған үҙ кешеләре араһында «Ил ҡаплаған дошманға ярҙамсылар табылыуы» менән яңғыҙ ҡалған Салауатты йөҙләп бүре уратыуы арҡаһында ла оҡшашлыҡ бар.

Эпостың «Ҡара ат» тигән версияһының да ахыры «яңғыҙ батыр яу баҫмаҫ» тигән идея менән һуғарылған.

---

[1] Башҡорт легендалары / Матер. әҙерләүсе Ә. М. Сөләймәнов; Төҙ., иҫкәрмә биреүселәр һәм редакциялаусылар М. Х. Минһажетдинов, Кирәй Мәргән; Инеш мәҡәлә М. Х. Минһажетдинов менән Ә. М. Сөләймәновтыҡы. — Өфө: БДУ нәшр., 1969. — 88-се б.

Толпар менгән батыры
Яңғыҙланһа нөгәрҙән,
Илең килгән дошманға
Аҙыра* итмәй, нишләһен?!
Урал битен һаҡларға
Дошманына яу асҡан,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Көнөн-төнөн яу сапҡан
Ҡараһаҡал батыр ҙа,
Яңғыҙланғас, ҡул тартҡас*,
Ил ҡаплаған дошманға
Яңғыҙ Ай ҙа Көн булмаҫ.

«Ҡараһаҡал» эпосының «Ҡара ат» тигән версияһындағы ошо юлдар Әхмәтзәки Вәлидиҙең дә иғтибарына юлыҡҡан, халыҡ араһында «Аҡай яуы» тигән исем менән мәғлүм булған (уның әйтеүенсә, ул фарсы теленә тәржемә ителгән) яҙма эпос өлгөһөнә лә (академик Ғ. Б. Хөсәйенов уны «тарихи хикәйәт» тип атаған. «Аңлатмалар»ҙы ҡарағыҙ) ауаздаш. Ауаздашлыҡ иң әүәл ихтилалға дәррәү күтәрелеүгә тәүәккәллек итеп тә, еңелеп ҡалғас, шул уңышһыҙлыҡтың сәбәптәре хаҡында уйланыуҙа сағыла. Дөрөҫөндә, «Аҡай яуы» әҫәре — тулыһынса тарих битенә шул исем менән мәғлүм күтәрелештең сәбәптәре, бармышы һәм һөҙөмтә-эҙемтәһе хаҡында хәсрәтле уйланыуҙарҙан ғибәрәт.

«Ҡараһаҡал» йәки «Ҡара ат» эпосында башҡорт Миңлеғол Юлаев етәкселегендә 1739—1740 йылдарҙа булған ихтилалдың еңелеүенең төп сәбәбе баш күтәреүселәр араһында берҙәмлек булмауына ҡайтарып ҡалдырылһа, шул тарихи ваҡиғаға тиклем, йәғни 1735—1736 йылда Күсем улы Аҡай батыр етәкселегендә башланған ихтилалдың фажиғәле яҙмышҡа дусар булыуының сәбәптәре күп яҡлыраҡ һәм тулыраҡ асыла. Шул сәбәптәрҙең береһе — башҡорттарҙың Ҡазан сыуаштары менән татыу булмауҙары менән аңлатыла.

Дөрөҫ, Аҡай батырҙың атаһы Күсембәт сыуаштан да кәләш алған була. Башҡорт, ҡаҙаҡ, татар йолаһы буйынса, төрлө ҡәүем араһында ҡыҙ алып, ҡыҙ бирмәк — ҡан-ҡәрҙәшлеккә кермәк. 1736 йылда рус батшаһы башҡорт егеттәренең Ҡазан (йәғни татар) ҡыҙы менән никахлашыуын ҡәтғи тыйһа ла, улар никахлаша тора, ике халыҡтың ҡәрҙәшлек ептәрен нығытыуға үҙ өлөшөн индерә тора. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының Т. С. Беляев версияһы иһә башҡорттоң «Ете ырыу» тип йөрөтөлгән тотош ырыуҙар союзы хасил булыуына башҡорт егете Ҡуҙыйкүрпәс менән ҡырғыҙ ҡыҙы Маянһылыу сәбәпсе була тигән идея үткәрә.

Күсембәттең сыуаштан кәләш алыуына ла, ошо никахтан Сыуаш атлы улан тыуыуына ла ҡарамаҫтан, икенсе төрлө әйткәндә, үҙенең бер мәшһүр шәхесенең никахы ярҙамында баш-

корттарҙың сыуаштар менән төптән килгән ҡан-ҡәрҙәшлеген аңлыртыуға нигеҙ һалыуҙары, шул никахтан тыуған балаға ике ҡәүемдең береһенең этнонимын исем итеп биреп, ике халыҡтың ҡәрҙәшлегенә баҫым яһарға тырышыуҙары менән иҫәпләшеп тормаҫтан, сыуаштар, Аҡайға барымта яһап, уның йылҡыларын ҡыуып алып китә торған булғандар. Күрәһең, улар, ике ҡәүем араһына Күсембәт һалған дуҫлыҡ күпере, ул үлгәс, әһәмиәтен юғалтҡан, тип белгәндәр. Нисек кенә булмаһын, Аҡайҙың, ҡыйыу егеттәр йыйып, ҡулына ҡорал алыуына ла, барымтаға — ҡарымта саптырыуына ла, ике халыҡтың ырыуҙарының тынышмауының аҙаҡ рус батшалығына ҡаршы ихтилалға әүерелеүенә лә, шул ихтилалдың, ҡанға туҙҙырылып, баҫтырылыуына ла — бер ни түгел, ана шул сыуаш барымтаһы сәбәпсе, тигәндәй була эпос. Хикмәт шунда: «барымтаға — ҡарымта» принцибына таянған йола буйынса, уғрыларҙы ҡыуыуға ҡыра аҡайҙар. Әммә былай ҙа барымтасыларҙан ҙур зыян күргән Аҡай, иҫән ҡалған бер уғры ошағы буйынса, башҡорттарға ҡаршы регуляр ғәскәр ебәрелеүе һөҙөмтәһендә, әсирлеккә юлыға.

Күтәрелештең дауам иттерелеүе хаҡында һүҙ барғанда, башҡорттар «араһында Ҡазан татарҙары, уржумдар, сирмештәр бар ине», тиелә. Шунан һуң хикәйәсе исеменән: «Былар үҙҙәренә йәйлы мәлендә башҡорттар араһында йәшенер булды», — тип үкенес белдерелеүе иһә, — яҡын тарихтан, үҙҙәренең батыры Аҡайҙың һәләкәте һәм уның сәбәбенән ихтилалсыларҙың һабаҡ ала белмәүҙәренә, вәғәҙәләргә үтә тиҙ ышаныусанлығына шелтә булып аңлашыла. Тимәк, Аҡай батыр башлаған изге яуҙың еңелеүенә, бер яҡтан, халыҡтың килмешәктәргә тиҙ ышаныусанлығы, икенсе яҡтан, баш күтәреүселәр араһына инеүсе шул заттарҙың һатлыҡ булыуы сәбәпсе икәне асыла.

Өсөнсө сәбәп иһә — башҡорттарҙың властар вәғәҙәһенә лә тиҙ ышаныусанлығы, шул вәғәҙә аҫтында мәкер уй-ниәттәр ятыуына ҡапыл ғына төшөнә алмауҙары менән аңлатыла. Улар рус түрәһенең: «Батша һеҙҙең гонаһтарҙы ярлыҡаны. Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙең йорттарығыҙға ҡайтығыҙ. Һеҙгә бер кем теймәҫ», — тигәненә ышанып, илдәренә тарала, тимәк, ҡоралдарын ташлай. Һөҙөмтәлә, бер яҡтан, аслыҡ-яланғаслыҡҡа, икенсе яҡтан, карателдәр ҡыҫымына юлыға.

Йәнә бер миҫал: «Түбән тарафтарынан ҡоралды-атлы мишәрҙәр, мосолмандарҙы (башҡорттарҙы. — *Ә. С.*) тотоп, урыҫтарға тапшырҙылар, тип әйтелгәне лә башҡорт ихтилалсыларының күпләп ҡырылыуын ҡырғыҙҙарҙың (дөрөҫөрәге, ҡаҙаҡтарҙың), уларҙы һыйындырырға тырышҡан һымаҡ: «И, меҫкендәр, һеҙ урыҫ ҡулындаһығыҙ шул. Беҙ һеҙҙе ашатырбыҙ, эсерербеҙ», — тип, йәлләгән кеше булып ҡыланыуын ысынға алыуҙары ла, асылда, ихтилалдың еңелеүенә килтереүсе сәбәптәрҙең береһе мәғәнәһенә эйә.

Дүртенсе сәбәп — «Ҡараһаҡал» эпосындағы кеүек үк, ырыуҙар берҙәмлегенә өлгәшә алмау, тип раҫларға була. Сөнки, берҙән, ихтилал башлаусыларҙың саҡырыуы буйынса, һәр ырыуҙан вәкилдәр килә, ә Ҡаңлы, Ҡыбау кешеләре ҡыбырлай һалмай. Етмәһә, ҡыпсаҡтар, ни сәбәптәндер баш күтәреүселәргә ҡорал менән ҡаршы сыға, хатта карателдәргә булыша.

«Аҡай яуы» эпосы тик еңелеү сәбәптәрен хәтерләүҙән генә тормай, әлбиттә. Ихтилал булып күтәрелерлек булғас, башҡорт сафында берҙәмлек, батырлыҡ традицияларына тоғро ҡалыусылар ҙа әҙ булмаған тигән һығымтаға ла урын бар. Ысынлап та, Аҡай тотолғас та, башҡорт ырыуҙары йыйынға йыйыла. Килмәгәндәрҙе лә, «теләр-теләмәҫ кенә» килгәндәрен дә: «Һеҙ яуға күтәрелергә әҙерме?» — тип, намыҫтарына тейеп, көрәшселәр сафына баҫырға мәжбүр итәләр. «Яҙын, көндәр йылынғас» иһә, «үҙ-ара хатлашып, хәбәрләшеп, берлектә ҡаршы» сығыуҙың көнөн, урынын билдәләп, шунан ғына күтәреләләр. Тимәк, ихтилалда ҡатнашыусылар боронғо хәрби йыйын һәм яуға күтәрелеү тәртибен һаҡлай белгән. Тап ошо миҫал уларҙың ойошорға һәләтле булыуы хаҡында һөйләй ҙә инде. Әммә әлеге сәбәптәрҙең булыуы ихтилалдың барыбер ҙә еңелеүгә дусар ителәсәген көнәлгәре аңғартыу менән бер.

Шул сәбәптәр хаҡында уйланыу «Һуңғы Һартай» эпосы ҡаһарманы Ялыҡ бейҙең илбаҫарҙарҙан ырыуының ҡырылып, иленең еңелеүе хаҡындағы уйланыуҙарын хәтерләтә. Дөрөҫ, ырыуының еңелеү сәбәптәрен Ялыҡ бей «Аҡай яуы»ндағы һымаҡ барлап тормай, бәрәүгенәһенә иғтибар иттерә. Ялыҡ бей башҡорт ырыуҙарының берҙәм булмауына, береһе ауыр хәлгә тарығанда, башҡаларының ярҙамға килмәүенә әсенә.

«Аҡай яуы» әҫәре «Һуңғы Һартай»ға шул яғы менән дә ауаздаш. Улар икеһе лә беренсе заттан бәйән ителә. Әммә, шунан сығып ҡына, уларҙы индивидуаль ижад емеше, тип ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки борон-борондан уҡ «ташҡайҙарға соҡоп тарих яҙыусылар», унан кире ҡаурый-ҡәләм тибрәтеүселәр өсөн ваҡиғаны беренсе заттан, «шаһит рәүешендә», бәйән итеү — үҙе бер стиль алымы булған. Фажиғә хаҡында бәйән итеүсе һыҡтау, бәйет жанрҙары өлгөләренең дә, шәжәрәләрҙең дә ҡайһы берҙәренең (Юрматы ырыуыныҡы шуға миҫал), шулай уҡ Орхон-Йәнәсәй руник яҙмаһының (мәҫәлән, Төнйоҡуҡҡа ҡағылышлы өлөшөнөң)[1] стиле шуға дәлил.

«Һуңғы Һартай»ҙа хикәйәсе «үҙе шаһит булған» йә «башынан кисергән» трагик ваҡиғаларҙы бәйән итеү менән генә сикләнмәй. «Эттәр, эттәр! Улар иҫәпһеҙ-һанһыҙ булып, ер ябып килә ине», «Ай-һай, тәүәккәллектең дә, һулдан һелтәгән ҡылыстың да ышаныслы икәнен мин белә инем шул», «Ха-ха,

---

[1]Kul-Tegin: Orhun-Yenisei Yazitlari. VI—VIII. yy. — Ankara: TURKSOY, 2003. — 175—181-sis.

...юрекәй соҡоро һеҙгә ҡәбер булһын!» ише репликалары менән ырыуының бөтөүенә сәбәпселәргә үҙенең мөнәсәбәтен дә белдерә бара.

«Аҡай яуы» әҫәрендә хикәйәсе исеменән әйтелгән «Меҫкен мосолмандар!», «Йә, Тәңрем, кафыр ҡулына эләккәндәргә иман байлығы бир!», «Меҫкендәр ҡырғыҙҙарҙың таҫма теленә ышансылар!» тибындағы һүҙбәйләнештәр ҙә шундай уҡ вазифа атҡара. Ах ороуға тиң бындай репликаларға нигеҙ бар. Тик, әгәр «Һуңғы Һартай»ҙың бөтә пафосы оптимистик трагедияны хәтерләтһә (унда Ялыҡ бей, үҙенең ике улын һәм яугирҙәрен юғалтыуын әсенеп телгә алһа ла, уларҙың батырҙарса һәләк булыуы хаҡында ғорурланып һөйләй: исемдәре онотолмаҫына ышана), «Аҡай яуы»нда батша карателдәренең генә түгел, ҡырғыҙҙарҙың да башҡорттарға аяуһыҙлыҡ күрһәтеүенә айырым иғтибар иттерелә. Карателдәр әсир төшкән башҡорттарҙы тимер ишкә ултырта, ҡабырғаларынан тимер ырғаҡҡа элә, тураҡлай, туптан, мылтыҡтан ата, мәкегә тыға. Башҡорт яугирҙәренең үле кәүҙәләре быуа быумалы булып ятып ҡала. Батша йәлләттәренән шунан башҡаны көтөп тә булмай. Ә ҡырғыҙҙар? Улар, ҡәрҙәш була тороп, хаиндарса мәкерлек ҡыла: үҙҙәренән яҡлау көткән ихтилалсы башҡорттарға, «туғанлашабыҙ», тип, уларҙың ир-атын ҡоралһыҙландыралар ҙа, эттәрҙән талаталар, таш атып йә һуйыл менән туҡмап үлтерәләр, ҡатын-ҡыҙын ҡоллоҡҡа һаталар.

Аҡай бойороғо буйынса, башҡорттарҙың сыуаш барымтасыларын ҡырып һалыуы был ваҡиғаларға формаль яҡтан ғына мөнәсәбәтле. Ни өсөн формаль яҡтан? Сөнки Аҡайҙы ҡулға алыу һәм башҡорттарҙы ҡырыу өсөн, батша властары ошо хәлде һылтау итеп файҙалана. Структура кимәленән ҡарағанда иһә, «башҡорттар барымтасыларҙы ҡыра» тип һығымта яһарға форсат бирмәле ошо мәғлүмәт тематик мотив статусына эйә. Тап ошо мотив сюжет хасил булыуына нигеҙ булып тора ла инде.

Ваҡиға булараҡ ҡарайһыңмы, сюжет күҙлегенән баһалайһыңмы, барымтасы булмағайы кем булһын, сыуаштарҙы ҡырып һалыу хаҡында эпостан хәбәр алғас та, тәүҙә уны беҙҙең бөгөнгө рәсми ҡанундарыбыҙға ғына түгел, әхлаҡ кодексыбыҙға ла һыймаҫлыҡ ҡанһыҙлыҡ тип баһалайһың. Хатта бабаларыбыҙҙың шул аяуһыҙлығына йөҙөң яна башлауын һиҙеп, нәфрәтләндергәндәй ҙә булаһың. Әммә әҫәр менән артабан танышa килә, шуға төшөнөргә мәжбүр булаһың. Батша йәлләттәре генә түгел, ҡәрҙәш ҡырғыҙҙарҙың да башҡорттарға күрһәткән яуызлығы фонында «Аҡай бойороғо буйынса, сыуаш барымтасылары тотошлай ҡырып бөтөрөлә» мотивы икенсе мәғәнә ала. Хәҙер иһә ул мәсьәләгә тарих, этнография, хоҡуҡ күҙлегенән ҡараусыға (ҡәрҙәш булмағайы, ни булмағайы!) «күрше хаҡы — Тәңре хаҡы» тигән изге ҡанунды боҙған;

ҡоҙалашып, дуҫлыҡҡа ҡул һоноп, ҡан-ҡәрҙәшлеккә яңыртырға тырышыуҙың ҡәҙерен белмәгән, башҡорт милкенә, башҡорт иркенә яҫҡанған башҡа ҡәүемдәргә һабаҡ булһын өсөн, сараһыҙҙың көнөнән генә ҡулланыла торған дөйөм кешелеккә хас йола хоҡуғы талабына ярашлы эш итергә мәжбүр булыуҙың бер һөҙөмтәһе һымаҡ ҡына аңлашыла.

Тәү ҡарамаҡҡа, ҡанһыҙлыҡ булып тойолған шул йоланың дөйөм кешелеккә хас булыуы — алдан иҫкәртеүгә тиң. Ошо күҙлектән ҡарағанда, тағы бер факт иғтибарҙы йәлеп итә. Башҡорттарҙың батша властарына: «Күсем улы Аҡайҙы ҡайтарып бирегеҙ, ...үҙегеҙ Минзәлә ҡалаһына кире ҡайтығыҙ һәм сиктең был яғына сыҡмағыҙ! Әгәр беҙҙең талаптарыбыҙҙы үтәмәһәгеҙ, Аллаға тапшырып, һеҙгә яу асабыҙ», — тип талап ҡуйыуы ла — дошманды алдан иҫкәртеү. Ул Бөйөк Святославтың үҙ дошмандарын: «Иду на вы», — тип иҫкәртеп, уларҙы гәҙел алышҡа саҡырыуына тиң.

Әгәр Ҡараһаҡал яҙмышын бәйән иткән ҡобайырҙың минор моңло финалына тиклемге өлөшө тантаналы музыкаға, ораторийға тартым булһа, «Аҡай яуы» әҫәре тотошо менән трагик пафослы. Бәйән итеүсе тасуирлаған һәр картинанан илаш, тартыш, ыңғыраш ишетелеп, ҡан, мәйет еҫе аңҡып тора һымаҡ. Баш күтәргән башҡорттарҙың ни тиклем ауыр фажиғә кисереүе эпос менән танышыусыға ана шулай уның аңы аша ғына түгел, һиҙеү, тойоу мөмкинлектәре аша ла еткерелә. Ошо фонда башҡорттарҙың сыуаш барымтасыларына ҡарата аяу белмәүе, Аҡай бойороғо буйынса, уларҙың тотошлай ҡырып бөтөрөлөүе башҡаларға һабаҡ булһын өсөн сараһыҙҙан атҡарылған акт мәғәнәһенә генә эйә.

Башҡа эпостар һымаҡ уҡ, «Аҡай яуы»на «тел төбөнән әйтеү» һәләте лә хас. «Һуңғы Һартай» менән «Ҡараһаҡал» («Ҡара ат») эпостарының тел төбөнән башҡорттарҙы берҙәмлеккә тупланырға саҡырыу аңлашылһа, «Аҡай яуы» әҫәре иһә шул ике эпос алға һөргән идеяны киңәйтә төшөп: «Үҙ ырыуҙарыңдың берҙәм булыуы мотлаҡ. Әммә бынан тыш, күрше-күләндәгеләрҙең — һинең менән, үҙеңдең башҡа халыҡтар менән татыу йәшәй белеүегеҙ ҙә шарт!» — тип әйткәндәй ҙә була.

«Аҡай яуы» эпосында тотош халыҡ та (бында башҡорттар күҙ уңында тотола), уны хасил итеүсе ырыуҙар ҙа, этнонимы менән аталыр урынға, һәр саҡ «мосолмандар» тип кенә нарыҡлана. Бының да үҙ маҡсаты, үҙ сәбәбе бар кеүек. Эпос контексында шул бер һүҙҙең ҡулланылышы халҡыбыҙ исеменән мишәр һәм ҡаҙаҡтарҙың былай ҙа яфа сиккән башҡортҡа тағы яфа өҫтәүселәренә: «Ҡәрҙәшлектән тыш, беҙ диндәштәр ҙә бит әле», — тип әйтергә теләүҙе аңлата булыр. Тимәк, уға ла берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы һалынған.

Шул уҡ ваҡытта: «Башҡалар менән татыу бул! Тик уяулығың юғалтма! Хыянаттан һаҡлана ла бел! Дуҫ бар ерҙә дошман да бар», — тип иҫкәрткәндәй ҙә була «Аҡай яуы» эпосы.

Мәсьәләнең ике яғы ла — башҡорт тарихында ҡат-ҡат һынналған хәҡиҡәт. Ул бөгөн дә актуаль.

## 11. Азатлыҡ өсөн көрәш эстафетаһының күсә килеше идеяһы

«Ҡараһаҡал» эпосының прологы опера увертюраһын хәтерләткән ҡобайыр юлдарынан башлана. Унда «Яусыл булған атама Ата булған», «Йүнсел булған әсәмә Ватан булған» гүзәл Уралды яттар баҫып алғандан һуң, уның йәме бөтөүен күреп Сәйет, Күсем кеүек башҡорт батырҙарының ихтилалға күтәрелеүе хәбәр ителә.

Эпостың «Ҡараһаҡал яуы» тигән вариантында ла Миңдеғол-Ҡараһаҡалдың илдәр гиҙеп, хаждар ҡылып йөрөй торғас, яйы сыҡҡанда, үҙен хан нәҫеленән сыҡҡан кеше тип танытыуы хаҡында әйтелә. Әммә, «Ҡара ат»тағынан айырмалы рәүештә, ул үҙен килмешәк тип түгел, ә үҙ ҡәүеме вәкиле буларак таныта. Быға ул, һүҙе менән генә түгел, дәлилләрлек танытма, нәҫел танытмаһы, ярҙамында өлгәшә. Нәҫел танытмаһы ролен шәжәрә атҡара.

«Ҡараһаҡал яуы»нда шәжәрә төҙөү йолаһы, этнография кимәленән үтеп китә: ул Ҡараһаҡалға, үҙенең сығышын затлы итеп, хан нәҫеленән булған, тип күрһәтеү өсөн, тәгәйен танытма хеҙмәтен үтәүе менән сәйәси йөкмәтке ала. Кешене аҡ кейеҙгә ултыртып, баш осона күтәреү йолаһы иһә килеп сығышы менән үк сәйәси йола булған. Сөнки ошо йоланы атҡарыу өсөн хан дәрәжәһенә күтәреүҙе аңлатҡан.

Ҡараһаҡал хаҡындағы эпоста телгә алынған, атҡарылышы тасуирланған бөтә йолалар ҙа, ғөмүмән, социаль йөкмәткеле итеп тасуирлана: улар барыһы ла халыҡтың шул ҡаһарманы алға һөргән сәйәси маҡсатҡа хеҙмәт итә.

Халыҡ тәҡдим иткән Ҡара атты менеп алғас, үҙенә тиклемге ихтилал етәксеһе булған Көсөмдөң ҡәберенә барып, Ҡараһаҡал уның ташына башын терәй, тупрағын алып, аты өҫтөнә һирпә.

Ҡараһаҡал, ат менгәс,
Иҙел һыуын эсергән,
Көсөм ҡәберенә барып,
Ҡәбер ташын ҡосаҡлап,
Ташҡа йөҙөн тейҙергән;
Дошман уғы теймәһен тип,
Тупраҡ һипкән атына[1].

---

[1]БХИ. 5 том: Эпос. — 245-се б.

Бер юлы ике йоланың тулы тасуирланышын теркәп, эпосты ижад итеүселәр бер уҡ менән ике сәпкә бер юлы тейҙергән уҡсы кеүек эш иткән. Берҙән, хажи, Ҡөрьән-хафиз тигән дини дәрәжәләргә ирешкән кеше булараҡ, уның талаптарын теүәл үтәүсе итеп кенә түгел, мәжүсилек дәүеренән ҡалған инаныстарға хас йоланы бөтә ғәм алдында атҡарыуын да тасуирлап, Ҡараһаҡалдың халыҡҡа яҡынлығына ишара яһағандар.

Икенсенән, Ҡараһаҡалдың шул халыҡтың батшаға баш эймәҫ шәхестәренең юлын ҡыуасағын билдәләүгә ирешкәндәр: оло яу алдынан уның Көсөм (Күсем) ҡәберенең ташына йөҙ терәүе — азатлыҡ хәрәкәтенең үткән этабы юлбашсыһынан яңы яу башлығының фатиха һәм көрәш, яу эстафетаһы алыуына ишара яһай.

Ә инде яу атына яугир ҡәбер тупрағын һирпеү — үҙе бер ритуал. Ҡәбер тупрағы — тылсымлы тупраҡ. Был урында уға Ҡараһаҡал менгән яу атын бәлә-ҡазанан ҡурсалау, йән һаҡлау идеяһы һалынған.

Эпоста Ҡараһаҡал менән Ҡара аттың яуҙа ал бирмәүенә дан йырлана.

Эпостың «Ҡара ат» тигән версияһының мәғлүм ике вариантында ла Ҡара ат образы үҙәк урынды биләй. Заманында «Ҡараһаҡал һәм Ҡара ат» көйөнөң тарихы һәм йырҙары» тигән баш аҫтында шул версияның Мөхәмәтша Буранғолов баҫтырған варианты буйынса, Ҡара ат, ауға сыҡҡанда ла, ал бирмәй. Ҡасҡан аҡ кейекте күмәкләшеп ҡыуғанда, хатта тотош ғәскәрҙән дә бер генә ат та уға эйәрә алмай.

Ҡара ат — кеше яҙмышын хәл итеүсе изге зат образы булып кәүҙәләнә эпоста. 120 башҡорт батырын тотҡонлоҡтан ҡотҡара. Был аттың бер-береһенән айырылғыһыҙ шундай ике үҙенсәлеге бар. Бер яҡтан, япа-яңғыҙын 120 батырға торошло ат тип баһалау мөмкинлеген тыуҙырып, эпос уның бәҫен күтәрә. Икенсе яҡтан, был баһаға ул, аңлы кеше күҙлегенән ҡарағанда, алдында торған дилемманы, үҙ яҙмышына зыян бәрәбәренә, шул батырҙар файҙаһын күҙәтеп, дыуамалдарса хәл итеү аша өлгәшә. Ысынлап та, ҙур-ҙур бәйгеләрҙә гел еңеү яулаған генерал атын үтә ҡалһа, шул түрәнең шарты буйынса, әлеге 120 батыр тотҡондан ҡотола ала. Ә шуның бәрәбәренә үҙе шул генерал ҡулына күсергә тейеш була.

«Ҡара ат» эпосында ла, асылда, аттың үҙенә төбәп мөрәжәғәт итеп, йыр рәүешендә әйтелгән ҡеүәтләү һүҙенә ҡолаҡ һалыу һәләте иҫәпкә алынған. Сәсәндәр, йырауҙар — бөтә халыҡ бер уй, бер теләк менән: «Алға ғына ынтыл, ай, Ҡара атым!» — тип, «Йөҙ егерме батыр ҡаны өсөн», ялбарып-ялбарып, йән аямай, сабырға саҡырыуы була — Ҡара ат, «күҙҙәренә ҡан һауҙырып, ауыҙлығын тешләп, ҡолағын ҡайсылатып, атҡан уҡ төҫлө» алға ынтыла.

Ҡара аттың Әмәкәс ҡәберенә барыуы, Ҡараһаҡалдың Көсөм ҡәберенә зыярат ҡылғаны һымаҡ уҡ, яу алдынан игелекле

мыңдың үҙ эйәһенән фатиха алыуы һымаҡ ҡабул ителә. Ғөмүмән, 'Ҡара ат кеше йәнле, кеше аңлы мал итеп күрһәтелә эпоста. «Әбрәй батыр менән Аласабыр» эпосының бер вариантында әйтелеүенсә, Әбрәй батыр, яҡташтары һай-һаулап, ҡеүәтләп торһалар ғына билһынашта еңеп сыға[1]. Халыҡ йыр менән ҡеүәтләй башлағас ҡына, Ҡараттың алда барған генерал атын үтеүе шуға оҡшаш.

'Ҡарат яуҙа ла һынатмай, Ҡараһаҡалға тоғро дуҫ кеүек тә була. Ат, әлбиттә, үҙ ирке менән кермәй яу уртаһына: уны эйәһе шулай йөрөтә. Әммә Ҡараһаҡал хаҡындағы эпостың «'Ҡара ат» тигән варианты ат образын алға ҡуя һәм Ҡараһаҡал образына уның аша күсә. Ҡара аттың елé менән генә лә ағас йығҡмалы ат икәнен әйткәндән һуң:

Ҡараһаҡал ҡулынан
Йөҙ мең дошман ҡырылды, —

тип өҫтөндәге батырҙың уға торошло булыуына, Ҡара атҡа өрөбәр икәненә иғтибар иттерелә. Ҡырылған дошмандың һаны 'Ҡараһаҡалдың яугирлек мөмкинлектәрен гипербола алымы менән шаштырыу ғына, әлбиттә. Әммә шул шаштырыуҙа ла хәҡиҡәт бар. Ул хәҡиҡәт — уртаҡ һөҙөмтә, батырҙың Ҡара ат менән тиң бүлешер ҡаҙанышы.

«Ҡара ат» эпосында Ҡараһаҡал, батыр яу башлығы булыуҙан тыш, ғәҙел хөкөмдар ролендә лә сығыш яһай. Ҡушылған йомошто үтәү урынына, кәләш алып, туй яһап ятыусы яугирен «яуҙан ҡасҡан батыр», тип хурлауы, ундайҙы «һөйгән һылыу оулырмы?» тип, уның кәләшен намыҫландырыуы уҡ ана шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә лә инде. Ә инде Морат мулла менән Мәхмүт старшинаның Теләүкәй тигән егетте «'Көрьән»де утҡа ташлауҙа ғәйепләп:

«Зыяратҡа күммәйсә,
Эт-ҡошҡа ем итәйек!» —

тип, әҙер хөкөм ҡарарын тәҡдим иткәндә, Ҡараһаҡал ҡырҡыу мәлдә аҡыллыраҡ фекергә килеү һәләтен юғалтмаған кеше рәүешендә күҙ алдына баҫа. Уның үҙ аргументы бар. Беренсенән, ул «Ҡөрьән хаҡы... — Алла хаҡы» икәнен иҫкә төшөрөп, әгәр Теләүкәйҙең ғәйебе була ҡалһа:

«Алла өсөн ғәйепле
Гүрҙә бирер яуабын...

---

[1] БХИ / Текстарҙы асыҡлап, барлап төҙөүселәр: Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов, Миңлеғәле Нәҙерғолов; Аңлатмалар ҙа шуларҙыҡы; Инеш мәҡ. авт. ла шулар һәм Флүр Сибәғәтов. — Өфө: Китап, 2004. — 7-се том: Яҙма ҡисса һәм дастандар. — 594-се б.

Егет менән Алланың
Араһына инмәгеҙ!» —

тип, бәндәләргә иһә Алла эшенә ҡыҫылыу — яҙыҡ икәнен төшөндөрә.

Икенсенән,

«Ирмен тигән ирҙәр ҙә
Яңылышмай буламы? —

тип, яманлыҡ ҡылыу менән яңылышыу — бер түгел икәнен яҡшы аңлауын күрһәтә. Башҡаларға ла шуны төшөндөрә.

Өсөнсөнән, унын ысын аҡыл эйәләренә хас булғанынса, хистойғоно тыя алыуы, аҡылды алға ҡуя белеүе лә, иҫәп-хисап менән эш итеү һәләтенә эйә икәне лә асыла. Теләүкәй өҫтөнән Морат мулла менән Мәхмүт старшина тәҡдим иткән хөкөм ҡарарын инҡар итеүгә Ҡараһаҡал шуны ла дәлил итә: илдә оло яу булғанда, һәр ир заты иҫәптә.

Ҡараһаҡалдың айныҡ баш менән аныҡ фекер йөрөтөүе, шул арҡала ғәҙел хөкөм сығара белеүе Иҙеүкәйҙең зирәклек менән ғәҙел хөкөмдарлыҡ иткәнен хәтерләтә.

Эпостың

Ҡараһаҡал китһә лә,
Һүҙе ҡалды илендә.
Нисек яуға сабырға
Уралына буйлаған
Юлы ҡалды илендә, —

тигән һүҙҙәр менән тамамланыуы Ҡараһаҡал һалған шул юлды, тимәк, ул башлаған азатлыҡ яуын дауам иттереүселәр буласағына ышаныс тойғоһонон сағылышы ул. 1735—1736 йылдарҙағы ихтилалды башлап ебәреүсе Аҡайҙың — 1704—1711 йылдарҙағы башҡорт күтәрелеше етәксеһе Күсемдең улы, 1681—1684 йылдарҙағыһының юлбашсыларының береһе Түләкәй батырҙың ейәне булыуы ла, Аҡай яуынан аҙаҡ Ҡараһаҡал яуы күтәрелеүе, йәғни көрәш эстафетаһының күсә килеше — ул ышаныстың буш урында яралмауына бер дәлил ул.

## 12. Эпостарҙың үҙ-ара алыш-биреш иткәне

Башҡорт эпостарында бығаса шундай үҙенсәлек күҙәтелә: улар йә тема күсә килеше, йә образдар уртаҡлығы яғынан, йә осор, географик мөхит берлеге, йә фәндә клише тип аталған, эҫәрҙән эҫәргә күсеп йөрөүсе, уртаҡ урындары булыу арҡаһында (ә инде композиция, сюжет ҡороу, образ тыуҙырыу, ғөмүмән, поэтика хаҡында әйтеп тораһы ла түгел), бер-береһенә ылығышып, төрлө-төрлө төркөмдәр, циклдар хасил итә. Тема һәм образдар системаһындағы һәм урын уртаҡлыҡтары йәһә-

тенән, «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпосы бер-береһенә яҡын. Ошо уҡ принциптан сығып ҡарағанда, «Аҡбуҙат» һәм «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосы, алыш-биреш итешеп, бер-береһенә һыйынышып йәшәгән ике күршене хәтерләтә. Шул уҡ ваҡытта «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосы, төп ҡаһарманының эшмәкәрлегенә бәйле рәүештә «Ҡуңыр буға» эпосына барып олғашып, хатта үҙенсәлекле эпик трилогия хасил иткән. «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосына ҡайһы бер образдары (Шүлгән, Һәүбән), ваҡиға барған урыны (Шүлгән күле йәки Йылҡысыҡҡанкүл, Шүлгән мәмерйәһе), «затлы йылҡы малы күлдән сыҡҡан» мотивы тәңгәлендәге уртаҡлыҡҡа эйә булған «Аҡбуҙат» эпосы, ошо мотивтан тыш, «егет, һыу аҫтына төшөп, Һыуһылыуҙы кәләш итә» мотивына эйә булған «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын хәтерләткеләп ҡуя.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр тарафынан йә тик ҡараҡалпаҡтыҡы, йә тик татарҙыҡы, йә бары ноғайҙыҡы ғына тип иҫәпләнгән «Едиге» йәки «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тип атап йөрөтөлгән эпос, конкрет тарихи нигеҙле булыуына ҡарамаҫтан, идея кимәлендә, айырым осраҡтарҙа ҡайһы бер мотивтар, хатта образдар тәңгәлендә «Иҙел менән Яйыҡ», «Алып батыр», «Кәртә Мәргән» эпостары менән ауаздаш. Ә инде шул эпостың башҡорт версияһының Дим буйында йәшәгән Меңле ырыуы вәкилдәренән, уларҙың һөйләш үҙенсәлеген һаҡлап ҡына, Мөхәмәтша Буранғолов (1888—1966) тарафынан яҙып алынған вариант һәм ошо сәсән ҡатнашлығында Баязит Бикбай (1909—1968), Рәшит Ниғмәти (1909—1959), Әбүбәкер Усманов (1910—1982) төҙөгән мәғлүм иң тулы йыйылма тексында хатта башҡорттоң «Урал батыр», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡбуҙат» ише иң боронғо мифологик эпостарын хәтергә төшөрөрлөк урындар осрай. Иҙеүкәй батырҙы Дәмми бейгә ҡаршы яуға оҙатыр алдынан үҙенең зиһененә ил аҡылын туплаған Һабрау сәсән уға Урал батырҙың Алмас ҡылысы менән Аҡбуҙатын алырға тәҡдим итә. Ә улар — мифик геройҙың мифик атрибуттары. Ошо атрибуттарға конкрет тарихи осорҙа йәшәгән тарихи шәхесте прототип итеп, уның образлы күсермәһен һынландырыусы Иҙеүкәй ҡулына шул атрибуттар күсеүен теләү — метафорик кинәйәләү юлы менән Урал батыр рухына тоғро ҡалырға, ул башлаған изге эште дауам итергә саҡырыу, әлбиттә. Әммә поэмала ул метафора саҡырыу булып ҡына ҡалмай, һүҙмәһүҙ ғәмәлләштерелә. Ил хәлен белергә юлға сығып киткән был йәш батырға осраған аҡҡош уға Урал батыр бабаһының кәләше Һомай заты булып күренә. Шуға ла, йола буйынса, аҡҡошҡа тейергә ярамағанын иҫенә төшөрә егет. Икенсе күлдә әхирәттәре менән бергә ҡош тунлы Һыуһылыуҙы осратыуы, унан Урал батырҙың Алмас ҡылысын алып, Аҡбуҙатын менеп, яҡты донъяға сығыуы «Аҡбуҙат» эпосының геройы Һәүбәндең башынан үткәндең ҡабатланышы кеүек ҡабул ителә.

Шул уҡ ваҡытта «Иҙеүкәй менән Мораҙым»дың был вариантында «Аҡбуҙат»тан килгән мотивтар «Заятүләк менән Һыуһылыу»ға хастары менән аралашып киткеләгән осраҡтар ҙа бар. Иҙеүкәйҙең Урал батырҙан ҡалған Толпар менән ҡылысты алырға теләүе «Аҡбуҙат» эпосының геройы Һәүбәндең һыу аҫты батшалығында ошондай уҡ ынтылышына тап килһә лә, төшөнә ингән изге зат Хызыр Ильястың кәңәшен тотҡанға ғына, шул маҡсатына ирешә алыуы иһә йәнә үҙенең «Заятүләк менән Һыуһылыу» иртәгенән икәнен әллә ҡайҙан ҡысҡырып әйтеп торған һымаҡ.

Фольклор поэтикаһы менән хәбәрҙар булған һәр кемгә шундай хәҡиҡәт мәғлүмдер, моғайын. Әгәр ниндәйҙер әҫәрҙән, мифтан (халыҡтың ырым-инаныстарынан, тотемистик, анимистик ҡараштарынан) таныш персонаждар, әйбер, деталдәр икенсе бер әҫәрҙә телгә алына икән, уларҙы, ғәҙәттә, яңынан тасуирлап тормаҫҡа тырышалар: йәнәһе, мәғлүм хаҡында тағы мәғлүмәт биреүгә ихтыяж юҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, тыңлаусының улар хаҡында мәғлүмәтле булыуҙарына, тимәк, шул персонаж, әйбер, деталдәрҙе телгә алыу уҡ шуларҙың образын, сюжетын, йөкмәткеһен үҙенән-үҙе тулы итеп күҙалларға мөмкинлек биреүе ихтимал тигәнгә иҫәп тотола.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының йыйылма тексын төҙөүсе дүрт яҙыусы фольклор поэтикаһына хас ошо эске ҡанунды (закосылыҡты) бик оҫта файҙаланыуға ирешкән. Эпостың Уралды маҡтауға бағышланған «Беренсе ҡобайыр» тип бирелгән өлөшөндә үк, Иҙеүкәйгә вәғәз уҡығанында, Һабрау сәсән Урал батыр рухына тоғро ҡалып, ул башлаған эште артабан дауам итеү кәрәк икәнен кинәйәләп: «Мифик батыр Ер өҫтөн тереклек быуын-быуын алмашына-алмашына йәшәрлек хәлгә килтереү менән шөғөлләнгән, һинең алда йәмғиәтте камиллаштырыу бурысы тора», — тип әйткәндәй була ла шуның менән генә сикләнмәй, уның йөҙөнә туранан-тура Урал батыр урынына алмашҡа килгән батырҙы күрергә теләүен дә аңғарта.

Әле Уралдың Аҡбуҙаты, ҡылысы менән Иҙеүкәй генә түгел, тыңлаусы ла осрашмаған, улар әле ғәмәлдә күрһәтелмәгән дә, әммә баяғы ҡанун буйынса, сәсәндәр уның «Урал батыр»ҙы белеүенә иҫәп тота. Һәм, ысынлап та, ул әҫәр хаҡында мәғлүмәте булыусының күҙ алдына батырҙың шул атрибуттары тулы образдар булып килеп баҫа ла ҡуя.

Бишенсе ҡобайырҙа Иҙеүкәйҙең һыу аҫты батшалығына төшөп, эйәренә Алмас ҡылыс аҫылған Аҡбуҙатты ер өҫтөнә алып ҡайтыу эпизодының һүрәтләнеше менән танышыу шул тәүге тойғоно көсәйтә, йәғни, үҙҙәрен күрмәҫ элек үк, уларҙың хыялда тыуған образын йәнләндерә һәм тағы тулыландыра ғына.

Ер өҫтө тормошо һүрәтләнгәндә иһә, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосындағы бер мотив, атап әйткәндә, «бейҙең

(ҡандың) йәш ҡатынынан тыуған кинйә улын өлкән ҡатындан тыуған ағалары эҙәрләй» мотивы, ҡабатлана. Бында «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» эпосындағы Яйыҡтың аҙашының өлкән бисәһенән тыуған Әлшәй, Аһылай (Аслай), Татлыбай, Ҡайып, Ҡармыш, Сураҡай, Сурай, Идристәрҙең барыһының да, бер яҡлы булып, «Йәш бисәнән тыуғанға, Туҡ батырҙы ситләтеп», рәнйетеүҙәре хаҡында бәйән итеlә. Бының сәбәбе Туҡтың «йәш бисәнән» тыуыуында ғына ла түгел, әлбиттә. Конфликт ғаилә кимәле менән генә сикләнмәй, социаль төҫ ала. Этнографик яҡтан ҡарағанда, ыҙғыш шуның менән дә ҡатмарлаштырыла. Туҡ ҡаҙаҡ ҡыҙынан, тимәк, килмешәктән тыуған. Ә килмешәкте матриархат йолаһы ла, патриархаттыҡы ла өнәмәгән. Туҡтың кинйә ул булыуы иһә — сүп өҫтөнә сүмәлә булған: сөнки, майорат йолаһы буйынса, атай үлһә, нигеҙ, мал-монаят кинйә ул ҡулына күсергә тейеш[1].

Тарихи ерлекле эпос ваҡиғаларын бәйән иткәндә, тигеҙ юлдағы уйҡыл-уйҡыл урынға йыйылған күләүек һымаҡ, мифологик эпос мотивтарының осрап тороуы тотош мифик донъя күленә батырып-батырып алғандай итһә лә, тыңлаусыны реаль ысынбарлыҡтан айырмай. Бары мифологияға нигеҙләнеп хасил булған жанрҙың тарихи нигеҙле әҫәрен дә, традиция буйынса, романтик пафослы эпос итеп ҡабул итеүгә күндерә. Икенсе яҡтан, бында Иҙеүкәйҙе мифологик эпос геройҙары кимәленә ҡуйырға, тимәк, уның тарихи эшмәкәрлегенең әһәмиәтенә баҫым яһарға теләү ҙә сағыла булыр. Иҙеүкәйҙең «бер ыңғай 80 бот бойҙай күтәреп йөрөй» алыуы: «түбәһендәге соҡорға — 40 бот, ике яурынының башына 20-шәр бот» һыйыуы хаҡындағы мәғлүмәт бирелеүе лә[2] шул ниәт-маҡсат (замысел) менән аңлатыла.

Донъя эпосы тәжрибәһенә күҙ һалһаҡ, шул иғтибарға ташланыр. Йыш ҡына эпос геройының донъяға килмеше, башҡорттоң «Алып батыр», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпостарындағы кеүегерәк, ғәжәп хәл, мөғжизә кимәленә күтәреп һүрәтләнә. Ҡырғыҙҙың «Манас» тигән мәшһүр дастанынан да ошо әҫәрҙең геройы буласаҡ Манасҡа ауырға ҡалып, өс ай үтеүгә әсәһе юлбарыҫ йөрәге ашарға теләй. Ә инде шул бала тыуымға килгәс, тулғағы һигеҙ көн бара. Улай ғына ла түгел, күрше-күләндән йыйылған кендек инәләре күмәкләшеп уны һөйрәп сығарғансы, ҡулдары тала («У соседок, тянувших дитя, Онемели руки тогда»); Сыңғыҙ хан һымаҡ уҡ, усына ҡан төйөрөмөн йомған килеш тыуа; кендек инәһе, аҡ биләүгә һалып, биләй башлағас, ғәйрәтле ир-

[1] БХИ. 5-се том: Эпос. — 175-се б.

[2] Бикбулатов Н. В. Архаические формы наследования. Левират минорат и майорат // Бикбулатов Н. В., Фатыхова Ф. Ф. Семейный быт башкир. XIX—XX вв. М.: Наука, 1991. — С. 139—155.

уҙаман һымаҡ, ҡулдарын тартып ала; күтәрәйек тиһәләр, унып ун биш йәшлек үҫмер хәтлем ауыр икәнен беләләр[1].

Әллә ҡайҙа китмәйенсә, үҙебеҙҙең «Урал батыр» тигән мәшһүр эпосыбыҙға иғтибар итәйек. Уның геройы буласаҡ ир баланың донъяға нисегерәк килеүе хаҡында беҙ башта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт ала алмайбыҙ. Сөнки ул да, уның Шүлгән ағаһы ла баштан уҡ күҙ алдына үҫмер дәүеренә инеп барыусы малайҙар рәүешендә килеп баҫа. Уралдың донъяға килеүе хаҡында бары Шүлгәндең Әзрәҡә иленә килеүен бәйән иткән бүлектән генә мәғлүмәт алабыҙ. Уралдан ҡоттары алынған Ҡәһҡәһә менән Әзрәҡәгә бер ҡарт дейеү бына ниндәй хәбәр еткерә:

«Анау саҡта, ай, батшам,
Бер йәш бала тыуғанда,
Аның тауышы килгәндә,
Күктә осҡан дейеүҙәр
Бары ҡолап төшкәйне.
Аны урлап алырға,
Үтереп, юҡ ҡылырға
Барған дейеү, ендәрҙең,
Бала текләп ҡарағас,
Тоторға тип, уҡталғас,
Барған бере ҡурҡыуҙан,
Йөрәге ҡубып үлгәйне.
Шу баланың сыҡҡанын,
Илгә яҡын килгәнен,
«Алам» тигән уйының
Йәншишмәгә төшкәнен —
Шишмә, ҡурҡып, ҡайнауын
(Кемдер әйтеп уҙғайны),
Ярты һыуы кәмегән,
Тиеп хәбәр алғайның —
Ҙур ҡайғыға ҡалғайның...»[2]

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы хаҡында һүҙ барғанда, ни өсөн, араға төшкәндәй, «Урал батыр»ҙың донъяға мөғжизәүи тыуымы мәсьәләһенә туҡталдыҡ һуң әле? Хикмәт шунда, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының варианттарында геройҙың баһадир булырын тыуымының серле булыуын тасуирлау аша, әйтеп үтелгәненсә, көнәлгәре аңғартырға тырышыу һиҙелә.

Эпостың С. Мирасов — И. В. Салтыков варианты буйынса, Иҙеүкәйҙең әсәһе һыу ҡыҙы булыуы ғына етмәгән, атаһы ла уның ҡәҙимге әҙәми зат түгел, ә төрки донъяһы өсөн бәйғәмбәр

---

[1] Манас: Эпизоды киргизского эпоса. — М.: Госиздат худ. лит., 1960. — С. 26.

[2] БХИ. 3-сө том: Эпос. — 67—68-се б.

ырыуәһендәге Ғәзиз бабанан тыуған, шундай уҡ дәрәжәләге шәге кеше. Ҡаҙаҡтың мәшһүр мәғрифәтсеһе Соҡан Вәлиханов үҙенең атаһы менән бергәләшеп өс варианттан ойошторған «Идукә бей» тигән йыйылма текста яңы тыуған ир баланың киләсәктә донъя батыры булыры хатта өслөтә мөғжизәүи прогнозлана. Беренсенән, Идукә бейгә атай булаһы Баба Туҡды Чачлы Ғәзиз ун биш йәшендә әүлиә тип танылған Баба Үмәрҙең улы булған. Икенсенән, Баба Туҡды Чачлы Ғәзизҙең ғүмыпы — үҙе бер мөғжизә: Баба Үмәр бер ҡыҙға теклән ҡараған икән, шунан теге ауырға ҡалып, ир бала таба. Өсөнсөнән, егерме бишендә әүлиәлек сифатына ирешкән Баба Туҡды Чачлы Ғәзиз, дарья яғаһында алтын сәсен тарап ултырған ҡыҙ артынан һыу аҫты донъяһына сумып, уның менән никахлаша. Идукә би ана шул никахтан донъяға килә[1].

Тарихи эпос булған «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да башҡа тарихи эпостан килгән башланғыстар ҙа сағылған. Мәғлүм булыуынса, «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосында ырыу-ара, халыҡ-ара ыҙғыш шелтәләнә. Был мотив «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосына ла хас: «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосында үҙ-ара бысаҡ-ҡа бысаҡ килгән ике ырыу башлығы Ҡараҡоломбәт менән Бабсаҡ ошо күҙлектән телгә алына, «Ҡарас менән Аҡша» эпосы башҡорт менән ҡаҙаҡтың ҡарымталашыуын шелтәләй. «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да ошо эпосты хәтерләтеүсе деталь дә бар. Унда Иҙеүкәй ауыҙынан ошо эпостан күскән «ҡорал теле» (ҡоралға теләк) әйттерелә. Шул ике эпоста һүрәтләнгән ырыу-ара йә халыҡ-ара ҡарымта ваҡиғаларын бәйән итеп тормай ғына, айырым персонаждарын йә деталдәрен телгә алыу менән генә сикләнгән сүрәттә лә, М. Буранғолов та, эпостың йыйылма тексын төҙөүселәр ҙә, «аңлағанға — ишара» принцибы буйынса, Иҙеүкәйҙең тарихи үткәндәр менән хәбәрҙарлығын, шул үткәндәрҙән һабаҡ алыуға һәләтле булыуын аңғартырға теләгән буғай.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының М. Буранғолов варианты менән тулы йыйылма вариантында бүтән эпик ҡомартҡыларҙың икенсе принциптан файҙаланышына ла миҫалдар бар. Тәүгеһенең өсөнсө, дүртенсе, бишенсе бүлектәрендә бәйән ителеүенсә, Һабрау тарафынан зирәклектә, ниәтенең ныҡлығына һынау үтеп (әйткәндәй, ошо фактта боронғо инициация йолаһы төҫмөрләнә), унан кәңәш алып, халыҡты яфалаған Шәғәле, Дәмми, Ыршаҡ бейҙәр менән алышып, Иҙеүкәй уларҙы

[1] Сказание об Едигее и Токтамыше. ЗИРГО. Приложение к тому XXIX Киргизский текст по рукописи, принадлежавшей Ч. Ч. Валиханову / Издал проф. П. М. Мелиоранский. СПб., 1905. «Идыге» исемендә урыҫсаға Ч. Вәлихановтың үҙенең тәржемәһе // ЗИРГО. По отделению этнографии, том XXIX: Сочинения Чокана Чингисовича Валиханова / Изданы под редакцией Н. И. Веселовского. — СПб., 1904. — С. 233—264.

еңә. Бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән булырға Иҙеүкәйгә вәғәҙә биргән Тора бей һүҙендә тормай: Иҙеүкәйҙең дошмандарына сер сисә һәм, хыянатсы булараҡ, фашлана.

XXIII ҡобайырҙа Яйыҡ батырҙың өлкән ҡатынынан тыуған һигеҙ уландың, йәш ҡаҙаҡтан алған йәш ҡатынынан тыуған Туҡ атлы кинйәһен эҙәрләүҙәре хаҡында һүҙ бара.

Заманында был эпизодтар тулы ҡанлы үҙ аллы эпик ҡомартҡының фабулаһын тәшкил иткәнгә оҡшай. Ошо әҫәрҙең беҙгә килеп еткән «Илекәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» тигән вариантының тәүге өлөшө бер ни тиклем этнонимик, этногенетик һәм топонимик риүәйәттәрҙән туҡылған кеүек тойола.

Ваҡиғалылыҡ булмаһа ла, икенсе бүлектә тотош бер эпик ваҡиғаны хәрәкәткә килтерерлек конфликтты телгә алып һәм тап шул ерлектә ошо эпоста тасуирланған төбәктә тыуып, шунда ереккән «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын хәтерләргә мәжбүр итә. Бында быға тиклем телгә алынған этнографик нигеҙле конфликт — Яйыҡ атлы батырҙың бер әсәнән тыуған Әлшәй, Асылай, Татлыбай, Ҡайып, Ҡармыш, Сурай, Сураҡай, Иҙрис тигән һигеҙ улының, бер яҡлы булып, ҡаҙаҡ сығышлы йәш бисәһенән тыуған Туҡ тигән кинйә улын эҙәрләүе, шул эҙәрләүҙең оло яуға әүерелеүе әйтеп кенә үтелә. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, «Иҙел менән Яйыҡ» эпосының үҙәген биләгән идея ошо кескенә бүлеккә лә һыйған. Ул — Урал батыр васыятына тоғролоҡ, берҙәмлек һәм ярҙамсыллыҡ.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының М. Буранғолов варианты менән дүрт яҙыусы төҙөгән йыйылма тексында Һабрау сәсән ауыҙынан шундай һүҙҙәр әйттерелә:

Сауылдан ҡалған төпһәнән
Үрсеп сыҡҡан ҡыуғындай,
Байлыҡ менән бейлек тә
Атаһынан балаға
Ҡала килә электән.

Тәүге ике юлға икенсе төрлө сағыштырыуҙар ҙа килтерергә мөмкин. «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» эпосы ла быға ерлек бирә. Илеүкәй бей үҙ-ара яу асыусыларҙы килештерһә лә, Туҡтың ағаларының кенә ҡыуыу ихтималын иҫәпкә алмаған булып сыға. Ана шул кенә «Сауылдан ҡалған төпһәнән үрсеп сыҡҡан ҡыуғындай» була ла инде.

«Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар» эпосы «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының геройҙары хәрәкәт иткән арауыҡты бөтә тулылығында конкрет географик ориентирҙары менән сиктәнсиккәсә аныҡ сағылдыра. Уның геройҙары иңе-буйы Урал — Яйыҡ — Иҙел (Ағиҙел) — Дим башы — Туҡ — Урта Азия араһындағы ареалда хәрәкәт итә. Ә инде шул арауыҡ, эске ориен-

торҙары Нарыҫтау, Өршәк йылғаһы, Асылыкүл, Салҡан тауы, Ним һәм уның буйындағы башҡорт ауылдары менән билдәләнеп, конкретлаштырыла.

Шулай итеп, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында геройҙар хәрәкәт иткән арауыҡ Евразия сиктәрен иңләүе менән ярайһы киң тойолһа ла, Урал батырҙың эшмәкәрлеге иңләгәненән сағыштырғыһыҙ тар. Әммә, дөйөм алғанда, тарихи нигеҙле «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында беҙ мифологик нигеҙле эпос геройы Урал батыр иңләгән арауыҡтың кескәй масштаблы проекцияһы менән осрашҡандай булабыҙ.

Ҡайһы бер эпик ҡомартҡыларыбыҙҙан күренеүенсә, строфалары, тотош теҙемде хасил итеүсе ҡобайыр киҫәктәре һәм ҡатта үҙ аллы әҫәр хәлендә йәшәүгә һәләтле ҡобайырҙар бер ҡорҙан икенсеһенә күсеп йөрөүсән. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында ошор айғыры ауыҙынан әйттерелеп:

Бөгәсә мин төш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем, —

тип башланған строфа һәм уға: «Бөгәсә һин төш күрһәң» — тип башланған яуап һүҙҙәре «Йософ менән Зөләйха» дастанында, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында ҡабатлана. Әйтелештәре һүҙмә-һүҙ тиерлек тура килһә лә, уларға төрлө әҫәрҙә төрлө мәғәнә һалына. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында өйөр башы, алда торған ауыр һынау алдынан, ярандарының (өйөрҙәге бейәләренең) ышаныслымы-түгелме икәнен белеү маҡсатында, һынамаҡ өсөн, төш һөйләй — кире яуап ала. Йәнәһе, тегеләре: «Үҙ ҡаныңа, ҡарт убыр!» — тип яуап бирә. «Йософ менән Зөләйха»ла ил башы «ысынлап та» төш күрә. Уны дөрөҫ юратыу — уның өсөн йә «үлем, йә йәшәү» дилеммаһын сисеү. Уны Йософтан юратыу һигеҙ муллыҡ йылында уңған ашлыҡты һаҡлап, шуның артынса килгән һигеҙ йыллыҡ йотта халҡын, илен ҡырғындан һаҡлап алып ҡалырға форсат бирә. «Иҙеүкәй менән Мораҙым»да клишегә әүерелгән шул уҡ төш ханбикә тарафынан Иҙеүкәйҙе хандан эҙәрләтеү маҡсатында «ижади үҙләштерелә».

Халҡыбыҙ ижадында сюжетһыҙ ҡобайырҙар рәүешендә үҙ аллы йәшәгән әҫәрҙәр күп. Уларҙың берәүҙәре («Ай, Уралым, Уралым», «Уралтау») тыуған-торған ерҙе данлаһа, икенселәре аҡыл һынашыу маҡсатында әйтелгән оҙон-оҙон йомаҡтарҙан тора («Ике сәсән», «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне», «Йомаҡ»), өсөнсөләре нәсихәти йөкмәткеле булыуҙары («Бейек тауҙың үлгәне», «Бер тигәс тә, ни яман?») менән айырылып тора. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының Мөхәмәтша Буранғолов имзаһы менән теркәлгән варианттарында шул таныш теҙемдәр күп осрай.

Мәҫәлән, әҫәрҙең икенсе бүлегендә Туҡтамыш хандың Шәгәле атлы илсеһе килеп, биш ырыуҙан биш батыр алып китергә булғас, «Биш ырыуҙың биш иң ҡарты Һабрау тигән дан йырсы» ауыҙынан «Ай, Уралым, Уралым» ҡобайырының стилләштерелгән варианты әйттерелһә, эпостың өмә менән төҙөлгән тулы йыйылма теҡсы эпиграф рәүешендә бирелгән «Бейек тауҙың үлгәне» һәм «Ишет быны ҡартыңдан...» тигән үҙ аллы ике ҡобайырҙың контаминацияһынан башлана.

М. Буранғолов Һабрауҙан әйттергән «Ай Уралым, Уралым» ҡобайырының йөкмәткеһе менән үлсәмен генә һаҡлаған, аратирә:

> «Азаматтар ултырып,
> Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡороп,
> Башында уйнар тау ине»

рәүешендәге тапкилештәр бар. (Был өс юллыҡтың һуңғы юлы «Уйнап көлгән Уралтау» тигән үҙ аллы ҡобайырҙа һаҡланған.)[1]

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының беҙгә мәғлүм бүтән варианттарына Мөхәмәтша Буранғолов ҡулы аша үткән һәм эпостың ошо сәсән ҡатнашлығында йәмғеһе дүрт яҙыусы төҙөгән тулы йыйылма теҡсында осраған традицион ҡобайыр строфалары хас түгел. Шуға күрә лә эпостың һуңғы ике вариантына таныш ҡобайыр өҙөктәре, улар М. Буранғоловтың тырышлығы менән индерелгән, тип әйтергә нигеҙ бирә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» әҫәрен XX быуаттың 30-сы йылдары ахырында Башҡортостанда ла, Татарстанда ла, Урта Азияла һәм Ҡаҙағстанда ла үтә ихласлыҡ һәм рухи күтәренкелек менән өйрәнергә тотоноуҙары, хатта уның юбилейы хаҡында һүҙ алып барыуҙар, уны ташҡа баҫтырып сығарыуҙар үҙҙәре үк факт булараҡ, немец фашистары СССР тигән илебеҙгә баҫып инер саҡта совет кешеләрен берҙәмлеккә саҡырыу мәғәнәһенә эйә булған, тип әйтә алабыҙ.

* * *

Шулай итеп, бында күҙҙән кисерелгән ҡомартҡылар хронологик яҡтан да, тематика йәһәтенән дә, художестволы камиллығы кимәленән дә эпостың төрлө-төрлө формала йәшәүен дәлилләүсе миҫалдарҙан торһа ла, уларҙың барыһын да бербереһенә яҡынайтыусы уртаҡ сифаттары бар. Томды төҙөгәндә бына шул иҫәпкә алынды ла инде. Ә ул уртаҡ сифаттарҙың иң

---

[1]БХИ. 5-се том: Эпос. — 42-се б.; БХИ / Төҙ., инеш мәҡәлә, аңлатмалар, һүҙлек авторы Н. Т. Зарипов / Яуаплы мөхәрр. Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1981. — Эпос. 3-сө кит. — 155-се б.

эсһиме идея яҡынлығы, идея уртаҡлығы. Алпамыша батыр та, Иҙеүкәй менән Мораҙым да, Кәртә Мәргән дә, Ҡараһаҡал та ил йорт ҡороу, шунда имен йәшәү теләге менән яна. Ошо ге ныкка ҡаршы төшөүселәр була ҡалһа иһә, ҡулға ҡорал алып, яуға сыға. Шуға күрә лә улар күмәгеһе бергә быуын-быуын Ғалған ил тойғоһо тәрбиәләүгә булышҡан. Ошо йәһәттән бөгөнгө көндә лә был әҫәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте ҙур.

Улар күмәгеһе бергә ил ирке өсөн көрәшкә әҙер торорға, дауҙар сафлығын ҡайғыртырға, араға ингән ят бауыр затлы нәмәнәк һәм һатлыҡтарҙы фаш итергә лә өйрәтә. Ошо юҫыҡтан ҡарағанда, «Ҡараһаҡал» эпосының ғеройы үҙе башлаған азатлыҡ хәрәкәтенең ниндәй осраҡта еңелеп ҡалырын көн элгәре тоҫмаллағандай, үҙенә тиклемге күтәрелештәрҙең ни өсөн еңелһеҙ тамамланыуын анализлағандай:

«Бығаса уңмаҫ яуҙарҙы,
Бер Хоҙайҙан, тимәгеҙ!
Яуҙы, илде муйырған —
Араға дошман ингәне,
Илде ятҡа биргәне;
Бер туғандай, таҡ булып,
Яуға атын менгәндең
Йөрәген дошман бүлгәне;
Сер һөйләгән дуҫтарың,
Түшәктәге һөйгәнең,
Бер имсәктәш туғаның
Ситкә серең биргәне.
Илде дошман алғаны —
Мөлдөрәгән күҙ менән,
Алданылған иш менән,
Япраҡ ҡойған тирәктәй,
Гөлө төшкән һабаҡтай,
Батырҙың яңғыҙ ҡалғаны...»[1] —

тип әйткәне фәһемле.

Эле һүҙ барған эпоста азатлыҡ өсөн көрәштә халыҡтар дуҫлығы айырыуса мөһим әһәмиәткә эйә икәне хаҡында уйландырырлыҡ бик тә фәһемле фекерҙәр ҙә әйтелә, тарихи факттарҙан миҫалдар ҙа килтерелә. Халыҡтар дуҫлығы темаһы эпоста ҡоба (дан) йырлау аша ғына түгел, халыҡтар араһында бындай мөнәсәбәт урынлашыуы хакимдар өсөн ниндәй хәүеф тыуҙырыуын һәм уларҙың ниндәй контрсара күреүҙәре аша ла аса. Сираттағы башҡорт ихтилалы етәксеһе Аҡай батыр рус Антон

[1] БХИ. 5-се том: Эпос. — 242-се б.

менән дуҫ булып, бергәләп баярына, байына, тарханына ҡаршы көрәшә. Аҡай үлеп, Антон ҡаҫҡыға әүерелеп, мәмерйәлә көн күрә башлағас, баяры, байы, тарханы уны эҙәрләй. Йәғни синфи маҡсатта ирек һөйөүселәр үҙ сафында милләт айырмаған һымаҡ уҡ, уларға ҡаршы көстәр ҙә социаль хәле буйынса бер маҡсатты көҫәй. Бынныһы — бер булһа, эпоста халыҡтарҙың берәүҙәрен икенселәренә ҡаршы ҡуйыу юлы менән уларҙы үҙ-ара дошманлаштырырға тырышыуҙы фаш итеү рәүешендә лә раҫлана халыҡтар дуҫлығы идеяһы.

Хакимиәт халыҡтар дуҫлығына ҡаршы алып барған сәйәсәтте фашлау ҙа — халыҡтарҙы уяу булырға, берҙәмлеккә, дуҫлыҡҡа саҡырыу ул.

Шулай итеп, ошо кимәлдә лә мифик дәүерҙә мифик затлы Урал батыр башлаған изге эштең тарихи дәүерҙә лә уңышлы дауам ителеше асыҡлана.

*Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ.*



## 1. ИҘЕЛ МЕНӘН ЯЙЫҠ

### 1

Борон-борон заманда
Урал тауы буйында,
Тау-урмандар ҡуйынында,
Күл-йылғалар тирәләй
Тирмә ҡороп, мал бағып,
Солоҡ соҡоп бал алып,
Һыуынан тотоп балыҡ,
Иркендә, байманлыҡта
Йәшәп ятҡан, ти, халыҡ:
Урал батыр улдары —
[Атаһынан ҡот алып,
Инәһенән һөт алып:
Ҡатил ейәне — Яйыҡ
Юл ярһа ла янтайып,
Яңғыҙ үҙе бер яры,
Алыҫ китмәгән ары;
Гөлстандан тыуғаны,
Ата юлын ҡыуғаны,
Нөгөш батыр тигәне,
Яйыҡтан һуң киткәне;
Һомайҙан тыуған Иҙел,
Йөрөп-йөрөп, ил гиҙеп,
Һулығанды тергеҙеп,
Ике ағайға берегеп;
Шүлгән менән Айһылыу
Донъяға килтергән ул —
Һаҡмар батыр тигән ул
Иш янына ҡуш булып,

Улар менән дуҫ булып;
Үҙҙе-үҙе* йоп булып],
Үҙ алдына туп булып,
Йөрөп, ер һайлап тороп,
Үҙ алдына ил ҡороп,
Биләм биләп ултырған,
Биләмәһен тултырған,
Түл артынан түл йәйеп,
Күбәйгәндән-күбәйеп,
Бөтә халыҡ эркелеп,
Зыу килешеп, бер килеп,
Ҙур йылғалар буйында
Бик ишәйә башлағас;
Мал-тыуар бик түлләнгәс,
Мал иҫәбен белмәгәс;
Йәшәргә ер аҙ ҡалған,
Көтөр ерҙәр тарайған,
Һунар-биләм аҙайған —
Шундай бер заман тыуған.

Ил-йорт башы бер булып
[Шул дүрт ағай] йыйылып,
Дүртеһе бер ҡор булып,
Һүҙҙе башлап бик ҙурҙан,
Бик оҙаҡ кәңәш ҡорған.
Уйҙары булғас уртаҡ,
Ҡарар ҡылғандар шул саҡ:
Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар ҙа,
Иҙелле Иҙел һымаҡ,
Булған, ти, ҡылыс алмаҡ,
Алмас ҡылыс мән сапмаҡ,
Ташты ярып, һыу тапмаҡ —
Булған, ти, йылға ярмаҡ,
Урал батырға арнап.

Иҙел һымаҡ былар ҙа
Алмаш-тилмәш, берәмләп,
[Түбәлә ирәмәлләп],
Булат ҡылыс мән сапҡан —
[Ана шул ерҙән аҡҡан
Дүрт тарафҡа] дүрт йылға
[Уңға, һулға һәм алға].

Халыҡты килтергәндәр,
Дүрт ил-йортҡа бүлгәндәр:
Дүрт йылғаны буйлатып,
Торор торлаҡ ҡорғандар.
Дүрт батырҙың аттары —

Иҙел, Нөгөш, Һаҡмары,
Яйығы — ағалары
Дүрт йылғаға ат булып,
Онотолмаҫ зат булып,
Атанан күскән — улға... —
Быуындарҙан — быуынға.

2

Ҡырғын — нимә, белмәйсә,
Яу яфаһын күрмәйсә,
Маҙрап йәшәп ятҡанда,
Тора-бара бер заман,
Ҡарты, йәше, уҙаман
Урал тауы яғынан
Төрлө имеш-мимештәр,
Хәүеф йәнә хәтәрҙәр
Ишеткеләй башлаған:
Имеш, тау-урмандарҙа
Әллә ниндәй януарҙар,
Дейеүҙәр, ялмауыҙҙар,
[Ҡайҙан пәйҙә булғандар?]
Бер саҡ килеп тулғандар.
Мал-тыуарҙы тамаҡлап,
Көтөү ерен тапалап,
Үлән үҫтермәй, ҡаҡлап,
Бар ҡәүемде яфалап,
Көн-төн ил-йорт маҙалап,
Йөрөп ята, ти, икән.

Шул хәбәр килеп еткән.
Уны Иҙел ишеткән,
Ишетеп, тиҙ эш иткән.
Уйға ҡалған Иҙел ир,
Иҫенә алып Яйыҡты
Буйға һалған Иҙел ир:
— Бөгәсә бер төш күрҙем,
Төшөмдә бер шеш күрҙем —
Шеш башында ит күрҙем,
Юратманым ни күрҙем,
Уға төшөндөм үҙем —
Шул хаҡта әйтер һүҙем:
Урал атлы атамдың
Беҙгә әйткән ҡасандыр
Иҫкәртеүе ине был,
Нишләй был саҡ йүнле ул?

Яйыҡ батыр [ағамды
Нөгөш менән Һаҡмарҙы]
Хәтеремә төшөрҙөм, —
Тигән, ти, ул борсолоп.

Атаһы васыятын
Хәтеренән үткәргән,
Ятлап алған һүҙҙәрен
Йөрәгенән үткәргән:
«Уландарым, тыңлағыҙ,
Васыятым һеҙгә әйтәм:
Ир-арыҫлан булһаң да,
Батыр беләкле тыуһаң да,
Илдә йөрөп, ил күрмәй,
Тубығыңдан ҡан кисмәй,
Йөрәгең батыр булалмаҫ.
Яуызға юлдаш булмағыҙ,
Кәңәшһеҙ эш ҡылмағыҙ.
Уландарым, һеҙгә әйтәм:
Мин әрсегән ерҙәрҙә
Кешегә байман табығыҙ;
Яуҙа булһа, баш булып,
Кешегә ил ҡороғоҙ,
Данлы батыр булығыҙ,
Олоно оло итегеҙ,
Кәңәш алып йөрөгөҙ;
Кесене кесе итегеҙ,
Кәңәш биреп йөрөгөҙ!»
[Ошо һүҙен Уралдың,
Барлағандай ҡоралын],
Ҡабат-ҡабат ҡабатлап,
Уйға батты, ти, Иҙел,
Ни үтәлгән, ние юҡ —
Хисап итте, ти, Иҙел:
— Ил-йорт ҡороп төпләнеп,
[Үҙҙе-үҙе йөпләнеп,
Атам һүҙҙәрен отоп,
Уның кәңәшен тотоп],
Байман йәшәне тоҡом,
Иркендә булды буйтым.
Олоно оло итте —
Кәңәш ала йөрөнө,
Кесене кесе итте —
Кәңәш бирә йөрөнө.
Яуызға юлдаш булманы,
Батырға ҡулдаш булды.

Йөрөргә яй сыҡманы,
Үҙ ил-көнө — көн ине.
Яулашып, яу сапманы,
Ил-көндәре йүн ине.
Ҡан көҫәп, ҡан кисәргә
Сәбәбе юҡ әлегә.
[Дау күтәреп даулашып,
Ят менән яғалашып,
Үсле менән үсләшеп,
Күсһеҙ менән күсләшеп
Торғаныбыҙ булманы —
Һылтауы табылманы.]
Хәүеф-хәтәр бар икән.
[Ағай-энем бер икән,
Таянып үҙ хәленә,
Бирешмәҫ бер кеменә].

«Барығыҙға шуны әйтәм:
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!» —
Тигәйне йәнә атам,
Әйтәмен уны яттан.

Быныһын да тоттоҡ беҙ:
Яҡшылыҡ булды атыбыҙ,
Кешелекле — затыбыҙ,
Яманға юл ҡуйманыҡ,
Яҡшынан баш тартманыҡ,
Затлы булды заңыбыҙ,
Ил көнлөлөр — аңыбыҙ.

3

— Иҙел, Иҙел кем? — тиһәң:
— Йорт-илендә һаны бар,
— Иҙел батырмы? — тиһәң:
— Батыр тигән даны бар,
Ҡулдарына ҡараһаң,
Ун кешенең көсө бар;
Килбәтенә ҡараһаң,
Алпамыштай төҫө бар;
Кәүҙәһенә ҡараһаң,
Алып хәтле һыны бар;
Бил тирәһен байҡаһаң,
Ҡылысы ятҡан ҡыны бар.

Менгән аты сос толпар:
Бер сапсыһа, ҡот осар;
Орор ҡылысы хәтәр:
Бер һелтәһә, ут осар.

Ул-был түгел толпары —
Урал батыр Аҡбуҙы;
Ул-был түгел ҡылысы —
Булат ҡылыс булмышы,
Мөғжизәлер тотошо.
Илгә хәүефте белеп,
Атаһы һүҙен тотоп,
Яйыҡты тапмаҡ булып,
Илен яҡламаҡ булып
[Китмәк булып ил гиҙеп,
Атын менмәгә Иҙел.
Берҙе тауыш бирҙе, ти —
Аҡбуҙ осоп килде, ти.
Ҡолағы беҙҙәй ҡаҙалған,
Ялы ҡыҙҙай тарайған,
Ялбырап ергә һөйрәлгән,
Ҡойороғо төйнәлгән;
Тояғы — юнған уҡтай,
Сәсәһе — аҫыл суҡтай;
Танауҙары күректәй,
Ҡараштары бөркөттәй;
Күкрәк — иңләп алғыһыҙ,
Янбаш — урын һалғыһыҙ,
Сандыры тар, күрмәгә,
Ҡорт балының биленә
Оҡшаған, ти, торғаны.
Ана шулай булғаны
Алдындағы Аҡбуҙат
Урал һымаҡ изге зат.

Һыйпап-һөйөп ян башын,
Тараттырып ялдарын,
Һөйләй-һөйләй ни барын,
Эйҙерә биреп башын,
Көмөш йүгән кейҙергән,
Һағалдырығын элгән;
Һыртына үндек һалған,
Серге менән ҡаплаған;
Ныҡлап, ҡыпсып, төпсөнөп,
Һалған эйәр-өпсөнөн:
Тарттырған ҡуш айылын,
Ҡойороғон ҡайырып,
Кейҙергән ҡойошҡанын,

Тотоп атай ҡушҡанын;
Күмелдереген элгән,
Ҡайҙа тағырға белгән.

Матурланған Аҡбуҙат,
Биҙәнгән туй ҡыҙындай,
Күргән бере һоҡланмай,
Ҡарай алмай ҡыҙыҡмай,
Эйәренең ҡашына
Алмас ҡылыс тағылған,
Ҡылысының ҡынына
Алтын, көмөш яғылған.
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Көмөшләнгән ҡойошҡан,
Ялт-йолт килә ҡояштан,
Семәрләнгән сергеһе,
Гүйә, Урал көҙгөһө:
Тау ҙа бар, урманы ла,
Йөрөйһө юлдары ла.
Күге лә бар күгелйем,
Йондоҙҙар килә ем-ем.
Күҙенә ҡарап, ниҙер
Әйтә һала ла Иҙел],
Юлға ҡатлана Иҙел.
— Алыҫ менән яҡынды
Ҡыҙырып мин киләйем,
Яман менән яҡшыны
Күрә, килә беләйем;
Ата юлын ҡыуа, тип,
Ил яҡшыһы ҡыуанһын.
Ил яҡшыһы ҡыуанһын да
[Миңә ҡарап йыуанһын];
Яманадары шөрләһен
[Эстәре көтөрләһен].
Ил-йортобоҙ тын алһын! —
Тиеп нәҙер әйткәндәй,
Юлын башлап китте, ти.
Ҡорбан тауы[1] буйынан
Иҙел кисеп сыҡты, ти.
Оҙон-оҙон һуҙылған
Аҡ күлгә[2] лә етте, ти,
Уны үтеп китте, ти.
Имсәктәй тиртеп торған
Торатауҙы[3] үтте, ти.

Көнгәк тауын үткәстен,
Иҙеленән айырылды,

Яландар, һырттар аша
Һулға ҡайырылды, ти —
Бара биргәс, алдында
Ике һыу яралды, ти,
Кесе Эйек, Оло Эйек
Ярҙары, ти, бик бейек.
Кискән ерендә — кисеп,
Осҡан ерендә — осоп
Уларҙы ла үтте, ти,
Юл йомғағын һүтте, ти.

Бик талсыҡҡан сағында,
Таҡыр дала тигәндә,
Яйыҡ барып етте, ти.
Ат һуғарып, тән яҙып,
Ҡуна-төнә ап-аруҡ
Тағы ары китте, ти.

«Ерҙең йөҙө киң икән,
Ҡара ерҙең өҫтөндә
Ырыу-ырыу — ил икән
Урал тауҙың иңендә.
Урал тигән был илем —
Атам ҡорған ил икән,
Ил-йорттары һил икән.
Ошо илде ҡурсалап,
Баш һалған ир бихисап;
Ошо ерҙе бәп-бәпләп,
Күпме ҡәүем күмәкләп,
Бер-береһен ҡеүәтләп,
Күпме тоҡом ҡалдырған,
Төрлө ырыу, ҡәбилә,
Төрлө халыҡ, ҡәүемдәр,
Биләй-биләй биләмә
Ер йөҙөнә таралған», —
Тип уйлана барҙы, ти,
Бер моңлана барҙы, ти,
Байҡай-байҡай ян-яҡты,
Ҡолаҡ һала барҙы, ти,
Уҙаман Иҙел батыр,
Ил таныр Иҙел батыр,
Ир таныр Иҙел батыр.

4

Тау яғалап барышлай,
Уйынан бер ҡалышмай,

Тар үҙәнгә төшкәндә,
Үҙән һыуын кискәндә,
Ниндәйҙер бер ауҡанда
Аҡбуҙат алаҡандап,
Шымыраҡтан шымтайып,
Ике күҙе тупайып,
Ҡолағын ҡайсылатып,
Уңға, һулға баш тартып,
Һағайып уҡ ҡалды, ти,
Бер бышҡырып алды, ти.

Аптыраған һыбайлы,
Ғәжәп ҡылған һыбайлы.
Алға күҙен һалды, ти.
Алға күҙен һалғайны,
Тағы таңға ҡалды, ти.
Ысынмылыр, бушмылыр,
Күҙенә күренәме —
Көн-ҡояшҡа ялтырап,
Йөҙкәйҙәре балҡырап,
Күҙкәйҙәре нур сәсеп,
Билкәйҙәре һығылып,
Толомдары һуҙылып,
Түшкәйҙәре тиртешеп,
Ирендәре бүлтешеп,
[Ҡыйғаслатып ҡашҡайын,
Текә тотоп башҡайын,
Һығылдырып муйынын,
Ҡымтый биреп ҡуйынын],
Бер һылыу ҡарап тора,
Алдында баҫып тура,
Туп-тура бағып тора.

Күҙҙең яуын алмалы,
[Утҡа, һыуға һалмалы],
Китәрмәле иҫтәрең,
[Белмәҫһең дә нишләрең].
Һылыуҙыр һылыуҙарҙан,
Күҙ күрмәгән ырыуҙан.
Йылмайып, күҙен ҡыҫып,
[Тотҡандай һүҙҙең осон],
Һораны, ти, егеттән,
[Иплəп һәр һүҙен әйткән]:
— Ниндәй күркәм һыбайһың!
[Ҡайһы яҡҡа юллайһың?]
Ҡайһы илдән киләһең?
Ни ниәттән еләһең,

Шундай аҫау толпарҙа?
[Иҫәп юҡмы туҡтарға?]

Иҙел саҡ һушын йыйып,
Көскә нәфсеһен тыйып,
Арбалып та бағылып,
[Уңға, һулға ҡағылып,
Үҙен тиҙ ҡулға алып],
Бер саҡ телгә килде, ти,
Яуап һүҙен теҙҙе, ти:
— Һылыуҙарҙың-һылыуы,
Теле — бал йә ыу ыуы,
Яуап бирәм, сабыр ит,
Яуабымды ҡабул ит.
Ишеткәнең бармылыр,
Хәтергә һалғанмындыр:
Урал тигән ир булған,
Урал тауҙы бар ҡылған,
Дошмандарын бөлдөргән,
[Белекһеҙен белдергән]
Бик данлыҡлы ир булған.
[Хәҙер юҡ ул — ер булған].
Шул батырҙың улымын!
Уралдың уң ҡулымын!
Биш йәшемдә уҡ атҡан,
Ун йәшемдә бил тартҡан
Иҙел батыр буламын!
Васыятын атамдың
Үтәр батыр буламын!
Ил-йортҡа яфа һалған
Ҡырырға ялмауыҙҙы,
Эрсергә Урал тауҙы.

Ниәтем юҡ ҡурҡырға —
Яйыҡ ағам ҡурсырға
Юлға сыҡҡан батырмын,
Шуға килә ятырмын.

Һыулағаным һораһаң,
Иҙел тигән һыу булыр;
Торған ерем һораһаң,
Урал тигән ил булыр;
Эҙләгәнем һораһаң,
Әйткәнемде онотһаң,
Яйыҡ тигән ир булыр.
Урал улы — Иҙелмен,
Күп илдәрҙе гиҙермен,
Ил-йортҡа яфа һалған

Илбаҫарҙы еңермен,
Эҙенә бер төшөрмөн,
Ниәтемә етермен.
Тура ярған яуаптан
Ҡурҡып ҡалған һылыу ҡыҙ,
Ҡаты әйткән һүҙенән
Ҡалтыраған һылыу ҡыҙ,
Күҙ алдында батырҙың
Ал йөҙө ҡомһораған,
Шыма бите сырышып,
[Нурлы күҙе салшайып,
Хәтәр зәһәр] ут сәсеп,
Шалтырап торған һөйәкле,
Бәлтерәп торған аяҡлы,
Бысаҡ һымаҡ тырнаҡлы
Еҙтырнаҡҡа әүерелгән —
[Тиңһеҙ һылыу тигән йән
Булған, имеш] әүермән.
Ай-һайлаған тауышы
Тауҙарҙы ярып үткән,
Үкергәндә тауышы
Ярҙарҙы йырып үткән.
Тыны менән өркөтөп,
Ауыҙынан ут бөркөп,
Еҙ тырнағын тырпайтып,
Аҙау тешен ыржайтып,
Оса-ҡуна кәйелеп,
Итәктәре йәйелеп,
Батыр иргә уҡталған,
Тырнаҡтарын батырған.
Аҡбуҙ киткән үрәпсеп,
Китә яҙған кәксәйеп —
Әүермәндең ялҡыны
Урап алғас күпсәйеп.
Иҙел ҡурҡып ҡалмаған —
Батыр ҡаны ҡайнаған,
Бер һелтәүҙә ҡылысын —
Юҡ иткән тырнағысын:
Ялмауыҙҙың уң ҡулын
Ҡапшай һалып ул ҡынын
Һурып алған ҡылысын
Өҙә сапҡан ти төптән —
[Яуыздың хәле бөткән],
Ергә ауған әүермән —
Иҙел нишләргә белгән.
Беҙ кеүек осло осон
Ул булат ҡылысының

Әүермәнгә терәгән,
Әйтә-әйтә теләгеп:
— Ҡына һөрткән еҙ тырнаҡ,
Ҡылығыңды белмәнем.
Әҙәм ҡанын күп эскән
Ҡарыныңды теләмен!

Һүҙен әйтеп бөткәнсе,
Бүҫә теләм тигәнсе,
Еҙтырнағы ут булған,
Ут булған да юҡ булған.
Яман әсе зәһәрле
Еҫе һауа ярған, ти.
Артынан ҡара ҡаны
Һарҡа-һарҡа барған, ти.

5

Еҙтырнаҡтың эҙенән
Ҡыуа сыҡҡан Аҡбуҙат,
Ялмауыҙҙар иленә
Төбәп сапҡан Аҡбуҙат.
Аҡбуҙ баҫҡан эҙҙәрҙән
Шишмә сыҡҡан атылып,
Аҡбуҙ һалған һуҡмаҡтан
Юлдар ҡалған тартылып.

Урман-тауҙар төбөндә
Ҡара дейеү йәшәгән
Ҡараһыукүл бар икән,
Шунда, тирә-йүндәге
Төрлө ҡош-ҡорт, януарға
Терек итмәк тар икән.
Еҙтырнаҡтың ҡалдығы
Етеп сумған шул күлгә,
Эҙ яҙҙырмай Аҡбуҙат
Барып еткән шул ергә.
Барып етһә шул ергә,
Ни ғәләмәт, ни тиргә?
[Имәнес зат тора, ти,
Уңлы-һуллы һелтәнеп,
Ҡойороғон бора, ти.
Ҡойороҡло булһа ла,
Үҙе — ярым әҙәм, ти:
Кәүҙәһе, кем, кәүҙә, ти —
Торғаны — эзмәүер], ти.
Бер үҙенә өс баш, ти,

Кәүҙәһенә күҙ-ҡаш, ти,
Тауыш бирһә лә күкрәп,
Тар ине, ти, күк(е)рәк.
Үҙе оҙон тороҡло,
Баш ҙурлыҡ йоҙ(о)роҡло
Ҡара дейеү ине, ти.

Иҙел батыр ажарҙан
Ат өҫтөнән һүҙ атҡан:
— Асарбаҡлы Ҡара дәү!
Иҙел тигән атым бар,
Урал тигән затым бар,
Дошманымда ҡоном бар,
Ташып барған ҡаным бар,
Нәҙер иткән һүҙем бар,
Яуыздан үс алмаға,
Турап ергә һалмаға!

Ҡара дәү гәййәр икән —
Яуабын тыныс әйткән:
— Егет, күрәм, беләмен —
Алыҫ юлдан киләһең,
Һин бушҡа елкенәһең,
Эш айышын аңламай,
Һүҙҙең яйын яйламай,
Ғауға һалма, егетем,
Һауаланма, егетем,
Һыуҙы төйөп, май сыҡмаҫ,
Тел сарлашып, яй сыҡмаҫ.
Миңә киҙәк* бирмәһәң
[Минең яйға килмәһәң,
Үҙе яйыңа тартһаң],
Асыуымды ҡабартһаң,
Йәнең алмай ҡуймамын,
Ҡаның эсмәй туймамын...

Урал батырҙың улы,
Киҫәтмәгә бер юлы,
Киҫә әйткән һүҙ юлын:
— Ҡара дейеү — баш дейеү,
Көн элек ҡанһырама —
Эсергә ҡан һорама
[Алыш алда — күрелер],
Ҡара ҡаның түгелер.
Ҡара дәү — ил яманы,
Һиндә ҡырҡ ил ҡоно бар,
Һинең һынһыҙ тәнеңдә
Йөҙләп илдең ҡаны бар.

Белмәһәң — бел, әйтәйем:
Урал тигән батырҙан
Мираҫ ҡалған булат бар,
Урал батырҙан ҡалған
Толпарым — Аҡбуҙат бар;
Уралдың төҫө булған,
Аманатҡа ҡалдырған
Иҙел тигән улы бар;
Ҡайҙа теләй, шул яҡҡа
Уның барыр юлы бар.
Һинеңише заттарҙан
Ала торған ҡоно бар,
Батыр тигән даны бар.
Һинең алда торған — шул,
Һиңә гәйрәт орған — шул.
Киҙәгемде бирәмен,
Үҙең ҡара кәрәген.

Ҡара дейеү, шатлыҡтан
Көлә-көлә, шашынған,
Көлә-көлә шашынған да,
Шашынғандай, шып тынған:
— Алышҡа — алыш! — тиеп,
Билен биштән быуҙы, ти.
Ауыҙынан ут сәсте,
Күҙҙәренән уҡ сәсте,
Ғәйрәтләнеп һелкенеп,
Ҡойроҡ менән һелтәнеп,
Саң-туҙандар ҡубарҙы —
Таш-ҡаялар ауҙарҙы.

Ер менән күк араһын
Ҡара туҙан-саң баҫты,
Һыу ҡайнап, ер сайҡалып
Баштар миңрәп, аң ҡасты.
Көн дә булды күренмәҫ —
Төн булды, ти, көндөҙ үк
[Көн тотолғандай булды,
Ай тотолғандай булды,
Ерҙә ҡупты, ти, мәхшәр
Хәтәрҙән былай хәтәр].
Өҫкә атылды Аҡбуҙ,
Аҫҡа йомолдо Аҡбуҙ.
[Уңға һелтәнде ҡылыс,
Һулға һелтәнде ҡылыс,
Һелтәнгән һайын ҡылыс
Һис тә китмәй, ти, ҡыйыш —

Бер башын торған ҡыйып]
Яуыз Ҡара дейеүҙең.

Дейеү ярһып үкерә...
Шул саҡ Иҙел ни күрә:
Сапҡан муйын төбөнән
Үҫә тора киренән
Яңы баш өр-яңынан.
Аптыраманы Иҙел,
Ҡаушап ҡалманы Иҙел,
Алып утын ағасын,
Кирә биреп ҡоласын,
Дейеү бөрккән ялҡындан
Ут алды, ти, яҡынлап,
Киҫкән бер муйын төбөн
Өттө, ти, бынан түбән.
Хәл хәлләүе самалы:
Белер әмәл ҡалманы,
Ҡайҙа баш та ҡайҙа таш,
Күк мән ер булды тоташ.
Күлдә һыуҙар ҡайнаны,
Иретеп таш-ҡаяны;
Ерҙә баштар тәгәрәп,
Йәшен йәшнәтә ғәжәп!

Бер заман бары тынды,
Ер йөҙөн һиллек алды,
Туфан ҡабат тартылды,
Бар ер асылып ҡалды:
Күлдәр быуға әйләнгән,
Тауҙар ишелгән, имеш,
Ҡалмаған ни шул килеш:
Урман, таш-маш ҡалмаған,
Барын ялҡын ялмаған;
Яҡты көндө дөм иткән
Ҡара дейеү дөмөккән.

[Күмәк башын — башлата,
Быраҡтырып баш аша,
Аяҡ-ҡулын тураҡлап,
Өйгән Иҙел ян-яҡлап,
Бейек кәбән һалғандай,
Йорт-бура бурағандай —
Булған үсе ҡанғандай.
Дейеү туралған урын,
Өйөп, буралған урын,
Ҡара дәү булғанға дәү,
Аталған, ти, Ҡаратау.]
Иҙел менән Аҡбуҙат

[Эш бөткәстен, киң һулап],
Күккә осоп юл алған,
Офоҡ үтеп юғалған.

6

Урал халҡы был яуҙы
Ҡан ҡалтырап күҙәткән,
Имен-аман булырға
Изге теләктәр әйткән.

Алдараҡ ошо хәлдән
Яйыҡ батыр төш күргән,
Төшөндә бер шеш күргән,
Шеш башында ит күргән —
Хәүеф барын һиҙенгән,
Тик белмәгән — ул ниҙән;
[Шуға тыныс ятмаған]
Ат тотоп, йүгәнләгән,
Һол һөңгөһөн һаплаған,
Ҡылыс, хәнйәр ҡайраған
Яу ярағын һайлаған,
Юл-йөрөмөн яйлаған.
Юл-йөрөмөн яйлаған да
Һикереп атҡа менгән, ти,
Ил ҡашына килгән, ти.
Ил-йорт менән хушлашып,
Тауҙар ҡарай елгән, ти.
Саба-елә барышлай,
Аҡырып һөрән һалған, ти,
Һөрәнләгән тауышы
Бер көнлөк юл алған, ти,
Ҡыйҡыуланған тауышы
Тәүлектәй юл алған, ти;
[Төшмәйенсә атынан,
Саң борҡотоп артынан
Көнө-төнө сапҡан, ти,
Ат тояғы тейгәндә,
Таштар шартлап сатнаған,
Гүйә, саҡма саҡҡан, ти],
Таштан уттар сыҡҡан, ти.
Яйыҡ атын ярһытып,
Урал эсләй сапҡан, ти.
Ҡуш ҡая араһында
Яман бер эҙ тапҡан, ти,
Эҙҙе ҡыуып барғанда,
Байҡаңҡырап ҡараһа —

Бер ялмауыҙ ятҡан, ти.
Аты нык үрәпсеүҙән
Саҡ осмаған эйәрҙән,
[Шул саҡ былай тип әйткән,
Һүҙенә] һүҙ эйәргән:
— Аҫтымдағы туры ат,
Өркәп ҡасһаң — һиңә оят!
Ҡулымдағы ҡылысым,
Кәйпелеп китһәң — һиңә оят!
Сабайым тип, ынтылып,
Сабалмаһам — миңә оят!
Янымдағы янымды
Ҡоралмаһам, миңә оят!
Ҡороп та, уҡ теймәһә,
Уҡ-янға, миңә оят!

[Яйыҡ яман екергән]
Ялмауыҙ аша һикергән,
Атын ҡабат бороуға,
Өлгөргән ян ҡорорға:
[Кереш ҡуйған зынҡ итеп]
Уғы осҡан ялт итеп,
Сәпкә тейгән ҡалт итеп.
Тәне тимер көп микән,
Әллә үҙе гөп микән:
Яман зат Ялмауыҙға
Булмаған ни яуызға.
Батыр [киткән ҡыҙышып,
Ҡындан алған ҡылысын]:
— Ҡылдан нескә ҡылысым,
Сабалмаһам, миңә оят;
Сапҡанымда, сыҙамай,
Ҡыйпылдиһәң, һиңә оят! —
Тигән дә, ҡылыс алып,
[Өҙәңгелә ҡалҡынып]
Киҫә һелтәүе булған —
Тирә-йүн ҡанға тулған:
Ялмауыҙҙың бик яман
Ете башынан икәү
Осоп киткән, ти, тамам.
Яуыз яман аҡырған,
Үгеҙ кеүек баҡырған,
Биш башынан биш ауыҙ —
Ут-ялҡын бөрккән яуыз.
Баҡырыуы, утынан
Яйыҡ батыр атының
Ҡото осҡан, нык ҡурҡҡан,

Ҡурҡыуҙан үтеп, өрккән.
Ул арала ялмауыҙ
(Етеҙ икән бик яуыз),
Ҡая аша ырғыған,
Боролоп һүҙ бырғаған:
— Еңдем, тиеп уйлама,
Яфаларға һалырмын,
Балаң урлап алырмын,
Үҙеңә, илеңә лә
Һис тынғылыҡ бирмәмен,
Шунһыҙ тынғы белмәмен!

Шул сағында Яйыҡ-ир
Аяҡ аҫтындағы ер,
Һыу һымаҡ сайҡалғанын,
Тау-таштың шауралғанын,
Һыу борлап ҡайнағанын,
Утлы дауыл ҡупҡанын,
Ерҙең ниҙер упҡанын —
Мәхшәргә ҡарап-ҡарап,
[Торҙо ла шаҡ ҡатты, ти;
Бер аҙ торғас, аптырап,
Үҙ хәленә ҡайтты, ти].

Тора-бара шул булыр:
Тирә-йүндәр һил булыр.
Тәбиғәткә йәм инер,
Тереклеккә йән инер.
[Тәңренән булыр әмер —
Бары тағы түлләнер]

Ер тетрәй тип белгәне,
Мәхшәр тиеп күргәне —
Иҙелдең Ҡара дәү мән
Алышы булған икән,
Ҡара дәүҙең еңелеп,
Ҡалмышы булған икән.

Яу бөтөп, ил булғас һил,
Ниәткә еткән Иҙел:
Аҡбуҙатында елеп,
Тапҡан Яйыҡты килеп.
Яйыҡ буйы ҡамышлы,
Бирмәбеҙ, тип намыҫты,
Ике батыр — ике ағай
Шунда килеп табышты.
Ҡара дәү, еҙтырнағын,
Ҡырып ялмауыҙҙарын,

Яфаларҙан арынып,
Имен ҡылып барыны,
Еңеү килгән, ти, илгә,
Һиллек килгән, ти ергә.
Оло еңеү хөрмәте
Батырҙарҙың һиммәте,
Туғандар табышҡаны,
Теләктәр ҡауышҡаны —
Ҡылған изгелек өсөн,
Иткән игелек өсөн,
Имен-аманлыҡ өсөн,
Оло йыйынын йыйып,
Ил-йорт байрам иткән, ти.
Даны алыҫ киткән, ти.
Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмары,
Улар менән Нөгөшө —
Ағай-энеләр бары,
Уртаҡ итеп өлөштө,
Ил-йорт менән гөрләшеп
[Дуҫ, туғандар берләшеп,
Үҙ-араһы серләшеп],
Урал тауы буйында
[Һырынғандай ҡуйынға],
Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмарҙа,
Көмөш Нөгөш яғалап,
[Иҙерәшеп Иҙелдә,
Яйын белеп Яйыҡта,
Һағы булған Һаҡмарҙа,
Өләшлә һыу Нөгөштә]
Аман йәшәп киткән, ти,
Байман йәшәп киткән, ти, ау,
Байман йәшәп киткән, ти.

## 2. АЛЫП БАТЫР

Борон-борон заманда Агиҙел буйында бер бабай менән әбей йәшәгән, ти. Бабай һунарға йөрөгән, әбей орсоҡ иләп, киндер һуҡҡан. Шулай бергә ғүмер иткәндә, оло йәшкә еткәндә, уйләнеп ҡараһалар: ғүмер үткән, бер ҙә балалары булмаған. Үҙҙәре үлгәс, иҫкә төшөрөрлөк кеше лә юҡ.

Шунан бабай бик ҡайғырған да, уҡ-һаҙағын алып, биленә балта ҡыҫтырып, сығып киткән. Эй киткән был, эй киткән, бер тау битләсенә барып еткән, ярым серем иткән, шул ерҙә бер төш күргән. Төшөндә уға ошо тауҙың эйәһе килеп сыҡҡан.

— Эй, бабай, — тигән был, — ни эшләп бик бойоғоп киткәнһең?

Ҡарт яуап биргән:

— Донъяла күпме ғүмер һөрҙөм — бер улым да булманы. Үлеп китһәм, атым да, затым да юҡҡа сыға. Шуның өсөн ҡайғырам, — тигән. Теге тау әйәһе әйткән:

— Бер йән үлмәй, бер йән тыумай. Әгәр уллы була алһаң, үҙең яҡты донъянан китергә тейеш булаһың.

Ҡарт риза булған. Шунан теге тау әйәһе таш артына инеп юғалған. Бабай ултырып уйға ҡалған. Шунан һуң күп тә үтмәгән, бабай башын терәп ултырған таш ҡыймылдай башлаған. Бабай уянып киткән дә, билендәге балтаһын ала килеп, төйҙәһе менән ташҡа һуҡҡан. Таш ярылып киткән — эсенән бик таҙа бер егет килеп сыҡҡан. Бабай аптырап ҡалған. Егет, йылмая биреп, ҡарт янына килгән дә әйткән:

— Бына, мин һиңә ул булып килдем, — тигән.

— Әйҙүк, улым, — тигән дә, ти, ҡарт, теге егетте ҡосаҡлап алған. Мин һине ғүмерем буйы көткәйнем.

Егет бик килбәтле, үҙе мөһабәт, дәү кәүҙәле икән. Бармаҡтары beləktəй, ти. Беләктәре бүрәнәләй, аяҡтары кәмәләй, яурыны яландай, кәүҙәһе имәндәй, ти.

— Мә, улым, әләйһәң, минең ҡоралдарымды ал, — тип әйткән, ти, шунда бабай. Шулай тигән дә малайына янында ятҡан уҡ-һаҙағын алып, билендәге балтаһын һалып биргән, ти. Егет әйткән:

— Атай, был ҡоралдарың үҙеңдә генә торһон. Миңә ҙурыраҡты яһап алайыҡ, — тигән. Ҡарт әйткән:

— Юҡ, улым, был уҡ-һаҙаҡ менән балта миңә олатайымдан ҡалған. Уларҙы мин һиңә тапшырам, — тигән. — Былар хәҙер һинеке булһын, мә, ал. Уғың менән ҡош ауларһың, балтаң менән урман ҡырҡырһың, — тигән.

Егет риза булып алған да ҡарттың һаҙағынан бер уҡ алып, йәйәһен киреп, керешен тартып ҡараған. Әҙ генә тартҡайны, ти, — йәйәһе шарт — һынған да сыҡҡан. Йәйәһе шартлап һынған тауышҡа тау һелкенеп киткән, таш емерелеп төшкән, бабай ҙа йығылып киткән.

— Алып!.. — тип ниҙер әйтмәк булған да бабай, шунда йән биргән.

Егет тәүҙә аптырап киткән. Шунан ни, ни эшләһен инде, атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә, балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, сәс бәкеһе кеүек кенә итеп усына һалып, урманға инеп киткән. Унда бер йыуандан имән ағасы ҡырҡып, йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышын ишеп, кереш итеп тарттырған. Йыуан-йыуан һырғый имән йығып, уҡ яһаған. Ул уҡҡа башаҡ осо итеп үткер алмас таш ҡуйған. Шунан донъя гиҙергә сығып киткән.

Уралтауҙың аръяғына сығып, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Тегенең аяғы төшкән урындар аҡлан-аҡлан тигеҙ ялан булып ҡалған.

Егет шунда хәл йыйырға ултырған. Шул саҡ ҡаршы тауҙан

ныны бер ҡыҙ күреп ҡалған. Ул хан ҡыҙы икән. Шунда ҙур тирмә ҡороп ята икән. Тирмәнең ҙурлығы ике өйөр йылҡы һыйырлыҡ булған. Ҡыҙ үҙе лә мөһабәт батыр булған. Егетте күргән дә үҙенә саҡырып алған.

Ҡыҙ әйткән:

— Исемең нисек, егет? — тигән. Егет аптырап ҡалған. Кеше исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән.

— Нимә һуң ул исем? — тип һораған. Ҡыҙ йылмайып яуап биргән:

— Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң? — тигән. Егет әйткән:

— Атайым үлер алдынан ғына миңә: «Алып», тип өндәшкәйне, — тигән. Ҡыҙ әйткән:

— Улай булғас, һин Алып батыр булаһың инде, — тигән, — әгәр ҙә көрәштә мине еңә алһаң, мин һиңә ҡатынлыҡҡа барам, — тигән.

Егет, риза булып, көрәш тотҡан. Былар ете көн, ете төн көрәшкәндәр. Шунан килеп, Алып батыр ҡыҙҙы еңгән. Алып батыр әйткән:

— Йә, һылыу ҡыҙ, үтә вәғәҙәңде, — тигән. Ҡыҙ әйткән:

— Минең күңелем күптән һиндә, — тигән. — Мин — һинеке, һин — минеке, көс һынаштыҡ — хәҙер бергә булайыҡ, — тигән. Егет әйткән:

— Тәүҙә һин миңә исемеңде әйт, һылыу ҡыҙ, — тигән. Ҡыҙ яуап биргән:

— Минең исемем Барһын булыр, — тигән. Егет әйткән:

— Барһын һылыу, Барһын һылыу,
Йөрәгемдә алһын һылыу! — тигән дә, килә килеп, ҡыҙҙы ҡосаҡлап алған.

Шул ерҙә үк былар ҡауышҡандар. Туй үткәргәндәр. Бергә тора башлағандар. Уларҙың ете улы булған. Ошо ете улынан ете башҡорт ырыуы башланып киткән, ти. Ошо ете ырыу Урал буйын биләп йәшәгән. Алып батыр аяҡ баҫҡан ете аҡлан ошо ете ырыуҙың йәйләүе булып ҡалған, ти.

Ирәндек буйында Алпамыша ташы тип йөрөтөлгән бер бейек ҡая барлығы билдәле... Шул таш борон заманда йәшәгән Алпамыша исемле бер (Алып батырҙың) һыны икән, ти. Ул (батыр), тауҙан тауға аша баҫып ҡына атлап сыға торған булған. Бик күп ерҙә булып, бик күп илдәр гиҙеп, һуғышҡанда һуғышып, яу баҫҡанда, уландары менән яу ҡайтарып йөрөгәндән һуң, хәл алырға тип, Алпамыша ошо тауға килеп ултырған да шунан ҡабат тормаған: батырҙың һыны ҡая-ташҡа әүерелгән.

## 3. БАРСЫНҺЫЛЫУ

Бүләр тигән хандың мал-тыуары күп ине, ти. Тирә-яҡта шуның менән дан тота ине, ти.

Бүләр хандың Барсынһылыу тигән ҡыҙы бар ине, ти. Үҫә килә, ул тиңһеҙ һылыулығы өҫтөнә баһадирҙарса ғәйрәтле ҡыҙ булып етеште, ти. Көндәрҙә бер көн атаһына:

— Кем дә кем бил һынашта мине еңә, шуға кейәүгә сығам, — тип әйтеп һала был.

[— Ярар һуң, — тип], атаһы ризалыҡ бирә. [Ат еткән ергә ат саптыртып, хат еткән ергә хат ебәреп, ҡыҙының ошо теләге хаҡында] тирә-яҡҡа оран һала, хәбәр тарата атаһы.

[Шул хәбәрҙе алыу менән], батырҙар, батыр уландары, хануландар, бейуландар бил һынашҡа әҙерләнергә тотондо, ти.

Бер байҙың Алпамыша тигән улы ла шул ярышта ҡатнашырға ниәтләнде, ти. [Шул ниәт менән] үҙенә ат һайларға тотондо, ти.

[Һайланы-һайланы], мәгәр [ҡыҙ янына менеп барырлыҡ] ат тапманы, ти.

Шул мәлдә генә Ҡолтәбтә яҡшы ат барын ишетә. Китә был Ҡолтәб янына, бара был уның янына. Бара ла шулай тип хәбәр һала:

— Ҡолтәб ағай, Ҡолтәб ағай,
Ҡолйерәнең бирсе, ағай,
Бирсе, ағай!
Тау ашаһы — ала йылҡым,
Туғай тулы — туры йылҡым —
Барыһын да бирәм һиңә,
[Барыһын да бирәм һиңә —
Ҡолйерәнең бирсе, ағай]!

Ҡолтәб күнмәй ҙә ҡуя. Алпамыша тағы ла өндәшә:

— Ҡолтәб ағай, Ҡолтәб ағай,
Ҡолйерәнең бирсе, бирсе, ағай!
Алтмыш йәшәр әсәм бар —
Уны ла бирәм, ал, ағай;
Етмешйәшәр атам бар —
Уны ла бирәм, ал, ағай;
Ун етелә һылыуым,
Ҡарлуғастай һылыу ҡыҙ —
Уны ла бирәм, ал, ағай!

[Шулай тип, ата-әсәһен дә, бер туған ҡәрендәшен дә вәғәҙә иткәс кенә], Ҡолтәб күнде, ти.

Алпамыша, [Ҡолтәбтең Ҡолйерәнен] алғас та, ата-инәһе менән хушлашмаҡ булды, ти. [Улар менән хушлашҡандың һуңында], йәнә Ҡолтәбкә килде, уның менән дә хушлашмаҡсы булды, ти. Ҡолтәб ҡулын биргәйне — Алпамыша тегене алып тороп сөйөп ебәрҙе, ти. Ҡолтәб болоттарға ашты, ти. Болот-

тарға ашып торҙо ла ергә төшә башланы, ти. Ергә төшөп килгәнендә, былай тип һамаҡланы, ти:

— Алла, билем, Алла, түшем,
Алла, ҡабырғаларым!
Ебәр, энем, сыҡты йәнем,
Сыҡты йәнем, ебәр, энем!
Тау ашаһы — ала йылҡың,
Туғай тулы — туры йылҡың —
Үҙеңә булһын, энем,
Үҙеңә булһын, энем!

Алпамыша ҡуйманы, йәнә тотоп алды, ти, тегене, йәнә сөйөп ебәрҙе, ти. Күккә осошлай, Ҡолтәб шулай тип һамаҡланы, ти:

— Алла, билем, Алла, түшем,
Алла, ҡабырғаларым!
[Сыҡты йәнем, ебәр, энем,
Ебәр энем, сыҡты йәнем!]
Алтмышйәшәр ҡарт әсәң,
Етмешйәшәр ҡарт атаң,
Ун етеләге һылыуың —
Ҡарлуғастай ҡарындашың —
Бары ла булһын үҙеңә,
Бары ла булһын үҙеңә!

Шуны ишеткәндең һуңында, Алпамыша бил һынаш бәйгеһенә юл тотто, ти.

Килгән батырҙарҙың барыһын да сәләмләгәндең һуңында, Барсынһылыу [улар менән берәм-берәм] көрәшә башланы, ти. [Килгән батырҙарҙың береһе лә] уны еңә алманы, ти, еңеү түгел, баҫҡан урынынан ҡыбырлата ла алманы, ти. [Барыһы ла баһадир ҡыҙға хайран ҡалды, барыһы ла аптырашты, ти.] Шул мәлдә генә Ҡолйерәндә, уҡтай атылып, майҙанға Алпамыша килеп етте, ти. Килеп етте лә үҙенең көсөн һынап ҡарарға теләге барлығын әйтеп, былай тине, ти:

— Туғыҙ ҡуйҙың тиреһе
Башына бүрек булмаған,
Туҡһан ҡуйҙың тиреһе
Тәненә тун булмаған —
[Ултырғанда, уй емергән],
Таянғанда, тау емергән,
Баҫҡан ере уйылған,
Тотҡан ере мурт һынған;
Бер ултырһа табынға,
Табаҡ-табаҡ ит ейгән;

Һаба-һаба ҡымыҙҙы
Эһ тә итмәй, һемергән
Бер батыр килде Барсын,
Һин еңгәнһең барыһын.
Инде минең нәүбәтем,
Баҫылмаһа ғәйрәтең,
Икәү бил һынашайыҡ,
Янбаштарҙы ҡапшайыҡ!

Бер мәл икәү бер-беренә ташланды, ти,
Бер-беренең билен һынау башланды, ти.
Уң ҡулына ала егет — еңә алмай,
Һул ҡулына ала егет — еңә алмай;
Барсынһылыу күтәрә лә ергә ора,
Алпамыша һеңгәҙәй ҙә килеп тора.
Бейҙәр килә, бейҙәр килә, бейҙәр килә,
Әллә ҡайҙан күкрәгәндәй, геүләп килә.
Ултырғанда, тирмә тирелгән,
Таянғанда, тау емергән
Бейҙәр килә, бейҙәр килә, бейҙәр килә,
Алпамыша тороп баҫа, йә, кем еңә?

Көрәш тағы башланды, ти, һуңламай.
Уң ҡулына ала егет — еңә алмай,
Һул ҡулына ала егет — еңә алмай:
Барсынды һис еңергә яй килмәй,
Уңға тарта, һулға тарта — бил бирмәй,

Хандар килә, хандар килә, хандар килә,
Ер бауырлап, тауыштары алдан килә,
Бынығы ла, уныһы ла янлап килә.

Алпамыша барыһын да күрә тора,
Урынынан ҡымшанмай ҙа, үрә тора.
Ҡарап-ҡарап тора ла, ти, ул бер сама
Барсынһылыуҙың биленә ҡулын һала.
Уң ҡулына ала егет — һис еңалмай,
Һул ҡулына ала егет — һис еңалмай.

Аттар килә, аттар килә, аттар килә,
Ер емереп, саң борҡотоп, сабып килә.

Ат өҫтөндә сабып килгән был йәш егет
Ҡалмай ине алыштарҙа бер ҙә ебеп.

Янтайғанда, таллыҡты иҙеп һалған,
Атлағанда, ер убылып иңрәп ҡалған —
Шул да килгән, теге килгән, был да килгән,
Кемдәр ниндәй уй мән килгән, кем һуң белгән.

Алпамыша Барсынға яҡынлай, ти,
Бил төшөнән ййлап уны ҡайманы, ти.

Уң ҡул менән күтәрә алмай уны Барсын,
Һул ҡул менән күтәрә алмай уны Барсын.
Алпамыша уң ҡул менән күтәреп ала,
Һул ҡул менән Барсынды ул ергә һала.

Бына шулай Барсынһылыу еңелде, ти,
[Бына шулай батыры кем, беленде, ти].

Бына шуны бәйән итә халыҡ йыры
[Ни әйткәнен белеп әйтә халыҡ йыры].

## 4. АЛПАМЫША

Борон-борон заманда күрше булып ике хан йәшәгән, ти. Береһе Әйләр хан исемле булған, ти, уларҙың, икенсеһе Бүләр хан исемле булған, ти. Бер-береһе менән бик дуҫ йәшәгәндәр, ти, былар, һунарға сығып, ҡош атып, бәйге яһап, ат саптырып, батырҙарын көрәштереп, көс һынаштырып, күңел асып көн иткәндәр, ти.

### 1. Әйләр хандың улы Алтан, Бүләр хандың ҡыҙы Барһын тыуғаны; уларға бишек туйы үткәрелгәне; Аҡтүбә ҡарттың өс көндә үҫеп етеп, дүртенсе көндә дөпөлдәтә баҫып, алтынсы көн атлап китмәле Алпамыша атлы улы тыуғаны; Алпамышаның, атаһынан ат һорап та, ала алмағаны

Берҙән-бер көндө Әйләр хандың бер ир балаһы тыуған. Әйләр хан шатлыҡтан, бөтә тирә-яҡты саҡырып, туй үткәреп ебәрә. Шунан һуң күп тә үтмәй, Бүләр хандың ҡыҙы донъяға килә. Ул да байрам итә. Бөтә халыҡты йыйып, һыйлап ташлай.

Был ике хан хәҙер кәңәш итәләр, ти: «Беребеҙҙең улы бар, беребеҙҙең ҡыҙы бар, ҡоҙа булышайыҡ та ҡуяйыҡ, булмаһа» тип, һүҙ ҡуйыштылар, ти. Шунан ул балаларҙың береһенә Алтан, тип, береһенә Барһын, тип исем ҡуштылар, ти. Шунда уҡ бәләкәс Алтандан сәңгелдәктәге Барһындың ҡолағын тешләтеп, Бишек туйы үткәреп уҡ ҡуйҙылар, ти.

Алтан менән Барһындың исем туйын үткәреп, хан һарайҙарында шаулашып йөрөгән мәлдә, тау ҡултығында, ҡыуышта, тағы бер ир бала донъяға килде, ти. Был бала Бүләр хандың йылҡы көтөүсеһе Аҡтүбә ҡарттыҡы икән, ти. Исем туйы-маҙар яһап тормағандар, ти, был малайға, кендеген ҡырҡып бәйләгәндәр ҙә, атаһының сәкмәненә урап, ҡыуышына индереп һалғандар, ти. Малай бик теремек булып сыҡҡан, ти: өс көндә гәләмәт үҫеп, дүртенсе көндә дөпөлдәтә баҫып, бишенсе көндә

билен быуып, алтынсы көндә аяғына атлап китеп тә барған, ти. Ирәбе булғанлығы өсөн Алпамыша тигән исем биргәндәр, ти, уға. Алпан-толпан баҫып, ташҡа баҫһа — ут сығарып, ергә баҫһа — һыу сығарып, урмандарҙы, тауҙарҙы, яландарҙы ҡыҙырып, кейек аулап, ҡош атып, батыр булып, буйға етте, ти, был егет.

Еткән егеткә ни кәрәк? Менеп елер ат кәрәк тә атыр өсөн уҡ кәрәк. Дәртләндереп тартыу өсөн ҡурай кәрәк тә һөйөр өсөн ҡыҙ кәрәк. *Алпамыша ла, йылҡы өйөрө янына килеп, атаһына әйтте, ти:*

— Атай, миңә ат кәрәк,
Атыр өсөн уҡ кәрәк,
Тартырға ҡурай кәрәк,
Зифа буйлы ҡыҙ кәрәк...
Өйөрҙәге буҙ ҡонанды
Тотоп ҡына бирсе, атай,
Тотоп ҡына бирсе, атай,
Менеп кенә китәйем.
Өйөрҙәге күк дүнәнде
Тотоп ҡына бирсе, атай,
Тотоп ҡына бирсе, атай,
Елеп кенә үтәйем.

*Атаһы әйтте, ти:*

— Менеп үк китер атым юҡ,
Елеп үк үтер затым юҡ,
Киреләп атыр уғым юҡ,
Моңландырыр ҡурай юҡ:
Ҡурайы юҡтың өнө юҡ,
Өнө юҡтың йүне юҡ.
Йүне юҡтың — көнө юҡ;
Мал табырға хәлем юҡ,
Кәләш эпирер болом юҡ.

*Алпамыша атаһына әйтте, ти:*

— Тартыр өсөн төҙ ҡурайҙы
Ҡырҡып алырмын, атаҡайым;
Атыр өсөн уҡ-һаҙаҡты
Юнып алырмын, атаҡайым;
Ятыр өсөн йорт кәрәкһә,
Үҙем һалырмын, атаҡайым;
Һөйөр өсөн ҡыҙ кәрәкһә,
Үҙем табырмын, атаҡайым,
Буҙ ҡонанды бирсе, атаҡайым,
Китәйем дә менеп, атаҡайым,

Күк дүнәнде бирсе, атаҡайым,
Елеп үтәйемсе, атаҡайым.

*Аҙаҡ Аҡтубә ҡарт улына әйтте, ти:*

— Менеп тә генә китер буҙ ҡонан
Бүләр хандыҡы ул, уланым;
Елеп тә генә үтерҙәй күк дүнән
Бүләр хандыҡы ул, уланым.
Бүләр хандың малы күп,
Малы күптең даны күп.
Мал йыйырға, улым, хәлем юҡ,
Хан малдарын бирер кәрем юҡ...

Шунан һуң Алпамыша, башына һуҡҡан кеүек, бойоғоп ҡына китеп барҙы, ти.

Ярай, Алпамыша шулай йөрөй торһон, беҙ Бүләр хандың һарайына киләйек, һылыу ҡыҙ Барһын бүлмәһенә инәйек.

## 2. Барһынһылыуҙың Алтанды үҙһенмәгәне, үҙ тиңе егет көҫәгәне, серен еңгәһенә һөйләгәне, бил һынашта кем еңә, шуға буй биререн әйткәне; сәхрәгә сығып, ҡыҙҙары менән тирмә ҡорғаны.

Барһынһылыу ҙа үҫеп, буйға етеп килә икән, ти. Ҡыҙ үҙе аҡыллы, үҙе матур, үҙе ягымлы, үҙе бик уңған булып сыҡҡан. Һөйләһә, һүҙе килешеп тора, ти, уның, кейһә, кейеме йәбешеп тора, ти. Барһынһылыуҙың бөтә нәмәһе етеш, тик күңеле урынында түгел, ти, кемделер эҙләй, кемделер көтә, ти; ул бахырҙың, көн тыуҙынмһә, ҡош һайрағанын тыңлап, уға ҡушылып, үҙе йырлап, моңланып, ғүмере үтә, ти.

*Уның шулай бойоғоп йөрөүен күреп, бер саҡ еңгәһе һамаҡ әйткән:*

— Нурлы йөҙөң һары баҫҡан, Барһынһылыу,
Серле күҙең ҡайғы баҫҡан, Барһынһылыу,
Барһынһылыу, әйтсе, һылыу:
Барһынһылыу кемде уйлай?
Йәш күңелең кемде биләй?
Әйтсе, һылыу, әйтсе, һылыу?

*Барһынһылыу ҙа еңгәһенә һамаҡлап яуап биргән, ти:*

— Ҡуйсы, еңгәм, ҡуйсы, еңгәм,
Йән серҙәшем булсы, еңгәм.
Йәш күңелем ыҙалана,
Берәй дауа бирсе, еңгәм, бирсе, еңгәм!

*Еңгәһе шунан, тағы яҡыныраҡ килеп, Барһынһылыуҙың сәсен һыйпап, әйтте, ти:*

— Килсе, һылыу, килсе, һылыу,
Күкрәгемә ғәзиз башың ҡуйсы, һылыу,
Алтаныңды саҡырайым, Барһынһылыу,
Алтан батыр килһен, һылыу,
Күңелеңдең ыҙаһына
Үҙ дауаһын бирһен, һылыу, бирһен, һылыу!

*Шунан Барһынһылыу, ҡапыл тороп, еңгәһенә әйтте, ти:*

— Алтан да Алтан тигәнегеҙ
Әйләр хандың улы икән;
Алтан да Алтан тигәнегеҙ
Аҡылы ла юҡ, тиле икән.
Ҡуйсы, еңгәм, ҡуйсы, еңгәм,
Йән серҙәшем булсы, еңгәм,
Алтандың юлын бүлсе, еңгәм,
Ҡолағымдағы теш әҙкәйен
Юйсы, еңгәм, юйсы, еңгәм.
Йөрәгемә дауа бирсе, еңгәм,
Йөрәгемә дауа бирсе, еңгәм?!

*Шунан зирәк еңгә эштең нимәлә икәнен һиҙеп алды ла, ти, Барһынһылыуға бер һорау бирҙе, ти:*

— Йән серҙәшең булырмын,
Алтандың юлын бүлермен,
Бынауҙай һылыу бикәсемде
Кем ҡуйынына һуң илтеп бирермен?

*Барһынһылыуҙың яуабы:*

— Борма, борма һайын боролма,
Ир-егеттәр үткән юл булыр;
Ҡыйғыр ҡоштай сабып килгән
Ҡыҙ йөрәген ирекән шул булыр.
Батыр ҙа батыр егеттең
Толпар ҙа булыр менгәне;
Иләҫ күңелле ҡыҙ баланың
Батыр ҙа булыр һөйгәне.

*Еңгәһенең әйткәне:*

— Зифа буйлы ҡыҙ баланың
Елән дә булыр кейгәне;
Иләҫ күңелле ҡыҙ баланың
Батыр ҙа булыр һөйгәне.
Иле барҙың ире бар —
Илдә батыр күп булыр.
Батырҙан батыр булыр,

Барһынһылыуҙың иләҫ күңеле
Ҡай батырҙы хуп күрер?

*Барһынһылыуҙың әйткәне:*

— Батыр булһа, сос булыр,
Осҡан ҡыйғыр ҡош булыр,
Ул баҫҡанда, таш түҙмәҫ.
Ул атҡанда, ян түҙмәҫ;
Ултырһа, уба емерер,
Таянһа, тау емерер,
Йөрөгәндә, ер һелкетер,
Арыҫланды өркөтөр.

Ҡурай өсөн тын кәрәк,
Ҡылыс өсөн ҡын кәрәк,
Егет өсөн һын кәрәк,
Һыны булһын батырҙың.
Йөҙҙөң күрке — күҙ, ҡаштыр,
Күлдең күрке — ҡамыштыр,
Әҙәм күрке намыҫтыр.
Намыҫы булһын батырҙың.
Ирмен тигән егеттең
Әйтер һүҙе хаҡ булыр,
Күңеле уның аҡ булыр,
Яман эштән һаҡ булыр;
Ҡурҡаҡ булмаҫ ир-батыр,
Өркәк булмаҫ ир-батыр.
Ир-егеттең эсендә
Эйәрле-йүгәнле ат ятыр.
Атҡа менеп, ил гиҙәр,
Батыр егет ил биҙәр.
Батыр тигән шул булыр,
Ҡайынһеңлең Барһынға
Шундай егет тиң булыр.
Сәсәндәр кәңәш бирә,
Батырҙар көрәш бирә.
Барһын ҡашына килһен,
Барһынға көрәш бирһен,
Көрәш тотҡан батырға,
Еңеп сыҡҡан батырға,
Барһын йөрәген бирер,
Барһын йөрәген бирер.
Йөрәген, буйын бирер...

Был һүҙҙәрҙе еңгәһе ағаһына әйтә, ағаһы атаһына еткерә. Бүләр хан ҡыҙын саҡырып ала. Йоланы боҙорға ярамағанлығын әйтеп, әрләп ташлай. Барһынһылыу әлеге үҙенекен әйтә: «Миңә тиң булыр кеше, билен бөгөп, көрәш тотһон, кем дә кем мине көрәшеп еңә, атайым шуға бирһен», — ти.

Шунан Барһынһылыу, атаһының һарайындағы иң яҡшы аттарҙы эйәрләтеп, еңгәһе менән иптәш ҡыҙҙарын эйәртеп, яурынына ҡошон ултыртып, сәхрәгә сығып китте, ти. Бер тау башына менеп, тирмә ҡороп, шунда йәшәй башланы, ти.

### 3. Барһын ҡыҙҙарының ҡурай тартып үтеп барған Алпамышаны, таш һелтәп, һынағаны; ике тапҡыр һелтәнгән ташты егеттең тотоп алғаны, Барһын тәгәрәткән тирмән ташындайын тибеп, тау башына кире тәгәрәткәне; ҡошон ебәреп, ҡыҙҙың Алпамышаны саҡыртып алдырғаны, уның менән танышҡаны, шартын әйткәне

Бер саҡ ҡурай тарта-тарта тау итәгенән Алпамыша үтеп бара икән. Ҡыҙҙар быны күреп ҡалғандар ҙа, шаяртып, тегеңә елле генә таш аттылар, ти. Алпамыша, осоп килгән еренән ул ташты бер ҡулы менән генә тотоп алды ла, ти, икенсе яҡҡа ташланы, ти. Ҡыҙҙар, тағы ла ҙурыраҡ таш алып, йәнә Алпамышаға аттылар, ти. Алпамыша быныһын ике ҡулы менән тотоп алды, ти, баш осонан һауаға сойорғотоп ебәрҙе, ти. Барһын, бының йылғырлығына һоҡланып, ни эшләр икән, тип, тирмән ташы ҙурлығы ташты тауҙан тәгәрәтеп ебәрҙе, ти. Алпамыша, йүгереп килеп, әлеге ташты тибеп ебәргәйне, ти — был таш, түбәнгә тәгәрәгәнгә ҡарағанда ла ҡыҙыуыраҡ тәгәрәп, кире тау башына менеп китте, ти.

*Барһынһылыу еңгәһенән һораны, ти:*

— Әйтсе, еңгәм, әйтсе, еңгәм.
Тау аҫтына баҡсы, еңгәм.
Шул егеттең заты кем?
Шул егеттең аты кем?

Еңгәһе ул егеттең Алпамыша икәнен әйткәс, Барһынһылыуҙың йөрәге ут кеүек яна башланы, ти. *Ул үҙенең яурынындағы ҡошон ҡулына алды ла, һамаҡлай-һамаҡлай, осороп ебәрҙе, ти:*

— Ҡошҡонайым, осоп кит,
Тау аҫтына төшөп ет,
Алпамыша батырға
Минән сәләм алып илт.

Барһынһылыуҙың ҡошо килеп, Алпамыша тирәләй осоп йөрөй икән. Алпамыша быны күреп ҡалған да уң яҡ ҡанатының өсөнсө ҡауырһынына уғын күҙәп кенә атып ебәргән, ти. Ҡоштоң ҡауырһыны айырылып, Алпамыша янына килеп төшкән, ти, ә ҡош үҙе тауға менеп киткән, ти. Алпамыша, ҡауырһынды ҡулына алып, ҡош артынан тауға менһә, ни күҙе менән күрһен: ҡош Бүләр хандың һылыу ҡыҙы Барһындың яурынында ултыра, ти.

*Алпамыша, бер аҙ намыҫланып, Барһынһылыуға әйтте, ти:*

— Барһынһылыу, Барһынһылыу,
Күҙең миңә һалсы, һылыу,
Үҙ ҡошондоң ҡауырһынын
Ҡабул итеп алсы, һылыу.

*Барһынһылыуҙың яуабы:*

— Батыр егет, матур егет,
Бырыр ергә бар һин, егет,
Ҡошҡонамдың ҡауырһыны
Төҫөм булып ҡалһын, егет.

*Алпамышаның яуабы:*

— Рәхмәт, һылыу, рәхмәт, һылыу,
Барһынһылыу, Барһынһылыу,
Сибәрлегең артһын, һылыу,
Ҡара ҡашың, зифа буйың
Һөйгәнеңә яҙһын, һылыу.
Һөйгәнеңдең мөхәббәте
Йөрәгеңде ҡаҡһын, һылыу.

*Барһынһылыуҙың әйткәне:*

— Сәсәндәр кәңәш бирер,
Батырҙар көрәш бирер.
Көрәш тотҡан батырға
Барһын йөрәген бирер!
Йөрәген, буйын бирер...

## 4. Бил һынашта Алпамышаның Барһынды еңгәне; уларҙың аңлашҡаны; ҡыҙ биргән Буҙ толпарҙың егетте ике тапҡыр сөйгәне, өсөнсөһөнә булдыра алмағаны; Алпамыша менән Барһынһылыуҙың Бүләр ханға барғаны

Шунан Алпамыша Барһынһылыу менән көрәш тотто, ти. Ҡаршыһына килеп баҫты ла, Барһынһылыуҙың билен һығып, уң ҡулы менән алып ҡараны — ала алманы, ти, һул ҡулы менән алып ҡараны — ала алманы, ти, — Барһынһылыу ныҡ торҙо, ти.

Шунан Барһынһылыу алыша башланы, ти, уң ҡулы менән алып ҡараны — булдыра алманы, ти, һул ҡулы менән алып ҡараны — булдыра алманы, ти, — Алпамыша бирелерлек түгел, ти.

Шунан, бик оҙаҡ көрәшкәс, Алпамыша бер килеп, уң ҡулы менән Барһынды күтәреп алды, ти, һул ҡулы менән ергә һалды, ти. Барһынһылыу еңелде, ти, Алпамышаға бирелде, ти, һикереп тороп әйтте, ти.

*Барһынһылыуҙың әйткәне:*

— Батырлығың баштан ашҡан,
Матурлығың һыуҙай ташҡан,
Һиндер, егет, берҙер, егет,
Йөрәгемде килеп ҡаҡҡан.
Ни һорайһың, батыр егет?
Ни теләйһең, батыр егет?
Бар ҙа һиңә, матур егет,
Бар ҙа һиңә, матур егет!

*Алпамышаның әйткәне:*

— Барһынһылыу, Барһынһылыу,
Йөҙөң күрһәм, күҙ ҡамаша,
Барһынһылыу, Барһынһылыу;
Һуштан яҙам: һин — тамаша.
Барһынһылыу, Барһынһылыу,
Йөҙөңдә көн нуры бар,
Күҙеңдә төн сере бар,
Баҙнатым юк, тәҡәтем юҡ,
Баҙнат булмаҫ ере бар.
Барһынһылыу, ҡулым етмәй —
Уй-хыялым һинән китмәй.
Хан ҡыҙында өмөтөм юҡ,
Өмөт юҡҡа көтөмөм юҡ,
Осор инем, ҡанатым юҡ,
Хан ҡыҙына баҙнатым юҡ,
Буҙ толпарың миңә килһәсе,
Буҙ толпарҙы тотоп менһәмсе.
Алғаҫап торған буҙ толпар
Алпамышаныҡы булһасы,
Барһынһылыу, Барһынһылыу
Вәғәҙәһендә торһасы.

*Барһынһылыуҙың әйткәне:*

— Батыр егет, матур егет,
Тапҡыр егет, Алпамыша.
Алғаҫап торған буҙ толпар
Һинеке булһын, Алпамыша.
Үрәпсеп торған буҙ толпарға
Менеп тә йөрөһөн Алпамыша.
Хан ҡыҙының теләгәнен
Күреп тә йөрөһөн Алпамыша.
Барһынһылыуҙың һөйгәнен
Белеп тә йөрөһөн Алпамыша.
Ни теләйһең — шул булыр;
Ни һорайһың — шул килер,
Батыр егет, Алпамыша.

*Алпамышаның әйткәне:*

— Ир баҫмаған ер буламы?
Атһыҙ егет ир буламы?
Малһыҙ егет, һанһыҙ егет,
Хан ҡыҙына тиң буламы?
Әйтсе, һылыу, Барһынһылыу,
Күңелең мине тиң күрәме?
Әйтсе, һылыу, Барһынһылыу,
Йөрәгең мине тиң күрәме?

*Барһынһылыуҙың яуабы:*

— Батыр егет Алпамыша,
Һынашта һин дан алдың.
Батыр егет Алпамыша,
Йөрәгемә һин ут һалдың.
Батыр егет Алпамыша,
Тынысլығымды һин алдың.
Атлан толпар атыңа һин,
Апар мине атама һин...

Шунан Алпамыша һикереп торҙо ла, ти, теҙгенен өҙәрҙәй булып, сапсынып торған буҙ толпарҙы барып тотто, ти. Менеп атланыуы булды, ти — буҙ толпар, бер үрәпсеп, бер һикереп, Алпамышаны һауаға сөйөп ебәреүе булды, ти. Алпамыша шул көйө, йығылмай-нитмәй, шып итеп, уның һыртына атлана килеп төштө, ти.

Икенсеһендә буҙ толпар уны ергә сөйҙө, ти, — Алпамыша түбыҡтан ергә батты, ти; был юлы ла теҙгенде ҡулдан ысҡындырманы, ти. Үҙе, шунда уҡ һикереп тороп, тағы атланды, ти.

Буҙ толпар Алпамышаны өсөнсө тапҡыр сөйөргә ынтылып ҡараны — тик булдыра алманы, ти. Был юлы Алпамыша, теҙгенде нығ тартып, аяҡтары менән буҙ толпарҙың билен биртендерә ҡыҫып алды ла тау башын бер әйләнеп сыҡты, ти. Шунан ул елеп килеп, һыңар ҡулы менән генә күтәреп, Барһынһылыуҙы алдына ултыртып алды ла Бүләр хандың һарайына табан сапты, ти.

### 5. Барһынһылыуҙың ата-әсәһенән, ағаһынан ризалыҡ һорағаны, торон, бил быуып, Алпамышаға тәүҙә – ағаһының, шунан – әсәһенең ҡул биреүҙәрен үтенгәне; өсөнсө тапҡыр сеңләп ялбарыуынан һуң, атаһының риза булғаны

Хан һарайына килеп төшкәс, Барһынһылыу, Алмамыша батырҙы етәкләп. Бүләр хандың һарайына алып инде, ти. Атаһы менән әсәһенә, ағаһына һамаҡлап әйтте, ти.

*Барһынһылыуҙың атаһына әйткәне:*

— Торсо, атай, торсо, атай,
Тороп, билең быусы, атай,
Өйгә ҡунаҡ алып килдем,
Тороп, ҡулың бирсе, атай?

*Әсәһенә әйткәне:*

— Торсо, әсәй, торсо, әсәй,
Тороп, билең быусы, әсәй,
Күк еләнең кейсе, әсәй,
Һиңә кейәү алып килдем,
Тороп ҡына күрсе, әсәй,
Ике ҡулың бирсе, әсәй?

*Ағаһына әйткәне:*

— Торсо, ағай, торсо, ағай,
Тороп, билең быусы, ағай,
Һиңә юлдаш алып килдем,
Тороп, ҡулың бирсе, ағай?

Шунан һуң Бүләр хан, тороп, ҡыҙын ҡыҙҙыра башланы, ти. Әсәһе тороп, илап ебәргән, ти, ағаһы тороп, Алпамышаға ҡулын биргән, ти, ни өсөн тиһәң, еңгәһе уны шунда уҡ өгөтләп, Барһынһылыуҙы ҡеүәтләп йөрөй икән.

*Барһынһылыуҙың атаһына килеп, илай-илай, йәнә һамаҡ әйткәне:*

— Ҡуйсы, атай, ҡуйсы, атай,
Ҡыҙыңа йомшаҡ булсы, атай,
Өйөңә кейәү алып килдем,
Тороп, ҡулың бирсе, атай,
Улың итеп күрсе, атай?

*Шунан Барһынһылыу тағы әсәһенә барып һыйынды, ти. Йәнә әсәһенә әйткәне:*

— Ҡуйсы, әсәй, ҡуйсы, әсәй,
Күҙ йәшемде күрсе, әсәй.
Өйөңә кейәү алып килдем,
Ҡәйнәгенәһе булсы, әсәй,
Шуға ҡулың бирсе, әсәй?

Шулай тигәс, әсәһе лә түҙә алмаған, ти, килеп, Алпамышаға ҡулын биреп, башынан һыйпап, арҡаһынан һөйөп, ризалығын белдергән, ти. Инде хәҙер Барһынһылыу илай-илай атаһына өсөнсө тапҡыр сеңләй башланы, ти.

*Барһынһылыуҙың атаһына өсөнсө тапҡыр сеңләгәне:*

— Ал еләнем тектергәнһең,
Ябыныр өсөнмө, атаҡайым?
Зифа буйым үҫтергәнһең,
Һатыр өсөнмө, атаҡайым?
Ҡолағымды тешләткәнһең,
Алтан өсөнмө, атаҡайым?
Бәхетемде кире ҡаҡтың,
Һарғайтыр өсөнмө, атаҡайым?
Атаҡайым, ғәзиз атаҡайым,
Ҡыҙыңдың күҙ йәшен күрһәнә,
Күрһәнә, атаҡайым, күрһәнә,
Алпамыша тигән батырға,
Кейәү итеп, ҡулың бирһәнә;
Бирһәнә, атаҡайым, бирһәнә!
Ҡыҙың тиң иткән Алпамышаны
Үҙ улыңдай итеп күрһәнә,
Күрһәнә, атаҡайым, күрһәнә!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, атаһы ла түҙә алмаған, ти, ризалығын белдереп, Алпамышаға ҡулын биргән, ти.

## 6. Бүләр хан сапҡындарының туй хәбәрен таратҡаны; туғыҙ көн туй барғаны; Барһынға күҙе төшкән Бүләр хан вәзире Ҡолтүбәнең Әйләр ханға сапҡын саптырғаны; Ҡолтүбә менән сапҡынының зинданға юлыҡҡаны

Икенсе көндө Бүләр хандың сапҡындары был хәлде бөтә тирә-яҡҡа белдереп ҡайттылар, ти. Халыҡ йыйылып китте, ти. Барһынһылыуҙың бәхете өсөн бөтәһе лә һөйөндөләр, ти. Тик бер генә кеше шатланманы, ти. Ул көндө Бүләр хандың оло вәзире Ҡолтүбә генә, көнө буйы бошоноп, ҡобараһы осоп, ни эшләргә белмәй аптырап, борсолоп йөрөнө, ти. Ни өсөн тиһәң, Барһынһылыуға Ҡолтүбәнең үҙенең күҙе төшөп йөрөй икән.

Алпамыша менән Барһынһылыуҙың туйы алты көн, алты төн барҙы, ти. Етенсе көнгә сыҡҡас, Ҡолтүбә, әкрен генә тороп, ат эйәрләргә ҡушты, ти. Бүләр хан быны һиҙеп алды ла һораны, ти:

— Ҡолтүбә ниңә туй ташлай?
Ҡолтүбә ҡайҙа юл башлай?

*Ҡолтүбә уға:*

— Башым ауырта, ханым-солтаным, һунарға барып киләйем, — тип әйтте, ти. Шунан Бүләр хан уға:

— Яңғыҙ йөрөмә, вәзирем, бергә сығырбыҙ, — тип әйтте, ти.

Ҡолтүбә, башына һуҡҡан кеүек, шым ғына кереп ултырҙы, ти.

Һигеҙенсе көнгә сыҡҡас, Ҡолтүбә тағы, әкрен генә ҡуҙғалып, атын эйәрләтә башланы, ти. Бынының да ла һиҙеп ҡалды, ти, Бүләр хан. Ҡолтүбәне саҡырып, тағы һораны, ти:

— Ҡолтүбә ниңә ат эйәрләй?
Ултырып ниңә түҙәлмәй?

*Ҡолтүбә тағы:*

— Эсем боша, ханым-солтаным, ханлығыңдың именлеген ҡарап киләйем тигәйнем, — тип әйтте, ти.

*Бүләр хан уға:*

— Яңғыҙ йөрөмә, Ҡолтүбә, именлек ҡарарға сығып, тыныс-һыҙлыҡ килтерерһең, — тип әйтте, ти. Ҡолтүбә тағы тыйылып ҡалды, ти, тағы инеп ултырҙы, ти.

Туғыҙынсы көнгә сыҡҡас, Ҡолтүбә тағы әкрен генә тороп, шым ғына бер сапҡынды саҡырып алып, Әйләр ханға хәбәр итергә ҡушты, ти. Сапҡын шунда уҡ Әйләр ханға сапты, ти. Ҡолтүбә тыныс ҡына инеп ятты, ти. Тик был хәлде ишетеп ҡалған Барһындың еңгәһе Бүләр ханға килеп, эштең ниҙә икәнен һөйләп бирҙе, ти.

Бүләр хан бындай хыянатҡа түҙеп тора алмай, Ҡолтүбәне хөкөм итеп, зинданға япты, ти. Ҡолтүбә урынына вәзир итеп Алпамышаның атаһы Аҡтүбәне ҡуйҙы, ти.

Аҡтүбә вәзир булып алғас, халыҡ өсөн иркенерәк булып китте, ти. Ни тиһәң дә, үҙ кеше бит, хан һарайына килһәләр ҙә индереп ебәрә, ти, был, толдарҙың, етемдәрҙең зарына ҡолаҡ һалып, тура килгәндә ярҙам иткеләп тә ҡуя, ти.

Ана шулай инде, тормош бер аҙ көйләнде тип торғанда ғына, Ҡолтүбә ебәргән сапҡын, Әйләр ханға килеп, хәбәрҙе һалды, ти. Был хәбәрҙе ишеткәс, Әйләр хандың күҙен ҡан баҫты, ти. Аяҡ аҫтында буталып йөрөгән иҫәүән улы Алтанды төртөп ебәрҙе лә, ти, тиҙ генә ғәскәр башлығын саҡырып алып, Бүләр ханға ҡаршы яу асырға әмер бирҙе, ти.

Шул арала Бүләр хан һарайына Ҡолтүбәнең сапҡыны әйләнеп ҡайтып етте, ти. Хәбәрҙе һөйләйем тип, хужаһына килеп инһә — Ҡолтүбә вәзир булмаһында юҡ, уның урынында Аҡтүбә ултыра, ти. Сапҡынды тотоп алып, Бүләр хандың үҙенә килтерҙеләр, ти. Хәл-әхүәлде һөйләтеп, эште төшөнөп алғас, Бүләр хан был сапҡынды ҡылған хыянаты өсөн Ҡолтүбә янына, зинданға оҙатырға була ла, Аҡтүбә уның язаһын йомшартыуҙы үтенгәс, берлексәгә ҡалдырҙы, ти. Шулай ҙа сапҡынлығынан төшөрөп, һарыҡ көтөүсеһе итеп ҡуйҙы, ти.

## 7. Алпамышаның Әйләр яуына ҡаршы барғаны; ос яуҙы еңеп, алты көнлөк йоҡоға талғаны; толпары менән ҡошонөң уны уята алмағаны; Әйләр хан шымсыларының, сынйырлап, уны зинданға япҡаны

Инде хәҙер ни эшләргә кәрәк? Дошман килгәндә, яу ҡайтарыу кәрәк. Буләр хан да ғәскәр туплай башлаған, ти. Ғәскәренә баш итеп Алпамыша батырҙы ҡуйҙы, ти. Алпамыша батыр, кейенеп-яһанып, Барһынһылыу менән хушлашып, ярһынып, үрәпсеп торған буҙ толпарҙы менеп, яурынына ҡош ултыртып, Әйләр хан ғәскәренә ҡаршы һуғышҡа китте, ти.

Әйләр хандың ғәскәре иҫәпһеҙ күп булған, ти. Тау ҡултыҡтарынан, урман араларынан килеп сыға ла, Буләр хандың ғәскәренә ташлана икән. Улай-былай иткеләгәнсе, байтаҡ ғәскәрҙе ҡырып та ташлаған, ти, улар, ябырылып, һөрән һалып ҡысҡырышып, тағы килә башлаған, ти. Шунан Алпамыша батыр ысынлап алып тотонган икән, Әйләр хандың ғәскәре кире боролоп, ҡаса башланы, ти.

Бер аҙҙан, хәл йыйып алғас, Әйләр хан ғәскәре тағы баш ҡалҡытып килә башланы, ти. Алпамыша батыр тағы тегеләрҙе ҡырырға тотоноп китте, ти. Әйләр хандың ғәскәре бөтөнләй ҡырылып бөтә яҙҙы, ти, ул көндө, тик аҡыллыраҡтары, эште һиҙеп алып, тиҙерәк ҡасып ҡайтып киттеләр, ти.

Әйләр хан үҙенең бөтә ғәскәрен, олоһон-кесеһен — бөтә кешеһен туплап, үс алайым тип, тағы килеп сыҡҡан, ти. Был юлы һуғыш бик яман ҡыҙып китте, ти, алты төн буйы һуғышып, һәр ике яҡтан хисапһыҙ күп кеше ҡырылды, ти.

Ай ҡалҡты, ай батты, ти,
Көн ҡалҡты, көн батты, ти.
Даръя булып, ҡан аҡты, ти.
Ҡан даръяһы быуылып,
Эркелешеп, күл булып,
Бик күп яугир шул күлдә
Күпсене лә батты, ти,
Шунда әжәл тапты, ти.

Етенсе көнгә сыҡҡас, Алпамыша батыр сәмләнеп алып тотонған икән, Әйләр хандың ғәскәре бер тау битләсенә килеп ҡыҫылып, тамам башын юғалтып, бик күбеһе ҡырылып, иҫән ҡалғаны тар-мар булып юғалып, мәсхәрәгә ҡалып, тарҡалып бөттө, ти.

Барса һуғыш та тынды, ти. Шунан Алпамыша батыр ҙа, бер имән төбөнә килеп, буҙ толпарын сынйырлап бәйләп ҡуйҙы ла ял итергә ятты, ти. Бик арыған булғанға күрә, ул шунда уҡ йоҡлап китте, ти.

Бер көн йоҡланы, ти, Алпамыша, ике көн йоҡланы, ти, өсөнсө көнгә сыҡҡас, буҙ толпар кешнәп алды, ти, тояғы менән

баҫҡан ерен тырнап ҡуйҙы, ти. Ҡошо килеп, башына ҡунып, һайрап, һыҙғырып ебәрҙе, ти. Ниндәй ҙә шомло эш булырын алдан һиҙеп, шулай иткән икән ул, бахырҙар.

Алпамыша бер йоҡлаһа, алты төн, алты көн йоҡлар булған. Әйләр хандың ялсылары быны белеп ҡалғандар ҙа үлтереп китергә булғандар, ти. Әйләр хан уларға: «Алпамышаны үлтермәй, аяҡ-ҡулын бәйләп, тере килеш тотоп алып килегеҙ!» — тигән фарман биргән. Шунан тегеләр, сынйыр, бауҙар алып, шым ғына Алпамыша йоҡлаған ергә килгәндәр, ти. Буҙ толпар быны һиҙеп, Алпамышаны уятыр өсөн, кешнәй-кешнәй сапсынып, ерҙе тырнай торғас, тубығына тиклем ҡаҙып төшкән, ти; ҡошо, һайрай-һайрай ҡарлығып, тирәләп оса-оса талсығып бөткән, ти, — Алпамыша уянмаған.

Әйләр хан шымсылары килеп, Алпамышаның аяҡ-ҡулын сынйырҙар менән сырмап, оҙон күкрәк арбаға һалып, атын етәкләп алып киткәндәр, ти. Алпамыша үҙе йоҡлап бара, ти, аты кешнәп бара, ти, ҡошо моңайып һайрап, тегеләрҙең баш осонда осоп бара, ти. Алпамышаның ҡошо барлығын тегеләр белмәгән, күрәһең, бер ҙә иғтибар итмәгәндәр. Шул көйөнсә алып килеп, Алпамышаның үҙен ер аҫтына, зинданға, атын ете ҡат ҡапҡалы таш һарайға бикләп ҡуйҙылар, ти.

## 8. Һунар ҡошоноң Алпамышаға ярҙамға килгәне

Бер саҡ Алпамыша уянып киткән. Уянып китһә — аяҡ-ҡулы бығаулы, янында бер кем дә юҡ, зиндан эсе ҡараңғы, ти. Ни эшләмәк кәрәк? Ята был, түҙеп ята. Һыҙғырып ҡуя, моңланып та ҡуя, ти.

Зиндандың бер мөйөшөнән әҙерәк яҡтылыҡ күренә икән. Алпамышаның һыҙғырыуын ишетеп, боҫоп ҡына, ҡошо килеп ҡунған, ти, шул саҡ. Килеп ҡунған да, ашҡынып, бер аҙ тыңлап торған, ти. Алпамыша ла, ҡош һайраған кеүек, моңло итеп һыҙғыра икән. Һыҙғырған һайын, бахыр ҡош ярһына биреп, зиндандың мөйөшөн суҡып-суҡып ала икән, ти. Шулай итә торғас, шул мөйөштә ҡош күҙендәй генә тишек хасил булды, ти. Суҡышы менән тишекте ҙурайтып, Алпамыша янына үҙе лә килеп ингән, ти, теге ҡош. Икәү, һайраша-һайраша, зинданда бер аҙ ятҡандан һуң, ҡош Алпамышаға ем килтереп ашатты, ти. Шунан Алпамышаның ҡулын сырмаған бауҙы суҡырға кереште, ти. Суҡый торғас, бер бармағын ысҡындырҙы, ти.

Алпамыша, бушаған бармағы менән икенсе ҡулындағы сынйырҙы өҙөп, һыңар ҡулын да бушатып алды, ти. Бер ҡул бушағас инде, әкренләп икенсе ҡулындағы сынйырҙы ла ватып ташланы, ти. Һикереп тороп баҫҡайны, ти, — аяғындағы бығау өҙөлөп китте, ти. Инде хәҙер Алпамыша Барһынһылыуҙың ҡошонан атып алған ҡауырһынды кеҫәһенән алып, хат яҙып, үҙ ҡошоноң суҡышына ҡаптырҙы ла Тыуған иленә осороп ебәрҙе, ти.

Ҡош оса торһон, Барһынһылыу итәгенә барып төшә торһон, беҙ Алпамышаның хәлен һөйләп ҡарайыҡ.

## 9. Зинданда ятҡан Алпамышаның ҡурай моңон хандың кинйә ҡыҙы ишеткәне, егет менән әйтешкәне

Сынйыр бығауҙан бушанғас, Алпамыша бер кирелеп ҡуйҙы ла, ти, сарыҡ ҡуңысынан ҡурайын тартып сығарып, үҙенең Тыуған илендә йырлана торған моңло көйҙәрҙе һыҙҙырып ебәрҙе, ти.

Тап шул мәлдә генә ҡырҙа күңел асып, Әйләр хандың ҡыҙҙары ҡайтып килә ине, ти. Ҡурай тауышын ишеткәс, улар туҡтап ҡалғандар ҙа, һоҡланышып, бик оҙаҡ тыңлап торғандар, ти. Шунан кесерәге, батырайып китеп, зиндан янына уҡ килгән дә тауыш биргән, ти.

*Хандың кинйә ҡыҙының әйткәне:*

— Моңло ҡурай кем тарта?
Был зинданда кем ята?
Ҡайһы илдең батыры
Нурлы йөҙөн һарғайта?

*Алпамышаның яуабы:*

— Алпамыша — атымдыр,
Батыр тигән затым бар,
Барһын атлы ҡатыным,
Уға биргәнмен антым,
Үҙ илем бар, йортом бар,
Илгә ҡайтыр дәртем бар.

*Ҡыҙҙың әйткәне:*

— Алпамыша баҡһана,
Ҡурайыңды тартһана,
Моңландырып өрһәнә,
Ҡыҙҙар күңелен күрһәнә!

*Алпамышаның яуабы:*

— Алпамыштың көнө юҡ,
Көнө юҡҡа өнө юҡ,
Хан ҡыҙының наҙы бөтмәҫ —
Ҡурайымдың көйө юҡ.

Алпамышаның ҡурайын тыңламай, ҡыҙҙар шул көйө ҡайтып киткән, ти. Хан ҡыҙҙары ҡайта торһон, Алпамыша ята торһон, хәҙергә беҙ Барһынһылыуға киләйек, Бүләр хан һарайына инәйек.

## 10. Бүләр хан сапҡындарының Алпамышаның алты таяҡ яны менән биш таяҡ уғын тапҡаны; Ҡолтүбәнең, Алпамышаны хыянатта ғәйепләп, тағы вәзир булғаны, Алпамышаның ҡошон бикләтеп, хатын уҡығаны, Барһынһылыуҙы алыу уйы менән янғаны

Алпамыша оҙаҡ ҡайтмай торғас, Бүләр хан уны эҙләргә үҙенең сапҡындарын сығарып ебәргән, ти. Уның сапҡындары, тау-таш араларын ҡыҙырып, даръялар кисеп, бик күп йөрөгәндән һуң, бер ағас төбөнә килеп сыҡҡандар, ти. Ҡараһалар — унда Алпамышаның ян-һаҙағы менән уҡ-һаҙағы ята, ти. Теге ваҡытта Алпамыша ошо ағас төбөндә йоҡлаған икән. Һаҙаҡтарҙы ҡуҙғатып ҡарайҙар, бер генә кеше күтәрерлек түгел. Яны алты таяҡҡа етә, ти, уғы биш таяҡҡа етә, ти, уғының башағы алтындан, ти, ҡанаты көмөштән, ти. Унлап кеше күтәреп ҡайталар ҙа Бүләр хан һарайы артындағы ағасҡа һөйәп ҡуялар. Шунан: «Алпамыша үлгән икән» — тигән хәбәр һалалар.

Шомло хәбәрҙе ишеткәс, Барһынһылыу бик илаған, ти. Шулай ҙа сер бирмәгән, был хәбәргә эсенән ышанмаған, һаман Алпамышаны көткән, ти.

Алпамышаның уғы менән янын алып ҡайтҡанды ишеткәс, зинданда ятҡан Ҡолтүбә:

— Бүләр ханға һүҙем бар, — тип, һаҡсыларҙан хан һарайына алып килеүҙәрен үтенгән. Бүләр хандың алдына килеп, маңлайы менән ер һепереп, теле менән иҙән ялап, һүҙ башланы, ти:

— Ханым-солтаным, мин — ғәйепһеҙ ҡолондо, Алпамыша арҡаһында, мине тотҡонға һалдың. Бына хәҙер күр инде: тоғро тигән Алпамышаң Әйләр ханға баш һалған.

Бүләр хан бер аҙ уйға ҡала. Ҡолтүбәнән:

— Быға ниндәй дәлилең бар? — тип һорай.

Ҡолтүбә әйтә:

— Дәлилем шул, ханым-солтаным: әгәр Алпамыша үлгән булһа, биш таяҡлы уғы менән алтын таяҡлы яны ҡалмаған булыр ине. Йола буйынса, батырҙың ҡоралын үҙе менән күмәләр. Әгәр ҙә ул иҫән булһа, һаман һуғышып йөрөр ине. Һуғышып йөрөгәне мәғлүм түгел. Уны тереләй тотоп алмаҡ та мөмкин түгел. Шулай булғас, Әйләр хан яғына ул үҙе ҡасып киткән булып сыға.

Бүләр хан, Ҡолтүбәнең таҫма теленә ышанып, уны тотҡонлоҡтан ҡотҡарған да тағы вәзир итеп ҡуйған, ти. Вәзир булып алғас, Ҡолтүбә Аҡтүбәне зинданға яптырған. Яптырған да, ти, халыҡтың ҡан йәшен түктереп, ҡартын-йәшен теҙ сүктереп, зар илатып хөкөм йөрөтә башлаған, ти.

Шулай берҙән-бер көн Ҡолтүбә үҙенең бүлмәһендә хөкөм

сығарып ултырғанда, Алпамышаның ҡошо килеп ингән, ти. Ҡош бүлмәне бутаған, ти. Ни өсөн тиһәң, Ҡолтүбә элек Алпамыша ултырған бүлмәне билән алған икән, ти.

«Уңай булды әле», — тип, Ҡолтүбә, ҡошто тотоп, ситлеккә ябып ҡуя. Суҡышынан ҡаурыйын алып, яҙыуҙы уҡый ҙа, эштең ниҙә икәнен белеп ала. Тик бер кемгә лә белгертмәй. Уның ниәте тиҙерәк Барһынһылыуҙы үҙенә алыуҙа булған, ти.

## 11. Алпамышаның хан ҡыҙҙарынан Буҙ толпарҙың өс ҡылын алдыртҡаны, шуларҙы өтәп, ҡотолоуына ирешкәне; Буҙ толпарҙың зинданға ҡойроғон төшөргәне, эйәһен ҡотҡарғаны

Ҡошо әйләнеп ҡайтмағас, Алпамыша бик ҙур хафаға ҡалған, ти. Ҡурайын алып, тағы моңайырға тотонған, ти. Хан ҡыҙҙары быны ишетеп ҡалғандар ҙа тағы килгәндәр, ти. Улар килеүен һиҙгәс тә, Алпамыша ҡапыл уйнауынан туҡтаны ла ҡуйҙы, ти. Шунан хан ҡыҙҙары өсөһө бер юлы Алпамышаға зиндан мөйөшөнән һамаҡлай башланы, ти.

*Хан ҡыҙҙарының һамаҡлағаны:*

— Алпамыша, баҡһана,
Ҡурайыңды тартһана,
Моңландырып өрһәнә,
Ҡыҙҙар күңелен күрһәнә!

Алпамыша ялындырып ҡына яуап бирҙе, ти.

*Алпамышаның әйткәне:*

— Ятыр ҙа ғына инем — түшәк юҡ,
Быуыр ғына инем — ҡушаҡ юҡ,
Тартыр ҙа ғына инем ҡурайымды —
Ҡурай тартыр өсөн форсат юҡ.

Ҡыҙҙар уға тағы ялыналар. Алпамыша һаман үҙенекен итте, ти. Ҡабат уйнаманы, ти. Аҙаҡ килеп, тегеләргә:

— Әгәр ҙә минең Буҙ толпарымдың ҡайҙа икәнен белеп, табып килтерһәгеҙ, уйнармын, — тип әйтте, ти. Шунан ҡыҙҙар яуап бирҙе, ти:

Алпамыша батыр Буҙатлы,
Буҙатҡайын уның кем япты,
Сығарыр ҙа инек, ай, буҙ атты,
Һарай ишектәре йоҙаҡлы!

Шул көйө Алпамыша батыр, ҡабат уйнамай, тегеләрҙе ҡайтарып ебәргән, ти.

Ни эшләргә белмәй, аптырап, зиндан эсендә йөрөй-йөрөй, таш иҙәнде Алпамыша балсыҡҡа әйләндереп бөткән, ти. Шунан тағы ҡулына ҡурайын алған, ти. Был юлы үҙәк өҙгөс бик матур көй тартып ебәрҙе, ти. Шуны ишетеп ҡалып, хан ҡыҙҙары тағы килеп тыңлап торған, ти. Шуны һиҙеп алғас та, Алпамыша ҡапыл туҡтаны, ти. Эй ялына башланылар, ти, теге ҡыҙҙар, эй ялына башланылар, ти:

— Ни теләһәң, шуны бирербеҙ. Шул көйҙө тағы бер генә уйна инде! — тип әйттеләр, ти. Алпамыша:

— Әгәр ҙә атымды килтерһәгеҙ, уйнармын, килтермәһәгеҙ — юҡ, — тип яуап бирҙе, ти. Тегеләр, ни эшләргә белмәй, бик аптырауҙа ҡалдылар, ти.

— Әгәр ҙә атымды килтерә алмаһағыҙ, — тип әйтте, ти, Алпамыша, — уның ялынан — бер ҡыл, ҡойроғонан — бер ҡыл, маңлай суғынан бер ҡыл өҙөп килтерегеҙ, шунан уйнармын, — тип әйтте, ти.

Ҡыҙҙар мең төрлө хәйлә табып, Буҙ толпар бикләнгән һарайға инеп, ялынан — бер ҡыл, ҡойроғонан — бер ҡыл, маңлай суғынан бер ҡыл йолҡоп алып, Алпамышаға килтереп бирҙеләр, ти.

Ҡыҙҙарҙың күңеле булһын өсөн, тағы бер генә көй уйнап алды ла, ти, Алпамыша, аттың өс ҡылын бергә төйнәп, яндырып ебәрҙе, ти. Ҡыл еҫе танауына килеп бәрелеүгә, Буҙ толпар елкенеп китеп, бер кешнәп ҡуйҙы, ти. Шунан һарай эсенә һыймай сапсынып, үрәпсеп һикергеләй башланы, ти. Үҙе кешнәй, үҙе тибенә, үҙе ярһый, ти, бахырың, аяғындағы тышауҙарын, башындағы йүгәндәрен өҙгөләп бөттө, ти. Һарай һаҡсылары:

— Был атҡа ни булды икән? — тип, асып ҡарамаҡ булдылар, ти. Һарай ҡапҡаһын асып ебәреүҙәре булды — Буҙ толпар һаҡсыларҙы бәрә йығып, сығып та ҡасты, ти. Кешнәй-кешнәй әйләнеп, Алпамыша ятҡан зинданға яҡын килеп, теге ҡошо тишкән тишектән ҡойроғон төшөрҙө, ти. Алпамыша Буҙ толпарҙың ҡойроғона йәбешеп сыҡты ла, уны менеп алып, ҡайтып та китте, ти.

## 12. Алпамышаның илгә ҡайтҡаны; өс көтөүҙең өс көтөүсеһенә юлыҡҡаны; Ҡолтүбә яҡлы һарыҡ көтөүсеһе менән һыйыр көтөүсеһен сиртеп үлтергәне, йылҡы көтөүсеһенә теймәгәне, уның кейемен кейеп, ҡайтып төшкәне

Иленә яҡынлаша килә, Алпамыша бер һарыҡ көтөүсеһенә тап булды, ти. Ҡараһа, был таныш көтөү кеүек күренә, ти.

— Кем көтөүе был? — тип һораны, ти, Алпамыша. Көтөүсе:

— Ҡолтүбәнеке! — тип әйтте, ти.

— Үҙең ни эшләп ултыраһың? — тип һораны, ти, Алпамыша тегенән.

— Күрмәйһеңме ни, бысаҡ үткерләйем, — тип әйтте, ти, теге, — бысағымдың йөҙөнә ҡарайым да шатланам, һыртына ҡарайым да көйөнәм, — тип әйтте, ти.

— Ниңә улайтаң? — тип һорағас, теге:

— Был Алпамыша батыр бысағы ине, хәҙер уның башы олаҡты, бысағы миңә ҡалды, шуға шатланам, — тип әйтте, ти, — ә бына Ҡолтүбә уның Барһынһылыуына ҡул һалырға әҙерләнә, тиҙәр. Шуның өсөн көйөнәм, — тип әйтте, ти. Шунан ни, Алпамыша тегенең башына сиртте лә китеп тә барҙы, ти. Теге көтөүсе йән биреп ҡалды, ти.

Килә-килә, ул бер һыйыр көтөүсеһенә тап булды, ти.

— Был кем көтөүе? — тип һораны, ти, Алпамыша. Көтөүсе:

— Был — Ҡолтүбәнеке! — тип әйтте, ти, көтөүсе.

— Үҙең ни эшләп ултыраһың? — тип һораны, ти, Алпамыша тегенән.

— Күрмәйһеңме ни, бау ишәм, — тип әйтте, ти, теге.

— Ул бау нимәгә? — тип һораны, ти.

— Алпамыша еңһә — Ҡолтүбәне аҫыр,
Ҡолтүбә еңһә — Алпамышаны аҫыр.
Бау булыр, бау булған ерҙә дау булыр,
Дау булған ерҙә табыш сығыр,
Табыш сыҡҡан ерҙә үлеш сығыр, —

тип әйтте, ти. Алпамыша быныһының да башына бер сиртеп алды ла, ти, үҙе китеп барҙы, ти. Көтөүсе шул ерҙә йән биреп ҡалды, ти.

Тағы бер аҙ киткәс, Алпамыша йылҡы көтөүсеһенә тап булды, ти.

— Был кем өйөрө? — тип һораны, ти, уныһынан да.

— Был Бүләр хандың Барһынһылыуға бүләк иткән өйөрө, — тип яуап бирҙе, ти, көтөүсе.

— Уға кем хужа? — тип һораны, ти, Алпамыша.

— Уға Алпамыша батыр хужа, — тип яуап бирҙе, ти, көтөүсе.

— Ул ҡайҙа? — тигән һорауға көтөүсе:

— Ул хәҙер ҡайта, Барһынһылыуҙы йыуата, Ҡолтүбәне ҡолата, — тип әйтте, ти.

— Алпамыша мин булырмын! — тип әйтте, ти, Алпамыша. — Теләгең ниҙә? Әйт, ҡустым, — тип әйтте, ти.

— Теләгем шул, — тип әйтте, ти, теге, — бар тиҙерәк ҡайт, унда бәйге бара, һуңлап ҡалма, — тип әйтте, ти.

Алпамыша көтөүсенең кейемдәрен кейеп, туп-тура хан һарайына китте, ти.

## 13. Танытмай килеп, Алпамышаның үҙ ҡатыны ойоштор-ған туй алды һынауында ҡатнашҡаны; халыҡтың уны танығаны; Ҡолтүбәнең халыҡ хөкөмөнә бирелгәне; Алпамышаның хан булып киткәне

Бүләр хандың һарайында, ысынлап та, бәйге бара икән. Һылыулығы, аҡылы булыуы өҫтәүенә, батырлығы менән дан алған Барһынһылыуҙы алырға теләүселәр күп булған. Ҡолтүбә һәр төрлө хәйлә ҡороп ҡараған. Шулай ҙа эш сығара алмаған. Барһынһылыу ауыр бер шарт ҡуйған: «Йыйын йыйығыҙ, бәйге ойоштороғоҙ. Кем дә кем Алпамышаның алты таяҡ янын тартып, алтын башаҡлы, көмөш ҡанатлы биш таяҡ уғын үҫеп ултырған ағасты үтә сыҡмалы итеп ата ала, шуға барырға ризамын», — тигән.

Бәйгегә килгән халыҡ һаҙаҡтағы янды алып ҡарай — тартырға береһенең дә көсө етмәй. Шул саҡ көтөүсе кейемендә Алпамыша үҙе килеп инә. Янды тартырға теләй, уны яҡын ебәрмәйҙәр. Шунан ул халыҡты ике ҡулы менән икегә айыра ла килеп янды ала, уҡты ағасҡа күҙәп атып ебәрә. Уҡ ағасты яра тишә.

Шунан халыҡ бының Алпамыша үҙе икәнен белеп ҡала. Уны күтәреп алалар.

*Алпамыша һамаҡ әйтә:*

— Ҡалын елкә Ҡолтүбәне
Ҡолатмаҡмын,
Алтмыш йәшәр атайымды
Ҡотҡармаҡмын —
Алпамыша тигән атым бар,
Батыр тигән затым бар,
Барһын атлы ҡатыным,
Уға биргәнмен антым.
Үҙ илем бар, ерем бар,
Дарманым бар, дәртем бар,
Беләгемдә көсөм бар,
Ҡолтүбәлә үсем бар!
Дошман еңер кәрем бар,
Алышырҙай рәтем бар.

Шулай тип әйтте лә, ти, Алпамыша, Ҡолтүбәнең елкәһенән алып, ике ҡулын артҡа шаҡарып:

— Үҙегеҙ язаһын бирегеҙ! — тип шундағы халыҡҡа тоттороп сығарып ебәрҙе, ти.

Халыҡ Алпамыша менән Барһынһылыуҙы күтәреп алды, ти. Береһен хан итеп ҡуйҙылар, ти, икенсеһе уның кәләше булды, ти. Икеһе лә, Буҙ толпарға атланып, халыҡ араһынан үттеләр, ти. Уларҙы данлап, сәсәндәр ҡобайыр әйтте, ти.

*Беренсе сәсәндең әйткәне:*

Хандар килә, хандар килә,
Үҙ иленә ырыҫ биргән,
Үҙ халҡына өлөш биргән
Хандар килә.

Хандар килә, хандар килә,
Баҫҡан саҡта таш түҙмәгән,
Атҡан саҡта таш түҙмәгән
Хандар килә.
Бейҙәр килә, бейҙәр килә,
Ултырғанда, уй емергән,
Таянғанда, тау емергән
Бейҙәр килә!

Аттар килә, аттар килә,
Таянғанда, тал һындырған,
Атлағанда, ер һеңдергән
Аттар килә!

Яурынына ҡош ҡундырған,
Суҡмар менән тос тондорған,
Ҡая-ташты яра атҡан,
Илен яулап яуҙар сапҡан,
Ил дошманын урап алған,
Һалма һымаҡ турап һалған
Батырҙар килә, әү кем,
Батырҙар килә!..

*[Икенсе сәсәндең әйткәне:*

— Алпамыша — Алпамыш,
Һин бар донъяға таныш;
Барһынһылыу — гөл Барһын,
Еңеп сыҡтың һин бар(ы)һын.
Алтынланған эйәрең бар,
Алыштырмаҫ йәрең бар,
Һай Алпамыш, һай Барһын,
Эшегеҙ алға барһын!
Һеҙ икегеҙ — ил ҡото,
Данлайһығыҙ ил-йортто.
Бер батырға — бер матур,
Бер матурға — бер батыр
Тура килһә, йоп булыр,
Йоп булғанға — хуп булыр.
Батырҙан тыуыр батыр,
Матурҙан тыуыр матур;
Батыр улдар үҫтереп,

Матур ҡыҙҙар үҫтереп,
Икәү һүҙҙе беркетеп,
Ырыуыбыҙ үрсетеп,
Ят үпкәһен күпсетеп,
Илгә терәк булығыҙ,
Илгә кәрәк булығыҙ,
Илдә һәр саҡ булығыҙ,
Шунһыҙ һәләк булырбыҙ,
Изге һеҙҙең юлығыҙ.
Ошо юлдан яҙмағыҙ,
Дан, шөһрәт, тип, аҙмағыҙ,
Ни ҡылһағыҙ алда һеҙ,
Ярҙам итер Аллабыҙ!]

## 5. КӘРТӘ МӘРГӘН

Кәртә Мәргән Ҡыҙыл йылғаһы үрендә[1] йәшәгән, ҡатыны үлеп, тол ҡалғас, берҙән-бер ҡыҙы Көнһылыу менән көн иткән.

Кәртә Мәргән бик тә һунарсыл булған. Ауға сыҡмаған көнө булмаған уның. Һунарға китер булһа, гел генә:

— Йорттан ҡырға сыҡма! — тип ҡыҙын киҫәтер булған. [Ҡыҙы:

— Ярар, атай, — тип кенә торған. Мәгәр] көндәрҙән бер көн йылғаға һыу инергә барған. Һыуға төшкәс, үҙенең оҙондан-оҙон сәсен һыу өҫтөнә яҙып, тарана башлаған. Тарағына эләгеп сыҡҡан оҙон-оҙон сәс бөртөктәрен һыу ағыҙып алып киткән. Ҡыҙыл тамағында ҡалмыҡтың Туғаҙаҡхан тигән ханының улы һыу ингәнендә, теге оҙон-оҙон сәс бөртөктәрен тотоп алған. Тотоп алған да йортона алып ҡайтҡан. Алып ҡайтҡас:

— Был кем сәсе булыр? — ти икән ярандарына. [Тегеләр күҙ һалыу менән], кем сәсе икәнен таныйҙар ҙа, килеп тороп, Көнһылыуҙы маҡтарға тотоналар:

— Ынйы уның тештәре,
Ҡолас-ҡолас сәстәре;
Көндәй уның бер бите,
Айҙай уның бер бите,
Көндөҙ күрһәң йөҙөнө —
Сағылдырыр күҙене,
Төндә баҡһаң йөҙөнә —
Айҙай балҡып күренә.
[Шундай матур, һылыу ҡыҙ]
Был сәстәрҙең эйәһе.
Шуға күрә киләлер:
«Ул хур ҡыҙы!» — тиәһе.

Ырғып торған хანулан,
Миҫле* был саҡ йәш ҡолан.
Сабырлығын тыялмай:
— Аты кем? — тип һораған.

— Аты уның Көнһылыу,
Атаһы Кәртә Мәргән,
Януар, ят бауыр тайыр
Мәргән йөрөгән ерҙән.

— Мин китәмен, китәмен,
Етер ергә етәмен;
Көнһылыуҙы табырмын,
Һалдырып та алырмын.
Көнһылыуҙы алмаһам,
Был донъяла ҡалмамын;
Ҡалһам, күрмәм рәхәтен,
Рәхәтһеҙ, ни хәжәтем?
Көнһылыуҙы алмаһам,
Ҡуйыныма һалмаһам,
Йәшәүемдең ерҙә мин
Йәмен тапмам бер ҙә мин.

Хан һарайына кәзинәктәр йүнләүсе ханулանға былай тип әйтте, ти:

— Барма, мырҙа, йөрөмә,
Юлың уңмаҫ күренә.
Һине көтә юлыңда
Ауыр-ауыр һынауҙар.

Һәләкәткә юлығып,
Шунда юлың быуылып,
Үлеүең дә бар, мырҙа,
Үлеүең дә бар, мырҙа.

Бар дәүләте урҙаның,
Булғаны, булмағаны,
Белгәс һинең хәлеңде,
Ҡотҡарырға йәнеңде
Бары сарыф ителер,
Бары исраф ителер.
Кәртә Мәргән килер бер,
Илең иңләп елер бер,
Торған ерең, торлағың,
Шунда ниҙәр ҡорғаның —
Сытырҙай ул тураҡлар,
Унан беҙҙе кем һаҡлар?

Туҡһан йортло урҙаңды,
Ата-инәң, мырҙаңды —
Үҙенә улъя* итер ул,
Маҡсатына етер ул,
Иблис кеүек аҡырыр —
Ҡыҙының ҡонон алыр.
Ул тауҙар ыласыны,
Киң йәйә ҡоласыны,
Атылып килеп етер ул,
Тетмәбеҙҙе тетер ул;
Илде талар, бөлдөрөр,
Беҙҙән тамам көлдөрөр.
[Донъяңды ул аҡтарыр,
Аҡтарып утҡа һалыр;
Утҡа һалһа ни ҡылыр?
Торон менән көл ҡалыр]...

Барма, мырҙа, йөрөмә,
Юлың уңмаҫ күренә.
Һине көтә юлыңда
Ауыр-ауыр һынауҙар.
Малдарыңдан яҙырһың,
Байлығыңдан ҡалырһың...

[Ҡалмыҡтың хануланы, киҫәткәнде тыңламаны, ти, ҡолағына элмәне, ти. Китер ергә китте, ти.] Кәртә Мәргәндең һунарға киткәнен генә көтөп торҙо ла, ти, ҡалмыҡ хануланы уның йортон баҫты, ти. Йортон баҫты ла ҡыҙын урлап алып та китте, ти.

Кәртә Мәргән ауҙан ҡайтып төшһә — ҡыҙы юҡ. Көтәүселәре булған хәлде түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе, ти. Шуны ишетеүе булды — бурҙат һымаҡ буҙарҙы, ти, Кәртә Мәргән, арыҫландай турһайҙы, ти, — күҙҙәренән осҡондар сәсрәп-сәсрәп китте, ти. Шунан ул үҙенең көтөүселәренә былай тине, ти:

— Мин китәрмен, китәрмен,
Етер ергә етәрмен;
Ярһып оран һалырмын,
Туғаҙаҡхануланын
Турап, йәнен алырмын;
Илен утҡа һалырмын,
Ҡыҙҙы тартып алырмын;
Ят бауырға ҡыҙ бирмәм,
Һораһа, яҡын килмәм!

Һүндерермен гәйрәтен,
Йолҡоп алып ғәүрәтен.

Тотоп, ярып табанын
Туралған ҡыл һаламын;
Туҡһан йортло ҡалмыҡтың
Тиреһен тунап аламын;

Тунап, ҡанын эсәрмен,
Үҙен шунда бесәрмен.
Туғаҙаҡхануланын
Ҡойроғона тағармын
Иң асау арғымаҡтың —
Баш бирмәç ярһыу аттың.
Әгәр мин шулайтмаһам,
Башҡа юлды һайлаһам,
Ҡәһәтемдә тормаһам,
Елкәм ҡашып, тырнаһам,
«Кәртә» атым ҡороһон,
«Мәргән» атым ҡороһон!!!

Был мәлдә Көнһылыу ҡалмыҡ тотҡоно хәлендә зар-интизар ултыра ине, ти. Үҙенең зарҙарын йырға һалып, ҡан-йәш түгә-түгә йырлай ине, ти:

— Ҡом дөйәһе утлай ҡомлоҡта,
Ҡомлоҡ еркәйендә әселек.
Мин йәш түгәм ҡалмыҡ илендә,
Минең яҙмышҡайым — әсирлек.

Януарҙан да яман ят бауыр,
Маҡсат ҡыналары — урлыҡтыр.
Дөйә малы утлай тауҙарҙа,
Минең урынҡайым — хурлыҡтыр.

Иртә лә генә була, кис тә була,
Кис булдымы миңә көс була:
Керпек осҡайҙарым һис кипмәй —
Ҡара күҙҙәремдән йәш бөтмәй.

Атай һүҙкәйҙәрен тотманым да
Ҡалмыҡ ҡулдарына юлыҡтым,
Ҡалмыҡ улы мине хур итте —
Намыçыма минең мулыҡты.

Ейгән ризыҡҡайым — ризыҡ түгел,
Барғынаһы — ҡалмыҡ ҡалдығы.
Хәҙер илдә мине кем ятһын,
Мин бит инде — ҡалмыҡ ҡалдығы.

Нисек кенә күтәрәйем икән,
Йәш башыма төштө хәс(е)рәт.

Електерҙе гел хур булып йәшәү —
Ниңә китмәй донъя сәс(е)рәп.

Кәртә Мәргән [ғәйрәт сәсеп килде лә, ти, ҡалмыҡтарҙың уңдағыһын — уңға, һулдағыһын — һулға, юлдағыһын — юлға, арттағыһын ары ора-бәрө һуҡты ла, ти], Көнһылыуҙы әсирлек ғазабынан азат ҡылды, ти. [Иленә ҡайтып ингәс, үҙенең мөҙҙәте еткәс, ҡалмыҡ хануланынан яралған ауыры малай булып донъяға килде, ти. Уға Көбәк тип ат ҡуйҙылар, ти.] Үҫеп еткәс, ул бала ҡартатаһы Кәртә Мәргәндән дә ғәйрәтлерәк батыр булып етеште, ти. Барыһы ла уны Көбәк батыр[2] тип белде, ти.

## 6. ИЛЕҮКӘЙ, КЕЛӘЙЛЕ, ЯЙЫҠ БАТЫРҘАР

Борон беҙҙең Дим буйында Дәмми бей[1] менән Ыршаҡ бей[2] йәшәгән. Ул саҡта беҙҙең ата-бабалар булмаған. Уларҙың үҙҙәре һәм уландарының ҡул аҫтындағы халыҡтары тураһында ла олатайҙар бер нәмә лә һөйләмәйҙәр. Уларға ҡаршы яу менән Яйыҡтан — Яйыҡ батыр, Иҙелдән — Илеүкәй [батыр], Уралдан Келәйле батыр килгән.

### 1. Дәмми бей менән Ыршаҡ бейгә өс батырҙың яу асҡаны, Дим буйына йөҙ баштары ултырған ерҙә Меңле башҡорттарының ауылдары хасил булғаны

Келәйле, Дим башынан килеп — Дәмми бейгә ҡаршы, Илеүкәй менән Яйыҡ батыр Ыршаҡ бейгә ҡаршы һуғышҡан.

Был өс батыр ҙа үҙҙәрен меңбашы* итеп йөрөткәндәр. Ыршаҡ бейҙе еңгәс, Илеүкәй, Келәйлегә ярҙамға барып, [икәүләшеп] Дәмми бейҙе еңгәндәр. Шунан үҙ-араһы ерҙе бүлешеп, Дим буйына һәр ҡайһыһы үҙ ҡул аҫтындағы йөҙ башлыҡтарын ауыл-ауыл итеп ултыртҡандар. Дим башынан алып Келәйле бейҙең меңдәре: Сафар, Туҡһанбай, Аҙнай, Бикҡол, Ҡасҡын, Ҡаныҡай тигән йөҙ башлыҡтары ултырған. Ул йөҙ башлыҡтары исеменә ауылдар аталып, ошо көндә лә улар Келәйле меңе тип йөрөтөлә. Улар ошо көндә Бишбүләк, Миәкә райондарында йәшәйҙәр[3].

Илеүкәй батыр, Дим ағышына үҙ йөҙҙәре менән Балғажы, Ҡунаҡас, Әбеш, Йәнәби, Алдар, Илсеғол тигән батырҙарын урынлаштырып, уларҙың балалары менән ауыл булған. Шул йөҙ башлыҡтарының Йәнәби (ауылы) менән Илсеғол ауылдары — Миәкә районы, ҡалғандары Әлшәй районы ҡарамағында йәшәй. Был ауылдар борон-борондан **Илеүкәй меңе** тип йөрөтөләләр.

## 2. Яйыҡ батырҙың бер имсәктәш һигеҙ улының йәш ҡатыны ҡаҙаҡ ҡыҙынан тыуған Туҡ батырҙы ситләткәне, Туҡтың уларға яу асҡаны, Илеүкәйҙең ике яҡты килештергәне

Яйыҡ батырҙың туғыҙ улы булған[4]: Әлшәй, Аҫылай, Татлыбай, Ҡайып, Ҡармыш, Сурай, Сураҡай, Иҙрис, Туҡ. Былардың һигеҙе — бер әсәнән, Туҡ үҙе бер әсәнән булған.

Яйыҡ батыр [ҙа] һигеҙ улын йөҙ башы итеп, үҙҙәренә ғәскәр биреп, ауыл-ауыл итеп ултыртҡан. Йәш бисәһенән тыуған Туҡ исемле улын үҙ янында ҡалдырған. Яйыҡ батыр үлгәс, бының һигеҙ улы, бер яҡ[лы] булып, икенсе бисәнән тыуған Туҡты ситләтеп, уға ер бирмәгәс, ул, ситкә китеп, хәҙерге Баймаҡ, Ҡыпсаҡ райондарынан[5], атаһы килгән Яйыҡ буйҙарынан ғәскәр йыйып, ағаларына яу асҡан. Улар менән һуғыша башлағас, Илеүкәй уларҙы килештергән.

Туҡ, үҙе менән килгән батырына ер һорап, Дим тамағынан ер алған. Хәҙер Әлшәй районының — түбәнге Дәүләкән, Шишмә районына ингән ауылдар шуның ҡырҡ батырына эйәреп килгән халыҡтар. Шуға уларҙы **Ҡырҡ меңе*** тип йөрөтәләр.

## 3. Туҡ батырҙың туй үткәргәне, ағыулы эсемлектән әсәһенең һәләк булғаны, туғыҙ ағайҙың тағы ла асыуланышҡаны

Туҡ батыр, бөтә үҙ батырҙарын йыйып [ул саҡта исеме лә булмаған], хәҙерге Асылыкүлдә туй үткәргән. Шунда туйҙа һигеҙ ағаһы ла, Илеүкәй ҙә, Келәйле лә килгән булған. Ҙур туй булған: ат саптырғандар, батыр көрәштергәндәр. Көрәгә асҡас, тәүге туҫтаҡты [ҡырҡ өйлө] мең[е] башҡортона бирергә булғандар. Туҡ, үҙ туҫтағын тотҡас, былай тип [әйтә]:

— Ҡыҙ булһаң да, тайшанмай,
Аҫау* тотоп менгәнһең,
Ҡаҙаҡ иле — киң илдең
Батырын да күргәнһең;
Сая-сая һайланың*,
Ҡоҙоҡ та һыуын һыуланың,
Атам атҡан йөҙөктө
Бүләгем*, тип алғанһың.

Алма сыбар ат менеп,
Атамды һөйөп килгәнһең[6];
Ҡаҙаҡ ерен ташлап һин
Илеңә дошман булғанһың,
Атам менән йәнәшә

Күп яуҙарҙа булғанһың[7],
Ауырлыҡтар күргәнһең:
Аслыҡтарҙа йөрөгәнһең,
Туғыҙ айҙа табарҙы
Ете айҙа тапҡанһың —
Миңә әсә булғанһың,
Иңбашыңа мине артып,
Үҙең яуҙа йөрөгәнһең;
Ҡарағым*, тип йыуатып,
Мине һәр саҡ һөйгәнһең;

Мең башының аяғын*,
Әсәм, һиңә бирәйем.
Минең урынға аяҡ баҫ,
Һинең урында торайым;
Ошо туйың, тиәйем;
Батыр итеп үҫтергәс,
Шатлыҡ күр һин, тиәйем;
Бары ырыу ейгәндә,
Үҙ тоҡомон күргәндә,
Күстән ҡалған ҡарасайҙай*,
Бер яңғыҙың торғанда,
Ҡаҙаҡ ҡыҙҙан тыуған, тип,
Ер-һыу бирмәй был илдә,
Яңғыҙым ҡаңғырып торғанда,
Күҙең һалып йөҙөмә,
Аҡыл биреп үҙемә,
Батыр итеп торғанда;
Һинән алда мин эсеп,
Илдә данлы буламмы?
Һинең бәҫең китәреп,
Һинең улың буламмы? —

тип йырлаған да, үҙенә бирелгән туҫтаҡты әсәһенә тотторған. Әсәһе, ҡымыҙ эсеү менән — шунда уҡ йығылып үлгән. Туҡты үлтереү өсөн, ағалары [ҡымыҙға] ағыу һалып биргән булған. Халыҡ[тан] береһе лә эсмәгән. Барыһы ла ҡурҡҡан. Һыуында берәр нәмә барҙыр, тип шикләнгәндәр.

Туҡ менән ағалары араһында асыуланышыу, дошманлыҡ киткән. Былар тағы һуғышҡандар. Туҡтың әсәһен [ул] салҡан [ҡолаған ергә] күмгәндәр. Шуға күрә тауының исеме Салҡан.

Ағай-эне асыуланышҡан, дошманлашҡан туғайлыҡты Асы[у]лы тип атағандар. [Шунда күл барлыҡҡа килгән]. Уны **Асылыкүл** тип йөрөтәләр[8].

## 4. Туҡ батырҙың ҡалмыҡтарҙан еңелгәне, Илеүкәйҙән ярҙам һорағаны, икәүләшеп ҡалмыҡтарҙы еңгәне

Туҡ батыр бында йәшәмәй, күп кешеләрен эйәртеп киткән. Ҡалмыҡтар араһына барып, яу асҡан. Улар менән һуғышҡан. Уларҙан еңелгән. Илеүкәй батырға ҡайтҡан. Унан ярҙам һораған.

*Илеүкәй[ҙең әйткәне]:*

— Атанан етем ҡалғандың,
Йөрәген һары алмайса,
Күҙе йәшкә мансылып,
Дошман, дуҫын айырып,
Урманда уҡ юнмайса,
Ҡара төндөң әңерен
Үҙе эҙләп тапмайса,
Батырмын, тип, ир-егет
Яуға атын менәрме?

Һайыҫҡандай сыбарлы,
Һыналмаған ир менән
Батыр яуға сабармы?

Атаң алып әсәңде,
Намыҫын тапап бер илдең,
Үҙенә уҡ төҙәтте;
Сит ҡандан тыуған, тиеп,
Ағаларың ситләтте;
Егетлек йәшең үҙеңде
Илгә батыр танытты,
Биленә ҡорман* быуҙырҙы;
Ҡойон-дауыл уйнатып,
Урал һыртын саңлатып,
Алғыр бөркөттәй үҙеңде
Ҡыйғыр итеп танытты.

Атанан туғыҙ тыуһаң да,
Бер ҡашыҡтан ейһәң дә,
Атҡа берҙәй менһәң дә,
Маңлай тирең сығарып,
Егерме яуҙа булһаң да,
Яңғыҙ ҡалдың терәкһеҙ.

Иң әрле батыр булһаң да,
Яңғыҙ ҡалып нүгәрҙән*,
Әсә ауыҙынан ем көткән
Бала ҡоштай килгәнһең,
Уғым ҡанға буярға
Күҙең терәп килгәнһең;

Илеүкәй тигән атымды
Ырыҫыңа шоңҡар итәйем,
Ҡалғас ҡара көнөңә,
Йәнем ҡорбан итәйем, —

тип, Туҡтың күңелен йыуатҡан, ти, бергә яуға киткән, ти.

Ҡалмыҡтарға ҡаршы [Илеүкәй менән Туҡ] яу асҡан. Күп ваҡыттар һуғышҡан. Ете ҡалмыҡ бейенә икеһе ҡаршы һуғышып, [уларҙы] еңгәндәр.

## 5. Илеүкәй менән Туҡтың еңеү туйы яһағаны, ҡалмыҡ бейе менән килешеү төҙөлгәне, Туҡтың Дим буйында хандарҙы еңгәне

Ете бейҙең алтыһы ҡасҡан. Береһе Илеүкәй менән Туҡҡа буйһоноп, килешеү туйы яһағандар. Туҡ үҙ кешеләре менән ҡалмыҡтар биләгән хәҙерге Туҡ йылғаһы буйында йәшәп ҡалған. [Хәҙерге] Ырымбурға яҡын бер йылға буйында Илеүкәй менән ҡалмыҡ бейе килешкән ерҙе әле лә **Ҡалмыҡ саҡырған** тип йөрөтәләр.

Илеүкәй шул китеүҙән ҡалмыҡтар менән һуғышып, ҡаҙаҡ иленә ҡыуып киткән. Урта Азия яҡтарында күп һуғышта булған. Ул унда бер хандың ҡыҙын алған. Унда уллы-ҡыҙлы булып тора башлағас, беҙҙең Дим, Иҙел буйҙарын хандар талауын ишетеп, тағы яу менән ҡайтҡан. Үҙе менән бик күп ғәскәрҙәр эйәртеп, хандарҙы еңгән.

## 6. Илеүкәйҙең Мораҙымға васыят әйткәне, аҡыл биргәне, Ҡыпсаҡ-Асҡар, Мораҙым ауылдарының хасил булғаны

Яуҙа яралангас, [Илеүкәй] улы Мораҙымға:

— Мин үлһәм, ошо аҡ дөйәмә арт[маҡла], дөйәм ҡайҙа барып сүкәйә, шунда күмерһегеҙ, — ти. — Хандан алған малдарығыҙҙы Ҡыпсаҡ иленән эйәреп килгән батырҙарыма бүләк ит. Ҡайҙа малдары төйәкләһә, шунда үҙҙәренә ҡыуыш төҙөрҙәр. Улым, үҙең яҙ көнө торлағың һайла. Ат менеп, яуға сыҡһаң, ҡайһы урында баш осонда турғай һайрай, шул урынды төйәк ит. Ҡайҙа ял иткәндә, шунда япалаҡ тауышын ишетһәң, шул урынға ҡәбереңде билдәлә, — тигән. [Мораҙым:

— Ярар, атай, — тигән].

Илеүкәй үлгәс, аҡ нарға* артҡандар. Аҡ нар килеп Нарыҫ тауының[9] бәләкәй генә сусағына сүккән һәм шул ерҙе аша сығып, [башҡа дөйәләр менән бергә] өйөрөлөшөп, Нарыҫтау ҡаршыһы туғайҙа көнө буйы себенләп торһалар ҙа, төнөн түбәнләп, хәҙерге Ҡыпсаҡ ауылы[10] ултырған ергә барып юшағандар. Шул урынға Ҡыпсаҡ халҡы ултырып, хәҙерге Ҡыпсаҡ ауылы — шунан ҡалған ауыл.

Атаһы үлеп бер йыл торғас, Моразым, яуға барғанында, баш осонда турғай һайрағас, хәҙерге Боҙаяҙ районы Мораҙым ауылы [11] янындағы мәмерйәгә барып, торлаҡ төҙөгән. Ул ауылға исем шунан ҡалған.

Ул (Мораҙым. — Ә. С.) бик күп яуҙарҙа булған. Ҡайҙа үлеп ҡалғанын әле атайҙар белмәй [12].

## 7. ИҘЕГЕ

Борон бер әбей менән бабай йәшәгән. Уларҙың бер малайы булған. Уны Иҙеге тип атағандар. Атаһы менән әсәһе күп тә үтмәй үлеп киткәндәр. Иҙеге етем ҡалып үҫә. Һәм үҫеп еткәс, ялсы булып тороу өсөн, бай эҙләп сығып киткән, ти. Һәм ул Туҡтамыш ханға ялланған. Туҡтамыш хандың туғыҙ улы, һигеҙ ялсы малайҙары булған. Ә Иҙегене туғыҙынсы ялсы итеп ҡабул иткән, ти. Иҙеге, ысын исемен йәшереп, үҙен Ҡарабай тип таныҡҡан. Уның хеҙмәте ханда шул булған: ул хандың улдарына аш ташып ашатҡан.

Иҙеге килеп инһә, Туҡтамыш хан йоҡлап ятҡан еренән һикереп килә лә тора икән, ти. Хандың ҡатыны быға бик аптырай, уны түшәгенә ҡуша тегеп ҡарай — түшәген һөйрәп тора. Хандың ҡатыны бигерәк ныҡ аптырай: үҙе хан, ялсыһы инһә, үҙе һикерә лә тора! Берҙән-бер көндө хан ҡатыны бер туҫтаҡ ҡатыҡҡа кесе яраү итә лә уны ултыртып ҡуя. Иҙеге килеп инә. Был ҡатын уға:

— Ҡарабай, ана, һикеләге ҡатыҡты алып эс, — тигән. Иҙеге уға:

— Килгәнемә туғыҙ йыл, түрбашыңа бер барып һыу эсмәнем. Эпкиһәң, эсермен, эпкимәһәң — юҡ, — тигән. Шунан теге ҡатын ҡулы ҡалтырай-ҡалтырай ҡатыҡты әпкилеп ултыртҡан. Иҙеге, кеҫәһенән бәкеһен алып, уны [арҡыры-буйлы] телгеләй-телгеләй ҙә иҙәнгә күтәреп һуға ла сығып китә. Сыҡҡас та, ҡапҡа ҡарауылсыһы Янбайға әйтә [улар бик ныҡ дуҫлашҡан булғандар]: «Мин бөгөндән бынан китәм, һин ҡапҡа ҡарауылсыһы булып торма, минең һүҙҙе тыңларһың», — тигән дә иптәштәре менән хушлашырға киткән.

Ошо ваҡыт Туҡтамыш хан төндә күргән төшөн юратырға төш юраусы әбейҙе саҡыртҡан. Әбей уға:

— Бер һарыҡ һуйып ашатһағыҙ, юрайым, — һарыҡты тотҡанда, бәрә-бәрә-бәрә тип саҡырығыҙ: ниндәйе әләкһә, шуны тотоп һуйығыҙ, — тигән ти.

Саҡырһалар, ҡутырлы ғына һарыҡ килгән. Шуны һуйып әбейгә ашатҡандар ҙа, Туҡтамыш хан төшөн һөйләгән. Әбей төш юрай башлаған, ти: «Уны Ҡарабай тип йөрөтһәгеҙ ҙә, Ҡарабай түгел икән. Уның ысын исеме Иҙеге икән. Ул бик ныҡ ҡәһәрләнеп киткән икән. Кире ҡайтмаҫ ул, шулай ҙа ҡапҡа ҡарауылсыһы Янбайҙы ебәреп ҡарағыҙ, ул уның яҡын дуҫы икән». Әбей көйләп юрай:

Ул китәр, ул китәр ул,
Сымтырмыр* ханға барып етәр ул;
Сымтырмыр хан ҡул бирһә,
Әйләнеп килеп етәр ул;
Әйләнә алмай ятҡан иленде
Әйләндереп китәр ул,
Тулғана алмай ятҡан иленде
Тулғандырып китәр ул;
Туҡтамыш хандың туҡалаҡ башын
Ҡанъяғаға артып юртар ул, —

тип юрай, ти, әбей.

Был ваҡытта Иҙеге, ат ҡараусы һигеҙ иптәше янына барып, үҙенең китергә йыйыныуын әйткән. Уға иптәштәре: «Һин китһәң, беҙ ҙә китәбеҙ», — тип, ат һайлап менеп алалар. Иҙеге яҡшы ат — сыбар ат менеп ала. Улар барып Иҙел аша сығып торалар. Шул ваҡыт Туҡтамыш хан Янбай менән үҙенең туғыҙ улын Иҙегене ҡайтарырға ебәрә. Улар килеп Иҙелдең был яғынан, Иҙегеләр аръяҡта торалар һәм Янбай менән Иҙеге йылға аша әйтешкәндәр:

— Ай, Иҙегем, Иҙегем,
Ҡайтһана, Иҙегем, ҡайтһана,
Ҡайтып, Иҙел кисһәнә!
— Ай, Янбайым, Янбайым,
Мин ҡайтмамдыр, ҡайтмамдыр,
Ҡайтып, Иҙел кисмәмдер,
Ҡайтып, Иҙел кисмәмдер.
— Ай, Иҙегем, Иҙегем,
Ҡайтһана, Иҙегем, ҡайтһана,
Ҡайтып, Иҙел кисһәнә,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы
Ут урындай* тояҡлы,
Аны ла алып менһәнә!
Өҙәңгеһе — өҙә алтын,
Ҡойошҡаны — ҡойма алтын,
Аны ла алып менһәнә,
Аны ла алып менһәнә!
— Ай, Янбайым, Янбайым,
Мин ҡайтмамдыр, ҡайтмамдыр,
Ҡайтып, Иҙел кисмәмдер.
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Ут урындай тояҡлы,
Аны ла алып менмәмдер.
Өҙәңгеһе — өҙә алтын,
Ҡойошҡаны — ҡойма алтын,
Аны ла алып менмәмдер.
— Айһылыуҙан һаҡлыраҡ,

Көнһылыуҙан күрклерәк.
Аны ла алып ҡосһана,
Аны ла алып ҡосһана!
— Аны ла алып ҡосмамдыр,
Ҡуйыным ҡото киткәндер.
— Ай, Иҙегем, Иҙегем,
Ҡайтһана, Иҙегем, ҡайтһана,
Ҡайтып, Иҙел кисһәнә.
Туҡтамыш хандың туғыҙ улы
Килеп баҫыр ҡаршыңа,
Ҡанъя ҡорор башыңа.
— Ай, Янбайым, Янбайым,
Тарҡылдама, Янбайым.
Һеҙ туғыҙ ҙа беҙ һигеҙ
Килер булһаң, кил, дуңғыҙ,
Китер булһаң, кит, дуңғыҙ! —

тип, Иҙеге Иҙел аша быларға ынтылған икән — Янбай Туҡтамыш хандың туғыҙ улы менән таптырлап сығып тайған, ти.

Иҙеге иптәштәре менән әй бара, әй бара, ти. Иптәштәре арып ҡала, ҡала баралар, ти. Шунан Иҙеге: «Иптәштәр, быға тиклем килдегеҙ, мин бер үҙем китәйем», — тип, иптәштәре менән хушлашып, ары киткән, ти.

Шунан китеп барһа, алыҫта бер ерҙә бер кеше һынлы йән эйәһе күренә. Был дейеү була. Ул ҡоҙа булып Сыңғыҙ ханға китеп бара, ти. Дейеү Иҙегене үҙенә саҡыртып ала ла:

— Әй, [кем икән, тиһәм], Иҙеге икәнһең дә, — ти. Иҙеге:

— Юҡ, мин Иҙеге түгел, миңә Иҙегелек тейеү ҡайҙа ул. Иҙегенең түбәһендә соҡор бар. Шул соҡорға ҡырҡ бөртөк тары һыя, — тигән, ти. Шунан дейеү:

— Туҡта, мин һинең Иҙеге икәнеңде беләйем, — тип, уға бер ат һуйып бешерергә, ҡырҡ кешегә бер ат һуйып бешерергә әйткән, ти. Ҡырҡ кеше ат һуйып бөтөргәнсе, Иҙегенең ите бешеп тә сыҡҡан, ти. Унан дейеү:

— Эт, белдем бит Иҙеге икәнеңде! — тигән. Иҙеге уға:

— Юҡ, мин нишләп Иҙеге булайым. Мин — яңғыҙ, улар — ҡырҡ кеше бит, күмәк булғас, һөйләшеп, бер-береһенең ауыҙына ҡарап тик торалар, ә мин, бер үҙем булғас, тик эшләүемде генә беләм, — тигән.

Дейеү Иҙеге бешергән итте ашап бөтә лә ята. Шул ваҡытта Иҙеге атына атлана ла дейеүҙе уҡ менән атырға йәйәһен тарта — сыбар аты тубыҡтан ергә бата. [Был ваҡытта] дейеүҙең ҡатыны иренең арҡаһын һыйпап ултыра икән. Ул Иҙегегә дейеүҙең биленә ымлап күрһәтә: «Ошонда ат», — ти. Шунан Иҙеге атып ебәрә — уҡ дейеүҙең биленә ҡаҙала, дейеү ырғып тороп Иҙегенең атының ҡойроғона йәбешә. Дейеүҙең ҡатыны Иҙегегә ымлап: «Шаҡара тарт», — ти, Иҙеге атын шаҡара тарта. Де-

йеүҙең биле һына һәм сыбар аттың ҡойроғо ла өҙөлә. Шуға ла сыбар аттарҙың ҡойроғо сомтор булып ҡалған, ти. Шунан дейеү үлер алдынан Иҙегегә: «Мин һинең Иҙеге икәненде белгәйнем, атам, әсәм миңә, үлемең Иҙегенән була, тигәйне. Мин үләм инде. Мин үлгәс һин, мине һуйып, йөрәк майымды алып, түбәң өҫтөнә һал, унда ҡырҡ ирҙең көсө бар, бөтәһе лә һиңә булыр», — тигән дә үлеп тә киткән. Иҙеге, дейеүҙе һуйып, йөрәк майын ала ла шунда ятҡан күбәләй ҡара таш өҫтөнә һала. Май ҡара ташты иретеп төшөп китә.

Шунан Иҙеге Сымтымыр ханға бара, уның ҡыҙын кәләш итеп ала. Уларҙың улы була. Улын ул Әлбәкмырҙа тип атай. Улы ҙурайғас, [Иҙеге уға] күрәҙәнән ҡатын алып бирә. Иҙеге улын көслө булырға өйрәтә. Ағастарҙы йолҡалар, көрәшәләр.

Бер ваҡыт Иҙеге хандан һорай:

— Минең бер ерҙә үс ерем бар ине. Шунда барайым әле, — ти.

— [Ярар һуң, бар, — тип] хан рөхсәт итә. Улы менән икәүләп барып, Иҙеге Туҡтамыштың ғәскәрен ҡырып һала. Туҡтамыш хан үҙе ҡамышлыҡҡа йәшенгән була. Уны эҙләйҙәр. Ҡыҙғатау Туҡтамышты күреп ҡала ла:

— Туҡтамыш хан бында, Туҡтамыш хан бында! — ти. Туҡтамыш хан уға:

— Ҡыҙғатау тигән, ай, ҡыҙылғош,
Күп һайрама, бер һайра,
Күп һайрама, бер һайра, —

ти. Ә Ҡыҙғатау һаман да [һайрауын ғына белә], ти. Шуның буйынса Иҙеге Туҡтамыш ханды таба ла, башын ҡырҡып алып, ҡанъяғаға* аҫып, ауылдар буйлап йөрөй. Ул тик Янбайҙы, Туҡтамыштың ике ҡыҙын ғына имен ҡалдыра. Шунан пар аттар егеп, ике ҡыҙҙың уртаһына ултырып, ҡайтып китә.

Ҡайтып етеп килгәндә, Янбай Әлбәкмырҙаға (улар һыбай арттан килгән булалар):

— Эй, мынау ҡартлас ике ҡыҙҙың уртаһына ултырып ҡайтып килә, бына тигән йәш егет барында! — тигән. Шунан Әлбәкмырҙа атаһын ҡамсы менән берҙе яра тартып, һөйрәп төшөрөп ҡалдырған да, ҡыҙҙар уртаһына үҙе ултырып, ҡайтып киткән. Ике күҙе атлығып сығып, атаһы ятып ҡалған, ти.

Әлбәкмырҙаның ҡатыны быны, [иренең, Янбай һүҙенә төшөп, атаһына ҡул күтәреүен, шуның арҡаһында ҡайныһының һуҡырайып ҡалыуын], һиҙеп ҡалған да, сәңгелдәктәге йәш баланың аҫтына [юрый] сәнскеле сыбыҡ һалған да, үҙе йәшенеп торған. [Бала шарылдап илай башлаған.] Әлбәкмырҙа, килеп инеү менән, илап ятҡан балаһын барып ала ла:

— Ай, баланы ҡалайтып һалып ҡуйғандар! Йән генәләрен ҡалдырмаҫ инем! Ҡайҙа киткәндәр?! — тип ҡысҡыра. Шул ваҡыт ҡатыны килеп сыға ла:

— Ә-ә-ә, бала шулай ғәзиз була ул! Һине лә атайың шу лайтып аҫраған, ә һин атайыңды, бер алйоттоң һүҙенә төшөп, нишләтеп киттең? Ана, атайыңды барып ал! — тигән, ти.

Шунда Әлбәкмырҙа йүгереп сығып, бер һелтәүҙә Янбайҙы үлтерә һуға ла, атаһын барып алып, ике күҙен дә ҡуйҙыртып, һаман да яҡшы ғына донъя көтөп торалар, ти.

## 8. ТУҠТАМЫШ ХАН МЕНӘН ИҘЕҮКӘЙ

Туҡтамыш хан булған, уның ҡулында Иҙеүкәй тигән ҡол булған. Аҙаҡтан ул бей булып исемләнеп китә.

Иҙеүкәй үҙе бик баһадир, шундай көслө бер батыр була. Туҡтамыш хан уның батырлығынан һәр ваҡыт ҡурҡыр булған. Иҙеүкәй кергән ваҡытта, Туҡтамыш хан, ҡурҡышынан, урынынан шыуа биреп ултыра. Хан үҙенең шыуғанлыған бер ҙә һиҙмәй. Мәгәр хандың ҡатыны быны һиҙә. Туҡтамыш ханға:

— Һин Иҙеүкәй ҡолдан ҡурҡаһың бит, — ти. Туҡтамыш хан әйтә:

— Юҡ, мин ҡурҡмайым. Нишләп мин бер ҡолдан ҡурҡайым, ти?!

Ҡатыны эстән генә әйтә:

— Ярай, улай булғас, — ти. Шунан, Туҡтамыш ханға белгертмәй генә, уның ултырған урынына кейемен ҡуша тегеп ҡуя. Ҡатыны, Иҙеүкәй ҡолдо, бер йомош тапҡан булып, хандың янына керетә. Иҙеүкәй килеп кергәс тә, хан:

— Ни йомош, Иҙеүкәй? — тип, артындағы тегеп ҡуйған нәмәләре менән [бергә] шыуа биреп ултыра. Шул ваҡыт ҡатыны әйтә Туҡтамыш ханға:

— «Мин нишләп ҡурҡайым [ти бер] ҡолдан», тинең. Хәҙер белдеңме инде үҙеңдең ҡурҡҡанлығыңды? Бына аҫтындағы нәмәләрең [түшәк-мүшәгең] менән шыуа биреп ултырҙың, — ти.

Шул ваҡыт хан үҙенең ҡурҡҡанлығын аңлай һәм бик гәрләнә. Хан «Был Иҙеүкәйҙән нисек ҡотолорға?» тигән уйға төшә...

Хан үҙенең вәзирҙәрен саҡырып алып:

— Иҙеүкәйҙән нисек ҡотолорға? Үлтерергәме? — тигән. (Вәзирҙәре төрлө-төрлө) кәңәш бирә. Бер вәзир әйтә:

— Быны гәрләндереп, эйе, намыҫландырыу [кәрәк]. Шул ваҡытта китер, — ти.

Хандың ике ҡыҙы була. Береһенең исеме Ғәнәкә, икенсеһенең — Тутай. Бер вәзир әйтә:

— Беҙ бер ҙур ҫарайҡҡа* бал ҡойҙороп, шул ҫарайҡҡа Иҙеүкәйҙең күҙе алдында Ғәнәкә менән Тутайҙан бәүел һалдырып, Иҙеүкәйгә шул балды эсерәйек. Шунан һуң ул, гәрләнеп, үҙенәүҙе китер...

Хан ул мәслихәтте мәғҡул күрә*. Шунан Иҙеүкәйҙе саҡырып алып, ҫараяҡҡа бал ҡойҙороп, [күҙенең алдында] ҡыҙҙарынан бәүел иттереп, уға эсергә бирәләр. Иҙеүкәй, күҙен йомоп, аяҡ өҫтө тороп, бер тынала эсә лә ханға ҡарап:

— Бы барғандан барырмын,
Бы барғандан барырмын,
Се Тимер ханға барырмын.
Се Тимер хан ҡул бирһә,
Хоҙай Тәғәлә юл бирһә,
Башыңды бауҙап китәрмен,
Ҡаныңды, һыуҙай, түгәрмен.
Утауыңды* ауҙарып,
Турылғыңды* тупым ҡылырмын,
Сағарағыңды һындырып,
Һарайыңды утын ҡылырмын,
Табаныңды тегеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуй күтенә һалырмын, —

ти ҙә: «Хуш бул!» — тип сығып, атына менеп, китә. Ҡалған хан вәзирҙәре менән бик ҡурҡышып ултырып ҡалалар:

— Был Иҙеүкәй ҡасан да булһа беҙҙе ҡуймай икән! Инде нишләргә? — тип кәңәш ҡоралар. Шул ваҡыт әйтешәләр:

— Беҙ быны ебәрмәйек. Ғәнәкә менән Тутайҙың берәүһен бирәбеҙ, туй яһайбыҙ, тип, кире ҡайтарып алып, туй яһаған кеше булып, шул туйҙа буҙа эсереп, мас итеп*, эсереп үлтерәбеҙ.

— Быны ҡайтарыр өсөн хәйләкәр Янбайҙы ебәрәйек. Башҡаларыбыҙ ҡайтарып ала алмаҫ, — тип, хәйләкәр Янбайҙы Иҙеүкәй артынан ебәрәләр.

Ул арала Иҙеүкәй Иҙел һыуын аша сыҡҡан була. Артынан хәйләкәр Янбай бара. Иҙелһыуҙың бер яғында — Иҙеүкәй, бер яғында Янбай торалар, ти. Шул ваҡыт Иҙеүкәйгә ҡарап, Янбай әйтемдәр әйтә:

— Һай, ҡайт Иҙеүем*, ҡайтһана,
Ҡайтып, бер Иҙел кисһәнә,
Инҫәҙе бейек буҙырҙан*
Иңкәйеп бер эсһәнә!
Ғәнәкә менән Тутайҙың
Икеһенен берҙәй бирә лә,
Берәүһен һайлап ҡосһана!
Ҡолонда* имгән, таҙа ла имгән
Ҡонанында* арҙа* имгән,
Дүнәнендә* өйрәткән,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә еткергән,
Етеп тә болан һуҡтырған,

Ут урынындай тояҡлы,
Айғыр, бөркөт ҡабаҡлы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы,
Ҡыҫҡа бәкәл, өкө аяҡ;
Муйындары бер ҡолас
Ат яҡшыһын менерһең,
Тун яҡшыһын кейерһең.
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын
Ат бирә лә, менһәнә! —

ти Янбай. Шунан һуң хәйләкәр Янбайға Иҙеүкәй әйтә:

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай,
Аҡылың да юҡ, Янбай,
Ҡайта Иҙел кисмәм мин,
Инҫәҙе бейек буҙырҙан,
Иңкәйеп, мин эсмәмен.
Ғәнәкә менән Тутайҙың
Икәүһен берҙәй бирһә лә,
Берәүһен һайлап ҡосмам мин,
Ат бирһә лә, менмәм мин, —

ти. Былай ҙа хәйләкәр Янбай, Иҙеүкәйҙе нисек тә булһа албырғатып, шулай ҙа алып ҡайта.

Хан аулаҡ майҙанға саҡырып, тирмәләр ҡорҙороп:

— Иҙеүкәйгә ҡыҙымды бирәм. Туй яһайым, — тип үҙенең рәғиәтенә* иғлан тарата. Халыҡ йыйыла, Иҙеүкәйҙе, кейәү ҙә кейәү, тип, тирмәгә төшөрәләр. Шул ваҡыт эскелек башлайҙар. Иҙеүкәй ҙә бында эсеп мас була. Мәгәр Иҙеүкәйҙең Аңғаһын исемле бер дуҫы була. Аңғаһын эштең хәйлә менән Иҙеүкәйҙе үлтереү өсөн булғанлығын белә. Туйға килгән халыҡтарҙың менгән аттарының берәр яҡ өҙәңгеләренең бауын ҡырҡып ҡуя ла, Иҙеүкәйҙең менгән атының айыл тартмаларының таралғыһын тартып ҡуя.

Иҙеүкәй мас булғас, хандың ҡатыны бер ҙур алдырға буҙа ҡойоп, эсенә кеше үлтергес ағыу һалып, Иҙеүкәйгә эсерергә килә. Аңғыһын быны белә. Иҙеүкәйҙең ултырған тапҡырына, кирәгәнең* төтөндөгөнән ятып, Иҙеүкәйгә бер-ике һүҙ әйтемсәк әйтә.

Минең дә [генә] атым — Аңғыһын,
(Дуҫым, һайыҫҡандай, аң булың —
Буҙлай-буҙлай биргән буҙаның)
Байҡап [ҡына] эс һин һуңғыһын! —

тип әйткәс, Иҙеүкәй эште аңлай ҙа, хандың ҡатыны, кейәү ҙә кейәү, тип, алдыр менән килтереп баҫҡан икән — кире һирпеп ебәреп, ишеккә ҡарап, тороп атыла.

Хандың әҙерләп ҡуйған кешеләре Иҙеүкәйҙе сығармаҫҡа йәбешә. Иҙеүкәй көс бирмәй*, тирмә өйө менән ҡуша һөйкәп, тышҡа сыға ла атына менә. Шул ваҡыт [атына менгәс]:

— Бы барғандан барырмын,
Бы барғандан барырмын —
Се Тимер хан ҡул бирһә,
Башыңды, бауҙай, киҫермен,
Ҡаныңды, һыуҙай, түгермен.
Утауыңды* ауҙарып,
Турылғыңды* туҡым ҡылармын,
Сағарағыңды* һындырып,
Уғыңды* утын ҡылырмын,
Табаныңды телеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуй күтенә һалырмын, —

ти ҙә сабып сығып китә [Иҙеүкәй].

Хандың батырҙары, ат(тар)ына менеп, ҡыуырға итһәләр ҙә, эйәрҙәренең өҙәңге бауҙары ҡырҡылыу сәбәпле, аттарына менә алмай, тороп ҡалалар.

Иҙеүкәй шул китеүҙән китеп, бик күп ваҡыттар барғас, бер тауҙың башында бер сатыр күрә. Шул сатырға ҡарап китә. Барһа — бер ебәк сатыр эсендә бер егет йоҡлап ята. Ул егеттең янында бер ҡыҙ ебәк яулыҡ менән, себен ҡундырмай, елпетеп ултыра. Иҙеүкәй сатыр янына аты менән барып, ҡыҙҙан:

— Был кем? — тип һорай. Шул ваҡыт ҡыҙ:

— Был ҡалмаҡ батыры, мин Се Тимер хандың ҡыҙы, — ти.

— Бында нишләп килеп ултыраһың?

— Ошо ҡалмаҡ батыры атамды баҫып алып, китеп ултыра.

Иҙеүкәй әйтә:

— Әгәр ҙә мин ҡалмаҡ батырын үлтерһәм, ата йортона һәм миңә барырға ризаһыңмы?

Ҡыҙ әйтә:

— Әгәр ҙә үлтерә алһаң, бик риза булыр инем. Был ҡалмаҡ батыры бик сиктән сыҡҡан батыр. Көслө. Үлтерә алмаҫһың.

Шул ваҡыт Иҙеүкәй:

— Уятып үлтерергәме, әллә йоҡола көйө үлтерергәме? — ти.

Ҡыҙ әйтә:

— Уятма! Уятһаң, үлтерә алмаҫһың. Йоҡлаған көйө үлтер, — ти.

Шул ваҡыт Иҙеүкәй ат өҫтөнән ҡалаҡ башлы уғы менән ҡалмаҡтың үксәһенә ата. Ҡалмаҡ батырының үксәһенең яртыһын уҡ ҡырҡып үтә. Ҡалмаҡ батыры ырғып тора ла Иҙеүкәйгә йәбешә. Иҙеүкәйҙе ебәрмәй, атынан [һөйрәп] төшөрөп алып, икәүһе алышып, көрәшә башлай. Ҡалмаҡ батырының үксәһенән ҡаны ҡойолоп йөрөй. Шулай ҙа Иҙеүкәйгә бирешмәй. Иҙеүкәй ҡыҙға ҡарап әйтә:

— Әгәр ҙә миңле булһаң, ҡалмаҡ батырының сәсенән тотоп,

үңәсенең ҡырҡылмаған яғына тартып, шаҡар[1], — тигәс, ҡыҙ ҡалмаҡ батырының сәсенән тартып, үңәсен ҡырҡылмаған яғына ҡарай тарта һәм башы әйләнеп төшә лә, ҡалмаҡ батыры үлә[2].

Шунан ҡыҙҙы алып, Иҙеүкәй батыр Се Тимер ханға ҡарай китә. Се Тимер ханға барып, ҡыҙын тапшырғас, ул, ҡыҙын биреп, Иҙеүкәйҙе кейәү итә.

Иҙеүкәй менән ҡыҙ донъя көткәс, унан бер ул була. Уға Мораҙым тип исем ҡушалар.

Улы ҙурайып ун ике йәштәргә еткәс, атаһы Иҙеүкәй үҙенең башынан үткән Туҡтамыш хандың ҡылмышын уға һөйләй. Мораҙым Туҡтамыш ханға бик намыҫ итеп, асыуы килә. Бер көн атаһы ла белмәй [ҡала] — Мораҙым, 'атҡа менеп, Туҡтамыш ханды эҙләй китә.

Мораҙым Туҡтамыш ханға яҡынлашҡас, юлда күргән [бер] кешенән Туҡтамыш ханды һорашып бара.

[Мораҙымдың] килеүен Туҡтамыш хан ишетә. Туҡтамыш хан, үҙенең Тарланбот Турат тигән атына менеп, Ҡамҡалыкүл Ҡомсыуаҡ тигән күлгә ҡаса.

Ҡамҡалыкүл Ҡомсыуаҡ күле ҙур ҡамышлы күл булған. Хан ҡамыш араһына инеп китә. Тарланбот Турат шул ҡәҙәре йөрөк ат булған: ул сапҡан ваҡытта, ут урынындай итеп, ерҙе әйләндереп китер булған.

Мораҙым [Туҡтамыштың] шул ҡасҡан юлына тап булып, шул юлды ҡыуып, алда Ҡамҡалыкүл Ҡомсыуаҡҡа бара. Барып тыңнанып* торған саҡта, ҡамыш араһында ҡыҙғатау ҡош барып, [Туҡтамышты тибеп-тибеп] китә. Шул ваҡыт Туҡтамыш хан, ҡыҙғатауға ҡарап, бер әйтемсәк әйтә:

Ҡыҙғатау тигән ҡыҙыл ҡош,
Ҡанатың да муйының буш,
Ҡамсылар тейер муйыныңа —
Ҡан соргалыр ҡуйыныңа.
[Мин айырылғандай илемдән],
Һин дә айырылырһың күлеңдән,
Һин дә айырылырһың күлеңдән...

Туҡтамыштың шулай тигән йырын ишетеп, Мораҙым ханды барып тотоп ала. Хан:

— Эй, ҡотҡарһаң, бына — баш,
Киҫһәң, бына — муйын,
[Ҡотҡарһаң, ҡотҡар,
Киҫһәң, киҫ —
Уйыңа етһен уйың]! —

тип эйелгән. Шул ваҡыт Мораҙым хандың муйынын өҙә саба. Башын Тарланбот Тураттың ҡойроғона бәйләп, етәкләп алып, өйөнә ҡарай ҡайта.

Был ваҡытта Иҙеүкәй Мораҙымды ҡыуып сыға ла ҡаршы тап була. Шул ваҡытта Туҡтамыш хандың башын күреп Мораҙымдан һорай:

— Муйынын эймәнеме [ни]? — ти. Мораҙым әйтә:

— Эйҙе.

— Эйелгән муйынды ҡылыс киҫәме?! Эйгәс, ниңә үлтерәһең?! Тереләй генә тотоп алып ҡайтһаң булмаймы? — тип, Мораҙымды ҡамсы менән баштан аша һуға — шул ваҡыт Мораҙымдың бер күҙен сығара һуға. Шунан һуң Мораҙым бер күҙҙән һуҡыр булып йөрөй.

«Эйелгән муйынды ҡылыс киҫмәй» тип әйткән һүҙ шунан ҡалған тип һөйләйҙәр[3].

## 9. ИҘЕҮКӘ МЕНӘН МОРАҘЫМ

Ғәзиз бабаның Төкләҫ баба[1] тигән улы булған, ти. Баба Төкләҫтең кәләше һыу батшаһы ҡыҙы ине, ти. [Улар бергә оҙаҡ тормаған: айырылышҡан.] Айырылған сағында Төкләҫ бабаның кәләше ауыр аяҡлы булған, ти. [Унан ир бала тыуған.] Уны [әҙәми затлы ер балаһы булғаны өсөн] ер өҫтөнә сығарып һелтәгәндәр. [Бер саҡ һыу батшаһы ҡыҙы менән тәүләп осрашҡан] йылғаның ярына килһә, Төкләҫ баба теге балаға тәл була* ла уны үҙенә алып ҡайта. [Ҡайҙан, кем балаһы икән мәғлүм булмаған] илһеҙ бала [тип белгәнгә], уға Иҙеүкә[2] тип ат ҡуя. Төкләҫ баба уға [үҙе белгән ғилемде, үҙе белгән һөнәрҙе] өйрәткән дә, үҙе үлеп тә киткән. [Шунан һуң Иҙеүкә үҫеп етә. Үҫеп еткәс], бәхәс, тартыш сыҡһа, [барыһына ла ғәҙел] хөкөм сығара башлаған. Уның хөкөмөнә һәр кем күнгән, барса халыҡ килешкән.

[Ғәҙел вә аҡыллы хөкөмдар] Иҙеүкә хаҡында Туҡтамыш ханға ла хәбәр барып еткән. Хан уны [саҡыртып алған. Саҡыртып алған да, халыҡ һүҙенең раҫ булыуына камил* ышанған. Шунан] уны үҙенең ханлығының иң баш хөкөмдары итеп тәғәйенләгән, ти.

Тәүге осрашҡанда, улар араһында шундай һүҙ булды, ти.

*Туҡтамыш хандың әйткәне:*

— Егет, егет икәнһең,
Кемлегемде белгәнһең,
Саҡырғас та, килгәнһең,
Ат арытып, елгәнһең.
Һине янға алайым,
Иңеңә тун ябайым.
Билбауҙары таҫмалы,
[Ҡаптырмаһы асмалы],
Мә, ал минән ошоно,
[Һиҙмәҫһең дә ҡышыны

Оҙон салғый, оҙон ең
Кейеп ал да атҡа мен.

Атты кәрәк маҡтамаҡ:
Торғаны ул арғымаҡ],
Булыр ул оҙон тороҡ
Ялбыр ял, көлтә ҡойроҡ.
[Ебәк уның йүгәне],
Теҙгененә теҙгәне
[Йәмленән йәмле генә],
Саф алтын тәңкә генә.

[Ҡулыңа ал теҙгенен,
Тиберһең тибенгеһен
Ултырғас та эйәргә,
Барып ҡайтың бер ергә],
Күл тирәләй елерһең,
Ни бар, ни юҡ — белерһең.
Аҡ шоңҡар ҙа бирәмен,
Сөйөр ҙә ебәрерһең,
[Әйтә-әйтә «ҡош теле»н* —
Ҡош телендә ҙур гилем:
«Ос, ҡошом, бейек, — тиерһең,
Күмәгенән береһен,
Аранан иң еллеһен,
Тағы-тағы тиберһең,
Ләгер түгел, тилберен,
Аранан иң һимеҙен,
Ҡыуанырмын кимереп;
Ос, бейек ос, шоңҡарым,
Ҡыр, тиерһең, барыһын! —
Әйтһәң, — бейек ос!» — тиеп,
Ул алыр барын тибеп].

Көмөш билбау быуып ал,
Тиҙ әйләнеп ҡайта һал.

Ғәскәр килһә Ҡырымдан,
Күп уйлама, ҡырып һал,
Күп булһа ла, Иҙеүкә,
[Дан килтер һин иленә]!

*Иҙеүкәнең әйткәне:*

— Мине янына алһаң,
Иңемә туның һалһаң,
Туның булһа ҡаматун,
Төймәләре саф алтын,
Мин өҫтөмә кейәйем,

Оҙон тороҡ* менәйем;
Аҡ шоңҡарың алайым,
Күлгә табан сабайым,
Аҡ шоңҡарҙы сөйәйем,
«Ҡош теле»нә көйләйем:
«Ос, шоңҡарым, бейеккә,
Уҡтай атыл кейеккә;
Һин бейектән күрерһең
Ҡыр ҡаҙын да өйрәген;
Тибеп алсы береһен,
Аранан иң еллеһен,
Тилберен, тим, һимеҙен,
Кимекләрһең кимеген;
Типһәң, тап тик тейәрен!
Быna шулай тиәрмен.

Дошман килһә Ҡырымдан,
Үткәрмәмен ҡырымдан.
Түбәһен түбәләрмен,
Күбәләй күбәләрмен.

[Иҙеүкә һүҙендә торҙо, ти. Ауҙа — алғырлығы, яуҙа яугирлеге менән генә түгел], ғәҙел хөкөм итеүе менән дә тиҙ арала ил эсендә дан алды, ил тышында һан алды, ти. Шул сәбәптән Туҡтамыш хандың ҡатыны тәрән уйға талды, ти. Ни өсөн тигәндә, Иҙеүкә хан тәхетенә ултырып ҡуймағайы, тип шөбһәләнде, ти. Шул сәбәптән уны үлтереү сараһын күрмәк булды, ти. Ниәтен ниәткә еткереү ниәтенән, бер хәйлә уйлап тапты, ти: күрмәгән төшөн күргән булып, шуны иренә һөйләп, унда Иҙеүкәгә шик уятмаға йыйынды, ти.

*Ханбикәнең әйткәне:*

— Эй, бөйөк хан, бөйөк хан,
Бөгәсә мин төш күрҙем,
Тиргә батҡан ат күрҙем,
[Ышанмай торҙо күҙем]:
Тир тигәнем ҡан булды,
Ҡаны һарҡып ағылды.
Ҡан һинән аға, тимен,
Өҙгөләнеп аҡ тәнең,
Тәнеңдән сығып йәнең.
Әйталмай һүҙҙәреңде,
Табаҡтай күҙҙәреңде
Йомдоң да ҡатып ҡалдың,
Ҡарайып ятып ҡалдың,
Ялтыратып ҡаҡ башың,
Ҡаҡ башың, ау, ҡаҡ башың.

*Туҡтамыштың әйткәне:*

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Тиргә батҡан ат күрһәң,
Тирҙән аҡҡан ҡан күрһәң,
[Сыҡҡан сағын йәнемдең,
Ҡарайғаның тәнемдең],
Шунан кире — ҡаҡ башым,
Ҡаҡ башым, ау, ҡаҡ башым,
Шуны әйт, баш ханбикәм,
Һин күргән нимә икән?

*Ханбикәнең әйткәне:*

— Иҙеүкәне ҡыумаһаң,
Барыр юлын быумаһаң,
Ханбикәм, ау, ханбикәм?
Хәйлә менән хәйләләп,
Тапмаһаң берәй әмәл,
Башыңа етер Иҙеү —
[Мөмкинме шуға түҙеү?].

Бисәһе һүҙе буйынса, Туҡтамыш хан Иҙеүкәнән ҡотолмаҡ булды, ти. Шул ниәт менән батырҙарын йыя был. Кәңәш-төңәш ҡора был.

Туҡтамыштың Ыласын тигән ҡоло бар ине, ти. Иҙеүкә менән ул бик дуҫ ине, ти. Йәшерен кәңәшмәлә Иҙеүкәне үлтерергә ҡарар ҡыласаҡтарын дуҫына шул ҡол хәбәр итеп өлгөрҙө, ти. Мөҙҙәте еткәс, эйәрле ат әҙерләп, белгертергә вәғәҙә бирҙе, ти.

Бер нәмә лә белмәмеш тә күрмәмеш булған булып, хандың башҡа батырҙары ыңғайына, йыйынға Иҙеүкә лә килә. Унда бөтәһе лә шарап эсә. Эсеп алғас, хандың батырҙары Иҙеүкәгә ташланмаҡ булалар. Шуны алдан һиҙеп, әп-әҙер генә ултырған Ыласын Иҙеүкәне иҫкәртте, ти.

*Ыласындың әйткәне:*

— Ялпаҡ табан буҙ тарпан
Һине көтә эйәрле.
Эйәренең ҡашында —
Ҡарғошо егәрле.

Минең йырлар мөҙҙәтем,
Шуны төшөндөрәйем:
Һалсы ҡама туныңды,
Килсе, сисендерәйем.
Сискәс, һелтә бейҙәргә
Бик тиҙ, түрҙәгеләргә.

Минең атым Ыласын —
Үҙең бел ни ҡылаһын!

Шуны ишетеүе була — Иҙеүкәнең: «Хушың!» — тиеүе була, атылып сығып, эйәргә һикереүе була — күҙҙән юғалыуы була. Албырғаған Туҡтамыш хан, Иҙеүкәне тотоп алып, башын килтерергә ҡушты, ти, ҡалған батырҙарына.

*[Туҡтамыштың әйткәне:*

— Тиҙ атҡа атланығыҙ,
Иҙеүкәнән ҡалмағыҙ,
Сабып барып ян-яҡлап,
Тар ер табып, ҡамағыҙ,
Башын ҡырҡып алһағыҙ,
Беҙ яуапһыҙ ҡалмабыҙ:
Кем дә кем ҡыуып етә,
Ата үтәнән-үтә,
Ҡырҡып алып башыны:
«Килтерҙем, — тип, — ошоно»,
Ҡанъяғаһына тағып,

Тиҙ килә бире сабып,
Шуға булыр бер ҡыҙым —
Барың, барың*, ҡуҙғалың!

Шулай тине лә, ти, Туҡтамыш, батырҙарының] һәр ҡайһыһына айырым-айырым фарман бирҙе, ти.

*Мөйтән улы Бабсаҡ бейгә әйткәне:*

— Бысаҡ менән бысаҡ бергә әленә,
Эргәһенә — һаҙағы менән йәйә.

[Эй, Мөйтән улы Бабсаҡ,
Бысаҡ юҡта, куш бысаҡ,
Һаҙагым да һин, Бабсаҡ,
Ян-йәйәм дә һин һәр саҡ].
Күскәндә, һин күс башы,
[Эскәндә, мәжлес башы],
Атың һинең атаҡлы,
Нәҫелең һинең затлы;
Тыуғанһың хан улынан,
[Бармышың хаҡ юлыңдан],
Мөйтән улы Бабсаҡ бей,
Дошманыңа атлыҡ, бей,
Аяма, ғүмерен ҡый,
Еңеп, илдә ризыҡ ей!
Күс күскәндә, һаҡ булдың,

Ят бауырҙан һаҡланың.
Ышанам, йөрәгең ныҡ,
Һинең ҡулда мәргән уҡ;
Муйыныңда мөгөҙ ян,
Белеп яйын, булып аң,
Йәшен кеүек, ҡағып саң,
Дошманыңа ташланаң,
Үкереп бар тауыштан,
Гүйә, һин бер арыҫлан.

*Ҡарағым батырға әйткәне:*

— Һин Юрматы балаһы,
Арыҫланым — Ҡарағым.
Барыһынан яҡынһың,
Һин торғаны ялҡынһың.
[Дуҫтарыңды көтөп ал,
Ҡуй табынға әсе бал],
Дошманыңды етеп ал,
Етеп ал да ҡотон ал!..

*Ҡарабайға әйткәне:*

— Тамъяндарҙың башы — һин,
Ят бауырға ташлан һин,
Йылан батшаһы һымаҡ,
Яйын белеп, баштан, тим.
Булат ҡылысың алып,
[Һин батырым, һин — алып.
Бушҡа гүмер уҙғарма,
Ҡулда форсатың барҙа.
Афарин, ай, афарин]!

*Ҡаҙансыға өндәшкәне:*

— Ҡара төндә юл тапҡан,
[Юлһыҙ ерҙән күп сапҡан],
Дауҙа уйын бирмәгән*,
[Яуҙа буйын бирмәгән],
Киң яурынлы, һомғол һын,
Арыҫланға оҡшайһың.
Яман телдән ҡурҡмаған,
[Ят бауырҙан өркмәгән],
Яуға сапҡан фарманһыҙ
[Ятты ҡырған дарманһыҙ],
Ҡараҡыпсаҡ Ҡаҙансы,
Тағы һикереп торһаңсы —
[Һынатмаған затың бар,
Бей тигән дан атың бар]!

*Көбәк менән Сыуаҡҡа* әйткәне:*

— Арыҫландың ҡартылай,
Үкерешеп бер талай,
Дошмандың ҡотон алған,
[Кәрәкһә, тотоп алған],
Һөңгө тиһәң, һөңгө мән,
Ҡылыс тиһәң, ҡылыс мән,
Дошманын ҡырған мәргән;
Ил-йортомдоң таяуы,
Ятҡа белмәҫ аяуҙы
Ҡырын һалған барын да,
Йөҙгән улар ҡанында
Ҡатай улы, әй, Көбәк,
Табын улы, әй, Сыуаҡ,
Ғорурлығы һеҙ илдең,
Һеҙ барында ил имен.
[Һеҙ ҙә йоҡлап ятмағыҙ,
Аттарға атланығыҙ]!

*Шаҡман бейгә әйткәне:*

— Уғың, йәйәң бихисаптыр һинең, Шаҡман,
Ҡырҡ дөйә алып йөрөй һинең арттан.
Баһадирлыҡ көсөң менән еңдең күпте,
[Күтәрәһең ил йөкмәткән ауыр йөктө].
Йыйындарҙа һинең урын һәр саҡ түрҙә,
Кәңәш бирәң, аптырамай һис тә һүҙгә.
Шәғәлиҙең данлы улы һинһең, Шаҡман,
[Ханың һинең ауыр хәлдә, торсо, яҡлаң],
Шашынмаһын, ҡотолдом, тип, минән дошман —
Йолҡоп алып йөрәгене, тетеп ташлаң!

Хан саҡырған батырҙары баҙап ҡалған, өндәшмәгән. Шунда ул үҙенең ҡарт кәңәшсеһе Манғотто саҡыртып алған. Саҡыртып алған да әйтер һүҙен уға ла әйткән.

*Хандың Манғотҡа әйткәне:*

[— Сорғотҡандай уртаһына уҡты сәптең],
Һәр һүҙеңде әйтеүсәнһең, гел үлсәп һин.
Урал иле — ауыр йорт, түгел бер ҙә йүнленән,
Өндәшәмен әле һиңә сараһыҙҙың көнөнән.

Урал улы Манғотһоң,
[Өмөтөмдө мандыт һин].
Ахырғы һүҙ — һинеке,
[Сикләүсе юҡ иркеңде] —
Һуңғы кәңәш һинәндер

[Ҡурҡма, теймәм һиңә бер].
Дошманды ни ҡылайым?
Һинән кәңәш һорайым.

*Манғоттоң әйткәне:*

— Эй, ҡартыңмын, ҡартыңмын,
Күпте күргән ҡартыңмын.
Ни күрмәне был ҡартың,
[Әйтһәң, тарихҡа тартым].
Хандар ханы — иң башта,
[Үҙе торғаны ҡашҡа*].
Уны ла күргән был ҡартың,
Унан килде Абулжа хан,
Уны ла күргән был ҡартың;
Унан булды Ала хан,
Уны ла күргән был ҡартың;
Унан торҙо Ҡара хан,
Уны ла күргән был ҡартың;
Унан килде Назар хан,
Уны ла күргән был ҡартың;
Мөгөҙ яны ун ҡолас,
[Ундай бүтән һис булмаҫ],
Шундай ине Сыңғыҙ хан,
[Батырлыҡта булды дан —
Унан түгелде күп ҡан],
Уны ла күргән был ҡартың;
Йәшләй булды Ҡадир хан,
[Яуға һәр саҡ әҙер хан],
Уны ла күргән был ҡартың.

Йөҙ ҙә миңә һикһән биш,
Уртта ҡалманы бер теш;
[Ҡыйралһа ла, тәнем бар]
Тәндә әле йәнем бар.
Минең ғүмер үтте инде,
Етер сиккә етте инде;
Һеҙҙеке саҡ башлана,
[Һеҙгә тигәне — һеҙгә,
Тәтемәҫ ул башҡаға];
[Берәү килә, берәү китә,
Хан башына хан етә,
Дәүерҙәр шулай үтә].

Һинән ҡасҡан Иҙеүкә,
[Етер Урал, Иҙелгә]
Донъяла ул бер генә,
[Йөрөр үҙе иркенә].

Ошоғаса йәшәп мин,
Оҙон ғүмер көҫәп мин,
Уға тиңде күрмәнем,
Күрмәнем дә белмәнем.

Алдан, арттан күрҙем мин,
Күңеленә керҙем мин.
Ул тыуған был донъяға
Ил дошманын ҡырмаға;
Тыуған илен эҙләй ул,
Кемдән тыуған, белмәй ул;
Уны тәҡдир тыуҙырған,
Барыр юлын шул һыҙған.

Сатмыр ханға барыр ул,
[Уңға, һулға бағыр ул;
Тәңре уға юл бирһә,
Сатмыр, тороп, ҡул бирһә:
«Түр яғыма уҙ!» — тиһә,
Унын ҡулын алыр ул],
Шунда тороп ҡалыр ул.
Сатмыр, тороп, ҡул бирер,
[Түр яғына юл бирер —
Ҡайтҡандай үҙ иленә,
Ныҡ шәпләнер Иҙеүкә],
Ас арыҫлан ҡалайта?
Үкерә ҡайта-ҡайта.
Шунын ише үкерер,
[Үкереп, ҡан түкәрәр].
Күбекләнер ауыҙы
[Йоторҙай булып тауҙы]
Ҡанһөйәр юлбарыҫтың.
Шуның һымаҡ булыр ул,
Илдең иркен быуыр ул;
Ғәмһеҙ нуғайҙың йортон,
Ҡоралһыҙ ләғир халҡын,
[Килеп төшкәндәй киҙеү],
Баҫып алыр шул Иҙеү.

Ни теләһә, ҡыланыр,
[Теләһә, ҡырып һалыр],
Боғал һалыр таҡ*ына,
Ҡотҡаралмаҫ тағы ла
Һинең көмөш ҡапҡаң да
Һинең алтын дәүләтең,
Төшһә тимер туҡмағы,
[Һеңдергәнсе һуҡмағы*]:
Ишек бауың сиселер,

[Тирә-яҡҡа сәселер
Ҡул аҫтындағы халҡың,
Үҙеңде ялмар ялҡын.
Иҙеү килеү шул булыр,
Илең китеү шул булыр].
Һине иҫһеҙ ҡалдырыр,
Йомшаҡ күпмәң һалдырыр,
Тартып алып һөйгәнең,
Түше аҫтына һалыр —
Бөтә ғәмең таң ҡалыр...

Тирмәң [ҡанат, уғыны,
Сағарағы туғынын]
Яғыр, итеп утыны;
Табаныңды телгеләп
Үткер бәкеһе менән,
Турап-турап ат ҡылын,
Шунда һалыр, аҡыллым.
Туҡһан бейле Ағурҙаң
[Барлыҡ ырыуың бергә]
Ҡулына тороп ҡалыр ҙа
[Уға тоғро ҡол булыр,
Ҡолдар менән ил тулыр]:
Йылҡы малын, башҡаһын,
[Тиеп, былар ҡаҡшаһын],
Үҙенә тартып алыр:
[Алһа, һеҙгә ни ҡалыр]?
Һандуғастай ирекле,
Хур ҡыҙындай күрекле
[Һинең, ханым, ҡыҙың бар,
Ҡыҙҙар барҙа — ҡыҙыҡ бар],
Уны ла алыр тартып,
[Унан ни ҡалыр артып?]
Алыр ҙа уны тартып,
Әйтер ҙә уға, бар, тип,
Килтерер ат ҡашына,
Ултыртыр янбашына,
[Арт яғына ҡаратып,
Һиңә шулай бара, тип].
Ҡыҙың ҡалыр ҡайғыға,
Шунан шиңер яй ғына.
Тик сығармай тауыш, тын,
Булыр уның табышы.

Ул бик йыраҡ китмәгән,
Ағиҙелгә етмәгән.
[Етһә әгәр Иҙелгә,
Һис тоттормаҫ Иҙеүкә].

Туғыҙ батыр ат менһен,
Артынан тура елһен,
Хәйлә менән юхалап,
[Юҡһа һинең эш харап],
Бер әмәлен табығыҙ,
Башын ҡырҡып алығыҙ!

Манғот ауыҙынан сыҡҡан шул һүҙҙәрҙе ишеткәндең һуңында, Туҡтамыш хан туғыҙ батырын саҡыртып алды, ти. Саҡыртып алды ла әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Туҡтамыш хандың туғыҙ батырға өндәшкәне:*

— Күҙ терәгән туғыҙым,
Мәргән һеҙҙең уғығыҙ,
Тәңгәл әйткән һүҙегеҙ,
Арыҫландай үҙегеҙ.
[Килгәндәй биртабанға,
Ҡуҙғалып бер табандан],
Ҡыуып етең Иҙеүҙе,
[Илгә төшкән киҙеүҙе],
Ҡыуып еткәс тә уны,
[Онотмағыҙ һеҙ шуны],
Бара килеп һеҙ арттан,
Һуғып төшерөң аттан;
Һуғып төшергәс аттан,
Арҡан алып өс ҡаттан,
Аяп, ҡурҡып тормағыҙ,
Шуның менән сырмағыҙ,
Бәйләп эйәр ҡашына,
Килтерегеҙ ҡашыма!

Туҡтамыштың туғыҙ батыры был юлайы бер табандан ҡуҙғалып, ат ҡушарлап, кемуҙарҙан сабышып, Иҙеүкә артынан китте, ти. Китә торғас, аҡ һыулы Ағиҙелгә еттеләр, ти. Ағиҙелгә етһәләр, арғы ярҙа Иҙеүкә күренде, ти. Иҙеүкәне аръяҡта күргәс тә, туғыҙ батыр бергә тупландылар ҙа кәңәш ҡорҙолар, ти. Кәңәш-төйөш итешеп, Барғай менән Янбайҙы илсе итеп Иҙеүкәгә ебәрҙеләр, ти. Бирге ярҙан тороп, Янбай Иҙеүкәгә өндәште, ти.

*Янбайҙың әйткәне:*

— Эй, Иҙеүкә, Иҙеүкә,
Ин һин йәнә Иҙелгә,
Ин дә йәнә Иҙелгә,
Йөҙөп сыҡсы бирегә!
Илең һинең Ағурҙа,
Ағурҙаға сыҡ юлға;

Оло ханға башың һал,
Ҡулынан алдырын* ал.

Алтын алдыр алғастын,
Эс белеп һин самаһын
Хан биргән бал, шарабын.
Таҡта яуырыныңа
Ҡама тун ябырһың да,
Көмөш билбау быуырһың.

Аҡ шоңҡар бирер ханың,
Уны ла теләп алың.
Күлдә өйрәк ауларһың —
[Дан-шөһрәт яуларһың]
Алтын арба эшләтер,
[Ундай арба иң шәптер].
Кейендерер ебәктән:
[«Ҡуй-ҡуй, ханым», — тип әйтмәң],
Ҡорал вә башҡа яраҡ
Бирер ул баштан-аяҡ.
Булғас ни, булһын, тиер,
Шартына килһен, тиер,
Мендерер арғымаҡҡа,
[Юҡ ундай арғы яҡта,
Юҡ ундай бирге яҡта].
Булыр ул оҙон тороҡ,
[Ялбыр ял, келтә ҡойроҡ].
Биргәс, шуны менерһең —
Күңелең теләгәнсә,
Йәшә үҙең белгәнсә.

[Күргәне юҡ бер әҙәм
Уның һымаҡ юрғаны:
Ҡолағына ҡараһаң,
Үрғуяны торғаны].
Ҡолағы беҙҙәй ҡаҙалған,
Ялмы? Ҡыҙҙай таралған,
Йөрөшө [— йөрөш кенә
Бейеү менән иш кенә],
Мин үҙем һынағанмын,
[Һынауҙан ҡалмағанмын].

«Һыны?» — тиһәң, тиңдәшһеҙ,
Донъяла — бер, ул ишһеҙ.

Муйынымы? [Дуғалай
Бора-бора юрғалай],
Аждаһа, йылан, гүйә,
[Тип уйларһың ул елһә].

Табанымы? [Юҡ андай],
Түңкәрелгән ҡаҙандай.
Яп-ялпаҡ, [ҡарамаҡҡа,
Бик йәтеш арымаҫҡа].

Ирене атҡолаҡтай,
[Юҡ бер ерҙә ат ундай].
Атһынар* тешен маҡтай,
Уныһы — һарымһаҡтай.
Тояҡтары — саҡматаш,
Ут сәсрәтә, тор ҙа ҡас.

Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Суҡлы ҡайыш теҙгене —
Көмөш тәңкә теҙгәне.
Ҡолон саҡта ла имгән,
Тайға сыҡҡас та, имгән,
Ҡонан саҡта ла имгән,
Дүнән саҡта тибенгән —
Уны шул саҡ менгегә
Өйрәтергә менгәндәр.

Ебәк булған нуҡтаһы
[Ундай нуҡта юҡ тағы].
Биш йәштә биш бейә имгән,
[Хәтерләп ҡолон сағын].
Алты йәштә ат булған,
[Арыу уға ят булған];
Етеһендә етешкән —
Юртаҡ булған йәтештән.

Көмөш дуғаһы әҙер,
Ек тә сап тот та хәҙер.

Айыуҙыҡы хәс ҡашы,
Бөркөттөкө ҡарашы;
Үҙәгеме? Үҙәктәй,
[Саба тынын үҙгәртмәй],
Ул быуаҙ йыландыҡы —
[Ҡуймай һис йылдамлыҡты].

Быуған һымаҡ бөйөрө,
Нәҙек унын шул ере.
Тояғы — ут уйыны,
Ҡолас булыр муйыны;
Ҡуян йөнлө, ҡуҙый күҙ,
Бейек унын мундаһы,

Ялы — дала ҡылғаны.
Ана шундай ат бирер,
[Уны кем һуң ят күрер?],
Биргәс, шуны менерһең,
[«Мин — мин микән? — тиерһең, —
Мин — кем икән?» — тиерһең].

Өҫтәп бирер бер өйөр
[Ул бәхет кемгә тейер]?
Эсерһең үҙ ҡымыҙын,
[Уйнап ҡурай, ҡумыҙың].
Тағы, тағы, тағы шул:
Бүлеп бирер тағын* ул,
Ҡайтҡас, байлыҡ. Һорарһың,
Етеш донъя ҡорарһың.

Ҡайт, Иҙеүкә, ҡайта күр,
Һиңә булыр йортта түр.
[Йортта түгел, ханлыҡта
Бәхет ҡалҡа, бер ҡалҡһа].
Ҡыҫыҡ күрмәй, иркендә.
Онот асыу, үпкәңде —
Онотайыҡ үткәнде.
Барып, ханға башың эй,
[Шунда ҡалған ашың ей],
Башың эй ҙә сәләм бир,
Сәләм бир ҙә хәлен бел,

Хур ҡыҙылай хан ҡыҙы,
Ул да һине һағынды.
Кискә ҡайтып етә һал,
Ҡайнар ҡуйыныңа ал.
Кире ҡайт та йортоңа,
[Ял иткәстен бер тына],
Үҙеңдең ауыҙыңдан
Әйт уға ҡайтыуыңды.

Ҡайт, Иҙеүкә, ҡайта күр,
[Ялындырма, әйтәгүр],
Алтын алдыр — һары бал,
Һары балды һалып ал,
Эс төптәрен күргәнсе,
Шат булырһың үлгәнсе.

Хандың ҡыҙы икәүҙер,
Икәүһе лә сибәрҙер;
Икәүһенең береһен,
Иң һылыу, бер тигәнен

Һайлап ал да ҡосаҡла,
[Ҡосаҡлағас, тик ятма;
Түш аҫтына һалырһың,
Шунда ләззәт табырһың.

Ҡайт, Иҙеүкә, ҡайта күр,
Әҙерләнгән һиңә түр —
Күңелең теләгәнсә,
Йәшә үҙең белгәнсә]!

Янбайҙың шул һүҙҙәрен тыңлап торғандан бире, Иҙеүкәй үҙенең әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Иҙеүкәйҙең әйткәне:*

— Кит, Янбай, кит, Янбай,
[Ир һүҙе булмай андай].
Киткәсем, мин китермен,
Сытмыр ханға етермен.
[Тәңрем миңә юл бирһә,
Сытмыр миңә ҡул бирһә:
«Уҙ, түремә уҙ! — тиһә, —
Үҙ көйөңдө һуҙ!» — тиһә],
Унан алырмын сиреү,
[Тағы булырмын киҙеү,
Остан осҡа гиҙермен],
Илегеҙҙе иҙермен,
Ҡылып унан зыярат,
[Был түгел һис зарурат:
Бары ҡон ҡайтарыуым —
Шул минең йән дарыуым].
Һеҙҙәр — минең табышым,
Киҫәм һеҙҙәрҙең башын.
Үсем алам тағы ла
Ханды атып тағынан*.
Ҡатын-кәнизәктәрен*,
Һылыу-һылыу ҡыҙҙарын —
Барын алып үҙемә,
Эләккәс тә күҙемә.
Түш аҫтыма һалырмын,
Шунан ләззәт табырмын...

Хан күтәргән алтын ай
Ҡолға осонда ялтырай.
Һындырырмын мин уны,
Яндырырмын мин уны
Шул алтын айы менән,
Тирмә-һарайы менән.

Хандың үҙен табырмын;
Үткер бысаҡ алырмын,
Зинданына ябырмын,
Табындарын ябырмын,
Тураҡ аттың ҡылыны,
Шул яраға һалырмын.
Һалырмын, ау, һалырмын,
Көтөүсе итеп алырмын —
Даръя булыр ҡаныгыҙ,
Ҡоном шунда ҡаныгыр.
Кәрәк түгел ят тәхет —
Ят тәхеттә — ят бәхет.
Ят тәхете кәрәкмәй,
Ят бәхете кәрәкмәй —
[Ят бәхете — юҡ бәхет
Тәхет түгел, ул — ләхет].

Нимә миңә үҙ түгел,
Уға ятмаҫ был күңел.
Ят икән, емерермен,
Кәрәктәрен бирермен,
Үсен алып илемдең,
Йөҙҙөң түгел, йөҙ мендең.
Мыйығыңа урап ҡуй —
Шундай уйҙа торамын:
Яттарҙыҡын юҡ ҡылып,
Үҙемдекен ҡорамын!

Шунан һуң Иҙеүкә [арғымағын менеп алған да, ти], Сытмырханға сапҡан, ти.

[Сытмырханға сапҡан, ти,
Уны эҙләп тапҡан, ти].
Әҙер булган Иҙеүкә
Күрмәгәнен күреүгә.
[Тәңре уға юл биргән,
Сытмыр уға ҡул биргән]:
Көтөп алған ҡунаҡтай,
Хуп күреп, маҡтай-маҡтай,
Ҡаршылаған Сытмырхан,
Ул-былдарға һыҡмыр хан*;
Атын алған башынан,
Урын биргән ҡашынан;
Ҡунаҡ иткән һәүетемсә*,
Йолалары әйтеүсә*.

Хөрмәт итеп* ҡунағын,
Уйлай-уйлай аҙағын,

Хан фекер төйнәгән, ти,
Әлегә әйтмәгән, ти,
Ҡапылғара ашығып,
Төҙәткәндә ҡашынын*,
Ҡуймаға күҙ сығарып,
Юҡ-барҙан һүҙ сығарып.

Сытмырхан һис тынмаған —
Иҙеүкәне һынаған.
Уйлап барын да алдан,
Тағы-тағы һынаған.

Иҙеүкә һынатмаған:
Фарман көтөп ятмаған,
Әш ҡырған үҙе белеп,
Ханы әйтмәҫтән элек.

Ҡарар ҡылған Сытмырхан:
«Бынан сығыр сымыры*хан».
Хан иткән виләйәткә,
Итмәгән уны тиккә:
Ҡыҙын туйлаған* тиҙҙән;
«Улан килтерең!» — тигән.
Хан белгән ни тигәнен,
Күптән көткән ейәнен,
Булыр тип күҙ терәге:
Терәк — донъя кәрәге.

Ике ят ҡан болғаныш,
Туғыҙ айҙа тулғаныш,
Көттөрөп тағы талай*,
Донъяға килгән малай.
Алға алған маҡсатҡа,
Ирешһен тип һәр саҡта,
Тайшанмайса бер аҙым,
Ат ҡуйғандар: Мораҙым*.

Ун ике йәшенәсә Мораҙымға өйҙә тәрбиә ҡылғандар. Ун икеһе тулғанда, тиңдәштәре менән уйнап йөрөгәндә, һүҙҙән һүҙ сығып, улар уны үсекләй башлаған.

*[Тиңдәштәренең әйткәне]:*

— Һин затһыҙ бер килмешәк,
[Ат янында һин ишәк.
Атаң һинең Иҙеүкә
Әүәҫ донъя гиҙеүгә,
Далалағы ҡамғаҡтай,
Бер урында тик ятмай...
— Илен ташлап киткән ул,

Туҡтамышҡа еткән ул;
Туҡтамышта туҡталған,
Туҡталған да бүкталған:
Үрләп китерен һиҙеп,
Эсергәстәре һейҙек.
Үлтерерҙәр тип белеп,
Киткән йәнә ил гиҙеп...]
— Ниҙәр генә еймәгән,
Ни ейгәнен белмәгән,
Донъя малы йыймаған —
Ил эсенә һыймаған.
Һыйҙырмағас Туҡтамыш,
Эҙләп тағы туҡталыш,
Килә торғас, юл айҡан
Сытмырханға юлыҡҡан,
Сытмырханға юлыҡҡан —
Байлығына мулыҡҡан...
— Ҡыҫылып ул һәр эшкә,
Ҡыҙын алған кәләшкә...
— Шуларҙан һин тыуғанһың,
Атаң юлын ҡыуғанһың...
— Шулай булғас кем булан?
Маҡтанма: «Мин — ханулан!
Һеҙ ҡара*, мин шәптән шәп!»
Һин бит — бары килмешәк!
— Килме — шәк, килме — шәк,
Шәк — шәк, килме — шәк,
Ат янында һин ишәк,
Түгел шуға эшең шәп?
— Ниңә булһын эшең шәп?
— Сөнки һин бит килмешәк!]

Был һүҙҙәргә Мораҙымдың хәтере ҡалған. Хәтере ҡалған да атаһына барған. [Барып, ишеткәнен әйтеп биргән]. Шул саҡ Иҙеүкә бөтә эшен ташлаған да, сиреү туплай башлаған. Сиреү туплай һалып, Туҡтамыш хан биләмәһенә киткән. «Иҙеүкә килә» тигән хәбәрҙе алыу менән, Туҡтамыш хан илен ташлаған да ҡасҡан.

[Мораҙым, үҫеп етеп, үҙендә хеҙмәттә торғанда, Туҡтамыш хан кесе ҡыҙын уға бирергә вәғәҙә иткән булған икән]. Туҡтамыштың ҡасҡанын белеп, вәғәҙәһен тотмағаны өсөн, унан үс алмаҡ булып, Мораҙым уның артынан төшкән. Ҡыуып бара торғас, ханды тотоп алған. Тотоп алған да, аяҡ-ҡулын сырмап, атаһына килтергән. Килтерһә, ни күрә: Иҙеүкә Туҡтамыштың ике ҡыҙын да ҡосаҡлап, урталарында ултыра, ти. Шуны күреп ҡалғас, һарыуы ҡайнап, Мораҙым: «Ах, һине!» — тип атаһына аҡырҙы, ти, — тегенең ике күҙе лә атылып сыҡты ла ҡуйҙы, ти.

Мораҙым Туҡтамыштың кесе ҡыҙын кәләш итеп алды, ти. Алды ла, Төйәләҫ менән Ҡыҙыл буйына барып, шундағы халыҡҡа хаким булды, ти.

Мораҙымдың улы тыуа. Шул бала атаһы менән бер саҡ һүҙгә килә. Шул саҡ Мораҙымдың бисәһе улына күрһәтеп:

— Атас!* — ти.

— [Ниңә улай тиһең? — тигәс ире:]

— Атаңды [уның менән һүҙгә килешеп, эштең айышына төшөнмәҫтән] һин һуҡыр иттең дә инде! — ти бисәһе.

Шунан һуң Мораҙым [ҡылған хилаф эше өсөн тәүбәнән ҡайтып] хаж ҡылды, ти. Атаһы янына һуғылып, ғәфү үтенеп, фатихаһын һораны, ти. Иҙеүкә улын ғәфү итте, уға фатихаһын бирҙе, ти.

## 10. ЕДИГӘ БАТЫР

Борон заманда Тимерхан[1] исемле бер хан йәшәгән. Тимерхандың[2] ир балаһы булмаған. Бер генә ҡыҙы бар ине, ти. Берҙән-бер көндө хандың йылҡы көтөүселәре кеше аяғы баҫмаған ҡола далала биләүгә биләнгән бер ир бала табып алып ҡайта. Көтөүселәрҙән берәү килеп, ошо хаҡта Тимерхандан һөйөнсө ала. Тимерхан кеше ебәрә. Ул кешегә ҡола далала табылған малайҙы килтерергә ҡуша. Уны үҙенә ул итеп ҡабул итеп, кеше аяғы баҫмаған ерҙә табылғаны өсөн, Едигә тип исем ҡуштырған.

Йыл үҫәһен көн үҫә Едигә, ике йыл үҫәһен, ике көндә үҫә. Алты йәшендә һыбай һунарға йөрөй башлаған. Буйсан ғына, матур егет булып үҫеп тә етә.

Едигә етди егет булған. Тирмәгә ул килеп инһә, йоҡлап ятҡан еренән Тимерхан ҡурҡып ҡалтырап уяна икән.

Едигә бер-бер яуызлыҡ ҡылып ҡуймағайы, тип, хан уны үлтерергә ниәтләнә. Көндәрҙән бер көндө шул ниәт менән халҡын йыйырға була. Был хәлде белмәгән Едигә тиңдәштәре менән уйнап, күңел асыуын белә. Әйтелгән көндө [сәгәте, минуты менән] халыҡ йыйыла. Шул мәлдә генә Едигәне ҡола далала тапҡан йылҡысылар уға бик шәп ат килтереп тотторалар ҙа:

— Атайың, хәйерһеҙ бәндә, һине үлтерергә ниәтләнә. Ошоно мен дә бынан тиҙерәк тайыу яғын ҡара, — тиҙәр.

[— Ярар һуң, — тип], Едигә, [йылҡысыларға рәхмәттәр әйтеп], ҡайта һалып, уҡ-һаҙағын эләктерә лә, көтөүселәр биргән арғымаҡҡа атланып, сабып сығып та китә.

Йыйылған халыҡ Едигә артынан ҡыуа төшә. Ҡыуғынсылар [ҡара сәүкә һымаҡ] ер ябып килә, ти. Едигә ҡыуғынсыларҙың күбеһен уҡтан үткәрә. [Ҡыуғынсыларҙың күптәре әжәлен шулай таба]. Тимерханға [ҡанға батып] бары-юғы ҡырҡ кешеһе генә ҡайтып төшә.

Көнө-төнө [китә Едигә. Көнө-төнө] бара торғас, кеше аяғы

баҫмаған бер ҡола далаға килеп сыға ла шунда, тарпан[2] атын, тарпан итен ейеп, бер үҙе көн итә башлай.

Йылҡысылар бүләк иткән аты бик шәп аргымаҡ булып сыға. Ҡола далала юлдаш та шул була уға, уны хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалаусы ла шул була.

Берҙән-бер көндө дала буйлап, һыбай китеп барһа, йыраҡта нимәләрҙеңдер шәүләләнеүен, шул тәңгәлдә генә, болоттай булып, саң күтәрелеүен шәйләй Едигә. Яҡыныраҡ килһә, ни күҙе менән күрһен: бихисап ғәскәр, ти.

— Атаң кем дә затың кем? Атыңды әйт, — ти ғәскәр кешеләре, — ниндәй әҙәм һин ҡола даланы төйәк иткән?

Едигә:

— Мин ни фәлән ергә юл тотоусы бер мосафирмын, — тип, яуап ҡайтара.

— Мосафир булғасың, бар, үҙ юлыңда бул, — тип, теге әҙәмдәр быны үткәреп ебәрәләр ҙә үҙ юлдарын ҡыуалар, Едигә — үҙ юлын.

Едигә эй китеп бара, ти, эй китеп бара. Китеп бара торғас, йәнә лә алыҫта ниндәйҙер ҡараҫҡыларҙы күреп ҡала. Яҡыныраҡ килеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: ҡараҫҡы тип күргәне күскен (халыҡ) имеш.

[Күскен халыҡ артынан
Күтәрелгән саң-томан.
Саң-томанға сорналып,
Барынан артҡа ҡалып],
Ҡара юрға өҫтөндә,
[Ҡара ҡайғы эсендә,
Ике күҙе шәмәреп],
Күҙ йәштәрен һемереп,
Бер ҡыҙ килә ята, ти,
Буҙлап илап, һыҡтанып,
[Үҙәктәрен тарта, ти].

Ҡарап-ҡарап тора торғас, Едигә йәнә бер ҡараһа, ҡыҙ аҫтындағы ҡара юрға таныш мал булып тойолдо, ти.

Буҙлаған ҡыҙ менгәне,
Таныш юрға тигәне,
Үҙе бала сағында
Хан янында торғанда,
Унда-бында барғанда,
Менеп йөрөгән аты —
[Торғаны толпар заты]
Булып сыҡҡан имеш, ти.
Яҡын килеп, күҙ һалһа,
Текләңкерәп ҡараһа,
Саң-томанға сорналған,
Арҡан менән сырмалған,

[Арҡаны, ти — ҡыл арҡан],
Ат өҫтөндә ултырған
Бәйле ҡоштай талпынған,
Ҡарап торғанда ҡырҙан,
Тимерхандың берҙән-бер,
Һылыулығы — ерҙә бер
Ҡыҙы, имеш, ине, ти.

Едигә унан киткәс тә, Туҡтығәзе[3] тигән батыр Тимерханды баҫып алып, ҡулына күп улъя төшөрөп уның, ҡыҙын да алып китеп бара икән, ти.

Едигә таныған һымаҡ, ҡыҙ ҙа уны танып алды, ти. Шунан, былар, илай-һыҡтай, сәләмләштеләр, ти. Туйғансы илашҡандың һуңында, Едигә ҡыҙға былай тип әйтте, ти:

— Әүәл йәйәм йәпле ине,
Һынды шул, әрәм булды.
Мин далаға сабайым,
Эҙләп мөгөҙ табайым,
Яңы йәйә яһайым,
[Амин, тиһә Хоҙайым;
Дала буйлап елермен,
Әйләнер ҙә килермен,
Килермен, ау, килермен,
Килермен, ау, килермен,
Ни ҡылырға белермен.
Килеү менән туҡтауһыҙ,
Һөрәнләп: «Туҡтығәзе!»]
Бының ҡотон алырмын,
Уҡтан атып, салырмын.
Һин сығырһың ирекҡә —
[Тик әлегә бирешмә!]
Әҙәм аяғы тынғас,
Бөтәһе лә һил булғас,

ауыл [булып теҙелгән тирмәләр] тирәләй сабып йөрөй башлармын. Һин ҡулыңа ян ал да Туҡтығәзе ятҡан тирмәнең кейеҙен күтәр: ян-яғы асыҡ булһын. Шулай тип әйтте лә, ти. Едигә дала буйлап сапты, ти. Саба торғас, тапты, ти, болан һалған мөгөҙҙө. Тапты ла шунан йәйә яһай башланы, ти. Шул мәлдә генә, алты ҡолас ала бейәһен менеп, Туҡтығәзе ауға сапҡан була. Кейек аулап йөрөй торғас, был йәйә юнып ултырған Едигәгә юлыға.

— Нимә эшләү? — тип һорай был Едигәнән.

— Һине атмаға ян юнам, — ти Едигә.

Туҡтығәзе ҡарап торған Едигәгә,
Иғтибар ҙа итмәй батыр әйткән һүҙгә;
Бейәһенең бөйөрөнә типте лә, ти,
Ҡырын-мырын ырғыттырып китте лә, ти.

Йәйәһен йәпле итеп эшләп алғас, Едигә Туҡтығәзе ауыл ҡороп ятҡан ергә килә. Килһә, Туҡтығәзе батыр үҙенең алты ҡанатлы тирмәһендә өскә бөкләнеп ял итеп ята, ти.

Едигәне күреү менән, әсир ҡыҙ Туҡтығәзе ятҡан тирмә кейеҙен түңәрәтеп күтәрә биреп ҡуйҙы, ти. Туҡтығәзе йәйә тотҡан Едигәне күреүгә күрә, тик, диҡҡәт итмәй, ҡымшанмай ҙа ятыуын белә. Шул саҡ Едигә, мөгөҙ йәйәһенә [көрәк башлы] үткер уғын һалып тороп, тирмә ҡанатындағы тишек үтә атып ебәргәйне — өскә бөкләнеп ятҡан Туҡтығәзе өс ерҙән туралғандай булды ла ҡуйҙы, ти. Шулай ҙа тора килеп Едигәгә ташланды, ти, үҙен эләктерә алмаһа ла, атының ҡойроғона йәбешеп өлгөрҙө, ти. Едигә, атының бөйөрөнә тибеп, сабып сығып киткән ыңғайы — уның ҡойроғо, төптән өҙөлөп, Туҡтығәзе ҡулында торҙо ла ҡалды, ти.

Едигә Туҡтығәзе кешеләрен, пыран-заран килтереп, ҡырып бөтөрөп, Тимерхандың ҡыҙын азат ҡылып, икәүләшеп дала буйлап елеп сығып киткәйнеләр генә — алда йәнә ҡараҫҡылар пәйҙә булды, ти. Былары ҡыҙы артынан Тимерхан ебәргән сиреү* булып сыҡты, ти. Едигә менән хан ҡыҙы сиреү менән сәләмләште, ти. Едигә хан ҡыҙын Туҡтығәзенән нисек ҡотолтҡанын һөйләп ташланы, ти. Уны тыңлап бөткәс, сиреү башы:

— Едигә, һин беҙҙең илгә кил. Тимерханға һиндәй кешеләр бик кәрәк. Хәҙер ул һиңә яманлыҡ ҡылмаҫ, — тине ти.

[— Барып булмаҫ, — тип], Едигә был тәҡдимдән дә, сиреү башы биргән бүләктән дә баш тартты, ти, улар менән хушлашты ла үҙ юлы менән китеп барҙы, ти.

Ҡыҙҙы ҡулға төшөргәс, сиреү хан янына ҡайтырға сыға. Ҡайтырға сығыуын сыға, тик уларҙың юлында Тимерхан менән тыныша алмаған* йәнә бер хан бар ине, ти. Шул хан Тимерхандың азат ителгән ҡыҙын алып ҡайтып килгән уның сиреүе тураһында көн элгәре ишетә. Ишетә лә уларға ҡаршы сыға. Сиреүе күп була был хандың. Шуға күрә лә Тимерхандың ҡыҙын тартып алыу уға бер ни ҙә тормай. Был хәбәр Едигәгә лә килеп етә.

[— Һәр эштең дә үҙ яйы бар —
Белмәк кәрәк,
Һәр эште лә, яйын белеп,
Ҡылмаҡ кәрәк;
Изгелеккә — изгелек ҡыл
Көнө менән,
Эй Едигә, тот ҡылысың —
Йүне килгән,]
Ашатҡан да, эсергән дә
Заманында,
Күрһәткән кем яҡшыһын да,
Яманын да?

Атһыҙ инем, кем ул мине
Атлы иткән?
Затһыҙ инем, кем ул мине
Затлы иткән?
Барыһын да ҡылған һиңә —
Тимерхан бит.
Тик эт тешләй эйәһен,
Һимерһә бик.

Шулай ти ҙә Едигә батыр үҙ-үҙенә, рәхмәт йөҙөнән ханына изгелек ҡылмаҡ була.

Ат аямай, көнө-төнө
Елдерҙе, ти.
Аты уны хан еренә
Еткерҙе, ти.
Был хан күптән Тимерханға
Үсле ине,
Улай-былай түгел ине,
Көслө ине.

Тегенең ғәскәрен еңеп, [Едигә] йәнә ҡыҙҙы азат ҡылды, ти. Азат ҡылды ла уны йәнә Тимерхан ғәскәренә тапшырҙы, ти. Үҙе әүәлге төйәгенә йәнә әйләнеп ҡайтты, ти.

Көндәрҙән бер көн, ҡыҙын Едигә ҡотҡарып йөрөгән мәлдә генә, Тимерхан төш күрҙе, ти. Төшөндә лә ҡыҙын (Едигә) ҡотҡарғанын күрҙе, ти. Шулай уянып, татлы төштән арына алмай ятҡанында, берәү килеп инде лә:

— Һөйөнсө, ханым! Һөйөнсө, солтаным! Сиреүең менән ҡыҙың ҡайтып килә! — тип һөйөнсөләне, ти.

Тимерхан урынынан
Тора һалды,
[Тиҙ-тиҙ генә ниәт-маҡсат
Ҡора һалды,
Ниәт-маҡсат ҡора һалып,
Оран һалды:
«Эйәр һалып килтерегеҙ
Көмөш ялды!»].

Хеҙмәтселәр килтергән атына менә һалды ла, ти, Тимерхан ҡыҙына ҡаршы сапты, ти.

Сабып килеп етте лә, ти,
Сиреүенә,
Ҡыуанды, ти, ҡыҙын имен
Күреүенә.
Шатлығынан, ни ҡылырға
Белмәне, ти.

[Кем ни әйткән, ҡолағына
Элмәне, ти.
Ҡыҙы менән ҡуш ҡуллап
Күреште, ти,
Һыртын ҡағып, яратырға
Кереште, ти].

Шатлыҡ менән шулай күрешкәндең һуңында:

— Сиреү башы, әйт, ҡыҙымды ҡалай итеп ҡотҡарҙығыҙ? — тине, ти.

Сиреү башы, күҙ ҙә йоммай:

— Уны, ханым, беҙ үҙебеҙ ҡотҡарҙыҡ.
Теге хандың кешеләрен күп ҡырҙыҡ,
Шулай ҙа беҙ саҡ ирештек ниәткә,
Ҙур батырлыҡ ҡылдыҡ, ханым, ни әйтәң? —

тине, ти. Тимерхан был яуапҡа шикләнде лә, ти:

— Дөрөҫөн әйтегеҙ! Юҡһа, барығыҙ ҙа башһыҙ ҡалыр! — тине, ти.

Шунан һуң ғына сиреү башы ипкә килде, ти. Ипкә килеп, булған хәлде булғанынса бәйән итте, ти. Шуны ишеткәс, Тимерхан Едигә артынан сапҡын саптырҙы, ти.

Эш асылын белгәндән һуң
Сиреүенән,
Әйтте, ти, хан, күңеленең
Иреүенән:
— Бар, барығыҙ, Едигәне
Тиҙ табығыҙ,
Атҡа менеп эҙен эҙләп,
Бар, сабығыҙ.
«Һиңә ҡыҙын бирә, — тигеҙ, —
Баш ханыбыҙ».
[Ҡайтыр булмаң йортҡа кире
Һис аныһыҙ!]

Сапҡын, йөрөп-йөрөп, буш ҡайтты, ти. Тимерхан йәнә-йәнә сапҡын саптырҙы, ти. Күпме генә сапҡын саптырмаһын, Едигә килеүҙән баш тартты, ти. Ахырҙа, Тимерхан үҙе китте, ти. Едигәгә килеп етте, ти. Ханлығына килергә өгөтөн әйтте, ти.

[— Кил, Едигәм, кил миңә,
Ниңә килмәйһең миңә?
Барын да бирәм һиңә:
Арғымаҡтың аҫылын,
Буҙ тарпандар затлыһын;
Әйәренең ҡашы алтын,

Айылының башы алтын;
Ҡойошҡаны көмөштән
Үҙенә бик килешкән;
Көмөш — күмелдереге*,
Көмөш — һағылдырығы*,
Ауыҙлығы ла көмөш,
Йүгән башы ла көмөш;
Башына кейгән ҡуш йүгән,
Заты тыуған ер — Шүлгән[4],
Муйындары дуғалай,
Саба белмәй, юрғалай;
Ялы ергә һөйрәлгән,
Ебәк ҡушып үрелгән;
Ҡойорого көлтәләй,
Юҡҡа-барға һелтәмәй;
Янбашы киң, йоморо,
Тояҡтары оторо —
Терәп ҡуйған терәүҙәй,
Дүртәүһе тиң, берәүҙәй;
Бейек унын мундаһы,
Кикелекле соңҡаһы*;
Ҡолағы һаҡ — шеш ҡолаҡ,
Ҡайсыларга иш ҡолаҡ;
Күҙҙәре — бөркөттөкө,
Януар өркөп китмәле;
Танауҙары ярпайған,
Тыны иркен Яйыҡтан;
Ауыҙын асһаң, тештәре
Торалар йәтешләнеп,
Өҙә тешләп алырға,
Ялмауыҙҙай, ялмарға.

Бына шундай атым бар,
Уны алыр хаҡың бар.
Йәндәй күргән ҡыҙым бар,
Едигәм, уны ла ал!]

Едигә үҙ яуабында заты ла, аты ла, ырыуы ла, ата-әсәһе лә булмауын әйтте, ти:

[— Затым һора — затым юҡ,
Атым һора — атым юҡ;
Аҫтымдағы — яттыҡы,
Һиңә лә ят яҡтыҡы;
Атай, тиргә, атам юҡ,
Әсәй, тиргә, анам юҡ,
Баш терәргә — ырыуым —
Яңғыҙ япан* тороуым.
Ҡатнашҡандарым — таныш,

Таныш булмаһа, белеш,
Улар барыһы — бер иш:
Килеп тыуһа берәй эш,
Улар миңә булмай иш].

Тимерхан өгөтләй торғас, Едигә уның иленә аяҡ баҫты, ти. (Әхирәтлек атай, әхирәтлек әсәй билдәләп, уларҙан хан ҡыҙына яусы ебәрттерҙе, ти. Ҡыҙын Тимерхан Едигәгә бирҙе, ти). Шунан ул туй ҡорҙо, ти.

Уйын-көлкө — утыҙ көн,
Күңел асыу — утыҙ төн;
Һыйландылар, ти, ҡырҡ көн,
Хөрмәт күрҙеләр* ҡырҡ төн;
Берәү ҡалманы ситтә,
Эште боҙманы һис тә.
Бына шулай туй үтә,
Даны алыҫҡа китә.

Шуның һуңында ҡыҙ ҡуштылар, ти.

Туй үткәс, кәләшле булып, күп тә тормай Едигә йортта йәнә ҙур-ҙур батырлыҡтар күрһәтә.

Һөйләр инем тулыраҡ,
Ҡуша биреп мулыраҡ,
[Иҫтән сыҡҡан улары,
Иҫләгәнем — шул бары.
Ғәфү ҡыла күрегеҙ,
Тултырығыҙ үҙегеҙ.
Белмәгәнгә — бигәйбә!
Яҙығы булһа, тәүбә]!

## 11. ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ

Бейек тауҙың үлгәне —
Башын томан алғаны;
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйорап барып байығаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.
Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан,
Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ, һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат,
Итһәгеҙ аңа хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.

## БЕРЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Уралға дан йырланғаны: дошмандан уның ышыҡ булғаны, бар терек тарафынан яратылғаны, дүрт аяҡлы януарға — төйәк, атайға — ата, әсәйгә Ватан булғаны, дошман күҙен ҡыҙҙырғаны.

Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым.
Илгә дошман килгәндә,
Ышыҡ булған Уралым —
Ил һаҡлаған ҡоралым.
Ҡайнап, ҡайнап ҡабарып,
Ҡалҡып килгән болоттай,
Күҙ күремдән күренеп,
Ҙур япраҡлы ағастай,
Күгәреп ятҡан Уралым.

Ботағы — алтын алҡалай,
Япрағы — көмөш тәңкәләй,
Һыны — һылыу егеттәй,
Тамыры ташҡа ереккән
Ҡарағай, имән, ҡайыны —
Бары ла һөйгән Уралтау.
Сылтырап аҡҡан шишмәңдән
Һирпеп һыуың алғанда;
Бөтә ғәмең онотоп,
Һыныңа күҙ һалғанда;
Таң сулпаны ҡалҡҡанда,
Һылыуың маҡтап йырлаған;
Таң һыҙылып атҡанда,
Ҡошо маҡтап һайраған;
Ҡыҙы ла һөйгән Уралтау,
Ҡошо ла һөйгән Уралтау.

Күбәләген, бал ҡортон
Үҙ буйына арбаған,
Сал бөркөтө, ҡыйғыры
Ҡаянда төйәк һайлаған —
Хоҙай бирер йәннәттән
Туғайы һылыу Уралтау.

Ай Уралым, Уралым,
Ҡуш имсәктәй ҡабарып,
Ҡалҡып торған Уралым;
Бөтә данды үҙеңә
Йыйып торған Уралым;
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған Уралым;
Яусыл булған атама
Ата булған Уралым;
Йүнсел булған әсәмә
Ватан булған Уралым;
Икеһен дә йоб ҡылып*,
Тул* йәйҙергән Уралым;
Ҡарағайыңды үҫтереп,
Ҡош үрсеткән Уралым;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Яу астырған Уралым;
Атамды яу саптырып,
Әсәмде тол ҡалдырып,
Ике күҙен йәшләтеп,
Ҡәйнә булған Уралым:
Сыңғыр-сыңғыр сыңғраған,
Йылҡыһы күп Уралтау;
Мөңөр-мөңөр мөңөрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Кәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай,
Йыланы күп Уралтау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау;
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау;
Балығы аттай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған,
Йылғаһы ярға һыймаған —
Оло ла оло Уралтау.

Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы алма-еләктәй;
Йылғалары көмөштәй,
Борсағы тәмле емештәй;
Йылҡылары сыңғырап,
Һыйырҙары мөңөрәп,

Ҡуй-һарығы ҡуңырап,
Көтөү-көтөү йөрөгән ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Мең ҡуй булып үрсер ер;
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөгән ер —
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер.

Ай Уралым, Уралым,
Барына ата Уралым,
Ай Уралым, Уралым,
Барына инә Уралым.

Болоттарға баш һуҙған
Армыт-армыт Уралтау;
Ғәйебе бар януарға
Бүреһе — яу Уралтау;
Һаба*-һауыт тултырып,
Аҙаматтар ултырып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп,
Уйнап-көлгән Уралтау;
Ҡуйылығы ҡаймаҡтай,
Тәмлелеге һарҡыттай,
Һаба-һаба ҡымыҙы
Шаулап, гөрләп эскән тау;
Биленә баҫып ҡараһаң,
Бар еребеҙ күренә;
Башыңа сығып ҡараһаң,
Бар илебеҙ күренә —
Ай Уралтау, Уралтау,
Ай Уралтау, Уралтау.

## ИКЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Бала һөйөү бәхетенән мәхрүм Төкләҫ бабаның теләге ҡабул булғаны: Хоҙайҙан уға ир бала бирелгәне. Ун ике йорт-ырыуға иҙеү булһын, тип атаһының уға Иҙеүкәй тип ат ҡуйғаны, уны етем ҡалдырып, үлеп киткәне. Иҙеүкәйҙең баһадир булып үҫеп киткәне: өс йәшендә ун йәшлектәргә тиңләшкәне, балаларға баш булғаны, Ыласынды яҡлашып, уның менән дуҫлашҡаны, 175 йәшлек ҡартты, бер ҡолонға дәғүәләшеүсе ике кешене зирәклеге менән таң ҡалдырғаны, уғры малайға хөкөм сығарғаны.

Ошо данлы Уралда
Төкләҫ[1] тигән ир торҙо,

Батыр, гәҙел, аҡыллы
Ир уртаһы ир булды;
(Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Өркөп ҡасҡан тай һымаҡ;
Йым-йым итеп йымылдай,
Борғоланған йыландай;
Аҡ туҙҙан ҡайнатылған
Дегет менән майланған,
Көтөүсе сыбыртҡыһы
Сыбалышып ятҡандай;
Тауҙан тауға һикереп,
Яҙын донъя һелкетеп,
Ҡайнағандай алҡынып,
Ярға һыймай, ҡалҡынып,
Ағып ятыр Ағиҙел.
Башҡорттарға аҡ Иҙел*.
Туғайына төшкән мал,
Һимереп, үргә меналмай;
Һыуын тәмләп, үткенсе
Ҡабат ары киталмай;
Туйҙырған да шул Иҙел,
Туҙҙырған да шул Иҙел,
Ят бауырҙың күҙҙәрен
Ҡыҙҙырған да шул Иҙел.
Мәйелен белә яуын,
Ҡубып бармай ел-дауыл.
Баба Төкләҫ яҙҙарын —
Ана шунда яҙлар ул.

Ҡояш менән Ай һымаҡ,
Даны балҡып торғанға,
Шөһрәтле ир икәнен
Һәр кем таныП торғанға,
Ана шулар кәртәләп,
Тауҙай ҡалҡып торғанға,
Малдары юғалмаған,
Аҙашһа ла, аҙмаған,
Аҙып япан ҡалмаған.

Әлмисаҡта булған хәл,
Унан үткән күп дәүер,
Ер әҙләп һемтәнләгән
Күҙ һалған бында гәүер*,
Әммә бында ғүмере
Ерекмәгән ят бауыр.
Төкләҫ яҙлаған урын —
Малдарға тыныс тором
Аталалыр әле лә

Яҙлау ере — Яҙҙауыр).
Тарбаҡ-тарбаҡ Уралдың
Ялан менән урманын,
Айырып аҡҡан Иҙелдең
Көнгә ҡарап елеүен,
Төнгә төйгән кендектәй,
Көнгәк тауы буйында,
Ырыу йыйып йәйләне.
Ялан, типһән* күкрәге —
Сал бөркөттәр төйәге
Ирәндектә күҙләне;
Ҡауланында тибендә,
Аҙыраһында* яҙында,
Малы ятып юшаны;
Ваҡ-ваҡ ҡына сауҡалы,
Буйы һалҡын шишмәле —
Төйәләҫтең[2] буйында
Оло баба йортона
Ҡышын ҡайтып ҡышланы.
Төйәләҫтең буйында,
Типһәнендә, юшанда*
Мең төйәһе* утланы.
Илгә дошман килгәнен,
Белһә Яйыҡ кискәнен,
Иҙелдән атҡан уҡтары
Яйыҡҡа барып юғалды.

Һәр саҡ, яуҙар булғанда,
Иленә дошман килгәндә,
Яйыҡ аша сыҡҡанда,
Дошман көслө булғанда,
Иҙел юлдарын быуҙы,
Иҙел юлдарын быуҙы ла
Илдең иҙеүе* булды.

Изге баба Төкләҫтең
Балаһы ла булманы,
Сағаһы* ла булманы,
Берәй бала биреүҙе
Бер Хоҙанан һораны.
Иҙел буйы йәйләүҙә,
Баба Төкләҫ тирмәлә:
— Я Хоҙай! — тип ятҡанда,
— Бер ир бала тыуҙы, ти,
Ағиҙелдең буйында
Шул йәйләүҙә тыуғанға,
Ағиҙел тағы яуында*
Дошмандан иҙеү булғанға:

«Ун ике йорт-ырыуға
Был да иҙеү булһын, — тип, —
Илгә килгән дошманды
Ағиҙелдәй быуһын», — тип, —
Данлы йыйын йыйҙы, ти,
Балаһына туй яһап,
[Ил фекерен самалап,
Уланына атыны]
Иҙеүкәй тип ҡуйҙы, ти.

Өйгә шатлыҡ килгәндә,
Илгә батыр килгәндә,
Улын етем ҡалдырып,
Баба Төкләҫ үлде, ти.

Иҙеүкәй өс айында
Сәңгелдәккә һыйманы;
Бер йәшенә еткәндә,
Тиңдәштәре эсендә
Барыһынан ирәбе*,
Баҙнат булды йөрәге;
Өс йәшенә еткәндә,
Ун йәш менән уйнаны;
Сәкән алып ул орһа,
Оро күҙҙән юғалды;
Суйыр ташты ҡымтыһа —
Он-талҡандай ыуалды;
Иҙеүкәй уҡ атҡанда,
Кирелеп кереш тартҡанда,
Ян, кереше түҙмәне:
(Яны һынып янтайҙы,
Сыра һымаҡ онталды;
Кереш өҙөлдө зыңлап,
Думбыралағы ҡылдай).
Иҙеүкәй батыр булды ул,
Бар уйынды белде ул,
Балаларға баш булып,
Уйын ҡороп йөрөнө ул.

Берҙә-бер көн булғанда,
Иҙелдең текә ярында
Ултырған, ти, ун бала
Беренән-бере аҫыл.
Йөҙөк ҡашындай яна,
Ҡулдарында еҙ ҡурай,
Улар ярышып уйнай;
Ыласын ҡурай уйнаһа,
Моң Иҙелдәй аға, ти.

Ҡанлы йәштәр тама, ти.
Сәмләнә, ти, бүтәндәр,
Эстәре ут яна, ти.
Аранан бер аяулы,
Иркә Ҡолонсаҡ бала
Ыласындың ҡулынан
Ҡурайын тартып ала.
Тартып алғас ҡурайын,
Сурт уртаға һындыра,
Бөтә бала бер булып,
Ыласынға уҡтала —
Ыҙғышалар, ти, былар,
Һуғышалар, ти, былар...
Шул саҡ былар ҡаршына
[Ҡапыл] Иҙеүкәй килә,
Аңлап эштең айышын,
Нимә булғанын белә.
Арыҫландай атлығып,
Ҡара ҡоштай талпынып,
Ҡуш йөрәге типте, ти,
Ыласынды аралап,
Яуға кереп китте, ти,
Унар йәшәр туғыҙ ул,
Өрөккән ҡуйҙай туҙынып,
Туғыҙ яҡҡа таралды;
Ауыҙ, мороно ҡанаған,
Өҫтө, башы таланған
Ыласынды Иҙеүкәй
Аяп күтәреп алды, ти.

Иҙеүкәй, Ыласын дуҫ булып,
Айрылмаҫҡа ҡуш булып,
Иҙел үрләп киттеләр,
Бара торғас был икәү
Урманлыҡҡа еттеләр.
— Ыласын, ҡырҡам бер суҡмар,
Тотһаң, ул үҙе туҡмар —
Бөтә дошманың ҡурҡар,
Уҡталыуынан туҡтар, —
Тип әйтте лә Иҙеүкәй
Ағас һайлай башланы,
Суҡмар яһап ташланы.
Шул ваҡытта Ыласын
[Тине: «Бер эш ҡыламын».
Үҙе шундай шатланған —
Ҡурай тапҡан] аҡландан.
Таҡыя баш бер ҡурай
Ҡырҡып алып яһаны.

*Ыласын:*

— Әй, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Утлау тулы малым юҡ,
Ил тетрәткән даным юҡ,
Ярып бирер йәнем юҡ,
Ҡайҙа етте көн күрәм,
Ете ятта йөҙ түгәм*...
Мин үкһеҙҙе ҡаҡманың,
Туғаныңдай яҡланың,
Һайлап алып аҡландан
Моңло ҡурай яһаным;
Тиң күрһәң, ал ҡурайым,
Дәрт иткәндә, уйнарһың,
Ыласынды уйларһың...

Иҙеүкәй, бик һоҡланып,
Уйнар өсөн, уҡталып,
Ҡулға алып ҡурайҙы,
Өргән ине уфлатып,
Буйҙан ярылды ҡуйҙы.

*Ыласын:*

— Күк күкрәп, гөр килеп,
Боҙло яуын яуғанда,
Таш тәгәрәтеп ҡаяла,
Ҡойон-дауыл ҡупҡанда,
Ыжғырыҡ буран, ҡалын көрт
Башынан аша япҡанда, —
Әлпеһе* боҙға ҡыйылмай,
Буйы көрткә бөгөлмәй,
Тамыры ҡортҡа бирелмәй,
Бер йәй үҫеп, ҡыш күреп,
Тағы бер йәй сынығып,
Буйға еткән ҡурайҙы
Һайлап яһап бирһәм дә,
Бер өрөүҙән артманы,
Күңелеңде тапманы.
Еҙҙән ҡурай ҡойорға
Ҡыҙаш* оҫта түгелмен,
Биләңә ҡәмәр* быуырға
Бай мырҙаһы түгелмен,
Инде, Иҙеүкәй, нишләйем,
Ниндәй бүләк бирәйем?

*Иҙеүкәй:*

— Иләндә толҡа* тапмаған,

Атаң, әсәң иркәләп:
«Бауырым!» — тип баҡмаған,
Йәнлек һуҡмай, уҡ атмай
Йөрөгән Ыласын булһаң һин,
Ҡырыҫ аттан ҡурҡмаған,
Айыуҙы тотоп туҡмаған
Иҙеүкәй дуҫың булам мин.

Бына һиңә дәү суҡмар,
Һиңә юлдаш булыр ул,
Бутлы* булһа беләгең,
Утлы булһа йөрәгең,
Айыуҙы ла йығыр ул...

Ыласын тотоп суҡмарҙы,
Ирен тешләп, кирелеп,
Йән көс менән тартты, ти —
Һелкенмәне лә суҡмар,
Ыласын тубыҡ тигентен*
Үҙе ергә батты, ти.

Берҙә-бер көн булғанда,
Сыр-сыу килеп, пыр туҙып,
Юлда туҙан туҙҙырып,
Соңҡолдашып, ҡысҡырып,
Балдар* сәкән һуҡҡанда,
Бер үткенсе ҡарт килде,
Шул балдарға тап килде.
Балдар сәләм бирмәгәс
Туҡтап ҡарап торҙо, ти.
Йөҙ етмеш биш йәшәгән,
Йән-һөйәге ҡаҡшаған,
Яҡ һөйәген ҡыҫтырып,
Ебәк менән бәйләгән
Ошо ҡарт һүҙ ҡушты, ти.
Балдарҙы орошто, ти.

*Ҡарт:*

— Йөҙ етмеш биш йәшем бар,
Күпте күргән башым бар,
Һеҙгә лә мин атамын,
Атағыҙҙы ул иткән
Бабағыҙға ла атамын.
Берегеҙ сәләм бирмәне:
«Һаумы, олатай!» — тимәне.

Ҡарттың һүҙен тыңлағас,
Бүтән хәйлә булмағас,

Тиҫтерҙәрен яҡлашып,
Иҙеүкәй яуап бирҙе, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Йөҙ етмеш биш йәшең бар,
Күпте күргән башың бар.
Үҙең һана, олатай:
Беҙ егерме балабыҙ,
Унар йәштән барабыҙ,
Миңә генә — әле биш,
Шулай ҙа мин унға иш,
Барын ҡушһаң кем өлкән?
Үҙең һана, олатай.

Тапҡыр һүҙҙе тыңлағас,
Хайран ҡалып, һоҡланып,
Баланы ҡарт һөйҙө, ти:
— Ир булырһың, — тине, ти,
Үҙ ййына китте, ти.

Иҙеүкәй алтмыш бала менән ағас ат уйнатып йөрөгән саҡта, бер баланың ағас аты юғалды. Уны эҙләй торғас, бер баланан таптылар. Бер аҙна үткәс, балалар тағы ағас аттарға атланып, уйнарға сыҡтылар. Тағы ла бер ат юғалды. Был атты ла, күп эҙләгәндән һуң тәүге баланан таптылар. Өсөнсө көн уйнағанда ла, бер ат юғалғайны, шул уҡ баланан таптылар. Алтмыш бала бик асыуланып, Иҙеүкәйҙе хан итеп билдәләп, холоҡһоҙ баланы хөкөм итеүен һоранылар, ти:

— Йөрәге сыбар, күҙе ас,
Һалпы ҡолаҡ, ҡара уй
Атыбыҙға хас булды;
Бер урланы теймәнек,
Холҡондо ҡуй, тимәнек;
Икенсе ҡат тотолдо,
Тәүбә итеп ҡотолдо;
Үҙ һүҙендә торманы,
Өсөнсө ҡат урланы;
Үҙ һүҙендә тормаған,
Уғрылығын ҡуймаған
Кеше, кеше буламы?

Бур байымаҫ, бей туймаҫ,
Һаман этлеген ҡуймаҫ,
Һөмһөҙлөгөн һис тыймаҫ,
Иле менән ҡот йыймаҫ,
Ата йөҙөн ҡаралтыр,
Эсә йөҙөн ҡыҙартыр,

Яман исем таратыр,
Кәңәшле йыйын тарҡалмаҫ,
Иҙеүкәй беҙгә баш булһын,
Арабыҙҙа дан булһын*:
Язалаһын яуызды,
Тыйһын яман ауыҙҙы,
Язалаһын уғрыны,
Хуплап торһон тоғроно, —
Тип барыһы әйтте, ти.
Иҙеүкәй быға күнде, ти.

Иҙеүкәй гәйепле баланы алдына баҫтырып, башҡа балаларҙы түңәрәкләтеп ултыртты ла ошонда хөкөм сығарҙы, ти:

— Туғыҙ ай ҙа туғыҙ көн
Эсәң һине күтәргән,
Эс-бауыры өҙөлөп,
Ҡара күҙе төңөлөп,
Йоҡоһоҙ төн үткәргән;
Ҡанын да биргән бүлеп,
Зарын да биргән бүлеп,
Ҡырҡ көн, ҡырҡ төн буйына
Ике күҙен талдырған,
Йоҡоларын ҡалдырған.
Туҙҙан бишек бөктөргән,
Өҫтөңә сөмбәй* бәйләткән, —
Һыуыҡтан да яҡлаған,
Аслыҡтан да һаҡлаған,
[Ҡағыр саҡта ҡаҡмаған],
Йәненән артыҡ һаҡлаған.
Сәңгелдәгең бауына:
«Тешле булһын балам, — тип,
Бүре ауыҙы таҡҡан[3], —
Ҡыйғыр булһын балам, — тип,
Бөркөт тырнағы аҫҡан, —
Батыр булыр был балам,
Яу ҡайтарыр был балам,
Ил ағаһы бул, балам, — тип,
Сәңгелдәгең бәүеткән, —
Айыуҙай, ағай бул,
Бүреләй, бабай бул;
Эбейҙе, әбей, тиген,
Бабайҙы, бабай, тиген;
Һөттән аҡ телле бул,
Баллы-татлы һүҙле бул;
[Яман күрһәң, ҡаҡыр],
Йәште күрһәң, саҡыр,
Ҡартты күрһәң, баш ор;

Атаң ярған утын түгел,
Әсәң яҡҡан мунса түгел;
Мунса ташы, бүрәнә башы,
Бүре балаһы, айыу балаһы,
Сап, сап, сап,
Сап, сап, сап», — тип,
Мунса сапҡан әсәйең.

Атаң атҡа мендергән,
Өҫ-башыңды бөтәйткән,
Ҡош сөйөргә өйрәткән,
Тубылғынан уҡ юнып,
Ҡараманан ян бөгөп,
Ҡош атырға өйрәткән.
Билең быуған ул һинең,
Уғың юнған ул һинең;
«Яуға ҡаршы йөрөк бул,
Ҡарт көнөмдә терәк бул!» — тип,
Әҙерләгән ул һине,
Ҡәҙерләгән ул һине.

«Бапһыҙ булған аҡ толпар,
Сапһа ла, бауырын яҙалмаҫ;
Атанан тинтәк тыуған ир
Яуҙа һөңгө һуҙалмаҫ;
Ял-ҡойроғо тулы тип,
Ябыҡтан айғыр алмағыҙ —
Ҡойон, дауыл уйнатып,
Урал һыртын саңлатып,
Яуға сабар ат тыумаҫ;
Ата һүҙен тотмаған,
Әсә һүҙе йоҡмаған
Яуға сабар ул булмаҫ», — тип,
Олатайҙар һөйләгән,
Өләсәйҙәр көйләгән.

«Атанан алтау тыуһа ине,
Ата юлын ҡыуһа ине,
Биленә ҡорман* быуһа ине,
Һаҙаҡ атып, дошмандың
Алғасҡы* рәтен боҙһа ине,
Битенә килгән оятты,
Үҙе белеп, йыуһа ине.

Атанан алтау тыумаһа,
Ата юлын ҡыумаһа,
Биленә ҡорман* быумаһа;
Һаҙаҡ атып дошмандың

Алғаҫкы* рәтен боҙмаһа;
Битенә килер ояты
Үҙе белеп йыумаһа;
Алтау булып тыуғансы,
Берәү берәгәй тыуһа ине!
Тыуһа ине, ау, тыуһа ине», — тип,
Олатайҙар һөйләгән,
Өләсәйҙәр көйләгән.

Атанан берәү тыуһаң да,
Берәгәй бала булманың —
Атаң юлын ҡыуманың,
[Яҙыҡ юлды юлланың,
Әсәң һүҙен тотманың,
Уны һанға һуҡманың].
Атаң йөҙөн ҡаралтып,
Әсәң йөҙөн ҡыҙартып,
Тиңдәш атын урланың.
Был балаға, башҡалар,
Инде юлдаш булмайыҡ,
Арабыҙҙан ҡыуайыҡ;
Өйһөҙ бүҙәнә булып,
Ҡайҙа барһа, бытбылдап,
Тик йөрөһөн бойоғоп;
Бергәләп аш еймәгеҙ,
Бергә уйнайыҡ тимәгеҙ.

Бур байымаç, бирән туймаç,
Яңғыҙ тирәк өй булмаç,
Яңғыҙ бала ир булмаç;
Көтөү типкән мал булһа,
Уны сайҙа* бүре алыр;
Ир ташлаған ир булһа,
Көнө етмәй, гүр алыр, ау,
Көнө етмәй, гүр алыр.

Был хөкөмгә бары ла риза булдылар, ти.

Иҙеүкәй биш йәшкә еткән саҡта уның әсәһе лә үлеп киткән була. Үкһеҙ етем ҡалғандан һуң, ҡарар кешеһе булмағас:

— Атай һүккән аш юяр*,
Атай һөйгән аш ейәр;
Атанан күргән уҡ юнһа,
Аты бары ил гиҙһә,
Минең менәр атым юҡ;
Үҙ көнөмдө күрмәһәм,
Морон төртөр кеше юҡ,
[Кешелә кеше эше юҡ], —

Тип Иҙеүкәй уйланы,
[Уйлап, ҡына ҡуйманы,
Уйынды ул ташланы]
Көтөү көтә башланы.

Бер ваҡыт Иҙеүкәй мал ҡыуып йөрөгәндә, уның янына ике әҙәм даулашып килделәр, ти.

*Бер әҙәм:*

— Эй йәш бала, йәш бала,
Ҙур көтөүгә баш бала,
Дәғүә менән килгәйнек,
Шул дәғүәне сис, бала.

Бына ике бейәбеҙ,
Бейәләргә эйә — беҙ,
Сабый бала, саф бала,
Ни әйтһәң дә күнәбеҙ.
Ике бейәгә бер ҡолон,
Яңғыҙ ҡолон кемдеке?
Бынау әйтә: «Минеке»,
Мин әйтәмен: «Минеке».
Шул дәғүәне сис, бала,
Арабыҙҙы киҫ, бала!

*Иҙеүкәй:*

— Бейәләрҙе был һыуҙың
Аръяғына ҡуйығыҙ,
Ҡолонсаҡты был һыуҙың
Бирьяғына ҡуйығыҙ, —

тине, ти. Ике хужа бейәләрҙе һыуҙың аръяғына сығарҙылар, ҡолонды бирьяҡта ҡалдырҙылар, ти. Шунан Иҙеүкәй ҡолонды талсыбыҡ менән һыптыра* башлай. Ҡолондоң сыйылдауына түҙә алмайынса, бейәләрҙең береһе һыу аша был яҡҡа йөҙөп сыға ла, уны муйыны аҫтына алып, әрсәләй башлай.

*Иҙеүкәй:*

— Арғы яҡта ҡалғаны,
Үлән ашап торғаны —
Инәһе түгел ҡолондоң,
Бирге яҡҡа сыҡҡаны —
Инәһе булыр ҡолондоң, —

тине, ти.

## ӨСӨНСӨ ҠОБАЙЫР

Ун биш-ун алтыһында Иҙеүкәйҙең Уралда дан тота башлағаны. Дәмми менән Янбайҙың Туҡтамыш хан фарманы менән килгәне, яһаҡ йыйырға, ете батырҙы алып китергә йыйынғаны. Һабрау сәсәндең пәйҙә булғаны, һәр нәмәгә бай Уралдың данлы үткәнен хәтерләгәне, бөгөнгө батырҙарҙың бахырлығын күреп, йәне әсегәне; Һабрау һүҙен ишеткәс, халыҡтың ҡайнашҡаны, Иҙеүкәйҙең хан кешеләре менән айҡашҡаны. Ырыу башы ете ир ханға ҡарай ҡыуылғас, халыҡтың Иҙеүкәйҙе йәшһенеүе сәбәпле, илдең яуы тарҡалғаны, ят ҡулында ҡалғаны.

Иҙеүкәй үҫеп килгәндә,
Ун биш йәшкә еткәндә,
Тиҫтерҙәре эсендә
Әйткән һүҙе им булды,
Иҙел, Яйыҡ буйында
Батырлығы дан булды.
Уйын ҡорһа йәйләүҙә,
Бар балаға баш булды,
Батыр йөрәк ир булды,
Аҫау өйрәтеп ат менде.
Һунарына сыҡҡанда,
Ете тотам уҡ атты;
Бар баланың алдында,
Ҡарт-ҡороноң алдында
[Ул һис телдән төшмәне,
Тик телһеҙ өндәшмәне],
«Улы юҡҡа ул булыр,
Ул ни тиһә шул булыр;
Урманға инһә шау булыр,
Бар йәнлеккә яу булыр;
Тауға менеп, ул баҫһа,
Тау ярылып, уй* булыр», —
Тип Иҙеүкәй маҡталды.
«Аты юҡҡа — ат табыр,
Ашы юҡҡа — аш табыр.
Аҙашҡанға — юл табыр», —
Тип күҙ артында маҡталды.

Ун алтыға еткәндә,
Дәмми ҡороп ҙур майҙан
Ҡунаҡ ҡотлар булғанда,
Уралдан да, урҙанан
Күп батырҙар килгәндә,
Бар батырҙы ҡыйратып,
Майҙанда өҫ булғанда,
Иң аҙаҡтан Урҙаның
Ҙур батырын йыҡҡанда,
Өҫтөнә ултырып Иҙеүкәй:

«Урҙа аҫҡа ҡалды», — тип,
Мыҫҡыл итеп көлдө, ти.
Асыуланды Дәмми бей,
Бик ғәрләнде Дәмми бей.
Был хәбәрҙе Урҙаға,
Туҡтамыштай ҙур ханға,
Үҙе барып Уралдан,
Һөйләп бирҙе Дәмми бей.
Туҡтамыштай оло хан
Иҙеүкәйҙең Уралда
Дан тотарын аңланы,
Көн-төн шуны уйланы,
Күҙен йоҡо алманы,
Бер ҙә бер көн торҙо ла,
Бар бейҙәрен йыйҙы ла,
Был хәбәрҙе һөйләне:
«Ай, көн үҫте, йыл үҫте,
[Иркен замандар үтте]:
Уралда Иҙеүкәй дан тотто,
Дәмми бейгә Уралда
Хан яһағын йыйырға,
Айҡап йөрөр юл бөттө.
Урал иле шауланы,
Яһаҡ бирмәй башланы».
Оло хан ишеткәс быны,
Саҡырып алып Янбайҙы,
Йөҙләгән яу бирҙе лә:
«Уралдан яһаҡ йыйырға,
Баш тартҡанды тоторға,
Иҙеүкәйҙе эйәртеп,
Һарайға алып ҡайтырға», —
Тип, әмерен бирҙе, ти.

Янбай барып сыҡҡанда,
Арғы тауҙың артынан,
Юлда туҙан ҡупҡанда,
Бирге тауҙың битендә
Яу тулҡыны ҡалҡҡанда,
Аҫау айғыр уйнатып,
Ялман ҡылыс болғатып,
Яһаҡсылар килделәр,
Ҡырҙа йөрөп мал көткән
Ыласынды күрҙеләр;
Унын моңло уйнаған
Ҡурай тауышын ишетеп,
Аттарыны туҡтатып,
Бары тыңлап торҙолар:

— Һай, егетең! — тинеләр,
— Матур уйнай! — тинеләр,
Ыласын янына килделәр,
Аттарынан төштөләр;
Янбай яҡын килде лә,
Ыласынды кәм күреп,
Бар белгәнен әйтер, тип:
«Урал илендә ни бар?
Кемдәр илдә, ҡайҙа?» — тип,
Ил хәлене һораны.
Ыласын эште аңланы,
Илдең серен һаҡланы.

Янбай киткәс ҡуҙғалып,
Яу килгәнен аңлатып,
Бар Уралды шаулатып,
«Сыңрау торна» көйөнә
Сыңғыратып уйнаны.
Еләк йыйған йәш ҡыҙҙар,
Умартасы ҡарт-ҡорҙар*,
Яуҙа булған батырҙар, —
Был оранды тыңланы,
Яу килгәнен Уралға
Барыһы ла аңланы.
Яһаҡсылар елделәр,
Дәмми бейгә килделәр,
Ышаныслы байҙарҙың
Барыһын да йыйҙырып,
Уртаға һалып бар эште,
Бергә кәңәш ҡорҙолар.

Ат саптырып, ете ырыу
Халҡын йыям тигәндә,
Уң яҡтан да, һул яҡтан,
Ялан яҡтан, тау яҡтан
Саң туҙҙырып сабышып,
Бала-саға ыҙғышып,
Төркөм-төркөм һыбайҙар
Килеп урап алдылар.
Янбай бынан ҡалтырап,
«Был ниндәй хәл?» — тине ти.
«Был Ыласын эше!» — тип,
Дәмми һөйләп бирҙе, ти.
Янбай шунда екереп,
Ыласынды тоторға,
Бәйләп алып килергә
Яуҙарына ҡушты, ти.

Хан фарманын ҡулға алып,
Дәмми менән Янбай бей
Икеһе лә яман, ти,
Бапаҡтарға таман, ти.
Ирен ялап алды, ти.
Илгә алап* һалды, ти:

*Янбай:*

— Толпар атҡа атланып,
Хандан килгән Янбаймын;
Сыңғыҙ затын туҙҙырған,
Күптәрҙе буйһондорған
Хан батыры Янбаймын.
Хан бойорҙо, тыңлағыҙ:
«Ете ырыуҙың батыры
Һарайыма килһендәр,
Еҙ тупһамды ашатлап,
Миңә сәләм бирһендәр;
Ханлығымды хөрмәтләп,
Үҙемә баш эйһендәр!» —
Тип аңлатты Янбай бей.
Ете ырыу йыйылып,
Хан фарманын тыңланы,
Ете батыр бер булып,
Килешергә уйланы.

Ете ырыуҙың иң ҡарты,
Һабрау тигән ҡарт ине.
Аҡылға бай, уйға мул,
Сәсән, йырсы ҡарт ине.
Илдең уйын һиҙгән һуң,
Тарҡалышты белгән һуң,
Имән таяҡ таянып,
Тамаҡ ҡырып, ҡайҡайып,
Сәләм биреп барына,
Ҡап уртаға сыҡты, ти,
Башын баҫып уйланып,
Батырҙарҙың йөҙөнә
Күҙ йүгертеп ҡаранып,
Ошо һүҙен әйтте, ти:

*Һабрау:*

— Миңә ҡорҙаш булырҙай,
Арағыҙҙа уҙаман
Юҡ икәнде беләмен.
Мин күргәнде белеүсе,
Мин йөрөгән юлдарҙан

Һис юғы бер үтеүсе
Юҡлығын да беләмен.

Борон-борон, борондан,
Мин тыумаҫтан электән,
Олатайға, әсәйгә,
Төйәк булған Уралтау.
Аҡһаҡалы*, бейҙәре,
Уларҙың ырыуҙары,
Һырҙай ҡанға туҙышып,
Күкрәгенән уҡ үтеп,
Дошмандарын юҡ итеп,
Яуҙап алған Уралтау.
Ҡошо-ҡорто, йәнлектән,
Буйындағы иленән,
Һылыу ҡыҙҙай маҡталып,
Ата-әсәләй һөйөлгән
Иң данлыҡлы Уралтау.
Ай Уралтау, Уралтау.
Ҡуйынын асҡан әсәләй,
Ҡаяһында батырын
Һаҡлай торған тау ине.
Һаба-һауыт тултырып,
Аҙаматтар ултырып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп,
Башында уйнар тау ине.
Ете ырыуҙың батыры
Үҙенә туплап ырыуын,
Уҡ сойорғотоп, яу сабып,
Күп һаҡланған тау ине.
Үҙен һаҡлап яу асҡан,
Сергеһенән ҡан кискән
Батырҙарҙың һөйәген
Үҙендә һаҡлар тау ине.
Батырын атта уйнатып,
Уйында үҫкән ҡурайын
Егетенән уйнатып,
Ҡырғын күргән иленең
Моңон-зарын һыҡтатып,
Һылыуынан йырлатып,
Төйәк булған тау ине.

Бына шуның барыһын
Күреп уҙған ҡартыңмын.
Инде һеҙгә ни тием:
Ялтыраған ҡылысты
Батырҙары ҡындарға
Тығар көнөн күргән һуң;

Яусыл булған ҙур илем,
Ҡул ҡаушырып, буй биреп,
Баш эйергә торған һуң;
Ете ырыуҙың батыры,
Ханға бирeләм, тигән һуң?
Гүр ситендә аяғым,
Шалтырап торған һөйәгем;
Бәбәге кибеп, секрәйгән,
Тонйораған күҙҙәрем;
Йәш сағымдан ҡуш тыуған
Һис ҡартаймаҫ йөрәгем;
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай,
Яуҙа һөңгө булырҙай,
Һабрау, тиеп дан алып,
Күп йыл буйы шаулаған,
Тау-таш ярған йырҙарым
Илем әйткән теләккә
Буйын бирмәй нишләһен?

Атылған ҡоштай һиҫкәнгән,
Күпте белгән уйым бар,
Шул уйымдың эсендә
Әйтә торған һүҙем бар.
Ханға ҡулын биргән һуң,
Ханға түшәк йәйерһең;
Менгән аттан төшкән һуң,
Ханға башың эйерһең;
Ҡылысты ҡынға тыҡҡан һуң,
Хандың ҡоло булырһың;
Анаһы үлгән бал ҡорттай,
Батырҙары киткән һуң,
Илең ҡалыр сыр-сыуға.

Шунан бүтән ни тием?
Яйыҡ китһә — юл китәр;
Биш ырыуҙы һуғарған
Иҙел китһә — ил китәр;
Йәйәү-ялпыһы килеп,
Урал тауға ҡул һалыр;
Илдең затһыҙ берәүһен
Ил өҫтөнә бей ҡылыр;
Яман затһыҙ бей булып,
Бөтә илгә саң һалыр;
Ханға менәр ат кәрәк, тип,
Һайлап яҡшы ат алыр;
Ҡоҙа-аҙна булам, тип,
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,

Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй яҡтырған,
Домбойоҡтай* күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡыған
Һылыуҙан һайлап тағы алыр.

Сырҡылдашып түлләгән
Йылҡыһы күп Уралтау;
Мөңөр, мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Кәкре ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай,
Йыланы күп Уралтау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Уралтау;
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау;
Балығы аттай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған,
Ярына һыуы һыймаған
Иҙеле бар Уралтау;
Сәс-бауҙары сылтырлап,
Ҡарсығалай кәпәйеп,
Һыуға барған һылыуға
Шишмәһе күп Уралтау;
Билге типкән* батырға,
Ат уйнатып сабырға
Типһәне күп Уралтау —
Бары ханға ҡол булыр, ау,
Бары ханға ҡол булыр.

Һабрау һүҙен ишеткәс,
Халыҡ ҡайнап шаулашты;
Уйға ҡалды ете ир,
Алға сыҡты ете ир.
Ат ҡойроғона тағып,
Ыласынды килтергәс,
Халыҡ даулап ат менде,
Ҡындарынан сығарып,
Ҡылыс алды ете ир.
Дәмми менән Янбайҙың
Яуы бергә ҡушылып,
Арала яу ҡуҙғалды,

Баштан ҡойҡа һуйылды,
Ауыҙҙан теш ҡойолдо,
Һәр яҡтан да күп кеше
Һанһыҙ булып ҡырылды.
Көн-төн яуҙар барғанда,
Йәш Иҙеүкәй бер яҡтан
Ыласындай ҡырғанда,
Ете батыр ҙур яуҙа,
Ҡул-аяғы бәйләнеп,
Дошманға буй биргәндә,
Ете батыр, Ыласынды,
Ҡатын-ҡыҙҙы, күп ирҙе
Ханға ҡолдай ҡыуғанда,
Бәйгә ҡаршы Иҙеүкәй,
Ҡарсығалай түш киреп,
Ил яуына баш булып,
Йән аямай һуғышты.
Ырыу башы ете ир
Ханға ҡарай ҡыуылғас,
Иҙеүкәйҙе йәшһенеп,
Арала төрлө һүҙ булғас,
Илдең яуы тарҡалды,
Ил ят ҡулында ҡалды.
Яһаҡ һаман йыйылды,
Көтөү малдар ҡыуылды,
Урал тауҙың япрағы
Ҡан, йәш менән йыуылды.

## ДҮРТЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Иҙеүкәйҙең аҡыл һорап Һабрауға барғаны: уның кәңәшен тотоп, көн аралап, ил күрергә киткәне; Һомайҙы хәтерләтерлек һыу ҡыҙын осратҡаны, Урал батырҙы иҫкә алып, уның кеүек ил ҡурсаларға дәрт иткәне, йыры буйынса Һабрауҙы табып алғаны. Һабрауҙың Иҙеүкәйгә, Урал батырҙан ҡалған Аҡбуҙатҡа менеп, уның алмас ҡылысын ҡулға тотоп, Туҡтамыш хан ҡуштаны Дәмми бейҙән илдең ҡонон алырға әйткәне.

Иҙеүкәй һаман тынманы,
Ҡул ҡаушырып торманы,
Бейҙәр яһаҡ йыйғанда,
Ил шаулаған сағында,
Йортон, ерен ҡалдырып,
Бала-саға шау килеп,
Ҡаяларға ҡасҡанға;
Мал-тыуарһыҙ ир-аты
Аптырауға ҡалғанға,
Иҙеүкәй сыҙай алманы,

Һабрау ҡартҡа барҙы, ти.
Үҙ уйҙарын Һабрауға
Теҙеп һөйләп бирҙе, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Эй, ҡартым һин, ҡартым һин,
Күпте күргән ҡартым һин,
Теҙеп һөйләп бирҙе, ти.
Йөҙ етмеш биш йәш йәшәп,
Әйт, олатай, әйтһәнә,
Әйт, олатай, әйтһәнә!
Өйөр йылҡы көтөүен
Ҡыуалап алып киттеләр;
Ыласын тигән дуҫымды
Быҡаулап алып киттеләр;
Уралдың батыр улдарын,
Уралдың матур ҡыҙҙарын,
Ҡуй көтөүен ҡыуғандай,
Ҡыуалап алып киттеләр.
Инде, олатай, нишләйем,
Инде, олатай, нишләйем?

Туҡтамыш хан, тигәне,
Туҡтамыш хан, тигәне,
Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өрөккән ҡуйҙай итте бит:
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итте бит;
Яурыныбыҙҙан уҡ үтте —
Көнөбөҙҙө юҡ итте;
Башы ҡамалы тыуыбыҙ,
Илде һаҡлаған яуыбыҙ,
Урал да тигән тауыбыҙ,
Бары ла китте, ау, китте.
Инде, олатай, нишләйем?
Инде, олатай, нишләйем?

Мөлдөрәп ятҡан аҡ күлдәр,
Йәйерәп ятҡан Иҙелдәр,
Үҙән-үҙән өңөлөп,
Ҡороп ҡалды, олатай.
Алпан-толпан атлаған
Айыуҙары Уралдың;
Ҡыҙ-ҡырҡындай кейенгән
Төлкөләре Уралдың;
Урттән ҡасҡан шикелле,
Бары ла китте, олатай.
Ҡоштар осоп үтмәҫлек

Киң ҡырҙары илемдең,
Ҡуян йүгереп етмәçлек
Яландары илемдең,
Ҡара яныл, көл булып,
Шаурап ҡалды, олатай.
Инде, олатай, нишләйек, ау,
Инде, олатай, нишләйек?

*Һабрау:*

— Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһән,
Ҡолағының эсенән;
Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,
Ҡолағының тышынан.
Дөрөç һүҙҙең яты юҡ,
Аçыл һүҙҙең аты юҡ.
Үҙән күрке тал булыр,
Айғыр күрке ял булыр.
Ышанмаһаң, талын киç,
Яп-яланғас сай* булыр,
Ялын ҡырҡһаң айғырҙың,
Бер алама тай булыр.
Тәлтермәстән* йөрөк* уҡ булмаç —
Тейһә, күбәне үтә алмаç;
Торомтайҙан* осҡор ҡош булмаç,
Типһә лә турғай, ҡаҙ алмаç;
Батырҙа гәйрәт бөткән һуң,
Яуҙа һөңгө һуҙалмаç;
Елберҙәге булмаһа,
Балыҡ үргә йөҙә алмаç;
Ҡулда ғәйрәт булмаһа,
Батыр яуға сабалмаç.

Яман әҙәм шул булыр:
Ауыҙында ике тел булыр;
Алдыңда һине ағартыр,
Артыңда һине ҡаралтыр;
Ауырлыҡты күтәрмәç,
Илгә игелек килтермәç.

Егетмен, тигән егеттең
Киң күкрәге аҡ булыр,
Күңеле уның пак булыр,
Дошман уға ят булыр;
Яманлыҡҡа түҙә алмаç,
Яҡшылыҡ ҡылмай торалмаç;
Ҡурҡаҡ булмаç ул батыр,
Әйткән һүҙендә ҡалыр;

Ир-егеттең эсендә
Эйәрле, йүгәнле ат ятыр.
Ил батыры шул булыр:
Илап-һыҡтап ҡайғырмаç,
Илгә бәлә килгәндә,
«Нишләйем?» — тип аптырап,
Илен ташлап ҡалдырмаç.
Яман кеше шул булыр:
«Ишектән ингән берен*,
Ҡалдырмайса бер ерен,
Эттән алып, эткә һалып,
Аямайса һүктем», — тир.
Яҡшы кеше маҡтанһа:
«Халҡым! — тир, ау, — халҡым!» — тир.
Халҡың гәмен кем йыйыр,
Халҡың гәмен кем йыйыр?
Урманда уҡ һайлаған,
Дошманға башаҡ ҡайраған —
Шул йыйыр, ау, шул йыйыр...

Бер, тигәс тә, ни яман?
Аптыраған ил яман.
Ике, тигәс тә, ни яман?
Илһеҙ ҡалған ир яман.
Өс, тигәс тә, ни яман?
Өлгөһөҙ бескән тун яман.
Дүрт, тигәс тә, ни яман?
Түрәһеҙ ҡалған ил яман.
Биш, тигәс тә, ни яман?
Бишектә ятҡан балаң
Илап ҡалһа, шул яман.
Алты, тигәс тә, ни яман?
Алты ағай бер булып,
Береһен дошманға бирһә,
Яҡлашмаһа, шул яман.
Ете, тигәс тә, ни яман?
Ете йәшкә еткәндә,
Етем ҡалһаң, шул яман.
Һигеҙ тигәс тә, ни яман?
Һикһән йәшлек ҡарт әсәң,
Талған күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыһа, шул яман.
Туғыҙ тигәс тә, ни яман?
Туҡһан йәшлек ҡарт атаң,
Талған күҙен секрәйтеп,
Тумыртҡалай туҡылдап,

Ябалаҡтай уһылдап,
Утын ҡырҡһа, шул яман.
Ун тигәс тә, ни яман?
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй яҡтырған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күпереп үҫкән, ҡалҡыған
Һайлап алған һылыуың
Илап ҡалһа, шул яман.
Ун бер, тигәс тә, ни яман?
Яуға сапҡан батырҙың
Аты һөрөнөп йығылып,
Бите, башы ҡан туҙып,
Яуҙан ҡалһа, шул яман.
Ун ике, тигәс тә, ни яман?
Атанан ун бер ул тыуып,
Етем ҡалһа шул яман,
Ун өс, тигәс тә, ни яман?
Затһыҙ йыйған мал яман.
Ун дүрт, тигәс тә, ни яман?
Ун дүрт йәшлек һылыуҙы
Яттар һөйһә, шул яман.

Һабрау ҡарттың был һүҙҙәрен ишеткәс, Иҙеүкәй уға былай тине, ти:

— Урал иле, йәш түгә лә, ҡан түгә. Көнөбөҙ төн кеүек, төнөбөҙ шом кеүек. Беҙҙең, олатай, ҙур Уралыбыҙ, унда яу һөйгән халҡыбыҙ бар ҙа баһа. Атҡа менергә, уҡ-һаҙаҡ алырға, яуға ҡаршы яу булып бара алмайбыҙмы ни?

Һабрау ҡарт йәш Иҙеүкәйҙең ҡыйыулығын, ил өсөн янып йөрөүен күреп:

— Мин һиңә бер йомаҡ әйтәм, шуның яуабын тапһаң, ир-егет булып еткәнлегең мәғлүм булыр, — тине, ти.

*Һабрау:*

— Тимер, ҡорос булатты
Ҡамыр иткән бар микән?
Оҙон-оҙон оҙон юл
Осона сыҡҡан бар микән?
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан бар микән?
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан бар микән?
Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән бар микән?

Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бар микән?
Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән,
Ҡош та бүтән бар микән?
Ер ҡуйынына инмәгән,
«Абау, бауырым!» — тимәгән
Бауыры бөтөн бар микән?

Был йомаҡты ишеткәс, һис уйланып тормайынса, Иҙеүкәй яуабын әйткән.

*Иҙеүкәй:*

— Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән оҫталар;
Оҙон-оҙон оҙон юл
Осона сыҡҡан сауҙагәр;
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан каруансы,
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан юлаусы;
Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән һунарсы;
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған балыҡсы;
Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән —
Ул ҡош булыр — торомтай*;
Ер ҡуйынына инмәгән,
«Абау, бауырым!» — тимәгән,
Бауыры бөтөн — бер Хоҙай, —
Тип әйтте, ти Иҙеүкәй.

*Һабрау:*

Ҡупшы егет, ҡамҡа* тун, —
Һөйкөмлө тип һаналмаҫ:
Хан һарайы түрендә,
Түшәк һалып аҫтына,
Затһыҙ хан менән бергә
Уйнап-көлөп сәрхәттә*,
Илен һалып хурлыҡҡа,
Батырмын, тип, ат менгән,
Һәрпәндәшеп* йөрөгән
Бейҙәр ҙә биҙәл* булалмаҫ;
Мәкерле хан ҡәһәрен
Иленә монар яһаған
Иленә ир булалмаҫ.

Яу ҡағыусы ҡашҡаға*,
Йәштә йәштәш булһа ла,
Эштә юлдаш булалмаҫ.
Батыры, яуға китәм, тип,
Ат эйәрләп торғанда,
Ай-бай һалып илаған
Һылыу һомғол булмаҫ ул.
Бүре, айыу һуҡһа ла,
Ҡырҙашҡа шыбаға булһа ла,
Илен туплап дошманға
Сығаралай булмаһа,
Илгә таяныс булырҙай,
Ҡашҡа* батыр булмаҫ ул.

Инде, Иҙеүкәй, һиңә әйтәм,
Һүҙен тыңла ҡартыңдың,
Донъя күргән, ил гиҙгән,
Күп йәшәгән, ир белгән
Ҡартыңмын, ау, ҡартыңмын.
Ҡуш теҙгененде тотоп,
Ҡан ерән ат менгәнсе,
Урал батыр ҡылысын,
Ел еткермәҫ Аҡбуҙын
Һыу төбөнән алһаңсы.
Иҙел буйын, Яйығын,
Тәрән күлен, тау буйын
Бер әйләнеп йөрөһәңсе, ау,
Бер әйләнеп йөрөһәңсе!

Һабрау һүҙен тыңлағас,
[Барыһын да аңлағас,
Иҙеүкәй ныҡ уйланы],
Төрлө юлдар һайланы.
«Ил аралап, ир күрмәй,
Ил батырҙары менән
Осрашып сайҡашмай,
Һис бер егет яу менән
Ил батыры булмаған», —
Тип Иҙеүкәй уйланы.
Ҡулына алып һаҙағын,
Армыт та армыт араһын,
Шыр урманлы ҡаяһын, —
Әҙәм аяҡ баҫмаған,
Яман-юлһыҙ, тимәне,
Иҙеүкәй Урал буйланы.

Көн аралап, ил күреп,
Һаман юлда барғанда,

Күккә олғашҡан Уралдың
Япраҡтарын* күргәндә;
Тамыр, ташҡа йәбешеп,
Ҡая өҫтөнә менгәндә;
Ҡыҙарып таң атҡан һуң,
Ҡош-ҡорт бары уяныи,
Уралда йәм балҡыған һуң;
Эйәк һалып ҡаяға,
Ҡояш та нур сәскән һуң;
Ҡайҙалыр бик моңланып,
Уйын ҡороп ҡушланып,
Күктәмелер, ерҙәме,
Торнамылыр, аҡҡошмо,
Әллә бүтән бер ҡошмо
Ҡыйҡылдауын ишетте.

Иҙеүкәй туҡтап шул ерҙә,
Был тауышты тыңланы;
Бөйөрөнә таянып,
Бер аяғын янбашлап,
Ҡулын ҡуйып маңлайға,
Күк йөҙөнә ҡараны.

Ағылып күскән болотҡа
Көйөс-көйөс йәшенеп,
Айыра асыҡ беленмәй,
Аҡ тап ҡала сағылып:
Уға биш ҡош күренде.
Буйға осмай урандап*,
Һаман түбән һөҙәкләп,
Һуйҡалап* төшөп килгәнгә,
Мәргәнлеген һынарға,
Иҙеүкәй һаҙағын алды.

Ағас ҡыуышын шәйләп,
Иҙеүкәй ситкә тайшанды.
Ҡоштар килеп саңҡылдап,
Урандылап, ҡаңғылдап,
Төшөргә яй һайланы.

Тирә-яғы ҡая-таш,
Яр буйҙары — ҡырсын-таш,
Гүйә, тәңкә баҫылған
Аҫыл-аҫыл аҫылдан;
Оҙон керпектәр һымаҡ,
Әйләнәһе ҡуғалы*,
Ел дә елпеп өҫтөнә
Тынлығын һис боҙмаған, —

Ҡаҙ, өйрәк тә — бер ҡош та
Килеп төйәк итмәгән
Күлгә килеп төштө, ти.
Һылыу ҡыҙҙай йөҙҙө, ти.

«Аҡҡош күрһәң, ҡулың тарт,
Бүтәнгә тоҫҡап уғың ат»,
Тигән ололар һүҙен
Иҙеүкәй шунда уйланы;
Ян керешен бушатып,
Иҙеүкәй атмай туҡтаны.

«Атам, атам, тигәнем,
Уралды Урал иткән ир,
Уралды ил иткән ир,
Муйынына бысаҡ һалғанда,
Атаһынан, Шүлгәндән
Тартып азат иткән ир —
Урал батыр һөйгәне,
Уның да ҡош тигәне;
Урал батыр барған һуң,
Ҡош тунын ул һалған һуң,
Бал ҡортондай һын-билле,
Домбойоҡтай* күкрәкле,
Оҙон ҡара толомло,
Хур ҡыҙындай гәүҙәле*;
Ергә нуры балҡыған,
Күлгә төшһә, ҡояштай,
Күлде нуры ҡаплаған;
Ҡарсығалай, күкрәген,
Кирә биреп кәпәйтеп,
Һыу өҫтәрен күпертеп,
Тулҡындырып, һай, йөҙгән;
Уйнаҡлаған ҡолондай,
Уралыны иркәләп,
Күреп йәйендәй аны,
Аҡбуҙ биргән эйәрләп,
Һомай тигән һылыуҙың
Балалары булмаһын!» —
Тип Иҙеүкәй уйланы.

«Алтын алҡа тиң күрмәй,
Энйе* таҡҡан һылыумын,
Ер егетен тиң күрмәй,
Күктә үҫкән һылыумын.
Битемдәге ҡабымды*
Асып көнгә күрһәтһәм,
Һөҙөлөп баҡҡан күҙемде

Күңеле барға тектәһәм,
Ай һөйгәнгә, Айындай,
Көн һөйгәнгә, Көнендәй,
Йырҙан башҡа йәшәмәҫ
Ер-егеткә, йәрендәй,
Була торған һылыумын!» —
Тип Иҙеүкәй уйланы.

Һылыуҙарҙан һылыуҙан,
Урал батыр һөйөлгән:
«Иленә дан яулаусы
Һин батыр ир!» — тиелгән,
Батырлығын күргән һуң
Аҡбуҙатын мендергән.
Дейеүҙәрҙән ҡурҡмаған,
Йыландан да әркмәгән,
Донъя баҫкан диңгеҙҙең
Һыуын ярып юл һыҙған;
Киң диңгеҙҙең өҫтөндә
Деү башынан тау өйгән,
Урал булып дан алған
Батыр күктән төшмәгән,
Ен ҡыҙынан тыумаған,
Минең һымаҡ ир булған.
Мин дә шулай булайым,
Илде бергә йыяйым,
Ил талаған дошманға
Ҡан яуыны асайым», —
Тип, Иҙеүкәй уйланы, ти.

Юлһыҙ шырлыҡтан китте,
Агиҙелен, Уралын;
Йәйләүҙәрен, урманын —
Бер әйләнеп сығырға
Үҙән буйлап юл тотто.
Тыуған, үҫкән илдәрен,
Буй-арҡылы ерҙәрен,
Ишетеп халыҡ зарҙарын,
Күреп батыр ирҙәрен,
Төйнәп илдең серҙәрен,
Белә китте Иҙеүкәй,
Күрә китте Иҙеүкәй.

Шул китеүҙән ул китте,
Уны һис кем белмәне;
Кемдәргә тап булғанын,
Ниндәй эштәр ҡылғанын,
Ниндәй донъя күргәнен,

Һабрау ҡарттан бүтәне,
Һис берәү ҙә белмәне.
Айҙар, йылдар уҙғанда,
Урал батыр булатын
Биленә тағып килгәндә,
Саҡ салынып алыҫта,
Болоттарға олғашып
Торған ҡая битендә,
Ҡом, һыу, ерен яратып,
[Сайыр еҫе таратып,
Мин-мин микән, кем икән,
Тигән кеүек түш киреп,
Йәйек* ярпайта биреп,
Тамыр тарбайта биреп,
Үҫкән ҡарағайҙарға];
Ҡош моңона иркәләп,
Талпынып үҫкән ҡайынға
Сағанына, уҫаҡҡа —
Барына ла ҡартлыҡта
Аға булған Уралда,
«Таш маяҡ»тың янында
Ботаҡтары тарпайған,
Япраҡтары ялпайған,
Төбөнә килгән күптәрҙе
Эҫелектән ҡурсыған
Ҙур имәндең янында
Сапсынып торған Аҡбуҙҙы
Иҙеүкәй күреп туҡтаны.

Йөрәкһене, ат күргәс,
Бер аптырап уйланды,
Бары оран биргәндәй,
Һөйөнсөһөн алғандай,
Урал һелкенеп елешкәндәй,
Бары берҙән* әйткәндәй:
«Бар, Иҙеүкәй! — тигәндәй —
Һине көтә Аҡбуҙат.
Кил, Иҙеүкәй!» — тигәндәй,
Ҡая таштар ялтырап,
Урмандары шыптырлап,
Ҡоштар һайрап ҡуйҙылар:
Томра ҡояш эҫеһен
Елдәр һирпеп иҫтеләр,
Тирле йөҙөн батырҙың
Йомшаҡ һыйпап һөйҙөләр.
Ат күргәс тә, маһайып,
Бөтә йәмгә мауығып,

Иҙеүкәй атҡа барғанда,
Ҡош моңдарын ҡапларҙай,
Шаңғып бер йыр салыныпп,
Эҫе һыуҙы бөрккәндәй,
Быуынына төшкәндәй,
Аяғын ер тотҡандай,
Егетеңдең шул ерҙә,
Бар уйыны тарҡатып,
Йырҙың зарлы аһтары
Барыр ерҙән туҡтатты.
Бер ҡаяға ултырып,
Иҙеүкәй йырҙы тыңланы;
Был Һабрауҙың йыры тип,
Иҙеүкәй шунда аңланы.
Шунан торҙо елкенеп,
Сал бөркөттәй талпынып,
Арығанын тоймаҫтан,
Тапҡыр шунда атланы.

Иҙеүкәй барып сыҡҡас та,
Эйелеп сәләм биргәс тә,
Һабрау йырын бүлмәне,
Илдең зарын, моңдарын
Йырға һалып һөйләне.

*Һабрау:*

— Ай Уралтау, Уралтау...
Кемгә ҡуныш* булманы?
Даны артҡан һылыуҙай,
Кемдән яусы килмәне?
Ағиҙелдән һыу эскән,
Ат уйнатып буйында,
Һылыу ҡыҙҙарҙы ҡосҡан,
Ниндәй батыр булманы?
Утыҙ теше сайраған*,
Бар һөйәге ҡыйраған,
Ите бөтөп, бар тәне
Тарамышҡа әйләнгән,
Йөҙ һикһән биш йәш йәшәп,
Уралым, тип йырлаған,
Ата, инәһе үлгәндә,
Иман теләп Алланан,
Ҡанлы йәшен ҡоймаған —
Һабрау ҡарт та тыуған тау,
Һабрау ҡарт та һөйгән тау.

Ай Уралтау, Уралтау...
Үткән көнөң уйлаһам;

Ҡорт күсендәй тупланып,
Батырҙарың уҡ алып,
Уғын йәйәгә һалып,
Күрәм һаҡлап торғанын.
Бөгөнгөмә күҙ һалһам, ул:
Эйәһе үлгән йорт һымаҡ,
Ҡылыс, һаҙаҡ тоторҙай
Батыры бөткән ил һымаҡ;
Тимә бере яусылар*
Ирһеҙ ҡалған ҡатындай;
Ишеге асыҡ өй һымаҡ,
Күрәм тороп ҡалғанын.

Борон үткән яуҙарҙың
Ҡаны тамып микләнгән*,
Тупрағынан яралған,
Уралына һыҡтаған
Берәй батыр юҡмы ни?
Дейеүгә яу асҡанда,
Бер үҙе биш күренгән,
Алдына килгән дошмандың
Һанын һанап тормаған,
Тыуға* сөйгән ҡыйғырҙай,
Ас бүреләй уҡталып,
Яуын ҡырған йотоноп
Урал батырҙай ир булып,
Тыуған батыр юҡмы ни?

Һөрән һалып яу асҡан,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай,
Теле майҙай иреткән,
Бөтә эштә сер тотҡан,
Уйлағанда, таш йотҡан,
Халыҡ ҡонон юллаған,
Ил намыҫын һаҡлаған,
Уралдан буҫҡан дейеүҙең
Гөбөрлө яһап батшаһын,
Шәрә* һөлөк яһап дейеүен,
Бөтә Уралды ҡотҡарған,
Сура батыр улындай
Бер мыҡты ир юҡмы ни?

Уралды Туҡтамыш таланы,
Илдең йөҙө ҡанланды,
Ҡылыс һалып, батырҙар
Ҡул ҡаушырып бил бөктө.
Шул ҡайғынан Һабрау ҡарт
Күпме күҙ йәш, ҡан түкте.

Урал — илгә ата ул,
Урал — илгә инә ул,
Уралға тел тейҙергән,
Ата-инәнән көлдөргән
Тыума бала* булыр ул.

Атаһын атай итмәгән
Илгә батыр булырмы?
Әсәһен инәй тимәгән
Илгә дана* булырмы?
Ата ҡәҙерен белмәгән
Илдең ҡонон белерме?
Әсә ҡәҙерен белмәгән
Батыр атаһы булырмы?
Атаһыҙ үҫкән уҡ юнмаҫ,
Илен ҡан-яу баҫҡанда;
Әсәһеҙ үҫкән тун текмәҫ,
Ире яуға киткәндә.

Ай Уралтау, Уралтау,
Үткән көнөң уйлаһам:
Ҡорт күсендәй, тупланып,
Батырҙары уҡ алып
Уғын йәйәгә һалып,
Беләм һаҡлап торғанын;
Бөгөнгөмә күҙ һалһам, ул:
Эйәһе үлгән йорт һымаҡ;
Ҡылыс, һаҙаҡ тоторлоҡ
Батыры бөткән ил һымаҡ,
Тимгә бере яусылар*
Ирһеҙ ҡалған ҡатындай;
Ишеге асыҡ өй һымаҡ,
Күрәм тороп ҡалғанын...

Һабрау ҡарт артыҡ һөйләй алмай, биленә һуҡҡан йыландай, бөгөлөп-бөгөлөп илай башлағас, Иҙеүкәй килде лә аны ерҙән күтәреп, йыуатып, үҙ һүҙҙәрен әйтте, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Бейек тауҙың үлгәне —
Башын монар алғаны;
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйорап барып байығаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.

[Ирмен, тигән ир кеше]
Бурһыҡтай боҫоп ятмаһын,
[Илдә, тышта һан алһын],
Үлгәнендә лә, дан ҡалһын.
Көнгә күҙе сағылған,
Ярғанаттай, ҡасмаһын!
Яу килгәнен күргәндә,
Бәпкә йөнөн ҡалҡытып,
Еләҫ иҫкән елдә лә
Шаулап торған уҫаҡтай,
Йөрәктәре ҡалтырап,
Яуҙан боҫар мин түгел,'
Яуға бармаҫ мин түгел!

*Һабрау:*

— Батыр булған улына
Илем атын һайлаған,
Батыры килер юлына
Илең атын бәйләгән.
Мен, Иҙеүкәй, Буҙатты,
Таҡ, Иҙеүкәй, булатты:
Биленә тағыр ҡылысың
Урал батыр ҡылысы —
Алдында урман торғанда,
Юлың йылға быуғанда,
Урманын да, һыуын да
Айыра ярған ҡылыс ул;
Таш күкрәкле тауҙарҙы
Он-талҡанға килтергән;
Ен-бәрейен Уралдың
Барыһын баш эйҙергән;
Ен йөрәген көйҙөргән
Даны сыҡҡан ҡылыс ул.

Урал батыр ҡулында
Илдәр гиҙгән ҡылыс ул;
Иҙел менән Яйыҡҡа
Үҙән йырған ҡылыс ул[4];
Күл төбөндә күгәрмәй
Мең йыл ятҡан ҡылыс ул[5],
Һин менәһе Аҡбуҙат —
Урал батыр аты ул;
Алдында урман торғанда,
Юлын йылға быуғанда,
Урманын да, һыуын да
Ырғып үткән ат бит ул.

Болотка етәһе тауҙарҙы
Һикереп ашты Аҡбуҙат,
Тояғы тейгән урындан
Күл сығарҙы Аҡбуҙат,
Елеп үткән еренән
Тау сығарҙы Аҡбуҙат...

Һай, аҡ күрҙем, аҡ күрҙем,
Аҡта ҡара тап күрҙем;
Ағы — илдең йөҙө ине,
Аҡҡа ҡара тамғаны,
Ҡуҙҙай өтөп алғаны —
Туҡтамыш хан үҙе ине.

Илдең йөҙөн ағартып,
Ҡара таптан таҙартып,
Етем хаҡын аҡларлыҡ,
Ҡаныгып килгән яуҙарҙан
Йортон, ерен һаҡларлыҡ
[Ир тыуҙы инде Уралда],
Ир үҫте инде Уралда,
Ир етте инде Уралда, ау.

Йәшкәүләгән күҙҙәрҙең
Ҡанлы йәшен киптереп,
Атайың кейәү булған,
Әсәйең килен булған
Ете ырыу йортоңа
Ҡот, бәрәкәт килтерер,
Йәйрәп ятҡан утлауға
Һанһыҙ өйөр тултырыр,
Бар ырыуҙар шатланып,
Телдән телгә маҡталып,
Илдең оло түрендә
Байман* табып ултырыр
Күсәм* бул һин, Иҙеүкәй,
Ҡашҡа бул һин, Иҙеүкәй!
Өйҙә тыуғандаш тыуып,
Өй серен ситкә тараҡан,
Өрә белмәй, ләңкелдәп
Йортоңа дошман ҡараҡан,
Илен яттан талатҡан,
Илдә яуыз бей булып,
Туҡтамышҡа ҡуш булып,
Урал буйын илатҡан,
Дәмми бейгә бар, улым,
Илдең ҡонон ал, улым!

## БИШЕНСЕ ҠОБАЙЫР[6]

Һабрауҙан Аҡбуҙаттың ҡайҙалығын ишеткән Иҙеүкәй Шүлгән күлгә килеп, Һыуһылыуҙы осратҡаны, Һыу төбөнә төшкәне, аждаһаны еңеп, һарайға ингәне. Кәләшенең уны албырғатырға теләгәне. Иҙеүкәйҙең Аҡбуҙат менән Урал батыр ҡылысын һорағаны. Вәғәҙәһен боҙоп, Һыуһылыуҙың ярҙам итеүҙән баш тартҡаны; төшөнә кергән Хыҙырҙың айлыҡ юлдағы аждаһа йыландың ҡойроғон ҡайырып, уң күҙенә төртөп, Аҡбуҙ бикләнгән һарай асҡысы ҡойолорон, шул асҡыс менән һулына төртһәң, һарай асылырын әйткәне. Иҙеүкәйҙең, Аҡбуҙатты менеп, күлдән килеп сыҡҡаны.

Тулы ҡойроҡ, тулы ял —
Күбәләк-тиләү* малынан;
Сыпыш ҡолаҡ*, көмөрө бил —
Ирәндектең малынан;
Ҡыртыш йөнлө, шеш ҡолаҡ —
Һаҙай-ҡаҙаҡ иленән
Аҡбуҙ тыуған мал түгел.
Аҡбуҙат ул — толпар ул,
Ерҙә үҫкән мал түгел:
Дейеүҙәрҙе ҡыйратҡан,
Һыу ҡоротоп юл асҡан,
Урал батыр аты ул.

Ай, Аҡбуҙат, Аҡбуҙат —
Данын сәскән буҙ ат ул.
Ул толпарҙы алырға,
Аңа эйә булырға,
Урал аҙмы һуғышҡан?
Йылан, дейеү яуынан
Ҡотҡарырға яулашҡан.
Унан ҡала улдары,
Сура батыр балаһы[7],
Һыу батшанан яулашып,
Аҡбуҙ толпарҙы менеп,
Урал батырҙың илен
Мәсем хандан ҡотҡарған.
Батырҙар ҙа менгән ат,
Дейеүҙәр ҙә тотҡан ат,
Ул Аҡбуҙат үлмәгән,
«Урал буйы — йәмле тау,
Минең тапҡан юлым, — тип, —
Бөтә йылҡы тоҡомон
Йәйелдергән ерем», — тип,
Уралдан ул китмәгән.
Һыу батшаһы урлатып,
Үҙенә ат итһә лә,
Уралға яу асмаған,

Илгә дошман батырға
Менәргә ат булмаған.

Иҙеүкәй тыуғас, ир булғас,
Туҡтамыш хан Уралда
[Дәмми ҡуштаны менән]
Йәш ағыҙып, ҡан ҡойғас,
Иҙеүкәй батыр түҙмәне,
Дошманға һаҙаҡ ҡайраны,
Менәргә ат һайланы.

[Йөҙ һикһән биш йәшәгән
Һабрау тигән сәсәндән,
Шүлгән күлдең төбөндә
Эле һаман бөгөн дә
Аҡбуҙ тигән ат барын,
Донъяла һис тиңе юҡ
Урал батыр толпарын;
Эйәренең ҡашында
Булат ҡылысы барын
Ишеткәндән белгән һуң],
Йөрәгенә таянып,
Алырына ышанып,
Эҙләй китте Иҙеүкәй,
Юллай китте Иҙеүкәй.

Әҙәм аяҡ баҫмаған,
Ҡоштар оя теҙмәгән,
Шүлгән күлгә[8] барҙы ул,
Анда биш ҡош күрҙе ул,
Уларҙы атмай Иҙеүкәй,
Ҙур түҙемлек итте ул.
Ҡоштар быны күрҙеләр:
«Аҡыллы ир», тинеләр.
Иҙеүкәйҙең алдына
Осоп килеп ҡундылар,
Ҡоштундарын һалдылар,
Һылһылыу ҡыҙ булдылар.
Араһында берәүһе
Бал ҡортондай билләһе,
Томбойоҡтай күкрәкле,
Оҙон ҡара сәслеһе,
Хур ҡыҙындай кәүҙәле,
Күлгә төшкән ҡояштай, —
Күлде нуры ҡаплаған,
Ҡарсығалай күкрәген
Кирә биреп, кәпрәйтеп,
Һыу өҫтәрен күпертеп,

Тулҡындырып, һыу йөҙөп,
Уйнаҡлаған ҡолондай,
Барына ла иркәләп,
Һамаҡ менән таңҡылдап, —
Әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Һыуһылыу:*

— Алтын алҡа тиң күрмәй,
Әнйе таҡҡан һылыумын;
Ер егетен тиңһенмәй,
Һыуҙа үҫкән һылыумын.
Битемдәге ҡабымды*
Асып көнгә күрһәтһәм,
Һөҙөлөп баҡҡан күҙемде
Күңеле барға тектәһәм,
Ай һөйгәнгә, Айындай,
Көн һөйгәнгә, Көнөндәй,
Ерҙән башҡа йәшәмәҫ,
Ер егеткә, йәрендәй,
Йәне барға йәнендәй
Була торған һылыумын.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Иҙеүкәй ҡарап торманы,
Күскә сөйгән ҡыйғырҙай,
Күл ситенә ташланды.
Ҡыҙҙарҙың ҡоштундарын
Һыпырып алып барыһын,
Күл ситенә баҫты ла,
Күлдә йөҙгән һылыуға
Әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Күктә күҙгә сағылғас,
Айыра алмай торғайным;
Талпынған ҡоштай күренгәс,
Һаҙаҡ тоҫҡар булғайным;
Тауышыңды ишеткәс,
«Аҡҡош күрһәң, ҡулың тарт,
Башҡа ҡошто йыға ат»,
Тигән ололар һүҙен
Хәтеремә алғайным.
Ул күлеңдә атмайсы,
Тыныслығың юймайсы,
Анда ташлап киткәйнем.
Инде тағы алдыма

Осоп килгәс ҡош булып,
Күлгә төшкәс ҡыҙ булып,
Аптырауға ҡалғайным.
Дәртле йырың ишеткәс,
Ни әйтергә белмәнем.
Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Йәннәттән һин Һауалай
Һөрөлгәнһең[9], тир инем,
Ҡара ебәк сәсеңде
Һыу өҫтөндә күпертеп,
Ағындағы ағасайҙай*,
Һыуҙа уйнағас елкенеп,
Һыу ҡыҙылыр, тир инем —
Аҡылым етмәй уйларға,
Телем етмәй һөйләргә:
Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Күк ҡояшын оялтҡан,
Күктән төшкән нур булдың,
Мине таңға ҡалдырған
Ай, һылыуым, кем булдың?
Ҡош булһаң да, кил бире,
Ҡыҙ булһаң да, кил бире! —
Тип әйткәс тә Иҙеүкәй,
Ҡыҙ ҙа ҡурҡып торманы,
Иҙеүкәйгә ҡарап ул
Үҙе һүҙен һөйләне.

*Һыуһылыу:*

— Ошо Шүлгән күленә,
Урал батыр үлгән һуң,
Оло Урал тауынан,
Иҙел, Яйыҡ буйынан,
Ирәмәл, Уйташ[10] тауынан
Бер батыр ҙа килмәне.
Ирәндектән саңҡылдап,
Балаһына ем эҙләп,
Сал бөркөт тә, ҡыйғыр ҙа
Баҙнат итеп османы.
Урал тауы буйына
Талпынып төйәк һайлаған,
Мең йәшәгән аҡҡош та,
Оя яһап был ерҙә,
Бала үрсетеп был күлдә,
Йотом һыу ҙа эсмәне.
Алдынан ҡош уҙғармаҫ,
Ҡыйғыр, ыласын, шоңҡар ҙа,
Күҙенә ҡан һауҙырып,

Бар армытын Уралдың
Ашанан-аша осҡанда,
Был тирәгә бер саҡта
Килеп тә күҙ һалманы.

Быуат-быуат уҙғанда,
Илгә батыр тулғанда,
Урал менән яулашҡан
Һыу батшаһы Шүлгәндең
Бына ошо күленә
Бер батыр тап булманы;
Әҙәм түгел, башҡа зат
Килеп аяҡ баҫманы,
Ай, егетем, вай, егет,
Күктән төшкән ирме һин,
Һыуҙан сыҡҡан енме һин,
Бында нишләп килдең һин?

Уйнап-көлгән еремдә
Бар зауҡымды боҙҙоң һин.
Ай, егетем, вай, егет,
Тынымды ташлап кит, егет,
Ендәр күреп ҡалмаһын,
Атайым да белмәһен,
Бауырым, тигән әсәм бар,
Үкһеҙ етем булмаһын, —
Тип ҡурҡытып, һынапмы,
Ҡыҙ алапты* һалғанда,
Иҙеүкәй ҡыҙҙың алдында
Һүҙһеҙ тороп ҡалманы.

*Иҙеүкәй:*

— Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Уралда тыуған ир заты
Килеп аяҡ баҫмаһа,
Борон булған батырҙар
Килеп, күлең тапмаһа,
[Әҙәм түгел, башҡа зат,
Килеп, күлгә баҡмаһа;
Уйнап-көлгән ошо күл
Ғәмең, зауҡың һаҡлаһа,
Мин шуларҙы белгәнмен;
Зауҡыңды мин боҙормон,
Барыһын да уҙырмын].
Уралда ат уйнатып,
[Бәйгелә ал бирмәнем];
Өс йәш тулған сағымда,

Һигеҙ тотам уҡ атып;
[Батырҙарға оҡшатып],
Мәргәнлектә дан алып;
Ун йәшемә еткәндә,
[Оло ниәт иткәндә],
Данлы оло майҙанда
Батырҙарҙы ҡолатып,
Батыр булып үҫкәнмен;
Иҙеүкәй атлы батырмын,
Төйәк иткән күлеңә,
Ҡурҡмай, аяҡ баҫырмын;
Атаң торған иленә
Яу асырҙай батырмын, —
Тип ул ҡыҙға әйткән һуң,
Ҡыҙ белепме, көлөпмө,
Әйткән үҙе әйтерен.

*Һыуһылыу:*

— Биш айлыҡта бишектә
Йүргәк тибеп өҙгәнһең,
Ҡулыңа алып суйыр таш,
Ҡомдай итеп ыуғанһың;
Биш йәшеңә еткәндә,
Батыр бала булғанһың;
Һин толпарға менгәс тә,
Атам ҡылысы һынғанын,
Иҙеүкәй тигән атыңды,
Батыр тигән затыңды,
Әйтмәһәң дә, беләмен, —

тип, һөйләй-һөйләй, күл ситенә килде лә, ҡоштунын Иҙеүкәйҙең ҡайтарып биреүен һораны, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Исемеңде әйтмәйсе,
Осоп китмәм, тимәйсе,
Шул һүҙеңде ныҡытып,
Миңә анттар итмәйсе,
Туның биргән мин булмам,
Ошо һүҙемде боҙмам,
Әйткән һүҙемдән уҙмам, —

тигәс, ҡыҙ уға тағы әйтер һүҙен әйткән, ти.

*Һыуһылыу:*

— Мең йәштән артыҡ йәшәгән,
Һыу батшаһы ине атам;

Ҡафтау аша ташланған
Аждаһаға баш атам;
Көндөҙ күктә талпынһам,
Барыһы: «Ҡояш», — тигәне;
Кисен күккә атылһам,
Барыһы: «Ай», — тигәне;
Айға, Көнгә һәр саҡта,
Алмашлап нур биргәне,
Мең йәшәгән атамдың:
«Абау, бәғерем!» — тигәне;
Ерҙә лә тиң тапмаған,
Һыуҙа ла тиң тапмаған,
Һылыуҙарҙың һылыуы,
Мин Һыуһылыу буламын,
Һылыуылығым бей ҡылып,
Алдыңда ант итәмен;
Үҙеңә ҡоштун биреп,
Бергә алып китермен;
Һөйгән йәрем итермен,
Үрмә гөлдәй, уралып,
Ҡуйыныңа инермен,
Шунда ғүмер итермен.

Бабаң Урал батырҙан
Ҡалған алмас ҡылысты
Үҙ ҡулыңа алырһың;
Тояғы ергә теймәгән,
Ел дә ҡыуып етмәгән,
Ташланып яу сапҡанда
Урман, тау-таш тимәгән,
Өҫтөндәге батырын
Бер саҡ яуға бирмәгән,
Бабаң Урал батырҙың
Аҡбуҙатын алырһың!
Һай, егетем, аяй күр,
Ҡоштунымды бирә күр,
Мине күлдән айырма,
Мең йәшәгән атамды,
Йәндәй күргән әсәмде
Ут эсендә ҡалдырма, —

тип инәлгәс, Иҙеүкәй, аны ҡыҙғанып*, ҡош тунын бирҙе ти. Күлгә төшөп китергә булғас, Һыуһылыу Иҙеүкәйгә тағы һүҙен әйтте, ти.

*Һыуһылыу:*

— Шүлгән күлдең аҫтында,
Алтын һарай алдында,

Мәңге күҙен йоммаған,
Күҙҙәре уттай уйнаған,
Яҡын килгән әҙәмде
Ашап ҡарыны туймаған
Бер аждаһа күрерһең,
Уф, уф итеп, тын алһа,
Ерҙә ҡойон ҡубара,
Әйләнеп ятһа бер яҡҡа,
Һарайҙа ҡойон сығара.
Аждаһа йылан һыҙғырһа,
Өҫтөндә дейеү эркелер,
Артыңда даръя тулҡыныр,
Алдыңда ут бөркөләр;
Ҡурҡып, кирегә ҡасма,
Тоҫҡап уғыңды атма.
Ул үкерһә, һин үкер,
Ул екерһә, һин екер,
Иркәләнеп уралһа,
Арҡаһынан бер һыпыр,
Һыртын биреп эйелһә —
Өҫтөнә мен дә ултыр, —

тине, ти. Шунан икәүләшеп һыу аҫтына төшөп киттеләр, ти. Төшөп етеүгә, теге аждаһа ажғырып килә башланы, ти. Ҡыҙ әйткәнсә, Иҙеүкәй:

Ҡурҡып, кирегә ҡасмай,
Тоҫҡап, уғын да атмай:
Ул үкерһә, үкерә,
Ул екерһә, екерә;
Иркәләнеп уралғас,
Арҡаһынан һыпыра,
Һыртын биреп эйелгәс,
Өҫтөнә менеп ултыра.

Аждаһа буй биреп, Иҙеүкәйҙе һарайға үҙе алып барҙы, ти. Дейеүҙәр ҙә, Һыуһылыуҙың ата-әсәһе лә быны һиҙмәнеләр, ти. Һыуһылыу ни тиклем матур, асыҡ йөҙлө, һөйөүе ни тиклем көслө булһа ла, Иҙеүкәй үҙенең тыуған Уралын һағынып, эсе боша башлай. Һыуһылыу быны һиҙеп алып, уның күңелен асырға тырыша, ти. Ҡыҙ нисек тә уны албырғатырға булып баҡсаға, күл буйҙарына алып сыға, ти. Иҙеүкәй баҡсаны күргәс, хайран ҡалып, ошолай уйланы, ти:

«Алтын буйлы алты ағас,
Көмөш ботаҡ, еҙ емеш,
Баҡыр буйлы биш ағас —
Ботағы һайын йөҙ емеш.

Урал урманға мул ине,
Бындайҙары юҡ ине.
Ботаҡ һайын — алтын ҡош,
Алтын ҡанат, ал суҡыш;
Һайраһа, эсте яндыра,
Ҡурайҙай, таң ҡалдыра.
Урал ҡошҡа мул ине,
Бындай ҡоштар юҡ ине.

Бер күлендә алтын һыу,
Бер күлендә көмөш һыу,
Береһе балдан татлыраҡ,
Береһе һөттән ағыраҡ.
Урал күлгә мул ине,
Бындай күлдәр юҡ ине.

Ҡыҙҙары — хур ҡыҙындай,
Ҡулдары — әсә ҡулындай,
Йөҙҙәре айҙан яҡтыраҡ,
Һүҙҙәре балдан татлыраҡ.
Урал ҡыҙға мул ине,
Бындай ҡыҙҙар юҡ ине».

Шулай булһа ла, Иҙеүкәй һаман үҙенең Уралын, Урал урмандарын, ҡарсыға-ҡыйғырҙарын, түңәрәк күлдәрен, һылыу ҡыҙҙарын һағына, ти. Һағыныуы Иҙеүкәйҙең йөҙөнә һары булып сыҡты, ти. Һыуһылыу Иҙеүкәйҙән:

— Һиңә ни булды, Иҙеүкәй? Ниңә былай һарғаяһың? Әллә минең ҡуйыным — йылы, ашым тәмле түгелме? — тип һорағас, Иҙеүкәй былай тип яуап бирҙе, ти:

— [Ҡуйының йылы, һүҙем юҡ —
Йылыға ла, түҙем юҡ.
Шуға ла тар тойола,
Шуға йәнем ҡыйыла].
Алтын һарай, гөл баҡсаң —
Күңелем һыяр ер түгел;
Аҫыл ҡошоң, бал күлең —
Уралыма тиң түгел.
Иленде илһенмәйем,
Ерендe ерһенмәйем.
Ҡылыс ҡында ятҡанда,
Аҡбуҙ бәйҙә ҡатҡанда,
Ҡан-йәш түгеп, зарланып,
Хан, бейҙәрҙән таланған
Илем, халҡым бар, һылыу!
Уралыма ҡайтайым,
Ҡайтып илемде яҡлайым.

Һыу батшалығында Иҙеүкәйҙең бер ҙә ҡалыу уйы булмаған, Һыуһылыу уны, писек тә албырғатыу уйы менән, тоташ көҙ гөнән генә торған һарайға алып барҙы, ти. Иҙеүкәй көҙгөлө һарайға ингәс,

Уң яғына ҡараһа —
Башы күккә олғашҡан,
Йәнлектәре даулашҡан,
Ҡаҙ, өйрәге, аҡҡошо
Типһәндәге күлендә,
Бәпкәләрен уйнатып,
Ҡыуанышып, сыулашҡан
Урал тора алдында.
Һул яғына ҡараһа —
Урал батыр ҡылысындай
Көн битендә ялтырап,
Таштан ташҡа һикереп,
Көмөш кеүек шылтырап,
Ағымы типкән урында
Тынғы табып һыялмай,
Балыҡтары ҡарпыған,
Һыуы ярҙан артылған
Ағиҙел ята алдында.
Урал буйы уйпатта
Таяғына таянған,
Ҡартлығында ут йотоп,
Өйөр-өйөр мал көтөп —
Тамағы ашҡа туймаған,
Күкрәктәге аһ-зарын
Ҡурайында уйнаған
Көтөүсе тора утлауҙа.
Арт яғына ҡараһа —
Йәштән үҙе буйлаған,
Ҡыҙҙар менән шаярып,
Бергә ҡолон бәйләгән,
Аҫауҙарҙы матаған*,
Ылаштарға ҡорот йәйгән,
Ҡыҙҙарҙан ҡорот талаған,
Тулған айҙың аҫтында
«Аҡ тирәк»ле уйнаған
Йәйләү тора алдында.
Күтәрелеп ҡараһа —
Ҡырлас сағыл яғалап,
Ятҡан ҡуян һағалап,
Бөркөттәре атылған,
Ҡарағошо һауалап
Болоттарҙан артылған,

Ыласыны, ҡыйғыры,
Торомтайы кәйелеп
Һунарына талпынған
Урал күге өҫтөндә...

Иҙеүкәй көҙгөлә һарайҙа, үҙе тыуған, үҫкән ерҙәрен күргәс, һағыныуы кәмемәгән, Уралға тағы ла нығыраҡ ашҡынған гына. Инде һыу батшалығында бер генә көн дә ҡалғыһы килмәгәнен, ҡырт киҫеп, Һыуһылыуға әйтте, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Уралында үҫкән ир
Ат уйнатмай тынармы?
Шоңҡар сөйгән һунарсы
Ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы?
Ҡанға таплы Уралдың
Битен йыумай тынармы?
Йәшкә сумған үҙ йортон
Йыуатмай, тынғы табармы?
Урал тигән ерем бар,
Күҙ ҡаралай илем бар,
Йортҡа юлдаш булырға,
Дошмандарын ҡыуырға,
Йыландай, тел сығарып,
Йортҡа[*] биргән һүҙем бар.

Китәм, һылыу, китәмен,
Үҙ илемә етәмен,
Аты юҡҡа ат булып,
Ашы юҡҡа аш булып,
Яңғыҙға юлдаш булып,
Батырға ҡорҙаш булып,
Шунда ғүмер итәрмен.
Ай тулғанда, һин тыуһаң,
Ир таныған ҡыҙ булһаң,
Һүҙеңдә тор, Һыуһылыу!
Айырманым күлеңдән.
Һаҡлап ҡалдым үлемдән:
Тояғы ергә теймәгән,
Ел дә ҡыуып етмәгән,
Ташланып, яу сапҡанда,
Урман, тау, таш, тимәгән,
Өҫтөндәгә батырын
Дошманына бирмәгән
Бабам Урал батырҙың
Аҡбуҙатын бир, һылыу!

Сапҡан саҡта таш ярған,
Йәшендәй ут сығарған,
Урал батыр ҡылысын
«Бирәм» тигән һүҙең бар,
Шул ҡылысты бир, һылыу!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Иҙеүкәйгә үпкәләп,
Һыуһылыу тағы әйтте, ти.

*Һыуһылыу:*

— Эс-бауырым һыҙлатып,
Иҙеүкәй ҙә, Иҙеүкәй, тинем мин;
Көндәй йөҙөм һулытып,
Күрмәй ҙә, үҙең һөйҙөм мин;
Елгә әйелгән гөлдәрҙәй,
Һиңә лә буйым әйҙем мин;
Алмалай түшем тертәйтеп,
Үҫеп, ҡаршы алдым мин;
Йәш үләндәй намыҫым
Юлыңа түшәп ҡуйҙым мин;
Атама биргән антымды
Һинең өсөн юйҙым мин;
Әҙәм тотмаҫ һарайҙа
Һине лә һаҡлап торҙом мин;
Теләгемә етәм тип,
Иҙеүкәй менән булам тип,
Аҡбуҙатты бирәм тип,
Атамдан шелтә күрҙем мин;
Атамдың бар байлығы
Һиңә булыр тинем мин;
Йәнемде ярып һораһаң,
Аны ла бирәм, тинем мин;
Инде, Иҙеүкәй, нишләйем?
Бар тәҡәтем юйҙым мин;
Һинең һыныңды күреп,
Йөрәгемде уйҙым мин, —
Тип, Һыуһылыу ялбарҙы,
[Сәбәп итеп юҡ-барҙы].
Иҙеүкәй ҡуйманы, ти,
[Бер уйҙы уйланы, ти].

*Иҙеүкәй:*

— Киң маңлайлы ҡуңыр йөҙ
Иҙеүкәй бауырын өҙмәне.
Ҡарсыға ҡабаҡ, баҡыр күҙ
Иҙеүкәй йөрәген һыҙманы.

Көндәй йөҙөң балҡытып,
Күкрәктәрең тулҡынып,
Айҙай күҙең йылмайып,
Йөрәк бәгерең һыҙланып,
Намыҫың юлға түшәлеп,
Иҙеүкәй өсөн үҫмәне.

Аҡбуҙатта елкенеп,
Булат ҡылыс талпынып:
«Батыр килде юл табып, —
Тип һарайға шау һалып,
Иҙеүкәй килә», — тимәне.
Алтын менән ашланған,
Әҙәм аяҡ баҫмаған,
Күҙ йәшенә ҡаҡһыған,
Һарайың аны көтмәне.
Ҡайнап аҡҡан Иҙелдең
Тумарланған боҙондай,
Өҫтәрендәге һөҙөгө —
Ҙур суртандың күҙендәй,
Сыр-сыу ҡайнап әҙәмдәр
Күп йыл уҙған быуында,
Ҡайнап бешкән ҡаҙанда,
Бөгөн бешкән ашың да
Иҙеүкәй өсөн бешмәне.

Табын-табын ҙур туйың
Иҙеүкәйҙе көтмәне.
Иҙеүкәй тигән еҫерҙе*
Атаң да кейәү итмәне,
Аңа ҡулын бирмәне.
Әсәнән тыуып ҡалһа ла*,
Ҡан-тап еҫкәп ҡаяла,
Ат уйнатып Уралда,
Уғың юнып урманда,
Шоңҡар сөйөп һунарҙа,
Ҡанға батҡан иленең
Ҡонон юллап яуында,
Күкрәп сыҡҡан болоттай,
Иленә оран һалырҙай,
Дошманынан ил зарын,
Ҡанга йөҙөп, ашарҙай,
Иленә байман табырҙай,
Батырға буй биргәнһең;
Бар намыҫыңды түшәп,
Атаң антын боҙғанһың;
Атаңдан шелтә күргәнһең.
Көндәй йөҙөң нурлатып,

Түштәренде тертәйтеп,
Шул батырҙы көткәнһең.
«Батыр килде — юл һалды,
Ҡанлы илгә ҡул һалды», —
Тип Аҡбуҙ ҙа елкенгән;
Алмас ҡылыс талпынған;
Ишеген яра типкәндә,
Ҙур иленә шау һалған.
Һинең Иҙеүкәй тигәнең,
Бауырым, тип һөйгәнең,
Шундай батыр булған һуң,
Иле зарығып көткән һуң,
Иленә ҡайтмай булырмы?

Әсәләй күргән иленә
Дошман ҡулын һалғанда,
Тыуып үҫкән иленә
Дошман килеп баҫҡанда,
Күҙ йәшенә мансылып,
Иле ҡанға батҡанда,
Бишектәге бала ла:
«Ат менәм!» — тип ятҡанда,
Агиҙелен таплатып,
Ҡара ҡандар аҡҡанда,
Дошманына яу асмай,
Батыр ятып ҡалырмы?
Ҡанға батҡан иленең
Билен йыумай ятырмы?
Ил намыҫын аҡламай,
Батыр ятып тынармы?
Батырға буй биргән ҡыҙ —
Батырға әсә булыр ҡыҙ
Батырға йәр булғанда,
Батыр өсөн тыуғанда,
Туй конөнән яу көнө
Күплеген белеп үҫкәндә;
Батыры яуға ат менһә,
Һылыуы күҙ йәш түгәрме?
Батыры яуҙа еңеүен,
Минең туйым, тимәҫме?

Ай, Һыуһылыу, Һыуһылыу,
Аҡбуҙатты менәйем,
Урал бабам алмасын
Ҡулыма мин алайым.
Атаң тәхетен бүлһә лә,
Бар байлығын бирһә лә,
Һыу илендә ҡалмайым,

Үҙ илемә ҡайтайым;
Дошманға айбар һалайым*.
Иҙел менән Яйыҡтан,
Урал менән Нарыҫтан[11],
Атам тыуған еремдән,
Эсәмә ҡайын йортомдан
Бар дошманды ҡыуайым.
Илеңә бирмәҫ Уралым
Һине минән айырһын,
Мине һинән айырһын;
Бай йортомдо ҡол иткән,
Туҡ йортомдо ас иткән;
Яу сабырҙай батырҙың
Барын йыуаш ҡуй иткән,
Туҡтамышҡа барайым,
Тәхетен тар-мар ҡылайым.

Һыуһылыу һүҙ әйтмәне,
Битен ҡаплап шул ерҙә
Үкһеп оҙаҡ иланы,
Иҙеүкәйгә үпкәләп,
Һуңғы йырҙы йырланы.

*Һыуһылыу:*

— Батыр булып маһайһаң,
Көсөң етһә, Буҙ атты
Үҙең тотоп менәрһең;
Уралдай, батыр булһаң,
Унын алмас ҡылысын
Иңбашыңа кейәрһең... —
Тине лә ул китте, ти.
Һыуһылыуҙың күңелендә:
«Иҙеүкәй, ергә менергә
Юл таба алмай, әйләнеп,
Миңә ҡайтыр кирегә»,
Тигән өмөт булды, ти.
Тик ул уйын Һыуһылыу
Иҙеүкәйгә әйтмәне...

Иҙеүкәй юл эҙләне,
Сығыр юлын күҙләне,
Аптыраны-йөҙәне,
Аҡбуҙатты алырға
Һис бер әмәл тапманы.
Көн үтте лә, кис булды,
Ай үтте лә, йыл уҙҙы;
Һыны бөттө, йөн баҫты,

Ҡуңыр йөҙө һарғайҙы,
«Уралым мине көтә, — тип, —
Көнөм бушҡа үтә», — тип, —
Иҙеүкәй гел ҡайғырҙы.

Бер ҙә бер көн Иҙеүкәй
Көн буйы йөрөп килгәндә,
Бер таулыҡта туҡталып,
Арып йоҡлап ятҡанда,
Аҡ һаҡаллы Хызырҙы[12]
Төштә күрҙе Иҙеүкәй.
Килеп сәләм бирҙе, ти,
Бар хәлене һорашып
Иҙеүкәйгә әйтте, ти.

*Хызыр:*

— Тирәләп күренгән ҙур ҡара —
Дейеү батша яғынан
Аҡбуҙатты һаҡларға
Һаҡсы итеп ҡуйылған
Уралып ятҡан ҙур йылан;
Ул бер айлыҡ юл бынан;
Шул йыланға бара алһаң,
Ҡойроғон тотоп бора алһаң,
Уң күҙенә килтереп,
Ҡойроҡ осон төртә алһаң,
Унан асҡыс ҡойолор,
Шул ҡойроҡто, уланым,
Һул күҙенә бер төртһәң,
[Асҡысты ала һалып,
Тишеген таба һалып,
Тиҙ арала керетһәң],
Бер ҙур һарай асылыр.
Шул һарайҙың эсендә
Һыртына әйәр һалынған,
Әйәренең ҡашына
Алмас ҡылыс тағылған,
Ҡарсыға түшле, ҡуян бот,
Мондаһы бейек, һигеҙ күҙ,
Һебә аҡтаһы ҡалҡыуыраҡ,
Осло соңҡа, осло әйәк,
Сыпыш ҡойроҡ, ҡырас ял,
Ҡарсыға морон, киң танау,
Ата бөркөт һабаҡлы,
Ҡабаға ҡабырға, суртан тән,
Киң янбашлы, тар бөйөр,
Өҫтөндә һыу торғоһоҙ

Еҙ йыландай ялтыр тән,
Тояғы саҡма ташындай,
Баҫҡан ерҙә ут сыға;
Күнәктәрен уйнатып,
Һыуға барған ҡыҙ һымаҡ,
Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап, бышҡырып,
Алан-йолан ҡаранып,
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Ҡараңғы төндә йылтынлап,
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ аҡтарын аҡайтып,
Ауыҙлыҡ сәйнәп, асыуҙан
Ауыҙҙарын күпсетеп;
Менгән кеше ҡартлығын
Онотоп, йәшкә әйләнгән,
Күргән кеше һоҡланып,
Баҫҡан ерҙә таң ҡалған;
Елгәндә, саң уйнатҡан, —
Тояғы ергә теймәгән,
Ел дә ҡыуып етмәгән;
Ташланып яуға сапҡанда,
Тау-таш, һыу-һүл тимәгән;
Өҫтөндәге батырын
Дошманына бирмәгән,
Оло бабаң Уралдың
Аҡбуҙаты ябылған.
Эйәренең ҡашына
Оло бабаң Уралдың
Алмас ҡылысы тағылған.
Аҡбуҙ, һине күргәс тә,
Үрә баҫып, ажғырыр;
Ҡурҡмай ялын һыйпаһаң, —
Аҡбуҙат һиңә баш бирер.
Һикереп уға менәрһең,
Уралыңа еләрһең.
Уралыңдан көс алып,
Мораҙыңа етәрһең.

Был төшөнө күргән һуң,
Иҙеүкәй һиҫкәнеп уянды,
Уянып оҙаҡ уйланды.
Аҙаҡ, Хызыр әйткәнсә,
Иҙеүкәй юлға сыҡты, ти,
Йыланға барып етте, ти,
Шаҡарып алып ҡойроғон
Уңға, һулға алмашлап,

Йылан күҙенә төрттө, ти.
Йылан, дулап, һыҙғырып,
Бөтә илгә шау һалғас,
Күк күкрәтеп, ут сәсеп,
Бар дейеүе йыйылғас,
Батша эште белде, ти.
Иҙеүкәйҙең өҫтөнә
Таштар атып, ут бөркөп,
Үлтерергә ҡушты, ти.
Тауҙай таштар ауһа ла,
Болоттай төтөн ҡайнатып,
Өҫтөнә ут яуһа ла,
Иҙеүкәй бынан ҡурҡманы.
Асҡысты алып ҡулына,
Ут яуһа ла юлына,
Аптырап-нитеп торманы,
Бар ғәйрәтен тупланы:
Йоҙаҡланған һарайҙың
Ҡапҡаһын асып ебәрҙе.

Ажғырып торған Аҡбуҙатҡа
Иҙеүкәй барып уҡталды,
Аҡбуҙ, һынап, батырҙы
Ҡырға һелекмәк булғанда,
Эйәр ҡашынан шаҡарып
Булат ҡылысын алғанда,
Маңлай сәсенән алып:
«Урал батыр затына
Бил бирерһең!» — тигәндә,
Инде Аҡбуҙҙы минәм тип,
Иҙеүкәй ҡул һалғанда,
Ике яҡҡа һыу ярып,
Ҡойон-дауыл ҡубарып,
Тау-таштарҙы тетрәтеп,
Ҡош-ҡорттарҙы өркөтөп,
Балыҡтарҙы ҡурҡытып,
Шүлгән күле төбөнән
Аҡбуҙ шаулап сыҡты ла
Урал батыр ҡәбере
Маяҡташҡа[13] етте, ти.
Маяҡташҡа етте лә
Әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Аҡбуҙат:*

— Минең өҫкә менерҙәй,
Илен һаҡлар ир булһа,
Ошо ергә килер ул,

Урал булған бабаның
Битен үбеп менәр ул, —
Тиеп сабып килде лә,
Бер ҙур имән төбөндә
Иҙеүкәйҙе көттө, ти.

[Шүлгәнкүлде шаулатып,
Елһеҙҙән дауыллатып,
Йәне барҙы ҡуҙғыртып,
Ыҙғыҙғанын ыҙғыртып,
Иҙеүкәй ҙә килде, ти,
Аҡбуҙатты менде, ти.
Аҡбуҙатты менгән һуң,
Урал батыр ҡылысын
Иңбашына элгән һуң,
Илгә ҡарай елде, ти,
Ни ҡылырын белде, ти,
Һаб(ы)рау һүҙен тотоп,
Дошмандарын борҡотоп...]

## АЛТЫНСЫ ҠОБАЙЫР

Иҙеүкәйҙең, ҡан ҡоймайынса ғына Дәммиҙе аҡылына килтерергә иткәне. Бейлегенә маһайып, Дәммиҙең ул әйткән тәҡдимде ҡабул итмәгәне: киҙәк һорағаны*. Дәммиҙең киҙәк алғаны, Иҙеүкәйгә атҡаны — уғының елгә осҡаны. Иҙеүкәйҙең киҙәк алғаны, Дәммиҙе атып йыҡҡаны. Дәмми ярандарының Иҙеүкәйгә буй биргәне.

Һабрауҙың бер һүҙе лә
Елгә осоп ҡалманы;
«Һабрау зары — ил зары,
Һабрау һүҙе — ил һүҙе», —
Тип Иҙеүкәй аңланы.
Урал батыр ҡәберене
Биш бөгөлөп үпкән һуң,
Уның юлын тоторға
Теҙләнеп ант иткән һуң,
Менеп алып Буҙатын,
Алмас ҡылысын тағын —
Тағып һул янбашына,
Ярһып осҡан шоңҡарҙай,
Дәмми бейгә юл тотто —
[Бейҙең ҡалманы ҡото].

Аҡ күңелле Иҙеүкәй:
«Ҡан ҡоймайсы булмаҫмы,
Дәмми илгә килтергән
Яманлығын ҡуймаҫмы?»

Тигән уйын алға алып,
Дәмми бейгә еткәс тә,
Үҙе башлап һүҙ асты.

*Иҙеүкәй:*

— Көн менән төн һанаған,
Айы үҫеп йыл булған,
Йыл миҙгелгә бүленеп,
Ир быуынын һынаған,
Күп быуындың эсендә
Кем ир булып үҫмәгән?
Ат уйнатып Шиханда[14]
Мал түлләтеп Нарыҫта,
Толпар менгән батырҙы
Тай-тулаҡҡа мендереп,
Аймағын* ҡорҙай туҙҙырып,
Йортон, ерен яндырып,
Ҡамҡа тунын* һалдырып,
Ҡырҡ ямау ҡыптыр тун
Иңбашына һалдырып,
Ҡая эсендә йәнлектә
Байғош һунарсы ҡылып,
Аҙаҡ сиктә Урҙаға
Буйын биргән быуын был:
Күп ҡандарҙы киптергән,
Күп һыуҙарҙы эсергән,
Күп йәштәрҙе түктергән,
Тернәкселде* бейҙәрҙән
Малын муйырып үҙ иткән,
Бик борондан аҙамай*,
Уҙа килгән быуын был.
Көн бөтмәһә, йыл бөтмәҫ;
Йыллап, быуын уҙар ул,
Аңа тышау табылмаҫ.
Илдең — асыу шаршыһы
Аҡҡан ҡандар күпсешеп,
Дәһшәт һалып бейҙәргә,
Маяҡтарын муртайтып*,
Өлкән бейҙе ҡурҡытып,
Бер саҡ ҡыран ҡылмаҫмы*?

Дәмми бей, үҙенә аҡыл бирергә теләгән йәш Иҙеүкәйҙе һанға һуҡмай, бейлегенә маһайып, әйтер һүҙен әйтте, ти:

*Дәмми:*

— Сауылдан* ҡалған төпһәнән
Үрсеп сыҡҡан ҡыуғындай*,

Бейлек, байлыҡ — мәңгегә
Атаһынан — балаға
Быуын-быуын, мираҫтай,
Ҡала киләә борондан.
Тоҡомо бейҙән булмаһа,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Телле сәсән булһа ла,
Ауыҙы менән ҡош тотҡан
Алғыр ҡашҡа* булһа ла;
Тау-таш ауһа өҫтөнә,
Ат башындай йөрәкле,
Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр итер беләкле,
Ҡашҡа батыр булһа ла;
Ел моронлап емһенеп*,
Ҡан көҫәгән бүреләй,
Булат тотоп, яу асып,
Сергеһенән* ҡан кисеп,
Үҙе бейлек тапһа ла,
Быуын-быуын үткәндең,
Яҙмышын уҙып, ҡан кисеп,
Үҙе бейлек тапҡандың
Йәлсеп аймаҡ ҡорғанын,
Илдә ырыҫ йәйгәнен,
Ишетеп тә, күреп тә,
Белгәнем юҡ донъяла.

Агиҙелдә, Нөгөштә,
Яйыҡ, Эйек һыулаған,
Бөтә Урал буйлаған,
Тимер, ҡорос булатты
Ҡамыр итер бар микән?

Илде ҡулға алырға,
Төн йоҡламай, уйланып,
Аттан төшмәй төн буйы,
Тибенгеһен тирләтеп,
Арҡа-ялан утынан
Ат утлатҡан бар микән?

Йөрәге ташып асыуға,
Сая алғыр бүреләй,
Аҙна йөрөп, аш еймәй;
Бер уҡталып ейгәндә,
Яңғыҙ үҙе бер ҡуйҙы
Ейеп бөтәр мыҡты ир
Был аймаҡта бар микән?

Батырмын, тип ат менгән,
Сығар юлын тапмаһа,
Яйыҡ менән Иҙелде
Билен быуып кисерлек
Илдә батыр бар микән?

Ҡош тырнағын тейҙермәҫ,
Күк ыласын типмәҫлек,
Йылғыр ҡоштай, аймаҡта*,
Ер ҡуйынына инеүҙән
Һис бауырын һыҙлатмаҫ
Берәй батыр бар микән?

Быуын-быуын буйына,
Хандан ханға йөрөгән,
Оҙон, оҙон юлдарҙың
Осона сығып етерлек,
Уралда ат уйнатып,
Атын һынап менерлек
Илдә батыр бар микән?

Башы һыйған юлаҡтан*
Үтә сыҡҡан йәтсәләй,
Ил күңеленә үтәрлек,
Ҡартым менән ил туйлап,
Илде шаршы итерҙәй,
Ҡыран яһап*, ҡалҡытып,
Данлы бейҙе ҡолатыр
Берәй ҡашҡа бар микән?

*Иҙеүкәй:*

— Сауылдан ҡалған төпһәнән
Үрсеп сыҡҡан ҡыуғының,
Тал ҡаплаһа, үҫмәүен,
Урман ҡыр(ы)ҡмай, бей булған,
Йәнлек тотмай, тун кейгән,
Батыр юлын белмәгән,
Үҙ ҡулы менән ат башын
Бер сағында тотмаған
Түҙгәк менән төпһәне
Айыра, таный беләме?
Борон-борон, борондан
Ил өҫтөндә ике юл:
Береһе уның яйырап*,
Йәйләү-йәйләү аралап,
Майҡы[15] бейҙең бүләге
Алтын сатыр эсендә

Илдән айырым аш һалып,
Һәрпәнләгән һәмәрен*
Ҡурайсынан уйнатып,
Ҡолас ташлап елгән юл.

Иле сығып һунарға,
Осҡан ҡоштоң күсенә
Ыласының сөйгәндә:
«Мин бей мырҙа, бей мырҙа,
Майҡы бейҙән бирелгән
Ҡошом минең — ҡара ҡош», —
Тип яңғыҙы айырылып,
Ҡамҡа туның саңлатып,
Һайҙаҡ атын* тирләтеп,
Ҡара ҡошон сөйгән юл.

Береһе уның ил менән,
Бер ҡаҙанға аш һалып,
Бергә табаҡташ булып,
Бер ҡуй түгел, бишеһен
Бер ашауҙа бөтөрөп;
Илдең үткән шайҡанын*
Уйнай-уйнай ҡурайҙа,
Ҡулын болғап үткән юл.
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштән,
Аҡһа, көслө ағырҙай,
Ташһа, тау-таш ярырҙай,
Тиртеп ятҡан шәреләй,
Юлаҡ яһап, йәтсәләй.
Олғаштырып йылғаға
Ҡымтып ятҡан ярынан
Тулҡындырып, таштырып,
Ботә ерҙе баҫтырып,
Ҡан таптарын йыуырға
Ҡуш беләген һыҙғанған
Ирҙәр буйлап йөрөгән юл.

Илдә һаҡлыҡ ыласынды
Ҡара ҡошҡа сойәргә,
Аттан төшмәй төн буйы,
Тибенгеһен тирләтеп,
Арҡа-ялан утынан
Ат утлатып елгән юл.

Ошо һуңғы юл буйлап,
Елә-сүкә елгәндең
Бына береһе мин булам.
Һиңә аҙаҡ һүҙемде

Әйтә килгән ир булам.
Тамыры ҡалған урында
Сауыл үҫмәй тиһеңме?
Ыласын үҫкән Уралда
Батыр үҫмәҫ, тиһеңме?
Һыу батшаһын юҡ иткән
Урал батыр ҡылысы
Батыр ҡулына күскәс,
Йәшен булып йылтырап,
Ил дошманын ҡыйратып,
Ҡанына йөҙмәҫ, тиһеңме?
Беймен, тигән бейҙәрҙең
Йәй ҡояшы — сыуаҡҡа,
Йәйе ҡышҡа әйләнеп,
Ыжғырып буран ҡуптарған
Көнө килмәҫ, тиһеңме?

Дәмми бей ҡырыҫ кеше ине, был һүҙҙәргә асыуы ҡабарып китте. Аҡ тирмәһендә аҫыулы торған торҡа*, уҡ-һаҙаҡтарын алып, күк бүртәһенә менде лә, Иҙеүкәйҙе һуғышҡа саҡырҙы. Шунда уҡ бейҙең булған ярандары, ғәскәрҙәре ҡоралланып, аттарына менделәр. Иҙеүкәй ҙә, эштең, үҙе теләгәнсә, барып сыҡмаҫлығын күргәс, алышҡа — алыш, атышҡа — атыш менән әҙер икәнлеген аңлатты. Шунан былар Ағиҙел буйындағы бер аҡланға сабышып килделәр. Иҙеүкәй — яңғыҙ, Дәмми бей меңләгән ғәскәр менән сыҡҡайны, ти.

Ҡарт айыуҙай ҡашҡарған*,
Күҙе йылғыр йыландай,
Ҡолағы һаҡ ҡуяндай,
Мороно сос бүреләй,
Уйы етеҙ ялмандай —
Һынсы ине Дәмми бей;
Кәүҙәһе ҡалын имәндәй,
Тауышы таш ярырҙай,
Арыҫландай ажғырып,
Яңғыҙ яуға барырҙай —
Ҡыйыу ине Дәмми бей.
[Ҡыйғыр ине Дәмми бей],
Алам тигәнен алды ул,
Еңәм, тигәнен еңде ул,
Табам, тигәнен тапты ул,
Кейәм, тигәнен кейҙе ул.
Ҡырҡ ҡоласлыҡ ҡылысы
Ҡулында ҡыуҙай* уйнаны,
Йылан башлы киң янын
Серәшеп тороп тартҡанда,
Имән үҙәк, ҡорос уҡ

Яйыҡҡа етеп юғалды.
Даулашҡанды тындырҙы,
Яулашҡанды баҫтырҙы,
Үҙенә тиң күрмәне
Донъяла бер батырҙы...

Күк бүртәһен ҡыҙҙырып,
Ҡара ҡойон туҙҙырып,
Бөркөт һымаҡ төйәлеп,
Алға сыҡты Дәмми бей,
Иҙеүкәйгә тиңәлеп,
Әйтте һүҙен Дәмми бей.

*Дәмми:*

— Көрәштә һырт бирмәнем,
Сабышта ал бирмәнем,
Сәсемә сал кергәндә,
Телдән телгә хупланып,
Олпатланып йөргәндә,
Үҙемә тиң батырҙы
Был донъяла күрмәнем!
Дәмми тигән атым бар,
Бейлек иткән затым бар,
[Батыр тигән һыным бар],
Сура батыр ҡаным бар,
Ырыу тотҡан даным бар.
Ҡаяла бөркөт ҡуйманым,
Атҡыслыҡта бирәүмен,
Яулашып, ҡанға туйманым,
[Яу сабыуҙы ҡуйманым.
Ил-йортома терәү мин],
Батырлыҡта берәү мин.

Йән даулашып, килдең һин,
Еремә баҫып керҙең һин,
Батыр булһаң, бир киҙәк*!
Уғымды атам төҙәп.

Дошманға ҡаршы сыҡҡанға
Борон-борон замандан,
Дошман оло булғанда,
Тәүҙә бирелә киҙәк.

*Иҙеүкәй:*

— Ололарҙы ололау,
Кеселәрҙе кеселәү —
Яҡшылыҡтың билгеһе;

Олоно һанға алмау,
Һүҙенә ҡолаҡ һалмау —
Яманлыҡтың билгеһе.

Алмас ҡылыс тотҡан ирҙән,
Аҡбуҙат менеп килгән ирҙән
Ҡурҡып-нитеп торманың,
Ирәйә килеп алдыма,
Оло башың кесе итеп,
Йыландай тел сығарып,
Минән киҙәк* һораның.
Ай, сал бөркөт, сал бөркөт,
Һорағаныңды ал, бөркөт, —

тип әйтте, ти. Шунан һуң Иҙеүкәй киҙәк биреп, атын туҡтатты ла, һис тайшанмай, көтөп торҙо. Дәмми бей уңайлы урын һайлап, тау һыртына юртып сыҡты ла:

— Йылан башлы киң яным, тартҡан саҡта,
Шарт итеп, һынып китһәң — һиңә хурлыҡ.
Ҡуҙы яурын-ҡорос башаҡ, бәлдәгәндә*,
Тайшанып, ҡырын китһәң — һиңә хурлыҡ.
Туғыҙ толом аҡ ебәк, туғыҙ үрем,
Серәнеп тартып та, мин алалмаһам,
Ул ваҡытта, билгеле — миңә хурлыҡ.
Ҡуҙы яурын — ҡорос башаҡ, тейгән саҡта,
Ҡаҡлығып, өҙалмаһаң, һиңә хурлыҡ.
Күкрәгеӊ сайратҡанса аталмаһам,
Ул ваҡытта, билгеле — миңә хурлыҡ, —

тип әйтеп, йән кос менән кирелеп Иҙеүкәйгә атты, ти. Уҡ, выжд итеп килеп, инде таш күкрәгенә тейҙе тигәндә генә, Иҙеүкәй уны тотто ла алды, ти. Дәмми бейҙең йөҙөнә үлек төҫө кереп, ул ағарып китте, ти. Ярандар ҡурҡыштарынан уҡ етмәҫлек ергә артҡа сигенделәр, ти. Шулай ҙа, Дәмми бей йөрәкле ир икән, киҙәк биреп* ҡасмай торҙо, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Ай, сал бөркөт, сал бөркөт,
Һораның, киҙәк* бирҙем мин,
Күкрәгем кереп торҙом мин,
Саяндай сая һөйләнең,
Батырмын, тип маҡтандың,
Күкрәгем тишә алманың;
Миңә лә килде киҙәк,
Уғымды атам төҙәп, —
Тине лә, ти, уҡ алып,
Өҙәңгеһенә баҫып,

Яныҥ бәлдәйтеп* тартып,
Дәмми бейгә атты, ти —
Уҡ Дәммиҙән үтәгә
Бүҫеп сығып китте, ти:
Туҡтамайса Дәммиҙә,
Ҡаҡлыҡмайса бер нигә,
Күҙ күреме ерҙәге
Урмандағы ағасты
Йәшендәй сырпаҡ килтереп,
Йәнлек, ҡошто өркөтөп,
Аша сығып китте, ти.
Дәмми бейҙең бар яуы
Быны күреп ҡурҡты, ти,
Аттан төшөп, бары ла
Иҙеүгә һырышты, ти.

Дәмми бейҙән ҡотолоу
Уралдағы халыҡҡа
Таң атҡандай булды, ти:
Ете ырыу Уралда,
Һәр урында аймаҡта,
Шатлыҡ туйы ҡылды, ти,
Халыҡ һәр бер урында,
Халыҡ һәр бер йырында
Иҙеүкәйҙе маҡтаны,
Аҡбуҙатҡа һоҡланып,
«Ҡай ырыу өйөрөндә
Үҫте икән был хайуан?» —
Тип, йәштәре ҡарттарҙан,
Ҡарт-ҡороһо белгәндән,
Донъяны күп күргәндән
Таң ҡалышып һорашты.
«Ҡойроғона ҡараһаң,
Күбәләк-тиләү малындай;
Һигеҙ күҙҙән ҡоморо
Ирәндектә үҫкәндәй,
Ҡамыш ҡолаҡ һаҙайҙың*
Ҡуян ҡолаҡ атындай;
Ҡайнап үҫкән тояғы
Яланда үҫкән йылҡылай», —
Тине, ти, һынсылар ҙа,
Тине, ти, ҡалған бар ҙа.
«Күпте ишеткән ҡарт йырсы,
Күпте күргән ҡарт һынсы
Һабрауҙан беҙ һорайыҡ», —
Тип килделәр, ти, ҡайһы.
Һабрау бары белде, ти,

Бер йылмайҙы, көлдө, ти,
Халыҡтарға шул ерҙә
Аҡбуҙаттың яҙмышын,
Уның оло тарихын —
Барын һөйләп бирҙе, ти.

## ЕТЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Иҙеүкәйҙең даны Алтын урҙа менән Аҡ урҙаны шаулата башлағас, Туҡтамыштың ни ҡылырға белмәгәне: Уралға бей итһәң, үҙемә яу булыр, үҙемә алдыртһам, ни булыр, тип уйлап, үҙенә саҡыртҡаны. Йомаҡ әйтеп, Ыласындың Иҙеүкәй дуҫының ханға килеүен хуп күрмәгәнен әйткәне (йәнәһе лә, ике ояла сыҡҡан ҡош төҫтәш булмаған һымаҡ, бей йә хан затынан сыҡмағас, Иҙеүкәй хан менән ҡулдаш була алмай). Иҙеүкәйҙең Ыласын һүҙҙәрен кире ҡаҡҡаны — хандың уны ҡор башы иткәне. Хандың оло йомартлығына Ҡырымдан килгән килмешәк ҡаршы килгәне. Иҙеүкәйҙең үҙ илен — Уралды алмаштырырға йыйынмауын, Туҡтамыш хан ололап саҡырған өсөн генә, бында килеүен аңлатҡаны. Иҙеүкәйҙең ҡол ҡатын булған Ғәнәкәгә күҙе төшкәне, Сәләхиҙең көнләшкәне, ошо хаҡта оло байбисәгә еткергәне, хандың оло байбисә һүҙен өнәмәгәне, шунан ханбикәнең ялған төш һөйләп уны юраусынан юратҡаны: йәнәһе, һарайға яҡын кемдер Энйене (хан ҡыҙын) үҙенә алып, ҡулына тәхетте лә төшөрөргә итә.

Иҙеүкәйҙең айбары*
Тик Уралда ҡалманы,
Алтын урҙа, Аҡ урҙа —
Барыһы ла шауланы.
Урҙаға баш Туҡтамыш
Һарайында тынманы.
Көнөн-төнөн уйланды,
Мамыҡ түшәк өҫтөндә
Йомшаҡ урын тапманы,
Өс көн, өс төн буйына
Күҙен йоҡо алманы.
Туҡтамыштай оло хан
Аптыраны, алъяны:
«Уралға яу ебәрһәм,
Унда ҡан-яу астырһам,
Туҡһан йортоло* илем бар,
Тип илемә таянһам,
Ун ике йортло Сатмыр хан,
Сәмәрҡәндтә шаһ булған,
Һәр бере миңә яу булған,
Миңә асыу һаҡлаған
Дошманымдан күҙ йомһам,
Йорт тарҡалып китмәҫме?
Уңымдан да һулымдан
Яуға һуҡмаҡ булмаҫмы?

Тарҡау йортом айырып,
Аҡ һарайҙан ҡайырып,
Үҙемде ҡыубаш ҡалдырып,
Аяғы сатан Сатмыр хан —
Сыңғыҙ тоҡомо ҡулымдан
Илем тартып алмаҫмы?

Уралға төбәп яу асһам,
Ике яҡта яу булыр,
Иҙеүкәйҙе буш ҡуйһам,
Ил эсендә яу булыр;
Уны Уралға бей ҡылһам,
Үҙ башыма яу булыр;
Һарайыма алдыртып,
Урын бирһәм, ней булыр?
Күҙ алдымда боларһа,
Юл табырға яй булыр;
Башын киҫеп юҡ итһәм,
Илем эсе һау булыр», —
Тип Туҡтамыш уйланы,
[Эстән уйын туйланы:
Сапҡындарын саптырҙы,
Һарайына саҡырҙы,
Данлап, маҡтап батырҙы,
Йомошап батырҙарҙы
Иҙел менән Яйыҡты,
Эйек менән Һаҡмарҙы
Көнө-төнө ҡыҙыртты].

Иҙеүкәй килә, тигәс тә,
Туҡтамыш туй ҡорҙорҙо,
Илдә данлы йырсыһын
Берен ҡуймай йыйҙырҙы,
Өс-дүрт көнлөк юлына
Хәтфә балаҫ йәйҙерҙе,
Ҡаршы барып алдырҙы.
Агиҙелдән, Яйыҡтан
Аҡбуҙ атын йөҙҙөрөп,
Юлда туҙан туҙҙырып,
Көндө төндәй ҡалдырып;
Аҡбуҙаттың аҡ төҫөн
Таплы тиргә йөҙҙөрөп;
Ауыҙлыҡтан күбектәр
Күбәләктәй осороп;
Аҡбуҙаттың өҫтөндә
Арыҫландай ултырып,
Туйға килгән бейҙәрҙең
Ҡыуараһын ҡасырып*,

Иҙеүкәй килеп етте ти,
Туйға сәләм бирҙе, ти —
Айҙай йөҙө балҡыған,
Түше һыуҙай тулҡынған,
Сөйөп бәйләп яулығын
Ҡыҙҙар шаулап килде, ти,
Йырлап ҡаршы алды, ти.
Туҡтамыш шат булды, ти,
Илгә был ҙур байрам, тип,
[Һанһыҙ алтын тәңкәне]
Услап-услап һипте, ти,
[Күрәп көмөш тәңкәне]
Күнәк-күнәк түкте, ти,
Тыу бейәләр һуйҙырып,
Шаң-шаң балдар ҡойҙороп,
[Көбө-көбө ҡымыҙын]
Һабаларға тултырып,
Йырсыларын йырлатып,
Сор ҡурайҙар* уйнатып,
Иҙеүкәйҙе ҙурланы,
Йәш батырҙы данланы,
Аҙна-ун көн туйланы.

Шул туй барған арала
Иҙеүкәй күпте күрҙе, ти,
Ашы юҡта, аш бирер,
Аты юҡта, ат бирер,
Үҙенә юлдаш булырлыҡ,
Уйҙа серҙәш булырлыҡ
Ирҙәрҙе лә тапты, ти.
Яҡын дуҫы Ыласындан
Күп серҙәрҙе белде, ти.
Ҡыҙыу ҙур туй барғанда,
Хан менән Иҙеүкәй булғанда,
Икеһенә ике аяҡ
Бал тултырып биргәндә,
Ыласын да, түҙмәйсе,
Йырын йырлап ҡуйҙы, ти.

*Ыласын:*

— Ханға килде күп йырсы,
Төш юраны күп һынсы,
Мин һөйләгән һүҙемде
Күп тыңланы барыһы.
Тағы һүҙем башлайым,
Йырсыларға ташлайым.
Асыҡ яуап биреүҙе
Ошо туйҙа һорайым.

«Ике ояла сыҡҡан ҡош
Айырмаҫ төҫтәш булырмы?
Ҡул ҡыҫышмай*, ир егет
Атына тоҙ табырмы?
Ҡулы эшләмәй, маҡтанған
Ир мораҙын табырмы?

Хоҙайҙанмы тигеҙлек?
Хоҙайҙанмы яуызлыҡ?
Аҡылы кәм ҡош-йәнлекте
Хоҙай оҡшатып яраҡан*.
Аҡыл тулы әҙәмде
Хоҙай төрлө яраҡан.
Донъяла берәй бала
Оҡшап тыуған бар микән?»

Тигән һүҙгә берәү ҙә
Әйтер яуап тапмаѓас,
Оло хан Туҡтамыш та,
Бер ултырып, бер торғас;
Күп сәсәнгә ҡушып та,
Бере яуап бирмәгәс;
Иҙеүкәй ырғып торҙо, ти,
Хандан изен алды*, ти,
Үҙе яуап бирҙе, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Һунарһыҙ үҫкән шоңҡар ҡош —
Ябалаҡҡа төҫ булыр;
Маңлайҙан аҡҡан асы тир,
Аяҡҡа төшһә, тоҙ булыр;
Хәтерең ҡалыр насар һүҙ,
Йөрәккә етһә, боҙ булыр;
Бар, маҡтанһа, табылыр,
Юҡ, маҡтанһа, сабылыр.
Ҡыр йәнлеге ҡоштарҙың
Төҫө һаҡсы* булғанға,
Үҙ төрөнә төҫ тә оҡшар.

Торлаҡтағы ҡош-ҡорт ул,
Төҫтә оҡшамаһа, серҙә оҡшар.
Әҙәм тигән барлыҡтар,
Төҫтә оҡшамаһа, көн дә оҡшар;
Бай балаһы байға оҡшар,
Бәйләнмәгән тайға оҡшар;
Бей балаһы бейгә оҡшар,
Туңға төшкән мырға оҡшар;

Хан балаһы ханға оҡшар,
Оя көткән ҡошҡа оҡшар,
Еҫер ҡатын, етем ул,
Аҡһаҡ-туҡһаҡ, ярлы, ҡол
Ҡаҡҡан, һуҡҡан ҡошҡа оҡшар;
Бейе боҙоҡ бейле ил
Албаҫтылы өйгә оҡшар;
Бейе үлеп ҡалған ил
Үләт киткән илгә оҡшар.

Иҙеүкәйҙән был һүҙҙең
Барыһын да ишеткәс,
Иҙеүкәйҙең һүҙенән
Бар сәсән дә таң ҡалғас,
Оло хан Туҡтамыш та
Килеп ҡулын бирҙе, ти;
Иҙеүкәйгә ҡарата
Оло һүҙен әйтте, ти.

*Туҡтамыш:*

— Ай егетем, саҡырғас,
Урҙам төбәп килгәнһең;
Һарайҙа һин ҡалырһың,
Яурындары уҡалы,
Алтын һабаҡ төймәле
Ҡама тундар кейерһең,
Көмөш ҡәмәр быуарһың.
Тәкәүеренә бәйләнгән*
Бауы тора һум алтын,
Аҡ шоңҡар ҡош бирермен;
Эйәр ҡашына ултырып,
Йәйен килеп түлләгән
Ҡош күсенә сөйәрһең!
Ҡуян ботло ҡаратҡа
Аҡыҡ ҡаплы ҡумды эйәр*
Һалып тағы менәрһең!
Илде йөрөп, әйләнеп,
Ил өҫтөнә яу килһә,
Яуыма ҡорбаш* булып,
Яуға ҡаршы сығарһың!

Хан һүҙҙәрен ишеткәс,
Ҡара диңгеҙ буйында
Илен талап ҡан эсеп,
Үҙ иленә һыймайсы,
Туҡтамыш ханға килеп,
Баш бей булып урҙала

Хандың ҡыҙын алам тип,
Өмөтләнеп йөрөүсе
Сәләх бей бик тарһынды.
Өс балаһы бар хандың:
Ҡадырбирҙе олоһо,
Энйебикә уртаһы,
Кинйәбикә кинйәһе.
Энйе сыҡһа яланға
Сәләх аны һағалап,
Ханға кейәү булырға
Энйеһенә ымһынып,
Һис тә ҡалмай йөрөй, ти.

Энйе булды бик иркә,
Уйнап-көлдө кис, иртә.
Алтын, ебәк кейеме,
Бәйләнмәгән ҡолондай
Бер урынға биш баҫып,
Түшен, башын тертәйтеп,
[Йәшлек үтәр, китәр, тип],
Иҫе, дәрте, белгәне —
Бары уйын ине, ти.
Сәләх күҙен секрәйтеп,
[Ҡалыр ине күҙәтеп,
Буй-һынына күҙ атып,
Ауыҙын шапылдатып,
Ҙур телен сапылдатып].
Ханды нисек булһа ла,
Кире ҡағып ҡарарға,
Иҙеүкәйҙе һарайға
Ҡор баш итеп алмаҫҡа,
Ханға ҡарап Сәләхи
Әйтер һүҙен әйтте, ти.

*Сәләхи:*

— Ай, оло хан, оло хан,
Үҙең белмәҫ нимә бар:
Уҙа килгән быуында
Алтын тигән ҙур урҙа
Аҡ урҙаға ҡалғанын
Беләһең бит оло хан!
Аҡ урҙаңды тирәләй
Яуҙар булып торғанын
Һиҙәһең бит, оло хан!
Ҡандар кисеп сыҡмайсы,
Бейҙән бейгә барырға
Юл табалмай ҡайтыусы

Илселәрең барлығын
Беләһең бит, оло хан!

Уралдан ирҙәр алһаң да,
Ғәскәргә баш ҡылһаң да,
Атҡа менгән халыҡтар
Аттан төшмәй йөрөгәнен,
Һиңә һуҙар ҡылысын
Һаман ҡынга тыҡмауын
Ишетеп тә, күреп тә
Тораһың бит, оло хан!

Шундай саҡта һарайҙа
Ханы менән бейҙәрҙең
Илде бергә тупларҙай,
Яуға ҡаршы торорҙай,
Илде ҡулда тоторҙай
Аҡылы кәрәк, оло хан.

Илеңә килгән Иҙеүкәй
Һыналмаған, үҙе йәш,
Урҙа һынлы һарайҙа
Буҙ баланы* бей ҡылыу,
Бөтә яуға баш ҡылыу,
Ҡулай булмаҫ, оло хан!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Сәләх аны кәмһеткәс,
Үрә баҫты Иҙеүкәй,
Һүҙ башланы Иҙеүкәй.

*Иҙеүкәй:*

— Ай, оло хан, һүҙ булһын,
Илем көнөм һау булһын;
Ялангас тыуҙым әсәнән, —
Уралым кейем кейҙерҙе,
Үҙ ҡуйынында үҫтереп,
Ыласындарын сөйҙөрҙө.

Йәш булһам да, ат биреп, —
Ҡулыма һаҙаҡ тотторҙо.
Уралымды йәмләгән,
Үткән көнөн йырлаған,
Ил ҡайғыһын һайраған,
Һандуғасы ҡошона
Ирек бирмәй яҫҡыған —
Бөтә йыртҡыс, ҡыйғырга —
Малын ҡырған бүрегә,

Алпан-толпан атлаған,
[Йәйен тыныс ятмаған]
Умарта ватҡан айыуға,
Тоҫҡап һаҙаҡ аттырҙы.

Ат уйнатып үҫкән һуң,
Ил аралап йөрөгән һуң,
Уралымды — атам, тип,
Дүрт йылғаһын — инәм, тип,
Шишмәләрен тыуасам*, тип,
Нәмигә* күреп урманын,
Ейәнсәләй* ҡоштарын,
Ете яттай йәнлеген —
Барын танып белгән һуң,
Һаҙаҡ атыуҙы ҡуйҙым.

Уралымда үҫкәнде
Бауырым, тип белгән һуң,
Булат алып ҡулыма,
Атым менән яу сабып,
Уралыма ҡул һуҙған —
Бары дошман, тип белеп,
Шуға ҡарай уҡ аттым.
Ай, оло хан, оло хан,
Илемдә ҡаҡһыр* түгелмен,
Оло бысаҡ күтәргән
Юлбаҫар ир түгелмен;
Урын тапмай йөрөргә
Тыума бала* түгелмен!
Бейәләйҙәй бүреле,
Ала ҡанат ҡыр ҡаҙлы,
Ҡояш төҫөн ашаған
Аҡһыл саптар төлкәлө;
Боҫар урын тапмаған,
Ең осона етмәгән
Ҡыҙыл сикә ҡуянлы;
Тал ҡыуаҡтан ҡош-ҡортло,
Яңғыҙ һыуыры* саңҡылдап,
Типһененә шаң биргән,
Ҡыҙарып ятҡан ҡом ерең
Тағы ерһеп килмәнем.
Шыр урманда маһайып,
Алпанлаған айыуы,
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡара бауыр төлкөһө,
Кем уҙарҙан һайраған
Ағас һайын ҡоштары;

Һарайҙағы хан һымаҡ,
Ҡаялағы бөркөтө;
Алдынан ҡош уҙғармаҫ
Күк ҡарсыға, ҡыйғыры,
Мөлдөрәп торған күлендә
Ҡарасайы*, өйрәге,
Йырсыһына ҡушылып,
Һылыу ҡыҙ мән ярышып,
Моңон бөрккән ҡурайы;
Ялбыр ҡойроҡ, ялбыр ял,
Өйөр һаҡлар айғыры —
Бары бергә маҡтанған
Байман табыр илем бар;
Ярпы-ярпы япраҡлы*
Урал тигән тауым бар;
Аны ташлап нишләйем,
Арыҫландай беләкле,
Ҡарсығалай йөрәкле
Батыр тапҡан ете ырыу —
Алмаштырмаҫ илем бар.

Оло башың кесе итеп,
Һин саҡырғас, килдем мин.
Ат тирләтеп, ил ҡунып,
Урҙаң йөрөп күрҙем мин.
Кем ҡорһағы күпсегән,
Кемдең эсе күмһегән,
Кем быуыны биртенгән —
Үҙем күреп белдем мин.

Инде ҡунаҡ булдым мин,
Әйтеп һүҙем бөттөм мин,
Ат эйәрләп ҡуйҙым мин,
Аман-иҫән һау булың,
Үҙ юлыма киттем мин! —

тип, һүҙен ҡырт киҫеп, сығып китә башлағас, хан Иҙеүкәйҙе туҡтатты ла, аны баш бей итеп ҡуйырға, тигән фарманын бирҙе, ти.

Айҙар һанап, йыл булды,
Иҙеүкәй ҙур бей булды,
Хан яуына баш булды:
Ҡырымдан килгән яуҙы ла
Тар-мар итте Иҙеүкәй,
Дау сығарып килгәнде
Хөкөм итте Иҙеүкәй,
Туҡтамыштай оло хан
Иҙеүкәй батыр бар саҡта

Яу менән дауҙан ҡотолдо.
Каруан-каруан ҡыҙыл мал*
Һарай тирә тултырҙы.
Биләгәне ҡол булды,
Эйҙәгәне мал булды,
Алтын һалған һандығын
Өйөп ҡуйһа тау булды.
Ашағаны — ҡаҙы, ял,
Эскәне — һары бал булды.
Иҙеүкәйҙең уйы ни —
Уныһын белмәй хам булды*,
Хан шундайын бай ине:
Һарай тулы ҡыҙ ине,
Никахлаған ҡатыны
Бер түгел, дүртәү ине.
Баш ҡатындан балаһы
Ҡадырбирҙе — ул менән
Энйе тигән ҡыҙ булды.
Урта ҡатын Йәнәкә,
Унан тағы ҡыҙ тыуҙы.
Ул балаһы тыуғанға
Икенән өсәү булғанға
Туҡтамыш хан, оло хан
Бай, яранын йыйҙырҙы,
Хандан ханды саҡырып,
Ҡурайсылар килтереп,
Көтөү-көтөү мал һуйып,
Алҡындырып туй ҡылды.
Урта йәшәр ҡатындан
Һуңғы бала булғанға,
Кинйә тиеп ат ҡушты.

Туҡтамыштай оло хан,
Ҙур туйыны ҡылғанда,
Һылыу ҡыҙҙар һайлатып,
Йырсы ҡыҙҙар йыйғанда,
Күп ҡыҙҙарҙың эсендә
Ай, көнгә тиң булғанын,
Ҡағып, түшәп һалғаны,
Һайрар ҡоштай йырлаған,
Үҙен гөлдәй наҙлаған
Ғәнәкә тигән ҡыҙ булды.
Иҙеүкәйгә күҙ һалһа,
Иҙеүкәй аңа ҡаш ҡаҡһа,
Ул аҫтыртын йылмайҙы.
Ергә төшкән ҡояштай,
Һүҙе алтын, көмөштәй,

Ғәнәкә һылыу шул туйҙа
Иҙеүкәйҙе арбаны;
Иҙеүкәйгә күҙ һалды,
Иҙеүкәй аңа оҡшаны.
Хандың иркә бисәһе,
Дүрт ҡатындың сәскәһе,
Был ҡылышты* аңланы,
Ҡол ҡыҙынан Иҙеүкәйҙе
Хан бисәһе көнләне.
Иҙеүкәйҙән борон да
Баш бей булып һарайҙа,
Йәш ҡатынды һөйгәнгә,
Йәш ҡатындың күңелен
Арбап, тартып алғанға,
Сәләх бей ҙә көнләште.

Иҙеүкәйҙе һарайҙан
Ҡыуҙырырға уйлашты.
Төрлө юлдар эҙләне,
Ҡарт ҡатынды тап ҡылып,
Аны уттай ҡыҙҙырып,
Уйлағанын һөйләне.

*Сәләх бей:*

— Ай, ханбикә, ханбикә,
Һиңә һүҙем бар, бикә,
Ҡояш булһа оло хан,
Һин — тулған ай, ханбикә;
Икегеҙ тиң яралған,
Данығыҙ илгә таралған;
Бер һүҙем бар, тыңлаһаң,
Яман атҡа ҡуймаһаң,
Әйтәйемсе, ханбикә.

Ҡояшты болот ҡаплаһа,
Көндөң йөҙө ҡаралыр;
Айҙы болот ҡаплаһа,
Төндөң йөҙө ҡаралыр,
Хан менән ханбикәнең
Көндәй йөҙө ҡаралһа,
Илдең йөҙө ҡаралыр.

Иҙеүкәй тигән батыр ир,
Бар күңелгә ятыр ир,
Һыны тиһәң, һыны бар,
Буйы тиһәң, буйы бар,
Батырлығын ҡаҡмайым,

 Яманатын һатмайым;
Нәҫеле хандан булмаған,
Аҫыл заттан тыумаған,
Ханға серҙәш булырмы?
Һыны талдай булһа ла,
Һүҙе балдай булһа ла,
Урҙа тотҡан ҙур ханға
Түшәге уртаҡ* булырмы?
Хандың һайлап һөйгәне,
Бейбисәм — ул тигәне,
Көнгә көндәш булғаны,
Айға тиңдәш булғаны, —
Ғәнәкәне Иҙеүкәй
Аҡ күңелдән арбаған,
Ысын булһа был хәбәр,
Ҡояшҡа тиң ханымды[16]
Ҡара болот баҫмаҫмы?
Уртаҡ серен ханымдың
Ханбикәнән алмаҫмы?

Тулған айҙай ханбикә:
«Йәшлек көнөм уртаҡ», — тип
Яман уйға төшмәҫме?
Иҙеүкәй ҙә, бер булып,
Һеҙгә ҡара яҡмаҫмы?

Тыңлап торған ханбикә
Был хәбәрҙән ҡурҡты, ти,
Туҡтамышҡа аулаҡта
Үҙе уйын әйтте, ти.

*Ханбикә:*

— Уралда ятып мал көткән,
Ас-ялангас көн иткән,
Уралда айҡап яу булған,
Иленә килеп бей булған,
Иҙеүкәй тигән батырҙың
Теле һинән май икән,
Ҡото һинән ҡотло икән:
Илгә сыҡһа — табыны,
Өйгә ҡайтһа — урыны
Һинеке менән бер икән.
Эс-бауырың тараған*,
Алдыңа ятып аунаған,
Һиңә кәңәш һөйләгән
Йәш ҡатының бар икән.
Күңеле һиңә тар икән,

Иҙеүкәй тигән бейеңә
Уртаҡ ҡуйыны бар икән.

*Туҡтамыш:*

— Ҡартайғансы, телеңә
Баш булманың, ханбикә!
Тешең төшөп бөткәнсе,
Һүҙ сәйнәнең, ханбикә!
Уралда ятып мал көткән,
Эшен эшләп тир түккән,
Егет булып еткән һуң,
Суйыр ташты ҡом иткән,
Әҙәм менмәҫ Буҙатты
Яулап алып ат иткән,
Күҙ ҡарауын илендә
Бар батырға бей иткән*,
Бар Уралды шаулатҡан;
Алты батман уҡ атҡан,
Урал илен ҡаҡшатмай,
Үҙ усында тотҡандай,
Мин, мин тигән Дәммиҙе
Бер һуғыуҙа ҡаҡшатҡан
Иҙеүкәй ҡулын биргәндә,
Һарайыма баш булып,
Талай яуҙы* ҡаҡҡанда,
Ни теләһә, ҡулында,
Шундай бейлек тапҡанда,
Түшәгем уртаҡ ҡалырмы,
Күҙ менән күрмәй, ҡыртымға*,
Оло хан болап китерме?
Мин саҡырҙым — ул килде,
Мин бойорҙом — бей булды,
Илемә сыҡһам, мин ханмын,
Табыным уртаҡ ҡылалмаҫ!
Ҡото булһа ла ҡотлораҡ,
Минекенән [тосораҡ],
Урҙаға хан булалмаҫ!

Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Ханбикә һүҙ асманы.
Иҙеүкәй һаман үҙ булды,
Бар бейҙәргә баш булды.

Сәскәнән сәскә һайлаған
Күбәләктәй Энйекәй,
Һарайға килгәс Иҙеүкәй,
Сәләхиҙе ташлағас;

Яланға сыҡҡан сағында,
Иҙеүкәйҙе һайлағас,
Сәләх бүтән түҙмәне,
Ханға туры барманы,
Әнйе хәлен тағы ла
Ханбикәгә һөйләне.
Ханбикә ныҡ гәрләнде,
Иҙеүкәйгә үс итеп,
Ханды алдап ханбикә,
Төш күрҙем, тип һөйләне.

*Ханбикә:*

— Ханым, йоҡлап ята инем,
Бер яман төш күргәйнем,
Йөрәгем һуғып уянып,
Үҙ-үҙемә ышанмай,
Тирә-яҡҡа ҡаранып,
Күп ултырҙым уйланып,
Уйым етмәй ҡалғанып*,
«Әнйекәй!» — тип саҡ ҡына
Һөрән һалып ҡуйманым.
Әнйенең бер тап йортта*
Йоҡлап ятҡанын күрҙем,
Муйынына уралған
Быуар йыланды күрҙем:
Ҡысҡырырға өнөм юҡ,
Әрсәләргә* кемем юҡ,
Һиңә йөгөрөп килгәйнем,
Һине тағы хур күрҙем.

Һарайҙа намаҙ уҡыйһың,
Башың яланғас күрҙем,
Тағың* торған ереңдә
Бик яман бер уй күрҙем:
Уй эсендә ҡуҙ яна,
Кемдер ҡуҙға тын өрә,
Һинең тағың шул ҡуҙға
Утын итмәксе була!
Шунан ҡурҡып уяндым,
Был ни булыр, оло хан?

*Туҡтамыш:*

— Ай, ханбикә, был төшөң
Шайтан төшө булмаһа,
Бик ҡурҡыныс төш икән,
Һарайымда дошманлыҡ
Ҡылған әҙәм бар икән?

*Ханбикә:*

— Һарайҙағы баш бейең,
Ҡулын һала ҡыҙыңа,
Беләһеңме, оло хан?
Ҡыҙың аңа кейәүгә
Сығам, тиһә, ҡарыуға
Ужарың ни*, оло хан?
Иҙеүкәй алам, тигәндә,
Илгә алап һалғанда,
Талаш-тартыш киткәндә,
Ни уйың бар, оло хан?
Мин бөгәсә* күргән төш —
Һинең сәлләң осорған,
Ҡыҙҙы ураған ҙур йылан,
Шул булмаҫмы, оло хан?

*Туҡтамыш:*

— Энйегә ҡул һалғанын,
Тәү ишетәм, ханбикә.
Энйе: «Барам», — тигәндә,
Балаға ужар* булырлыҡ
Олпатым бар, ханбикә.
Иҙеүкәй, ҡыҙҙы алам, тип,
Алап* һалһа урҙаға,
Кәңәш-төңәш итмәйсә,
Әйтеп булмай, ханбикә!
Уралдан килгән ҡарт йырсы,
Күпте күргән ҡарт кеше,
Юраусыны саҡыртып,
Һинең күргән төшөңдө
Юратайыҡ, ханбикә.

Юраусыны килтерҙеләр, Туҡтамыш хан ханбикәнең төшөн юрарға ҡушты, ти.

*Юраусы:*

— Энйене күреү — төп йортта*
Алдыҡ тулыу, оло хан;
Уны ураҡан йылан —
Илеңә дошман берәүҙең
Ҡыҙҙы һөйөүе, оло хан;
Таҡ аҫтында уй күреү —
Яҡшыны яман күрһәтеп,
Ҡыртым* менән көн күреп,
Ике йөҙлө йөрөүсе
Яҡын кешең, оло хан;

Таҡ аҫтында ҡуҙ күреү —
Һарайыңда сер һыйған,
Күңелеңде арбаған
Иң яҡының берәүҙең
Дошманлығы, оло хан;
Намаҙ уҡыр сағыңда,
Башың яланғас ҡалыу —
Һин уйламаҫ берәүҙең
Тағың алыуы, оло хан.

Был юрауҙы ишеткәс,
Хан һаҡалын һыпырып,
Аптырауға ҡалды, ти.
Был кешене белергә,
Тиеп уйлап ҡуйҙы, ти.

## ҺИГЕҘЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Хан ҡыҙы Энйенең киҫәтеүенә, янауына, туҡмауына ҡарамай, Ғәнәкәнең Иҙеүкәйҙе яратыуҙан туҡтамағаны, унан балаһы тыуыр мәл еткәс, ҡамышлыҡҡа ҡасҡаны. Туҡтамыштың уны эҙләткәне. Ғәнәкә йәшергән урындан баланы Иҙеүкәйҙең алып киткәне, дуҫы Ыласындың үлгән улы Нуритдин урынына уллыҡҡа биргәне, уға Мораҙым тип ат ҡуйғаны. Сәләхиҙең, Иҙеүкәй Энйе менән бутала, тип хәбәр таратҡаны. Ханбикәнең үҙе «төшөп» үҙе «юрағаны»: Иҙеүкәйҙән шикләнеүен белдергәне. Ахырҙа Туҡтамыштың, бисә һүҙенә төшкәне, Иҙеүкәйҙе ағыулап үлтерергә маташҡаны, был мәкер ниәттәре барып сыҡмағас, туй ҡороп, шунда исертеп, башын киҫергә тигән уйға килгәндәре — Ыласын ярҙамы менән Иҙеүкәйҙең ҡасып ҡотолғаны.

Ғәнәкә Иҙеүкәйҙең һөйөүен тәрән сер итеп тоторға күпме генә тырышһа ла, был эште һиҙеп алып, хан ҡыҙы Энйегә еткерҙеләр, ти.

Энйе мыңа түҙмәне,
Ғәнәкәне саҡыртты,
Ҡыҫымға алып, ҡурҡытты,
Иҙеүкәйҙең һөйөүен
[Йәрем-йәнем, тийеүен]
Ғәнәкәнән һораны,
[Урап-сорап торманы].
Һарайҙағы ҡыҙҙар ҙа
Ғәнәкәне яҡлағас,
Энйе шул саҡ асыуҙан
Бураланған төйәләй*,
Ғәнәкәне, йәлләүһеҙ,
Ҡамсы менән һыҙырҙы.
[Йылан нисек ышылдап
Сәсә үҙе ағыуын,
Энйебикә бышылдап
Әйтте бөтә асыуын].

*Энйе:*

— Ауыҙың асып һөйләнеп,
Иҙеүкәйҙе һөйәм, тип,
Йөрөгәнеңде ишетһәм,
Атама әйтеп аҫтырып,
Эткә башың ташлармын! —

тип киҫәтеп ҡуйҙы, ти.

Иҙеүкайгә Энйе лә
[Егеттәрсә яһанып,
Суҡмар, уҡ-һаҙаҡ алып,
Бергә ауға барғанда,
Хис-тойғоһон — барыһын да],
Яландарға сыҡҡанда,
Үҙ уйҙарын әйтһә лә;
Иҙеүкәй ҙә уйынан
Хан кейәүе булыуҙы
Күңеленән тартһа ла*,
Энйене — бер хан улы,
Икенсегә — Сәләхи
Алырға тип яусылап,
Иҙеүкәйҙән көнләшеп,
Йөрөгәнен белгәнгә:
«Бер ҡыҙ өсөн әселәш*
Сығарыу һис ярамаҫ», —
Тип тә ул уйланы, ти,
Ғәнәкәне һөйөүен
Һис кенә лә ҡуйманы, ти,
Шул һөйөүҙән туйманы, ти.
Көндәр үтте, ай үтте,
Ғәнәкә буй күтәрҙе.
Буйлы булыу серен ул
Иҙеүкәйҙән бүтәнгә
Һис берәүгә әйтмәне.

Көндәр һанап, буй үҫте,
Ғәнәкәгә уй төштө:
«Иҙеүкәйҙән булғанын
Әйтһәм, Энйенән ҡурҡам.
Әйтмәй, ирем йәшерһәм,
Зинасы, тип белерҙәр,
Рисуай итеп урамда,
Юҡ-бар тағып муйыныма,
Ҡара ягып йөҙөмә,
Хур итерҙәр», — тине, ти.

Бер ҙә бер көн Ғәнәкә,
Һис берәүгә һиҙҙермәй,
Иҙеүкәйгә белдермәй,
Хан һарайы эсенән
Ҡамышлыҡҡа ҡасты, ти.
Ҡамышлыҡта аслыҡта,
Күлдән типкән һыуыҡта
Бер ир бала тапты, ти.

Ғәнәкәнең ҡасҡанын
Туҡтамыш хан ишетте,
Анын буйлы булғанын
Ханбикә әшкәр итте.

Туҡтамыш хандың уйына юраусы ҡарттың «Һин уйламаған берәү тәхетеңде алыр» тигән һүҙҙәре килде, ти.

Хан йыйҙырҙы бейҙәрен,
Һөйләп бирҙе уйҙарын.

*Туҡтамышхан:*

— Ғәнәкәне табығыҙ,
Балаһы менән икеһен
Һарайға алып килегеҙ;
Шундай тыума балалар
Борон-борон, борондан
Батша, хандар баштарын
Юйып килер булғанын,
Ишетеп тә, күреп тә
Барыбыҙ ҙа беләбеҙ!

Тигән һүҙен әйтте, ти,
Ғәнәкәне эҙләргә
Сапҡындар йүнәтте*, ти,
[Артынан йүнәлтте, ти].

Хан ебәргән кешеләр
Күл тирәләй йөрөгәндә,
Ғәнәкә улын ҡалдырып,
Аулаҡ урын эҙләргә
Киткән саҡта, Иҙеүкәй
Шыр ҡамышлыҡ төбөндә,
Ҡош ояһындай ерҙә
Балаға тап булды, ти.

Бала биләнгән сепрәк
Ғәнәкәнең күлдәге
Икәнен ул таныны,

Иҙеүкәй көттө, төн булды,
Ғәнәкә һаман ҡайтманы;
Баланы алды ҡулына,
Китмәк булды юлына,
[Ғәнәкәнең бүләген —
Нағышлы ҡулъяулығын]
Бала ятҡан урынға
Билге итеп ҡалдырҙы.

Бала менән Иҙеүкәй
Хан йортона ҡайтманы.
Ыласын торған тирмәгә
Ҡарай туры атланы.
Иҙеүкәй барып ингәндә,
Илаш-һыҡташ ине, ти:
Урталыҡта иҙәндә
Аҡ биләүгә биләнеп,
Өндәшмәй ҙә ҡымшанмай
Бала ята ине, ти,
Күкрәгенең өҫтөндә
Бысағы бар ине, ти[17].
Шул бысаҡты күргәс тә,
Ыласын мән бисәһенең
[Нимәгә] илағанын
Аңланы, ти, Иҙеүкәй,
Ахланды, ти, Иҙеүкәй.

*Ыласын:*

— Бер бала ла бирмәйсе,
Ҡартлыҡ көнөм еткәндә,
Ике бала биргәйне.
Әсәһе һөтһөҙ булғанға,
Игеҙәктең береһе
Асҡа үлде, Иҙеүкәй, —

тип, ҡайғырышып ултырған ваҡытта, Ыласын өйөнә Һабрау ҡарт та килеп инде, ти.

Һарайҙағы серҙәрҙе
Бергә ултырып һөйләшеп,
Ғәнәкәне ҡыҙғанып,
Төрлө яҡтан уйлашып,
Ыласындың үле балаһын
Ҡамышлыҡҡа илтергә;
Иҙеүкәйҙең балаһын
Ыласынға бирергә;
Ғәнәкәне табырға,
Аны оҙатып Уралға,

Бәләләрҙән йолорға
Тигән уйҙы уйлашып,
Иҙеүкәйгә шунда уҡ,
Үле баланы күтәреп,
Ҡамышлыҡҡа илтергә
Барыһы ла ҡушты, ти.

Иҙеүкәй кире барһа ла,
Таңға саҡлы торһа ла,
Тирә-яҡтың ҡамышын
Ҡыҙырып ҡарап йөрөһә лә,
Ғәнәкәне тапманы.
Үле баланы ҡуйып,
Тағы билдә ҡалдырып,
Иҙеүкәй таңға әйләнеп,
Торлағына ҡайтты, ти.

Урын әҙләп Ғәнәкә
Ҡамышҡа ҡайтып килгәндә,
Хан кешеләре тап булып,
Тоторға тип, килгәндәр,
Кем уҙарҙан елгәндәр
[Ғәнәкәнең ҡайҙалығын
Тоҫмал менән белгәндәр].
Һис бер кеше инмәҫтәй,
Кеше күҙе күрмәҫтәй,
Тирә-яғы һелкенеп,
[Баҡалары эркелеп],
Убып торған Һаҙлыҡҡа
Ғәнәкә барып ятты, ти,
Билдән төшөп батты, ти.
Ҡыуғынсылар тоталмай,
[Тағы эҙләргә ҡалмай,
Шул балаға юлығып —
Яртылашҡа «юл уңып»,
Кире юлды ҡыуғандар,
Бер һүҙҙән булырға, тип,
Бер-береһен тыйғандар.
Ханға үлек бирелгән.
«Әсәһе унын бөлгән —
Һаҙлыҡҡа батып үлгән»,
Тигән һүҙ тараҡкандар].

Иҙеүкәй мыны ишеткәс,
Һабрау менән һөйләшкәс,
Ҡараңғы төшөп, төн булғас,
Кеше аяғы һил булғас,
Иҙеүкәй, Ыласын икәүләп

Эҙләй сығып китте, ти.
Ғәнәкә һаҙға батһа ла,
Көн-төн буйы тырмашып,
Хәлдән тайып ятһа ла,
Һыуға һуҙған сауылдың
Ботағынан тотто, ти,
Төпкә төшөп китеүҙән
Үҙен һаҡлап торҙо, ти.

Иҙеүкәйҙәр ҡамышты
Кәмә менән йырғылап,
Төрлө яҡтан аралап,
Оран биреп төрлөсә,
Ғәнәкәне тапты, ти.
Үлгән Нуретдин менән
Баланы алыштырғанын,
Үлек баланы тапҡас,
Хандың тынысланғанын
Иҙеүкәй һөйләп бирҙе, ти.

Ғәнәкәгә ат биреп,
Ас тамағын туйҙырып,
Бер көн тотмай, Иҙеүкәй
Урал ҡарай оҙатты.

Энйе хәҙер тынғандай,
Иҙеүкәй үҙенә булғандай,
Уға бик тә һырынып
Йөрөгәнен күргәнгә,
Сәләх тағы көнләште.
Иҙеүкәй, Энйене һөймәгәс,
Уҫал уйҙа булмағас,
Энйегә ҡул ҡатмағас,
Был мәкерҙе белмәне.

Иҙеүкәй ҡурҡып торманы,
Ыласын — йән дуҫым, тип,
Улын, уның улы, тип,
Балаһына туй ҡылды:
Тыу бейәләр һуйҙырҙы,
Үҙ улына шул туйҙа
Мораҙым тип ат ҡуйҙы.
Алтын божра ҡаҡтырып,
Көмөш ырғаҡ таҡтырып,
Ебәк юрған һырытып,
Аҫтына ҡамҡа түшәтеп
Ҙур сәңгелдәк эшләтте.
Туҡтамыштың бар ҡолон

Берен ҡуймай йыйҙырҙы.
Ғөмөр телəтеп балаға
Өс көн, өс төн туй итте.
Быны күргəс ханбикə
Намыҫын баҫып түҙмəне,
Туҡтамыштың алдына
Килеп зарын һөйлəне.

*Ханбикə:*

— Баш бейең туй уҙҙырып,
Күпме малдар туҙҙырып,
Хандай данлы ҡыйланып,
Ниндəй ҙур туй ҡылдырҙы.
Малы уртаҡ баландай,
Байлығыңды туҙҙыра.
Ҡолдан тыуған баланы,
Аяғым йыуған ананы,
Ирен майлар май тапмай,
Ҡаңғырып үҫкəн ҡараны*,
Ҡаҙы, ялға туйҙыра.
Хандай түргə ултыртып
Ыласын менəн бисəһен,
Намыҫымды һуйҙыра.
Ханға йөҙөн сытайтҡан
Ҡолдарыңды йыйҙырып,
Йəш балалай көлдөрə,
Уйнап уйын ҡорҙора.
Туҡтамыштай оло хан,
Ник булмайһың аңа хан?
Əллə улмы һиңə хан?
Иҙеүкəй килеп ингəндə,
Ҡурҡыуыңмы, оло хан,
Өркөүеңме оло хан?
Бөгəлəк саҡҡан дөйлəй,
Утҡа баҫҡан кəзəлəй,
Көҙгө биҙгəк тотҡандай,
Үҙең һис тə һиҙмəҫтəн,
Һыуҙа ҡалыҡҡан ҡуғалай
Ҡалҡынаһың, оло хан!

Тигəн һүҙен əйтте, ти,
Туҡтамыш туҙып китте, ти,
Ханбикəгə асыуҙан
Əйтмəҫ һүҙен əйтте, ти.

*Туҡтамыш хан:*

— Йəн йөрəгем яндырып,

Алдамасы, ханбикә,
Ҡол менән ханды айырмай,
Һөйләмәсе, ханбикә.
Иҙеүкәй килеп бей булһа,
Бар яуыма баш булһа,
Мин урҙаға хан булып,
Шунан өркөп тораммы? —
Тиеп һүҙен ҡатты, ти:

Таң атып ҡояш ҡалыҡҡас,
Эҫе төшөп, мал ҡайтҡас,
Ҡолдар килеп баш эйеп,
Аҫа балаҫтар йәйеп,
Һарай ишеген асҡас,
Туҡтамыш хан инде лә,
Алтын тәхет өҫтөнә
Олпатланып менде лә
Ханбикәһе, уңынан,
Килеп ултырып алғанда,
Хан итәген тәхеткә
Энә менән сәнесте, ти.
Ҡырыҡ ҡыҙ килеп, баш эйеп,
Ҙурлап шарап биргәндә,
Хан тәхеткә ултырып,
Тәмләп шарап эскәндә,
Ҡырыҡ беренсе һан булып,
Аҡ шоңҡарҙай дан булып,
Иҙеүкәй килеп ингәндә,
Туҡтамыштай оло хан,
Үҙен үҙе һиҙмәҫтән,
Һиҫкәнеп ҡалҡып торғанда,
Энәләп ҡуйған итәге
Тартылып энә һынды, ти;
Туҡтамыш хан шул ерҙә
Үҙ ҡаушауын белде, ти.
Күңеле боҙҙай буҙарҙы,
Ҡоторған эт күҙендәй,
Күҙ алмаһы ҡыҙарҙы.
Һау башыны, ауырый, тип,
Килгән-киткән барынан
Һарайыны бушатты.
Тик хан менән яңғыҙы
Аулаҡ тороп ҡалған һуң,
Ҡыялатып ужарын,
Хан янына килде лә,
Алдап-йолдап һүҙ асып,
Ханбикә һүҙ асты, ти.

*Ханбикә:*

— Ай, оло хан, оло хан,
Бөгәсә тағы төш күрҙем,
Ул төшөмдө уйлаһаң,
Һиңә яман эш күрҙем.
Ҡара йылан буйындай,
Ҡабырғаңда ит күрҙем.
Яуға сапҡан батырҙың
Тиргә сумған атындай,
Тибенгеңдә тир күрҙем.
Утҡа өткән ҡойҡалай,
Ҡарайып ҡалған соңҡаһы,
Һөйәкһеҙ ҡалған башыңды,
Ҡарындыҡтай ҡурышып
Йыйырылған битеңде,
Тонйоратып йомолған —
Ат күҙендәй күҙеңде,
Шундай яман төш күрҙем...

*Туҡтамыш:*

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡабырғала ҡан күрһәң,
Тибенгелә тир күрһәң,
Ул ни булыр, ханбикә,
Ул ни булыр, ханбикә?

*Ханбикә:*

— Ханы менән батырҙың
Араһы тарҡау булмаһын;
Хан янында ултырып,
Бер һарайҙа аш эскән,
Ханы менән батырҙың
Йөрәге тарҡау булмаһын;
Һарай ҡыҙын һөйгән ир —
Аны ханы юйған ир,
Ханы аны тартһа ла,
Ҡонон эҙләп йөрөмәһен.
Бикә итергә йөрөгәнен
Хан, үлтереп, тол иткәс,
Йөрәгендәй балаһын
Турап, ханы хур иткәс,
Шулар ҡонон алам тип,
Энйе менән Кинйәнең —
Берен урлап китмәһен, тип,
Иҙеүкәйҙән ҡурҡамын,
Башын юйып, хан булып,

Таҡ* өҫтөнә менмәһен;
Ожмах һымаҡ көнөңдө
Йәһәннәмдәй яндырып,
Ҡара көнгә ҡалдырып,
Башыңды хур итмәһен!

[Ханбикәнән былай шулай]
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Туҡтамыштай оло хан
Буралай болап үкерҙе*,
Аурыуҙай, уҡшып, төкөрҙө;
Тәхетенә ултырмай,
Үрле-түбән һарайҙа
Бер әйләнде Туҡтамыш,
Биш әйләнде Туҡтамыш;
Уртын сәйнәп, һөйләнде,
Әйләнсек ҡуйҙай, әйләнеп,
Берсә тотоп йөрәген,
Берсә ул маңлай тирен
Һыпырҙы, ти, ухылдап:
Ҡарт айыуҙай алпаңлап,
Аптырауға ҡалды, ти.

Ханса кәңәш биргәндә,
Данлы аҡыл тапҡандай,
Арҡаһынан ҡаҡты ла,
Тағы килеп әйтте, ти:

*Ханбикә:*

— Ай, оло хан, оло хан,
Аҡ урҙаға баш булған,
Туҡһан йортло Нуғайҙы
Үҙ ҡулында услаған,
Шундай ҙур хан булған һуң,
Иҙеүкәй ҙә, Иҙеүкәй тигәне,
Килеп ҡулға төшкән һуң,
Шуның башын юярға
Оло хан юлын тапмаҫмы?
Ҡулын бәйләп килтерһәң,
Яллад* башын сапмаҫмы?
Шул ҡараны* юйғанда
Һарай тынлыҡ тапмаҫмы?
Хан был һүҙҙе тыңланы,
Башын баҫып бик оҙаҡ
Мең төрлө уй уйланы.
Аҙаҡ сиктә бикәгә
Үҙе уйын һөйләне.

*Туҡтамыш:*

— Булат ҡылыс таҡҡан ир,
Аҡбуҙ толпар менгән ир,
Бар яуымды* ҡулында
Ошо көндә тотҡан ир;
Илгә сыҡһа, ҙур хандай,
Олпат табып торған ир,
Ҡул бәйләтеп торармы?
Илең бүлеп урталай,
Яу асмайсы ҡалырмы?
Андай эшкә уҡталыу
Ҡулай булмаҫ, ханбикә,
Аның башын киҫеүсе
Ҡанһыҙ булмаҫ, ханбикә!

[Туҡтамыштың ошолай
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бикә тынып ҡалманы —
Мәкерлеге ҡанманы, ти].

*Ханбикә:*

— Туҡтамыштай хан булып,
Туҡһан йортҡа баш булып,
Ханмын тигән данына,
Ҡулында тотҡан иленә,
Таянып эш ҡылалмай,
Малбағар Иҙеүкәйҙең
Башын тотоп сабалмай;
Иҙеүкәйҙән ҡурҡыуҙан,
Йөрәгенә урын табалмай,
Мамыҡ түшәк өҫтөндә
Күҙенә йоҡо алалмай,
Ҡартлығынан ҡашҡарып*,
Алъяп бөткән айыуҙай;
Аяғын бәйләп, һуғымсы
Бысағын һалған буралай*,
Күҙенде йәш ҡаплағас,
Инде һиңә ни тием?
Аҡылым тотһаң, яныма,
Һүҙ әйтмәйем*, кил, тием.
Иҙеүкәйҙе алпатлап*,
Баш бейең бит, саҡырып,
Кәңәш иткән бул, тием;
Ағыу-зәһәр ҡойолған
Бер аяҡ бал бир, тием.
Йығылып үләр шул ерҙә,

Белдермәйсе һис кемгә,
Һарайында тот, тием;
«Иҙеүкәй ҡайҙа икән?» — тип,
Илгә хәбәр һал, тием:
«Ҡасҡан, ахыр, Иҙеү!» — тип,
Бейҙәреңә әйт, тием.
Өс көн уҙып ил тынғас,
Күл төбөнә һал, тием!

Тигән һүҙен оло хан
Ҡулай күрҙе оло хан.
Ишек һаҡлар ҡара ҡол
Кемгә юлдаш икәнен,
Хан менән ханса кәңәшен
Ҡолаҡҡа алыр икәнен
Береһе уйға алманы.

Иҙеүкәйҙе саҡыртҡас,
Туҡтамыш мән ханбикә
Ҙурлап түргә ултыртҡас,
Туҡтамыштай оло хан
Ағыуланған һары бал
Үҙ ҡулынан биргәндә,
Ишек һаҡлар һаҡсы ҡол
Алғараҡ атлап килде лә,
Йөҙөн-ситен сыйырҙы ла,
Иҙеүкәйгә ымланы;
Туҡтамыш мән ханбикә
Был ымлауҙы тойманы.
Иҙеүкәй эште һиҙҙе лә,
Ҡыпылағы* бысағын
Һурып ҡулға алды, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Булат бысаҡ һабы алтын,
Яуҙа ҡулдаш булған ул,
Ҡылысым һынып ҡалғанда
Яуҙа юлдаш булған ул.
Һис ҡулымдан айырылмаҫ,
Һары балға ҡайырылмаҫ,
Ағыуы булһа был балдың,
Ағыуын һурып алыр ул, —
Тине лә һары балды,
Бысаҡ тығып, болғаны,
Бер арҡылы бер буйға,
Дүрткә телеп юлланы,
Ауыҙ итеп балынан

Былай тиеп һөйләне —
Балың артлап киткәнме?
Балды ҡойған һауытың
Әллә ҡаҡһып бөткәнме?
Ҡомалаҡтан бүтән дә
Әсетке булмағанмы?

Тигән һүҙен әйтте лә,
Хан янынан торҙо ла,
Ҡыныға тығып бысағын
Иҙеүкәй сығып китте, ти.
Туҡтамыш менән ханбикә
Аптырашып ҡалды, ти.
Күҙенә йәш тултырып,
Хан янына ултырып,
Ханға ҡарап ханбикә
Тағы һүҙен асты, ти.

*Ханбикә:*

— Аңланыңмы, оло хан,
Иҙеүкәйҙең ҡылғанын?
Бысағын тығып болғауы —
Һине, мине хурлауы;
Бер арҡылы, бер буйға
Бысаҡ менән «турауы» —
«Яйыҡ менән Иҙелдәй
Бүлеп алам», тигәне...

Тигән һүҙҙе әйтте, ти,
Хан болоҡһоп китте, ти.

*Туҡтамыш:*

— Һин әйткәнсә, Иҙеүкәй
Минең илгә яу булмаҫ!
Кәңәш ҡорһам, ханбикә,
Һиндәй алар уйламаҫ,
Иҙеүкәйҙең был эшен
Яманлыҡҡа юрамаҫ!
Тигән һүҙен әйтте лә, —
Шунда уҡ бер ҡол ебәреп, —

«Сәләхи килһен», — тине, ти.

Сәләхи килеп ингәс тә,
Туҡтамыш менән ханбикә
Эште һөйләп бирҙе, ти.

*Сәләхи:*

— Ай, оло хан, хуш күрең,
Үҙем һөйләп бирәйем:
Ашың еҫкәп ҡуйыуы —
«Илеңде һынаным», — тиеүе;
Бысаҡ тығып бутауы —
«Илең бутармын», — тиеүе.

Хан, был һүҙҙе ишеткәс,
Аптырауға ҡалды, ти.
Сәләхиҙе оҙатҡас,
Туҡтамыш мән ханбикә
Икеһе генә ҡалды, ти,
Шул саҡ тағы ханбикә
Хан асыуын күпсетеп,
Ултырғанын һиҙгән һуң,
Иҙеүкәйҙе нисек тә,
Тағы яман күрһәтеп,
Ханға һүҙен әйтте, ти.

*Ханбикә:*

— Мына, ханым, ишеттең...
Мин ҡасандан һөйләндем:
Бер килмешәк кешене
Түргә уҙҙырма, тигәйнем.
Иҙеүкәй һиңә мыңаса
Бер һүҙ әйтмәй килгәйне,
Ишеттеңме инде үҙең
Ни тип сығып киткәнен?
Иҙеүкәй әйтеп ҡуймаҫ ул,
Йәндәй күргән ҡыҙыңды
Ҡалын*-маҙар түләмәй
Алып китмәй, ҡуймаҫ ул.

*Туҡтамыш:*

— Алай булһа, ханбикәм,
Бер өлкән туй яһайыҡ,
Шунда аны иҫертеп,
Аяғынан йыҡтырып,
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Башын шундуҡ киҫтереп,
Ҡотолмайсы тындырмаҫ!

[Тигән һүҙен әйтте, ти.
Шул һүҙ ары китте, ти,
Ышаныслы кешеләрҙең
Ҡолағына етте, ти].

Берҙә бер көн һарайҙа ҙур туйға бейҙәр, ҡунаҡтар йыйыл-
ды, ти. Аш-һыу әҙерләнде. Баш бей ҡайтһын инде, тигән бу-
лып, Иҙеүкәй менән Энйенең һунарҙан ҡайтҡанын көтөп тор-
ғанда, Иҙеүкәйҙәр ҡайтып төштө, ти. Ашау-эсеү, уйын-көлкө
башланылар, ти. Шул ваҡыт, Ыласын кирәгәнән* килеп, Иҙеү-
кәйгә ошоно әйтте, ти.

*Ыласын:*

— Хан һунарға сығырға
Батырҙарын йыйҙы, ти.
Һунар тапмай яланда
Ҡара ҡошто оло хан
Ыласынға сөйәргә
Бауын сисеп ҡуйҙы, ти,
Өҫтөңдәге ҡамҡаны
Сисеп ырғыт бейҙәргә,
Өлкән йыйын, был ҙур туй
Ҡалһын тороп бейҙәргә,
Табаны ялпаҡ буҙ толпар
Эйәрләнгән, сыҡ, һиңә,
Ҡара бөркөт йөнөнән
Әҙерләнгән уҡ һиңә.

Ыласын йырын ишеткәс,
Иҙеүкәй ҙә шикләнде,
Ағыуланған һары балды
Янбай тотоп килгәндә,
«Хан һарҡытын* эс!» — тиеп,
Иҙеүкәйгә биргәндә,
Иҙеүкәй үҙен ҡамаған
Бейҙәргә күҙен һалды, ти,
Уларҙың ең эсендә
Ялтыраған бысаҡтар
Күҙенә салынып ҡалды, ти.
Батыр эште аңланы:
«Ах, һарыуым ҡайнай!» — тип,
[Шундуҡ ниәт ҡорҙо, ти,
Бер талпынып, ҡалҡынып],
Урынынан торҙо, ти.
Сыға килеп һарайҙан,
Буҙ толпарға һикерҙе,
Хан һарайын ҡәһәрләп,
[Яман итеп екерҙе],
Ҡоштай осоп шул ерҙә
Урал ҡарап сапты, ти.
Ҡыуа сығар батырҙар
Аттарына барғанда,

Инде менәм тигәндә:
Таралғы* юҡ эйәрҙә,
Ауыҙлыҡ юҡ йүгәндә,
Өҙәңге юҡ менәргә,
Ары итте батырҙар,
Бире итте батырҙар —
Һис бер сара тапмайсы,
Аптырашты батырҙар.

## ТУҒЫҘЫНСЫ ҠОБАЙЫР

Туҡтамыш хандың, йүкә шына ҡаға-ҡаға, ете батырын (Ҡыпсаҡты, Тамъянды, Сәләхиҙе, Ҡарабайҙы, Юрматы улын, Табынды, Янбайҙы) Иҙеүкәйҙе тотоп алып килтерергә өгөтләгәне. Һабрау сәсәндең, ике быуатҡа яҡын ғүмерендә Иҙеүкәйҙәй ҡашҡаны күрмәүен дә, белмәүен дә, уның Аҡ урҙаны емерәсәген илгә әшкәр иткәне. Сәләхиҙең Энйене алып китеү уйының да Иҙеүкәйҙе Иҙел аръяғында күргән Янбайҙың, хан исеменән татлы вәғәҙәләр биреп тә, уны кире боролорға мәжбүр итеү теләгенең дә бойомға ашмағаны.

«Иҙеүкәй хәҙер һиҫкәнде —
Ни теләһә, ҡылыр ул;
Уралға ҡайтып, шау һалыр —
Ҡулын һелтәп китмәҫ ул;
Өҫкә ҙур яу килтерер,
Бөтә илде бөлдөрөр,
Берен ҡуймай батырым
Барын ҡырып бөтөрөр», —

тип уйлап, Туҡтамыш хан Иҙеүкәйҙе тотоп килтерергә батырҙарын димләп, өгөт һүҙен әйтте, ти.

*Ҡыпсаҡ бейгә:*

— Урал, Яйыҡ батырҙың
Ҡонон ейгән тоҡомдан
Батыр булып тыуған ир,
Бер ырыуға баш булып,
Ус төбөндә ил тотоп,
Даның киткән, Ҡыпсаҡ бей —
Ҡуш-ҡуш бысаҡ таҡҡан бей,
Ҡуш әҙернә аҫҡан бей,
Дошманым ҡыуа бар, тимен,
Барып йәнен ал, тимен.

*Тамъян батырға:*

— Эҫем[18] барып яу асып,
Ямантауҙан юл асып,

Иленә ырыуын төйнәгән,
Һөңгө осонда дошманды
Күбәләктәй уйнатҡан,
Тамъян батыр, һиңә әйтәм!
Тамъяндарҙың башы һин,
Торсо, торсо — ҡалҡынсы,
Тора һалып, талпынсы,
Ҡулыңа ҡылысың алсы!

*Сәләхигә:*

— Ҡара дингеҙ буйында
Данын сәскән ҡор башым,
Илен бәйләп, ҡулыма
Тотоп биргән юлбашсым,
Иле телен алмаған,
Бейенә буй бирмәгән,
Үҙ ырыуы булмаһа,
Берәүгә юл ҡуймаған,
Сәләх батыр, һиңә әйтәм!
Уғың ҡырҡ нарға* аҫҡан
Урҙамды ҡулда тотҡан,
Һарайымда иркә һин;
Сәләх батыр, ҡор башым,
Дошманымды тотсәле,
Тотоп, билен бөксәле!

*Ҡарабай батырға:*

— Ҡырым иле эсендә
Ҡараңғыла юл тапҡан,
Бейе ятҡан һарайҙың
Киргәһенә* ут яҡҡан,
Ҡарабай батыр, һиңә әйтәм!

Ҡая битенә юл һалып,
Яу килгәндә, тайшанмай,
Ат уйнатып юл сапҡан,
Ун мең кешем бер төндә
Һуйып муйын бирмәгән,
Ҡатай батыр, һиңә әйтәм!
Ҡараңғыла юл сапҡан,
Алйығанда, һүҙ тапҡан,
Яурының киң, олпатлы,
Арыҫландай йөрәкле,
Һис нәмәнән өркмәгән,
Үҙ ырыуы булмаһа,
Кеше телен алмаған,
Ҡатай батыр, ҡуҙғалсы,
Һин бер тороп талпынсы.

*Юрматы улына:*

— Дошмандан һис тайшанмай,
Илен йәйеп далаға,
Иҙел, Димдең типһәнен
Үҙенә торлаҡ ҡылырға,
Ат уйнатҡан туғайҙа
Һаҙаҡ ҡайрап сайында*,
Ырыу тотҡан, Юрматы,
Һиңә әйтәм тағы ла!
Күскәндә, күсте һаҡлаған,
Йөрәгенә ышаныпп,
Муйынына һаҙаҡ таҡмаған;
Яу туҙанын күргәндә,
Яуға болоттай үкергән,
Юрматы улы ҡарағым,
Ҡараңғыла сырағым,
Бар батырым, барһана,
Дошманға ҡурҡыу һалһана.

*Табын батырға:*

— Яның батмандан* ауыр,
Дүрт ҡарағас үтәнән
Ярып уғың юғалған,
Ҡая эсендә ҡуш айыу
Ҡыбырлатмай ҡаҙаған,
Батырҙарың эсендә
Иң ҡарты ла, олоһо,
Табын батыр, һиңә әйтәм!
Ҡарт арыҫландай ҡысҡырған,
Күп ҙур эштәр башҡарған,
Яуҙа һөңгө һындырған,
Һөңгөгә кеше мендергән,
Ил күңелен тындырған,
Еңмәгән яу ҡалмаған,
Эсһә, ҡанға туймаған,
Табын батыр, тойғоном*,
Күреп тораһың, бойроғом,
Ҡыйғырҙай тороп ҡуҙғалсы,
Дошманымды ҡулға алсы!

*Сәсән телле Янбайға:*

— Амур буйлап Хазарғаса
Ҡанһыҙ илем йәйҙергән,
Буйһондороп һарайға,
Ҡул аҫтыма йыйҙырған,
Ҡыҙыл телең — бал төҫлө

Булып илгә таралған,
Янбай тигән дан алған,
Һиңә тағы шуны әйтәм;
Һаҙаҡ теймәй, Иҙеүкәй
Батырҙарҙан ҡотолһа,
Сәсән телең арбаһын,
Ҡул-аяғы бәйләнһен;
Дар ағаста аҫылған
Иҙеүкәйҙең кәүҙәһен
Илем күреп, һил булһын, —
Тиеп, ҙур хан ялбарып,
Батырҙарға әйтһә лә,
Батырҙарҙың берәүһе
Һис бер һүҙ ҙә әйтмәне.
«Иҙеүкәйҙең артынан
Ҡыуабыҙ», — тип, һүҙ биреп,
Тора һалып китергә
Баҙнат итә алманы.

— Саҡырылған йыйынға
Килә алмайса, һуңлаған,
Илдә йырсы, ҙур һынсы,
Күпте күреп, ишетеп,
Йөҙ туҡһан биш йәшәгән,
Тирә-яҡтың бар хәлен
Күҙ алдыңдай күреүсе,
Һабрау ҡартың килә, — тип,
Ханға хәбәр бирҙеләр.

Аяҡҡа баҫып барыһы
Һабрау ҡарттың ингәнен
Ҙурлап ҡаршы алдылар.

*Туҡтамыш:*

— Һабрау килә, тигәс тә,
Ҡараҫҡыңды күргәс тә,
Оҙон ҡолаҡ, һиҙгер күҙ,
Ауыҙы асыҡ, сапаҡ һүҙ*
Һабрау килә, тигәс тә,
[Уйым, һүҙем бүлдерҙем,
Иркем, һиңә күндерҙем].

Елгән аттан тир сығар,
Күк йылҡынан буҙ тыуар,
Сәсән ирҙең өнөнән
Ҡыл ярырҙай һүҙ сығар;
Аҡыллы ир башынан
Донъя ҡорор уй сығар.

Йөҙ тукһан биш йәшәгән,
Йәне, һөйәге ҡаҡшаған,
Аҙау теше ҡойолоп,
Берәм-берәм төшкән һуң,
Хызыр йыйып бер епкә,
Теҙеп-теҙеп бәйләгән.
Һәр бер эште белеүсе,
Һүҙҙе уйлап һөйләүсе,
Ил өлкәне, Һабрау ҡарт,
Кәңәш һиңә туҡтаны...
Аҡ урҙаның һарайы
Аптырауға әйләнде —
Табағымдан аш ейгән
Иҙеүкәй батыр тигәне
Ҡара йыланға әйләнде.
Тел аҫтына тел ҡуймай*,
Кәңәшеңде әйт әле!

*Һабрау:*

— Эй ҡартыңмын, ҡартыңмын,
Күпте күргән ҡартыңмын:
Урал буйы — данлы йорт
Аптырауға ҡалғанын,
Батырҙары ил һаҡлап,
Ҡыҙыл ҡанға батҡанын;
Урал буйлап хандарҙың
Ат саптырып йөрткәнын —
Аны ла күргән ҡартыңмын;
Аҡҡоломбәт ҡустыһы
Ҡараҡоломбәт мырҙаның
Бала һуйып, хан булып[19],
Ырыуын бүре йән яһаған;
Ун ике тотам уҡ тотоп,
Ағаһының кинйәһе
Бабсаҡ бейҙе үлтереп,
Атаһының ҡоно өсөн
Бабсаҡ улы Күсәккә[20]
Бар ырыуын юйҙырған —
Аны ла күргән ҡартыңмын;
Ҡош сөйалмай, ҡалтырап,
Ат меналмай, аптырап,
Йәштә ҡошто сөймәгән,
Атта уйнап үҫмәгән,
Юлдаш булыр бурҙайын,
Сит кешегә тилегән
Һылыуы булған Энйенең
Күңелен ситтән алдыртҡан,

Хан кинйәһе* Кинйәнең
Атаһы биргән балдағын
Аны ла ситкә кейҙерткән;
Тәхетеңә мираҫың,
Йәш булһа ла, баланды,
Ҡадирбирҙе мырҙаны —
Аны ла күргән ҡартыңмын.
Йөҙҙән йәшем уҙғанда,
Ауыҙымда теш бөткәндә,
Ҡоро һөлдәм йөрөгәндә,
Үҙ дәүерем үткәндә,
Һеҙҙең дәүер аҙаҡҡа
Тағы ла килеп еткәндә,
Быуын-быуын хан булған,
Күп хандарҙы күргәндә,
Атаһынан ҡот ейеп,
Әсәһенән һөт имгән,
Бер Алланың бүләге —
Башлыҡ-башлыҡ* Сыңғыҙ хан[21] —
Аны ла күргән ҡартыңмын.
Анан аҙаҡ Аблай хан[22] —
Аны ла күргән ҡартыңмын.
Анан аҙаҡ Ҡара хан[23] —
Аны ла күргән ҡартыңмын.
Ошо йәшемә еткәндә,
Ауыҙымда теш бөткәндә,
Сыҡмаған йән йөрөгәндә,
Күп илдәрҙә йөрөһәм дә,
Ҡашҡа*, ҡашҡа тигәнең
Күбен күргән булһам да,
Һинән киткән Иҙеүкәйҙәй
Ҡапҡа батыр бер ирҙе
Күрмәй торған ҡартыңмын.
Артынан килеп ҡараһаң,
Ике яурын араһы
Батыр йоҡлар саялай;
Алдынан килеп ҡараһаң,
Ҡарсыға ҡабаҡ, талғыр күҙ,
Йөрәгеңә ингәндәй;
Батырлығы — йөҙөндә,
Ҡырҡыулығы — күҙендә,
Уйлап эшләр эшен дә;
Эйәрле ат ятыр эсендә
Иҙеүкәйҙәй батырҙы
Ишетмәгән ҡартыңмын.

«Иҙеүкәй, Иҙеүкәй», тигән һүҙ —
«Урал, Урал», тигән һүҙ.

«Иҙеүкәй китте», тигән һүҙ —
«Урал күсте*», тигән һүҙ.
Иҙеүкәй киткәс, китер ул,
Ҡомһорап сапҡан арыҫландай,
Ҡаныгып осҡан ҡыйғырҙай,
Шул китеүҙән китер ул!

Оҙон-оҙон оло юл...
Быуат-быуат батырҙар
Шуны буйлап сапҡан юл.
Шуны буйлап китер ул,
Урал тауға етер ул,
Һинең бөтә урҙаңды
Аҡ сабаҡтай йоторға
Йылдымда* ятҡан йәйендәй
Ҡарпыйым, тип уҡталһа,
Урал аңа бирер ҡул,
Теләгенә бирер юл,
Иҙеүкәй тигән батырҙы
Яуына ҡор баш ҡылыр ул,
Ханбикә күргән яман төш,
Уйҙа күргән утлы ҡуҙ —
Иҙеүкәй яуы булыр ул,
Ас арыҫландай, үкереп,
Ҡыйҡыу — һөрән һалыр ул.
Ете батырҙы ниргә итеп,
Мең бейле (бай) Нуғай йорт,
Йәйеү* ятҡан дала йорт,
Яҙғы иттәй бурһығып,
Күптән ҡаҡһып килгән йорт —
Данлап ҡорган Аҡ урҙаң,
Иҙеүкәй яуын ишетһә,
Алмас ҡылысын һелтәп,
Иҙеүкәй килеп уҡтаһа,
Ҡыран-яран булыр ул.

Иркәләтеп үҫтергән
Энйе менән Кинйәңде
Алып ҡына ҡуймаҫ ул;
Бүреләй ҡырып яуыңды
Ташлап ҡына китмәҫ ул;
Көмөш йоҙаҡ һарайҙы,
Алтын тояҡ тәхетте,
Уйнап-көлгән бәхетте —
Барын тар-мар итәр ул.

Ай, оло хан, оло хан,
Иҙеүкәй тигән ҙур ҡашҡа

Ошо киткән китеүҙән
Һарайың килеп баҫыр ул.
Көмөштән һуҡҡан ишекте,
Төшһә тимер суҡмары,
Бер һуғыуҙа асыр ул.
Һарайыңа бей булып,
Кирәгәнде ҡырҡыр ул,
Хур ҡыҙындай күрекле,
Һандуғастай иректе,
Һиңә наҙлы Энйене,
Һиңә иркә Кинйәне —
Икеһен дә алыр ул;
Түреңә түшәк һалыр ул,
Иркә үҫкән ҡыҙыңды
Түш аҫтына һалыр ул.
Ҡаяла боҫҡан ырыуҙың
Ҡонон һинән алыр ул,
Байман йәшәп урҙаңда,
Үҙ ырыуын йәйер ул,
Һин ҡорған был һарайҙың
Барын утын ҡылыр ул,
Табаныңды телер ул,
Туралған ҡыл һалыр ул.

Мең бейле Аҡ урҙаға
Килеп ҡанат йәйер ул,
Өйөр-өйөр эркелтеп,
Илдән йыйған малыңдың
Барын ҡыуып китер ул.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, хан уҙған эшенән үкенеүен әйткән ти:

*Туҡтамыш хан:*

— Ете батыр тигәнем,
Етегеҙ ҙә бей ине,
Үҙегеҙ ырыу тотҡанда,
Ил тотарлыҡ бей ине.
Дошман менән дуҫың кем,
Айырырлыҡ күҙ булып,
Барығыҙ ҙа ир ине.

Иҙеүкәй ғәйеп китһә лә,
Шунда ла ары киткән юҡ,
Ағиҙелдән үткән юҡ.

Ай, бейҙәрем, бейҙәрем,
Хәҙер атҡа менегеҙ,
Ни теләһә Иҙеүкәй,

[Хан бирәсәк, тиегеҙ!]
Урҙаһынан ҙур ханлыҡ
Бүлеп бирә, тиегеҙ!

[Туҡтамыш хан ошолай]
Тигән һүҙгә һис бирәү
Ҡырҡа яуап бирмәгәс,
Сәләх менән ханбикә
Иҙеүкәйҙе яманлап,
Уҫаллығын һөйләгәс,
Туҡтамыштың асыуы
Тағы ла уттай тоҡанғас,
Үпкә ҡатыш бойороп,
Йәнә һүҙен әйтте, ти.

*Туҡтамыш:*

— Аралағы дошманды
Берегеҙ* күрмәй һыйҙырған.
Йөҙөк ҡашы Энйеләй*,
Үҙ бауырым — ҡыҙҙарым,
Алар ҙа күңел алдырған!

Бейҙәрем күҙем йомдороп,
Ҡыҙҙарым күңел алдырып,
Мине яңғыҙ ҡалдырып,
Мине хурлыҡҡа һалырға
Дошмандан сер алдырған!

Иҙеүкәйҙе эҙләүсе,
Аны тота барыусы,
Һарайҙа урын алыр ул,
Мамыҡ түшәк һалыр ул,
Күҙ ҡарамдай ҡыҙымдың
Һайлап берен алыр ул.

Ай, ете ир, ете ир,
Миңә ярҙам бирегеҙ!
Һеҙ, ете ир, Иҙеүкәйҙе
Ҡаршыма алып килегеҙ!

Хандың үпкә һүҙенә
Бары ҡолаҡ һалған һуң,
Ҡыҙымды бирәмен, тиеп,
Хан вәғәҙә ҡылған һуң,
Иҙеүкәйҙең артынан
Сәләхтән бүтән батырҙар,
Ханға кейәү булам тип,
Бары ла атҡа менде, ти.

Сәләхи тик ҡалманы,
Үҙ уйҙарын уйланы:
«Туҡтамыштың болала
Аптыраған сағында,
Иҙеүкәй килеп, яу һалып,
Энйекәйҙе алыр, — тип, —
Үҙен ҡанға һалыр, — тип,
Үҙе менән Энйене
Урлап китмәк уй менән
Ҡалып оло хан менән,
Былай һүҙгә башланы.

*Сәләхи:*

— Өс йөҙ кеше эйәртеп,
Энйе менән икәүләп,
Иҙеүкәйҙең артынан
Барайыҡ беҙ, оло хан;
Йорттан сығып киткәнсе,
Иҙеүкәйгә еткәнсе,
Үҙегеҙ менән минән тыш,
Һис берәү ҙә белмәһен.

Энйене күрһә, Иҙеүкәй,
Һүҙен ҡушһа Энйегә,
Килер ул беҙҙең янға —
Тотоп ҡулын бәйләрбеҙ,
Ҡушһаң, башын киҫәрбеҙ,
Тере, тиһәң, тереләй
Алып ҡайтып бирербеҙ...

Хан был уйҙы хуп күрҙе,
Энйене лә саҡырҙы,
Энйе килгәс, Туҡтамыш
Былай һүҙен башланы.

*Туҡтамыш:*

— Сәләхи мән яланға
Сығып йөрөп ҡайтырға,
Балам, хәҙер атҡа мен:
Иҙеүкәй күреп килмәҫме?
Һарайға баш булмаҫмы?

Килһә, алып ҡайтығыҙ,
Үҙен ҡорбаш итәрмен,
Теләһә, кейәү итәрмен,
Теләһә, биреп ханлыҡты,
Үҙен ҙур хан итәрмен.

*Энйебикә:*

— Атаҡайым, Иҙеүкәй,
Шау-шыу һалып Урҙаға,
Атланып Буҙ толпарға,
Ҡайтыр юлға китмәне.
Аны эҙләргә сыҡһам да,
Кеше эйәртеп сыҡмамын,
Сәләх барҙа, Иҙеүкәй
Һарайыңа ҡайтмаҫ ул;
Иҙеүкәй инде асыуын
Һис бер саҡта йотмаҫ ул;
Иҙеүкәй килер булһа ла,
Яҡшылыҡҡа килмәҫ ул;
Тәү башта ул Сәләхтең
Ҡулын ҡулса ботарлап,
Ботон ботса ботарлап,
Башын эткә ташлар ул.

[Дөрөҫ һүҙгә — яуап юҡ,
Яҙығына — яуап күп.
Аптыраны Туҡтамыш,
Ҡалтыраны Туҡтамыш.
Баҙап ҡалды Сәләхи,
Ғазапланды Сәләхи,
Төкөрөндө Сәләхи,
Үкенде, ти, Сәләхи.
Икеһенең береһе
Бер эш тә ҡылалманы,
Уңға, һулға һуғылды —
Бер эш тә ҡыралманы].

[Былар аптырашҡансы,]
Эҙләп киткән батырҙар,
Яйыҡ үтеп, һыу кисеп,
Аръяғында Иҙелдең
Аттан төшөп яй ҡорған*
Иҙеүкәйҙе күрҙеләр.
Янбай елеп китте, ти,
Иҙеүкәйгә етте, ти,
Барып сәләм бирҙе лә
Хандың һүҙҙен әйтте, ти.

*Янбай:*

— Ҡайт, Иҙеүкәй, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙегем, ҡайтһана!
Ҡайта Иҙел кисһәнә!
Иле өлкән урҙаға

Иңкәйеп сәләм бирһәнә!
Ап-аҡ алтын аяҡтан
Хан һарҡытын эсһәнә!
Энйе менән Кинйәнең
Икәүһен берҙәй бирә лә* —
Берәүһен һайлап ҡосһана!
Яурындары таҡталы,
Төймә бауы тартмалы,
Ҡара һыуһар тун бирә,
Аны өстөңә кейһәнә!
Аҫыл шоңҡар ҡош бирә,
Күл әйләнә сөйһәнә!
Алтын арба эшләтеп,
Өҫтөнә ҡамҡа* тышлатып,
Яу-ярағын эшләтеп,
Ҡуш арғымаҡ екһәнә,
Солтанатҡа* етһәнә!
Ҡолон менән тай саҡта
Бәйләнмәйсә һөт имгән,
Ҡонан* саҡта тағы ла
Уртаҡлашып арҙа* имгән,
Дүнәнен* дә эйәрткән,
Ебәктән нуҡта һөйрәткән,
Бишлеһендә — өйөр баш,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә яратып,
Һөйөп менәр ат иткән,
Етеп тә болан һуҡтырған
Ат бирә лә* — алһана:
Эйәренең ҡашы — алтын,
Йүгәненең башы — алтын;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған,
Йөгөрөклөгө* һыналған;
Ҡуш йөрәкле яралған,
Аждаһа йылан үҙәкле,
Башкүнәктәй* танаулы,
Атҡолаҡтай* иренле,
Һарымһаҡтай аҙаулы,
Ут урнында* тояҡлы,
Ҡыйгас ҡамыш ҡолаҡлы,
Алғыр бөркөт ҡабаҡлы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы,
Ҡыҫҡа бәкәл, өкө аяҡ*,
Муйындары — бер ҡолас,
Ҡуян йөнлө, сута күҙ,
Ҡыҫҡа кикел*, туғай ял,

Табаны ялпаҡ, тарлан буҙ
Йөгөрөк атты менһәнә,
Менеп, донъя гиҙһәнә!
Иле өлкән Туҡтамышҡа
Эйелеп, сәләм бирһәнә!
Өйөр йылҡы бирә бит,
Бәйләп, ҡымыҙ эсһәнә,
Тәхет бүлеп бирә бит,
Шул тәхеткә менһәнә!
Туҡтамыш хандың ҡыҙы
Һағынды ла, һарғайҙы,
Һалҡын төшмәй*, барһана,
Хандың ҡыҙын алһана!
Һин — хан, ул — ханса булып,
Шыбырлашып, һөйләшеп,
Сыңғылдашып, көлөшөп,
Иң башынан ялғашып,
Шәрбәт эсеп, берләшеп,
Байман гөмөр һөрһәнә!

Туҡтамыш хан — ҡарт атаң
Һиңә үпкә итә бит,
Үпкәң булһа ҙур ханға,
Үҙ ауыҙыңдан әйтһәнә!

[Таҫма телен болғалап
Хәйләләшеп, юхалап,
Ханы һүҙен арттырып,
Үҙе өҫтәп шаштырып,
Иҙеүкәйгә әйткән һуң,
Әйтер һүҙе бөткән һуң,
Иҙеүкәйҙең ауыҙына,
Оя типкән ҡауҙылай,
Ҡараған да текәлеп,
Күҙҙәре өңрәйеп,
Бар һыны көмрәйеп,
Туҡтап ҡалған, ти, Янбай,
Ауыҙын йырып яндай.
Нәүбәт еткәс, Иҙеүкәй,
Йоланы ул боҙмаған,
Дошманым, тип тормаған,
Яман ниәт ҡормаған,
Яуап биргән иренмәй].

*Иҙеүкәй:*

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Аҡылың да юҡ, Янбай!

Урал буйы — даулы ил,
Ҡанға батҡан шаулы ил;
Ҡая бите миңләнгән
Ҡанды миңә еҫкәтеп;
Етем-еҫер күҙ йәшен
Барын миңә күрһәтеп,
Илем батыр үҫтергән.
Ҡан илаған ил халҡым
Мине ханға өҫтөргән;
Иҙеүкәй, Иҙеүкәй тигәнгә,
Тупраҡ үбеп илемә
Антым биргән батырмын.
Мин ҡайтмамын, ҡайтмамын,
Ҡайта Иҙел кисмәмен;
Энйе менән Кинйәнең
Берәүһен һайлап ҡосмамын.
Һынтылып яуға сапҡанда,
Аяғы ергә теймәгән,
Тау-таш, һыу-һүл тоймаған,
Урал батыр Аҡбуҙы
Менгән атым булғанда,
Табан ялпаҡ тарлан буҙ
Ат бирһә лә менмәмен;
Ҡара һыуһар тун бирһә,
Аны ла өҫтөмә киймәмен;
Үткерлеге юғалмаҫ,
Һыу төбөндә ятһа ла,
Һис тә йөҙөн тут алмаҫ,
Дейеү-енде тураған,
Һөйәктәрен бергә өйөп,
Бейек тауҙар яһаған,
Урал тауын бар ҡылған
Урал батыр ҡылысы
Минең ҡулда булғанда,
[Хан ҡашына бармамын,]
Эйелеп сәләм бирмәмен!

Алла үҙе бирмәһә,
Кеше тәхетен алмамын.
Ир булып атҡа менгән һуң,
Бер юл алып йөрөгән һуң,
[Кире юл һайламамын,]
Ҡатындай кире ҡайтмамын.
Һәлпән-һүлпән йөрөрмөн,
Яңғыҙ булһа ла китермен,
Был киткәндән китермен,
Уралыма етермен.

Хоҙай тәғәлә юл бирһә,
Урал[24] миңә ҡул бирһә,
Уралымдан көс алып,
Өҫтөмә тимер тун һалып,
Илегеҙгә етәрмен,
Маяғыҙҙы улъйә* итәрмен.

Атаһы башын юҡ итеп,
Әсәһе ауыҙын кәмжәйтеп,
Күҙҙәренең алдында
Батырлығым күрһәтеп,
Әнйе менән Кинйәне
Ул яй ҙа был яй итәрмен*.
Туҡтамыштың һарайын,
Аҫа аҫыл балаҫын —
Барын күкшен итәрмен*.
Иҙән башы — ҡара иҙән,
Ике араһына ҡунмаһам,
Илен ҡыран итмәһәм,
Түренә түшәк һалмаһам,
Түш аҫтыма ҡыҙын алмаһам,
Тигәнемә* етмәһәм,
Туҡтамыштың һарайын
Асыу менән асмаһам,
Ошо үсте алмаһам,
Әйткәнемде ҡылмаһам —
Иҙеүкәй атым ҡороһон!

Мин-миндермен, миндермен,
Мин-мин, тигән ирҙермен,
Иҙеүкәй тигән ирҙермен,
Иҙеүкәй тигән ирҙермен,
Уралда үҫкән ҡашҡамын,
[Бар ҡашҡанан башҡамын];
Дуҫымдың утын һүндермәм,
Дошман утын яндырмам*.
Асылын һорамай*, аш бирмәм,
Атаһын һорамай, дан бирмәм.

Мин-миндермен, миндермен,
Мин-мин, тигән ирҙермен.
Күп ҡашҡаға тиңдермен!
Тауға оялар шоңҡармын!
Тауҙы ҡырлап, юртармын!
Мин — ыуҙан да әсемен,
Шәрбәт ҡушылһа, сөсөмен,
Бөтә ағас та баш әйгән,
Тамыры һыуға тоташҡан

Ауа белмәҫ тирәкмен,
[Иң нығымын — һирәкмен],
Балта сапһаң, айырылмаҫ,
Шаҡарһаң да, ҡайырылмаҫ,
Имәнгә бөткән ботаҡмын
Йоп түгелмен, мин таҡмын*, —

тип, Иҙеүкәй китә биргәс, Янбай унның артынан эйәреп, тағы ла һүҙ башланы, ти.

*Янбай:*

— Ҡайт, Иҙеүкәй, ҡайтһана!
Китеү уйҙан ҡайтһана!
Ҡош ояһы Уралға
Кире ҡайтып йөрөмәсе,
Яман уйың сәсмәсе,
Ҡыныға тыҡҡан ҡылысың
Инде ҡабат һурмасы,
Ҡанһыраған Уралдың
Аҙаҡ ҡанын* ҡоймасы —
Ҡамсы тейер муй(ы)ныңа,
Ҡан һырғалар ҡуй(ы)ныңа!

*Иҙеүкәй:*

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Асма күҙең, тишәрмен!
Һөйләмә, телең өҙәрмен!
[Миңә ҡарап һонолма],
Муйының бауҙай киҫәрмен!
Ҡаныңды һыуҙай эсәрмен!
Утауыңды* ауҙарып,
Кирәгәң төтөн ҡылырмын,
Сагарағыңды* һындырып,
Уғыңды* сыра ҡылармын!
Табаныңды телеп, ҡыл ҡуйып*,
Ҡуйыма көтөүсе итәрмен!

Янбай, ҡурҡып, тайшанды, ти. Иҙеүкәй үҙ юлына китте, ти. Янбай, юлдаштары янына барып, Иҙеүкәйҙе бергәләп димләп ҡарарға тиһә лә, батырҙар барырға ҡурҡтылар ҙа, Урҙаға кире ҡайтып киттеләр, ти. Иҙеүкәй Уралға кире ҡайтты ла, Аҡ Урҙаға — Туҡтамыш ханға ҡаршы һуғышыр өсөн, ғәскәр йыйнай башланы, ти.

# УНЫНСЫ ҠОБАЙЫР

Нуритдин исеме менән йөрөгән Мораҙымдың көсө артҡаны: алты йәштә аҫау тотоп менгәне, етеһендә — атышта, унда — ат өҫтөндә, ун дүрттә бил һынашта барыһын да таң ҡалдырғаны. Һынсыларҙың уны маҡтағаны. Уның хаҡында Ыласындың серҙе асмағаны, уратып һөйләгәне; хан уны Иҙеүкәйҙәй итә ҡалһа, Мораҙымдың уға ҡаршы яу асырын иҫкәрткәне; хандың Иҙеүкәйҙе яманлағаны, Мораҙымдың уға ҡаршы яуҙа файҙаланмаҡ булып, Кинйәһен вәғәҙә иткәне. Иҙеүкәйгә ҡаршы яу асырға — ат, юлдаштар алғас ҡына, атаһына ҡуш булып, Мораҙымдың Туҡтамышҡа яу менән киләсәген әшкәр итеп, ҡасып киткәне. Юлаусының Мораҙымдар менгән аттарҙы тасуирлағаны; Туҡтамыштан яу килә, тип, Ғәнәкәнең, ыласын осороп, хәбәр итеүенән белеп, Иҙеүкәйҙең яу асҡаны, улы менән ҡылысҡа-ҡылыс килгәне, Ғәнәкәнең уларҙы бер-беренә танытҡаны. Мораҙымдың Иҙеүкәйгә уның антын хәтергә төшөргәне — Туҡтамышҡа яу асырға өндәгәне, бер суфыйҙың шуны кире ҡаҡҡаны, Һабрауҙың, уны фашлап, яуҙы яҡлағаны. Мораҙымдың Уралда ҡалғаны, Иҙеүкәйҙең Сатмыр хандан ярҙам һорарға юлға сыҡҡаны.

Һигеҙ аймаҡҡа бүленгән,
Туҡһан йортҡа баш булған
Алтын урҙа — Аҡ урҙаға
Туҡтамыш хан баш булған.

Ҙур һарайҙың эсенән
Иҙеүкәй ҡасып киткән һуң,
Ай-көн үтеп, йыл һанап
Байтаҡ ғүмер үткән һуң,
Иҙеүкәйҙең балаһы,
Мораҙым атлы балаһы,
Мораҙым атлы данаһы
Ыласында ҡалған һуң,
Атын йәшереп урҙала,
Нуритдин булып үҫкән һуң:
Алтыһына еткәндә,
Аҫау тотоп, ат менде;
Етеһенә еткәндә,
Ете тотам уҡ атты;
Һигеҙ йәшкә еткәндә
Туң тимерҙе ҡулына
Беләҙектәй ураны;
Ун йәшенә еткәндә,
Ас арыҫландай, мат ҡурып,
Урҙаны таң ҡалдырып,
Ат өҫтөндә уйнаны;
«Ыласын — ысын атам, — тип, —
Изгелегем күрһен», — тип.
Ҡырҙа ятып, мал көттө,

Ямаулы иçке тун кейҙе;
Атаһындай ир булып,
Күсәкбейҙәй һын булды,
Ун дүрт йәшкә еткәндә,
Илдән илгә саптырып,
Бейҙән бейҙе саҡырып,
Туҡтамыш туй йыйғанда,
Билбау алып көрәшеп,
Атта уйнап, сайҡашып,
Күп батырҙар килгәндә,
Бар батырҙы ҡыйратып,
Туҡтамышты, бейҙәрҙе —
Бөтәһен аптыратып,
Майҙанда дан алғанда,
Хан саҡырып ҡул бирҙе.

*Туҡтамыш:*

— Йылҡы көттөң, ҡуй көттөң,
Майҙанда бар батырҙың
Йөрәгенә ут яҡтың.
Алама туның һал, тимен,
Һарайымда ҡал, тимен!

Туҡтамыш хан бойорҙо,
Бар бейҙәрҙән йыйҙырҙы,
Ҙур табындар ҡорҙорҙо.
Дан һынсылар килгәндә,
Эйелеп сәләм биргәндә,
Аҡ һарайҙа Туҡтамыш,
Барын данлап, түр бирҙе;
Һары балды ҡойҙороп,
Барына аяҡ тотторҙо;
Моραҙымды ололап,
Бар һынсы ла маҡтағас,
Һынсыларҙың данлыһы
Ыласынды саҡырҙы.

Ыласын килеп ингән һуң,
Уртанан урын бирҙерҙе.
[Берҙе, тағы ла берҙе
Асы бал һалып бирҙе] —
Ике аяҡ эсерҙе.
Аптыраны Ыласын,
[Был тикмәгә булмаç, тип,
Башын ватты Ыласын],
Кәңәш һорап Мораҙымдан,
Аңа ҡарап күҙ ҡыçты.

Мораҙым да, баш эйеп,
«Бар белгәнең әйт», — тине.
Ыласын һүҙгә башланы,
Бары йотолоп тыңланы.

*Ыласын:*

— Ҡоро үләндә дым булмаҫ,
Ҡоро һөйәктә май булмаҫ;
Ҡара ҡолдоң телендә
Хан тыңларлыҡ һүҙ булмаҫ;
Хан ялыҡһа, халыҡ тыңлар,
Халыҡ тыңлаһа, хан аңлар;
Ҡан тамырға бал китһә,
Ҡыҙыл телгә уй китәр;
Был баланы һөйләһәм,
Хан күҙенә ҡан тибәр.
Ыласын-Ыласын тигән һуң,
Һарайҙа һынсы булған һуң,
Әйтмәй ҡалһам, ил көләр.

Ай, оло хан, оло хан,
Урҙа башы данлы хан,
Атҡа менһәң, тибенге һал,
Үндегеңә тир сыҡмаҫ;
Кейәргә бирһәң, ҡара бир* —
Эсе туҙмай*, төҫө уңмаҫ;
Һунарға сыҡһаң, шоңҡар сөй —
Ҡанъяғанды* буш итмәҫ.

Иҙелдә булды һигеҙ хан,
Яйыҡта булды туғыҙ хан —
Барыһының олоһо
Һинең бабаң хан ине;
Алымы һинән аҙ ине,
Биреме һинән күп ине,
Һарайында ул үҙе,
Бикәһе түгел, баш ине;
Иле һөйгән батырҙы:
«Минең батыр!» — тир ине;
Ат менәрҙәй батырға,
Яныма кил, тир ине;
Хаталыҡ ҡылған берәүгә:
«Гурында* күр!» — тир ине.
Илде болғар бейҙәргә:
«Һарайҙан кит!» — тир ине.
Бынау торған батырың
Ҡарсыға ҡабаҡ ул икән;

Яҫы яурын, оҙон ҡул
Мәргән атыр ир икән;
Ирене йоҡа күренә
Сәсән телле ир икән.

Ай, оло хан, оло хан,
Ҡулымда үҫкән бала ул,
Һынын Хоҙай биргән ул,
Йөрәгендә ни барын,
Инде һорап, үҙең бел.

Тигән һүҙҙе әйткән һуң,
Туҡтамыш хан бер аяҡ
Һары балды биргән дә:
[«Һин һөйлә, — тиеп, — хәҙер»,] —
Мораҙымға ҡушты, ти.
Мораҙым балды эсте, ти,
Алға сығып барына
Былай тиеп әйтте, ти:

*Мораҙым:*

— Ханға дуҫлыҡ иткәндә,
Табында аш ейәрмен,
Аш биргәне хаҡына
Башым түбән эйәрмен;
Ханым булһа ил өсөн,
Ил ситенә сығырмын,
Дошман тар-мар ҡылырмын,
Дошман малын килтереп,
Хан күңелен табырмын;
[Ил тигәнем интегеп,]
Ханға дошман булғанда,
Ирәйеп, атҡа менәрмен,
Ил аралап китәрмен,
Ил йөрәген беләрмен,
Ил дә ханға хас булһа,
Илгә дуҫлыҡ ҡылармын,
Шоңҡар ҡоштай осармын,
Хан һарайын баҫармын,
Башын киҫеп ул хандың
Ҡанъяғама аҫармын,
Малын илгә бирермен;
Кәңәш итеп ҡарттарға,
Яуға сығып яттарға,
Илгә батыр булармын.
Инде, ханым, һиңә әйтәм,
Һиңә төбәп һүҙ әйтәм,

Һигеҙ аймаҡ — ҙур урҙа,
Туҡһан йортҡа баш урҙа,
Шул урҙаға Баш булған
Туҡтамыш хан, һиңә әйтәм.

Бай балаһы байға оҡшар,
Бейгә килһә, бейгә оҡшар,
Ханға килһә һарайға,
Түрҙә ултырып аш ашар.
Ҡолдан тыуған мин бала
Ҡол ҡатындан һөт имгән,
Табынында аш әйгән,
Ата-әсәһе күҙендә
Ҡанлы йәштәрен күреп,
Атаһының уғында
Ҡанлы башағын күреп,
Beләгене һыҙғанып,
Батыр булып ат менгән,
Ҡырҙа ятып, мал көткән,
Уйҙа йөрөп ҡуй көткән;
Көтөүенә килгән мал
Бары илдән килгәнен,
Малын биргән әйәһе
Бары илап ҡалғанын —
Барын күреп үҫкән ир,
Тиеп ханым ҡурҡмаҫмы?

Һарайында ҡалғанда,
Яуыңа баш булғанда,
Йөрәге ҡурҡҡан бейҙәрең
Бары кенә ҡыумаҫмы?
Иҙеүкәй тигән ир булған,
Хан янында бер булған,
Бей түрәнең барыһы
Аңа ҡаршы яу булған.
Ханбикә лә ошаҡлап,
Һарайҙа дау ҡуптарған;
Ағыулы бал бирелгән,
Аңа ла Иҙеүкәй үлмәгән,
Һуярға туй йыйылған,
Анда ла Иҙеүкәй үлмәгән;
[Урал ҡайҙа — мин шунда, тип,
Уралтауға һыпыртҡан];
Хан, һарайын шаулатып,
Ул батырын ҡыуҙырған.
[Ҡыуғынсылар елгәндәр,
Иҙеүкәйгә килгәндәр.
Вәғәҙәгә, өгөткә

Батыр ҡолаҡ һалмаған —
Уларҙың барыһын да
Тоҙаҡ тиеп аңлаған].
«Миңә лә шул көн булмаҫмы?» —
Тиеп һорау ҡуйған һуң.
Хан йыйыны ҙур табын
Бер көрһөндө, бер шымды,
Бер-беренә ҡарашып,
Ни әйтергә белмәне;
Туҡтамыштай оло хан
Һүҙһеҙ тороп ҡалманы.

*Туҡтамыш:*

— Инде, батыр, тыңланым,
Бар әйткәнең аңланым,
Иҙеүкәй китте, бей китте —
Һарайымдан дау китте.
Һигеҙ аймаҡ илем бар,
Тукһан йортло ерем бар,
Дүрт яғымда юлым бар —
Барына һаҡсы ҡуйылған,
Иҙеүкәйҙәй батырҙар
Бер-бер артлы теҙелгән;
Тукһан йортта ил үҫә,
Араһынан бей үҫә,
Бейгә ҡанат булырлыҡ,
Ханға терәк булырлыҡ,
Ыласындай һынсынан
Һиндәй батыр ир үҫә.
Атаң, Ыласын, ҡол булды,
Сәсәнлектә йор булды,
Ҡош сөйәргә ҡул булды*,
Ир һайларға һын булды*.

Анан тыуған ир булһаң,
Хөкөмөмә буй бирһәң,
Һарайымда ҡалырһың.
Иҙеүкәйҙәй, һарайҙа
Яу ҡуптарыр ир булһаң,
Һин дә башың юярһың.
Билбау тотҡан ир батыр
Яуҙа батыр булалмаҫ,
Ханы данлап тотмаһа,
Илдә бауыр һуҙалмаҫ.

Һиңә әйтер һүҙем бар,
Мин әйткәнде эшләһәң,

Бирә торған ҡыҙым бар.
Иҙеүкәй — Иҙеүкәй булды ул,
Иҙеүкәй ҡашҡа булды ул,
Уралда тороп яу асты,
Бейҙәрем тотоп бер аҫты;
Аны ла ғәфү ҡылдым мин,
Илсе ебәрҙем иленә,
Иҙеүкәйҙе саҡырҙым,
Һарайымда бей ҡылдым,
Бар яуыма баш ҡылдым,
Бар байлығым буш ҡылдым.
Дан теләһә, дан бирҙем
Түремдә урын бирҙем,
Үҙ башына эш ҡылды,
Түшәгемә таш һалғас,
Ике күҙгә ҡан һауҙы.

Шундай яуыз бей булғас,
Инде аңа ни ҡалды?
Башын киҫәргә йыйындым —
Минән ҡасып ҡотолдо,
Артынан ҡыуа ебәрҙем —
Аларҙан да ҡотолдо.
Инде миңә ни ҡалды?
Һиндәй батыр ир ҡалды.

Иҙеүкәй — Иҙеүкәй булды ул.
Яуыз ҡашҡа булды ул,
Уралына ҡайтһа ла,
Башҡа бәлә булды ул.
Иҙеүкәй Уралда ҡалһа,
Ете ырыуға баш булһа,
Уралды ла болғар ул,
Анда ятып ҡалмаҫ ул,
Урҙама һаҙаҡ тоҫҡар ул,
Илгә ҡурҡыу һалыр ул,

Ҡасып киткән ҡара ҡол
Уралда баш булғанда,
Тынып ятҡан Уралдың
Ҡылысын ҡындан һурғанда,
Хандың йөрәге ташмаҫмы?
Һиндәй батырын ебәреп,
Яуыздың башын киҫмәҫме?
Яуыздың башын киҫкәнде
Ҙур хан кейәү ҡылмаҫмы?

Тигән һүҙен ишеткәс,
Мораҙым ханды аңланы,

Һүҙ оҙайтмай был туйҙа
Мораҙым да туҡтаны.

Хандың кинйә иркәһе
Ҡарт-ҡоролар күҙ һалһа,
Айҙай һылыу күренгән;
Йәш елкенсәк күҙ һалһа,
Көндәй һылыу күренгән;
Бар ҡыҙының кинйәһе
Мораҙымды күрҙе иһә,
Күҙен алмай, йылмайып
Йөрөгәнен белгәнгә,
Ҡуй көткәндә, Мораҙым
Янына барып йөрөгәнгә,
Һарай быны һиҙгәндер,
Хан да быны белгәндер,
Иҙеүкәйгә ебәреп
Хан юйҙырмаҡ булғандыр,
Тип барыһы уйланы.

Мораҙым яуға ат һорап,
Үҙенә ҡушҡа ир һорап,
Үҙ теләген белдерҙе,
Туҡтамыштай оло хан,
Ҙур башыны кесе итеп,
Бер аяҡ бал тултырып,
Мораҙымды ҙур данлап,
Үҙ ҡулынан эсерҙе.
Ат һайларға ир бирҙе,
Яу һайларға юл бирҙе;
Бер-ике көн үтеүгә
Ил йыйҙырып, туй ҡылды,
Мораҙымға ат бирҙе,
Ыласынды ҡуш ҡылды,
Мораҙым һайлап бер яуҙан,
Йөрәктәре ир булған,
Теләктәре бер булған,
Йөҙләп-йөҙләп яу* алды.
Батыр менән ҡушлашып,
Аяҡ биргән* ханына,
Йөҙөн һытып көнләшеп,
Ҡомһорап торған бейенә,
Мораҙым атҡа менде лә,
Боролоп һүҙен әйтте, ти.

*Мораҙым:*

— Аҫтымдағы толпарҙың
Тояғы ҡыҙар саҡ етте,

Толпар менән егеткә
Һеҙҙән китәр саҡ етте.
Урҙала ҡылған хатам бар
Иҙеүкәй тигән атам бар;
Шул китеүҙән китәрмен,
Урал тауға етәрмен,
Атам миңә ҡул бирһә,
Хоҙай беҙгә юл бирһә,
Урҙаға кире килербеҙ,
Туҡтамыш тигән ҙур хандың
Һарайына керербеҙ
Башын дарға элербеҙ,
Мал-мөлкәтен, байлығын
Илгә бүлеп бирербеҙ!

Тигән һүҙен әйтте лә,
Атын тибеп китте, ти.
Мораҙым менән яуы ла,
Берҙәй булып китте, ти.
Йәшен һуҡҡандай булып,
Туҡтамыш та, бейҙәр ҙә,
Аптырашта ҡалды, ти.
Хан ерән атҡа менеп,
Алмас ҡылыс ҡулға алып,
Артынан сапмаҡ булды, ти.

[Һарайҙағы туғыҙ ир] —
Туҡтамыштың терәге,
[Тиңһеҙ батыр тигәне,]
Үҙ йортона йәшенеп,
Балаһына һырынып,
[Бөтәһе лә ҡатынының
Итәгенә тотоноп],
Ҡыйғырҙан ҡасҡан ҡош-ҡорттай
Һике аҫтына боҫто, ти.
Туҡтамыштай оло хан
Бер алланды, ҡыҙарҙы,
[Бер, буҙ булып, буҙарҙы],
Тиреһенә һыймаҫтай
Ҡабарынды, бүртенде,
Ҡулына алып ҡылысын,
Ат һораны — ат килде,
Яу саҡырҙы — яу килде.
[Теге туғыҙ батыр ҙа
Һаман боҫоп ятырҙар:

Туғыҙының береһе],
Яу сабайыҡ, тимәне.

Туҡтамыштай оло хан,
Аптыраны, алъяны,
Ярҙай халыҡ алдында
Бер үлеп, бер терелеп,
Ҡара ерҙәй ҡарайып,
Бөгөлөп төштө хурланып.
«Сатмырхан тигән бер сатан
Дошман ине бер, үҙе
Һарайҙан ҡасып Иҙеүкәй,
Дошман булды икәүһе,
Ҡулымда үҫкәненә,
Яуыздан тыуғанына,
[Яуыз Мораҙымына]
Менәренә ат биреп —
Ярҙамына яу биреп —
Дошман ҡылдым өсәүен», —
Тип Туҡтамыш иланы.

Мораҙым китте юлына,
Атаһы тыуған еренә;
Оҙон-оҙон юл үтте,
Иңләп ятҡан сүл үтте,
Бүлек-бүлек ил үтте,
Аш биргәндән аш ейҙе,
Аш булмаһа, ҡош атып,
Йолҡоп ҡурҙаҡ яһатты;
Һот биргәндән һөт эсте,
Һөт булмаһа, һыу эсте.
Хандан тарығып илаған,
Хандан зарығып йырлаған,
Осораған бер ирҙе,
Үҙенә ҡушып, яу итте.

Атлай алмаҫ ҡола сүл,
Аны ла үтте Мораҙым,
Соҡор-саҡыр үҙәклек,
Аны ла үтте Мораҙым,
Ҡобаға тояҡ ҡан ерәне
Осҡан ҡошҡа ярышып,
Башын бирмәй, алышып
Аҙналап, ай юртҡанда,
Яуҙарға аты талығып,
Яусыларға ҡалғышып,
Ашарға аш бөткәндә,

Яйыҡ аша сыҡтылар,
Ҙур киң туғай буйында,
Әрәмәлек ураҡкан
Бер ҡыуаҡлыҡ ҡуйнында,
Баш осҡа һалып эйәрҙе,
Сылбырҙа тотоп аттарҙы
Бары шунда ҡундылар,
Быларҙы күреп юлаусы,
Иҙеүкәйгә барыусы,
Яу килә, тип, белгән, ти.
«Һигеҙ күҙҙән көмөрө,
Ҡамыш ҡолаҡ, ҡырас ял,
Оҙон үҙәк, ҡыртыш йөн,
Ат менгәндәр», — тигән, ти.

Менгән аттың һынынан,
Иҙеүкәй эште аңланы,
«Урҙа яғы йылҡыһы», —
Тип яуына һөйләне;
Бары яуын тупланы,
Яйыҡҡа ҡарап ыҡланы.
Таң атып, сулпан ҡалҡҡас,
Таң яҡтыртып, көн тыуғас,
Мораҙым да ҡуҙғалып,
Яуы менән ат менде.
Мораҙым алды баҡманы,
Урҙа юлын һаҡланы,
Йәйләү һайын бер кеше
Таяр ҡылып ҡалдырҙы.
Хан яуы килә ҡалғанда,
Сабырға юл белдерҙе.

Бер йәйләүгә еткәндә,
Шаулап кисеү кискәндә,
Һыу буйында бер ҡатын
[Бер ҡулында ыласын],
Юлға ҡаршы сыҡты ла,
Мораҙымға турылап
Ат алдынан килде лә,
Ҡуңыр йөҙөн ағартып,
Ал иренен буҙартып,
Ҡурҡҡан төҫлө һын менән,
Ҡалтыраған өн менән,
Юл башыны һораны*.
Уйламаҫтан, нитмәҫтән,
Мораҙым һис ни белмәҫтән

Туры яуап бирҙе, ти:
«Мин Урҙанан», — тине ти.
Ҡатын быны ишеткәс,
Ыласынын сөйҙө, ти —
Мораҙымдар көтмәҫтән,
Ат тояғы шауланы,
Күкте туҙан ҡапланы:
Тирә-яҡтан уратып,
Яу килгәне күренде.
Алмас ҡылысты һурып,
Ҡан еренән бер тибеп,
Ҡуш теҙгенгә ултыртып,
Мораҙым да атылды.
Яу эсенән был ҡатын
Ыласынды таныны.
Аңа һөрән һалды ла,
Үҙ яғына ҡайырҙы.
Ғәнәкәне Ыласын,
Бер күреүҙә таныны.

Былар эште белгәнсе,
Сабып барып еткәнсе,
Арыҫландай үкереп,
Аҡбуҙатта Иҙеүкәй,
Айыу һымаҡ үкереп,
Ҡан ерәндә Мораҙым,
Ҡалҡандан ут сығарып,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Аҡбуҙ менән Ҡан ерән
Бер үрәпсеп, бер тороп,
Батырҙарға яй ҡарап,
Айҡалышҡан сағында,
Был алышҡан сағында,
Ике батыр ҡалҡаны
Сайран* осҡан сағында,
Ҡылыстар уйнап ялтырай,
Батырҙарҙың тауышы
Тауға бәрелеп күкерәп,
Ҡылыс һелтәү барғанда,
Ҡоштай осоп Ғәнәкә
Әлһерәп барып етте, ти.
«Берегеҙ — ата, берегеҙ — ул!» — тип
Ай-вай оран бирҙе, ти,
Уйнап торған пар ҡылыстың
Уртаһына инде, ти.
«Урҙа» һүҙен ишетеп,

Дошман килгән, тип белеп,
Ыласыным осорҙом», —
Тип хатаһын таныны,
Батырҙа — үҙ ҡаныны.
Ата-әсә шул ерҙә
Улы менән табышты
Ҡыныға ҡылыс тығылып,
Ҡосаҡлашып ҡауышты.
Мораҙымды Ғәнәкә,
Ебәрмәй, ҡосаҡланы.

*Ғәнәкә:*

— «Инәм!» — тигән иренеңдән,
Мине күргән күҙеңдән;
«Атам!» — тигән ауыҙыңдан,
«Илем!» — тигән телеңдән,
Кил, батырым, үбәйем!
Батыр булған йөрәгеңә,
Кил, ҡулымды ҡуяйым!»
Тигән һүҙен әйтте, ти.
Ҡат-ҡат улын үпте, ти.

Ике батыр тап булды —
Урал буйы шау килде;
Ил йыйылып туй ҡылды.

Туҡтамыштан ҡасҡандар,
Ҡаяла тыуып үҫкәндәр, —
Бары илгә сыҡты, ти,
Ҡанаты үҫкән бәпкәләй
Бары талпынып килде, ти.

Аҙна үтте, туй бөттө,
Ике батыр һөйләште,
Атаһына Мораҙым
Башлап үҙе һүҙ асты.

*Мораҙым:*

— Ай, атайым, атайым!
Тағы ла өҫтәп әйтәйем:
Янбайға әйтеп ҡайтарған
Һүҙең бар бит, атайым;
«Һүлпән-һүлпән йөрөрмөн,
Яңғыҙ ҙа булһа, китәрмен,
Был киткәндән китәрмен
Уралыма етәрмен:

Хоҙай миңә юл бирһә,
Урал миңә ҡул бирһә,
Уралымдан көс алып,
Иңемә тимер тун һалып,
Илегеҙгә етәрмен,
Малығыҙҙы улъя итәрмен;
Әнйе менән Кинйәне
Ул яй ҙа, был яй итәрмен...
Иҙән башы — ҡара иҙән*
Ике араһына ҡунмаһам,
Илен ҡыран ҡылмаһам,
Түренә түшәк һалмаһам,
Түш аҫтына ҡыҙын алмаһам;
Туҡтамыш хан һарайын
Асыу менән асмаһам,
Ошо үсте алмаһам,
Тигәнемә* етмәһәм,
Әйткәнемде ҡылмаһам,
Иҙеүкәй, атым ҡороһон!»
Тигән һүҙең бар, атай!
Үҙ илебеҙ хаҡына
Йән бирәйек, атайым!
Туҡтамыш ханға барайыҡ,
Барып, башын алайыҡ, —
Тип Мораҙым әйткәндең
Иҙеүкәй серен аңланы.

Аҡ Урҙаның терәге —
Ил уйыны* һораны.

*Мораҙым:*

Туҡтамыштың байлығы,
Мин тыуғанда — ун көтөү,
Хәҙер йөҙләп булды инде.
Һигеҙ аймаҡ, туҡһан йорт,
Малын биреп бөлгән йорт,
Туҡтамыштан зарланып,
Күҙ йәшене түккән йорт:
Ярымы — уйнап, көлгән йорт,
Ярымы — ҡайғырып кипкән йорт;
Ҡан илауҙан ауылда,
Ярымы — һуҡыр булған йорт,
Мин тыуғандай тыу көнөн*
Аралап йөрөп күргән йорт;
Хәҙер инде барыһы
Туҡтамыштан таланып,

Яңы тыуған балалай,
Шәрә ҡалған йорт инде;
Күп илауҙан күбеһе
Тома һуҡыр ҡалды инде;
Ханға асыуҙан, теш ҡайрап,
Бары тешһеҙ ҡалды инде;
Асыуынан уҡ ҡайрап,
Ҡанъяғаға* аҫты инде.
Инде тағы ни тием?
Әйтер һүҙем шул инде».
Тигән һүҙен ишеткәс,
Иҙеүкәй ил йыйҙы, ти.
Ил алдында Иҙеүкәй
Батыр һүҙен әйтте, ти:

*Иҙеүкәй:*

— Урал да Урал — данлы ил,
Бик борондан даулы ил,
Кемгә ҡуныш* булманы,
Әсәһенән тыуғандың
Кеменә бишек булманы,
Күкрәгенән ашаға
Кемдәр юлын һыҙманы?
Атам тыуған данлы ил,
Әсәм килен булған ер,
Мин дә шунда тыуған ир,
Кендегемде киҫкән ер,
Тиеп береһе ат менеп,
Атамдай һине һаҡлармын,
Әсәмдәй һине яҡлармын,
Тиеп илдәр батыры,
Йән аямай, яу сабып,
Үҙәнендә ҡан йөҙөп,
Башын ҡуйып ҡаяға
Һаҡлап ятҡан Уралым.

Ҡараңғы төн һайлаған,
Ат эйәрләп, яйлаған,
Ҡыҙ урларға йыйынып,
Һаҡсы яллап төйөнөп,
Төн һайлаған егеттәй;
Икенсеһе, алам, тип,
Бар байлығын йотам, тип,
Дауыл аҫҡан Урал ул.
Беҙ ҙә тыуған Урал ул,
Беҙ ҙә үҫкән Урал ул,

Беҙгә лә төйәк Урал ул,
Беҙгә лә ата Урал ул,
Беҙгә лә әсә Урал ул.

Ата-әсәләй Уралды,
Туктамыш килеп тапаны;
Йөрәк майын һурғандай,
Малын илдең таланы;
Һандуғастай кыҙҙарын
Күҙ алдында хурланы —
Шул дошманға батыр ир,
Яу асмайса, ятырмы?
Яуыз хандан ил өсөн
Барымта* алмай калырмы?

Был хак һүҙҙе ишеткәс,
«Ат менәбеҙ!» — тип күбе
Урынынан калкты, ти,
Шул сағында бер суфый
Һүҙ әйтергә сыкты, ти.
Бар халыкка аңлатып,
Иҙеүкәйгә каратып,
Былай тиеп әйтте ти:
— Бер өй булһын — ил булһын,
Катын булһын, кыҙ булһын,
Бер өйҙәме, баш булһын,
Йә булмаһа, бер илде
Тотоп торған ир булһын.
«Ағас башын ел борор,
Әҙәм башын һүҙ борор».
Тигән һүҙҙе хәтерләп,
Мин — илдең әүлийәһе,
Бәйғәмбәрҙең шәүләһе,
Мин дә бер һүҙ әйтәйем,
Илгә кәңәш бирәйем:
Туктамыштай ҙур ханға —
Туkһан йортло ҙур илгә,
Яу асам, тип уйларға,
Шундай данлы бер ханға
Беҙгә башак кайрарға
Беҙҙең көстән килмәҫ ул;
Баш һалып, кан койоуҙан
Бүтән бүләк булмаҫ ул...

Тигән һүҙен* ишеткәс
Халык та быны тыңлағас,
Төрлө һүҙҙәр китте, ти,

Быны күреп шул ерҙә
Һабрау сығып әйтте, ти.

*Һабрау:*

— Ҡол ҡайғыһын бей белмәç,
Бей ҡайғыһын хан белмәç,
Ярлы көнөн бай белмәç,
Ау(ы]рыу ҡәҙерен һау белмәç,
Ас ҡәҙерен туҡ белмәç,
Ым белмәгән тел белмәç,
Тел белмәгән ил белмәç,
Яуҙың серен яу белмәç,
Ил еңмәçтәй яу булмаç,
Ил бәхетене яҡлаған
Суфый әйткән — һүҙ булмаç!
Уралда үçкән илдәрен,
Ил һаҡлаған ирҙәрен,
Ҡыу ҡылғандай ҡыуратып,
Бүренән ҡасҡан һарыҡтай
Балаларын ыҙғытып,
Йәш сабаҡтай ҡыҙҙарын
Әпкиткәндә илатып,
Ап-аҡ аҡҡан Иҙелде
Ҡыҙыл ҡанға болғатып,
Ил батырҙарын һайлап,
Ҡул-аяҡтарын бәйләп,
Баштарын һалып букәнгә,
Туҡтамыш хан сапҡанда,
Суфый ҡайҙа булды икән?
Ҡатын-бала илашып,
Аһы күккә олгашып,
Ерҙә томан булғанда,
Ерҙә аҡҡан ҡыҙыл ҡан,
Көн битенә сағылып,
Көнгә алһыу типкәндә,
Бәйгәмбәрҙең шәүләһе —
Суфый ҡайҙа булды икән?
Ил даулаған ҙур ханға,
Ил хурлаған ҙур ханға,
Уралдың әүлиәһе
Етем йәшен аҡлаған,
Батыр ҡанын һаҡлаған,
Суфый бер һүҙ әйтмәгән!
Ил йөрәген һурғандың
Аҙауын һурып алмаған;
Ҡара йылан теленән;

Ҡаяуын өҙөп алмаған,
Илгә ҡаршы торғандың
Ҡалҡанын яра сапмаған
Ил батыры булырмы?

Ҡан даръяһы кисмәйсе,
Аҡ һыу табып булырмы?
Ата булған ир батыр
Ҡаяла ятып яу сапмай
Балаға түшәк табырмы?
Кирәгәлә элеүле
Ҡылыстар сайҡалып торғанда,
Буҙ толпарға атланып,
Батыр оран һалғанда,
Урал — ата, тигән ир,
Урал — әсә, тигән ир,
Урал — илем, тигән ир,
Ил дошманын ҡыйратмай,
Хандың башын сабып өҙөп,
Тәхетенән ҡолатмай,
Ирмен тигән ир-егет
Өйҙә ятып тынармы?

Тигән һүҙен ишеткәс,
Урал тауы ҡуҙғалып,
Бер ярылып уңалып
Киткәндәй, шау ҡупты, ти.

Ҡырау һуҡҡан үләндәй
Хан яҡлаусы бай, бейҙәр,
Теҙҙәренә сүкте, ти.
Халыҡ йыйылды — ил тулды
Ер ҡапларҙай яу булды,
«Бер барғанда, эш булһын,
Бушҡа ил ҡан түкмәһен,
Көс ала алмай ҡаҡшашып,
Ил яуы арт сикмәһен», —
Тип батырҙар уйлашты.
«Туҡтамыштың дошманы
Сатмыр ханға барырға,
Анан да көс алырға», —
Тип батырҙар һөйләште.
Иҙеүкәй китте Сатмырға,
Ярҙамға көс һорарға,
Мораҙым ҡалды Уралда,
Бар Уралды тупларға.

## УН БЕРЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Сатмырханға барышлай Иҙеүкәйҙең ҡырҡ ҡалмыҡ батыры әсирләгенән Сатмырхан ҡыҙын ҡотҡарғаны, Сатмырхандан ғәскәр алып, Туҡтамышҡа яу асҡаны.

Сатмырханға бара ятҡанда, Иҙеүкәй бер һылыу ҡыҙҙы алып китеп барыусы ҡырҡ ҡалмыҡ батырына тап булды, ти. Иҙеүкәй был ҡыҙҙың Сатмырхан ҡыҙы Фирҙәүес икәнен, аны был батырҙар урлап алып китеп барғанын белде лә ҡырҡ батырҙы туҡтатып, ҡулына алмас ҡылысын алып:

— Йә ҡыҙҙы бирегеҙ, йә йәнегеҙҙе бирегеҙ! — тип оран һалды, ти. Ҡырҡ батыр, уҡтарын алып, Иҙеүкәйгә ата башланылар. Иҙеүкәй ҡырҡ батырҙы барын да тураҡлап, Сатмырхандың ҡыҙын һалдырып алып, үҙе менән алып барып, атайына тапшырҙы, ти. Сатмырхан, ҡыҙының ҡайтарылыуына шатланып, Иҙеүкәйгә иң һөйгән бүләген һорарға тәҡдим итте, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Ай, оло хан, уйласы,
Әйткән һүҙем тыңласы,
Үҙең атҡа менмәгән,
[Минең атайым һымаҡ],
Һис тә яуҙы күрмәгән,
[Атайымдан мираҫ итеп
Бейлек алмаған миндәй],
Атаңдан мираҫ итеп
Ханлыҡ алған ир түгел!

Төнгә* аҡҡан Иртыштың,
Көнгә* аҡҡан Балҡашын
Ике имсәге һанаған,
Буйында илен йәйҙергән,
Тарбаға — тау япрағы
Бер армытҡа баҫҡанда:
«Мин Сыңғыҙ!» — тип ҡысҡырған,
Оло Сыңғыҙ һуңынан
Ханлыҡ ҡылған Үгәҙәй[25]
Төйәк иткән урынға,
Шуны барып алырға,
Һис тә тыныс йоҡламай
Борсолаһың түгелме?

Өлкө-өлкө бары үҫкән
Иңләп ятҡан типһәне;
Ҡош-ҡортоңа ояға —
Өҫкат менән юшаны;
Аты сәсәп, һөмһөрәп,
Сабып килгән батырға,
Күләгәһенә алырҙай

Шыр урманға алышҡан,
Анда-һанда, һерәйеп,
Күксауыл, тигән ағасы;
Юйып типһән* тынлығын
Сыр-сыу килеп, сәркелдәп,
Һыуыр*, йом(о]ран, сысҡаны;
Ҡоҫоғона* аунаған
Туйҙа эскән ҡоҙалай,
Табынынан аҙашып,
Ҡамышында йәшәгән
Һаҙға аунаған ҡабаны;
Боҙға ятып бәрәсләп,
Йәше тулып мандымай,
Көҙгәсә йөнө ҡупмаған,
Дегәнәккә һырылған
Бүлтеректән* ҙур түгел,
Аҡһыл ҡарһаҡ, бүреһе;
Күл еҫенә ҡалғыған
Алпанлаған байғоштай,
Ятһа ҡуныш таба алмай,
Анда-һанда күренгән
Аҙап бөткән айыуы;
Яуҙан ҡалған аяҡһыҙ,
Менәренә аты юҡ,
Ҡайта торған йорто юҡ,
Ҡамыш төбөн һаҡлаған,
Ат урлаған ҡараҡтай,
Көндөҙ ятып йоҡлаған;
Осалмайсы зарыҡҡан,
Ҡапһаң, ите һаҙ татыр,
Тауыҡ аяҡ, ҡашҡа баш,
Күл, йылғала өйрәге,
Буйын буйлап йөрөгәндә,
Ҡом бураны уйнаған,
Уба-уба тоҙона
Бөтә иле маһайған;
Өҙәңгенән бүтәнлек
Илендә тимер сыҡмаған.

Сыңғыҙ хандың яҫаһын
Бөтә илгә йола итеп,
Оран һалған Сығтайҙың
Төйәге булған Алатау[26],
Аны ла барып алам, тип,
Елкенгән, һин түгелме?
Яуҙа үҫкән ир батыр
Өйҙә тыныс ятырмы?

Көндәй яҡты ҡылысын
Тутыҡтырып ятырмы?
Дошманына яу асмай
Батыр ятып тынармы?
Иле ҡанға батҡанда,
Ҡанһыраған төйәген
Яҡлап атҡа менмәгән
Илгә батыр булырмы?

Үҙ илемә ҡайтайым,
Атам Төкләç тауына[27]
Менеп уғым атайым!
Иҙелем быуып, тынсытып,
Илемә ирек бирмәйсе,
Малын алып, йонсотоп
Ил талаусы бейҙәрҙе —
Барын илдән ҡыуайым.
Һиңә төбәп килгәндә,
Ҡырҡ ҡалмыҡҡа яу асып,
Һинең ҡыҙың алайым,
Тәхетеңә менәйем,
Илеңә хужа булайым,
Тигән уйҙа килмәнем!

Атыма менгән сағымда,
Илем илап торғанда,
Йәш туҡтатмаç күҙенә
Ал урамал* булайым,
Батырҙарын ҡол иткән,
Малын талап, ҡыу иткән,
Яуыз хандан илемде
Ҡотҡарырға ант иттем.
Урал, тигән илем бар,
Атҡа менәр ирем бар,
Ҡушымтаға шуларға
Ярҙам һорар уйым бар, —

тигәс, Сатмырхан, Иҙеүкәйгә күп ғәскәр биреп, Туҡтамыш ханға ҡаршы һуғышҡа оҙатты, ти.

Иҙеүкәй юлда барғанда бер төш күреп, аны ярандарына һөйләне, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Бөгәсә бер төш күрҙем:
Алтын эйәрле Аҡбуҙатты,
Ялынан тотоп, мендем мин,
Аҡ шоңҡар ҡош булдым мин,
Күккә ҡарай остом мин,
Фәрештә менән һөйләшеп,

Тур тауына[28] мендем мин,
Түште түшкә ҡуйҙым мин,
Ул ни булыр, ярандар?

*Юраусы:*

«Бөгәсә һин төш күрһәң,
Аҡбуҙатҡа һин менһәң —
Мораҙыңа етәрһең:
Күккә ҡарай һин менһәң, —
Ил солтаны булырһың,
Тур тауына һин менһәң,
Түшең түшкә һин ҡуйһаң,
Туҡтамыш тәхетенә
[Бәхетеңдән] менәрһең,
Уның ҡыҙын ҡосарһың!»
Тигән һүҙен әйтте, ти.

[Шулай тигәс юраусы],
Яуға китеп барыусы
Иҙеүкәй ҡыуанды, ти,
Шатланып, [йыуанды, ти].
[Шунан ырғып торған да],
Яуын аралап йөрөгән дә,
[Хәл белешеп бергилке],
Оран һалып елкенде:
«Аҡ Урҙаға яуға! — тип,
[Минән ҡалмаң, алға!» — тип],
Үҙе башлап ат менде.

## УН ИКЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Сатмырхандан алған яу-ғәскәр менән килгән Иҙеүкәйгә фил менгән Туҡтамыш хандың ҡаршы сыҡҡаны. Алыштың ҡаты мәлендә, Иҙеүкәйҙе уратып алырға иткәндә, Мораҙым ғәскәренең килеп сыҡҡаны. Туҡтамыштың яу ҡырын ташлап ҡасҡаны. Аталы-уллы батырҙарҙың хан һарайын алғаны, Кинйәне Иҙеүкәйҙең Мораҙымға биргәне. Туҡтамыштың ҡамышлыҡҡа ҡасҡаны: серәкәйҙән биҙрәгән атының тыпылдауын төнәүенән торған ҡыҙғатауҙарҙың борсолоп осоуынан шикләнгән Мораҙымдың Туҡтамышты килеп тапҡаны, уға уҡтан атырға, киҙәкеһеҙ-ниһеҙ форсат биргәне, башын киҫеп алып киткәне, юлда осраған дошманын, йоҡлап ятҡанға, үлтереп тормағаны, унан ҡарғыш ишетһәлә: «Яңғыҙ кәкүк йыл килтермәй», тип ҡалдырып киткәне.

Иҙеүкәй бик күп яу менән
Аҡ урҙанан бер көнлөк,
Аҡ урҙала иң бейек
Ҡарауыл тауға еткәндә,
Үткер күҙле күҙәтсе

Яу килгәнен күргәндә,
Сабар* килеп был хәлде
Туҡтамышҡа әйткәндә,
Туҡтамыштай оло хан
Бикәһен алып һулына,
Бейҙәрен алып уңына,
Шунда уҡ кәңәш итте, ти,
Яу йыярға Урҙаға
Сабар* ҙа сабар мендереп,
Бейҙән бейгә елдереп,
Туҡһан йортло урҙаға
Шул көнө яр һалды, ти,
Урҙаның төрлө яғына.

Бейҙән бейгә хат барҙы
Бөтә урҙа шул төндә
Ҡырмыҫҡалай ҡайнаны,
Төрлө яҡтан яу сапты,
Ат тояғы шауланы.
Аҡ филенә атланып,
Туҡтамыштай оло хан
Егерме ҡол күтәрмәҫ,
Ике дөйә тарталмаҫ
Сыңғыҙҙан ҡалған байрағын
Ялбыратып сыҡҡанда,
Данын сәскән ете бей
Яуҙы башлап барғанда,
Урал батыры ҡылысын
Йәшендәй ялтыратып,
Тау аҡтарған, таш ярған,
Аҡбуҙ атын уйнатып,
Иҙеүкәй килеп сыҡҡанда,
Ҡара толпар уйнатып,
Һикһән һөйәм* һөңгөһөн
Ете батыр һерәйтеп,
Ете яҡлап орғанда*,
Һелкенмәне Иҙеүкәй,
Ҡаҡшаманы Иҙеүкәй.
Тирә-яҡлап хан яуы,
Ҡоршауҙай урап алғанда,
Иҙеүкәйҙең яуының
Күбе суҡмар һалғанда,
Туҡтамыштың яуҙары
Өҫтөнлөктө алғанда,
Аҡ филенең өҫтөндә
Туҡтамыштай оло хан
Күңеле үҫеп, маһайып,
Ҡалҡа килеп, баҡырып:
«Иҙеүкәйҙе уратып, —

Ҡулын бәйләң!» — тигәндә;
Ҡара болоттай, күк йөҙөн
Туҙан ҡаплап төн иткән,
Ер менән күк бер булып,
Йәшенләп күк күкерәп,
Күк ярылып, ер ауғандай,
Хан яуын таң ҡалдырып,
Ете ырыуҙың тауын
Юғарыға күтәреп,
Батырҙарын эйәртеп,
Меңәрләгән яу менән,
Ҡан ерәнен уйнатып,
Хан яуына ташланып,
Мораҙым килеп ҡалҡты, ти —
Хан, гүйә, ас арыҫлан
Тырнағына ҡапты, ти.
Аждаһалай уйнатып,
Ҡулындағы ҡылысын
Бер сапҡанда биш яуҙы,
Биш сапҡанда йөҙ яуҙы,
Тигеҙ ерҙә ҙур тауҙы,
Сүл далаға ҡан һауҙы,
Себендәй күрмәй ҙур яуҙы,
Көтөү ярған бүреләй,
Яуҙы йығып юл ярып,
Мораҙым килеп ҡалҡты, ти —
Дошман әжәл тапты, ти.
Сыңғыҙҙан ҡалған ҙур тыуҙан
Аша атын ырғытып,
Ат аҫтында ҡалдырып,
Юлда барын тапатып,
Мораҙым алға сапты, ти.
Ил болғатҡан Сәләхте
Үкертеп сапты Мораҙым,
Уралдан ҡасҡан Ҡыпсаҡты
Баҡыртып киҫте Мораҙым,
Дулатып киҫте Ҡатайҙы,
Ҡайһыһын бәйләп ташланы,
Ҡайһыһын айҡап ташланы.

Иҙеүкәйгә еткәндә,
Маңлай тирен һөрткәндә,
Ата—улды белмәне,
Эсә — ҡыҙҙы белмәне,
Кемдең яуы кем яҡлы,
Айыра һис кем белмәне.
Мораҙым һаман айҡаны,

[Тирә-яҡты байҡаны —
Ташҡан ине ал ҡаны].

Туҡтамыштай оло хан,
Күккә баҡһа, ут күрҙе.
Ергә баҡһа ҡан күрҙе,
Аҡбуҙ атта Иҙеүкәй,
Ҡан ерәндә Мораҙым,
Хан күҙенә салынды —
Йәшендән ҡасҡан кәзәләй,
Хан филенән йығылды.

Ханды алып Янбай бей,
Һарайға ҡайтып бикләнде.
Хандың яуы еңелде.
Ҡайһы ҡорал ташланы,
Ҡайһы хандың артынан
Һарай ҡарап ыҡланы.

Иҙеүкәй менән Мораҙым
Хан яуыны ҡыйратып,
Ҡорған һарай биктәрен,
Ҡутара һуғып, ырғытып,
Һарайҙы баҫа килгән һуң,
Туҡтамыш хан ат менеп,
Йөҙҙән артыҡ яу алып,
Ханбикәһен, бейҙәрен
Үҙ артынан эйәртеп,
Ҡасырға кәңәш ҡорғанда,
Һуңғы һүҙен әйтте, ти.

*Туҡтамыш хан:*

— Ҡулда ғәйрәт бөттө инде,
Миңә мөҙҙәт етте* инде,
Аяҙ көнөм ҡаралды,
Бар дарманым таралды...
Урҙа тотҡан батырҙар
Ҡул ҡаушарып бөгөлдө,
Ун һан нуғай аймағынан,
Батырҙарым төңөлдө...
Йөгөрөгөм тайғанда,
Таянысым тайышып,
Ил таралып торғанда,
Иҙеүкәй менән Мораҙым
Ер һелкетеп килгәндә,
Ҡалалмайым Урҙамда...

Ай Аҡ урҙам, Аҡ урҙам,
Байман* иткән ханлығым,

Ат бәйләгән ҡаҙығым,
Ете ырыу башҡортом.
Ҡырҡ ырыулы ҡаҙағым,
Өс йөҙ алтмыш утаулы*
Күҙ ҡараһы — ҡырғыҙым,
Һеңгә һабы, ҡәмәр ҡашым*,
Ил биләгән татарым —
Минән тороп ҡалды инде,
Иҙеүкәй менән Мораҙым
Ҡулымдан тартып алды инде!

Ун төйәгә* һалғанда,
Уны берҙәй тарталмаç,
Ҡайып теккән ун тирмәмә
Башым ҡабат ҡайталмаç!
Урҙам башы, Уҡа тыу,
Һине лә ҡалдырҙым, бәхил бул,
Үҙән дә Үҙән, Үҙән һыу
Тирәләп йортом ҡорған ер,
Үҙәкләп һуҡҡан туң тимер,
Ишегемә келә булған ер,
Ай, бер тынлыҡ киткән һуң,
Бәлә-ҡаза еткән һуң,
Туҡмаҡ тағылған айғыр ҙа
Өйөрөн тыныс юшатмаç,
Күрәҙәһе күп ауыл
Илде тыныс йоҡлатмаç;
Артынан ҡыуғын төшкән һуң,
Хан да толҡа табалмаç!
Боронғолай ҡаршылап,
Ҡуна алмаç ҡыуышта,
Килә алмаç ул килештә.

Мин китәрмен, китәрмен,
Тил күленә етәрмен,
Тилдә тынғы тапмаһам,
Күк күленә етәрмен,
Шунда боçоп ятырмын.
Хоҙайым ярҙам бирһә,
Ҡулыма ғәйрәт керһә,
Ун өс йылдан булһа ла,
Бер әйләнеп ҡайтырмын...

Тигән һүҙен* әйтте лә,
Ат теҙгенен ҡуш тотоп,
Һаңғырау юлдың* биктәрен
Йәшерен генә астырып,
Йөҙҙән артыҡ яу менән
Киң далаға йүнәлде.

Һарай тирәләй уратып,
Ҡаршыларҙы ҡыйратып,
Ҡаҙҙы шоңҡар ҡыуғандай,
Хандың улы Ҡадирҙы,
Яуы менән эркетеп,
Мораҙым ҡыуып килгән һуң,
Ҙур һарайҙар тар булып,
Иҙеүкәй менән Мораҙым
Яуы ҡамап алған һуң,
Ил ҡайнашып, шатланып,
Иҙеүкәй яуын көткән һуң,
Ҡадирбирҙе мырҙа ла
Яу эйәртеп ҡасты, ти.
Аталы, уллы ҡашҡалар*,
Хан һарайын алды, ти,
Шатлыҡ менән ил халҡы
Бары ҡаршы алды, ти.
Иҙеүкәй ҙә уларҙың,
Атһыҙына ат биреп,
Тунһыҙына тун биреп,
Барын малды ҡылды, ти.

Һары арғымаҡ атланып,
Батырҙарса кейенеп,
Тамағы кипкәнгә һыу биреп,
Ҡаны аҡҡандан ҡан йыуып,
Яуҙа шәһит* булғанды
Артта ҡалып күмдереп,
Үҙ эшене бөткән һуң
Ғәнәкә килде һарайға,
Үҙе менән бергә үҫкән,
Киң һарайҙы тарһынып,
Үҙе менән серләшкән,
Иптәштәрен күрҙе, ти,
Барына сәләм бирҙе, ти.

Иҙеүкәй менән Мораҙым
Ил йыйып, туй ҡылды, ти.
Иҙеүкәй туйҙа дан ҡылып
Хандың ҡыҙы Кинйәне
Мораҙымға бирҙе, ти.
Мораҙым менән Иҙеүкәй
Икәү кәңәш итте, ти.
Мораҙымға атаһы
Былай тиеп әйтте, ти:
— Арыҫландай һыныңды
Ил таныны, Мораҙым;
Ҡаҙға сөйгән шоңҡарҙай

Алғыр сыҡҡан яуыңды
Хан таныны, Мораҙым;
Туҡтамыш хан ҡасһа ла,
Ҡул ҡаушырып китмәгән;
Туҡһан йортло иләндә
Аның дуҫы бөтмәгән;
Дошман аҙауы* һынһа ла,
Урт тештәре төшмәгән,
Ҡадирбирҙе улы ла,
Туҡтамыш хан үҙе лә,
Яу эйәртеп артынан
Яҡшылыҡҡа боҫмаған.
Ҡан ерәнең мен, балам,
Хан эҙенә төш, балам;
Буйын биреп, баш һалһа,
Бәйләп алып ҡайт, балам,
Ҡанһыранып яу асһа,
Башын киҫеп кил, балам.

Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Мораҙым яуға китте, ти.

Туҡтамыш хан яу менән
Ҡасып барған сағында,
Яйыҡ кисеп, Ыҡ етеп,
Дим башында йәйерәп,
Аттан төшөп ятҡанда,
Татар иле ҙур илдән
Ярҙамға яу көткәндә,
Ат тояғы шаңҡыған
Шомло тауыш килгәнгә,
Һиҫкәнеп, аттан төшөп,
Ергә ятып тыңланы.
Мораҙым менгән Ҡан ерән
Ер аҡтарып кешнәүен
Туҡтамыш хан таныны —
Күңеле, боҙҙай, буҙарҙы,
Йөҙө, үлектәй, ағарҙы,
Йөрәге, ҡурҙай, ҡыуарҙы
Яуына фарман бирҙе.

*Туҡтамыш:*

— Атҡа менең тиҙерәк! —
Яуға ҡаршы бар! — тине. —
Яуҙы ҡырған ир батыр
Һарайымда бей булыр;
Мораҙымды тотҡаны,

Башын киҫеп алғаны,
Ҙур дан алыр илемдә,
Кейәү булыр ҡыҙыма!

Тигән һүҙен әйткән һуң,
Яуы атҡа менде, ти,
Киң яланды тар итеп,
Ҡылған өҫтөн ҡан итеп,
Ике арала яу китте,
Сал бөркөттәй Мораҙым
Ҡыу-ҡыу һалып, ташланды,
Әйтерһең ас арыҫлан,
Яуҙы ҡыра башланы.
Мыны күреп Туҡтамыш
Ҡурҡты — йөрәге һуҡты,
Баш ярауын күрәм тип,
Күл араһы һаҡлар тип,
Ҡамышлыҡҡа юл тотто.

Мораҙым яуҙы тарҡатты,
Яуҙы йыйып, бер эште
Хан яуына аңлатты.
Ике яу ҙа аңлашып,
Аттан төшөп йәйрәшеп,
Татлы ялға талыҡты.

Туҡтамыш хан әлһерәп,
Ҡурҡып, йөрәге бәлйерәп,
Ҡамышлыҡҡа һырынды.
Ел дә иҫмәй ҡамышҡа,
Ҡараңғы төн шым булды,
Тыныс төндә серәкәйҙәр
Туры атҡа яу булды —
Турат түҙмәй йә боҫоп,
Бер урынға биш баҫып,
Күлдең тынлығын боҙҙо
Күлдә тыныс төнәгән
Ҡыҙғатауҙы* осорҙо.
Ҡыҙғатауҙар ҡыйҡыулап
Баш осонан осҡанға,
«Мораҙымға оран» тип
Үҙ башынан ҡурҡҡанға
Туҡтамыш хан зарланып,
Уларға һүҙ әйтте, ти:

*Туҡтамыш:*

— Бикәр* тыпырсыма, туры ат,
Көн-төн ҡалһам, торорһоң;
Бикәр* дерһелдәмә, һум йөрәк,

Иҙеүкәй — икәү, мин яңғыҙ,
Алышҡанда, тынарһың;
Һулҡылдама, аҡ һөңгөм,
Алышҡан ерҙә һынарһың;
Туҡылдама, тоноҡ һыу,
Байҙарымдың йылҡы өйөрө
Бер уртлаһа, ҡорорһоң,
Батҡаҡ булып ҡалырһың!

Ҡыйҡылдама, ҡыҙғатау ҡош,
Тауышың зарлы, байғош ҡош,
Ҡанатың ҡыу сыбыҡтай,
Муйының буш, мороноң ҡуш;
Утлау тулы малым юҡ,
Оян тулы йоморҡаң —
Етәкләп алыр улым юҡ:
Мин ай(ы)рылдым илемдән,
Ай(ы)рылһаң үҙ күлеңдән,
Һин дә миндәй булырһың!

Мораҙым ҡыҙаҡлап осҡан ҡыҙғатауҙы күреп, шикләнеп, күл буйына килһә, ҡамыш араһында Туҡтамыш ханды тап итте, ти. Ханды күргәс, Мораҙым:

— Мин-мин килдем, мин килдем,
Аҡ урҙаны айырып,
Аҙашҡан ҡуйҙай ҡалдырып,
Йәнең алам, тип килдем!
Эсеңдә кер булмаһа,
Башың эйеп, ҡорал һал,
Туры атыңдан төшәрһең,
Елә-елә артымдан,
Ялан аяҡ малайҙай,
Урҙаға ҡайтып керәрһең,
Бәхилләшеп йорт менән,
Иман уҡып, ҡот менән
Себендәй йәнең бирерһең...

Эсеңдә кер һаҡлаһаң,
Баш ҡалҡытып, ҡорал ал,
Мин-мин, тигән Мораҙымды
Аяҡтан йыға ата алһаң,
Морон төртөр ер тапмай,
Алпат күрмәй, ем ҡапмай,
Ҡунар ағасы ҡороған,
Йылы ояһы туҙынган,
Һыңар ҡанаты һынған
Алъяған ҡош шикелле,

Ошо күл һаҙында
Ҡауҙыларға аҙыҡҡа
Тилмереп һин ятып ҡал! —

тине. Туҡтамыш хан баш эйеп, ҡол хәлендә Аҡ урҙаға ҡайтыуҙан хурланып, туғыҙ тотом уғы менән Мораҙымға өс рәт атты, ти. Мораҙым күҙен дә сылтлатмай ҡарап торҙо, уҡтар күкрәгенә тейеү менән, тишә алмай сыра кеүек, сәрпәләнеп, тирә-яҡҡа туҙылдылар; шунан, Мораҙым Туҡтамыш хандың башын ҡылыс менән ҡыя сабып ҡанъяғаһына* таҡты ла Урҙаға ҡайтып китте, ти.

Мораҙым ҡайтып килә ятҡанда, тирәктә башы шаҡара бәйләп ҡуйылған бер ат күрҙе, ти. Ат эргәһенә килһә, ағас төбөндә Туҡтамыш хан менән бергә ҡасҡан бер әҙәм йоҡлап ята, ти. Мораҙым уны үлтерергә уйланы, ти, шунан: «Йоҡлаған килеш үлтереү — ирлек түгел», — тип, уятты, ти. Теге кеше ырғып тора килеп былай тиеп әйтте, ти:

— Ай, Мораҙым, Мораҙым!
Ал килмәһен мораҙың*
Туғыҙ күҙле кирәгәмде
Нимә эшләттең, Мораҙым?
Һауырға бейә һөтө ине,
Илебеҙгә ҡот ине,
Туҡтамыш хан — хужамды
Нимә иттең, Мораҙым?

*Мораҙым:*

— Үрә яллы туры атты
Тунаған егет — мин булам,
Туғыҙ кирәгә ултырған,
Илгә ғазап тултырған
Йортто емергән — мин булам:
Һауырға бейә һөт булған,
Тыныс йортҡа ҡот булған
Туҡтамыш хан — хужаңды
Тилкүлгә һөрөп илттем мин,
Күккүлдә ҡыуып еттем мин,
Етеп, башын киҫтем мин! —

тигәс, теге кеше Мораҙымды йән әсеүе менән ҡарғай башланы, ти:

— Ай, Мораҙым, Мораҙым,
Ал килмәһен Мораҙым!*
Теләгеңә тип елгәндә,
Йөрәк ите үҫкән йылҡылай,
Аҡһар көнөң булһа ине!

Арҡала торған Алатауға
Аға булыр көндәр тыуһа ине!
Өйән дә ҡойроҡ Туры ат,
Айырылып, төйәккә ҡайтырмы?
Туҡтамыштың ҡалған улы
Ҡадирбирҙе хан булып,
Боронғолай ил ҡороп,
Тыуы елгә елберләп,
Етегәне көнгә боролоп,
Яҡты таңы атырмы?
Беҙгә тыуған ҡара көн
Үҙенә тыуып бер көндө,
Таң сулпаның байырмы?
Илең ҡорал күтәреп
Атаң менән үҙеңде
Ҡыу тирәккә аҫырмы?

Мораҙым: «Ҡоро телгә ҡылыс сабыу — ир эше түгел, яңғыҙ кәкүк, саҡырып, йыл килтермәҫ», — ти ҙә, был кешегә теймәй, үҙ юлына китә бирҙе, ти.

## УН ӨСӨНСӨ ҠОБАЙЫР

Янбай ҡотҡоһо буйынса, эсенә кейеҙ бәйләгән Кинйәнең яуҙан ҡайтҡан Мораҙымға, атаңдан өс айлыҡ ауырым бар, тигәне; эш асылын тикшереп тормаған Мораҙымдың, атаһына ҡылыс менән уҡталғаны — Энйенең ҡамасау иткәне; ҡашы, күҙе яраланған Иҙеүкәйҙең ул тыуҙырыуына үкенгәне; улының Уралға киткәне.

Һарайҙа тынлыҡ булған һуң,
Өс-дүрт айҙар уҙған һуң,
Мораҙымдың һуғышта
Еңгәнлеген белгән һуң,
[Яуҙан ҡайтҡан бер яугир
Яу хәбәрен һалған һуң,
Мораҙымдың ҡылғанын
Түкмәй-сәсмәй әйткән һуң]:
«Туҡтамыштың башыны
Киҫеп алды», — тигән һуң;
Кинйә һылыу ҡайғырып,
Атайы өсөн йәш түгеп,
Һарайҙан сит баҡсала,
Яңғыҙ бойоғоп йөрөгәндә,
Янбай килеп сыҡты, ти,
Кинйәкәйҙе йыуатып,
Йөрәгенә ут яғып,
Былай тиеп әйтте, ти:

*Янбай:*

— Илама, Кинйә, илама,
Атаң илгә ҡаш ине.
Туҡһан йортҡа баш ине:
Тунһыҙ инем — тун бирҙе,
Данһыҙ инем — дан бирҙе,
Юлһыҙ инем — юл бирҙе...

Инде ул көн беҙгә юҡ,
Аны бирер ханым юҡ,
Илама, Кинйә, илама!
Һиңә ата — Туҡтамыш,
Миңә ҙур хан — Туҡтамыш,
Илгә ҙур баш булғанда,
Илен ҙур яу баҫҡанда,
Ҡасып та китте Туҡтамыш...
Етем дә күреп һыныңды,
Һине лә алды Мораҙым;
Ҡыуып та атаң артынан,
Етеп тә тотто Мораҙым;
Данлы ла ханды аямай,
Башын да сапты Мораҙым;
Һине лә алып, йәлсетмәҫ,
Бәхетле лә итмәҫ Мораҙым!
Ханға ла ханса булам, тип,
Иркә лә үҫкән Кинйә һин;
Сыңғыҙ ҙа тыуы аҫтында
Туйыңды көткән Кинйә һин;
Атаң да ҡанын юлларҙай
Аҙаҡ та ҡалған Кинйә һин;
Сыңғыҙ ҙа тоҡомо эсенән
Ханса ла булыр Кинйә һин;
Тарҡалған атаң Урҙаһын
Йыярға ҡалған Кинйә һин;
Иҙеүкәй менән Мораҙымды
Тұрап та һалыр, Кинйә һин;
Әйткән аҡылым тотҡанда,
Теләгең табыр Кинйә һин!
Тигән, ти, Кинйәгә.
Ошо һүҙҙе ишеткәс,
Кинйә ҡолаҡ һалды, ти,
Икәү-ара оҙаҡлап,
Уҫал кәңәш ҡорҙо, ти.
Күп уйлашты, ти, былар,
Күп серләште, ти, былар,
Күп юл эҙләне былар,
Күп һүҙ һөйләне былар.

Аҙаҡ сиктә бей Янбай
Йәнә һүҙен әйтте, ти.

*Янбай:*

— Мораҙым ҡайтып килгәндә,
Хан һарайға ингәндә,
Ҡарыныңды ҡапайтып,
Кейеҙ урап ҙурайтып:
«Буйым бар», — тип әйткәндә,
«Кемдән булды?» — тигәндә,
«Ни булыр һуң, Кинйәкәй?» —
Тигән һүҙен әйтте ти,
Кинйәкәй ҙә был һүҙҙе
Хәтеренә һалды, ти.
Мораҙым ҡайтҡан сағында,
Кинйә яңғыҙ ат менеп,
Юлға ҡаршы сыҡты, ти.
Мораҙымды ҡосаҡлап
Илап ҡаршы алды, ти.
Мораҙым күреп был хәлде:
«Атаһы үлем хәбәрен
Ишетеп илай», — тип белде.
Кинйәкәй ҙә шул ерҙә
Көсләп йәшен сығарып,
Иҙеүкәйҙән зарланып,
Былай тиеп әйтте, ти.

*Кинйә:*

— Һине яуға оҙатҡас,
Яңғыҙ йоҡлап ятҡанда,
Кеше-маҙар йоҡлағас,
Килеп ишек асты ла,
Ҡулына бысаҡ алды ла
Атаң килеп яныма
Аҡ тәнемә ҡул һалды.
Мин ҡарыулыҡ* итһәм дә,
Ауыҙымды ҡапланы,
Ай-вайыма ҡуймайсы,
Атайың ҡосаҡланы.
«Улыңа биргән килененмен», —
Тип әйтһәм дә, ҡуйманы...

Ошо көнгә еткәнсе
Төн йоҡлаған сағымда
Һис янымдан сыҡманы.
Инде хәҙер нишләйем?
Ошо көндә атаңдан
Ике-өс айлыҡ буйым бар...

Мораҙымдың был һүҙҙән
Эсе уттай янды, ти,
Йөрәге гөрҫләп һуҡты, ти,
Күҙ алдары ҡарайып,
Яуҙа сүкмәҫ теҙҙәре
Дер-дер килде, бөгөлдө.
Намыҫынан түҙалмай,
Күҙенән йәштәр түгелде.

*Мораҙым:*

— Үҙем тыума булғанға,
Миңә булыр бала ла
Тыума булһын, тигәндер;
Һис һырыныр ер тапмай,
Морон төртөр тиң тапмай,
Мине, ҡурҡып, әсәйем
Ҡамышлыҡта тапҡанға,
Тыума егет булғанға,
Минең [йөҙҙән көлгәндер...

Мораҙым шулай] уйланы,
Йөрәгенә ҡан һауҙы,
Күҙҙәрендә ут янды.

Мораҙымдың күңеле
Өйҙә ятып тынманы,
Атаһынан хурланып,
Ялан сығып уйланы.

Иҙеүкәй бер көн һарайҙа
Фирдәүесте уң яҡҡа,
Ғәнәкәне һул яҡҡа,
Энйе менән Кинйәне
Иркәләп ултырғанда
[Һүҙ ҡатты, ти, уларға].

*Иҙеүкәй:*

— Кинйәне бала сағында,
Иркәләтә торғайным,
Килен булырһың, тиеп,
Мәрәкәләй торғайным.
Уйнаһам да, уң булды,
Шаярһам да, тап булды,
Аҙаҡ сиктә күрәмһеҙ,
Батыр булған илемә,
Иҙеүкәй — һөйгән улыма
Алып биреп, туй яһап,

Килен булды үҙемә, —
Тиеп һөйләп торғанда
Мораҙым ҡайтып килде, ти.
Кинйә уны күрҙе лә,
Мораҙымға килде лә,
Йыйын юҡты бар итеп,
Иҙеүкәйгә тап итеп,
Бушты яһап һөйләне.

*Кинйә:*

— Атаң ағыу биргәйне,
Һиңә эсер, тигәйне,
Алмайынса, ҡыйманым:
Мин алмаһам, үҙе эшләр,
Эсер ашыңа ташлар,
Тип эстән уйланым да
[Алыуға алдым ағыуын].
Ҡулынан алғас ағыуын
[Һиңә илтә һалманым],
Ут эсенә ташланым...

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Мораҙым күҙе ҡыҙарҙы,
Йөҙө күмерҙәй ҡарайҙы,
Асыуына түҙмәйсе.
Бер һүҙ әйтмәй Кинйәгә,
Ҡылыс алып ҡулына,
Киң һарайға атланы,
Түрҙә ултырған атаға,
Ҡылыс менән уҡталды.

Энйе алдан һиҙгәнгә,
Бөтә серҙе белгәнгә,
Иҙеүкәйҙең һүҙенән
Күңеле йомшап киткәнгә,
Атҡан уҡтай тиҙлектә
Мораҙымға йәбеште.
Энйекәйгә көс бирмәй,
Эсәһен дә тыңламай,
Тыңлаһа ла, аңламай,
Иҙеүкәйгә Мораҙым
Ҡылыс менән һелтәне.
Ҡылыс тейеп ҡалһа ла,
Күҙ ҡабағын, ҡаштарын,
Киҫә ярып үтһә лә,
Иҙеүкәй анан үлмәне,
Һалҡын ҡанын боҙманы,

Һүҙһеҙ-ниһеҙ ҡылысты
Тартып алып ырғытты:
«Кинйә янда булғанға,
Көнләшкән», — тип уйланы.
Мораҙымға үпкәләп,
Әйтер һүҙҙәрен әйтте:

*Иҙеүкәй:*

— Мораҙым да булһаң, булһана,
Егет дәүерең данлы һөрһәнә!
Болотҡа еткән Нарыҫ тауҙы
Елебүк тә, елебүк үтһәнә!
Ай ҡашында бер йондоҙ,
Сахарҙай[29] балҡып тыуһана!

Шул уй менән тыуҙырҙым,
Дүрт ҡырлап усаҡ уйҙырҙым,
Алтындан сүлмәк ҡойҙорҙом,
Мораҙыма еттем, тип,
Атыңды, Мораҙым, ҡуйҙырҙым.

Һин тыуғанда, Ыласындан
Тыу бейәләр һуйҙырҙым,
Биленә ҡәмәр быуҙырҙым,
Ай тыумағыр, тыумағыр*,
Һине ҡайҙан тыуҙырҙым!?
Һин яманды тыуҙырып,
Ҡалҡай ҡамҡа* түшәттем,
Ҡалҡай ҡамҡа ҡаты, тип,
Ҡара кишкә* биләттем.
Ҡара кишкә эсендә
Анасылар хурлар, тип,
Бауырыңды күтәртмәй*,
Биленә һаҙаҡ ураттым.

Ҡартайған да көнөмдә
Үҙ башыма күс иттем*.
Ҡара ла ергә ҡан ҡойҙоң,
Һыуҙы ҡайҙан эсәрһең?
Ҡауҙанлы ергә ут төрттөң,
Утты ҡайҙан утларһың?*
Күк ыласынды ҡауҙы иттең,
Ҡошто ҡайҙан сөйәрһең?
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Атты ҡайҙан менәрһең?
Кәнизәктәр энйеттең*
Нөкәр* ҡайҙан ҡосарһың?

Ҡыйғыр ҡунмаҫ ҡарағас,
Ҡаҙ ҡундырҙың, Мораҙым.
Ел дә үтмәҫ араға
Дауыл ҡубырҙың, Мораҙым;
Ҡартайған да атаңа
Ҡул күтәрҙең, Мораҙым,
Яҙығың ҡалай йоларһың?

*Мораҙым:*

— Ҡыйғыр ҡунмаҫ ҡарағас,
Ҡаҙ ҡундырҙым ит өсөн;
Ел дә үтмәҫ араға
Дауыл ҡубарҙым ил өсөн;
Ҡара ергә ҡан ҡойһам,
Һыу тоноғон эсәрмен;
Яҙғы ҡауға ут һалһам,
Үрттән һайлап утлармын;
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менәрмен;
Ҡара ыласын ҡауҙы итһәм,
Шоңҡар һайлап сөйәрмен;
Кәнизәктәр энйетһәм,
Нөкәр һайлап ҡосармын;
Ҡартайған да атамдың
Күҙен ороп сығарһам,
Илемә ҡайтып олтан булып,
Ҡара төндә сулпан булып,
Яҙығымды йолармын,
Йолармын, ау, йолармын!
Мин баш эйеп йөрөнөм —
Ҡәҙеремде белмәнең,
Теләгемде бирмәнең,
Вәгәҙәңдә торманың.
Хуш, һау булың, ҡарт атам,
Ҡайта тупһаң баҫмамын.
Атамдың минән көлгәне —
Мораҙымдың үлгәне.

*Иҙеүкәй:*

— Ай беленер көндән һуң,
Көн беленер айҙан һуң.
Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны;
Бейек тауҙың үлгәне —

Башын томан алғаны;
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйорап барып байығаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны;
Баланан хурлыҡ күргәне —
Шул атаның үлгәне.

Үлмәгәндә, ни үлмәй?
Яҡшының яҡшы аты үлмәй,
Аның яҙған хаты үлмәй!

*Мораҙым:*

— Мин ун йәшкә килгәндә,
Осар ҡоштай талпынған;
Ун бер йәшкә килгәндә,
Яуға ҡаршы ҡалҡынған;
Ун ике йәшкә килгәндә,
Артымда туҙан уйнаған,
Алдымда дошман илаған;
Ун өс йәшкә килгәндә,
Күп улйә алып, уларҙың
Барын илгә мал иткән,
Ун дүрт йәшкә килгәндә,
Күп батырҙы ҡол иткән,
Ун биш йәшкә килгәндә,
Атаһы аның һөйгәнен
Тартып алып хур иткән.

Төкләҫ улы түрәнең —
Балаһын ситкә типкән һуң,
Бер ҡат бағы* һынған һуң,
Кире ҡайтыу уйы юҡ.
Ағың* миңә кәрәкмәй,
Бағың* миңә кәрәкмәй,
Дошман баҫһын илеңде!
Дошман алһын ереңде!
Был китеүҙән китәрмен,
Китеп, Иҙел кисәрмен,
Шунда гөмөр итермен,
Урал битен буйлатып
Ат уйнатып сығырмын,
Аҡ урҙаның шауҡымын
Уралымдан ҡыуырмын.

*Иҙеүкәй:*

— Аҡ шоңҡарҙың балаһы
Бауҙа тора талпынып.
Шул шоңҡарҙай, талпынып
Ғәйрәт ҡунған һының бар —
Бәхетең китәр арҡыры.

Бапһыҙ* булған аҡ толпар,
Сапһа ла, бауырын яҙалмаç;
Тикһеҙҙән* тыуған тик батыр
Яуға һөңгө һуҙалмаç.
Ҡарғыланған* ҡашҡалар,
Яу ситенә олғашмаç;
Арыçландай алышмаç,
Ҡыҙарып күҙен ҡыҙламаç;
Әй, әле лә әле-әле булмаç,
Бәлелә бәле-бәле булмаç,
Атанан тыумай, ир булмаç,
Әсәнән тыумай, ҡыҙ булмаç,
Һөнәрһеҙ кеше көн күрмәç;
Илдән илгә елебүк үтһәң дә,
Был донъялар һиңә лә ҡалмаç,
[Һиңә лә ҡалмаç, миңә лә ҡалмаç
Теләһә лә, ҡалалмаç].

*Мораҙым:*

— Айҙан яҡты нәмә юҡ,
Ҡара болот баçмаһа;
Ир ғәрибе шул булыр —
Ҡайтып, илен тапмаһа.
Киң яурынды уҡ алмай,
Атҡан уғым юғалмай;
Мин барамын, барамын,
Үҙ илемде аламын.

Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы ҡуш йоҙроҡтай,
Йылғаһы көмөш улаҡтай,
Балығы һимеҙ ҡурҙаҡтай,
Ағасы һай-һай күренгән,
Япрағы ергә түгелгән,
Ботағы алтын алҡалай,
Япраҡтары — ҡалҡандай,
Ҡолонсаҡ айғыр булған ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс —
Мең ҡуй булып үрсер ер,
Тороп ҡалған бер ҡолон —
Өйөр булып йөрөгән ер.

Быларҙы Иҙел ҡараған,
Өйөрө буйына таралған;
Балығы аттай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған,
Ете йортто һуғарған —
Һыуы тәмен һалмаған,
Эсмәгән йән ҡалмаған;
Яйыҡ, Иҙел, Димдәрҙе,
Һаҡмар, Әйек, Әйҙәрҙе
Атам мәҡәм иткән ер!
Төйәләҫ башы бейек тау —
Бабам Төкләҫ һарайы,
Иҙелдән тороп уҡ атһа,
Яйыҡҡа барып юғалған,
Үҙе тауға ултырып,
Ун ике бейҙе үлтергән,
Ун ике бейҙе үлтереп,
Тигәненә* еткергән,
Табаны ергә теймәгән,
Толпарҙан башҡа ат менмәгән,
Хөрмәтләшкән дуҫында,
Артығым китте, тимәгән,
Баба Ғөмәр[30] атайҙан,
Әүлиә Төкләҫ бабайҙан
Дәүран, ғөмөр һорарбыҙ!

*Иҙеүкәй:*

— Мораҙым, инде ат менден,
Үҙ атаңды сит күрҙең,
Хоҙай юлың уң ҡылһын,
Ҡорҙаш булған юлдашың
Илен һөйгән ир булһын.
Ирмен тигән ир булмаҫ,
Серҙең төбөн тоймаһа;
Ҡатын-ҡатын булалмаҫ,
Башҡа муйын булмаһа,
Ҡанға батҡан иренең
Ҡылыс ҡанын һөртмәһә...

Мораҙым, атаһына ҡабат яуап ҡайтармай, Кинйәне алып, батырын эйәртеп, Уралға ҡайтып китте, ти.

## УН ДҮРТЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Атаһынан хурланыуын Мораҙымдың халыҡҡа әшкәр иткәне; Һабрауҙың, батырҙан тыуған батырҙың атаһына һаҙаҡ ҡайраһа, илгә афәт килерен әйткәне; Иҙеүкәйҙәй ирҙән яҙған илдең нурһыҙ булырын хәтергә төшөргәне; Мораҙымдың уйға ҡалғаны, Туҡтамыштың үсен Иҙеүкәйҙән алыуына шик белдереп, ҡатынын (Кинйәне) ҡыҫымға алғаны, уға ҡылыс менән уҡталғанда, Ғәнәкәнең тыйып алып ҡалғаны, атаһын сабып та, хур булыуын әйткәне; Ғәнәкә Кинйәнән һораша башлағас, эштең әресәһен килененең әйтеп биргәне, Мораҙымдың йәнә ҡылысҡа үрелгәне, әсәһенең тыйып алып ҡалғаны, ике яҡтың да үҙ атаһының ҡонон алышҡанын аңлатҡаны; Мораҙым менән Кинйәнең, ер үбеп (йәғни ант итеп) татыу йәшәргә һүҙ биргәне; Мораҙымдың атаһынан бәхиллек алырға киткәне, уны Ҡадирбирҙе үлем хәленән еткерер саҡта ғына, дошман яуын ҡырып, Ҡадирбирҙе менән Янбайҙы ҡылыстан үткәргәне. Иҙеүкәйҙең васыят әйткәне: үлә ҡалһа, аҡ нарға артырға, ул ҡайҙа туҡтала, шунда ерләргә, батырҙарҙың аттары төйәк иткән ерҙә ил ҡорорға, яуҙан ҡайтҡанда, ни ерҙә Мораҙымдың уң ҡолағы кәкүк тауышын ишетә, шунда ҡышлау ҡорорға ҡушҡаны.

Мораҙым үҙенең батырҙары менән бергә Дим буйына ҡайтып, Нарыҫ тауына килде, ти. Ҡаршы сығып алған халыҡҡа ҡарап, Мораҙым былай тине:

— Беҙ-беҙ инек, беҙ инек,
Ат өҫтөндә уйнаған
Ыласын ҡоштай ир инек;
Туҡтамышты емергән,
Аҡ урҙаны туҙҙырған,
Тайшанмаҫтай ир инек.
Яуҙар бөткәс, туй йыйҙыҡ,
Бейә һуйып, туй ҡылдыҡ,
Бер ҡаҙанға һыймаған
Ике ҡусҡарҙың башын
Бергә һалып, хур булдыҡ.

Хоҙай биргән бәхетемде
Атам урлап, бур булды;
Мораҙым, тигән данымды,
Һаҡлап оят, намыҫымды,
Ҡанына һыуһап атамдың,
Ҡылыс һелтәп, хур булдым.

Мин — мин булдым, мин булдым,
Мораҙым тигән ир булдым,
Күктә осар шоңҡарҙы
Ҡулда тотар ир булдым;
Намыҫым тапалып, хур булғас,
Мин Уралға боролдом;
Урал — атам тыуған йорт,
Урал — атам үҫкән йорт.

[Мораҙымдың шулай] тигән һүҙен ишеткәс, Һабрау ҡарт сығып, былай тип әйтте, ти.

*Һабрау:*

— Иҙеүкәй тигән батыр ир,
Эңер, тип ятып йоҡламаҫ,
Таңдан ҡурҡҡан Өлкәрҙәй,
Байыймын, тип һыҡтамаҫ!

Иҙеүкәй тыуҙы ир булып,
Бөтә илгә бер булып,
Атҡа менде көр булып,
Урал өсөн көн булып
Илдең нурлы булғаны —
Илдә батыр тыуғаны;
Илдең моңло булғаны —
Батырһыҙ тороп ҡалғаны!
Быуын-быуын үткәндә,
Үлемдән ҡалыр нимә бар?
Малдай ҡаза күрмәгән,
Кешегә бирһәң, бөтмәгән,
Үлмәй торған — яҡшылыҡ.

Илен һөйөп, ат менгән,
Көндәй тонйорап батмаған,
Башын монар алмаған,
Ата-әсәнән тыумаған
Батыр ирҙең исеме бар.
Быуын-быуын үткәндә,
Киң донъяла нимә тар?
Киң донъяла уйнаған,
Ҡупшы итек һайлаған,
Ҡунаҡсының итеге тар*.
Быуын килгән киң илдә
Урман, үлән үҫкәндә,
Тауҙың буйы йәмләнә;
Быуын килгән киң илдә
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атанан күреп, уҡ юнһа,
Илдең йөҙө йәнләнә.
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлын ҡыуғанда,
Атаға һаҙаҡ ҡайраһа,
Илдең йөҙө тарлана.

Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Мораҙым уйға талды, ти,

Халыҡ янына китте, ти,
Тәрән уйға батты, ти;
«Атам бер бей булғанмы?
Әсәм бикә булғанмы?
Нимәгә тинтәк булдым мин?» —
Тип уйлап ҡуйҙы ла,
Кинйәһенә барҙы ла,
Янына саҡырып алды ла
[Унан һорау алды, ти —
Кинйә баҙап ҡалды, ти].

*Мораҙым:*

— Атам янынан ҡайтҡанға,
Күҙ йәшенде түккәнгә,
Көҙ айы үтеп, ҡыш булды;
Атам ағыу биргәнгә,
Ҡыш айы үтеп, яҙ булды;
Атам янынан киткәнгә
Яҙы үтеп, йәй булды —
Икәүҙән икәү һаман беҙ,
Өсөнсөгә ни булды?
Өсөнсөң эстә үлекме?
Булмаһа, атаңдың ҡонон
Атайымдан юллапмы,
Минән ҡылыс һелтәттең?
Сит баштарҙан уй алып,
Мине атама өҫкөттөң?
«Ирмен тигән ир булмаҫ,
Серҙең төбөн тапмаһа;
Ҡатын — ҡатын булмаҫ ул,
Башҡа муйын булмаһа,
Ҡанға батҡан иренең
Ҡылыс ҡанын һөртмәһә»,
Тигән һүҙе атамдың
Нимә булды, Кинйәкәй?
Йөрәгең аҡ булһа, һин
Раҫын әйтсе, Кинйәкәй!

Тигән һүҙен әйткәндә,
Ҡылыс алып, Кинйәнең
Ҡаршыһына баҫҡанда,
Ғәнәкә килеп инде, ти,
Мораҙымдың ҡулынан
Ҡылысты тартып алды, ти.
Икеһенә алмашлап,
Күҙ йүгертеп алды ла
Былай тиеп әйтте, ти.

*Fәнәкә:*

— Алһыу ҙа йөҙөн һарғайтып,
Алдыма килгән кем икән?
Иҙеүкәй ҙә батыр ир, тинем,
Илендә һөйгән бер, тинем;
Беҙҙәй ҙә ҡолдар күҙенә
Ал урамал ир*, тинем;
Бөтмәҫ тә алтын — һин, тинем,
Ҡараңғы төндә — көн, тинем;
Иҙеүкәйгә ҡул биреп
[Үҙем теләп, буй биреп],
Батырға ата бул, тинем
[Табам һиңә ул, тине]...

Буй күтәрҙем тарлыҡта,
Туҡмалдым да әрләндем,
Буй һаҡланым хурлыҡта;
Буй ташлатыр янымда,
Серҙәшем дә бар ине*,
Ҡулыма алғас баланы
Ташларға ҡул бар ине...
Батырҙан батыр тыуғандыр,
Илемә батыр үҫһен тип,
Йөрәгемдән һөт имһен,
Атаһындай ир булһын,
Ҡан таплаған Уралдың
Урманында уҡ юнһын;
[Ҡаяһында ҡайраһын
Ҡылысын, уҡ башағын,
Һөңгөһөнөң башыны;
Ҡылыс, һөңгө, һаҙағын]
Ҡан илаған илемдең
Дошманына тоҫҡаһын,
Тиеп ҡулгә атманым.
Туғыҙ ай хурлыҡта мин
Үҙ буйымда һаҡланым...

Буй үҫтерҙем, ир булдың,
Туҡһан йортло Урҙаның
Төнөнә һин көн булдың.
Батырлығың бүләге —
Атаңды сабып, хур булдың!
Арҡандан ҡағып һөйһәм дә,
Башың сабып өҙһәм дә,
Юлым бар* бит, Мораҙым!
Был ҡылысты ҡынынан
Ниңә һурҙың, Мораҙым?

[Әсәһе әсе әйтһә лә,
Тоҙ һипкәндәй итһә лә],
Улы һүҙен ҡыйманы,
Әсә һүҙен ҡуйманы.

*Ғәнәкә:*

— Дошман яуы булырҙай,
Муйынына ҡылыс һалырҙай,
Ниндәй шомоң бар һинең
[Ни мутлығы бар ине]?
Кинйә, килен, әйтсәле,
Бар төйөндө сиссәле, —
Тигәс, Кинйә иланы,
Барыһын да һөйләне.

*Кинйә:*

— Сәсем оҙон булһа ла,
Аҡылым юйҙым, ҡәйнәкәй,
Яуыз Янбай һүҙенә
Мин алдандым, ҡәйнәкәй, —
Тиеп, серҙең барсаһын,
[Яман эштең әрсеһен]
Шунда һөйләп бирҙе, ти.
Мораҙым ырғып торҙо, ти.

*Мораҙым:*

— Башын сабып өҙәйем,
Бир ҡылысым! — тине, ти.

Ғәнәкә бирмәй ҡылысты,
Мораҙымға әйтте, ти.

*Ғәнәкә:*

— Батыр булдың, Мораҙым,
Аҡ урҙаның ҡыҙына
Кейәү ҙә булдың, Мораҙым,
Алтын һарай эсендә:
«Илем дә — минең атайым,
Көнөм дә — минең атайым,
Ефәккә сумып ятайым,
Алтын да кейеп үҫәйем», —
Тиеп уйлап, елкенеп,
Иркәләп үҫкән ҡыҙ бала,
Атаһынан бүтәнде
Һанһынмай* үҫкән ҡыҙ бала,
Атаһының сал һаҡалын

Ҡанлы ла күргән ҡыҙ бала,
Һинә ни тир, Мораҙым?
Атаһы ҡанын юлларға,
Ҡулына данын алырға,
Намыҫы булған һәр бала,
Барымтаға сабырға,
Ирекле бит, Мораҙым?

Һин атаһын үлтерҙең,
Ул атаңды саптырҙы.
Арағыҙҙа ҡарымта
Шуның менән юҡ булды!

Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Ғәнәкәнең алдында
[Кинйә менән Мораҙым,
Унан китмәй бер аҙым,
Ирле-ҡатын икәүләп,
Ғүмерҙәрендә тәүләп]
Эйелеп, ер үпте, ти,
Татыулыҡта йәшәргә
Һүҙ биреүгә етте, ти.

Мораҙым яуын йыйҙырҙы,
Атын эйәрләп, менде,
Атаһына барырға,
Бәхиллеген алырға...

Мораҙым китеп, Иҙеүкәй
Ҡанатһыҙ шоңҡар булғанда;
Ҡадирбирҙе, көс йыйып,
Иҙеүкәйгә барғанда;
Ҡанлы яуын тағы асып,
Иҙеүкәй яуы аҙ булып,
Ҡадирбирҙе көс алып,
Аҡ урҙаға баш булып,
Иҙеүкәйҙе ҡыуғанда;
Яйыҡ аша һөргөлтөп,
Иҙел ҡарай һыргытып,
Иҙеүкәй яҡлы ирҙәрҙең
Бар булғанын ҡырҙыртып,
Ҡаты яуы барғанда;
Аҡбуҙ менән Иҙеүкәй,
Ҡуйға кергән бүреләй,
Яуҙы яңғыҙ ҡырғанда;
Ҡылысҡа-ҡылыс һуғылып,
Ҡылыс сартлап һынғанда,
Һаҙағы буш ҡалғанда;

Иртә булып, кис етеп,
Ҡанлы һуғыш барғанда;
Ике яҡ та, ҡанығып,
Аттарыны аҡһатып,
Аттан төшөп өҙөшөп,
Ике яҡта үлгәндең
Иҫәп-һаны бөткәндә;
Иҙеүкәйҙе дүрт яҡтан,
Һөңгө ҡаҙап, йыҡҡанда;
Күктә туҙан ҡайнатып,
Ҡыҙыл ҡанлы туғайҙа
Ҡан батҡағы ырғытып,
Мораҙым барып сыҡты, ти.

Ҡылысын һелтәп сапҡанда,
Баштар осто ян-яҡҡа
Беренә-бере бәрелеп,
Яу тулҡынды яҡ-яҡҡа;
Ҡорға осҡан шоңҡарҙай,
Яуҙы ҡырҙы Мораҙым,
Дошманының ҡанына
Һыуҙай кисте Мораҙым;
Ҡыуып етеп артынан,
Ҡадирбирҙе, Янбайҙы
Өҙә сапты Мораҙым.

Төш ауып, кис булғансы
Яуҙы баҫты Мораҙым.
Ҡадирбирҙе, Янбайҙың
Үлеген табып алып,
Баштарын ҡырҡып алып,
[Ҡанъяғаһына тағып,
Туҡталып тормай, сабып,
Атаһына барҙы, ти;
Бара килеп атаһын,
Әйткәндәй: «Ник атаһың?»
Бала шайы ла күрмәй,
Ҡул осона алды, ти].

Һөңгө яралаһа ла,
Уҡтан яра алһа ла,
Үлем килеп йөҙөнә
Үлек тыны өрһә лә,
Йән бирмәне Иҙеүкәй,
Батыр улын күргәс тә,
Хәлен йыйҙы Иҙеүкәй.
Мораҙымға таянып,
Һүҙен теҙҙе Иҙеүкәй.

*Иҙеүкәй:*

— Балам, йөҙөң йыуҙың һин!
Уралыма ҡан ҡойған,
Күҙ йәшен күп түктергән,
Туҡтамыш хан шәүләһе
Тыуған илдә ҡалмаһын,
Яуҙа батыр бул, балам,
Илдә ҡашҡа бул, балам,
[Илем бүтән бөлмәһен]
Атаңдан ил көлмәһен.

Юлың ҡалһын Уралда,
Даның ҡалһын донъяла,
Батырлығың ил күреп,
Йәш үҫмерҙәр һоҡланып,
Һиндәй булам, тиһендәр.
Илгә килгән дошманға
Әҙернә ян* кирһендәр.

Донъя ҡуйһам, аҡ нарға*
Мәйетемде артығыҙ,
[Үҙ иркенә ебәрең,
Ишетегеҙ хәбәрем:
Нарым ҡайҙа бармаһын,
Бер кем дә ҡайырмаһын!
Барыр ергә еттиһә],
Нарым шунда сүктиһә
Шунда мине күмегеҙ.

Минең менән күп саҡтар
Яуҙа булған юлдаштар
Яуҙа менгән яу атын
Ҡайҙа утҡа ебәрһә,
Эҫе көндә себенләг,
Төнөн ҡайҙа юшаһа,
Шул урында батырҙар
Ырыу-ырыу йәшәһен!
Бөтә Урал буйҙарын
Үҙеңә ҡуныш* итәһең.
Уралда үҫкән батырҙы,
Күҙе йәшле еҫерҙе*
Үҙеңә ҡорҙаш итәрһең.

Яуҙан ҡайтҡан сағыңда,
Уң ҡолағың — ни ерҙә,
Кәкүк тауышын ишетһә,
Шунда ҡышлау төҙөрһөң.

Бары ла һине дуҫ күреп,
Яманлығың әйтмәһә,
Илдең зарын ишетеп,
Һиңә кәңәш бирмәһә,
Шул табындың эсендә
Үҙеңә дошман табырһың! —

тип, Мораҙымдар менән бергә Уралға ҡайтып китте, ти. Агиҙелде кисеп, үҙ еренә баҫҡас, Иҙеүкәй ҡыуанып ошо һүҙҙәрҙе әйтте, ти.

*Иҙеүкәй:*

— Үҙән-Үҙән, Үҙән һыу —
Бабам ғөмөр иткән йорт;
Төйәләҫтең араһы
Төйә* менән тулған йорт,
Ҡырҡтытауҙың[31] араһы
Йылҡы менән тулған йорт,
Бейә һауған һөтлө йорт,
Ҡымыҙ эскән ҡотло йорт,
Үҙәкләп һуҡҡан һум тимер*
Миңә хәнйәр булған йорт,
Энйе, мәрйен таҡҡан йорт,
Аҡбуҙ атҡа менгән йорт,
Атам-анам тыуған йорт,
Ете ырыуҙы йыйған йорт,
Өлкән бер туй ҡорған йорт.

Ултыра инек яйлашып,
Ҡолон-бейә бәйләшеп;
Һауыт-һаба тултырып,
Тиң ҡәрҙәштәр йыйылып
Дауран ғөмөр* һөргән йорт!

## УН БИШЕНСЕ ҠОБАЙЫР

Иҙеүкәй менән Мораҙым Уралға ҡайтып еткәс, бөтә ил-йорт алдында Һабрау сәсәндең Иҙеүкәйҙең эштәренә баһа биргәне, Туҡтамышты ҡорт-ҡуңыҙға ем итеп, Урал буйын, Урҙаны таң ҡалдырған ир, тип атағаны; Иҙеүкәйҙең Алмас ҡылыс менән Аҡбуҙын Мораҙымға биргәне, күп миңгәүҙән вафат булғаны, васыяты буйынса, кәүҙәһен нарға аҫып ебәргәндәре, нар туҡтаған ерҙә гүр эйәһе иткәндәре; Мораҙымдың ата ҡәбере янында илгә дошман индермәҫкә, һатлыҡ менән табындаш булмаҫҡа ант иткәне.

Иҙеүкәй менән Мораҙым Уралға ҡайтҡас, уларҙы бөтә йорт* халҡы сығып ҡаршы алды, ти. Шунда Иҙеүкәйгә йыйылған йорт халҡына ҡарап Һабрау ҡарт ошо һүҙҙәрҙе әйтте, ти.

*Һабрау:*

— Атанан етем ҡалғандың
Йөрәген һары алмайсы,
Күҙе йәшкә мансылып,
Дошман, дуҫын айырып,
Урманда уҡ юнмайсы,
[Уралтауҙың ташына
Ҡылысын, уҡ башағын,
Һөңгөһөнөң башыны,
Янып, ҡайрамайынса];
Ҡара төндөң эңерен
Үҙе таңға бормайса;
Өлкәр менән Сулпанды
Тағы айырып белмәйсе,
Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон
Юлға билдә ҡылмайса;
Тимер ҡаҙыҡ йондоҙон
Юлға билдә ҡылмайсы,
Батырмын, тип, ир егет —
Яуға атын менәрме?

Һайыҫҡандай сыбарлы,
Һынламаған ир йыйып,
Батыр яуға сығармы?
Батыр, батыр булған ир,
Дошман шаулап торғанда,
Атҡан уғы тап килеп,
Яуырын айҡап сыҡҡанда;
Йәйге селлә көндәрҙә
Һыу табалмай ҡаңғырып,
Тамаҡтары кипкәндә,
Тел өҫтөнә һалырлыҡ,
Бер йотом һыу күралмай,
Бер киҫәк нан* ейалмай,
Асҡа тилмереп йөрөгәндә,
Ҡара көндө — яҡты, тип,
Ҡая ташын — түшәк, тип,
Яуға сапҡан ир генә,
Ил батыры булыр ул;
Ҡуш Урҙаға баш булған,
Ҡуш айҙарлы* мырҙалар
Нағышланған өй ҡороп,
Алтын тәхет өҫтөндә,
Арыҫландый баҡырып,
Кейгәне ебәк, ҡамҡа* тун,
Менгәне толпар ат булып,
Өс-дүрт быуын буйына
Атанан мираҫ ҡалдырып,

Башынан сылым* кипмәйсе,
Ил өҫтөндә бей булып,
Алтын табаҡтан аш ейеп,
Мин генә — мин, тигәнде,
Мин илгә — хан, тигәнде
Юҡ итеүсе ир ҡайтты.

Туғыҙ ай буйы күтәреп:
«Я, Хоҙай! — тип, ҡыҙ табып, —
Ярҙамсым! — тип, ул табып,
Төн йоҡоһон ҡалдырып, —
Бәғерем», — тип йыуатҡан,
Ҡулына алып тирбәткән,
Һөт имеҙгән әсәне,
Арҡаларын бөкрәйтеп,
[Ике күҙен секрәйтеп],
Маңлай тирен һыпырып,
Себеш туйҙырған тауыҡтай,
[Тамағын төптән ҡырып],
Көнөн-төнөн соҡоноп,
Ас балаға ем эҙләп,
Көн үткәргән атаны —
Барын тапап ҡол иткән,
Елдән ҡурҡып, үләнгә
Һырынып ҡасҡан ләпәктәй,
Батыр булыр баланы
Етем-еҫер ҡалдырып,
Албаҫтылай ҡурҡытып,
Ғазраилдай йән һорап,
Үҙен Хоҙай таныҡан,
Аҡ урҙала хан булып,
Туҡтамыш тигән дан алып
[Ил талаған бер ханды
Тәхетенән осороп],
Арҙаҡланған* аҡ тәнен
Ҡара ерҙең аҫтында
Ҡорт, ҡуңыҙға ем итеп,
Урал буйын, Урҙаны
Таң ҡалдырып, дан сәскән
Иҙеүкәй тигән ир ҡайтты!

Был маҡтауҙы, был данлауҙы тыңлаған һуң, бик тә әҫәрләнгән Иҙеүкәй Урал батырҙан ҡалған алмас ҡылысты, уға ҡушып Аҡбуҙатты улы Мораҙымға бирә:

*Иҙеүкәй:*

— Иңемә таҡҡан ҡылысым —
Урал батыр ҡылысы,

Алдында урман торғанда,
Юлын йылға быуғанда, —
Урманын да, һыуын да,
Айыра ярған ҡылыс ул.

Таш күкрәкле тауҙарҙың
Он-талҡанын килтергән,
Ен йөрәген көйҙөргән,
Уралға ен, бәрейҙе —
Барыһын баш эйҙергән —
Даны сыҡҡан ҡылыс ул.

Урал батыр ҡулында
Илдәр гиҙгән был ҡылыс,
Иҙел менән Яйыҡҡа
Үҙән йырған был ҡылыс[32],
Күл төбөндә күгәрмәй
Мең йыл ятҡан был ҡылыс[33].

Шүлгән күлдең аҫтынан
Атаң тапҡан ҡылыс ул,
Дәмми бейҙең ҡыу башын
Өҙә сапҡан ҡылыс ул.
Туҡтамыш хандың төйәген
Тар-мар иткән ҡылыс ул.

Һуңғы көнөм еткәндә,
Ҡулымдан көсөм киткәндә,
Ҡылысты һиңә бирәйем,
Уралды яҡлап, яу асһаң,
Ирлегеңде күрәйем.

Тот, Мораҙым, ҡылысты,
Сап, Мораҙым, ҡылысты!
Аҫтымдағы Аҡбуҙат
Урал батырҙыҡы ине,
Алдында урман торғанда,
Юлын йылға быуғанда,
Урманын да, һыуын да
Ырғып үтер ат ине.

Болотҡа еткән тауҙарҙы
Һикереп ашты Аҡбуҙат,
Тояғы тейгән урындан
Күл сығарҙы Аҡбуҙат,
Елеп үткән еренән
Тау сығарҙы Аҡбуҙат.

Күҙемде ҡан баҫҡанда,
Өҙәңгегә баҫыр аяғым,

Тәнемде гүргә тартҡанда,
Атымды һиңә бирәйем,
Уралды яҡлап яу асһаң,
Ирлегеңде күрәйем,
Ал, Моразым, Аҡбуҙат,
Мен, Моразым, Аҡбуҙат.

Тигән һүҙен әйтте лә,
Иҙел һыуын алдырып,
Бер йотом һыу эсһә лә,
Яуҙа һуғышып, күп ерҙән
Талай* ҡаны аҡҡанға,
Мандый алмай Иҙеүкәй,
Йәлсей алмай Иҙеүкәй.
Илдең көнө батҡандай,
Буйын монар алғандай,
Илен етем ҡылғандай,
Ышыҡ булған Уралдың
Бер ҡаяһы ишелеп,
Ергә ҡолап төшкәндәй,
Иҙеүкәй, Иҙеүкәй, тип һөйөп,
Иле илап торһа ла,
Үлем һис тә аямай,
Иҙеүкәйгә ҡул һалды...

Иҙеүкәй үҙе әйткәнсә,
[Унының аҫыл] кәүҙәһен
Аҡ нарына аҫҡан һуң,
Нар ҡуҙғалып китте, ти.
Күп ҡая-тау үтте, ти,
Күп һыуҙарҙы кисте, ти.
Нарыҫ тауға килде, ти.
Шунда туҡтап уйланып,
Нарыҫ тауҙың итәге —
Бер түбәлә сүкте, ти.

Ҡобауҙағы* анаһын
Килеп һарыған бал ҡорттай,
Ете ырыуҙың барыһы:
Бисә-сәсә, балаһы,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро
Кәфендәге Иҙеүкәйҙе
Сыр-сыу һырып алды, ти.

Иҙеүкәйҙе күмгән һуң,
Моразым тороп барына
Үҙе һүҙен әйтте, ти[34].

*Моразым:*

— Иҙеүкәй үлде — ир үлде,
Ҡорт күсендәй ҡайнашҡан,
Уға ҡылыс ҡайрашҡан,
Ете ырыу йортомдо
Мең ат тартып еткермәҫ,
Ағиҙел йыуып бөтөрмәҫ,
Асы күлдән әсерәк,
Ҡара төндән ҡарараҡ
Ғөмөрлөк ҡайғы күмде...

Атам ҡәб(е)ре ҡашында
Ант итәмен, ер үбеп:
Иҙеүкәй үлде, ил ҡалды,
Ил барында, ир таймаҫ,
Ҡылыс болғап ҡулымда,
Ат уйнатып болонда,
Иҙеү булып илемә,
Дау астырмам илемә,
Яу баҫтырмам еремә,
Ағиҙелем кистермәм,
Көмөш һыуын эсермәм!
Энйе тешле, ай йөҙлө,
Сәсе иңен ҡаплаған,
Ерҙә көндәш тапмаған,
Аҡҡоштай аҡ күңелле,
Иҙел ҡамышы кеүек,
Зифа буйлы ҡыҙҙарҙың
Намыҫына кер төшөрмәм!

Ҡоҙғон һымаҡ талымһыҙ,
Шәр* һөлөктәй, затһыҙҙы,
Һайыҫҡандай, һанһыҙҙы,
Төлкө һымаҡ ике йөҙ,
Сауҙагәрҙәй ике тел,
Атанан берәгәй тыумаған,
Йортона терәк булмаған,
Кәкүктәй төйәк тапмаған;
Бытбылдыҡтай бытбылдап,
Оят белмәҫ һатлыҡты
Табында аш ейҙермәм,
Йылы кейем кейҙермәм!

Ай Уралым, Уралым, —
Ил һаҡлаған ҡоралым,
Ошо антымда тормаһам,
Илемә иҙеү булмаһам,

Ҡаяң ишелеп өҫтөмә,
Һөйәгемде онтаһын!
Емтегемде эт ейеп,
Талымһыҙ ҡоҙғон туҡланһын!

## 12. ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ

Көндәрҙән бер көн, Тәңренән туғыҙ йәшендә әүлиәлек бирелгән Баба Ғәзиз улы Баба Төкләҫ[1] ун алты йәшлек Иҙеүкәйҙең[2] уйға ҡалып ултырыуын күреп, улының аҡылын һынау өсөн:

— Ҡара әле, улым, һиңә бер йомаҡ әйтәм; һин шуның йәбешкеһен* (дөрөҫө — яуабын булырға тейеш. — *Ә. С.*) таба алалһаң, мин һиңә үҙ күңелеңә ярарҙай, донъяла иң матур ҡыҙ алып биререм, — ти.

*Баба Төкләҫ Иҙеүкәйгә әйтә:*

— [Күк] тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән бар микән?
Оҙон-оҙон, оҙон юл,
Осона сыҡҡан бар микән?
Арҡауылдың утынан*
Ат утлатҡан бар микән?
Тибенгеһен* тирләтеп,
Төндә юртҡан бар микән?
Ҡонан* ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән бар микән?
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бар микән?
Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән,
Ҡош та бөтөн бар микән?
Ер ҡуйынына кермәгән:
«Абау, бауырым!» — тимәгән,
Бауыры бөтөн бар микән?[3]

*Иҙеүкәй:*

— [Күк] тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр иткән — оҫталыр;
Оҙон-оҙон, оҙон юл,
Осона сыҡҡан — сауҙагәр;
Арҡауылдың өҫтөнән
Ат утлатҡан — каруансы;
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан — юлаусы;

Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән — һунарсы;
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған балыҡсы;
Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән,
Ҡош та булыр — торомтай*;
Ер ҡуйынына кермәгән:
«Абау, бауырым!» — тимәгән,
Бауыры бөтөн — бер Хоҙай, —

тип, яуабын әйтеп бирә лә, — атай, мин ҡыҙ алырға теләмәйем. Мин бөтә донъяны бер ҡат әйләнеп сығырға теләйем, — тип, атаһынан бөтә донъяны әйләнеп сығыуға рөхсәт һорай. Атаһы:

— Рөхсәт! — тип, Иҙеүкәйгә бер йөҙөк менән бер ай бирә лә. — Ошоларҙы үҙең менән тот, айырылма, хур булмаҫһың!.. — ти.

Иҙеүкәй атаһы менән бәхилләшеп, атаһы биргән атҡа атланып, алыҫ юлға сыға. Күп йылғалар, күп даръялар үтеп, көндәрҙә бер көн бер даръя ситенә килеп туҡырай. Ҡараһа, даръя ситендә донъяла оҡшашы, тиңе булмаған бер ҡыҙ һыу инеп, сәсен алдына алып, тарап ултырғанын күрә. Был ҡыҙ, Иҙеүкәйҙе күреү менән, ялт итеп, даръя төбөнә сума. Иҙеүкәй ҙә уның артынан арғымағы менән бергә һыуға сума. Күҙ асып күҙ йомғансы, арғымаҡ уны һыу төбөнә алып төшөп, балыҡ һөйәгенән һалынған бер һарайға алып керә. Иҙеүкәй, күҙен асып ҡарауға, үҙен һарай уртаһында күрә. Уның түрендәге алтын тәхет өҫтөндә сәсен тараған баяғы ҡыҙ ултыра. Ҡыҙ:

— Яныма кил, юлсы, ни йомошоң бар? — ти. Иҙеүкәй арғымағынан инеп,* ҡыҙ янына бара:

— Мин — Баба Төкләҫ улы. Атамдың рөхсәте менән мин, бөтә донъяны бер ҡат йөрөп әйләнеп сығыр өсөн, [юлға] сыҡтым, — ти. Ҡыҙ:

— Һин минең яланғас тәнемде күрҙең. Мин хәҙер Тәңремә гонаһлы булдым. Мине үҙеңә алып, минең гонаһымды юй, — ти.

Иҙеүкәй аптырауға ҡала. Ахырҙа, үҙен дә, ҡыҙҙы ла гонаһынан ҡотҡарайым тип, ҡыҙҙы үҙенә ала.

Ҡыҙ Иҙеүкәйгә әйтә:

— Тик минең шартым шул булыр: мин сәсемде тарағанда, һин башыма ҡарама; күлдәгемде һалғанда, тәнемә ҡарама; итегемде һалғанда, аяғыма ҡарама, — ти. Иҙеүкәй:

— Ярай, — тип күнеп, бергә тора башлай. [Көндәрҙә] бер көн* Иҙеүкәй, ҡатыны сәсен тарағанда, башына ҡараһа, [теге] түбә ҡапҡасын башынан алып, алдына һалып, сәсен тарап ултыра; күлдәк сискәндә, тәненә ҡараһа, ҡултыҡ аҫты тишек

булып, үпкә, бауырҙары күренеп ултыра; итеген сискәндә, аяғына ҡараһа, аяғы ҡыр кәзәһе аягы кеүек йөндө*.

Шул сағында ҡыҙ, Иҙеүкәйҙең күргәнен белә лә, Иҙеүкәйгә әйтә:

— Һин инде һүҙеңдә торманың — шартыбыҙ боҙолдо. Һин мине күрҙең — беҙ инде бергә тора алмайбыҙ. Инде, ваҡыты етеп, ҡорһаҡтағы балам тыуһа, уны был даръя ситенән эҙләп табырһың, хуш! — ти ҙә шунда [уҡ] күҙҙән ғәйеп була.

Иҙеүкәй, әлеге арғымағына атланып, даръя төбөнән үҙен алып сығырға тип, уға ишарат итә. Арғымаҡ даръянан сығырға һикерә — Иҙеүкәй, күҙ асып йомғансы, башлап даръяға сумған еренә килеп сыға. Шунан, ҡыҙҙан тыуасаҡ баланы эҙләп, даръя ситтәрендә йөрөй. Күп көндәр йөрөгәндән һуң, аҡ ебәккә уралған бер баланы табып, уның үҙ балаһы икәнен белеп, үҙе менән бергә алып китә.

[Иҙеүкәй] шул даръя янындағы бер халыҡ араһына барып, шунда йәшәй башлай. Ул ил Туҡтамыш хандың ҡарамағында була.

Иҙеүкәй фирасатлы* кеше булғанлыҡтан, уға бер-берәүҙән* йәберләнгән халыҡтар хөкөмгә килә башлайҙар. Халыҡ бының хөкөмөн бик ярата[лар]. Иҙеүкәй ил эсендә ҙур дан тота башлай[4,5].

Туҡтамыш хан[6] Иҙеүкәйҙең аҡыллылығын, батырлыҡ, сәсәнлеген ишетеп, [уны] үҙенә саҡырта. Уға үҙ эргәһендә бик ҙур дәрәжәләр биреп, өлкән хөкөмсө итеп ҡуя.

*Туҡтамыш хан:*

— Яурындары* таҡталы,
Төймә бауы тартмалы,
Ал, ҡара кис[7] тун бирәм
Уны өҫкә кей, — тине, —
Күк тарланды* мен, — тине. —
Тотар бауы* һум алтын,
Аҡ шоңҡар* ҡош бирермен.
Эйәр ҡашына* ултырып,
Күл әйләнә сөй, — тине. —
Көмөш ҡәмәр* бәйлә, — ти[не], —
Бар йортомдо әйлән, — ти[не], —
Ҡырымдан* күп яу килһә,
Уға ҡаршы бар,* — тине. —
Ал, Иҙеүкәм, ал*!» — тине.

Иҙеүкәй Туҡтамыш хан янында ҡала һәм улына хан һарайында ҙур туй яһап, Мораҙым* тип исем ҡуштыра.

Ошолай итеп, Иҙеүкәй, Туҡтамыш хан илендә ҙур хөкөмсө булып, ил эсендә даны таралып, уны бик ҙурлай башлайҙар.

Йылдар үтә, Туҡтамыштың бисәһе Иҙеүкәйҙең үҙ атаҡлығы* менән ханды күләгәлә ҡалдырыуынан шикләнә. «Көндәрҙә бер көн* Иҙеүкәйҙе хан итеп күтәрерҙәр», — тип, ҡурҡып ҡала. Иҙеүкәйҙе, ҡалай ҙа булһа, үҙенең иленән ҡыуҙыртыу иҫәбенә төшә. Шул турала хәйлә ҡора башлай. Хәйләнең беренсе аҙымы итеп, бер көн йоҡоһонан торғас, иртә менән Туҡтамыш ханға түбәндәгесә төш күргәнлеген һөйләй.

*Ханбикә:*

— Әй, оло хан, оло хан,
Бөгәсә* бер төш күрҙем,
Һиңә хәтәрле* эш күрҙем:
Ҡабырғала ҡан күрҙем,
Тибенгеңдән тир күрҙем;
Киң маңлайың, киң битеңдең
Йыйырылғанын мин күрҙем;
Туҫтағыңдай тулы күҙең
Йомолғанын мин күрҙем;
Ҡатып ҡалған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән соңҡаһы*,
Һөйәкһеҙ ҡыубаш күрҙем[8].

*Туҡтамыш хан:*

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡабырғала ҡан күрһәң,
Тибенгемдән тир күрһәң,
Ул ни булыр, бай бисәм, ау,
Ул ни булыр, бай бисәм? —

ти. Туҡтамыш хандың бисәһе был төшөн шулай юрай:

— Иҙеүкәй һинең башыңа етәсәк. Һин уны, ҡалай булһа ла, илеңдән ҡыуҙырт, йә берәр хәйлә ҡор ҙа [уны] үлтерт, юғиһә, үҙең юҡ булаһың, — ти. Туҡтамыш хан был «төшкә» ышана. Иҙеүкәйҙән ҡурҡа башлай. Үҙенең батырҙарынан уны үлтертмәксе була.

[Көндәрҙә] бер көн* үҙенең бөтә батырҙарын мәжлескә йыя. Шул мәжлестә Иҙеүкәйҙе үлтертергә уйлай. Иҙеүкәй үҙенең үҫмер [булып етешкән] улы Мораҙым менән мәжлескә килә. Уларҙы юрамал [кәҙерләгән кеше булып], маҡтап ҡаршы алалар. Иҙеүкәйгә иҫерткес эсемлектәр бирәләр.

Туҡтамыш хандың Ыласын тигән бер ҡоло була. Был Ыласын Иҙеүкәй менән бик дуҫ була һәм уны бик ярата. Ыласын был мәжлестә, Иҙеүкәй менән [уның] улын үлтереү өсөн, әҙерлек барғанды күрә лә, ҡунаҡтарҙың аттарының [башындағы йүгән], ауыҙлыҡтарын, өҙәңгеләрен[ең бауҙарын] ҡырҡып, Иҙеүкәйҙең Буҙтолпары менән үҙ атын[ың эйәр-өпсөнөн генә имен] ҡалдырып, мәжлескә керә.

*Ыласын Иҙеүкәйгә әйтә:*

— Табаны ялпаҡ* Буҙтолпар —
Төн ҡайтыуға, көн һиңә*,
Ҡара бөркөт ҡанатынан
Әҙерләнгән йөн һиңә [?].
Миңә ваҡыт көйләргә:
Һиңә ваҡыт һөйләргә;
Өҫтөңдәге ҡамҡа* туның —
Түрҙә ултырған бейҙәргә,
Минең атым Ыласын,
Минең көйҙө беләһең... —

ти. Был һүҙҙе ишетеү менән, Иҙеүкәй, эште һиҙеп — ҡапыл ырғып тора [килеп], бер аяғын тупһаға, икенсе аяғын Буҙтолпарҙың өҙәңгеһенә баҫып:

— Хуш булығыҙ! — тип, мәжлес менән иҫәнләшә* [лә өҫтөндәге туның уларға ырғыта]. Улар Иҙеүкәйҙе күрергә [лә] өлгөрмәйҙәр, улы Мораҙым да, уның артынан осҡан ҡош кеүек, күҙҙән юғала. Был эшкә Туҡтамыш хандың ғәйрәте килеп,* бөтә батырҙарын аяҡҡа ҡуҙғатып, артынан ҡыуғын сабырға бойора. Батырҙар, сығып, өҙәңгеһеҙ, ауыҙлыҡһыҙ аттарын күргәс, аптырашып ҡалалар. Туҡтамыш хан, [өр-яңынан] батырҙарының юл-ярағын күреп, Иҙеүкәйҙең башын киҫеп алып, үҙенә алып килергә ҡуша. Был эште үҙенең батырҙарынан Мөйтән бейҙең улы Бабсаҡ бейгә тапшырырға уйлай.

*Туҡтамыш хан Мөйтән бей улы Бабсаҡ бейгә:*

— Ҡуш, ҡуш бысаҡ аҫынған,
Ҡушлатып яндар* тағылған,
Күскәндә, күскә баш булған,
Илгә атын аттырған,
Солтанатын хан улынан арттырған,
Мөйтәндән тыуған Бабсаҡ бей,
Дошманға ҡаршы бар, — тине, —
Барып, йәнен ал! — тине.

*Юрматы улына:*

— Күскәндә, күсте һаҡлаған:
Йөрәгенә ышанып,
Муйынына һаҙаҡ таҡмаған;
Яу туҙанын күргәндә,
Яуға болоттай үкергән,
Юрматы улы ҡарағым*,
Ҡараңғыла сырағым*,
Бар, бауырым, барһана,
Дошманға ҡурҡыу һалһана!

*Ирҡарабай батырға:*

— Тамъяндарҙың башы һин,
Ир-Ҡарабай батырым,
Һин бер торҡып* тулғансы,
Булат ҡылыс ҡулға алсы! —

*Ҡара Ҡыпсаҡҡа:*

— Ҡараңғыла юл сыҡҡан,
Хөфөйәлә* һүҙ тапҡан,
Яурының киң, олпатлы,
Арыҫландай сифатлы,
Әҙәм телен алмаған;
Үҙ ырайы* булмаһа,
Ҡушыу менән йөрөмәгән,
Ҡара ҡыпсаҡ Ҡаҙанысым,
Һин бер тороп ҡуҙғалсы! —

*Ҡатай улы менән Табын улына:*

— Ҡарт арыҫландай, ҡашғарған,*
Күп ҙур эштәр башҡарған,
Көн дә һөңгө һындырған,
Һөңгөгә кеше мендергән,
Ил күңелен тындырған,
Алмаған яу ҡуймаған,
Эсһә, ҡанға туймаған,
Ҡатай улы — Тыуағым.
[Табын улы — Таяуым],
Икегеҙ берҙәй ҡуҙғалың,
Дошманымды ҡулға алың!

*Шәғәле улы Шаҡманға*[9]*:*

— Уғын ҡырҡ нарға* аҫтырған,
Батырлығын башҡанан арттырған,
Мәжлесемдәге иркә һин,
Кәңәшемдә урта һин,
Шәғәле улы Шаҡманым,
Дошмандарға бар, — тине, —
Йөрәктәрен яр, — тине.

Батырҙар[ҙың] берәүһе лә өндәшмәй: барыһы ла тик тора. Туҡтамыш хан аптырай [төшә]. Үҙенең алтын арбаһы менән аттарын ебәртеп, илдең иң өлкән кәңәшсеһе, атаҡлы Һабрау[10] йыраусыны саҡырта. Һүҙ оҫтаһы [тип ил эсендә дан алған, ил тышында һан алған] был йыраусы инде 195 йәшенә еткән булып, картлығынан аҫҡы ирендәре эйәгенә ҡайырылып төшкән [ул уны еп менән күтәртеп бәйләгән] була. Был Һабрау

йәшерен эштәрҙе лә белә торған ҙур һынсы булып, уны шулай ил башына ҙур [бәлә] төшкәндә генә, саҡырып алып, кәңәш һорай торған булғандар.

Һабрау килә. Уны бик ҙурлап ҡаршы алалар. Түргә ултырталар.* Туҡтамыш хан уға үҙ ҡулы менән бер алтын аяҡ* һары бал һона.

*Туҡтамыш хан:*

Һабрау килә, тинеләр,
Һабрау килә, тинеләр,
Һур* ауыҙлы, һур күҙле,
Сап иренле*, тинеләр.
Һай, тим, собар*, тим, собар,
Тибенге аттан тир сығар,
Аҡ мамыҡтан бүҙ сығар,
Аҡыллы ирҙән һүҙ сығар.
Йөҙ туҡһан биш йәшәгән,
Йәне, һөйәге ҡаҡшаған,
Ауыҙҡайын төҙәтеп,
Аҡ ебәк мән бәйләгән:
Һүҙҙе уйлап һөйләүсе,
Һәр бер эште көйләүсе,
Ил өлкәне Һабрау бей,
Кәңәш һиндә ҡалды инде.

*Һабрау йыраусы:*

Нуғай иле — ауыр йорт[11]
Йәйеү ятҡан ауыр йорт —
Бар Урҙаңды алыр ул,
Тәхетеңә ҡороҡ һалыр ул,
Алтындан һуҡҡан аҡ үрҙәк,
Көмөштән һуҡҡан аҡ ишек,
Төшһә, тимер суҡмары
Ишегеңде асыр ул,
Эй, хан-эйәм, хан-эйәм,
Ошо киткән Ҡобаһыр[15]
Илеңде килеп баҫыр ул;
Таж-тәхетеңдән айырып,
Түреңә түшәк һалыр ул;
Һылыуыңды, аямай,
Түш аҫтына алыр ул;*
Кирәгәнде* киртәр ул,
Киртеп утын итәр ул;
Табаныңды теләр ул,
Телеп, ҡылын һалыр ул[16],
Туҡһан бейле Аҡ Урҙаға[17]
Килеп хужа булыр ул;

Өйөр-өйөр малыңды
Туплап йыйып алыр ул:
Хур ҡыҙындай, күрекле,
Һандуғастай ирекле,
Ҡыҙыңды тартып алыр ул,
Ат өҫтөнә мендереп,
Алһыу йөҙөн һулдырып*,
Үҙенә улйә* итәр ул.
Шунда ла* ары киткән юҡ,
Иҙелдән* ары үткән юҡ —
Туғыҙ иреңде ебәр ҙә,
Алдап-йолдап, ҡашыңа ал,
Алдап-йолдап, ҡашыңа ал! —

тип, Һабрау баба кәңәш бирә. Туҡтамыш хан, элекке уйынан ҡайтып, туғыҙ батырын Иҙеүкәйгә илсе итеп ебәрергә, уны кире ҡайтарыу өсөн өндәргә уйлай.

*Туҡтамыш хан:*

— Эй туғыҙ ир, туғыҙ ир,
Миңә мөдәт* бирегеҙ,
Һеҙ туғыҙ ир Иҙеүкәйҙе
Ҡашыма алып килегеҙ!

Туғыҙ ир — туғыҙ батыр Иҙеүкәйҙе эҙләп артынан китә[ләр]. Иҙел ярына барып сығалар. Иҙелдең аръяғында ултырған Иҙеүкәйҙе күрәләр. Туғыҙы ла бармайҙар. Араларынан Янбай тигән батырҙы һайлап ебәрәләр. Янбай батыр Иҙеүкәй ҡаршына бара.

Аптырауға әйләнде,
Йыраусы ҡартым, йырла йыр,
Йырламаһаң, һынап бир!*

Һабрау ҡарт бик оҙаҡ һүҙ ҡайтармай, башын түбән һалып, уйланып ултыра, унан һуң Туҡтамыш ханға [кәңәш] һүҙҙәрен әйтә:

*Һабрау йыраусы:*

— Эй, ҡартыңмын, ҡартыңмын,
Күпте күргән ҡартыңмын,
Ни күрмәгән ҡартыңмын?
Башлыҡ та башлыҡ, Башыҡ хан,
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Унан һуңғы — Абылхан,
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Унан һуңғы — Алахан,
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Унан һуңғы — Ҡарахан,

Уны ла күргән ҡартыңмын;
Ун ике тотам уҡ тотҡан
Унан һуңғы ир — Сыңғыҙ[12],
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Оло бабам, Домбаул,
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Йәш тә булһа Ҡадирхан[13],
Уны ла күргән ҡартыңмын;
Йөҙ туҡһан бишкә килгәндә,
Ауыҙымда утыҙ тешем бөткәндә,
Сыҡмаған йән йөрөгәндә,
Минән дәуран* үткәндә,
Һеҙгә дәуран килгәндә,
Шунса хандар күргәндә;
Һинән киткән Иҙеүкәй бей —
Бер атанан яңғыҙ ул.
Ошо йәшемә еткәндә,
Быңдай ирҙе ғөмөрөмдә
Бер күрмәгән ҡартыңмын!
Артынан килеп һынаһам,
Сәһәрҙән пәйҙә булғандай,
Алдынан килеп һынаһам,
Ҡөҙрәттән пәйҙә булғандай.
Шул китеүҙән китер ул,
Сатмыр ханға[14] етер ул,
Сатмыр уға ҡул бирер,
Теләгенә юл бирер.
Ас арыҫландай, үкереп,
Ҡауғалап, һөрән һалыр ул,
Был ноғайлы ауыр йорт,

*Янбай батыр:*

— Ҡайт, Иҙекем*, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙекем*, ҡайтһана!
Ҡайт, бер Иҙел кисһәнә!
Иле өлкән Аҡ Урҙаға,
Иңкәйеп, сәләм бирһәнә!
Ап-аҡ алтын аяҡтан
Хан һарҡытын* эсһәнә!
Әнәкә менән Көнәкәнең[18]
Икәүһен берҙәй бирәләр,
Берәүһен һайлап ҡосһана!

Яурындары таҡталы,
Төймә бауы тартмалы,
Ҡара һыуһар тун бирә,
Уны өҫкә кейһәнә!

Аҫыл шоңҡар ҡош бирә,
Күл әйләнә сөйһәнә!
Алтын арба эшләтеп,
Өҫтөнә ҡамҡа* тышлатып,
Яу-ярағын эшләтеп,
Ҡара арғымағын бирә,
Солтан атҡа алһана!
Ҡолононда* имгән, арҙа имгән*,
Дүнәнендә* өйрәткән,
Ебәктән нуҡта һөйрәткән,
Бишлеһендә* биш бейәгә ебәргән,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә еткергән,
Етеп тә болан һуҡтырған
Ат бирә лә, алһана:
Эйәреңдең ҡашы алтын,
Йүгәнеңдең башы алтын;
Ҡолағын, беҙҙәй, ҡаҙаған,
Ялын, ҡыҙҙай, тараған,
Йүгереклеге һыналған,
Ҡуш йөрәкле һыналған,
Ҡуш йөрәкле яралған;
Аждаһа, йылан — үҙәге,
Башкүнәктәй* танаулы,
Атҡолаҡтай* иренле,
Һарымһаҡтай* аҙаулы,
Ут урынындай* тояҡлы,
Ҡыйғас, ҡамыш ҡолаҡлы,
Айғыр бөркөт ҡабаҡлы*,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы,
Ҡыҫҡа бәкәл, өкө аяҡ,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡуян йөнлө, боға күҙ*,
Ҡыҫҡа кикел*, тугай ял,
Табаны ялпаҡ, тарпан буҙ*
Йөрөк атты менһәнә!
Менеп, [бер] донъя гиҙһәнә!
Иле өлкән Туҡтамыш —
Эйелеп, сәләм бирһәнә!
Өйөрлө йылҡы бирә бит,
Бәйләп, ҡымыҙ эсһәнә!
Тәхет бүлеп бирә бит,
Бадишаһлыҡ ҡылһана!
Туҡтамыш хандың ҡыҙы,
Һағынды ла, һарғайҙы,
Һалҡын төшмән* барһана!
Һин — хан, ул ханса булып,

Шыбырлашып һөйләшеп,
Шыңғылдашып көлөшөп,
Иңбашынан ялғашып*,
Шәрбәт эсеп, серләшеп,
Дәуран ғөмөр* һөрһәнә!
Туҡтамыш хан — ҡарт атаң
Һиңә үпкә итә бит,
Үпкәң булһа ҙур ханға,
Үҙ ауыҙыңдан әйтһәнә!

*Иҙеүкәй:*

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Аҡылың да юҡ, юҡ, Янбай!
Мин ҡайтмамын, мин ҡайтмамын,
Ҡайтып [бер] Иҙел кисмәм мин,
Әнәкә менән Көнәкәнең
Берәүһен һайлап ҡосмам мин,
Табаны ялпаҡ тарпан буҙ
Ат бирһә лә, менмәм мин,
Ҡара һыуһар тун бирһә,
Уны ла өҫтөмә креймәм мин;
Суҡмар ҡулда булғанда,
Эйелеп, сәләм бирмәм мин;
Алла үҙе бирмәһә,
Кеше тәхетенә менә алмам,
Ир булып атҡа менгән һуң,
Бер юл алып йөрөгән һуң,
Ҡатындай булып ҡайтмамын,
Һәлпән-һөлпән йөрөрмөн,
Яңғыҙ [ҙа] булһа [ла], китәрмен.
Был киткәндән китәрмен,
Сатмырханға етәрмен;
[Сатмыр миңә ҡул бирһә],
Хоҙай тәғәлә юл бирһә,
Сатмырхандан көс алып,
Өҫтөмә тимер тун кейеп,
Илегеҙгә етәрмен,
Малығыҙҙы улйә* итәрмен,
Әнәкә менән Көнәкәне
Ул яй ҙа был яй итәрмен*!
Иҙән башы — ҡара иҙән
Ике араһына ҡунмаһам,
Түренә түшәк һалмаһам,
Илен алып, ҡыҙын [мин]
Түш аҫтына һалмаһам,
Тигәнемә* етмәһәм;
Туҡтамыштың һарайын,

Асыу менән асмаһам,
Ошо үсте алмаһам,
Тигәнемә етмәһәм*,
Әйткәнемде ҡылмаһам,
Иҙеүкәй атым ҡороһон!

Мин — миндер мин, миндер мин!
Мин — мин тигән ирҙер мин!
Дуҫымдың утын һүндермәм,
Дошманым утын яндырмам!
Асылын һорамай*, аш бирмәм,
Атаһын һорамай, дан бирмәм*!
Мин — миндер мин, миндер мин!
Мин — мин тигән ирҙер мин.
[Алыпҡа] бән тиңдермен!
Тауға оялағар шоңҡармын!
Тауҙы ҡырлай юртырмын!
Мин зәһәрҙән әсемен,
Шәрбәт ҡушылһа, сөсөмөн*.
Ҡарағайҙан бөткән тирәкмен:
Балта ла һалһа, айырылмам,
Имәнгә бөткән ботаҡмын

*Янбай батыр (Иҙеүкәй артынан йөрөп):*

— Ҡайт, Иҙекем, ҡайтһана!
Китеү уйҙан ҡайтһана!
Ҡамсы тейәр муйыныңа,
Ҡан һырғалыр муйыныңа.

*Иҙеүкәй:*

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Асма күҙең — тишәрмен!
Һөйләмә — телең өҙәрмен!
Башыңды бауҙай киҫәрмен!
Ҡаныңды һыуҙай түгәрмен![19]
Утауыңды* ауҙарып,
Орлоғондо тоҡом ҡылырмын*,
Уғыңды төтөн* ҡылырмын!
Табаныңды телеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуйыма көтөүсе итермен! —

тип (Иҙеүкәй) үҙенең [18] яраны менән, был ярҙы ташлап китә.

[Сатмыр] ханға ҡарай китеп барғанда, юлда был арға ҡырҡ бер батыр менән бер ҡыҙ осрай. Иҙеүкәй үҙенең форсаты менән* был ҡыҙҙың Сатмыр хан ҡыҙы икәнен, уны был батырҙар урлап алып китеп барғанын белеп, быларҙы туҡырата ла, уғын алып:

— Йә, йәнегеҙҙе бирегеҙ, йә урлаған ҡыҙығыҙҙы бирегеҙ! — ти. Былар Иҙеүкәйгә ҡаршы уҡтарын ата башлайҙар. Иҙеүкәй менән Мораҙым быларға ҡарап аталар. Мораҙымдың уғы икәүһенең кәүҙәһен үтеп, өсөнсөһөнә барып ҡаҙала. Иҙеүкәйҙең уғы ҡыҙҙы алған батырға тейеп, уны үлтерә. Башҡалары ҡыҙҙы ташлап ҡаса.

[Ҡотҡарылған] ҡыҙ Иҙеүкәйгә килә[20]. Иҙеүкәй ҡыҙҙы уғрыларҙан ҡотҡарыуы тураһында Сатмырханға сабар* ебәрә. Сатмырхан хәбәрҙе алып, Иҙеүкәйҙе ҙур хөрмәт менән ҡабул итеп, ҙур туй яһап, ҡыҙҙы Иҙеүкәйгә бирә. Уны үҙенә вәзир итеп ҡуя:

— Илемдә — дау, ҡырынан яу* булһа, Иҙеүкәй, һин бөтөр, — ти.

— [Була ул, — ти кейәүе].

Иҙеүкәй дауҙы бөтөрә, яуҙы ҡыра. Күп яуҙарҙа баш булып, Мораҙым ҙур дан тота. Сатмырхан быларға таянып, бер талай тыныс ҡына йәшәй.

Бер көн Мораҙым атаһына әйтә:

— Әй атай, беҙҙе Туҡтамыш хан әрләне лә, хурланы. Беҙ унан үсебеҙҙе алырға тейеш булып ҡалдыҡ. Дошмандан ҡурҡып, ситтә йәшәү — ирлек түгел, Туҡтамыш хан илселәренә биргән һүҙеңде онотма, — ти.

Иҙеүкәй был һүҙгә ғәйрәте ҡуҙғалып, шунда уҡ ҙур ғәскәр әҙерләп, бер урдыға* Мораҙым, бер урдыға* үҙе баш булып, Туҡтамыш ханға ҡаршы һуғышҡа китәләр.

Иҙеүкәй, һуғышҡа барғанда, төш күреп, төшөн ярандарына һөйләй.

*Иҙеүкәй:*

— Бөгәсә* бер төш күрҙем,
Алтын эйәр, аҡбуҙ ат,
Ялынан тотоп атландым —
Оса торған ҡош булдым,
Күккә табан остом мин.
Фириштә менән һөйләшеп,
Тур тауына[21] мендем мин,
Ул ни булыр, ярандар? — ти.

*Төш юраусы ҡарт:*

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Аҡбуҙ атҡа һин менһәң,
Мораҙыңа етәрһең;
Күккә табан һин менһәң,
Ил солтаны булырһың.
Тур тауына һин менһәң,
Ҡош итенә һин ҡунһаң[22],

Туҡтамыш тәхетенә менерһең дә,
Унын ҡыҙын ҡосарһың, — [ти].

Иҙеүкәй әйтә:

— Насип булып, Туҡтамышты еңһәк, уның тәхетен дә, ҡыҙын да Мораҙымға бирәм, — ти.

Туҡтамыш хан, быларҙың ҙур көс менән килә ятҡанын ишетеп, үҙ батырҙарының ҡаршы тора алмаҫын белеп, илен, тәхетен ташлап ҡаса. Мораҙым Туҡтамыш ханды ҡыуып етә.

Һарайҙа Туҡтамыштың Ҡәҙербирҙе Солтан тигән улы менән бер ҡыҙы[23] ҡалғайны. Ҡәҙербирҙе Солтан Иҙеүкәйгә әйтә:

— Әй, Иҙеүкәй, Туҡтамыш һарайы ҡулында сағында, улыңды ниңә көтәһең? Һеңлемде үҙең генә ал[24], — ти.

Иҙеүкәй, башта Туҡтамыш хандың ҡыҙын Мораҙымға алып бирмәксе булһа ла, Ҡәҙербирҙе Солтан әйткәс, уны көтмәй, ҡыҙҙы үҙенә ала.

Мораҙым Туҡтамыш хан артынан китеп, ахырҙан уны үлтереп, әйләнеп һарайға ҡайтһа, атаһы Иҙеүкәй Туҡтамыш хандың ҡыҙын уң ҡулы менән, Сатмыр хандың ҡыҙын һул ҡулы менән ҡосаҡлап ултырғанын күрә. Мораҙым, асыу менән ҡысҡырып, атаһына киҙәнеүгә, атаһының күҙе сыға.

Иҙеүкәй, был эштән бик ныҡ күңеле нескәреп, Мораҙымды ник тыуҙырғанына үкенеп, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтә.

*Иҙеүкәй:*

— Мораҙым да булһаң, булһана,
Егет дәүрең данлы һөрһәнә!
Болотҡа еткән Нарыҫ тауҙы[25]
Елебүк* үтһәң — үтһәнә!
Ай ҡашында бер йондоҙ
Саһарҙа[26] балҡып тыуһа ла!
Ҡағыҙалыр[27] был табын,
Ятҡа йоҫоҡ* булһана!
Шул теләк менән тыуҙырҙым,
Дүрт ҡырлап усаҡ өйҙөрҙөм,
Алтындан сүлмәк ҡойҙорҙом,
Хан ҡашында тыуҙы, тип,
Атыңды Мораҙым ҡуйҙырҙым.
Һин тыуғанда, Мораҙым,
Тыу бейәләр һуйҙырҙым,
Биленә ҡәмәр* быуҙырҙым.
Әй тыумағыр-тыумағыр*,
Һине ҡайҙан тыуҙырҙым!
Һин яманды тыуҙырып,
Ҡалҡай ҡамҡа* түшәттем,
Ҡалҡай ҡамҡа ҡаты, тип,
Ҡара кешегә[28] биләттем —

Ҡара кешенең эсендә*
Анасылар* хурлар тип,
Бауырыңды күтәртмәй*,
Биленә һаҙаҡ* ураттым.
Башлап ханды ҡыуҙырттым,
Хан урынына ултырттым,
Ҡартайған да көнөмдә
Үҙ башыма көс иттем.
Биләнсек* башы — биш тирәк,
Билгеле төйҙөң[29], Мораҙым.
Биш бейәгә бер ҡолон
Һин тилеҙең[30], Мораҙым
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағас
Ҡаҙ ҡундырҙың, Мораҙым.
Әҙәм етмәҫ ҡола сүл*
Ил ҡундырҙың, Мораҙым!
Ҡара һыуға ҡан ҡойҙоң —
Һыуҙы ҡайҙан эсәрһең?
Яҙғы ҡауға* ут һалдың —
Утты ҡайҙан утларһың?*
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың* —
Атты ҡайҙан менәрһең?
Ҡара ыласын ҡау иттең* —
Ҡошто ҡайҙан сөйәрһең?
Кәнизәктәр* инйеттең*,
Нугәр ҡайҙан ҡосарһың?
Ҡартайған көндә ҡарт бабаңдың
Ҡурыҙай* ҡыҙыл күҙен сығарҙың —
Яҙығыңды ҡайҙан йоларһың?

*Мораҙым:*

— Биләнсек башы биш тирәк
Билге төйәм — урт өсөн*,
Биш бейәгә бер ҡолон
Мин тилеҙем һөт өсөн;
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағас,
Әҙәм етмәҫ ҡола сүл*
Ил ҡундырҙым урт өсөн*;
Ҡара һыуға ҡан ҡойһам,
Һыу тоноғон эсәрмен;
Яҙғы ҡауға ут һалһам,
Үртен һайлап утлармын;
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менәрмен;
Ҡара ла [ы]ласын ҡыу итһәм,
Шоңҡар һайлап сөйәрмен;
Кәнизәктәр инйетһәм,

Күгәр һайлап ҡосармын;
Ҡартайған көндә ҡарт бабамдың
Күҙен ороп сығарһам,
Тәңре өйө оло Ҡәғбәне*
Ете әйләнеп, яҙығымды йолармын.

*Иҙеүкәй:*

— Алып[31] бейем солтаным
Үҙенән бер йәш ағаға:
«Һин беләһең, — тир ине. —
Бер әсәнән биш инек,
Атҡа атланып менгәндә,
Бер-беребеҙгә иш инек.
Атай-әсәй ҡашында
Һис төгәнмәҫ* кеше инек.
Алыҫ менән яуыҡты* юртҡан белер,
Асы менән сөсөнө тотҡан белер.
Аш ҡәҙерен әсә белер,
Һөт ҡәҙерен ата белер"[32].

Тауҙа булыр һарғыл таш,
Тарлыҡҡа ҡалһаң, [яңғыҙ],
Күҙҙәреңдән сығыр йәш;
Күкрәгеңә уҡ керһә,
Тартып алыр ҡәрендәш;
Ҡәрендәшең булмаһа,
Шунда ҡалыр яңғыҙ баш.

Болот та күсәр, ел ҡыуар —
Ер йөҙөндә үрт тыуар,
Ямғырҙар яуһа, ер йыуар;
Күк үләнле ерҙең һөтө мул,
Ҡыуарһа, ул утҡа өтөлөр.
Бер төкөргән ни итәр?
Күп төкөрһә күл итәр.
Күп менән эшең төшмәһен,
Күп эшеңде сукерер*,
Малыңды улйә, үҙеңде ҡол итәр,
[Ай вәләй, вәләй], вәләй!

*Мораҙым:*

— Мин тормамын, тормамын,
Атым башын бормамын.
Яманға юлдаш булмаһам,
Әҙерләнгән юлымдан
Туҡратмаһын Хоҙайым.

Мин баш эйеп йөрөнөм,
Ҡәҙеремде белмәнең,
Теләгемде бирмәнең,
Вәғәҙәңдә торманың.

Хуш, һау булың, ҡарт атам.
Ҡайта тупһа* баҫмамын.
Атамдың минән көлгәне —
Мораҙымдың үлгәне.

*Иҙеүкәй:*

— Ай беленер Көндән* һуң,
Көн беленер Айҙан һуң.
Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны.
Бейек тауҙың үлгәне —
Башын томан алғаны;
Ай менән Көндөң үлгәне —
Тонйорап барып батҡаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Баланан хурлыҡ күргәне —
Шулдыр атаның үлгәне.
Үлмәгәндә, ни үлмәй,
Яҡшының аты менән
Уның яҙған хаты үлмәй.

*Мораҙым:*

— Мин — ун йәшкә килгәндә,
Осар ҡоштай, талпынған;
Ун бер йәшкә килгәндә,
Яуға ҡаршы ҡалҡынған;
Ун ике йәш килгәндә,
Артымдан туҙан уйнаған,
Алдымда дошман илаған;
Ун өс йәшкә килгәндә,
Күп улйә алып, үҙенә мал иткән;
Ун дүрт йәшкә килгәндә,
Күп батырҙы ҡол иткән;
Ун биш йәшкә килгәндә,
Атаһы, уның һөйгәнен алып, хур иткән.

Төкләҫ улы түрәнең,
Иҙеүкәй улы мырҙаның*,
Бер ҡат бағы* һынған һуң,
Кире ҡайтыр уйы юҡ.

Ағың миңә кәрәкмәй,
Бағың* миңә кәрәкмәй,
Гәүер[33] баçһын иленде,
Дошман алһын еренде!
Был китеүҙән китәрмен,
Китеп Иҙел[34] кисәрмен,
Нарыç тауға етәрмен,
Шунда ғөмөр итәрмен.

*Иҙеүкәй:*

— Аҡ шоңҡарҙың балаһы
Бауҙа тора талпынып;
Баулы шоңҡарҙай талпынып
Ғәйрәт ҡунған һының бар,
Бәхетең китәр арҡылып.
Торомтайҙан* йылғыр ҡош булмаç,
Турғай ҙа тибеп, ҡаҙ алмаç.
Атҡынан* йөрөк* уҡ булмаç,
Атһаң, күбә боҙолмаç.
Бабһыҙ* булған аҡ толпар,
Сапһа ла, быуынын яҙа алмаç.
Тикһеҙҙән* тыумай тик батыр —
Яуға һөңгө һуҙалмаç.
Ҡарҡылланған ҡашҡалар*
Яу ситенә олашмаç*,
Арыçландай алышмаç,
Ҡыҙартып күҙен, ҡыҙалмаç.
Һөнәрһеҙ һине күрә алмаç.
Илдән илгә елебүк үтһәң дә,
Был донъялар һиңә ҡалмаç.

*Мораҙым:*

— Үҙән, Үҙән, Үҙән һыу —
Бабам ғөмөр иткән йорт;
Төйәләçтең[35] араһы —
Төйә* менән тулған йорт;
Ырыҡтының[36] араһы —
Йылҡы менән тулған йорт,
Бейә һауған һөтлө йорт,
Ҡымыҙ эскән ҡотло йорт;
Өҙөкләп һуҡҡан һум тимер
Миңә хәнйәр булған йорт,
Ынйы-мәрйен таҡҡан йорт,
Аҡбуҙатҡа менгән йорт,
Атам-әсәм тыуған йорт,
Ун ике ырыуҙы йыйған йорт,
Өлкән бер туй ҡылған йорт.

Ултыра инек, яйлашып,
Ҡолон бейә бәйләшеп,
Һауыт-һаба тултырып,
Ҡәрҙәш йыйып ултырып.
Дәүрән* гөмөр һөргән йорт,
Әләман бул*, мин китәм.
Боронғолай ҡаршылап,
Ҡуналманыҡ ҡыуышта,
Килә алманыҡ килешкә*,
Ата-ананы шунда ҡалдырып,
Киткәнбеҙ ят йортҡа.

Был барғандан барырмын,
Үҙ илемдә урын алырмын,
Дошманды ҡырҙа табармын,
Яуға ҡаршы сабармын;
Үтенеп алып, ут яҡһам,
Юлымды Тәңре уңдырһа,
Ҡәҙербирҙе солтанды
Мин ҡалдырмам тәхеттә.
Бөтә йыйған малдарын
Килеп улйә ҡылырмын! —

тип, атына атланып, үҙ урҙаһына:

— Атамды теләгәндәр бында ҡалһын, мине теләгәндәр минең менән барһын! — [тигән]. Шунан[17] батыр Мораҙымға ҡушылып китә[ләр]. Иң элек Ҡәҙербирҙе солтан урҙаһына йөрөп, уны барып баҫалар. Мораҙым Ҡәҙербирҙе солтанға әйтә:

*Мораҙым:*

— Мин — мин инем, мин инем:
Ат өҫтөндә булғанда,
Үкереп торған ир инем;
Яҡшыларға йоб* инем,
Ямандарға күп инем.
Әжәл менән аңлашҡан
Мин: «Үлем юҡ», — тир инем.

Хан балаһы — аҡ һөйәк,
Ата дошман — һин инең.
Аңдыған яуың — мин инем:
«Ҡайһы [бер] ерҙә турылап,
Ҡанын ҡойһам!» — тир инең.

Мин — мин инем, мин инем:
Дошманға ҡаршы торғанда,
Уҫал арыҫлан инем;
Ҡай батырҙан кәм инем?

Бары менән тиң инем,
Ир әйҙәгән ир инем:
«Көндәрҙең көнө булғанда,
«Ир ҡоллаһам», — тир инем. —
Нуғайҙарҙың иленә
Ирекһеҙ керһәм, — тир инем. —
Иҙелдәй ятҡан ҙур илгә
Мал тултырһам, — тир инем. —
Ниндәй залим хандарҙы,
Ҡарыны йыуан бейҙәрҙе,
Айыуҙай тауышын аҡыртып,
Ҡатын-ҡыҙын баҡыртып,
Улйә ҡылһам, — тир инем. —
Ҡабырғаһын һындырып,
Буйынан аҡҡан ҡара ҡан
Ат бауырынан түгелеп,
Ҡанынды эсһәм», — тир инем.
Бүленә үҫкән* иленде
Өрккән ҡуйҙай итәрмен;
Айыры ла үҫкән* иленде
Айырылған ҡуйҙай итәрмен!

Ҡәҙербирҙенең илен туҙҙырып, үҙенең батырҙары менән берлектә, бабаһы Баба Төкләҫ йорто булған Дим буйына китергә була.

*Мораҙым:*

— Айҙан яҡты нәмә юҡ,
Ҡара болот баҫмаһа;
Әҙәм ғәрибе шул булыр —
Ҡайтып илен тапмаһа.
Киң яурынды уҡ алмай,
Атҡан уғым юғалмай.
Мин барамын, барамын.
Үҙ илемде аламын.

Балтырғаны беләктәй,
Һарнаһы* алма-еләктәй;
Йылғаһы көмөш улаҡтай,
Балығы һимеҙ ҡурҙаҡтай,
Ағасы айҙай күренгән,
Япрағы ергә түгелгән,
Ботағы көмөш алҡалай,
Япраҡтары ҡалҡалай*;
Атам кейәү булған ер,
Анам килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Ҡолонсаҡ айғыр булған ер,

Ятып ҡалған бер бәрәс
Мең ҡуйға үрсегән ер.

Быларҙы Иҙел ҡараған,
Өйөрө буйға таралған,
Балығы айғырҙай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған;
Ун ике йортто һуғарған,
Һыуы түмен һалмаған,
Эсмәгән йән ҡалмаған,
Яйыҡ, Иҙел, Димдәрҙең,
Һаҡмар, Эйек, Эйҙәрҙең —
Атам[барын] мәкан* иткән ер.

Атам торған бейек тау —
Бабам Төкләс һарайын.
Иҙелдә тороп уҡ атһа,
Яйыҡҡа барып юғалған;
Үҙе тауҙа ултырып,
Ун ике бейҙе үлтергән;
Ун ике бейҙе үлтергән,
Тигәненә еткергән*.
Табаны ергә теймәгән,
Толпарҙан башҡа ат менмәгән.
«Хөрмәтләшкән дуҫымда
Артығым китте», — тимәгән.
Баба Ғөмәр атайҙан,
Әүлиә Төкләс бабайҙан
Дәүран ғөмөр һорарбыҙ.

Шулай итеп, Мораҙым үҙенең батырҙары менән бергә Иҙелгә ҡойған Дим һыуы буйындағы Нарыҫ тауы тирәһенә китеп урынлаша[лар]. Мораҙым шул тирәләге 12 йорт башҡорт менән нуғай иленең ханы була.

Унан һуң Мораҙым йәй йәйләп, ҡыш ҡышлап, һунар сығып, ҡош атып, ау аулап, йылҡы бәйләп*, ун ике йорт биләп, көн итә башлай.

Мораҙымдың Ҡаҙанҡап исемле бер улы була. Берҙән-бер көндө әсәһе Ҡаҙанҡапты һуғып илата. Мораҙымдың быға бик асыуы килә.

Бисәһе Мораҙымға әйтә:

— Атаңа ни ҡылһаң, алдыңа шул килер. Һин атаңа ни күрһәтмәнең, был беҙгә ни күрһәтмәҫ! — ти.

Шул һүҙ менән Мораҙымдың үҙ атаһы, уға күрһәткән эштәре, йолонмаған яҙыҡтары иҫенә килеп төшә. Шунан һуң юл кәрәк-яраҡтарын күреп, йыраҡ юлға сыға. Иң элек Тәңре өйө Ҡәғбәгә барып, уны ете әйләнеп, яҙығын йолағас, атаһы янына килә, унан бәхиллек һорай. Мораҙымдың яҙығы йолоноп, ҡылған доғаһы ҡабул булып, атаһы ҡарт Иҙеүкәйҙең һуҡыр

күҙҙәре асылған була. Иҙеүкәй Мораҙымға бәхиллеген биреп, Мораҙым уны үҙ иленә алып ҡайтып, бергәләп йорт биләйҙәр. Иҙеүкәй Мораҙымдан бик риза була...

*Иҙеүкәй:*

— Мораҙым да булһаң, булдың һин,
Егет дәүерен данлы һөрҙөң һин,
Болотҡа еткән Нарыҫ тауҙы
Елебүк тә елебүк үттең һин!
Ай ҡашында бер йондоҙ
Саһарҙа* балҡый тыуҙың һин!
Ҡағыҙалыҙыр был табын
Ятҡа йоҫоҡ булдың һин! —

ти.

Иҙеүкәй оҙаҡ тормай, үлеп, Нарыҫ тауҙың битенә күмелә. Мораҙым, атаһы үлгәндән һуң, Төйәләҫ буйына килеп үлә. Уның ғүмер иткән тауы бөгөнгө көндә лә Мораҙым тауы тип атала. Мораҙым тауы Йылайыр кантоны Төйәләҫ һыуы буйында, Төрөкмән ауылы менән Тәпән ауылдары араһында булып, ошо тау башындағы зыярат — ана шул Мораҙым хан зыяраты тиҙәр. Һәм тирә-яҡтағы башҡорттар шул тауға ҙур хөрмәт менән ҡарайҙар.

Иҙеүкәйҙең күмелгән Нарыҫ тауы Дим буйы, Миәкә ауылы янындағы ҡуш тау булып, уның зыяратынын шишмә сығып, ағып ята, ти. Халыҡ шул шишмәне, әүлиә кендегенән ағып сыҡҡан һыу, имеш, бик күп ауырыуҙарға шифа, имеш, тип һыуынан файҙалана, ти.

## 13. ХАНБИКӘНЕҢ ТУҠТАМЫШ ХАНҒА ИКЕНСЕ ТӨШӨН ҺӨЙЛӘГӘНЕ

*(Эпостан өҙөк)*

*Ханбикә:*

— Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Әй төш күрҙем, төш күрҙем;
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем;
Ут яғалай шеш күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем;
Шеш башында ит күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем;
Йыйырылған ҡойоҡалай,
Йыйырылған ҡойоҡалай,
Ҡарайып көйгән соңҡаһы*,
Ҡарайып көйгән соңҡаһы;
Имәнесте баш күрҙем,

Имәнесте баш күрҙем,
Ау, баш күрҙем.

*Туҡтамыш хан:*

— Эй, төш күрһәң, төш күрһәң,
Эй, төш күрһәң, төш күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң;
Ут яғалай шеш күрһәң,
Ут яғалай шеш күрһәң;
Шеш башында ит күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң;
Йыйырылған ҡойоҡалай,
Йыйырылған ҡойоҡалай;
Ҡарайып көйгән соңҡалай,
Ҡарайып көйгән соңҡалай;
Имәнесте баш күрһәң,
Имәнесте баш күрһәң,
Үҙ башыңа, ҡарт убыр,
[Үҙ башыңа, ҡарт убыр][1],
Һыу йоҡмаҫ ҡыу баш убыр!..

## 14. ИҘЕКӘ МЕНӘН ЖАНБАЙ, ТУҠТАМЫШ МЕНӘН ҠЫҘҒАТАУ ҠОШ

*(Эпостан өҙөк)*

**[Жанбай менән Иҙекәнең әйтешкәне]**
Жанбай шунда һөйҙәҙе,
Һөйҙәгәндә был тиҙе:

*Жанбай:*

— Ҡайт, Иҙекем, ҡайтһана,
Ҡайт, Иҙекем, ҡайтһана;
Ҡайтып, бер Иҙел кисһәнә,
Һар аяҡты* һары балды
Һарҡытып уҡ эсһәнә!
Ғәнәкә менән Тутайҙың
Икәүһен берҙәй бирә лә,
Берәүһен һайҙап* ҡосһана!
Ат бирә лә — менһәнә!

Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын;
Ҡолононда* имгән, тайҙа* имгән,
Ҡонанында арҙа* имгән,
Дүнәнендә* өйрәткән,
Ебәктән нуҡта һөйрәткән;

Бишлеһендә* биш бейәгә ебәргән,
Алтыһында ат иткән,
Етеһендә еткергән,
Етеп тә болан һуҡтырған;
Ут урынындай* тояҡты,
Айғыр бөркөт ҡабаҡты*,
Ҡыҫыр йылан тамаҡты,
Ҡыҫҡа бәкәл, өкө аяҡ,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡуян йөнлө, бута* күҙ,
Ҡыҫҡа кикел, туғай ял
Ат бирелә менһәнә!..

*Иҙекә:*

— Кит, кит, Янбай, кит, Янбай!
Аҡылың дау юҡ, юҡ, Янбай,
Ҡайтып, бер Иҙел кисмәм мин;
Ғәнәкә менән Тутайҙың
Икәүһен берҙәй бирһә лә,
Берһен һайҙап ҡосмам мин!..
Был барғандан китәрмен,
Был барғандан китәрмен,
Сын Тимер ханға етәрмен;
Сын Тимер хан ҡул бирһә,
Хоҙай тәғәлә юл бирһә,
Сын Тимер хандан көс алып,
Әнекә менән Күнәкәне
Ал яй ҙа был яй итәрмен*,
Башыңды бауҙай киҫәрмен,
Ҡаныңды һыуҙай түгәрмен,
Утауыңды* ауҙарып,
Турылығыңды туҡым ҡылармын!..
Сағрағыңды һындырып,
Уғыңды* утын ҡылармын;
Табаныңды телеп, ҡыл ҡуйып,
Ҡуй күтенә һалармын!..

[Иҙеүкәнең ҡасып, ҡамҡалы* күл* ҡамышына йәшенгән Туҡтамыштың үҙен туралап һауалаған ҡыҙғатау ҡошҡа әйткәне]:

Ҡыҙғатау тигән [ҡыҙыл] ҡош,
Ҡанатың да муйының буш.
Ҡамсы(лау) етәр муйыныңа —
Ҡан сорғолор ҡуйыныңа[1].
Һин дә айырылырһың күлеңдән,
Мин дә айырылдым күбемдән*,
Күбемдән, ай, күбемдән.

## 15. ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМДЫҢ ӘЙТЕШКӘНЕ

*(Эпостан өҙөк)*

*Бабаһының* әйткәне:*

— Мораҙымдай булһаң булһана,
Егет дәүерен данлы һөрһәнә:
Болотҡа еткән Нарыҫ тауҙы
Елеп үк тә үтһәң үтһәнә.
Ай ҡашында бер йондоҙ
Чәһарҙа* балҡый тыуһана.
Ҡағиҙәлелер был табын,
Ятҡа ла юҫыҡ булһана.

Бер Алланың ние юҡ,
Бер Хоҙайҙың ише юҡ.
Бер алты айҙы йәй иткән,
Бер алты айҙы ҡыш иткән;
Ап-аҡ, ап-аҡ йоморҡаны
Һауала осор ҡош иткән.

Биләнсек башы биш тирәк,
Билге ҡуйҙың, Мораҙым,
Биш бейәгә бер ҡолон
Һин теләнең*, Мораҙым.
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағас
Ҡаҙ ҡундырҙың, Мораҙым,
Әҙәм етмәҫ ҡола сүл
Ил ҡундырҙың, Мораҙым.
Ҡара һыуға ҡан ҡойҙоң,
Һыуҙы ҡайҙан эсерһең?
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Атты ҡайҙан менерһең?
Ҡара ыласын ҡуйыттың*,
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Кәнизәктәр ынйыттың,
Нөкөр* ҡайҙан ҡосорһоң?
Ҡартайған көндә ҡарт бабаңдың
Ҡорҙай ҡыҙыл күҙен ороп сығарҙың.
Күңелен алмай китһәң бында,
Яҙығыңды ҡайҙан юлларһың*, әй!

*Мораҙымдың яуабы:*

Биләнсек башы биш тирәк,
Билге ҡуйһам — йорт өсөн,
Биш бейәгә бер ҡолон
Мин теләнем һөт өсөн.
Ҡаҙ ғына ҡунмаҫ ҡарағас
Ҡаҙ ҡундырҙым ит өсөн,

Әҙәм етмәҫ ҡола сүл
Ил ҡундырҙым йорт өсөн.
Ҡара һыуға ҡан ҡойһам,
Һыу тоноғон эсермен;
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менермен.
Ҡара ыласын ҡуйытһам,
Шоңҡар һайлап сөйөрмөн.
Кәнизәктәр рәнйетһәм,
Нөкөр һайлап ҡосормон.
Ҡартайған көнөндә ҡарт бабамдың
Күҙен ороп сығарһам,
Тәңре өйө — оло Ҡәғбәне
Ете әйләнеп, яҙығымды юллармын, әй!

*Бабаһының әйткәне:*

— Һин яманды тыумаҫтан борон тыуҙырып,
Ҡалҡай ҡама түшәттем.
Ҡалҡай* ҡама ҡаты тип,
Ҡара кешкә биләттем.
Ҡара кештең эсендә
Анасылар* хурлар тип,
Бауырыңды күтәрмәй,
Биленә һаҙаҡ ураттым, әй!
Башлап ханды ҡыуҙырттым.
Ҡартайған көнөмдә
Үҙ башыма көс иттем, әй!

## 16. ИҘЕҮКӘЙҘЕҢ МОРАҘЫМҒА ҮПКӘЛӘГӘНЕ ЙӘКИ «ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ» КӨЙӨ

*(Эпостан өҙөк)*

XX йөҙ йыллыҡтың 70-се йылдарында күренекле музыка белгесе Фәрит Хаснулла улы Камаев (1944—1993) Баймаҡ районы Өмөтбай ауылында йәшәүсе 70—80 йәштәрҙәге Ғүмәров Хәләфтән яҙып алынған // Мәшһүр ҡурайсы Юлай Ишбулды улы Ғәйнетдиновтың шәхси фондынан. Нотаға Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклор һәм сәнғәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре, музыка белгесе Лилиә Сәлмәнова һалды.

[Кәләшен атаһынан ҡыҙғанып, Мораҙым уның күҙен сығара һуҡҡан. Шунан Иҙеүкәй улына рәнйеп, әйтер һүҙен былай тип әйткән].

*Иҙеүкәй:*

— Мораҙымдай булһаң булһана,
Болотҡа етмәҫ арыҫтай,

Аны ла үтһәң, үтһәнә...
Торомтайҙан йөрөк ҡош булмаҫ,
Атҡыс уҙған йөрөк уҡ булмаҫ...

Алыҫ менән яҡынды юртҡан белер,
Аш ҡәҙерен [аш бешергән] ана белер,
Һөт ҡәҙерен [аны биргән] тана белер.
[Дала ҡәҙерен ҡолансәсле ҡолан белер,
Ата ҡәҙерен атай булған улан белер],
Үҙе килеп, үҙе киткән сығыр солтан
[Килеп, китә белмәгәне булыр шайтан].

Ҡарлуғас ҡунмаҫ ҡаҙыҡҡа
Ил ҡундырҙың, Мораҙым,
Биш бейәгә — бер ҡолон,
Һин тилеттең, Мораҙым.
[Ҡарт көнөндә атаңды
Һин хур иттең, Мораҙым]!

*[Шулай тигән дә өҫтәп ҡуйған]:*
Ҡартайған көндө ҡарт атаңдың
Күҙен, ороп, сығарҙың,
[Яҙығыңды үҙең таныл,
Ахырында иларһың.
Яҙығыңды, ҡартайғас,
Күҙ-йәш менән йыуырһың].

*Мораҙым:*

— Тәңрем [ҡушҡан яҙыҡмы
Яҙыҡмы, ау, яҙыҡмы]?
Яҙығымды [шулай булғас,
Йыуармынмы, йыуармынмы]?

Бына шулай тип яуап биргән Мораҙым.

*Иҙеүкәй:*

— Күпте күргән күп беләр,
Күп төкөрһә, күл итәр,
Аҙҙы күргән ней беләр,
Аҙ төкөрөп, ней итәр?
«Күререң, балам, алда әле»,
[Һинең дә бар балдар], —

тимәксе булғандыр инде. Атай күп итеп һөйләй торғайны.

[Шул Иҙеүкәй менән Мораҙым заманында] Бүкәй (Тимеркәй) хан менән Сәмерә [Сымыра, Сытмыр] хан тора уҡ-һаҙаҡ менән [яу асышып үҙ-ара]. Күп ине. Тарҡалып бөткән. Теҙеп алып китеп булмай...

# ИҘЕҮКӘЙҘЕҢ МОРАҘЫМҒА ҮПКӘЛӘГӘНЕ

[Кәләшен атаһынан ҡыҙғаныи, Мораҙым унын күҙен сығара һуҡҡан. Шунан Иҙеүкәй улына рәнйеп, әйтер һүҙен былай тип әйткән.]




Нотаға Рәсәй фәндәре академияһының Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, музыка белгесе *Лилиә Сәлмәнова* һалды. Компьютерҙа *Азат Сәлмәнов* йыйҙы.

## 17. АҠАЙ ЯУЫ

Ҡолһары бәктең[1] кәңәше менән, урыҫтар Ҡариҙел [Өфө) йылғаһы тамағында ҡала ҡороп, уны Өфө тип атанылар. Илдән йыйылған яһаҡты шул ҡалаға илтеп тапшырыр булды халыҡ.

Дим йылғаһы тамағына табан Бәрһеүән йылғаһы буйында дүрт юлдан килгән башҡорт халҡы вәкилдәре йыйынға йыйылды[2]. Ул йыйында абруйлы аҡһаҡалдар, һыналған ир-азаматтар кәңәшләшеп, шундай берҙәм фекергә килде: урыҫтарҙың башҡорттарға ҡарата уй-ниәттәрен, әҙерләнеүҙәрен белер өсөн, алғасҡы ойоштороорға. Төп етәкселек эше Түләкәй улы Күсемгә[3] тапшырылды.

*[Сәсән һүҙе:*

«Дим тамағына табан
Дүрт тараф — даруғанан

Бәрһеүәндең буйына
Оло йыйын йыйыла.
Һүҙ тотҡан аҡһаҡалдар,
Аҡыллы азаматтар
Кәңәш-төйөш иткәндәр,
Уртаҡ серҙәр сискәндәр,
Кем ни уйлай, белгәндәр,
Бер фекергә килгәндәр:
Йәшерен генә әҙерләп,
Алғасҡы тәғәйенләп,
Араһына керергә,
Дошман серен белергә,
Бар эште йөкмәтергә
Түләкәй улы Күсемгә»].

Күсем дәүерендә башҡорттарҙың бәлә-ҡазаларға һәм ҡыҫым-йәберҙәргә тарығаны юҡ ине. Уның заманында урыҫтар үҙ урҡәлгәләренән арыға үтеп инергә ҡыймай торғайны. Күсем батыр бөтә дүрт юл башҡорттарының хөрмәт һәм абруй ҡаҙанған заттарынан ине.

Ҡазан сыуаштары, сирмештәр, мордва һәм уржум халыҡтары, урыҫтар иҙеүенә түҙә алмайынса, башҡорттарға килеп һыйыныр һәм ҡотолор булды. Кенәгәгә улар башҡорт булып яҙылды һәм береһе лә урыҫтарға кире әйләнеп ҡайтманы. Башҡорттар араһында улар хәҙер бик күп, үҙҙәрен башҡорт тип күрһәткәнлектән, уларҙы ерле халыҡтан әллә ни айырып та булмай[4].

Түләкәй улы Күсемдең йорт-ере Минзәлә ҡалаһынан 50—60 саҡрымдар самаһы ғына[5]. Уның заманында дүрт юл халҡы бер фекерҙә булды, башҡа фекер юҡ ине. Бөтәһе үҙ старшинаһын тыңланы, ни өсөн тигәндә, башҡорттар ул дәүерҙә бик иркен йәшәне. Урыҫтар һүҙенә ҡолаҡ һалманылар, хәҡиҡәт өҫтөн йөрөнө, алдашыу булманы. Аллаһы тәғәлә бөтөн бәлә-афәттәрҙән һаҡланы.

Түләкәй улы Күсембәттең өс улы бар ине: береһе — Ахта, ул уҫал бер иҙеүсе ине; икенсеһе — Аҡай, урыҫ ҡулына тотҡон булып әләкте; өсөнсөһө — Сыуаш, һуңғыһы күҙгә салыныр кеше булманы. Сыуаш бисәһенән тыуғанлыҡтан, үҙен Сыуаш тип атанылар[6].

*[Сәсән һүҙе:*

«Түләкәйҙән — Күсембәт,
Күсембәттән китә зат;
Береһе Ахта ине,
Һәр эшкә оҫта ине,
Уҫал ине булмышы,
Ял бирмәне йәй-ҡышын.

Йәшенә, ҡартына ла,
Ҡарамай артына ла,
Мал йыйыуын белде ул,
Ит ейеүен белде ул,
Ҡаҙы ялдар кимереп,
Буҙа, ҡымыҙ һемереп,
Бурһыҡ һымаҡ һимереп,
Йөрөнө ҡорһаҡ киреп;
Бер улы Аҡай ине,
Уны гел маҡтай ине,
Күреп белгән һәр әҙәм,
Ишеткән көллө ғаләм;
Абруйлы ир ине,
Арбар һүҙле бер ине,
Бер атанан булһа ла,
Бер әсәнән тыуһа ла,
Ахта, Аҡай — ике ул
Булған шул ике фиғел.
Өсөнсө улы Сыуаш
Булды үтә лә йыуаш.
Әгәр ҙә әйтһәк баштан,
Тыуғайны ул сыуаштан.
Сит ҡан ҡатнашҡанғамы,
Ул бик үк ҡатнашманы
Өлкән ағайҙар менән
Ахта, Аҡайҙар менән»].

Бер һүҙ менән әйткәндә, эш шунда — Күсембәт[7] үлгәндән һуң бик йылғыр ҡараҡтар Аҡайҙың йылҡыларын урлай. Уғрылар Ҡазан сыуаштары була. Ирнә йылғаһы буйындағы Ураҙ ауылы янында Аҡай уларҙы ҡыуып етә. Былар Аҡай ҡулына эләкмәҫ өсөн, ҡылыс һәм уҡтары менән ҡаршы тора. Аҡайҙың бойороғо менән уғрыларҙың барыһы ла ҡырып бөтөрөлә. Ләкин нисектер ҡотолоп ҡалған береһе Минзәләгә барып, Аҡай өҫтөнән шикәйәт бирә. Унда, Аҡай ҙур отряд менән килеп, ауылдың тыныс халҡын ҡырҙы, талап, бөтә әйберҙәрен алып китте, тип яҙылған була. Был хәбәрҙе урыҫ кенәзенә еткерәләр. Кенәз сиреү туплап, Аҡайға ҡаршы сыға. Сиреү башлығы итеп Румянцев[8] ҡуйыла. Эште аҙағынаса еткереү өсөн, Аҡай ауылын ҡамап ала һәм үҙен ҡулға төшөрә[9]. Бынан һуң Аҡайҙы бер кемгә күрһәтмәйҙәр. Берәүҙәр, уны аҫҡандар икән, икенселәр, ҡамсы менән туҡмап үлтергәндәр, имеш, ти. Аҡайҙы тотоу хәбәре тиҙ тарала. Үҙенекеләр ҙә, тегеләр ҙә был хаҡта төрлөсә һөйләй.

Халыҡ кәңәшкә йыйылды[10]. Һәр ырыуҙан, ҡаңлы һәм ҡыбауҙарҙан башҡа, вәкилдәр килгәйне. Килмәгәндәр яу сығыуға ҡаршы ине. Шунан һуң йыйылғандар тыу күтәреп: «Һеҙ яуға

күтәрелергә әҙерме?» — тип ҡысҡырҙы. Шунан тегеләр теләр-теләмәҫ кенә былар сафына ҡушылды. Был йыйында бүкәтин (бәкәтин), ҡыпсаҡтар, тамъяндар, бөрйәндәр, быҫҡаҡтар (пскак), урандар, каршиндар, ҡоролар, ҡыбауҙар, ҡарайҙар (ҡарағайҙар), сорандар, өс төркөм ҡырғыҙҙар, дүрт төркөм йыланлылар[11] һәм башҡалар бар ине. Һәммәһе аңлашышып, яуға әҙерләнде. Әлбиттә, улар араһында ғәййәр батырҙар, тәжрибәле аҡһаҡалдар, ғилемлеләр ҙә бар ине. Был йыйынға улар араһынан — быҫҡаҡтарҙан — Уразман батыр, тамъяндарҙан — Сәлим батыр, йыландарҙан — Абдулла батыр, байларҙан Килмәк абыз ише атаҡлы батырҙар килгәйне, барыһы ла бер фекерҙә ине[12].

Йыйындан һуң урыҫтарға хат менән бер илсе ебәрергә ҡарар ҡылдылар. Унда шулар яҙылғайны: «Рәхимле вә ҡөҙрәтле Алла исеменән башлайбыҙ. Беренсенән — беҙгә Күсем улы Аҡайҙы ҡайтарып бирегеҙ, икенсенән — үҙегеҙ Минзәлә ҡалаһына кире ҡайтығыҙ һәм сиктең был яғына сыҡмағыҙ!.. Әгәр беҙҙең был талаптарҙы үтәмәһәгеҙ, Аллаға тапшырып, һеҙгә яу асабыҙ».

Урыҫ башлығы: «Миңә Яйыҡ йылғаһына үтергә юл бирегеҙ!.. Мин унда бөйөк падишаһыбыҙҙың бойороғо буйынса ҡала төҙөргә урын эҙләргә тейешмен, — тип яуап бирҙе. — Унан һуң беҙ һеҙгә Аҡайҙы ҡайтарырбыҙ. Шуғаса ул беҙҙә, урыҫ араһында, ҡала әлегә».

Был яуаптан һуң ололар һәм кеселәр, уҫалдар һәм мәрхәмәтлеләр, уҡымышлылар һәм ҡара халыҡ — һәммәһе тағы йыйылып, кәңәш ҡорҙолар. Аҡыллы, игелекле кешеләр: «Әгәр кафыр урыҫ беҙҙең йорттарыбыҙҙы ҡамалап алһа, ҡарауыл ҡуйып тәҡәтһеҙ итәсәк. Беҙҙең балаларыбыҙ кафырҙар ҡулына төшөп, уларға хеҙмәт итәсәк», — тине. Йыйылған йәмәғәт быны ишеткәс, кәңәшләшеп, урыҫтарға яу менән сығырға ҡарар ҡылды. Был хаҡта бөтә ырыуҙарға: «Иртәгә таңдан һуғышҡа әҙер булығыҙ!» — тип хәбәр тараттылар. Шулай итеп, һуғыш башланды. Урыҫтар сикте үтеп сығырға ынтылды, ләкин башҡорттар быға юл ҡуйманы, үҙҙәренең ҡарарҙарында ныҡ торҙо. Күп кенә урыҫтарҙы әсир төшөрҙөләр, күптәрен яраланылар. Яулашыу йыл буйы уңышлы барҙы. Бер заман берҙәм һөжүмгә күстеләр. Тимер кәбәк кейгән, уҡ һәм ҡылыс менән ҡоралланған егеттәр урыҫ ғәскәренә ташланды, уларҙың ғәскәрен, тәртиптәрен боҙоп тар-мар итте.

Бәғзе бер тәжрибәһеҙ яусылар, үҙҙәренең ҡомһоҙлоғо арҡаһында, яулағанды таларға тотондо. Бынан файҙаланып, урыҫтар былар өҫтөнә мылтыҡтарҙан һәм туптарҙан ут асты, мосолмандар сигенергә мәжбүр булды. Шунан һуң уларға яуҙа уңыштар бүтәнсә тәтемәне.

Әлбиттә, урыҫтар бынан һуң Минзәләгә яңынан инде. Аҡайҙы иреккә сығарманылар. Ағиҙелдең Ноҡрат йылғаһына (Кама-

ға) ҡойған урынына, яҡын ерҙәргә урыҫ ғәскәре керҙе. Мосолмандар Ағиҙел буйлап юғарыға барыр юлда һуғыша башланы. Шунда бик күп башҡорт батырҙары яуҙа баштарын һалды, тамъяндан Сәлим батыр Наҡыҫ урманында һәләк булды. Башҡорттар урыҫ яуына юлды бер нисек кенә лә яба алманы, улар һөжүме туҡталманы. Шул сәбәпле, башҡорт ил-йортонда тыныслыҡ юғалды, улар күп бәләләргә дусар ителде.

Халыҡ араһында төрлө һүҙҙәр таралды: «Беҙгә борон-борондан йәшәгән ерҙәребеҙҙә ҡәҙимге йолаларыбыҙса, үҙ ҡанундарыбыҙса тыныс һәм бәхетле йәшәргә урыҫтар мөмкинлек бирмәгәс, шул арҡала беҙгә бик күп бәхетһеҙлектәр киләсәк; Беҙгә үҙебеҙҙең ҡарттарыбыҙҙы, балаларыбыҙҙы, туғандарыбыҙҙы урыҫ яуыҙлығынан ҡотҡарыу өсөн яңы урын-ерҙәр эҙләргә кәрәк буласаҡ», — тинеләр. Шундай уйҙар менән үҙҙәренең әүәлге урындарында әлегә йәшәй ҡалдылар. Ҡыш көндәре бик ныҡ яфаландылар. Урыҫтар уларға һәр даим һөжүм итә торҙо. Урыҫтар ҡулында ҡалмаҫ өсөн башҡорттар алты ай буйы һуғышты. Ҡыш көнө улар бик күп баҫҡынсыларҙы ҡырҙылар, шулай ғына урыҫ ҡулына төшмәнеләр[13].

Яҙын, көндәр йылынғас, мосолмандар үҙ-ара хатлашып, хәбәрләшеп, берлектә ҡаршы сығыу көнөн һәм урынын тәғәйенләне, һәммәһе Ҡенәле йылғаһы буйына тупланды, яуҙан ҡурҡҡандар урманға ҡасты, бәғзеләрен көсләп эйәрттеләр. Былар араһында Ҡазан татарҙары, уржумдар, сирмештәр бар ине. Былар үҙҙәренә яйлы мәлендә башҡорттар араһына йәшенер булды. Улар араһында ғәскәрҙең ҡайҙа тупланғанын урыҫтарға хәбәр итеүсе шымсы-хыянатсылар булды. Шул арҡала тегеләр белеп, таңға табан беҙҙең янға килеп етте[14].

Кенәле йылға тамағында Һаҙлыйылға һәм Кешеҡырылғанйылға исемле һыуҙар бар. Әүәлге һуғыштар ваҡытында бында бик күп мосолман ҡырылған. Әле мосолмандар урыҫ килеп баҫырын уйҙарына ла килтермәйенсә, ҡарауыл да ҡуймағайны. Киләһе кеше үҙе бында килде, тыныс йәшәне, теләмәгәне үҙе китте. Ҡайһы бер килгәндәре хыянат юлына баҫты, шымсылыҡ ҡылды, урыҫтарға яу хаҡында йәшерен хәбәр ташыны. Мосолмандар был хаҡта бер ни белмәне. Бер хыянатсы Ишривандан Ҡорбанай исемле кеше ине. Мин уның кем улы икәнен белмәйем. Шул шымсы урыҫтарға мосолмандарҙың ҡайҙа йәшәгән, тупланған урындарын күрһәткән, уларҙы нисек ҡамап алыуға өйрәткән. Урыҫтар төнөн шым ғына туптарын килтереп, таңда ҡапыл ата башлай. Меҫкен башҡорттар ҡайҙан атыуҙарын шәйләмәйсә, төрлө яҡҡа ҡасырға тотона, күп кенә ҡатын-ҡыҙҙар балалары менән йылғаға йүгерә. Шулар, яралылар йылғала батып үлә.

Был яуҙа Һаҙлыйылғала шул мәйеттәрҙән быуа барлыҡҡа килә. Ҡарт-ҡороно, эттәрҙе туҡмап үлтергәндәй, таш һәм күҫәктәр менән бәргеләп үлтерҙеләр, имсәк балаларын ҡылыстары

менән сапҡылап ырғыттылар, меҫкен ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәштәрен дә үлтерҙеләр. Уларҙың үле кәүҙәләрен ҡарғалар суҡыны, төлкөләр ашаны. Шул кешеләрҙең һөйәктәре һибелеп ятҡанын әле лә табырға мөмкин.

Шулай итеп, тулы көн уҙҙы. Шунан ғына урыҫтар бер аҙ тын алырға ят бирҙе. Бынан аҙаҡ урыҫ түрәһе килеп указ уҡыны, унда былай тип яҙылғайны: «Батша һеҙҙең гонаһтарҙы ярлыҡаны. Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙең йорттарығыҙға ҡайтығыҙ, һеҙгә бер кем теймәҫ!» Күптәр, урыҫтар һүҙенә ышанып, элекке йорттарына ҡайттылар, унда аслыҡтан ҡырылдылар. Был осраҡта тамъяндар өйҙәренә ҡайтырға ҡурҡтылар, әммә үҙ тыуған ерҙәренән бөтөнләй айырылырға теләмәй, йәйҙе йәйләүҙә үткәрҙеләр. Ҡышын тамъяндар Ағиҙел буйында тыныслыҡ таба алманы һәм һуғыш арҡаһында бик күп ҡайғы-хәсрәт кисерҙе. Уларға бер кем ярҙам ҡулы һуҙманы, бер кем асыҡ йөҙ күрһәтмәне. Ҡыпсаҡтар, урыҫтар яғында булып, тамъяндарға ҡаршы көрәште. Улар, тамъяндарҙан үс алырға теләп, урыҫтар менән берләшеп, Һамар буйҙарына барып етте һәм тамъяндарға һөжүм итте. Былары ҡасып ҡотолор урын таба алманы.

*[Сәсән һүҙе:*

«Борон-борон борондан
Дан алып торған Тамъян.
Яу сапҡанда ырыуҙар
Тамъяндарға таянған.
Тамъяндарға таянған да
Дошмандың ҡотон алған.
Дошмандың ҡотон алған да
Кемдәрен ҡырып һалған,
Ҡалғанын әсир алған.
Ырыуы булһа Тамъян,
Даны йөрөгән алдан»].

Минзәләгә яҡынераҡ йәшәгән тамъяндар һуғыш башланы. Атаҡлы батырҙары өс йөҙ алтмыш дүрт атлы башында ел кеүек елеп, уңға-һулға, алға-артҡа уҡтар яуҙырып, ҡылыстар болғап, һис кемдән ҡурҡмайынса яуға ташланды. Күп осраҡта ғәскәр башлыҡтары итеп улар тәғәйенләнә ине. Бына шуға күрә, «Яуға барһаң, тамъяндар менән кәңәш тот, дауға барһаң, һарайлылар менән кәңәш тот» тигән әйтем ҡалған.

Тамъяндар, күсенергә булып, ҡыпсаҡ ере аша үтә. Ләкин улар Һаҡмар ҡарай үткәндә хыянатсы ҡыпсаҡтар быны урыҫтарға хәбәр итә. Урыҫтар уларға иҫкәрмәҫтән һөжүм итеп, ҡыйратып, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡол итеп, эшкә яраҡһыҙ ҡарт-ҡороларын үлтереп, мал-тыуарҙарын ҡыуып алып ҡитәләр. Тамъян ҡарттарынан Аҡманай, Ейәнғол ҡасҡы, Кинйәғол, Солтан-

ғол — барыһы шунда һәләк була. Ҡатын-ҡыҙҙар, урыҫтарҙан ҡурҡып, үҙҙәренең балаларын йылғаға ырғыталар, ҡайһылары, өлгөрә алмағас, бишектәре эсендә ағас ботаҡтарына элеүле көйө ҡала, улары шулай һәләк була. Урыҫтар Күксә тархандың бисәһен, Сураҡайҙың ҡарт әсәһен ҡылыс менән уртаға тураҡлап, юлдың ике яғына ташлайҙар.

Тамъяндан Аҡманай улы Ҡорманғол ошо яулы көндә урыҫтар тарафынан ҡамап алына; үҙе һөйләүенсә, ҡулына ике йәйә алып, уларҙан берәм-берәм кирә-кирә атып, уң яҡтан — урыҫтарҙы, һул яҡтан мишәрҙәрҙе өркөтөп, үҙенә юл яра. Уның артынан бер мишәр: «Ни эшләй алаһың һуң һин, яуыз башҡорт? Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә урманда ағастар етерлек!» — тип аҡырып ҡалған.

Был көндә тап шулай уҡ Күксә тархан туғаны Китһен түрә тамъяндың күп көрәштәштәре менән дошмандарына ҡаршы һуғышалар. Улар дошмандарынан әҙ яҙҙырып ҡотолалар. Уларҙы урыҫтар бер аҙ эҙәрлекләп тә бара. Үҙҙәре ауылдарына* ҡайтҡас, урыҫтарҙан хат ала. Был хатта уларға, Кенәле йылғаһы буйында яуҙа ҡатнашыусыларға, кисекмәҫтән Минзәләгә аманат булып килергә бойоролған, әгәр үҙ ихтыярҙары менән килмәһәләр, этап менән килтерербеҙ, тип яҙылған була.

Меҫкен мосолмандар! Урыҫтарҙан шундай бойороҡ үҙ башлыҡтарынан баш тартырға мәжбүр итте. Быға монафиҡтар көлөшөп шат булдылар. Улар күптәрҙер: эштең башында урыҫтар яҡлы Мөхәммәд Шәриф, Түпәләч Мәсхүд Ҡазандан Аҡсар ауылына килгәндәр. Ошондай уҡ Нәдер бине Уразмәт, йәки ошоларға оҡшашлы күп кешеләр, мосолмандарҙы һәләк итеүҙә урыҫ хеҙмәтенә бил бәйләгәндәр, шул мәртәбәгә ирештеләр, үҙҙәре сиреү төҙөп, ҙур тырышлыҡ менән үҙ мосолмандарын тотоп, кафыр дошманға һаттылар. Һарытау, Төмән тарафтарынан ҡораллы-атлы мишәрҙәр, мосолмандарҙы тотоп, урыҫтарға тапшырҙылар. Кафырҙар уларҙы «военщина» тип исемләне. Шулай был ялсы һатлыҡтар башҡорт еренә ҡәһәр осора торҙолар. Бөгөн улар күптәрҙер. Шул сиктә Ҡазан юлында башҡорт ауылдарында һис кемде имен ҡалдырманылар.

Ошо ваҡиғаларҙан һуң башҡорт ил-йорттарында, хосусан Ҡазан юлында әҙәмдәр әҙ ҡалды, һәр ауылда бер йә ике йорт ҡалды, тиҙәр. Ун кешегә бер тире тун, бер һыйыр, бер ат тапманылар. Ашлыҡ сәсер өсөн орлоҡ юҡлыҡтан Ҡазан ерҙәренән орлоҡ килтерҙеләр. Йәшәү ифрат ауыр ине, ашарға бер ни юҡ ине. Ҡот осҡос аслыҡ башланды.

Астар, ни етте шуның итен ашанылар, тип һөйләйҙәр. Был мәхшәрҙән ҡотолор өсөн үҙҙәрен мырҙаларға ҡоллоҡҡа яҙҙырҙылар. Мырҙалар ҡулында ошондай ҡолдар күптер, әл-ғәзими билләһи шулай.

Әле әйтелгән мазлум мосолмандарҙы, аяҡ-ҡулдарын бығаулап, Минзәләгә килтерҙеләр, һәммәһен зинданға яптылар.

Аҡыл эйәһе ҡарттарҙы, яуҙа ҡатнашҡан егеттәрҙе ҡараңғы ер аҫты зинданына һалдылар. Унан һуң ҡала тышында алты босмаҡлы ғимарәт (эшафот) ҡорҙолар. Уның һәр босмағына осло тимер шештәр ҡаҙып ултырттылар. Бер тимер шеше уртала, ҡалған тимер шештәр тирәһенә тағандар таҡтылар. Бынан һуң тотҡон батырҙарҙы килтерҙеләр. Тимер ҡаҙыҡтарҙы, дар ҡолғаһын кафыр ғәскәре сорнап алып, барабандар ҡағып, уйындар ҡылып, указ уҡылды. Урыҫтар язалауға тотондо. Иң әүәл беренсе башлап яуға кергән егетте урталағы йыуан тимер шешкә тотоп ултырттылар. Ул тимер шеш егеттең бөтөн эсен тишеп, иңбашына ҡәҙәр килеп сыҡты. Бүтәндәрен тирәһендәге осло тимер шешкә ултыртып, яман яза менән үлтерҙеләр. Аҙаҡ ярым үле кәүҙәләрен киҫәктәргә сабып өҙҙөләр. Ахырҙа баштарын киҫеп ташланылар. Ҡалған ҡайһыларын ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫтылар. Аҙаҡҡа ҡалғандарын ауыр таштар менән бәргеләп, ҡанталҡан итеп үлтерҙеләр[15].

Бер кемгә лә тамсы шәфҡәт күрһәтелмәне. Йә, Тәңрем, кафыр ҡулына эләккәндәргә иман байлығы бир! Мосолмандар Аллаһы тәғәләгә һығынып ҡына үҙҙәренә йыуаныс табыр.

Ҡазан кешеләре, урҗумдар, сирмештәр язаға тарттырылманы. Улар башҡорттарҙың ҡатындарын һәм балаларын һатып алып, үҙҙәренең йорттарына алып киттеләр. Бынан тыш, мәғлүм булыуынса, әсиргә төшкәндәрҙең аҙаҡҡыларын Минзәлә ҡалаһының ситенә сығарып, сафҡа теҙеп, туп һәм мылтыҡтарҙан атып, барсаһын үлтереп бөтөрәләр.

Шул саҡлы күп кеше үлтерелде ки, уларҙың мәйеттәрен күмеп тә тормайынса, үләкһә мал урынына сүплектәргә ташланылар. Минзәлә йылғаһында мәке уйып, тотҡондарҙың ҡырҡтан береһен генә аяған булып, ҡалған утыҙ туғыҙышарын мәкегә боҙ аҫтына тығып, батырып үлтерҙеләр. Үлек кәүҙәләр менән йылғаны быуҙылар. Илдә шундай ҡот осҡос хәлдәр булды, уларҙы тел менән һөйләп, әйтеп бөтөрлөк түгел. Бында яҙылғандар йөҙҙән берен генә хәбәр итә.

Ҡалған мосолмандарҙы, бер-береһенең муйындарына ҡуша бәйләп, Ҡазанға йәйәүле ҡыуалар. Шул рәүешле Ҡазанға барып етә алмағандары юлда аслыҡтан, сарсауҙан, һыуыҡтан һәләк булды. Арып, өшөп ауғандарҙы һаҡсылар сабып үлтерҙе. Шулай һәр саҡрымда унлап, унан да күберәк үле кеше кәүҙәһе ятып ҡалды. Ҡалған тотҡондарҙы йылғаларға яҡын ебәрмәй, Ҡазанға килтереп, язалап үлтереп бөтөрҙөләр. Юлда бер урыҫ ауылында һаҡсылар бер ҙур йорт табып, уның тәҙрәләрен томалап, башҡорттарҙы тултырып бикләп, йортҡа ут төрттөләр, тотҡондар шулай яндырып та һәләк ителде.

Шундай хәлдәрҙән һуң урыҫтар, иҫән ҡалған һәр бер башҡорт ҡаҙнаға берәр баш ат тапшырырға тейеш, тип фарман сығарҙы, һәр бер ялан башҡорто бер ат тапшырып, уның өсөн ҡағыҙ ала, ә ҡағыҙға ни өсөндөр «ат тапшырыусы — хыянатсы

һәм боласы» тип яҙылған. Урыҫ яҡлы булғандарҙы ғына «тоғро башҡорт» тип атанылар. Ә ҡаҙнаға тапшырырға аттары, хәлдәре булмаған башҡорттарҙы язаға тарттырҙылар. Улар шулай һәләк булды.

Ул заман урыҫ ауылдары аша үткән мосолмандарҙы олоһо ла, кесеһе лә таш бәреп ҡыуыр ине. Бынан һуң тамъян һәм ҡыпсаҡтарҙан күптәр, һуғыш бөткәс, ҡырғыҙҙар араһына ҡаса. Улар ҡасҡындарҙың хәлдәренә ингән булып, ике йөҙләләнеп ҡаршы алдылар: «И, меҫкендәр, һеҙ урыҫ ҡулындаһығыҙ шул. Беҙ һеҙҙе ашатырбыҙ, эсерербеҙ», — тиҙәр. Меҫкендәр ҡырғыҙҙарҙың быдай таҫма теленә ышандылар. Туғанлашабыҙ, тип уларҙың ҡоралдарын һалдырып алдылар, үҙ эштәренә ҡуштылар, аҙаҡ ҡатындарын тартып алып, эттәрҙән талатып, таштар, һуйылдар менән туҡмап үлтерҙеләр. Китһен түрә менән Сура бына шулай һәләк булды. Уларҙың ҡатындарын фарсыларға, ҡарағалпаҡтарға, төркмәндәргә һаттылар. Балаларын юҡ иттеләр — улар ҡош-ҡортҡа, төлкөләргә емтек булды.

Шундай яфа-зыян күргәндән һуң, иҫән ҡалған башҡорттар үҙ иленә кире ҡайтты.

*[Сәсән һүҙе:*

«Борондан да яу, ҡан-ҡойош
Булып торған.
Аҙым һайын шуға беҙҙә —
Ҡәбер, ҡорған.

Ҡәбер, ҡорған.
Ат ҡыуырға тал сыбығын
Ҡырҡыр булһаң,
Һуты түгел, әҙәм ҡаны
Тамып торған.
Йыҡ ағасын, төпһәһенән
Ҡыуғын сыға.
Әҙәмдең дә зат, нәҫеле
Оҡшаш шуға.
Йәлләт-карат урып торған
Быуын-быуын,
Әйтерһең дә, төпһәләрҙән
Үҫкән ҡыуғын,
Үлгәндәрҙе алыштырған
Яңы быуын:
Бер саҡта ла туҡталмаған,
Шөкөр, тыуым.
Ишеткәнгә ҡорһаҡта уҡ,
Ҡылыс сыңын,
Иш иткәнгә ата-әсәһе
Уйын, тынын,

Аҫҡан улар ҡарт тарихтың
Яңы битен.
Киләсәккә күҙ һалғандар,
Асып ситен,
Яҙылаһы битенең шул —
Ҡарт тарихтың
Төшөнмәгә асылына
Шул барыштың:
Ниңә ирек һыртын ҡуя
Башҡорттарға,
Әҙер тора карателдәр
Баш ҡырҡырға?
Бүренән өрккән һарыҡ һымаҡ,
Тарҡаубыҙмы?
Үткәндән һабаҡ алмаға
Ялҡаубыҙмы?
Иртәгеһе — ишәккә, тип
Уйлайбыҙмы?
Быуын-быуын туҡмалыуҙан
Туймайбыҙмы?
Тәүәккәллек етмәй әллә
Ир-атына,
Ҡарыуы юҡ менмәгә
Үҙ атына?
Булған даһа батыр ирҙәр
Заманында,
Бөтмәҫ даны йәшәп килә
Бит һаман да.
Урал батыр үлеп киткәс,
Алмас ҡылыс
Булған даһа һис бер ҡулдан
Ҡалмаҫ ҡылыс.
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар,
Унан — Һәүбән,
Аҙаҡ Минәй, Иҙеүкәйгә
Еткән нәүбәт.
Алмаш-тилмәш, быуын-быуын
Күскән ҡылыс.
Ҡылыс менән бергә күскән
Изге ҡылыҡ,
Яуызлыҡ мән килешеүҙе
Белмәй торған,
Ҡай тарафта, шунда уны
Табып, орған.
Шул ҡылысҡа тутығырға
Бирмәгәндәр.
Яуҙа хурлыҡ күргән, шуны

Белмәгәндәр.
Һәр даимда уны тутһыҙ
Ҡарау кәрәк,
Урал-ташҡа ваҡыт-ваҡыт
Ҡайрау кәрәк!»]

## 18. ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫ

Бынан 250—300 йылдар элек Башҡортостанда урыҫ баярҙарының ҡыҫымына, башҡорт ерҙәрен тартып алыуға ҡаршы ҙур-ҙур яуҙар булып үткән. Шундай ҡаты яуҙарҙың береһе Урал тауҙары араһында, Иҙел башында булған. Уны беҙҙең атай-бабайҙарыбыҙ Ямғырсы яуы тип һөйләй торғайнылар.

Был яу бик хәтәр булған. Батша ғәскәре менән башҡорттар алһыҙ-ялһыҙ ике тәүлек һуғышҡан. Иҙел һыуы ҡара-ҡыҙыл ҡанға әйләнгән, һыу өҫтө мәйеттәр менән тулған. Шул яуҙа йәш Ҡараһаҡал[1] батыр ҙа ҡатнашҡан.

Ҡырҡты тауы янында ике ҡая бар. Ямғырсы ҡаялары тип йөрөтөлә улар. Был исемдәр ана шул Ямғырсы яуынан тороп ҡалған.

Яу ҡыйратылғас, Ҡараһаҡал сит-ят ерҙәргә ҡасып киткән. Башта ҡарағалпаҡтарға барып сыҡҡан ул. Шунан Хиуаға юл тотҡан. Бында ул юлбаҫарҙарға юлыҡҡан. Тегеләр уны тотоп, ҡоллоҡҡа һатҡан. Шунда инәү (билдә) өсөнмөләр, уң яҡ ҡолаҡ япрағын киҫеп алғандар. Ҡоллоҡта ул әллә ни хәтле яфа күргән.

Бер мәл Ҡараһаҡал ҡоллоҡтан ҡасып ҡотолған. Ҡотолған да дәрүиш булып кейенеп, ил гиҙеп сығып киткән.

Ҡөрьәнде Ҡараһаҡал яттан белгән. [Шуға ла уны Ҡөрьән-хафиз тип йөрөткәндәр]. Ул шул тиклем уҡымышлы булған: бер ерҙә лә уның алдына сығыр кеше табылмаған. Ул күп илдәр ҡыҙырған. Үзбәк, ҡаҙаҡ араһында булған, ҡалмыҡтарға ла барып сыҡҡан. Ҡайҙа бара шул ерҙә йәшәгән халыҡ телендә һөйләшер булған. Бер ерҙә бер кем, был боласыл, ҡаҫҡын башҡорт, тип уйлай алмаған. Һәр тарафта уға үҙ кеше тип ҡарағандар. Үҙе — дәрүиш, үҙе — суфый, үҙе Ҡөрьән-хафиз булғаны өсөн, һәр тарафта ла олоҡлап торғандар, хөрмәт итер булғандар. Ҡараһаҡал аҙағыраҡ Мәккәгә хаж ҡылған. Хажи булып алғас, уның даны тағы ла киңерәк танылған.

Күп замандар үткән. Шулай йөрөй торғас Ҡараһаҡал батыр, бер саҡ яйы сыҡҡанда, үҙен хан нәҫеленән тип таныта. Шул хаҡта таныtмаһы, ханлыҡ шәжәрәһе лә булған уның.

Башҡортостанда бер заманды яңынан яу ҡубып китҡәс, Ҡараһаҡалдың ҡаҙаҡтар араһында йәшәүен ишетеп, башҡорттар уны үҙҙәренә хан итеп саҡырған. Ҡараһаҡал ризалыҡ биргән.

Уралда Ханҡала тигән бер ҙур тау бар. Хәҙерге Баймаҡ

районы Билал ауылы янында Күгиҙел менән Ирәндек араһында ята ул тау. Шул тауҙа бер ҙур мәмерйә лә булған. Элекке яу батырҙары шунда ҡасып йәшәгән. Яу-фәлән сыҡҡанда, һүҙ беркетер өсөн, батырҙар унда йәшерен ҡор-йыйындар үткәрер булған.

Бер ваҡыт бына ошо тауға башҡорттоң иң арҙаҡлы батырҙары, аҡһаҡалдары Ҡараһаҡалды хан итеп ҡылмаға, йыйынға йыйылған. Был йоланы бик шәп итеп атҡарғандар. Ҡараһаҡалды аҡ кейеҙгә ултыртҡандар ҙа баш осона күтәргәндәр. Батырҙар, аҡһаҡалдар Ҡөрьән үбеп, Ҡараһаҡалға тоғро булырға ант иткән. Хан исемен алғас, башҡорттар өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер булыуын әйтеп, шул һүҙенә тоғролоҡҡа Ҡараһаҡал батыр ҙа Ҡөрьән үбеп, ант иткән. Шунан киткән бәйге, киткән көрәш, ярыштар... Халыҡ көнө буйы байрам иткән.

Үҙен хан итеп иғлан иткән әлеге мәжлестә Ҡараһаҡал элекке Ямғырсы яуынан һуң Алтын таяҡ күмеп киткәнен әйткән. Батыр күмгән ерҙән ул таяҡты барып ҡаҙып алғандар. Борон-борондан башҡорттар ил башлыҡтарына изге аманат итеп, уны быуын-быуын тапшыра килер булған икән. Алтын таяҡ булғанда, ил башы — батыр, уға эйәргән халыҡ еңелеү белмәҫ булған.

Дошмандар Ҡараһаҡалдың хан итеп күтәрелеүен, Алтын таяҡтың уға бирелеүен ишеткәс:

«Ханҡаланы баҫырбыҙ,
Батырҙарын аҫырбыҙ;
Тормабыҙ берен аяп,
Юҡ булыр Алтын таяҡ», —

тип, бик оҙаҡ яулашҡандар, ти. Тик Ханҡаланы ала алмағандар, Алтын таяҡты ла ҡулға төшөрә алмағандар, ти.

Был ҡөҙрәтле таяҡты Ҡараһаҡал Ханҡала тауына хан билгеһе итеп ҡаҙап ҡуйған, ти.

Ҡараһаҡал:

— Ситтә, Яйыҡ тамағы яғында, минең һикһән мең ғәскәрем бар, — ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс, халыҡ:

— Бәрәкалла!

— Афарин! — тип йәнә дәртләнеп киткән, ал-ял белмәй дошман менән алышҡан: халыҡ үҙенең — ханына, Ҡараһаҡал халҡына биргән антына тоғро булған.

Оҙаҡламай яу бик ҡыҙып киткән, Тубылдан — Оло Иҙелгә, Сулмандан (Ҡамайылғанан) — Яйыҡҡаса бөтә Башҡортостанды биләп алған. Бихисап яу йыйылған.

Ҡараһаҡал Башҡорт иле эсендәге дошмандарҙы ҡыйратҡас, Ҡазанға юл тотҡан. Ҡазанды алған. «Ҡазан алған» тигән көй шуның хөрмәтенә сығарылған, ти. (Беҙ йәш саҡтарҙа ҡурайсылар ул көйҙө уйнай торғандар ине әле.)

Ҡараһаҡал яуы Ҡазанды алғас, баярҙар, батша хөкүмәте

яман нык хафаға калған. Уны көс менән генә еңә алмағас, хәйлә-мәкергә күскән былар. Бер заман, батша ғәскәрҙәренә тоғро һатлык йән башкорттарҙан бер төркөм ойошторолоп, шулар Казан, Минзәлә тирәләрендәге мәсеттәргә ут төрткән, ауылдарҙы яндыра башлаған. Шул яман эште Караһакал яуына япһарғандар. Шунан:

— Караһакал мосолман диненә каршы яуызлык кылыусы әҙәм актығы, мәсеттәрҙе яндырыусы кафыр ул, — тип ялған яманатын тараткандар.

— Хан түгел, үҙе кафыр ул, — тигәндәр. Шул сәбәптән, Караһакалдың ғәскәре таркала башлаған. Халыктың кайһы бере уға, дингә каршы кеше, ялғансы, тип карай башлаған. Шунан ни Караһакал яуы еңелгән инде.

Караһакал үҙе шундай көҙрәткә эйә булған: уны ук та, йәҙрә лә ала алмаған. Әллә ни саклы ғүмер тоторға маташһалар ҙа, батша ғәскәрҙәре уны тота алмаған.

Караһакал бар ине,
Караһакал бар ине.
Ул тиңһеҙ батыр ине,
Донъяла ул бер ине.
Һис берәү ҙә донъяла
Каршы торманы уға.
Ул күптәрҙе хәлләне,
Актан ине сәлләһе,
Кара ине һакалы,
Кап-кара — менгән аты.
Караһакал Каратта,
Елде еткермәй хатта,
Елде етеҙҙән-етеҙ —
Етәр ине ул бик тиҙ
Етәм тигән еренә,
Карамайса бер нигә.

Усал булды дошманға,
Үсле булды дошманға;
Ул затка бер каныкһа,
Алып атты ян-якка;
Йәшен булды күктәге,
Кырып һалды күптәрҙе,
Һурып алып кынынан,
Үткәреп кылысынан.
Кылысы — йөҙө уның
[Һакһыҙ, теймәһен кулың]
Ғәле бәкеһенән дә
Үткер ине, әйткәндәй,
Кылды кыркка ярмалы,
Кая-таш тумырмалы.

Һөңгөһөнөң осонда,
Күреп, гүйә, осҡондай,
Күтәрҙе ул күптәрҙе,
Күтәреп алып бәрҙе.

Инде тотонһа уҡҡа —
Бар дошман сыҡты юҡҡа:
Кеме тотоп тамағын,
Кеме тотоп аяғын,
Кеме баҫып йән ерен,
Ташлай килеп хәнйәрен.

Әжәлһеҙ йән алмалы
Булған уның ҡоралы,
Изге ерҙә бүләккә
Мәңгегә бирелгәнгә,
Мөхәмәт бәйғәмбәргә
Тоғролоғон әйтергә,
Хаж ҡылғанда Ҡәғбәгә
Мәҙинәи — Мәккәгә,
Ҡараһаҡал батырҙың,
Ап-аҡ уйлы батырҙың
Ҡаплап торғандай өҫтөн,
Дошмандан ҡылып өҫтөн,
Тәңре үҙе һаҡлаған —
Теләктәрен ҡаҡмаған.
Дошман булһа ла һанһыҙ,
Торған ул шуға яңғыҙ.

Һаҡлағанға Тәғәлә
Уны барлыҡ бәләнән,
Йәҙерәләр йәнселгән,
Ҡаҡлығышып, сәселгән,
Уҡ атһалар, кирелеп,
Бер уҡ етмәгән килеп;
Һөңгө һелтәһә кеме —
Ҡаҡлыҡтырған ул кире.
Киҙәнһә ҡылыс менән,
Баһадирса көс менән,
Эшкә ҡушып тылсымын,
Яҙлыҡтырған ҡылысын,
Ни ҡәҙәре тырышһын,
Еңергә ҡырталашһын,
Алдындағы ят бауыр,
Ҡара эсле шул ғауыр.

Ҡараһаҡал дан ине,
Ил өҫтөндә хан ине.

Кереше тиң тартылған,
Ыҫҡынһа, сыңлап торған
Уғын мәргән сойорғоткан,
Дошманын ҡотһоҙ ҡылған,
Гүйә, һөйәк ян ине,
Ил эсендә дан ине,
Ил тышында һан ине.
Аҡ сәлләһен сисмәне,
Уға тап төшөрмәне,
Ҡаратынан төшмәне,
Иртән, кисен, төш мәле.
Ҡылысын алып ҡулға,
Һелтәнеп уңға, һулға,
Һалыр булды оранын;
Ултырғанын, торғанын
Эйәртер ҙә артынан,
Фатиха алып ҡартынан,
Яу асып ят бауырға —
Иман белмәҫ ғауырға,
Илен ҡурсыр ир ине:
«Шул — бурысым», — тир ине.

Ябырылһа йөҙ дошман,
Һеңгөһөн, уғын тоҫҡап:
«Себен яуы!» — тир ине,
Себендәй иҙер ине.
Ҡараһаҡал — ир ине,
Күп янында бер ине.
Шундайҙар илгә терәк —
Тик улар тыуа һирәк,
Ҡәҙерен белмәк кәрәк!
Быуын-быуын дандарын
Һөйләп еткермәк кәрәк.

Ҡараһаҡал, аҙаҡ ҡаҙаҡтар араһына күсеп, хан булған, тиҙәр.

Ҡараһаҡал киткәс тә, әле Башҡортостанда яу ҡапыл ғына туҡталмаған. Ҡараһаҡалдың бик күп яҡын-ярандары, батырҙары, яһауылдары яуҙа ҡырылып бөткәс, яуҙы уларҙың бала-сағалары, ҡатындары дауам иткән. Күп ир-егет боһормансылыҡ ҡылған.

Ҡараһаҡалдың ике бисәһе, бүтән батырҙарҙың бисәләре, бала-сағалары менән, батша ғәскәрҙәренән ҡасып, тау аралап Иҙел башына сыҡҡандар. Эҙәрлекләп килгән ғәскәрҙәр менән урман-тау араларында бик ҡаты һуғыштар булған. Батша ғәскәрҙәре, ҡыҙ-ҡырҡын булһын, ҡыҙ-ҡырҡынды, бисә-сәсә булһын, уныһының ҡулға төшкән берен, мәсхәрәләп, аҙаҡ үлтереп китә торған булған. Бала-сағаны ла аяп тормаған: береһен дә

тере ҡалдырмағандар. Шуға халыҡ: «Барыбер бер үлем — мәсхәрәле үлгәнсе, һуғышып үләбеҙ!» — тип үлемесле яулашҡан.

Аҙаҡҡы һуғыш Иҙел башындағы бер ҡая башында булған, ти. Иҙел башындағы был ҡатын-ҡыҙ яуында барыһы ла: ауырыуҙары ла, йәрәхәтлеләре лә, ауырлылары ла — йән аямай һуғышҡан. Мәсхәрәле үлемдән намыҫлы үлемде улар мең тапҡыр өҫтөн күргән. Бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡыrҡын, ҡылысҡа—ҡылыс, һөңгөгә—һөңгө килгәнсе, һуғышҡан. Һөңгөләре сарпайып, ҡылыстары һынып, ҡоро ҡул ҡалып, ҡамалғандары дошманға бирелмәҫ өсөн, текә ҡаянан упҡынға ташланған... Шул ҡая тәүҙә Ҡыҙҙароҫҡан ҡая тип, аҙаҡ Ҡыҙҙар ҡаяһы тип йөрөтөлә башлаған.

Сигенгән ваҡыттарында күптәр ваҡ балаларын, сараһыҙҙан ағас ҡыуыштарына, ҡая ояларына йәшергеләп киткән булған. Ул сабыйҙарҙың күбеһе ағас ҡыуышында астан, һыуыҡтан үлеп бөткән. Байтағы иҫән ҡалған. Аҙаҡ уларын эҙләп тапҡылағандар. Ҡарға ояһындағы бер баланы ҡарға төрлө ерәк-емеш ташып ашатҡан. Шул арҡала ул бала имен ҡалған, имеш, тиҙәр. «Бала ҡарға» көйө ана шул ваҡиғанан сығарылған тигән һүҙ ҙә бар халыҡта.

## 19. ҠАРА АТ

### 1. Ҡара ат менгән Әмәкәстең башҡалар ата алмаған аҡ кейекте ҡороҡлағаны; Ҡара атҡа күҙе төшкән ғәскәр башлығы менән башҡорттар араһында ыҙғыш сыҡҡаны; Әмәкәстең һәләк булғаны; батша ғәскәренең ҡыуылғаны

Юрматы ауылында Әмәкәс тигән һунарсы булған, ти. Был һунарсы бик мәргән, бөтә тирә-яҡ ырыуҙа дан алған, ти. Уның бер ҡара аты була. Ул ат бөтә Иҙел, Һәләүек, Ашҡаҙар, Үҙән, Нөгөш, Юшатыр буйҙарында йәшәгән ырыуҙар араһында дан алған йүгерек булған, ти. Берҙән-бер көн был Әмәкәс һунарсылар менән бергә ауға барғанда, ил аралап сыҡҡан батша ғәскәренә осраған. Ғәскәрҙе күргәс, былар ҡурҡышып киткәндәр, ти. Ғәскәр башлығы, быларҙың уҡ-һаҙаҡтарын күреп, бик ҡыҙыҡһынған. Һөнәрҙәрен күреү өсөн, бергә ау ауларға тотонған, ти.

Быларҙың алдына ике аҡ кейек килеп сыҡҡан, ти: береһен күмәкләшеп ҡамап, төрлө яҡтан атҡылап, яралап алғандар, иптәше, ҡасып [барып], ҡая башына менгән дә, ҡалған аҡ кейекте көткән һымаҡ, ҡырлап, уранғылап йөрөй икән, ти. Әмәкәс, Ҡара атына менә һалып, кейек артынан сапҡан, ти. Уның артынан иптәштәре, батша ғәскәрҙәре, сабып ҡараһа ла, текә ҡаяны артыла алмай, күҙ яҙып ҡалғандар, ти.

Былар ҡая аҫтында ҡарап торғанда, Әмәкәс кейекте, шыр урманға индермәй, уратып, ҡая һыртына табан әйләндереп

алып, килеп үткән, ти. Шул ваҡытта былар, ҡош үткән шикелле «гөж» иткән тауыш ишетеп, ҡая өҫтөнә ҡарағандар, ти. Ул арала Ҡара аттың тояғы ҡағылыуҙан сатнаған ҡая таш ватығы ер һелкетеп килгәнде күреп, саҡ ҡасып ҡотолғандар, ти.

Әмәкәс, кейекте һаҙаҡ менән атып йығырлыҡ яҡынлаһа ла, үлтермәйенсә, тереләй тотоу өсөн, ҡамап туғайға алып төшкән, ти. Кейек сабып барып, Иҙел ятыуына төшөп, аша йөҙөп сығырға ынтылғанда, Ҡара ат менән Әмәкәс төшөп, урталыҡҡа еткермәй ҡороҡ һалып, аҡ кейекте һыу уртаһында нуҡталап алған, ти. Аҡ кейекте алып сығып, ат ҡойроғона тағып, иптәштәре янына алып килгән, ти.

Батша ғәскәре башлыҡтары Әмәкәстең атын алышырға һорағандар. Әмәкәс ризалыҡ бирмәгән, дошман күҙе төштө, тип, аҡ сәкмәне менән атын ябып ҡуйған, ти.

Яҡшылыҡ менән һорап бирмәгәс, арала һуғыш киткән, ти. Батырҙарҙың күбеһе ҡырылған. Әмәкәсте атып йыҡҡандар. Ул аттан ҡолап ҡалып, шунда үлеп ҡалған, ти.

Ғәскәр атты ҡыуып, ауылға барған. Ҡара ат тоттормаған, далала ҡасып йөрөгән. Халыҡты туҡмап, уны тоторға ҡушҡандар. Халыҡ быға түҙмәгән, бөтә ырыу атҡа менгән. «Ҡара атты бирмәйбеҙ! Ҡанға — ҡан! Бысаҡҡа — бысаҡ!» — тип, яу асҡан.

Арала бик ҙур һуғыш булған.
Батша ғәскәрҙәрен ҡыуғандар.
Был хәбәр губернаторға барып еткән, ти.
Ҡара аттың даны бөтә түрәләр араһына таралған, ти.

## 2. 120 башҡорт батырының ҡулға алынғаны; бәйгеләә ал бирмәгән Ҡара аттың уларҙы ҡотҡарғаны; уға арнап йыр сығарылғаны; батша янаралы ҡулына юлыҡҡан Ҡара аттың ҡасып ҡайтҡаны

Берҙән-бер көн Өфөнән бик күп ғәскәр менән бер янарал килгән дә: «Һеҙ бола ҡуптараһығыҙ икән! Һеҙҙең ерегеҙҙе межаларға килдем. Артыҡ ерегеҙҙе мишәрҙәргә, типтәрҙәргә, урыҫтарға киҫеп бирәбеҙ», — тип ғауға һалған, ти, болала етәксе булған йөҙ егерме башҡорт батырын тотоп, бығаулап алған, ти. Бик ҡурҡыткастары, үҙҙәренең старшиналары аша халыҡ, бүләктәр биреп, эште рәтләргә уйлаған, ти. Күп малдар түгеп, янарал алдында йөрөү өсөн, батша яҡлы тархандарҙы яллағандар. Аҙаҡ сиктә янарал халыҡҡа: «Бына минең шәп йүгерек аттарым бар. Был аттар батшалар бәйгеһендә лә уҙып йөрөнө. Шул аттарҙы уҙырлыҡ йүгерек ат табып бирһәгеҙ, батырҙарығыҙҙы ла ҡотҡарам, ерегеҙҙе лә кире бирәм», — тигән.

Халыҡ, ат [еткән ергә — ат, хат еткән ергә — хат] ебәреп, йүгерек аттар саҡыртып, [шулар араһына] Ҡара атты ла индереп, губернатор аттары менән сабыштырырға булған, ти.

Аттарҙы турыға ебәреп саптырһа, шомлоҡ булыр, тип, түрәләр туғайҙа, урап сабыу өсөн, һыҙыҡ һыҙҙырғандар, ти.

Аттар сабышында губернатор аттары ал бирмәй йөрөй башлағас, халыҡ бик хәүефкә ҡалған, ти. Ҡара аттан башҡа аттар, бер әйләнгәс тә, эйәрә алмағас, һыҙыҡтан сығарылып ташланған, ти.

Өс ат саба башлаған. Ҡара ат өсөнсө әйләнгәс, халыҡ йөрәген ус эсенә тотоп, ҡан ҡалтырап:

— Ай, Ҡара ат!

— Ай, малҡай!..

— Аяғыңды ер тота микән ни һинең! Алдыңдан ҡаяла уйнаған аҡ кейек тә ҡотола алмай торғайны, тырыш, малҡай!..

— Һиңә 7—8 ырыу күҙ текләп ҡарап тора бит!.. — тип әйтеп, ул үткәндә, кәпәс менән бәреп ҡала инеләр, ти. Сәсән, йырсылар:

## Ҡара ат




— Алға ғына ынтыл, ай, Ҡара атым,
Елберләтеп ҡырас ял осоң!
Аяма ла йәнең, һай, Ҡара атым,
Йөҙ егерме батыр ҡаны өсөн!

— Алдан ғына саба, алдын бирмәй,
Янарал да майор аттары.
Күҙҙәрен дә текәп Ҡара атҡа,
Әжәл көтә башҡорт ҡарттары.

— Аяғыңды, Ҡара ат, ер тотамы?
Әйҙә, ынтыл, бирмә алдарҙы!
Йөҙ егерме башҡорт ҡан йәш түгә,
«Ағыҙма, — тип, — беҙҙең ҡандарҙы!» —

тип йырлап [торғанын], көс биреп, һөрән һалып ҡалған халыҡты күргәс, Ҡара ат бахыр, күҙҙәренә ҡан һауҙырып, ауыҙлығын тешләп, ҡолағын ҡайсылап, атҡан уҡ төҫлө алға ынтылып сабып киткән, ти, губернатор, янарал аттарын, тыны менән тартып алған һымаҡ, ҡыуып еткән, ти. Халыҡ шатланып:

[— Лә Илаһа Иллалаһ!
— Лә Илаһа Иллалаһу! —

тип] тәкбир ҡысҡырған — Ҡара ат йырып алға сығып та киткән, ти. Йырсы, сәсәндәр шатланышып:

— Ғәйрәт телә͏й башҡорт Ҡара атҡа,
Ҡан йәш түгеп йәше, ҡарттары.
Ҡанатлы ҡошмо ни, Ҡара ат саба,
Артта ҡала майор аттары.

— Әйтер һүҙебеҙҙе әйтә алмайбыҙ,
Күңелебеҙгә шатлыҡ тулғанға.
Һырттарынан һыйпап, беҙ һөйәбеҙ,
Ҡара ат уҙып, алда барғанға, —

[тип Ҡара атҡа арнап йыр йырлаған].

Шулай итеп, Ҡара атты бүләк итеп биреп, йөҙ егерме батырҙы ҡотҡарып, [уны] бер һыуһын ергә саҡлы оҙатып ҡалғандар, ти.

Ҡыш үткәс, яҙ булып боҙ китә башлаған. Иҙел, Үҙән, Һәләүек, Нөгөш, бөтә тугайҙарҙы ҡаплап ағып ятҡанда, таң ҡыйылып атҡан миҙгелдә, йоҡола ятҡан батырҙарҙың ҡолағына ер йыртып, ҡысҡырып кешнәгән ат тауышы ишетелгән, ти. Халыҡ, өйөрҙө бүре-маҙар баҫып, айғырҙар ыҙғыра микән, тип һиҫкәнеп киткән дә, йыйылып тыңлай башлаған, ти. Ат кешнәгән тауыш ҡабатланған, халыҡ:

— Ҡара ат кешнәүе булырға кәрәк!

— Шул, шул! Нәҡ үҙе! — тип тауыш килгән ыңғайға табан барған, ти. Барһалар — Әмәкәс ҡәбере янында Ҡара ат тора, ти. Халыҡ:

— Ҡара атҡай!.. Әмәкәс батырың ҡайта алмаҫлыҡ донъяға китте бит! Ярар, йөҙ егерме батырҙы үлемдән, илде ҡанға батыуҙан ҡотҡарҙың!

— Ил тартып, илде һағынып ҡайтҡанһың икән! Хәҙер беҙ һине ырыу йөрөгө итеп тоторбоҙ.

— Эйе, ил батырына бүләк итеп бирербеҙ. Ҡабат дошманға ҡол итмәбеҙ! — тип Ҡара атты өйөрҙәренә ҡушҡан, ти.

### 3. Башҡорттарҙың баш күтәргәне; Ҡара аттың Ҡараһаҡалға бүләк ителгәне; Ҡараһаҡал менән Ҡара атҡа арнап, уларҙың батырлығын данлап, ҡобайыр ҡойолғаны

Башҡорт илендә шул айҙа уҡ Аҡай, Килмәт, Йосоп, Миңлеяр батырҙар[1], илдән батырҙар йыйып, батша түрәләренә ҡаршы баш күтәргәндәр, ти. Юрматы ырыуы ҡара атты Килмәткә бүләк иткән. Ул ҡулға алынғас, атты тағы йәшергәндәр.

Аҙаҡ Ҡараһаҡал батыр килеп сыҡҡан. Ҡара атты уға бүләк иткәндәр, ти.

Ҡараһаҡал күп халыҡ алдында, Сәйет[2] батырҙың ҡәбер ташын үбеп, атына менгән. Яу уғы теймәһен, тип Сәйет ҡәберенән бер ҡуш ус тупраҡ алып һипкән дә, халыҡҡа ҡарап:

— Алпанлаған айыулы,
Тупаҡ ҡойроҡ бүреле,
Сатаҡ мөгөҙ боланлы,
Ыласын, ҡыйғыр бөркөтлө,
Ирәмәл, Айтас һөтөндәй,
Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмарлы,
Йылҡылары юшаған,
Һыйыр, һарыҡ көйшәгән,
Ырыу-ырыу эркелеп,
Йәйләүҙәрҙә йәйелгән;
Батырҙары ил зарын
Ҡурайында уйнаған,
Һылыуҙары йырлаған,
Төрлө моңға мансылып,
Ҡошҡайҙары һайраған
Урал тигән илем бар,
Урал тигән ерем бар,
Урал тигән инәм бар.

Батыр булып, ат менһәм,
Һыу-һүл юлымды быумаç,
Юлыма үлән үçмәç,
Маяҡһыҙ ҙа яҙлыҡмаç —
Ҡуңыр буға юлы бар.
Атҡа мендем, алға, тип,
Әҙер торам, яуға, тип.
Ҡылысынан ҡан тамған,
Һайҙаһынан* ыу тамған,
Ҡатындарын тол иткән,
Балаларын ҡол иткән,
Йортон-ерен көл иткән
Дошманымда ҡоном бар, —

тип Ҡараһаҡал, атына менеп, яуҙы ҡыра башлаған. Ил, уның

батырлығын күрен, уның атын да, үҙен дә олоҡтап, [уларға арнап ҡобайыр ҡойған]:

— Тамъян иле данлы ил —
Данлы Ҡара ат Тыуған ил.
Ҡараһаҡал батырға
Уны бүләк иткән ил.
Эй Уралтау, Уралтау,
Йөҙөң яуҙы күп күрҙе:
Илең ҡанын күп ҡойҙо,
Батырҙарың күп үлде,
Батырыңдың батыры
Ҡараһаҡал ир булды,
Ҡылыр эшен тиҙ ҡылды.
Ҡараһаҡал ат менгәс,
Үс, тип дошман йәб(е)ренә,
Барҙы Сәйет ҡәб(е)ренә.
Иҙел, Яйыҡ һыулаған,
Яуҙа еңмәй, тынмаған,
Йән аямай һуғышҡан —
Дошманы яҙған һуштан
Иле өсөн ҡан кискән,
Тынғы белмәгән һис тә.
Ҡараһаҡал ҡон һаҡлап,
Сәйет ҡәб(е)рен ҡосаҡлап,
Ил хаҡына ант итеп,
Башҡаларҙы ят итеп,
Ташҡа йөҙөн ҡуйҙы, ти,
Дошман уғы теймәҫкә,
Атына тупраҡ ҡойҙо, ти.
Ҡара аттың баҡыр күҙе
Илде күреп йәшләнде.
Ҡара ат сабып уҙғанда,
Сәйет ҡәбере йәнләнде.
Ҡара ат — толпар, баҡыр күҙ
Батыр өсөн яралды.
Ҡара ат яуға сапҡанда,
Дошман ҡорҙай таралды.
Ҡара ат, яуға кергәндә,
Ҡая-таш, тип торманы.
Уҡтар гөжләп торһа ла,
Йәнен аяп торманы.
Батыры һайҙа* күтәрһә,
Ҡанатлы ҡоштай осто, ти.
Кәрәк саҡта батыр мән
Ҡаяла ятып боҫто, ти.
Ҡараһаҡал, Ҡара аттың

Башына һалып, уҡ атты;
Батыр ятып йоҡлаһа,
Ҡара ат уны уятты.
Ауға сыҡһа батыры,
Иртән, төшөн, кисҡорон,
Тупаҡ ҡойроҡ бүреләр
Ҡасырға өң табалмаҫ.
Ҡараһаҡал уғынан
Тәфкиләү[3] күҙ яҙа алмаҫ.
Ҡара аттың күҙ керпеген
Дошман саңы саңланы,
Тәфкиләүҙең ас күҙен
Ил һөрөмө ҡапланы.
Ҡаҙға осҡан ыласындай,
Тәфкиләүҙе айҡаны.
Ҡара атынан дошмандар
Ҡасыр урын тапманы.
Ҡара аты сапҡанда,
Еленән ағас йығылды,
Ҡараһаҡал ҡулынан
Йөҙ мең дошман ҡырылды.
Ҡара ат менгән батырға
Бөтә дошман таң ҡалды:
Кейек менмәҫ ҡаянан
Ҡара толпар юл һалды;
Ҡараһаҡал аҫтында
Бәрҙе һымаҡ уйнаны;
Теҙгененән тотҡанда,
Иркә ҡыҙҙай буйланы;
Ҡара ат сабып киткәндә,
Ҡая таштар онталды,
Алдында яу күргәндә,
Йән аямай уҡталды.
Ун ике ерҙән батыры
Яраланған сағында,
Һәрмәй һалып биленән,
Туҡтап тормай елеүҙән,
Үҙ тауына килтерҙе.
Яуҙа сарсап ҡайтты иһә,
Ҡыҙҙар тәгәс алдылар,
Бауырына һыу һиптеләр,
Батыр менән икеһен
Йырлап, маҡтап үттеләр.

### 4. Ҡараһаҡалдың, айныҡ баш менән аныҡ фекер йөрөтөп, хөкөм сығара белгәне: йомошто йомошлар урынға, кәләш алып, туй яһап ятыусыны хурлағаны; Морат мулла менән Мәхмүт старшина «Көрьән»дә утҡа ташлауҙа ғәйепләгән Теләүкәйҙе язанан ҡотҡарғаны

Берҙән-бер көн Ҡараһаҡал, йомош менән ебәргән кешенең оҙаҡ килмәүенә хәүефләнеп, ул киткән ауылға барып төшә. Теге кешеһе кәләш алып, туй яһап ята. Быны күреп, Ҡараһаҡал бик асыулана. Ҡараһаҡалдың килгәнен ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан түрәләр, ҡарт-ҡоро, йәш-елкенсәк — барыһы килә. Уны һырып алалар. Ҡараһаҡал шул саҡта бөтәһенә былай тигән:

— Ай, Уралым, Уралым,
Батырын да тыуҙырҙың,
Һылыуын да тыуҙырҙың.
Батыр батыр булыр ул,
Яуға һаҙаҡ атҡанда,
Дошманына ил бирмәй,
Ҡыҙыл ҡанға батҡанда,
Һылыу һылыу булыр ул,
Батыр әсә булһа ул,
Яуға киткән улына
Аҙаҡ атын бирә ул;
Түрә булып, ил һатһа,
Уралға ул булырмы?
Табын йыйып, аш ашап,
Ҡоҙа йыйып, туй яһап,
Яуҙан ҡасҡан батырҙы
Һөйгән һылыу булырмы?

Иҙеләндә һыу эскән,
Уралында ҡыҙ ҡосҡан,
Бала үҫтереп көн иткән,
Яуға үҙе бармаһа,
Барғанға уң бирмәһә,
Уп-тап* килеп арала,
Айбаһа* дошман яуынан,
Ытырғанһа иленән,
Ил батыры булырмы?
Уралға ул булырмы?
Күрә-тора ундайға
Урал әсә булырмы? —

тип әйткәс, бөтә халыҡ үҙ араһындағы шикле кешеләрҙе тикшерә башлаған, ти.

Ҡараһаҡалға аш-һыу биргәндәр, ҡунаҡ иткәндәр, күп кеше унын менән яуға китергә булған, ти. Шул саҡта Тамъян-Ҡа-

тайҙағы дан тотҡан Морат мулла менән Мәхмүт старшина Теләүкәй тигән бәрәүҙе етәкләп алып килгән, ти. Морат мулла, Ҡараһаҡалға ҡарап [былай ти]:

— Илдән илгә дан тотоп
Килгән батыр икәнһең,
Динде тотмаҫ ағаңа
Ҡаршы яуға сыҡҡанһың.
Солтангәрәй атың бар,
Дөлдөлдәй ҡара атҡа
Ултырырҙай һының бар.
Мәккәлә лә булғанһың,
Булғанһың, хаж ҡылғанһың.
Бәйғәмбәрҙең юлынан
Ҡәғбәгә лә барғанһың.
Атҡа менәһең, Алла, тип,
Ҡылыс болғап, яуға, тип.
Ислам динен йәйергә,
Күктән төшөр Ғайсаның
Юлын асып бирергә,
Йәьжүздәрен* ҡылырға,
Өлөшөнә булырға,
Ҡөрьән менән йөрөргә
Ебәрелгән илсе һин.

*Бәрәүҙе Ҡараһаҡал алдына килтерәләр:*

— Бына беҙҙең был егет
Дин китабын һөймәгән,
Йорто-ере янғанда,
Бар нәмәһен алғанда,
Телгә алмай «Ҡөрьән»де.
Алла һүҙен ҡыҙғанмай,
«Ҡөрьән» өсөн утҡа инмәй.
Үҙен шаһиттан ҡылған,
Донъя малын һаҡлаған,
«Ҡөрьән»де утҡа ташлаған:
«Гонаһ-шомлоҡ төшөрлөк
Ямандан-яман эш ҡылған
Үҙе ҡасҡы — был кеше,
Ситтән килеп һырышҡан,
Быны илдең алдында,
«Ҡөрьән» көлө янында,
Үҙ бисәһен тол итеп,
Балаларын хур итеп,
Үҙенә рәжем* яһарға,
Зыяратҡа күммәйсә,
Эт-ҡошҡа ем итәйек!» —

тигәс, Ҡараһаҡал Теләүҙе халыҡ алдына сығара ла былай ти:

— Азаматтар, тыңлағыҙ,
Тыңлаң, һүҙем йыҡмағыҙ!
«Ҡөрьән» хаҡы, туғандар, —
Алла хаҡы, тип беләм.
Алла өсөн ғәйепле
Гүрҙә бирер яуабын —
Егет менән Алланың
Араһына инмәгеҙ.
Был егетте тағы ла
Ғәййәрле ул тимәгеҙ.
Уҫаллыҡтан яҡмаған —
Юрый утҡа атмаған.

Дүрт аяҡлы толпар ҙа
Һөрөнмәйсе буламы?!
Ирмен тигән ирҙәр ҙә
Яңылышмай буламы?!
Яңылыштан хур булған
Илгә дошман булмаҫ ул,
Яңылышын таныған
Яманлыҡ һис ҡылмаҫ ул.

Уралды яу баҫҡанда,
Батырҙарҙың күҙенә
Иле ҡарап торғанда,
Бишектәге бала ла
Атҡа менһен, тигәндә,
Яу сабырҙай егетте
Әрәм итеп буламы?!
Батыр тапҡан әсәнең
Йәшен ҡойоп буламы?!
Бишегендә, илем, тип,
Әүһелдәгән баланы
Етем ҡылып буламы?! —

тип Теләүҙе азат итә. Теләү шунан һуң, Ҡараһаҡал ғәскәренә ҡушылып, яуға китә.

### 5. Батша түрәләренә һатылған Кинйәғол менән Мәсғүттең Ҡараһаҡал ғәскәренә ҡушылған булып, уны тотоп бирергә йыйынғандары; уларҙың мәкер уйын Ҡараһаҡалдың белеп ҡалғаны, үҙ хөкөмөн ҡылғаны

Берҙән-бер көн Ҡараһаҡалдың бөтә халыҡты аяҡландырғанын батша түрәләре белә лә уны тотоу уйына килә. Кәңәш итеү өсөн Ҡатайҙан — Таймаҫ тарханды, Тамъяндан — Морат

мулла менән Мәсғүт старшинаны, Бөрйәндән Кинйәғол старшинаны һәм бүтән бик күп кешеләрҙе саҡыралар. Губернатор былар менән Ҡараһаҡалды нисек тотоу тураһында кәңәш итә. Күп һөйләшкәндән һуң, килеүселәр араһынан Кинйәғол менән Мәсғүткә ғәскәр йыйырға, шуны Ҡараһаҡал янына ебәрергә [булалар]. Был ғәскәргә, Ҡараһаҡал ғәскәре араһына инеп, бергә [йөрөгән булып], уны йә тотоп, йә үлтереп, башын алып килеүҙе йөкмәтәләр. [Кинйәғол менән Мәсғүт], икеһе ике яҡтан икешәр мең ғәскәр йыйып, Ҡараһаҡал янына китә.

Былар барғанда, Ҡараһаҡал үҙенең ғәскәр башлыҡтары — Яппар, Йосоп, Теләүкәй, Йәнтәк, Ҡарағай һәм тағы бер нисә батыры менән яуҙан ҡайтып ултыра икән. Мәсғүт менән Кинйәғолдоң ғәскәре килеүе тураһында хәбәр алғас, уларҙы ҡаршыларға үҙ кешеләрен ебәргән. Килгәс, былар:

— Беҙ ҙә батшаға ҡаршы баш күтәрҙек, — тигәндәр. Ҡараһаҡал быларға рәхмәт белдергән дә:

— Һеҙ сит ерҙән килгән кеше. Был тирәләге ер-һыу менән таныш түгел. Ғәскәрегеҙҙе егермешәр кешелек төркөмдәргә бүлеп, беҙҙең кешеләр араһына таратығыҙ, — тип бойороҡ биргән, ти. Быларҙың үҙҙәрен һынағансы тип, бер ҙә яуға ебәрмәй, яңыраҡ килгән кешеләрҙе ҡаршыларға ғына ҡуйған, ти.

Берҙән-бер көн Ҡараһаҡал үҙенең дуҫы Антон менән уның ҡыҙын эйәртеп ҡайта. Ҡараһаҡалдың табырында, яуҙан ҡасып килгән Аҡай, Килмәттәрҙең ҡыҙҙары, ҡатындары ла була. Ҡараһаҡал Антондың ҡыҙын да башҡорт ҡыҙҙары менән бер күргәнгә, өшкәмә* тарата башлайҙар. Илгә йәшерен хат яҙалар. «Ҡараһаҡал башҡорт түгел: уның мәрйә бисәһе бар» тигән хәбәр менән ил тултыралар. Ҡараһаҡалдың аулаҡта Антон ҡыҙы менән һөйләшеп ултырғанын күреп, был өшкәмәне тағы ла көсәйтәләр.

Берҙән-бер көн яуҙан ҡайтып килгәнендә, Теләүҙе тотоп, ҡалаға алып китеп барған батша һалдаттарын осратып, Ҡараһаҡал уларҙы туҡтата ла: «Нишләп батша дошмандарын һөйрәтеп йөрөтәһегеҙ? Әллә ҡасан аҫырға кәрәк ине! Шулай йомшаҡ маташыуығыҙ өсөн үҙегеҙҙе ябып оҙатырға кәрәк! — тип, Теләүҙе тотоп алып килгән башлыҡтарҙың үҙҙәрен [тотоп, аяҡ-ҡулдарын сырмай ҙа] батша һалдаттары һағында губернаторға ебәрә. Теләүҙе, «үҙем аҫам!» — тип, үҙенә алып ҡала. Быны батша һалдаттарының береһе лә танымай. Сөнки [Ҡараһаҡал үҙенең] ғәскәренә яуҙа алған батша кешеләренең кейемдәрен кейендергән булған. Үҙе лә шулай кейенгән була.

Ҡараһаҡал ҡайтыуға, Мәсғүт менән Кинйәғол, тирә-яҡтан хәбәрҙәр алып, батша һалдаттарының ҡайһы ерҙә күпмелеген белеп, алдап, уны шул ергә ебәрергә һүҙ беркетәләр.

Берҙән-бер көн Ҡараһаҡал, кешеләрен йыйып, тағы ла яуға китергә һүҙ ҡуҙғата, батша ғәскәрҙәренең ҡайһы урында икәнен ентекләп тикшереп ултырғанда, Мәсғүт менән Кинйәғол

Ҡараһаҡалды тап батша ғәскәрҙәре ауыҙына ебәрергә торғандар икән, Ҡараһаҡал:

— Бөгөн мине яҡын ҡустым Яҡшымбәт көтә. Уның менән осрашырға, уның ғәскәрҙәрен ҡабул итергә тейешмен, — тип үҙе теләгән яҡҡа китә. Унда ҡаҙаҡтан ғәскәр алып килгән Яҡшымбәт менән осрашып, һуғыша башлайҙар. Батша ғәскәрҙәрен ҡырып, ҡыҫып, Өфөгә саҡлы сигендерәләр. Мәсғүт старшина менән Кинйәғолдоң быға бик эсе боша. Шунан Ҡараһаҡал ҡайтыуға, нисек тә уны үлтерергә һүҙ беркетәләр. Быларҙың һөйләшкәнен Антон ҡыҙы менән Аҡайҙың ҡыҙының ҡыҙы ишетә лә, Ҡараһаҡал ҡайтып төшөү менән, уға әйтәләр. Ҡараһаҡал был Мәсғүт менән Кинйәғолдоң яуыз ниәтен һиҙеп йөрөгән була. Ҡыҙҙар әйтеү менән, уларҙың ҡул-аяҡтарын бәйләп, һаҡ аҫтына ала. Мәсғүттәрҙе яҡлап йөрөүселәр:

— Быларҙы үҙ ҡулыбыҙ менән атабыҙ, — тип һорайҙар. Тик Ҡараһаҡал уларға:

— Улар менән бергә эшләп, башығыҙ яңылышҡан, атҡанда, ҡулығыҙ яңылышыр, тип ҡурҡам, шуға үҙ ҡулым менән атам, — тип үҙ ҡулы менән атҡан, ти.

## 6. Губернаторҙың Ҡараһаҡал ғәскәренә тағы бер һатлыҡты, Аҡай батыр улы Һатлыҡты, ебәргәне; уның һатлыҡ икәнен Ҡараһаҡалдың Аҡай яҙған хаттан белгәне; һатлыҡ йәндәр ҡулынан яраланған Ҡараһаҡалдың ҡаҙаҡ далаһына киткәне; карателдәрҙең илде утҡа тотҡаны...

Губернатор бының менән генә сикләнеп ҡалмаған. Аҡайҙың төрмәләге улын — Абдулланы күп малдар, күп дәрәжәләр биреп, тағы Ҡараһаҡал янына ебәргән. Абдулла Ҡараһаҡалға:

— Ҡасып килдем, — тигән. Ҡараһаҡал Аҡайҙы яҡшы белгәс, Абдулланы бик ҡәҙерләп, сөсө теле менән ҡаршы алған. Бының Аҡай улы булғанына Аҡайҙың ҡыҙының ҡыҙы ла шаһит булған.

Ҡараһаҡал Абдуллаға бик ышанған, күп эштәрен уға тапшырған. Аҡайҙың ҡыҙының ҡыҙы ағаһының Ҡараһаҡалға ҡаршы икәнен һиҙгән, әммә Ҡараһаҡалға әйтмәй йөрөгән. Абдулла һылыуына:

— Әгәр Ҡараһаҡалды тотоп бирһәк, атайымдар ҙа, кейәү ҙә төрмәнән ҡотола, — тип ышандырған.

Ҡараһаҡалдың эше көндән-көн тарҡалыуға барған.

Берҙән-бер көн Ҡараһаҡал Аҡайҙан йәшерен хат алған. Аҡай хатында улынан һаҡланырға ҡушҡан булған. Был хатты уҡығас, Ҡараһаҡал Аҡайҙың ҡыҙының ҡыҙынан Абдулла тураһында һорашып ҡараһа ла, ҡыҙ ағаһын әйтергә эс тартҡан*. Ҡараһаҡал уға Аҡайҙарҙың хатын уҡып ишеттергән дә: «Йә, һылыу, ағаңа ышанабыҙмы?» — тип һорау биргәс, ҡыҙ уға баштан-аяҡ һөйләп биргән.

Был ваҡытта Абдулла юғала. Бер яуҙа Ҡараһаҡалды Мәсғүт менән Абдулла кешеләре яралай. Ҡараһаҡал, үлмәһә лә, һуғышҡа яраҡһыҙ булып ҡала һәм ҡаҙаҡ яғына ҡаса. Унан ҡабат ҡайтмай, ғәйеп була.

Ҡараһаҡал киткәс, халыҡ Абдулла менән Мәсғүттәрҙең ҡылығын аңлай. Бөтә илде батша ғәскәре килеп баҫа. Полковник Тәфкилев яуҙа ҡатнашҡан кешеләрҙең йорт-ерен үртәй, яндыра, бала-сағa, ҡатын-ҡыҙҙарҙы байҙарға һатып бирә, утҡа ташлай, төрлө яҡтарға әсир итеп һата. Шуға халыҡ, зарланып, былай тип йырлай:

Ытырғанһа иленән,
Алтын алып дошмандан,
Батырҙары омпайтһа*,
Бағауылһыҙ* ил өсөн
Арҙындарға* өн итһә,
Батырҙары тарҡалмай,
Бер табандан тормаһа,
Күп яуҙарҙа береккән
Ил өҙлөкмәй* ҡалырмы?
Толпар менгән батыры
Яңғыҙланһа нөгөрҙән,
Илең килгән дошманға
Аҙыра* итмәй нишләһен?
Урал битен һаҡларға
Дошманына яу асҡан,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Көнөн-төнөн яу сапҡан
Ҡараһаҡал батыр ҙа
Яңғыҙлангас, ҡул тартҡас,
Ил ҡаплаған дошманға
Яңғыҙ ай ҙа көн булмаҫ.
Ҡараһаҡал китһә лә,
Һүҙе ҡалды илендә.
Нисек яуға сабырға
Уралыны буйлаған
Юлы ҡалды илендә.

## Ҡушымта

### ИДИГӘ БАТЫР

Борон замандарҙа, үткән быуаттарҙа бик тәҡүә*, бик суфый бер әҙәм бар ине. Үҙе ниһайәһеҙ* бай булып, теләгән нәмәһе янында, Хоҙай уның доғаһын бөтөн һорағанын бирә ине.

Был кеше шул ҡәҙәр дәүләткә малик* була тороп, үҙенән һуң шуны тотарлыҡ, шул дәүләтте идара итәрлек бер улы ла юҡ ине. Берәр баланы күрһә, бик бошона, шундай улы булмауына хәсрәтләнә, Хоҙайға налә ҡылып*, шундай бер фәрзәнде* биреүен теләй ине.

#### 1. Бәрей ҡыҙы Кинйәһылыуҙан, балаһыҙ ҡаңғырған ҡарт суфыйҙан Идигә атлы ир бала тыуғаны

Көндәрҙән бер көндө кис ятырға әҙерләнгәс, тәһәрәтләнеп намаҙ уҡый, Хоҙайҙан үҙенә бер фәрзәнд* биреүен теләй, доға ҡыла, ялына, ялбара, ишеткән-белгән доғаларын уҡып йоҡларға ята. Шул көндө төш күрә, ниндәйҙер һатифтән бер тауыш: «И, бәндә! Урындан тор, арымай-талмай ҡибла тарафына йүнәл», — ти.

Урынынан тора ла бөтөн байлығын, һәммә дәүләтен Хоҙайҙың ихтыярына, уның ҡарамағына ташлай ҙа ҡибла тарафына юл тота. Көндәр, айҙар йөрөй торғас, бик матур ғына ағып ятҡан бер болаҡтың* янына килеп туҡтай. Күргән төш, ишеткән тауыш тураһында уйлай. Шул ваҡыт күк йөҙөндә өс аҡҡош күренә башлай. Уның баш өҫтөндә әйләнәләр. Ағып ятҡан болаҡҡа ҡуныңға теләйҙәр. Уны күргәс, ҡурҡып, юғарыға кире күтәреләләр. Был кеше, ҡоштарҙың ҡунырға теләгәнен күреп, үләндәр, ҡыуаҡтар араһына йәшеренеп, боҫоп ята. Ҡоштар кешенең киткәнен, юҡлығын белеп, болаҡтың ситенә килеп ултыралар. Өҫтәрендәге ҡош кейемдәрен ташлағас та,

бик матур бәрей ҡыҙҙарының ҡиәфәтенә керәләр. Болаҡ һыуына кереп, шыпырлашып шаярып уйнай башлайҙар. Быны күреп торған ҡарт кеше түҙмәй, уларҙың матурлығын, нурани бер мәхлүк икәнлеген күргәс, йәшеренеп торған урынынан сыға ла, ҡыҙҙарҙың кейемдәрен алып йәшеренә. Ҡыҙҙар, ҡарттың был эшен күреп, аптырайҙар, нишләргә белмәйҙәр. Ҡартҡа килеп ялбаралар. Күлдәктәрен биреүен үтенәләр. Ҡарт тыңламай, ишеткеһе лә килмәй.

Ҡыҙҙар:

— Бабай! Һеҙ тыңламайһығыҙ икән, беҙҙең арабыҙҙан беребеҙҙе, күңелегеҙҙең иң яҡын күргәнен һайлап алығыҙ ҙа, башҡаларыбыҙҙы үҙ ихтыярына ҡуйығыҙ, — тиҙәр. Ҡарт араларынан береһен, Кинйәһылыу исемле иң матурын, һайлап ала ла башҡаларын ебәрә.

Киткән ваҡыттарында бәрей ҡыҙҙары:

— Был беҙҙең иң бәләкәс һеңлебеҙ була. Беҙ уны Хоҙайға тапшырҙыҡ. Ул һиңә, һис шикһеҙ, яҡшы ҡатын булыр, тик шуны хәтереңдә тот: һин уның башына, аяғына һәм ҡабырғаһына ҡарама, һис бер ваҡытта күҙеңде төшөрмә, — тиҙәр.

Ҡарт Кинйәһылыуҙы өйөнә килтерә. Көндәр, айҙар үтә. Бик мөхәббәт менән торалар. Көндәрҙән бер көндө ҡарт, Кинйәһылыуҙың башына һәм күҙ төшөрөргә ярамаған башҡа урындарына ла ҡарай, диҡҡәт менән тикшерә: аяҡтарының ҡош аяҡтарына оҡшағанын күреп, хайран була. Уйлана, фекерләнә: «Был — ен ҡыҙы, уның менән тороу ярамаҫ», — тип, айыра. Аҡҡош күлдәген биреп, ебәрә.

Кинйәһылыу, үҙ күлдәген кейеп: «И, минең бай батшам! Мин йөклөмөн, туғыҙ ай күтәрмәле ауырым* бар, һинең балаң ул. Һинең [хаҡыңа уны] һаҡлармын. Һин уны туғыҙ юл сатының уртаһында табырһың», — ти ҙә осоп китә. Ҡарт үҙенең ҡылған эшенә үкенә, ҡайғыра һәм бер нисә көндәрҙән һуң балаһын эҙләп юлға сыға. Көнөн йөрөй, төнөн йөрөй — туғыҙ юлдың сатын таба алмай. Туғыҙ ай тигәндә, эҙләгән урынына килеп етә. Кинйәһылыу баш өҫтөнә осоп килеп: «Балаңды ал, мин уны һинең өсөн һаҡланым», — ти ҙә баланы ташлай.

Ҡарт, баланы алып өйөнә ҡайтып килә. Баланы тәрбиә ҡылырға керешә, көнө-төнө шуның артынан йөрөй. Ҡартҡа бала тәрбиәләү, уның артынан йөрөүе бик ҡыйын тойола. Берҙән, бик мәшәҡәт булғанға һәм, икенсенән, ғибәҙәтенә зыян килтергәнгә, баланы бер ҡарсыҡҡа тапшыра ла үҙе дәрүиш булып сығып китә. Ҡарсыҡ баланы ҡарай, үҫтерә, Идигә тип исем бирә.

## 2. Идигәнең бер дөйә балаһына дәғүәләшеүселәргә ғәҙел хөкөм сығарғаны

Идигә ҙурайғас, ҡуйсы була: ҡуй артынан йөрөй. Бер көн иртә менән сәхрәлә ҡуй көтөп йөрөһә, ике кешенең бер дөйә

[балаһы] үсөн талашҡанын күрә. Тегеләр Идигәне күреп, уға хөкөмгә килмәксе булалар. Береһе тороп:

— Падачинең блүге бозолмайды* тигән боронғолар, — ти.

— Әйҙә, шул чупанға* барабыҙ, ул нимә менән хөкөм ҡылһа, шуға риза булабыҙ, — тип Идигәгә киләләр.

Береһе:

— Бына был дөйә балаһын күп ваҡыттан бирле юғалтҡан инем, хәҙер таптым. Инәһе лә бар, — ти. Икенсеһе лә шул һүҙҙе әйтә. Идигә:

— Һеҙ инәләрен алып килегеҙ, мин дәғүәгеҙҙе бөтөрәм. Инәләрен килтермәһәгеҙ, мөмкин түгел, булмай, — ти.

Инәләрен килтерәләр. Идигә, дөйә балаһын нуҡталамаҡсы* була. Бута* тулай, нуҡталатмай. Идигә бер-ике мәртәбә ҡамсы менән һуҡҡас, бик ҡыҙғаныс тауыш менән ыңғыраша. Шул ваҡытта теге дөйәнең береһе килеп, бутаны ялай башлай, ҡыҙғана. Инәлек шәфҡәте килеп, бута менән бергә ыңғыраша. Идигә:

— Бына шул дөйә бутаның инәһе, — ти.

## 3. Идигәнең, мине таланы, тип ғәйепһеҙ егеткә яла яғыусы ҡыҙҙы фашлағаны

Ул ваҡыттарҙа Иҙел буйында Туҡтамышхан исемле бер нуғай ханы бар икән. Был бик мәшһүр хан булып, шөһрәте, даны бөтөн әтрафты* тотҡан икән. Идигәнең ваҡиғаһы, дөйә низағаһы*, был ханға ишетелеп, хандың диҡҡәтене* йәлеп иткән. Был хан, бик ҙур мәмләкәт* эйәһе булһа ла, улы булмағанға күңеле һыныҡ булып, бер фәрзәнденең юҡлығы хәсрәтләндерә икән. Идигә ваҡиғаһы хандың арзуһыны* арттырған: ул Идигәне килтереүҙәрен талап иткән. Хандың теләгәне алдына килә*; Идигәне килтерәләр. Хан уны бик ярата, матурлығына, һүҙгә сәсәнлегенә хайран була. Һәр ваҡыт янында тотоп, үҙ балаһы кеүек яратып тәрбиәләй башлай. Идигә үҫеп буйға еткәс, бик матур, назырһыҙ ямал эйәһе* була.

Бер ваҡыт бер ҡыҙ менән бер егет дәғүәләшеп ханға киләләр. Ҡыҙ:

— Тәҡсир*, шул егет минең алтын йөҙөгөмдө тартып алды һәм намыҫыма тейҙе, — тип әйтә.

— Бушты һөйләй. Ялған, — тип егет иһә инҡар итә.

Хан нисек хөкөм итергә белмәй, уйлана, өс көнгә ҡәҙәр ҡәтғи бер ҡарарға килә алмай. Идигә:

— Мөхтәрәм ата, был ҡыҙ менән егет өсөнсө көндән бирле киләләр. Уларҙың берәй эше бармы? — тип һорай. Хан:

— Уларҙың дәғүәһе бар: ҡыҙҙың әйтеүенсә, егет ҡыҙҙың алтын йөҙөгөн алып, хыянат иткән. Етмәһә, намыҫына тейгән. Егет иһә инҡар итә, ялған, ти. Шуны нисек хәл итергә белмәйем, аптырап торам әле, — ти. Идигә:

— Быны хәл итеү ҡыйын түгел. Бик мөмкин булһа, һеҙ икеһен дә саҡырып, ҡыҙҙың ҡулына бер түбәтәй бирегеҙ ҙә уны бик ныҡ ҡыҫырға, егеткә бирмәҫкә ҡушығыҙ. Егеткә иһә шуны тартып алырға бойороғоҙ. Шул ваҡыт халыҡ заһир* булыр: дәғүә хәл ителер, — тигән.

Хан был мәслихәтте* бик яратып, ҡыҙ менән егетте саҡыра, ҡыҙҙың ҡулына түбәтәй биреп, егеткә шуны алырға ҡуша. Бик оҙаҡ тартышҡандан һуң, егет арый, тирләп бөтә, хатта ки хәлдән тайып йығыла. Түбәтәйҙе ҡыҙҙың ҡулынан ала алмай. Хан уларҙы туҡтатып, Идигәнән мәсьәләне хәл итеүен һорай. Идигә:

— Тәҡсир, күрҙегеҙме, егет, шул ҡәҙәр тырышып, тирләп-бешеп, түбәтәйҙе ала алманы. Ҡыҙҙың алтын балдағын алып хыянат иткән булһа, шул түбәтәйҙе ҡыҙҙың ҡулынан ала алмаҫ инеме? Ҡыҙҙың дәғүәһе батил*, урынһыҙ, — ти.

## 4. Ике ҡатынға Идигәнең бер баланы «бүлеп биргәне»

Бер нисә көндән һуң дәғүәләшеп ханға ике ҡатын килә. Бер бәләкәс баланы һәр береһе үҙенеке тип дәғүә итә. Хан нисек хөкөм итергә белмәй. Хан:

— И, минең Идигә улым, быны нишләргә, нисек хөкөм итергә? — тип һорай. Идигә:

— Тәҡсир, баланың ике ҡулынан да ике ҡатынға тотторороҙ ҙа, уртаға баҫығыҙ. Ике ҡулын икеһенә тотторол сабырға иткәндә, бер ҡатын илап:

— Тәҡсир, үлтермәгеҙ! Зинһар, үлтермәгеҙ! Уға булһын, тик тере булһын, тип илай. Икенсеһе иһә:

— Тәҡсир, сабығыҙ, үлтерегеҙ, икебеҙгә ике ҡулы булыр, — ти. Идигә:

— Тәҡсир, күрҙегеҙме? Теге үкһеп-үкһеп илағаны, сабыйының сәләмәт ҡалыуын теләгән ҡатын, шул баланың инәһе була. Инәлек шәфҡәте баланың сәләмәт ҡалыуын теләй, үлеүен теләмәй. Икенсеһенең дәғүәһе ялған, — ти.

Шул ваҡиғанан һуң, Идигә халыҡ араһында бик мәшһүр булып китә. Хан уны бик ярата, үҙ улынан артыҡ күреп тәрбиә итә башлай. Идигә бик рәхәт кенә хандың һарайында ваҡытын уҙғара. Киләсәктә нимә күрәсәк, ниндәй ваҡиғалар уны көтә, истиҡбал* пәрҙәһе артында йәшеренгән, мәғлүм түгел.

## 5. Улы хисабындағы Идигәгә ханбикәнең ғашиҡ булғаны, егет яҡынлыҡ ҡылмағас, унан үс алғаны [ханға энә ҡаҙалтып, уны үлтерергә итә, тип яла яҡҡаны, Идигәгә боҙолған бауыр ашатып, бәүелен эсергәне], Идигәнең илдән ҡасып киткәне

Туҡтамыш хандың бик матур бер ҡатыны бар икән. Был ҡатын Идигәгә шул ҡәҙәр ғашиҡ була, үҙен үҙе тота алмай,

көнөн-төнөн бөтә фекере Идигә хаҡында була. Идигәне күргән ваҡытында, урынында тора алмай, дерелдәй, ҡалтырана, күҙҙәре йәшкә тулып, аһ ороп ергә йығыла.

Бер көндө Туҡтамыш хан ауға китә. Хандың юҡлығынан файҙаланып, ҡатыны Идигәнең янына керә:

— Аһ минең ғашиҡ булған матурым! Мин һине сикһеҙ яратам. Бөтөн вөжүдем менән һөйәм! Һинһеҙ тора алмайым! Ал мине үҙеңдең ҡосағыңа! Минең мөхәббәтемде кире ҡаҡма, мине үлтермә! — ти. Идигә:

— И минең ҡәҙерле инәм! Мин һиңә бала булам, һин минең туған инәм булмаһаң да, һине үҙ инәм кеүек һөйәм. Нисек иттереп һин әйткән эште эшләйем һәм шундай хыянат итәйем? — ти.

Хандың ҡатыны бик өмөтһөҙ булып, Идигәгә бик асыуы ҡуҙғала, уға ҡаршы күңелендә бер ҡара уй һаҡлай. Хан ауҙан ҡайтҡас, хандың бикәһе:

— Тәҡсир, һин тәрбиә иткән Идигә бәхет йондоҙонда тыуғанға оҡшай, уның хозурында бар нәмә лә мөләйем, бөтә нәмә лә уға мотиғ* күренә. Һинең тәхетеңә зыян килтермәһә ярар ине, — ти.

Ханға был һүҙ бер ҙә тәьҫир итмәгәнгә:

— Мин уның тәхетте алыуынан ҡурҡам. Алыр ҙа ул! Быны иртән сәләмләргә килгән ваҡытында һиҙерһең, — ти. Хандың бикәһе ханға белдермәй генә тәхеттең өҫтөнә түшәлгән келәмгә энә ҡаҙай. Икенсе көн Идигә сәләмлектән сыҡҡан ваҡытта Ханбикә:

— Тәҡсир, һиҙҙегеҙме, ул баланың, һеҙҙе үлтереү өсөн, ҡурҡыныслы икәнен, белдегеҙме? — ти, Ханбикә, сапанына ҡаҙалған энәне күрһәтеп:

— Бына, тәҡсир, һеҙҙең тәхетегеҙгә энә ҡаҙалған, һеҙҙе үлтереү өсөн шул эште эшләгән.

Хан:

— Эйе, үҙем дә бер уңайһыҙлыҡ һиҙәм, быға ҡаршы нимә эшләргә икән? — ти. Хандың бикәһе:

— Тәҡсир, ул бит хан нәҫеленән, нескә тәрбиәлә үҫкән кеше. Насар аштар килешмәҫ. Ҡуйығыҙҙың һаҫып ҡалған бауырын ашатайыҡ, шунан ул, һис һүҙһеҙ, ауырыу ҡалыр, түҙмәҫ. Шунан үлер ул. Әгәр ҙә мәгәр, унан ҡотолһа, тағын да бер сара бар. Уны һуңынан эшләрбеҙ, — ти.

Хан бик мәхкүл* күрә. Ханбикә боҙолған бауырҙы бешереп килтерә. Идигә уны киҫәккә бүлгеләп, ваҡлап турап-турап ашай — бер нәмә лә булмай. Хан:

— Инде нишләйбеҙ, бының тәьҫире булманы, ахырыһы, — ти.

Ханбикә:

— Тәҡсир, иртән иртә торормон да бер стаканға һейҙек ҡуйырмын. Идигә килгәндә, эсемлек эсергә ҡыҫта. Нисек тә

булһа эсер, эсергә ризалыҡ белдерһә, ошо һейҙекте эсерерһең, — ти.

Иртә менән Идигә килгәс, хан эсемлек эсергә димләй, әҙерләгән нәмәне бирә. Идигә алдына, уңына, һулына ике мәртәбә һибеп, ҡалғанын эсә лә, бер һүҙ ҙә әйтмәй сығып китә. Күңелендә хандың ошо хыянатына ҡаршы асыу тыуа. Сәхрәгә сыға, тарпан* аттарынан булған Сараспан [Һарыса] исемле атын эҙләп табып менә лә бер тарафҡа ҡарап юл тота.

## 6. Меңйәшәр Ҡарт бабаның ханға кәңәш биргәне. Ҡасҡан Идигә артынан Кинйәғас улы Кинйәбайҙы ебәрткәне

Ханбикә:

— И минең тәҡсирем, һеҙ Идигәнең мөғәмәләһен һиҙҙегеҙме, бауырҙы бер нисә киҫәккә бүлгеләүе — «Һеҙҙең дәүләтегеҙҙе шундай ваҡ киҫәктәргә бүлгеләрмен», тигән һүҙ була. Нисек тә булһа, хәйлә менән Идигәне киткән юлдан ҡайтарырға, бер аҡыллы кешенең ярҙамы менән килтерергә кәрәк, — ти.

— Ярар, — ти. Хан был кәңәште тейешле табып, мәмләкәтенә яусылар* ебәртә, оло-кесеһен йыйҙырта. Улар араһында мең йәшкә кергән Ҡарт баба исемле бер кеше бар икән. Хан һәр ваҡыт һәр бер эшендә уға кәңәш итә икән. Уның мәслихәте* менән йөрөй икән.

Ҡарт баба үҙенең ғүмерендә күргән-белгәндәрен һөйләй. Башынан үткән ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы әйтеп, Хандың күңелен асыр, йыуатыр булған. Хан Ҡарт бабаға Идигә менән булған ваҡиғаһын, уның китеүен дә һөйләп биргән.

Ҡарт баба:

— Тәҡсир! Идигә бик ҙур хан нәҫеленән, үҙе бик матур, аҡыллы, дана егет*, һеҙҙең мөғәмәләгеҙҙән ул бик хурланған, йәберләнгән. Шул сәбәпле китергә мәжбүр булған. Уны ҡайтарыу бик еңел түгел. Ҡайтарыу өсөн, иң яҡын кешеһе, күңеле һөйгән дуҫы булырға тейеш, мәмләкәтегеҙҙә* шундай кеше бармы, табылырмы? — тигән. Был һүҙҙе тыңлап торған халыҡ бер ауыҙҙан:

— Ағисин! — тип ҡысҡырған. Ағисин тигән кеше Алчин ырыуынан Идигәнең бик яҡын дуҫы булған. Халыҡ һәммәһе лә уның килеүен, Идигәнең артынан барыуын үтенгән. Хан, Ағисинде саҡырып алып килергә тип, ун атлы кеше ебәргән. Былар барһалар, Агисин бик ҡаты ауырый, түшәктә ята икән. Ханға килеп һөйләгәндәр. Хан ҡайғырған, кемде ебәрергә белмәгән. Халыҡ:

— Тәҡсир, Кинйәғас улы Кинйәбайҙы ебәрегеҙ. Ул да Идигәнең яҡын дуҫы. Ул барһын, — тип шаулаған. Хан Кинйәбайҙы ебәргән. Кинйәбай, көн-төн йөрөп, Идигәне эҙләп тапҡан.

### 7. Кинйәбайҙың ҡасып киткән Идигәне ҡыуып еткәне, Ағисин дуҫының әжәл түшәгендә ятыуын әйтеп, уны кире борғаны

Кинйәбай Идигәгә яҡынлап:

— И минең ҡәҙерле дуҫым! Иҫән-һау йөрөйһөңмө? Ҡайҙа бараһың? Ниңә был ҡәҙәре ҡайғылыһың? — тигән. Идигә:

— И минең дуҫым! Минең хәсрәтемдең сиге юҡ. Туҡтамыш хандан йәберләндем, һин өйөңә ҡайта бир. Мин Шаһ Тимер ханға барам. Ул мине үҙенең фәрзәнде* кеүек ҡабул итә. Хәтереңдә тот:

— Мин һеҙҙең мәмләкәтте* бөтөнләй ҙә ташламам, кире ҡайтһам, Туҡтамыштың мәмләкәтен ҡанға буяп, халҡығыҙҙы атымдың аяғы аҫтында тапатырмын, — тигән. Кинйәбай:

— И дуҫым, Идигә, һин ҡиммәтле — ағастың ботағы, толпарҙың тояғы, атҡан уҡ шикелле, күктән ингән ҡара ҡошһоң, бәрей шикелле матур, аҡыллыһың, кире ҡайт. Һинең ҡайтыуыңды яҡын дуҫың Ағисин үтенеп теләй, — тигән.

Идигә Кинйәбайҙың һуңғы һүҙенән бик мөтәҫир* булып, кире ҡайта.

### 8. Туҡтамыш хандың иҫертеп үлтермәк булыуын һиҙгән Идигәнең яңынан ҡасҡаны, ҡыуғынды ҡырғаны

Идигә туп-тура Ағисин дуҫының өйөнә килә. Икеһе ҡосаҡлашып бик оҙаҡ илашалар. Ағисин:

— И минең йән дуҫым, нигә килдең? Ни өсөн кире ҡайттың? Бөтөн мәмләкәт кешеләре йыйылған. Хан асыуланған. Һине үлтерергә вәғәҙәләшкәндәр, Тәҡсир* һине үлтертәсәк, һин нисек тә булһа ҡотолоу сараһын, кире китеү юлын ҡара, — тигән.

Шул ваҡыт Идигәнең янына бер кеше килеп:

— Һеҙҙе хан саҡыра. Тиҙ генә килеүегеҙҙе үтенә. Үҙенең ҡылған эшенә тәүбә итмәксе, һеҙҙән ғәфү үтенмәксе була, — ти. Идигә хандың дәғүәһен ҡабул итеп, уның хозурына* бара. Һарай халыҡ менән тулған, шарап эсеп ултыралар икән.

Хан Идигәгә шарап тәҡдим итә, Идигә ҡабул итеп, эсә башлай. Ағисин, хандың хыянатын, дуҫының ҡурҡыныс аҫтында икәнен белгәнгә, әкрен генә килә лә Идигәнең атының тартҡыһын бик ныҡ иттереп тартып бәйләй, башҡаларҙың аттарының өҙәңгеләренең бауын киҫеп ташлай.

Идигә хандың насар уйҙа икәнен һиҙә лә:

— Мин тышҡа сығып керәйем әле, — тип сыға ла Һарысманына менеп, ҡаса. Халыҡ Идигәнең ҡасҡанын белеп, артынан ҡыумаҡсы була — барыһының да өҙәңгеһе юҡ, киҫелгән. Аптырайҙар. Идигә, киң сәхрәгә сығып алып, бөтөн көсө менән Һарысаны ҡыуа. Артынан хандың ҡыуғынсылары ла

яҡынлаша башлай. Идигә уларҙы күргәс, ҡасып ҡотолоу мөмкин булмағанын белеп уларға ҡарай китә: тере ҡойонсо дошманға бирелгәндән, һуғышып үлгәнем артыҡ, тип, бик ҡаты һуғышҡа керешә. Идигә шул ҡәҙәр ҡылыс менән һуғышырға, уҡ менән атышыуға оҫта булғанға, дошмандар аптырашалар. Уны еңеү мөмкин булмағанға, үлгәне үлеп, иҫән ҡалғандары ҡасалар.

## 9. Идигәнең үҙен һыйындырған бәрей затлы Фасатин Алифтың ен затлы ҡатынына ғашиҡ булғаны, шул сәбәптән уның ирен үлтергәне, үҙен алып киткәне, Шаһ Тимергә килгәне

Идигә шатлана, дошмандарын ғалиб* иткәненә ҡыуана, арып-талып Шаһ Тимер хан тарафына юл тота. Көндәр, айҙар йөрөй — Шаһ Тимергә етә алмай. Юлда килгәндә, Фасатин Алиф исемле бер кеше тураһында ишетә. Был кеше ен-бәрей нәҫеленән булып, михнәт-мәшәҡәт күргәндәрҙе, донъяла ғазап сиккәндәрҙе йыуата, тәсәлла* бирә икән.

Идигә Һарысаны бер сүлдә ҡалдыра ла, мәҙкүр* кешенең янына барып, күргән ғазаптарын, үткәргән михнәттәрен һөйләмәксе, михнәтенә бер дауа тапмаҡсы була. Мосафир ҡиәфәтендә Фасатин Алиф янына керә. Фасатин Алиф:

— Һин ниндәй кеше, ҡайҙан килеп, ҡайҙа бараһың? — ти. Идигә:

— Мин Ватанымдан айырылған бер мосафирмын, ҡайҙа эш тапһам, шул ерҙә торорға уйым бар, — ти. Фасатин Алифтың ен нәҫеленән бик һылыу ҡатыны булған. Ҡатыны иренә:

— И минең ирем, һин күп ваҡыт өйҙә тормайһың. Мин яңғыҙ ҡалам, күңелһеҙ була. Шуның өсөн был егетте миңә бир! — тигән. Фасатин Алиф Идигәне ҡатынына тапшыра.

Көндәрҙән бер көн Фасатин ауға китә, Идигә уның ҡатынынан:

— И матур булған ен ҡыҙы, мин һиңә ғашиҡ булдым, аҡылымдан яҙам инде. Һиңә ҡауышыу, үҙемдеке итеү өсөн, миңә нимә эшләргә кәрәк? — ти. Ҡатын:

— Ҡәҙерле Идигә, мин иғтираф* итәм, бик ныҡ һиҙәм, мөкүрәләтә* ен ҡыҙын адәмзадә* нисек иттереп ала алыр, — ти. Идигә:

— Мин Хоҙайҙың ярҙамына, рәхмәтенә ышанам. Хәйлә менән булһа ла мәҡсүдемә* етә алырмын, — ти.

Ҡатын:

— Ниндәй хәйлә итә алырһың? — ти.

Идигә, яуап бирмәҫтән, буҫ ағасының янын ҡаҙый башлай. Кеше буйы ҡәҙәр тәрәнлектә ҡаҙығандан һуң, ҡулына ҡылысын алып төшә лә, соҡорҙоң өҫтөн ҡаплай. Шул көн кис Фасатин Алиф, эттәрен эйәртеп, ауҙан ҡайтып килә. Атты

бәйләргә ҡушып ҡатынына ҡысҡыра. Ҡатыны сыҡмағас, асыу менән өйгә ҡарап йүгерә. Ҡаҙылған соҡорға төшә лә китә. Идигә ҡулындағы ҡылысы менән Фасатин Алифте киҫәк-киҫәк итеп турап ташлай.

Ҡатынды үҙе менән алып, Шаһ Тимер хан тарафына юл тота. Йөрөй торғас, Шаһ Тимерҙең мәмләкәтенә, уның һарайына килеп сыға, хан бик шатлыҡ менән Идигәне ҡабул итә.

## 10. Идигәнең ен ҡатынын үҙенеке итергә теләгән Шаһ Тимерҙең, ауырыған кеше булып, уны дауа булыр сәскә артынан ебәргәне, Идигәнең сәскә менән бергә бисәһенең әхирәтен алып ҡайтҡаны, уны ла кәләш иткәне

Хандың хәйләкәр бер вәзире булған. Һәр ваҡыт Идигәнең өйөнә килеп-китеп йөрөгән. Идигәнең ҡатынын бик яратҡан. Бер көндө ханға ҡатындың матурлығын, сикһеҙ һылыулығын һөйләп, нисек тә булһа, ҡатынын алыуы тейеш икәнен әйткән.

Хан да быны дөрөҫ күреп, нисек иттереп алыу тураһында кәңәшләшкән. Вәзир:

— И, Тәҡсир, һеҙ иртән ауырыу булып ятығыҙ, бөтә йортто йыйып кәңәшләшегеҙ. Беҙ халыҡ араһында: хан ауырый, табиптар Синаб даръя атауында бер ҡыҙыл гөл бар. Шунда ғәййүр* эшлекле, яҡшы әҙәмде ебәреп, шуны алдырырға кәрәк. Хандың ауырыуына шул шифа, тип әйттеләр, — тиербеҙ. Шул һүҙҙе таратырбыҙ. Һеҙ Идигәнең барыуын илтимас* итерһегеҙ, ул, әлбиттә, һүҙегеҙгә ҡаршы килмәҫ. Барыр. Маҡсатығыҙға шунда етерһегеҙ, — ти.

Шаһ Тимер вәзирҙең һүҙен бик оҡшата. Шуға риза булып, Идигәне саҡырып, әлеге сәскә артынан барыуын үтенә.

Идигә, өйөнә килгәс, ваҡиғаны ҡатынына һөйләй, кәңәшләшә. Ҡатыны:

— И, минең ҡәҙерле Идигәм, һин бер ҙә ҡайғырма, хәсрәтләнмә: мин һәр ваҡытта һиңә садиҡмын*. Һинән бер нәмә теләйем. Мине бер кеше лә күрмәһен өсөн, өс ҡат тимер менән әйләндерелгән өй һалып бир, — ти. Идигә тыңлай. Бик ҡыҙыу эшләп, бер айҙа тамамлай. Ҡатынына кәрәк булған жәмиғ* нәмәләрҙе шул өйҙөң эсенә ҡалдыра. Үҙе сәфәргә китергә йыйына. Күрешкән ваҡытта ҡатыны:

— Идигә, бына минең шул йөҙөгөмдө ал. Һинең бара торған юлың ете айлыҡ. Яҡын барған ваҡытта, бер ҙур күлгә осрарһың. Шул күлдең яғаһында* бер матур йорт булыр. Йортҡа кереп йөҙөктө күрһәтерһең, — ти.

Идигә ҡатыны менән хушлашып юлға сыға, көнө-төнө йөрөй. Аҙналар, айҙар үтә, Синаб даръя атауына яҡынлашҡан ваҡыт бик ҙур, матур күлгә осрай. Күлдең сахилендә* һәйбәт кенә йортто күреп Идигә шатлана. Атынан төшә лә йортҡа керә.

Йорт эсендә ғәжәп һылыу бер ҡыҙ ултыра. Уның матурлығын, һаяһыҙ ямалын* тәғриф итеү* мөмкин түгел. Идигәнең ҡулындағы йөҙөктө күреү менән ҡыҙ Идигәнең ҡосағына атыла, бик үкһеп-үкһеп илай башлай.

Был ҡыҙ Идигәнең ҡатынының дуҫы булған. Ҡыҙ ваҡыттарында икеһе бер иргә, бер кешегә барырға вәғәҙәләшкән булғандар. Ошо вәғәҙәһендә тороу өсөн, Идигәнең ҡатынына үҙенең ҡулындағы йөҙөгөн биргән. Идигәнең ҡулында үҙенең йөҙөгөн күреү менән, шатлығынан ни эшләргә белмәй, дуҫының, әхирәтенең ире уға ла ир буласағына шатлығынан күҙ йәштәре түгелә башлай.

Идигә был ҡыҙҙы үҙе менән алып Синаб даръя атауына бара. Ҡыҙыл гөлдө бик күп иттереп ала ла, Шаһ Тимер ханға ҡайтырға тип, юлға сыға. Көндәр, айҙар үтә, Шаһ Тимергә сәләмәт килеп етәләр. Ҡатыны, өйө үҙе бар ваҡыттағы шикелле сәләмәт булғанға шатлана, ер йөҙөнөң беренсе һылыуҙарҙан булған ҡатындары менән рәхәтләнә.

## 11. Шаһ Тимерҙең Идигәне үҙенең күптән үлгән атаәсәһенең хәлен белергә ебәргәне, уны утта яндырырға ниәтләгәне; Ҡош һүрәтенә кергән беренсе бисәһенең уны ҡотҡарғаны; Идигә биргән хат буйынса, Шаһтың теге донъяға юл алғаны, янып үлгәне

Идигә ханға ҡыҙыл гөлдө килтереп бирә. Әлеге вәзир Идигәнең алып килгән ҡыҙын күргәс, матурлығын, тәғриф* мөмкин булмаған бер ямал* эйәһе икәнен ханға һөйләй. Идигәне тағын да бер яҡҡа ебәреп, икенсе тапҡыр тәжрибә эшләп ҡарарға ҡуша.

Хан, Идигәне саҡырып:

— И минең һөйөклө фәрзәндем, мин һине үҙемдең төрлө эштәрем, илтимаҫтарым* менән борсойом. Һинән башҡа минең йүнле бер кешем булмағанға, һәр бер эште атҡарыуҙы һиңә тапшырырға тура килә. Эш бына нимәлә:

— Минең ата-әсәм күптән үлеп бөткән. Уларҙың ҡәберҙәге хәле миңә мәғлүм түгел. Ниндәй хәлдәрҙә, ғазаптамы, рәхәтлектәме — мин белмәйем. Һин барып уларҙың хәлен белеп килһәң тип үтенәм, — ти. Идигә бик хәсрәтләнеп, өйөнә килеп беренсе ҡатынына һөйләй:

— Ни хәл итеп ҡарарға? — тип һорай. Ҡатыны:

— Һин бер ҙә ҡайғырма, бының сараһын үҙем беләм. Бына шул ҡағыҙҙы ал да ханға бар, — ти. Идигә ханға килеп:

— И минең ханым! Һеҙҙең бойороғоғоҙҙо үтәргә әҙермен, — ти.

Хан алдан сәхрәлә күп иттереп утын әҙерләтеп ҡуйғанға, Идигәне шул урынға алып бара. Хандың янындағы кешеләр һис нәмәгә ҡарамаҫтан Идигәне утын араһына ташлап яға

башлайҙар. Идигәнең беренсе ҡатыны бәрей ҡыҙы булғанға, бер ҙур ҡош һүрәтенә кереп, ирен ут эсенән алып сыға ла, өйөнә килтерә. Йыйылған халыҡтан береһе лә быны күрмәй, яныш көл булды, тип уйлайҙар.

Идигә икенсе көн иртә менән тороп көл араһына кереп ята. Хандың кешеләре Идигәнең һөйәктәрен күрмәксе булып килһәләр, Идигә янмаған, бөтөнләй һау көйөнсә көл араһында ята.

Был хәбәр халыҡ араһына тарала, ишеткән бер кеше хайран була. Идигәнең Вәли аллаһ* икәненә, кәрамәт* күрһәтәсәгенә ышаналар. Шаһ Тимер, Идигәне саҡырып, ялынып ялбара. Тиҙ генә килеүен үтенә. Идигә кереп килеү менән хан урынынан тороп:

— И минең ҡәҙерле улым, ни хәл, ата-әсәмдән хәбәр килтерҙеңме? — ти. Идигә ханға ҡатыны биргән ҡағыҙҙы сығарып бирә. Хан:

— «И, беҙҙең улыбыҙ Шаһ Тимер, беҙ бик рәхәт тыныслыҡта торабыҙ, беҙҙең тормошобоҙҙо ер йөҙөндә булған хандарҙан береһе лә күргәне юҡ, һис береһендә лә булыуы мөмкин дә түгелдер», — тигән һүҙҙәрҙе уҡый башлай.

Хан уҡып сыҡҡас та:

— И Хоҙай, мин хәҙер үлһәм, ата-әсәмә булған яҡшылыҡты миңә лә бирерһеңме? — ти. Сәхрәгә ҙур иттереп ут яҡтыра ла, бөтә балалары менән шунда кереп үлә.

Пәйғәмбәребеҙ хәҙистә* әйткән: «Кешегә яманлыҡ итмә, үҙең мөбтәлә булырһың», тип. Ошо һүҙ Шаһ Тимерханға ҡағылды, ул мөбтәлә булды. Идигә бик күп йылдар Шаһ Тимер мәмләкәтендә ханлыҡ итеп, ҡартайып үлә, урынына улы Нур Ғәли хан булып рәхәт тыныслыҡта хөкөм һөрә.

## Аңлатмалар

Аңлатмалар түбәндәге тәртиптә төҙөлдө:

1. Иң әүәл китаптың ошо өлөшөндә ҡабат-ҡабат файҙаланылған сығанаҡтарҙың шартлы ҡыҫҡартмалар теҙмәһе теркәлде.

2. Текстарға ҡағылышлы өлөшөндә иһә:

а) конкрет текст ҡасан, ҡайҙа, кем тарафынан, кемдән яҙып алынған йәки ҡасан баҫтырылған, шул турала мәғлүмәт бирелде;

б) һандар менән тамғаланып, географик урындар хаҡындағы иҫкәрмәләр яһалды.

3. Текстарҙағы йондоҙсоҡ (*) менән билдәләнгән һүҙ һәм һүҙбәйләнештәргә китаптың «Һүҙлек» өлөшөнән аңлатма алырға була.

### Шартлы ҡыҫҡартмалар

БНТ. Т.2 — Башкирское народное творчество: Сост., авт. вступ. ст., коммент. Фануза Надршина; Ответ. ред. Лев Бараг. — Уфа: Башкирское кн. издательство, 1987. — Т. 2. Предания и легенды.

БХИ. 1-се том — Башҡорт халыҡ ижады. Материалды һайлап алыусылар, төҙөүселәр, аңлатма биреүселәр, инеш мәҡәлә һәм һүҙлек авторҙары Әхмәт Сөләймәнов менән Розалия Солтангәрәева; Яуаплы мөхәррире Ғайса Хөсәйенов. — Өфө: Китап, 1995. — 1-се том: Йола фольклоры.

БХИ. 2-се том — Башҡорт халыҡ ижады / Төҙ., инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар, һүҙлек, мотивтар күрһәткесе авторы Ф. А. Нәҙершина; Яуаплы мөхәрр. К. Мәргән менән Ә. М. Сөләймәнов. — Өфө: Китап, 1997. — 2-се том: Риүәйәттәр, легендалар.

БХИ. 3-сө том — Башҡорт халыҡ ижады: Эпос / Төҙөүсеһе Әхмәт Сөләймәнов; Инеш мәҡәлә Мөхтәр Сәғитовтыҡы; Һүҙ ахыры Әхмәт Сөләймәнов менән Рөстәм Рәжәповтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлек Мөхтәр Сәғитов менән Әхмәт Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәррире Нур Зарипов. — Өфө: Китап, 1998. — 3-сө том.

БХИ. 4-се том — Башҡорт халыҡ ижады / Томға материалды һайлаусы, төҙөүсе, аңлатмалар биреүсе һәм һүҙлек авторҙары Мөхтәр Сәғитов, Берйән Байымов, Салауат Галин; Яуаплы мөхәррирҙәре Әхнәф Харисов, Салауат Галин. — Өфө: Китап, 1999. — 4-се том. Эпос.

БХИ. 5-се том — Башҡорт халыҡ ижады / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә, аңлатмалар һәм һүҙлек авторы Нур Зарипов; Яуаплы мөхәррире Зиннур Ураҡсин. — Өфө: Китап, 2000. — 5-се том. Эпос: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәләр (иртәктәр).

БХИ. 6-сы том — Башҡорт халыҡ ижады/Төҙөүселәре Нур Зарипов, Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов һәм Зәйтүнә Шәрипова; Инеш мәҡәлә Нур Зариповтыҡы; Аңлатмалар һәм һүҙлек Нур Зарипов, Әхмәт Сөләймәнов, Ғайса Хөсәйенов һәм Зәйтүнә Шәрипованыҡы; Һүҙ ахыры Әхмәт Сөләймәновтыҡы; Яуаплы мөхәррире. Ғайса Хөсәйенов. — Өфө: Китап, 2002. — 6-сы том: Эпос: Ҡиссалар һәм дастандар.

БНТ — Башкирское народное творчество.

БХИ — Башҡорт халыҡ ижады.

ҒА — Рәсәй фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге ғилми архивы.

ғәр.— ғәрәп һүҙе.

кит. — китап.

М. Б. — Мөхәмәтша Буранғолов.

М. Ө. — Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев.

Мөхәрр. — мөхәррире.

Н. И. — Нәҡи Иҫәнбәт.

Нәшр. — нәшриәт.

Төҙ. — төҙөүсеһе.

фарсы. — фарсы һүҙе.

һөйл.— һөйләш.

Ә. Д. — Әбүбәкер Диваев.

Ә. С. — Әхмәт Сөләймәнов.

# ТОМҒА ИНГӘН ТЕКСТАР ХАҠЫНДА

## 1. Иҙел менән Яйыҡ

Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов тарафынан төҙөлгән тәнҡитле вариант // Ватандаш. — 2003. — № 11. — 150—156-сы бб. Заманында башҡорт, ҡаҙаҡ мөхитендә киң билдәле булған эпостың был вариантын Ғ. Б. Хөсәйенов ошондай иҫкәрмә оҙатмаһында баҫтырған: «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайыры «Урал-батыр» эпосы циклына ингән әҫәр. Атаҡлы халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловтың «Башҡорт халыҡ поэзияһы» исемле хеҙмәтендә әйтелгәнсә, был ҡомартҡыларҙы ул 1910 йылда Урал аръяғында йәшәгән Ғәбит менән Хәмит сәсәндәрҙән яҙып алған (Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының ғилми архивы: фонд 3, опись 12. 145, 261—264-се биттәр). Был сәсәндәрҙән тағы «Тамъян», «Батырша», «Ҡараһаҡал», «Күсәк бей», «Салауат» кеүек ҡобайырҙар ҙа ҡағыҙға күсереп алынған булған. Ләкин шуларҙан «Иҙел менән Яйыҡ», «Тамъян», «Һары мулла» тигәндәре архивта һаҡланмаған. Йә юғалған, йә нисек.

[1]*Ҡорбан тауы*, [2]*Аҡ күл*, [3]*Торатау* — Башҡортостандың урта өлөшөндә (Юрматы, Табын ырыуҙары биләмәһендәге) урындар.

Хәҙерге көндә «Иҙел менән Яйыҡ» сюжетына бәйле бер нисә ҡыҫҡа легенда мотивы, экиәт сюжеты элементтары ғына билдәле. Ҡаҙаҡтарҙа «Иҙел менән Яйыҡ» жыр-ҡобайырының өс ҡулъяҙмаһы һаҡланған. Улар үткән быуаттың 40-сы, 50-се йылдары башында ҡаҙаҡ аҡындарынан яҙып алынған. Сюжеттары Иҙел менән Яйыҡ батырҙарҙың Ҡара дәү, бүтән дейеүҙәр, Еҙтырнаҡ, Ялмауыҙ ише демонологик йән эйәләре менән көрәшенә бәйле. Бер вариантында сюжет ҡалмыҡ хандарына ҡаршы һуғышҡа ла ялғанып китә.

Ошо билдәле легенда һәм экиәт мотивтарына таянып, бигерәк тә ҡаҙаҡса сюжеттарына нигеҙләнеп, беҙ фәндә һәм

әҙәбиәттә ҡабул ителгәнсә, «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайырының сюжетын ижади аяҡҡа баҫтырып ҡарарға булдыҡ. Быға тиклем бер нисә боронғо башҡорт эпик ҡомартҡыһын үҙебеҙҙә һаҡланған варианттары һәм фрагменттары буйынса йыйылма текстарын төҙөү рәүешендә түгел, бәлки «Иҙел менән Яйыҡ»ҡа бәйле башҡорт мотивтары менән ҡаҙаҡтарҙа һаҡланған сюжеттарын фәҡәт үҙебеҙсә ижади поэтиклаштырыу ысулын тоттоҡ. Ул текстар менән танышыу-өйрәнеү—белгестәр шөғөлө.

Үҙем 1968 йылда Алма-Атала командировкала булғанымда «Иҙел менән Яйыҡ» эпосының бер ҡулъяҙма тексы менән генә таныша алғайным. Ғәрәп графикалы ваҡ ҡулъяҙма тексын таныуы ла ауырға тура килде. Ҡаҙаҡтарҙың жыр-эпос шиғыры һәм стиле беҙҙең ҡобайыр стиленән байтаҡҡа айырыла өҫтәүенә. Шуға мин әлеге ҡулъяҙманан ныҡлы таныған һәм үҙемә оҡшаған бер нисәләгән строфаларҙы, бер-ике фрагментты күсереп алһам да, үҙ поэтик тексымда уларҙы файҙаланманым. Улар миңә йүнәлеш кенә бирҙе. Мин сәсән түгелмен. «Иҙел менән Яйыҡ»ты ҡобайырға һалғанда ритмик-интонацион, структур ҡытыршылыҡтар ҙа осрар, улары өсөн бифәйбә. Миңә, сюжетты аяҡҡа баҫтырыусыға, сюжет һыҙығы, ситуациялар теүәллеге, дәүер рухы, ҡобайыр стиле бөтөнлөгө мөһим.

Бына, сағыштырыу өсөн, ҡаҙаҡ версияларынан уның башланышы һәм тамамланышынан жыр (эпос) стилен килтерәм:

Әдил ир атҡа менәде,
Ҡола жөздә ҡоландай,
Жулсыздан жөреп келәде,
Ғәйен туған Әдилдән
Әла бында Уралдың
Жайыҡ батырдәр иде.

*Аҙағы:*

Жайыҡ бән Әдил батыр дәп,
Биренә-бире ҡусылып,
Күздин жасын жусылып,
Жуҡтап дауыс киләде,
Әдил — Жайыҡ ҡиссасы
Усылай тамам булады.

*Икенсе ҡулъҙманың башланышы:*

Иртендеген бир Ҡара дәү[1],
Елге бүлик салған жау.

---

[1] *Ҡара дәү* — Ҡара дейеү.

Денесене күз салсаң,
Шөгин жатҡан Ҡара дәү.

*Аҙағы:*

Ҡалыҡҡа әжал кәлтергән,
Талайды ҡыдип үлтерткән
Ҡара дәүдиң үмере
Усылайша тинады.

*(Ҡазаҡ ҡолжазбаларының ғылыми сипаттамасы, Алматы, 1975, 1-се том, 58, 60-сы б.)*

Ҡаҙаҡ жыр-эпостарында анахронизм көслө, тарихилыҡ принциптары бушаҡ.

Ҡаҙаҡ версияларындағы Ҡара дәү, Жизтырнаҡ, Жалмауыз, Кимпер менән бәйле сюжет ситуацияларын беҙ һаҡланыҡ, әммә башҡорт тылсымлы әкиәттәрендә осраған Ялмауыҙ, Еҙтырнаҡ һәм дейеү сюжеттарындағы ситуациялар һәм образлауҙар принцибын тотоп, ижади килдек, үҙебеҙсә поэтиклаштырҙыҡ. «Урал батыр» стилен тотоп, аҙаҡҡы сюжет осонан ялғап алып киттек ваҡиғаларҙы. «Иҙел менән Яйыҡ» ҡобайырының башҡорт версияһының поэтик реконструкцияһы, минеңсә, шулайыраҡ булырға тейеш.

Ғайса Хөсәйенов, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы (Ватандаш. — 2003. — № 11. — 149—150-се б.).

## 2. Алып батыр

1938 йылда Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылында Хәйрулла сәсән Ишмурзиндан (1873) Кирәй Мәргән яҙып алған // БХИ / Төҙ., мөхәрр., баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Әхнәф Харисов. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1959. — 2-се том. — 55—56-сы б.; БХИ / Төҙ. Н. Т. Зарипов, М. Х. Минһажетдинов; Аңлатмалар Л. Г. Бараг менән Н. Т. Зариповтыҡы; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов, Ғ. Б. Хөсәйенов. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1978. — Әкиәттәр: 3-сө кит. — № 1; Йәшәгән, ти, батырҙар: Башҡорт халыҡ әкиәттәре / Н. Т. Зарипов әҙерләне. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1990. — 28—30-сы б.; БНТ / Сост. Н. Т. Зарипов, Вст. ст. и коммент. Л. Г. Барага и Н. Т. Зарипова. — Уфа: Башкнигоиздат, 1988. — Т. 3. Богатырские сказки. — № 2.

Алпамыша ташы тураһындағы өлөшөн 1938 йылда Баймаҡ районы Баймырҙа ауылында ... Ульябаеванан Кирәй Мәргән яҙып алған // Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. — Өфө: Башҡортостан китап нәшр., 1961. — 191-се б.

### 3. Барсынһылыу

И. В. Салтыков. История, анализ башкирских песен. 1928 // ҒА, ф. 3, оп. 61 / 25. — 31—33-сө б. Ҡасан, ҡайҙа, кемдән яҙып алынған текстың руссаға тәржемәһе икәнен И. В. Салтыков күрһәтмәгән. Эпостың әле тәҡдим ителгән тексы машинкала баҫтырылған хәлдә һаҡланған. Башҡорт теленә уны яңынан Әхмәт Сөләймәнов ҡайтарҙы.

### 4. Алпамыша

XX быуаттың 30-сы йылдарында яҙып алынған варианттарҙан Кирәй Мәргән (Әхнәф Нурмөхәмәт улы Кирәев, 1912—1983) төҙөгән йыйылма текст // БХИ / Төҙ., мөхәрр., баш һүҙ һәм иҫкәрмәләр биреүсе Ә. И. Харисов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1959. — 2-се том. — № 44.

### 5. Кәртә Мәргән

И. В. Салтыков. История и анализ башкирских песен. 1928 // ҒА, ф. 3, оп. 61/25. — 24—25-се б. Ҡайҙа, ҡасан, кемдән яҙып алынған текстың руссаға тәржемәсеһе кем икәне әйтелмәгән. Текст архив фондында машинкала баҫтырылған хәлдә. Башҡорт теленә уны яңынан Әхмәт Сөләймәнов ҡайтарҙы.

[1]Ошо урында И. В. Салтыков йәйә эсендә «Йылайыр кантоны» тигән иҫкәрмә биргән.

[2]Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Йылайыр районында Һаҡмар буйында әле лә Көбәк батыр хаҡында риүәйәттәр ишетергә мөмкин.

### 6. Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар

XX быуаттың 30-сы йылдарының баштарында Миәкә районы Әбеш ауылында 70 йәшлек Чаһаръяр мулла Мусиндан Мөхәмәтша сәсән Буранғолов яҙып алған. Ғилми архивта текстың «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар тураһында» тигән баш аҫтында латин шрифтлы машинкала баҫтырылған вариантының 3-сө данаһы ғына һаҡлана. Текстың ҡулъяҙмаһы ҡайҙа булған, мәғлүм түгел. Тәҡдим ителгән тексты хәҙерге графикаға Ә. М. Сөләймәнов әйләндерҙе.

[1]*Дәмми бей* — информаторҙың аңлатмаһы буйынса, был исемдә «Дим» тип тә әйткәндәр ҙә Дим һыуының исеме шунан килеп сыға була.

[2]*Ыршаҡ бей* — Өршәк йылғаһына исем шунан ҡалған, тип һөйләйҙәр (*Ч. М.*).

---

[1]*Ҡара тау* — тау исеме.

[3] *Бишбүләк, Миәкә райондарында йәшәйҙәр* — Сафар, Туҡһанбай, Бикҡол, хәҙерге бүленеш буйынса — Миәкә районына, Ҡасҡын, Ҡаныҡай Бишбүләк районына ҡарай.

[4] *Яйыҡ батырҙың туғыҙ улы булған...* — һаналған исемдәр («Туҡ» тигәненән тыш) бөтәһе лә хәҙерге Әлшәй районындағы ауылдарҙың атамалары. Туҡ иһә хәҙерге Ырымбур өлкәһендә тороп ҡалған аҫаба башҡорт ерендәге йылға исеме.

[5] *Баймаҡ, Ҡыпсаҡ районларынан* бында йә информатор Чаһаръяр мулла, йә яҙып алыусы Мөхәмәтша сәсән, йә икеһе лә, «Ҡыпсаҡ» тигәндә, хәҙерге Бөрйән районын күҙ уңында тота. Быға йә «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосы менән танышлыҡ, йә XX быуаттың 30-сы йылдары башында шул административ бүленешкә исем әҙләгәндә, Бөрйән менән Ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең шул биләмәлә йәшәгән өлөшөнөң үҙ-ара бәхәсләшеүе — бөрйәндәрҙең районды Бөрйән тип белгеһе килеүе, ҡыпсаҡтарҙың үҙ ҡәүеме этнонимын мәңгеләштерергә тырышыуы хаҡында хәбәрдарлыҡ сәбәпсе булғанға оҡшаған.

[6] Алма сыбар ат менеп,
Атамды һөйөп килгәнһең...

Эпостың Мөхәмәтша Буранғолов вариантында (һуңғы һүҙ «ҡасҡанһың» тип алынған) ошо ике юллыҡҡа тиклем:

Ҡарсыға түш, ҡуян бот,
Моңдаһы(?) ман һигеҙ күҙ.
Күп йылҡыға ҡарата
Йүгереклеген белдереп... —

тип башланған 32 юллыҡ теҙем бирелгән. Унда Туҡ батырҙың әсәһе буласаҡ (ата йортонан ҡасҡан) ҡаҙаҡ ҡыҙы менеп килгән Алма сыбар ат тасуирлана (БХИ. 5-се том. Эпос. — 158—159-сы б.).

[7] Атам менән йәнәшә
Күп яуҙарҙа булғанһың —

тигән ике юллыҡтан һуң М. Буранғолов варианты буйынса 33 юллыҡ теҙемдә Туҡ үҙенең әсәһе күргән ауырлыҡтарҙы тасуирлай (БХИ. 5-се том. Эпос. — 160—161-се б.).

Мусин вариантында ул ауырлыҡтар:

Ауырлыҡтар күргәнһең:
Аслыҡтарҙа йөрөгәнһең.., —

тип дөйөмләштерелә. Туҡтың көнәлгәре тыуыуы хаҡындағы мәғлүмәт тә,

Иңбашыңа мине артып,
Үҙең яуҙа йөрөгәнһең, —

тигәне лә (М. Буранғол вариантында һуңғы һүҙ «сапҡанһың»), шул ауырлыҡтар иҫәбенә индерелә, шуны иллюстрациялай.

[8]*Асылы күл тип йөрөтәләр* — М. Буранғолов варианты буйынса, Асылыкүл тигән гидроним шулай хасил була. Ағыулы эсемлекте эсеүе арҡаһында, Туҡ батырҙың әсәһе үлгәс, Иҙеүкәй былай ти:

Һаба-турһыҡтың барын
Пыран-заран ярған да,
Ыулы* ҡымыҙ көрөнөн
Балҡан тауҙан ағыҙып
Күлде ап-аҡ яһаған...

(БХИ. 5-се том. Эпос. — 164-се б.). Шулай ағыулы ҡымыҙ көрөнө ағып төшкәнгә лә, күлдең исеме Асылыкүл булып ҡала, йәнәһе.

[9] *Нарыҫ тауының* — хәҙерге Миәкә районы Нарыҫтау ауылы һыртындағы тауҙың.

[10] *Ҡыпсаҡ ауылы* — хәҙерге Әлшәй районына ҡараған Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы.

[11] *Боҙаяҙ районы Мораҙым ауылы* — хәҙерге административ бүленеш буйынса, был ауыл Ауырғазы районына ҡарай.

[12] *Ҡайҙа үлеп ҡалғанын әле атайҙар белмәй* — Нәҡи Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма вариант буйынса, Мораҙым батыр «Йылайыр кантоны Төйәләҫ һыуы буйында Төр(ө)кмән ауылы (хәҙерге Баймаҡ районы) менән Тәпән (хәҙерге Әбйәлил районы) ауылдары араһында булып, ошо тау башындағы зыярат — ана шул Мораҙым хан зыяраты, тиҙәр...» (Ҡар.: ошо уҡ том. — ... б.).

## 7. Иҙеге

1967 йылда Ейәнсура районы Байдәүләт ауылы Хәсәнова Тутыянан (1897) яҙыусы һәм әҙәбиәт ғилеме белгесе Әнүр Хисмәтулла улы Вахитов (1932—1984) яҙып алған // ҒА, ф. 3, оп. 65/2. — 13—18-се б.

Эпостың был варианты Н. Т. Зарипов тарафынан төҙөлгән томда телгә алынған (БХИ. 5-се том. — 330—332-се б.). Төҙөүсе Т. Хәсәнова вариантының шул томда бирелгән варианты менән оҡшаш һәм үҙенсәлекле айырмалыҡтарын билдәләгән. Бында бары шуны ғына билдәләп үтеү зарурҙыр: әле тәҡдим ителгәне лә, 5-се томдағыһы ла (ә уны Хәсәнова Тутыя әбейҙең тиңдәше Сәйфуллин Абдулла Хәким улы танылған диалектолог Сәриә Мириғановаға һөйләгән булған) бер үк ауылда яҙып алынған.

Тимәк, Н. Зарипов билдәләгән уртаҡлыҡтар, ике информатор ҙа бер үк сығанаҡты файҙаланған, тип әйтергә нигеҙ бирә. Тик ул сығанаҡ яҙма текст булғанмы, әллә бер үк иртәксе булғанмы, уныһы хаҡында аныҡ фараз итеү мөмкинлеге юҡ.

## 8. Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй

XX быуаттың 30-сы йылдарында Баймаҡ районы Баймырҙа ауылы уҡытыусыһы Ульябаев Ҡотлоюлдан Сәлим Дауытов яҙып алып, 1940 йылдың 9 ғинуарында Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырған. Текст латин шрифтлы машинкала «Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй ваҡиғаһы» тигән баш аҫтында баҫтырылған. Уға «Әкиәт: «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тигән аңлатма-атама ла өҫтәлгән /ҒА, ф. 3. оп. 12/230. — 2—10-сы, 11—19-сы биттәр (текст ике данала бирелгән). Тексты хәҙерге графикаға Ә. М. Сөләймәнов әйләндерҙе.

[1] *Сәсенән тотоп, шаҡар* — боронғо йола буйынса, тимәк, ҡалмыҡ батыры оҙон сәсле (толомло) булған. Оҙон сәс — көс, батырлыҡ символы иҫәпләнгән. Ғөмүмән, сәсте аҡыл һәм физик көс сығанағы тип белгәндәр.

[2] *Ҡалмаҡ батыры үлә* — ҡыҙ (ҡатын) урлаған ят бауыр батырҙан еңелеп барғанында, урланыусыны ҡотҡарырға теләгән батырҙың унан ярҙам һорауы — традицион тематик мотив. Ғәҙәттә, ҡыҙ (ҡатын): «Кем еңә, мин — шуныҡы», — тип, үҙен ҡотҡарырға теләүсегә (иренә) ярҙам итеүҙән баш тарта. Бында иһә хан ҡыҙы Иҙеүкәйҙе яҡлай.

[3] Ҡульяҙманың һуңғы битендә информатор биргән аңлатма теркәлгән:

«*Туҡтамыш — маң (минең. — Ә. С.)* белеүемсә, Таҡтамыш булырға тейеш. Маң ишетеүем буйынса, Таҡтамыш тип йөрөтөлә».

*Сараяҡ* — ағастан яһалған туҫтаҡ, алдыр.

*Сағараҡ* — тирмә-өйҙөң уҡты сәнсеп ҡора торған түңәрәк стерже(ны) (?).

*Турылыҡ* — өҫәк (?) кейеҙе, тәбендә(?) тейелә.

*Уғы* — тирмәне сәнсеп ҡора торған ағас.

*Туғым* — серге (?) ... яһармын(?).

*Иңсәҙе бейек буҙыр* — минеңсә, эскелек һауыты булырға кәрәк.

*Рәғәйәт* — ғәскәр халҡы.

*Утау* — яны (ҡанаттары. — *Ә. С.*) ат була.

*Тирми* — тирмә, кейеҙ өй.

*Мораҙым* — минем (тегенеһендә маң ине. — *Ә. С.*) белеүемсә, Морадым тип йөрөтөлә.

Аттарҙың йәшкә бүленеше:

*Ҡолон* — 1 йәшлек.

*Тай* — 2 йәшлек.

*Ҡонан* — 3 йәшлек.

Дүнән — 4 йәшлек.

*Был яғы* (5 йәштән ары. — *Ә. С.*) ат була.

*Ҫараяҡҡа* — ағас һауытҡа, күнәккә. (Информатор дөрөҫ аңлатмаған, уныңса был һауыт — алдыр, туҫтаҡ. Унда бал әсетмәйҙәр — *Ә. С.*).

*Мәғкүл күрә* — оҡшата.

*Утауыңды* — торған ереңде (хан сатырын).

Арҙа — 2—3 йәшкәсә инәһен имеүсе йылҡы малы.

## 9. Иҙеүкә менән Мораҙым

Был вариант XX быуаттың 20-се йылдарында (?) башҡорттоң билдәле тарихсыһы Сәғит Мирасов тарафынан яҙып алынып, Б. Өмөтбаев уны рус теленә тәржемә иткән һәм башҡорт халҡының музыкаль фольклорын өйрәнеүсе И. В. Салтыковҡа тапшырған. Текстың төп нөсхәһе һаҡланмаған. Китапҡа И. В. Салтыковтың «История и анализ башкирских песен» (при ближайшем участии С. Мирасова и Б. Уметбаева) тигән хеҙмәтендә теркәлгән // Идюка и Мурадым FA: ф. 3, оп., 61., д. 25. — л. 29—41.

Томда ошо текстың Ә. М. Сөләймәнов тарафынан башҡорт теленә ҡайтарылған варианты бирелде. Сағыштырыу өсөн, түбәндә И. В. Салтыковтың яҙмаһындағы текст тәҡдим ителә:

«По народным сказаниям Баба-Газиз имел сына Баба-Тукляса, последний был женат на дочери водяного царя. При разводе Баба-Тукляса с женой, она была беременна. Когда родился сын, то его из подводного царства выбросили на землю. Баба-Тукляс нашел его на берегу реки и взял к себе. Так как ребенок не имел родины, то дали имя «Идюка». Баба-Тукляс обучил его и умер. После этого Идюка стал судить и мирить спорящие стороны. Его решениями народ был очень доволен. Весть о нем дошла до хана Туктамыша, который взял его к себе на службу и назначил судьей.

При их встрече произошел следующий разговор. Туктамыш-хан говорит:

— Плечи прямые, как доски,
Подвязки у них лентами,
Возьми, дарю тебе черную бобровую шубу.
Надень ее на себя,
Садись верхом на высокого коня.
Возьми поводья с позолоченными монетами,
Дам тебе белого сокола.
Садись на седло
И поезжай вокруг озера

И выпусти на добычу.
Опояшься серебряным поясом,
Поезжай, но возвращайся скорей.
Если из Крыма прибудет много войск,
Уничтожь же их, Идюка!

Благодаря справедливости выносимых им решений по жалобам спорных сторон, Идюка в короткий срок приобрел большую любовь и уважение среди народа. Жена Туктамыш-хана почуяла, что он может явиться опасным претендентом на ханский престол и поэтому решила убрать его с пути. Для этого она пустилась на хитрость и рассказала хану свой вымышленный сон:

— Эй, Великий Хан, Великий Хан,
Я сегодня видела сон.
Видела, вспотевшую лошадь —
Сначала пот, потом бежала кровь,
Как твое белое тело растерзали на клочки.
Видела, как большие очи, как чаши,
Закрыл ты.
Лоб стал недвижным,
Почернели твои скулы.
Видела только один череп,
Ау, череп.
Отвечает Туктамыш:
— Если ты сегодня видела сон,
Видела на пастбище пот,
А после пота бежавшую кровь,
Если видела один череп,
Что же будет, моя старшая жена,
Ау, старшая жена?
Отвечает жена:
— Если не прогонишь ты от нас Идюку
Или хитростью не погубишь его —
Он скоро погубит твою голову.

Туктамыш-хан, под влиянием жены, решает избавиться от Идюки и поэтому созывает своих богатырей на совещание. Об этом узнает раб Туктамыша — Ласын и предупреждает о надвигающейся грозе своего друга Идюку. Он говорит, что в нужный момент приведет оседланную лошадь и даст условный знак. После этого Идюка приходит на совещание, все вместе выпивают шарап. Ласын, заметив, что богатыри хотят напасть на его друга, поет следующее:

— Копыта широкие, сивый дикий конь
Уже готов, тебе пора в дорогу.

Крылья черного беркута
Готовы для тебя.
Мне время петь песню,
Тебе время понять.
Свою бобровую шубу
Брось беям на почетных местах.
Мой конь, как сокол,
Дело ведь знаешь сам.

В это время Идюка быстро бросается к выходу и, сказав: «Прощайте!», вскакивает на коня и уезжает. Туктамыш-хан дает своим богатырям приказ: немедленно доставить голову Идюки, причем такое распоряжение дается им каждому индивидуально следующим образом:

*Обращение к сыну Муйтана Бабсак-бею:*

— Нож с ножом рядом висит,
Рядом стрелы висят,
Когда переселялись — ты был глава,
Имя твое — знаменито.
Геройством своим
Затмил ты ханского сына.
Сын Муйтан-бея Бабсак-бей,
Иди против врага,
Отними у него жизнь.
Когда кочевали, охранял ты нас,
Верю я в твое крепкое сердце,
На шею ты лучший лук не повесил,
Когда видел пыл вражеских сил,
Ты ревел, как гроза,
Когда боролся с богатырем,
Ревел, как разъяренный лев.

*Обращение к Карагыму:*

— Сын Юрматы, мой Карагым,
Ты мой факел в темноте, иди, моя душа,
Иди, напусти испуг на врага!

*Обращение к Карабаю:*

— Глава ты тамъянцев,
Молодец Карабай-богатырь,
Чем зря здесь сидеть,
Возьми в руки меч булатный,
Как царь змей,
Нападй и возьми врага!

*Обращение к Казанчею:*

— Нашедший в темноте дорогу,
Нашедший в куфиях слова,
Широкоплечий мой ты красавец,
Похожий на льва,
Не боялся злых ты языков.
Ты охотно сам ходил,
Не ожидая моих приказов.
Черный кипчак, Казанчи-бей,
Ты встань и пошевелись.

*Обращение к Куваку и Суваку:*

— Ревевшие, как старый лев,
Сделавшие много дел,
Ежедневно ломавшие копья,
Поразившие мечом не одного врага,
Гордость нашей родины,
Побеждавшие всех врагов —
Ненасытные вы до человеческой крови,
Сын Катая — Кувак,
Сын Табына — Сувак.

*Обращение к Шакману:*

— Твои луки и стрелы возят сорок верблюдов,
Богатырской силой многих ты превзошел,
В моем сборище почетен ты,
В совещаниях советник мой,
Сын Шагалея, Шакман,
Иди на моего врага,
Разорви его сердце на клочки!

Богатыри на призыв хана ответили молчанием. Тогда хан вызвал своего старого советника Мангута, к нему он обратился со следующими словами:

— Говоришь ты, долго думая,
Каждое дело обмозгуешь.
Вдоль Урала тяжелый юрт
Обратился в недоуменье,
Сын Урала Мангут,
Последний свет к тебе.
Что же делать с врагом?
Последнее слово за тобой.

*Мангут отвечает:*

— Эх, старик я, твой старик,
Многое видел твой старик,

Чего не видел твой старик:
Вначале — главный хан,
Его тоже видел твой старик.
После него — Абульжа-хан,
Его тоже видел твой старик.
После него — Ала-хан,
Его тоже видел твой старик.
После него — Кара-хан,
Его тоже видел твой старик.
После него — Назар-хан,
Его тоже видел твой старик.
В десять охватов имел лук
Великий молодец Чингиз-хан,
Его тоже видел твой старик.
Молодым был Кадыр-хан,
Его тоже видел твой старик.
Во мне уже 185 лет,
Когда от тридцати зубов помина нет,
Когда не покидает еще меня душа,
Мой век уже прошел,
Когда пришел ваш век,
Сменилось много ханов.
От тебя бежавший Идюка
Только один во всем мире.
Прожил до этих лет,
Но не видел подобного ему.
Испытывал его я сзади —
Он рожден для уничтожения своих врагов.
Испытывал я его спереди —
Рожден он неизвестно кем (родила его сама судьба),
Он уехал и поедет еще дальше,
Дойдет до Сатмыр-хана.
Сатмыр подаст ему руку,
Исполнит все, что Муйтан пожелает,
Заревет, как голодный лев,
Запенится рот, как у тигра,
С угрозой будет он кричать.
Этот беспечный ногайский юрт,
Безоружный, бессильный народ
Будет им завоеван, все сделает он, что захочет.
Престолу твоему наденет петлю.
Золотое твое государство
Серебряные ворота не спасут.
Если упадет его железная дубина,
Откроет твои двери
И нападет на нашу родину.
Положит он перину у тебя в красном углу,

Твою любимую оторвет от груди
И положит к себе.
Решетки твоей кочевки
Превратит он в дрова.
Пятки твои надрежет,
В них положит волосы.
Он будет хозяином
Белой орде с девяноста беями.
Разный скот и коней
Он себе заберет всем стадом,
Красивую, как гурия,
Свободную, как соловей,
Твою дочь отберет
И посадит на зад лошади.
Опечалится она,
Но сделает он ее своей добычей.
Ее прекрасное лицо опечалится,
Все же будет она его добычей.
Он ведь далеко не уехал,
Дальше Белой не проехал.
Пошли своих девять богатырей.
Обманом и путая след, уехал он,
Обманом и ты возьми его голову.

После этих слов Туктамыш-хан обращается ко всем девяти богатырям со следующими словами:

— Эх, девять мужей, девять молодцев!
Отправляйтесь-ка все девять,
Вы, девять человек, Идюку
Схватите и привяжите к своей луке.

Девять богатырей поскакали за Идюкой. Подъехав к реке Белой, они увидели его на другом берегу; они Баргая и Янбая отправили к нему посланцами. Янбай обратился к Идюке со следующими речами:

— Эй, Идюка, возвратись-ка,
Переправляйся вновь через Белую.
Пошли вновь земной поклон
Большой родине Белой Орды.
Из белой золотой чары
Выпей ханский остаток вина.
Плечи твои прямые, как доски,
Одень на них бобровую шубу
С тесемычными завязками,
Садись на высокого своего коня
И живи в полном довольстве.

Даст он тебе белого сокола
Для охоты на озерах.
Сделает для тебя золотую телегу,
Верх покроет парчой,
Даст тебе все свое вооружение
И подарит аргамака.
Знаменитостью ты будь!
Уши стоят, как шило,
Гривы расчесаны, как косы девы,
Походку сам испытал.
Стан лошади бесподобен,
Шея, как у змеи Аждага,
Копыта, как большой котел,
Губы, как у скакуна,
Коренной зуб, как чеснок.
Вместо копыт у него огни,
Уши, как у степного зайца,
Подошвы ног плоские —
Такого коня даст тебе.
Выделит из своих стад коней,
Будешь пить свой кумыс,
Престолом своим поделится с тобой.
Возвратись и попроси богатства.
Возвращайся и в довольстве живи.
Забудь сердечную злость,
Поздоровайся с поклоном.
Дочь хана, как ангел,
Тоскует очень она по тебе.
К вечеру будь у хана —
Прими в объятья ханскую дочь.
Возвратись в покинутый дом.
Из своих уст передай ханской дочери,
Что ты возвращаешься.
Возвращайся, Идюка, возвратись!
Из желтой чары янтарный мед
Осуши до дна.
Из двух дочерей
Выбери одну и обними.
Передняя лука на седле у коня золотая,
Уздечка серебряная.
Сосал и двух, и трех он лет,
Четырехлеткой обучен верховой езде,
Шелковый чумбур,
Пяти лет сосал пять кобылиц,
Шести лет стал уж конем,
Семи лет был отличный скакун,
Серебряную дугу приготовил.

Ноги, как огонь,
Брови, как у медведя и беркута,
Горло, как у беременной змеи.
Короткие бедра, огненные ноги,
Шея в один охват.
Шерсть заячья, глаза — дикой козы,
Короткая челка, грива — как широкий луг.
Такого коня дает тебе хан — возьми.

*На это Идюка отвечает:*

— Уйди, уйди, Янбай,
Уйди, Янбай!
Раз я уехал, так поеду дальше
К Сатмыр-хану я[1].
Возьму у него я силу военную,
Сделаю из вашей родины могильное поле,
Сделаю вас всех своей добычей.
Как мячи отрублю (полетят) ваши головы,
Кровь польется рекой.
С (государственного) престола хана свергну,
Семью сделаю я своей[2]
Верхушка кошы будет сломана,
Дужку коши сожгу[**],
Подрежу пятки, положу волосы
И сделаю пастухом своих овец.
Чужой престол мне не нужен,
Чужое счастье мне не нужно.
Я уничтожу все на моем пути,
Для себя создам я все вновь.

После этого он отправился к Сатмыр-хану, который встретил его с распростертыми объятиями и большим почетом. Дал Идюке ханский престол и свою дочь. У них родился сын Мурадым. Мурадыму, когда было двенадцать лет, во время игры сверстники начинали насмехаться, говорить, что он и отец — пришельцы и что Туктамыш-хан их изгнал. На это Мурадым обиделся и отправился к своему отцу — Идюке.

Отец, вдруг вспомнив об этом случае и бросив все на произвол судьбы, с войсками направился к Туктамыш-хану.

Получив известие о приближении Идюки, Туктамыш-хан бежал из своего государства. Мурадым, получив обещание женить его на одной из дочерей хана, обратился в погоню за Туктамыш-ханом. Некоторое время спустя он его поймал и связан-

---

[1] Киргизский хан Сатмыр враждовал с Туктамыш-ханом.
[2] Высшее оскорбление для башкир и киргизов.

ного доставил к Идюке. В это время Идюка держал в своих объятиях двух дочерей (хана) и успел уже пожениться. Мурадым, горько обиженный, крикнул: «А!» И от этого выскочили два глаза у Идюки и он стал слепым. Мурадым женился на младшей дочери Туктамыш-хана[1] и отправился на Туяляс и Кизил, впадающие в Яик, где стал править народом.

У Мурадыма родился сын. Во время одной из ссор с сыном мать укоряет Мурадыма, говоря, что сын похож на него: «Ведь, ты ослепил отца». После этого сделал Мурадым паломничество в Мекку и по пути заехал к отцу и попросил у него прощения. Отец простил его.

[1]*Ғәзиз баба, Төкләҫ баба* — төрки халыҡтарының Изге ҡанбабалары. Уларҙың исемдәре фольклор әҫәрҙәрендә осраштыра.

«Һуңғы һартай» эпосында Ғәзе тигән изге зат иҫкә алынған. Иртәкте башҡарыусы ауыҙынан тыңлаусы йә әҙер тексты руссаға әйләндереүсе (ә был хаҡта беҙгә бер ни ҙә мәғлүм түгел) рус кешеһе М. И. Касьянов (бында филология буйынса түгел, ә археология белгесе икәнен иҫәпкә алырға кәрәк) Ғәзиз тигән исемде Ғази тип ишетеүе йә шулай транскрипциялауы ихтимал. Шулай уҡ ҡасандыр, ҡайҙалыр Ғәзе мәсете тип йөрөтөлгән мәсет булыу ихтималын да күҙ уңынан ысҡындырмау хәйерле. Беҙгә рус телендәге ҡулъяҙма рәүешендә генә килеп еткән «Һуңғы һартай» иртәгендә Ялыҡ бей (ә ул һартай ырыуының башлығы була), Ҡармасан менән Сәрмәсән тигән ике улының да Аҡһаҡ Тимер баҫҡынсылары менән тиңһеҙ алышта батырҙарса һәләк булыуын һөйләгәндә, был мәсетте былай тип телгә ала (яҙма рус телендә килеп еткәнгә, цитата төп нөсхә буйынса донъя күргән баҫманан алынды): *«Я оставил людям о вас* (сыновья мои. — *Э. С.*) *хорошую память. Ведь вам, за Ак-Су* (йәғни Ағиҙел. — *Э. С.*), *текут две елги, которые извиваются, как серебряная надпись из Аль-Корана над преддверием Газиевой мечети. У них тогда еще не было имен, мы их никак не называли. И вот я дал ваши имена, я похоронил вас там!»* (БНТ. Т. 2. — С. 178).

Ғәзиз баба үтә Төкләҫ, йәғни (төклө) йөнтәҫ булғаны өсөн уның үҙен үк Төкләҫ баба тип йөрөткән булыуҙары ла ихтимал. Ошо фараз да дөрөҫлөккә тура килә, буғай. Сөнки ҡаҙаҡта, беҙҙә Төкләҫ баба йәки Баба төкләҫ тигәнде Баба-Төктө — Шашты Ғәзиз тип йөрөтәләр икән (Ҡар: Турсунов Е. Д. Генезис казахской бытовой сказки: В аспекте с первобытным фольклором. — Алма-Ата: Наука, 1973. — С. 176). Ә төклө булыу һәм, ғөмүмән, ялбыр булыу — борон көс, ғәйрәт билдәһе тип иҫәпләнгән. Башҡорт халҡының «Аҡъял батыр» тигән әкиәтенең ғәйрәтленән ғәйрәтлерәк, баһадирҙан баһадирыраҡ геройы хатта аҡ яллы була. «Алсудар менән Кирсудар» әкиәтенең геройы иһә

[1] Туктамыш-хан был убит.

оҙон сәсен, толомлап үреп, кәпәсе эсенә йәшереп йөрөр булған. Ошолар һәм, ғөмүмән, сәстең магик көскә эйә булыуы хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе Ә. М. Сөләймәновтың «Әкиәттә хәҡиҡәт» тигән монографияһынан (Өфө: Китап, 1997. — 308—310-сы б.) алырға була.

[2] Радловтың «Образы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири и Дзунгарской степи» тигән хеҙмәтендәге (ч. IV. изд. 1872 г.) «Туҡтамыш һәм Тимер ҡытлыҡтың ярлығы» тигән мәҡәләһендә (с. 6—10) «Идигә» һүҙе «итек» һүҙенән яралған тип аңлатыла. Йәнәһе лә, Туҡтамыш хан ханлығында көн иткән Ҡарт аматҡа тигән көтөүсе далала аҡ сепрәккә биләнгән ир бала табып ала ла, уны итек ҡуңысына һалып, өйөнә алып ҡайта. Шуға ла уға Идигә тип ат ҡуялар. Риүәйәттең икенсе варианты буйынса, ул баланы Туҡтамыш хан үҙе табып ала: сабый итек эсендә була (Идигә батыр (Әбүбәкер әфәнде Диваевтың этнографияға ғаид әҫәрҙәренән тәржемә) // Шура. — 1917. — № 15).

* * *

[3] *Төйәләҫ* — Башҡортостандың көньяғындағы (хәҙерге Баймаҡ районы ерендәге) йылға.

[4] *Ҡыҙыл* — шул уҡ төбәктәге (хәҙерге Әбйәлил районы ерендәге) Оло һәм Кесе Ҡыҙыл йылғалары.

## 10. Едигә батыр

XX быуат башында А. Г. Бессонов тарафынан яҙып алынған һәм «Богатырь Едиге» тигән баш ҡуйып, рус теленә тәржемә ителгән. Ҡайҙа, кемдән ишетеүе хаҡында яҙып алыусы мәғлүмәт ҡалдырылмаған. Рус телендәге ҡулъяҙмаһының фотокүсермәһе Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми китапханаһында һаҡлана; ф. 78389. — 100—107-се б. (6 ҡағыҙ.)

Текст сәсмә телдә. Башланғысы Чоҡан Вәлиханов яҙып алған ҡаҙаҡ вариантына яҡын. Ләкин артабан Туҡтамыш урынына Тимерхан (йәғни Аҡһаҡ Тимер) алыныуы, ҡайһы бер башҡа эпизодтарҙың да буталыуы (Едигә Тимерхандан китә, аҙаҡ уға тағы килә) арҡаһында, ул Вәлихановтыҡынан да, башҡа варианттарҙан да ныҡ айырыла.

Башҡорт теленә Әхмәт Сөләймәнов кире ҡайтарҙы. Әҫәрҙең йөкмәткеһе талап иткән күләмдә уға өҫтәмәләр индереүсе лә ул. Ундай өҫтәмәләр, фәндә ҡабул ителгән тәртиптә, дүрткел йәйәләр эсенә алынды.

[1] *Тимерхан* — юғарыла әйтелгән буталыш ошо исемдең ҡулланылышынан башлана. Эпостың башҡа версиялары һәм уларҙың варианттары күҙлегенән ҡарағанда, улһыҙ хан *Туҡтамыш* тип аталырға тейеш ине.

[2]*Тимерхандың* — 1-се иҫкәрмәнән аңлашылыуынса, бында ҡыҙ Бессонов тексында Туҡтамыш мәғәнәһендәге Тимерхандыҡы түгел, ә Аҡһаҡ Тимер (Әмир Тимер, Тамерлан) мәғәнәһендәге Тимерхандыҡы булырға тейеш.

[3]*Туҡтыгәзе* — Бессонов был исемдең мәғәнәһенә шундай аңлатма биргән: *Туҡты* (русса транскрипцияһы — Токту) — «барашек к осени первого года питающийся уже травою» (беҙҙеңсә, көҙләүес, көҙҙәүес була торғандыр. — *Ә. С.*), гәзе (русса транскрипцияһы — Азе) — «сокращенное имя Азраиля — собственное имя немилостивого ангела, отнимающего душу людей при смерти».

[4]*Заты тыуған ер* — Шүлгән — Шүлгән күле (йәки Йылҡысыҡҡан күл). Легенда («Йылҡысыҡҡанкүл») һәм эпостар («Аҡбуҙат», «Ҡара юрға») буйынса, башҡорттоң иң затлы йылҡы малы шунан сыҡҡан, ти.

## 11. Иҙеүкәй менән Мораҙым

Йыйылма текст. Уны XX йөҙйыллыҡтың 30-сы йылдары ахырында һәм 1941 йылдарҙа башҡорт шағирҙары Рәшит Нигмәти (1909—1959), Баязит Бикбай (1909—1968), драматург һәм сәсән Мөхәмәтша Буранғолов (1888—1966) менән тарихсы Әбүбәкер Усманов (1910—1982) төҙөгән. Йыйылмаға нигеҙ итеп Мөхәмәтша сәсән Буранғоловтың имзаһы менән «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында баҫылған текст алынған (1940. — 26 апрель — 23 май, №№ 95—98, 100, 101, 103—108, 110—116). Ғилми архивтың 3-сө фондында йыйылма текстың өс варианты һаҡлана. Бөтәһе лә 1940 йылда машинкала баҫтырылған: тәүгеһе — латин графикаһында, күләме — 166 б. // оп. 12, ед. хр. 224; икенсеһенең күләме — 145 б. // оп. 12, ед. хр.222. Томға рус графикаһындағы 384 биттән торған иң тулы варианты һайлап алынды // оп. 12, ед. хр. 229.

[1]*Төкләç* — һүҙмә-һүҙ — йөнтәç. Төкләç баба йәки Баба Төкләç хаҡында өçтәлмә мәғлүмәтте ошо эпостың И. В. Салтыков яҙмаһында теркәлгән вариантына ҡағылышлы һәм Н. Иçәнбәттең йыйылма тексына бирелгән 1-се иҫкәрмәләрҙән алырға мөмкин.

[2]*Төйәләç* — хәҙерге Башҡортостандың Баймаҡ районындағы йылға (Ҡар.: Н. Иçәнбәт төҙөгән йыйылма текст. 35-се иҫкәрмә. — *Ә. С.*)

[3]*Бүре аҙауы таҡҡан* — бүренең аҙау теше, тырнағы, йөнө ен-шайтан ише заттарҙы өркөтә.

[4] Бында «Урал батыр» эпосында һүрәтләнгән ваҡиғалар күҙ уңында тотола. Урал батыр улы Иҙел батыр хаҡында унда, мәçәлән, бына ни тиелә:

Атаһының булатын
Ҡулына тотоп алған, ти,
Бейек тауға менгән дә
Ирәмәлләп торған, ти, —

.............................

Тауҙы яра сапҡан, ти,
Көмөштәй бер аҡ йылға
Шылтырап шунда аҡҡан, ти.

.............................

Иҙел батыр тапҡан һыу,
Шылтырап, матур аҡҡан һыу
Иҙел булып ҡалған, ти (БХИ. 3-сө том. — 125-се б.).

[5] «Аҡбуҙат» эпосы буйынса ул ҡылыс менән Аҡбуҙат Һәүбән ҡулына юлыға (БХИ. 3-сө том. — 127— 177-се б.).

[6] *Бишенсе ҡобайыр* — төп нөсхәнең был бүлеге «Алтынсы ҡобайыр» тип бирелгән. Эммә ваҡиғалар айышы уларҙы ошо китаптағы эҙмә-эҙлелектә биреүҙе талап итә.

[7] *Сура батыр балаһы* — «Аҡбуҙат» эпосы буйынса, Сура батыр балаһы — Һәүбән.

[8] *Шүлгән күлгә* — оригиналда күл ни өсөндөр Сатҡы тип аталған. Ни өсөн Шүлгән тип алынды? Сөнки быға ике сәбәп бар: 1. Сатҡы күле — тарихи Башҡортостандың Урал аръяғында (элекке Шайтан-Көҙөй волосы ерендә) хәҙерге Силәбе өлкәһендәге күл. Башҡорт халҡының эпик традицияһына был күлдең телгә алыныуы хас түгел; 2. Инде Урал батырҙың Аҡбуҙаты менән булат (алмас) ҡылысы, «Аҡбуҙат» эпосы буйынса, Шүлгән күлендә ҡала. Иҙеүкәй, Һабрау сәсән кәңәшен тотоп, шуларҙы ҡулға төшөрөргә йөрөй.

[9] *Йәннәттән һин Һауалай һөрөлгәнһең* — «Тәүрат» буйынса, Инәбеҙ Һауаның, Шайтан ҡотортоуы буйынса, тыйылған емеште (алма, бойҙай) ашауы һөҙөмтәһендә, атабыҙ Ғәҙәм менән икеһенең йәннәттән ҡыуылыуы күҙ уңында тотола.

[10] *Уйташ* — Уй йылғаһы башындағы таш (ҡая).

[11] *Нарыҫта* — хәҙерге Башҡортостандың Миәкә районы Нарыҫтау ауылы янындағы тауҙа. Легенда буйынса, Иҙеүкәй бей (ә урындағы халыҡ уны әүлиә тип белә. Шундағы Әүлиә ҡәбере — Иҙеүкәй бей ҡәбере, Әүлиә шишмәһе — Иҙеүкәй бей шишмәһе, тиҙәр) үлгәс, уның мәйете артмаҡланған дөйә: «Нарҫ-нарҫ!» — тип килгән, ти. Шулай тип килә торғас, ошо тауға етә лә сүгәләй. Шул урында, бейҙең васыяты буйынса, уны ерләйҙәр. Ә тауҙы шул ваҡыттан алып Нарыҫтау тип атап йөрөтәләр (БДУ студенттарының 1971 йылда Миәкә — Әлшәй яҡтарында үткән фольклор экспедицияһы ваҡытында Нарыҫтау ауылы ҡарттарынан ишеткәндәрҙән Ә. М. Сөләймәновтың шәхси фондынан).

[12] *Хызыр (йәғни Хызыр Ильяс)* — төрки халыҡтары инанған бәйғәмбәр дәрәжәһендәге изге зат. Урта Азия тарафтарында уны йәшеллек илаһы рәүешендә олоҡлайҙар. Башҡорттарҙың ҡарашынса, Хызыр, аҙашҡандарға юл күрһәтә, яңғыҙҙарға юлдаш була.

Сәфәрҙәргә сыҡҡан саҡта,
Хызыр Ильяс булһын юлдашың,
Хызыр Ильяс булһа, ай, юлдашың,
Мең дошманға торор бер башың, —

тип йырлауҙарынан аңлашылыуынса, Хызырҙы әжәлдән ҡурсалаусы зат тип тә белгәндәр.

[13] *Урал батыр ҡәбере Маяҡташ* — Урал һыртындағы түбә. Ғөмүмән, «Урал батыр» эпосының икенсе версияһы буйынса, Урал тауы — Урал батырҙың мәйете өҫтөнә быуын-быуын тупраҡ өйөүҙән хасил булған тау тип атала (БХИ. 3-сө том. эпос. — 136-сы б.).

[14] *Шихан* — текә булмаған ҙур тау. Бында Стәрлетамаҡ тарафтарындағы тау күҙ уңында тотола.

[15] *Майҡы бей* — башҡорттоң Табын ырыуы башлығы. Ул Сыңғыҙҙы хан итеп күтәреүгә сәбәпсе булған заттарҙан иҫәпләнә.

[16] *Ҡояшҡа тиң ханымды* — бында рус былиналарында кенәз Владимирҙы «Владимир Солнечный» тигән менән ауаздашлыҡ һиҙелә. Был хәл йыйылма тексты төҙөүселәрҙең шул хаҡта хәбәрҙар булыуынан килә торғандыр. Эпостың бүтән версия һәм вариантында бындай сағыштырыу күҙәтелмәй.

[17] Күкрәгенең өҫтөндә
Бысағы бар ине, ти.

Йола буйынса, ен-шайтан алмаштырмаһын өсөн, үлгән кешенең күкрәгенә бысаҡ йә бүтән үткер (осло) әйбер һалалар.

[18] *Эҫем* — Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы йылға (рустар уны Сим тип белә).

[19] Аҡколомбәт ҡустыһы,
Ҡараҡоломбәт мырҙаһы,
Бала һуйып, хан булып...

Мең ырыуы шәжәрәһе эпоста Аҡколомбәт тип телгә алыныусыны Аҡһаҡкилембәт тип исемләгән: йәнәһе лә Ҡаракилембәт (шәжәрәлә ул шулай исемләнә) менгән бейә өркөп ситкә тайпыла. Аҡһаҡкилембәт көлә. Шул арҡала ике ағай араһында ыҙғыш сыға (Башкирские родословные / Сост., предисл., пояснение к переводу и т.д. Р. М. Булгаков и М. Х. Назергулов. — Уфа: Китап, 2002. — Вып. 1. — С. 265).

[20] Бабсаҡ бейҙе үлтереп,
Атаһының ҡоно өсөн
Бабсаҡ улы Күсәккә —

«Ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе» һәм «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосы бәйән итеүенсә, дүрт ырыуға баш булған Мәсемхандың малына яфа һалған януарҙы Ҡыпсаҡ батыры Бабсаҡ бей үлтерә. Әммә Бөрйән ырыуы батыры Ҡараҡоломбәт, мин үлтерҙем, тип дәғүәләшә. Ошо арҡала килеп сыҡҡан низағ һөҙөмтәһендә, ул Бабсаҡтың билен өҙә ата. Инәһенең ҡорһағында ҡалып, аҙаҡ донъяға килгән Күсәкбей Ҡараҡоломбәттән атаһының ҡонон ала: үҙен язалай, ырыуын ҡыра (эпоста әйтелеүенсә, бер йәнде генә ҡалдыра).

[21] *Сыңғыҙ хан* — Темучин (1155—1227) — 1206 йылда Монгол империяһын төҙөй башлаусы бөйөк хан. Уның етәкселегендә Азия һәм көнсығыш Европа империя ҡулына эләгә.

[22] *Аблай хан* — XVIII быуатта (? — 1781 йылдарҙа) йәшәгән ҡаҙаҡ ханы. Урта йөҙ хакимы сағында Өлкән йөҙҙө һәм ҡырғыҙҙың ҡайһы бер ырыуҙарын үҙ ханлығына ҡуша. 1740 йылда рус подданствоһын ҡабул итә.

[23] *Ҡарахан* — бында Ҡарахандар дәүләте йә Ҡарахандар династияһынан берәй хан күҙ уңында тотолоуы ихтимал. Ҡарахандар дәүләте X быуатта төҙөлә. 1212 йылда Хорезм шахы Мөхәммәт тарафынан ҡыйратыла. Шуға тиклем уның биләмәһе Көнсығыш Төркөстанды, Ете йылғаны, Тянь-Шандың көньяҡ сиктәрен үҙ эсенә алған була. Ҡарахан династияһы 927—1212 йылдарҙа хакимлыҡ итә.

[24] *Урал миңә ҡул бирһә* бүтән варианттарҙа ҡул биреүсе сифатында Аҡһаҡ Тимер күҙ уңында тотола. Варианттарҙа Сатмыр хан, Се Тимер тип телгә алынған хан образында Аҡһаҡ Тимер (Тамерлан) төҫмөрләнә.

[25] *Үгәҙәй* — Сыңғыҙхандың өсөнсө улы. Ул 1186—1241 йылдарҙа йәшәй. Атаһынан ҡалған тәхеткә ултырып алғас, ул Ҡытайҙың төньяғын, Әрмәнстанды, Грузияны, Әзербайжанды баҫып ала. 1235 йылда Үгәҙәй төҙөгән Оло ҡоролтай Болғар ханлығын, Дәшти-и-Ҡыпсаҡ илен һәм рус кенәзлектәрен буйһондорорға ҡарар итә. Ошо ҡарарҙы бойомға ашырыу бурысын Сыңғыҙҙың ейәне Батый атҡара. 1229 йылда Сүбәдәй менән Күкәдәй етәкселегендәге татар-монгол баҫҡынсыларын болғарҙар, башҡорттар, половецтар Уралды көньяҡтан урап үтергә мәжбүр иткән булалар. Әлеге ҡоролтайҙан һуң 1236 йылда Болғар дәүләте юҡ ителә, башҡорт ҡаршылығының төп үҙәктәре лә шундай яҙмышҡа дусар ителә. (Ҡар.: История Башкортостана с древнейших времен до 60-х годов XIX в. / Ответ. ред. Х. Ф. Усманов — Уфа: Китап, 1997. — С. 121).

[26] *Оран һалған сығатайҙың Төбәге булған Алатау* — бында Сығатай ырыуынан булған татар-монгол хандарының ҡайһыһылыр Алатауҙы биләп тороуы күҙ уңында тотолалыр. Сығатайҙар

1224 йылда уҡ монгол империяһынан айырылып сыға һәм Урта Азия (Мавеверания, Етейылға), Ҡашғар ерҙәрен үҙ ҡулдарына төшөрә.

27 *Атам Төкләҫ тауына* — ғөмүмән, Урал тауы күҙ уңында тотола (Төкләҫ менән Төйәләҫ бер үк топоним булыуы ла ихтимал).

28 *Тур тауына* — мосолмандарҙың изге тауҙарының береһе. Ул Синай ярымутрауында урынлашҡан. Шул таҙа Муса бәйғәмбәр Аллаһы Тәғәлә менән һөйләшә була («Аллах спас сынов Израиля руками Мусы, избавил их от пыток фараона в Египте. Муса привел сынов Израиля (йәғни йәһүдтәрҙе. — *Ә. С.*) в пустыню Тур на Синае, где находится гора Аль-Тур, на которой Аллах первый раз разговаривал с Мусой» // Истории о пророках. Кн. первая/ сост. Абдель Хамад Джуда Ал-Саххар. — М., 1922. — С. 81; Шулай уҡ Н. Иҫәнбәттең йыйылма тексына бирелгән 21-се иҫкәрмәгә күҙ һалығыҙ. — *Ә. С.*)

29 *Сахарҙай (төп нөсхәлә Чаһарҙәй)* — Саһар йондоҙо.

30 *Баба Ғөмәр* — Үмәр батыр, Баба Үмәр эпостың ҡаҙаҡ версияһының бер варианты буйынса, ул Иҙеүкәйҙең олатаһы булған (БХИ. 5-се том. — 306-сы б. 7-се иҫкәрмә).

31 *Ҡырҡтытау* — Көньяҡ Уралдың (хәҙерге Әбйәлил районы ерендәге) бер тармағы.

32 *Иҙел менән Яйыҡҡа*
*Үҙән йырған был ҡылыс* —

32 «Урал батыр» эпик ҡобайырынан Уралдың балалары һәм Шүлгән улы Һаҡмарҙың алмас ҡылыс менән йылғалар йырыуы күҙ уңында тотола.

33 Урал батыр ҡылысы иҫкә алынған.

34 Ошо урындан алып Мораҙым исеменән әйтелгән һүҙҙәрҙең ахырына тиклемге өҙөк йыйылма текстың өсөнсө вариантынан (Н. Т. Зариповса) алынды (ҒА. ф. 3, оп. 12/229. — 140—141-се, 151—152-се б.), сөнки китапҡа тәҡдим ителгән варианттың һуңғы биттәре юҡ, ә ҡулъяҙма ахырындағы иҫкәрмәлә әйтелеүенсә, ике варианттың да финалы бер үк булған.

## 12. Иҙеүкәй менән Мораҙым

Был йыйылма тексты совет осоронда татар әҙәбиәтенең күренекле вәкиле — шағир, драматург һәм фольклорсы булып атҡаҙанған мәшһүр яҡташыбыҙ Нәҡи Сиражи улы Иҫәнбәт (ул 1899 йылда Башҡортостандың хәҙерге Салауат районында тыуған, 1992 йылда Ҡазанда вафат булған). 1928 йылда, хәҙерге Әбйәлил районы Күсем ауылында, Баймаҡ районының Төр(ө)кмән, Нуғай (Үргеһеме, Түбәнгеһеме — аныҡ әйтелмәгән) ауылы кешеләренән «һөйләтеп, күсереп» алған һәм Сәғит Мирасов ме-

нән Дауыт Юлтыйҙың яҙмаларынан алынған текстарға нигеҙләнеп төҙөгән булған. Былар хаҡында мәғлүмәтте Нур Зарипов (1925—1997) төҙөгән томдың аңлатмаларынан алырға мөмкин. Унда шулай уҡ Н. Иҫәнбәт йыйылмаһының ҡыҫҡаса йөкмәткеһе һәм ҡайһы бер текстологик күҙәтеүҙәр ҙә бар (Ҡар.: БХИ. 5-се том. — 335—345-се б.) // ҒА. ф. 3; оп: 12: ед. хр. 221, 223, 225, 231, 232. Иҫкәрмәләр Нәҡи Иҫәнбәттеке, уларға өҫтәмәләр һәм асыҡламалар Ә. М. Сөләймәнов менән Н. Т. Зариповтыҡы.

Ошо томды төҙөүсенең үтенесе буйынса, Күсем ауылына барып ҡайтҡандан һуң, С. Юлаев премияһы лауреаты шағир Ҡәҙим Аралбаев уға ошондай мәғлүмәттәр тапшырғайны: «Башҡорт информаторҙарынан яҙып алған фольклор материалдары менән нисек эшләүе хаҡында Н. Иҫәнбәт үҙенең 36 битлек ҡулъяҙмаһында бына нindәй аңлатма бирә: «*Быларҙан тыш мин Сәғит Мирасовтың Фәҙелша ауылы Ҡәҙерғол ҡарттан һөйләтеп яҙып алған тексы һәм Дауыт Юлтыйҙың Туҡсоран ҡурайсыһы Батырхан ҡарттан һөйләтеп алған тексы менән таныштым. Улар минең ҡулдағы материалдарға ҡаршылыҡ итмәнеләр, киреһенсә, бик аҙ үҙгәреш менән бер бөтөндөң өлөштәре булыуын күрһәттеләр. Мин үҙ тексымда уларҙан файҙаланған урындарҙы күрһәтә барҙым һәм быға тиклем матбуғатта сыҡҡан әйтемдәрҙе* юл аҫтына индереп, сағыштырыуҙар яһай барҙым... Унан һуң мин был материалдарҙы тик йыйнаусы булып ҡына эшләнем. Билгеле, мин һис бер әйтемдәрен үҙгәртмәнем. Икенсе варианттары булһа, күрһәтә барҙым. Күпме ирешкәнмендер, уҡыусылар хөкөм итерҙәр*» (ҒА. — ҡулъяҙмалар фонды, ф. 3, оп. 12, д. 232, 33—34-се б.). Н. Иҫәнбәттең ҡулъяҙмаһындағы *«әйтемдәр»* тигән һүҙҙең мәғәнәһе бөгөнгө ҡулланылыштағы фразеологик әйтемде, грамматик берәмекте йә һамаҡлауҙы күҙ уңында тотмай, әлбиттә. Бындағы «*әйтем*» — ул дәүер сәсәндәре һөйләгән (әйткән) тарих һәм боронғолар һүҙе, риүәйәттәр һәм легендалар, дөйөм алғанда, халыҡтың ауыҙ-тел ижады ынйылары, телдән телгә һөйләнеп, быуындан быуынға бирелеп, күсеп йөрөгән эпик ҡомартҡылар. Ул рус телендәге «сказ», «сказание»гә тап килә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырының яҙып алыныу тарихына кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Информаторҙар араһында исеме беренсе булып телгә алынған Сәлим хәлфә кем ул? Аңлатмаларҙа Нәҡи Иҫәнбәтов уның «тамъяндың Күсем ауылы кешеһе» булыуынан башҡа бер нindәй ҙә мәғлүмәт бирмәй.

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Тамъян-Түңгәүер кантоны Тамъян улының 19-сы һанлы йортона Мөхәммәт, Шығай, Мәндей, Әүмеш һәм Күсем ауылдары ҡараған (Ә. Әсфәндиәров. Башҡорт АССР-ы ауылдары тарихы. Өфө, 1990. — 1-се китап. 89-сы б.).

Күсем — Ҡырҡтытау теҙмәләре ҡыҙырымындағы, йәғни әле тәүтормош кешеләренең тәүтөйәге булған Мауыҙҙы (Ажда-

һалы), Суртанды (Сурталы), Ҡарабалыҡты (Ҡарабалыҡлы), Сабаҡты, Үләнде күлдәре ареалындағы боронғо ауылдарҙың береһе.

Ауыл Күсем исеме менән XVIII быуаттың башынан билдәле булһа ла, һуңғы исемен йөрөткәнгә тиклем, ул XVI быуаттың аҙағында — XVII быуаттың башында күсмә һәм ултыраҡлы хәлдә үҙенең ырыу башлыҡтары: Хоҙайғол — Йомор бей — Иһәш тархан — Тәүәш батыр йә Мәмбәтәй — Солтанғужа — Ҡарабай исемдәренең береһе менән аталып йөрөүе бик ихтимал. Тарихта бындай осраҡтар күп.

Ә инде исеме ауылға бирелгән шәхес — **Күсем Ҡарабай улының** йәшәгән йылдарын аныҡлау мөмкин түгел: 1816 йылғы ревизия материалдарында ул юҡ, бары уның 4 улы хаҡында мәғлүмәттәр табылды. Бына улар: Ғәбәйтулла Кусимов (1759—1821 йй.), Ниғмәтулла Кусимов (1762—1814 йй.), Хәбибулла Кусимов (1768—1840 йй.), Мөхәмәтшәриф Кусимов (1787—1812 йй.). Быларҙан сығып, Күсем Ҡарабай улының яҡынса тыуған йылы итеп 1729—1734 йылдарҙы фаразлап булыр ине.

Күсем ауылы шәжәрәһенән мәғлүм булыуынса, тамъяндарҙың Күсем ауылында *бауырҙар, бөгәҙеләр, моҙғалар, ҡаралар, ҡатайҙар, туҡмаҡтар, күтәндәр* аралары бар. Был араларҙың өсәүһен *(бауырҙар, ҡаралар, бөгәҙеләр)* тел ғалимы, филология фәндәре докторы Азат Камалов та үҙенең башҡорт ауылдары тураһындағы хеҙмәтендә телгә алып үтә (Камалов А. Атайсал. — Өфө: Китап, 2001. — 98-се б.).

Сәлим хәлфә Тамъян башҡорттарының ошо Күсем ауылындағы *бөгәҙеләр* араһынан. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Ғүмәр Ғилман улы Ғилманов (1919 йылғы) бала сағында Сәлим хәлфәне күреп-белгән, уның улы Сабур менән бергә уйнап үҫкән. Бына ул ниҙәр һөйләне: «Сәлим хәлфә тураһында ошоғаса ғалимдар ниңә ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа, һорашмайҙар ҙа икән, тип, мин хатта аптырап та ҡуя инем. Ниңә тигәндә, уның шикелле белемле, уның кеүек мәғлүмәтле кеше беҙҙең тирәлә булғанлығын мин белмәйем. Һәр хәлдә, беҙҙең ауылда ул мин бала саҡта иң абруйлы, иң хөрмәтле кеше ине...

Сәлимдең атаһы Ғәлим ҡарт, хорунжий чинында батша армияһынан ҡайтып, хөкүмәт биргән льготанан файҙа күреп, байып киткән...

Сәлимгәрәйҙе ауылда Сәлим хәлфә тип тә, Сәлимбай тип тә йөрөткәндәр. Ғәлим харунйә байлығы арҡаһында улына Йәнекәй ауылының бай кешеһенең Биби тигән ҡыҙын никахландырған. Биби Сәлим хәлфәгә өйөр йылҡы менән килен булып төшкән. Байлығы өҫтөнә, уҡыуы ла шәп булғас, мәҙрәсә тотҡас, ныҡ байып киткән Сәлимгәрәй. Революция, граждандар һуғышы башланғас, әлбиттә, уға көн бөттө. Милкен, бар мөлкәтен тартып алдылар. Уйылдан ағайым, атайымдың игеҙ ҡус-

тыһы, Сәлим хәлфәгә ҡуян арба менән бер уҡымышлы кешенең килеп китеүен күреүе хаҡында һөйләгәйне беҙгә. Ул уҡымышлы кеше Аҡмулла булғандыр. Сәлим хәлфәләрҙә ҡунып, ат ашатып, иртәгеһенә Өлкән түбә аша Ташбулат ауылы яғына сығып киткәнен беҙ ҡарап ҡалдыҡ».

**Һығымталар.** 1. Сәлим хәлфәнең (Сәлимгәрәй Мөхәммәтғәлим улы Ғәлимов) күп кенә төрки халыҡтары өсөн уртаҡ булған «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырын хәтерләр һәм һөйләп яҙҙырыр кимәлдә булыуы ҙур иғтибарға һәм ихтирамға лайыҡ күренеш. Был факт XX быуат башында ла әле сәсәнлек традицияларының тотороҡло һәм көслө булыуына ишаралай.

2. Сәлим хәлфә шул осорҙоң атаҡлы мәғрифәтсеһе һәм зыялыһы Зәйнулла ишан Рәсүлевтең (1833—1917) шәкерте һәм мөриде (тәғлимәтен ҡабул итеүсе һәм шул идеяны алға һөрөүсе) булыуы менән дә үҙенең бөйөк остазы кеүек донъяға һәм тормошҡа прогрессив ҡараштарҙа торғанлығы мәғлүм.

3. Тамъян-Түңгәүер кантонының Күсем ауылы XVIII—XIX быуатта шул төбәктең мәҙәниәт һәм мәғрифәт, дин вә ғилем үҙәге булғанлығын билдәләргә һәм өйрәнергә мөмкин.

4. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосындағы лексик берәмектәр, телендәге образлау алымдары, һүҙ байлығы, нигеҙҙә, тамъян һәм түңгәүер башҡорттарының тел (һөйләш) үҙенсәлектәрен сағылдыра.

5. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» ҡобайырының Нәҡи Иҫәнбәткә 1928 йылда Сәлим хәлфә яҙҙырған варианты менән татар халыҡ дастаны тип йөрөтөлгән «Идегәй» (1940 һәм 1988 йылдар) араһындағы лексик, стилистик һәм һүрәтләү алымдарындағы уртаҡлыҡтарҙы ла киләсәктә сағыштырмаса өйрәнеү мөһим».

[1] *Баба Төкләҫ* — 12-се йөҙҙә Төркөстанда йәшәгән Хужа Әхмәт Йәсәүи тигән суфый бер шағирҙың ҡушаматы булып, уның ҡәберен әле лә Баба Төкләҫ ҡәбере тип йөрөтәләр.

Бынан башҡа, Башҡортостанда беренсе килеп ултырған Нуғай хандың исеме лә Төкләҫ тип йөрөтөлә. Быларҙың һуңғыһы Түрә Ҡылыс* йәки Түрә баба Төкләсеү (Мөнир Һадыев «Башҡорт тарихы»нда — «Тауыҡласыу») тип йөрөтөлә. Ул хәҙерге иҫке Өфө янындағы Чертово городцела йәшәгән һәм крепость-ҡорғаны ла булған тип күрһәтелә... былдағы Төкләҫтән морад — шулар булыуы бик мөмкин.

[2] Иҙеүкәй исеме Ҡырым нуғайҙары күсерегендә Әҙәкә (Ҡар.: «Яңы донъя». — 15. — 1924 й.) Әбүбәкир Диваев материалдарында «Иҙегә», ҡайһы бер башҡорт күсеректәрендә Иҙегә, Ғ. Баттал «Татар тарихы»нда — Иҙге, З. Вәлиди «Төрөк — татар тарихы»нда Иҙегеү тип күрһәтелә.

Иҙеүкәй исеме 1393 йылда (һижри — 795) Туҡтамыш хандың Литва короле «Ягала»ға биргән ойғорса яҙылған ярлығында телгә алына һәм унда «Әҙеүкәй» тип яҙыулы (мәғлүм) (Ҡар.: Ғ. Ғәзиз, Ғ. Рәхимдәрҙең «Татар әҙәбиәте тарихы», икенсе баҫмаһы. — 1925. — 58—59-сы биттәр).

Иҙеүкәй Туҡтамыш хан илендә «Ҡарт Амичка» исемле бер көтөүсе тарафынан табылған. Көтөүсенең бер ҙә бала-сағаһы булмаған. Даланда (далала. — *Ә. С.*) йөрөгәндә, бер аҡ сепрәк менән төрөлгән көпө табып, итегенең ҡуңысына һалған. Өйөнә килтергәс, ҡайҙан тапҡаны һәм нисек килтергәне һоралғас, «итектең ҡуңысына һалып килтерҙем», — тигән. Икенсе бер күсерек буйынса, Туҡтамыш хан мәсеткә барғанда, итек эсенә һалынған бер бала тапҡан. Был балаға шул айҡанлы «Иҙекә» исеме бирелгән, имеш. (Ҡар.: Радлов. Образы народной литературы тюркских племен, живущих в Сибири и Джунгарской степи. ч. 14, изд. 1872.)

Дауыт Юлтый тарафынан табылған халыҡ легендаһы буйынса: Иҙеүкә-баба Ғәзиз улы Баба Төкләҫтең ҡатыны — һыу батшаһының ҡыҙынан тыуған. Һыу батшаһы ҡыҙы Баба Төкләҫтән айырылғанда, ҡорһаҡлы булған. Төкләҫтән булған балаһы тыуғас, һыу батшаһы ҡыҙы уны һыу аҫты донъяһынан ер йөҙөнә сығарып ташлаған. Баба Төкләҫ уны һыу буйынан табып алған. Ул бала илһеҙ-көнһөҙ тыуған өсөн, уны «Иҙеүкә» тип атаған. (Ҡар.: И. В. Салтыков ҡалдырған яҙманы хәтерләтә. — *Ә. С.*)

[3] Быңдай алымдар һәм күсерек башланыштары башҡортта ғына булмай, башҡа төрөк халыҡтарында ла бар. Миҫал өсөн, был урында ҡаҙаҡ әкиәте «Чүпчәк»те алайыҡ. Ул былай башлана: «Көндәрҙән бер көн Чупан ата баласының бер уйға ҡалып ултырыуын күреп, һынамаҡ өсөн: «Ай, балам, ошо мин әйтәсәк һүҙҙәрҙең (тулғауҙың) манисене (мәғәнәһен) әйтеп бирһәң, үҙеңә тура килерҙәй, күңелеңде алырҙай, донъяла миҫле* булмаған бер юлдаш алып бирәйем, — тип, һүҙ башланы, —

Ҡорма тимер ҡорос булат
Бойороп һуҡҡан бар микән?
Арҡауылдың буйынан
Ат оҙатҡан бар микән?
.........................
Ҡонан ҡуйҙың (һуйҙың. — *Ә. С.*) ҡуҡъял ит
Яңғыҙ өйгән бар микән?
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған бар микән?» —

тип бик аҙ үҙгәреш менән башлана (Ҡар.: Чупан ата/ Зариф. Ташкент, 1909. — 5—6-сы б.).

[4] Ә. Диваев материалдарында Иҙеүкәйҙең үткер аҡыллығын күрһәтә торған бер нисә төрлө хөкөмдәре һаналып күрһәтелә (Ҡар.: Иҙекә батыр // Шура. — 1917. — № 15; шулай уҡ — Ҡушымта № 1. — *Ә. С.*).

[5] Иҙеүкә менән Мораҙым күсерегенең бер нисә беркетмәһе (тексы) ҡаралып, бында хәтле яҙылышында Сәғит Мирасовтың

беркетмәһе яҡын итеп алынды. Мирасовтың үҙ беркетмәһен Ғәҙелша ауылы, хәҙер Баймаҡта тороусы 73 йәшлек Ҡәҙерғол Биктимер улынан һөйләтеп алыуын яҙа.

«Инде бынан башлайым (Иҙеүкәй менән Янбайҙың әйтешкән еренә хәтле) Дауыт Юлтый материалдары менән файҙаландым. Юлтый иптәш үҙ беркетмәһен Абдул (Егәнлек) ауылы (Туҡсуран) ҡурайсы батырхан Самбитов ҡарттан алыуын күрһәтә. Күсеректең тулы сығыуына ярҙам итешкән был иптәштәргә ҙур рәхмәт уҡып үтәм.

[6] *Туҡтамыш хан* — Алтын Урҙа ханы (1405 — үлгән). Һарайҙа һәм Ҡырымда Баҡсаһарайҙа йәшәгән.

[7] *Ҡара кис* — Рубрук материалдарында: «Менгухан түңәрәк төшкән һәм бик ялтырай торған тюлень тиреһенә оҡшаған тиренән кис кейеп ултыра». (Рубрук. фасыл XXXIII) (Ҡулъяҙмала Роберик, Рубрик тип ике төрлө алынған. — *Ә. С.*)

[8] Икенсе бер вариантта был төштө Туҡтамыш ханға Һабрау тигән ҡарт, бер йыраусы һөйләй тип күрһәтелә.

[9] *Шәғәли Шаҡман* — исем, 1557 йылда башҡорттарҙың Мәскәүгә буйһоноуҙары тураһында Иван Грозный тарафынан бирелгән грамотала күренә: бында дүрт ырыуҙан вәкил һаналып, беренсеһе — Үҫәргән ырыуынан бик ваҡ кенәз, икенсеһе — Бөрйән ырыуынан иҫке бер кенәз, өсөнсөһө — Ҡыпсаҡ ырыуынан мәшүле ҡара ҡуҙаҡ кенәз, дүртенсеһе — Тамъяндан Шәғәли Шаҡман тиелә (Башҡорт аймағы. — № 1).

Бында Туҡтамыш хандың батырҙары, Янбайҙан башҡаһы, бары ла башҡорттар тиеп күрһәтелә: Мөйтән бей — Сыңғыҙ хан тарафынан Башҡортостанға ҡуйылған бей булып, башҡорттарҙы ун ике ырыулы бер йорт итеп ҡороусы һәм идара итеүсе ул булған тип һөйләйҙәр (был турала айырым легендалар бар). *Юрматы, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табын* һүҙҙәре — башҡорт ырыуҙарының исемдәре. Был исемдәр бөгөндә лә шулай. Башҡорт иле ул сағында Алтын Урҙа ҡарамағында булғанға, башҡорт ырыуҙарының батырҙары һарай тирәһендә булыуы мөмкин һанала. Икенсе яҡтан, Туҡтамыштан 150 йыл һуң йәшәгән Шәғәли Шаҡмандың бында йөрөүе халыҡтың үҙенең ҙур ҡаһармандарын, ҙур ваҡиғалар менән бәйләп, аңларға ятыуҙарынан килә.

[10] *Һабрау* — Ҡырым нуғайҙары күсерегендә был — *«Суфыра»* йыраусы тип йөрөтөлә. Башҡорт телендә «с» хәрефе «һ» менән, «ф» хәрефе (дөрөҫө: өнө) «б» менән алмашыныуы бик осрағанда, *«Суфыра»*нан *«Һубыра»*ға, унан *«Һабрау»*ға әйләнгән булыуы мөмкин.

Икенсенән, «һабрау» һүҙе менән бергә башҡорттар ҡарт йыраусының ирене «һалбырау» («һалбырауыҙ» тигәнде аңлатыуы ла ихтимал. — *Ә. С.*) булыуын да аңлатырға теләйҙәр.

Диваев материалдарында был кеше «ҡарт баба» тип йөрөтөлә (Ҡар.: Шура. — 1917. — № 16. Ошо уҡ томдың «ку-

шымта» булеге. — Ә. С.). Төньяҡ Кавказ нуғайҙарында был Һабрау — 180 йәшлек бер йыраусы итеп күрһәтелә, исеме Фәрәздәү бине Шабан булып, үҙе хивәлек, тиелә (Ҡар.: Семенов, Туземцы Северо-Восточного Кавказа).

С. Мирасов материалдарында «Һабрау» тураһында һүҙ юҡ. Дауыт Юлтый материалдарында был ҡарт «Манғут» бей тип алына (И. В. Салтыков тексына күҙ һалығыҙ. — Ә. С.). Ҡайһы бер ҡаҙаҡ дастандарында «Сүпәрә» йәки «Сапыра» йыраусы тиелә.

[11]Дауыт Юлтый материалдарынан:

Урал буйы — ауыр йорт
Аптырауға әйләнде,
Урал улы Манғутым,
Кәңәш һиндә ҡалды инде.

[12]Ҡырым татарҙары (нуғайҙары) күсерегендә былай күсерелә: «Туҡтамыш хандың баллы буҙа йыйынында Сафура (Суфыра булыуы ихтимал. — Ә. С.) йыраусы *Еренсе* (?) ҡарт:

Яйыҡта күрҙем Чингезхан
Уҙа сәндәй булған юҡ,
Илдә күрҙем Игеҙхан
Уда сәндәй булған юҡ,
Тәбингесе тәрки алтын,
Туни биҙә хан ине,
Өҙәңгеһе үҙбә алтын
Үҙе би ҙә хан ине,
Алими сәндән кит (ҡайтмыш) ине,
Ул Туҡтамыш падишам,
Уны күргән ҡартыңмын.

(Ҡар.: Яңы донъя. — Аҡмәсет.—1924. — № 15. Әжмәндәле Ғәбдерәхмән материалдары.)

[13] *Ҡадирхан, тулыһы — Ҡадирбирҙе* — Туҡтамыш хандың туғыҙ балаһынан берәүһенең исеме. Ҡадирбирҙе Туҡтамыш балаларынан иң һуңғы тәхеткә ултырғаны булып, 1419 йылда, Иҙеүкәй менән һуғышҡанда, ҡарт Иҙеүкәйгә бермә-бергә ҡаршы сыҡты һәм Иҙеүкәй тарафынан үлтерелде (Баттал Ғ. Татар тарихы. — 54-се б.). Был күсректә уны үлтереүсе Мораҙым булыбыраҡ аңлашыла.

[14] *Сатмыр хан* — донъяның иң ҙур һуғышы башлыҡтарынан Аҡһаҡ Тимерҙең боҙолған исеме (ҡайһы бер башҡорт күсеректәрендә — *Бесен Тимер*, ҡайһыһында *Тимер хан* тип кенә йөрөтөлә / Иҙеүкәй менән берлектә Туҡтамыш хан илен емереүсе / 1390—1391 һәм 1395 йылдар). Сәмәрҡәндтә тыуа. 1405 йылда вафат.

[15] *Ҡобаһыр* — Иҙеүкәйҙең ялған исеме.

Нуғайсанан алынған монгол дастандарында былай күрһәтелә: Иҙеүкәйҙең атаһы Ҡолоҡай мырҙа Туҡтамыш хан һарайында ҡоштар тәрбиәләп торған. Туҡтамыш хандың бик ҡиммәтле, ҡәҙерле ҡарсығалары булған. Ҡотлобай мырҙаға ошо һис бер ил, һис бер халыҡта табылмай торған, аҫыл ҡоштарҙы бик һаҡлыҡ менән ҡарап үҫтерергә, был ҡарсығаларҙың үҙен генә түгел, хатта буш йомортҡаһын да һис бер кешегә бирмәҫкә ҡушылған булған. Берәр кешенең ҡулына төшә-нитә ҡалһа, Туҡтамыш өсөн һәләкәт ул. Туҡтамыштың ошондай донъяла оҡшашы булмаған ҡоштары тураһында, Азияның иң ҙур һуғыш ҡаһарманы Шаһтимер (Аҡһаҡтимер) ишетеп, Ҡотлоҡайға бик ҡиммәтле бүләктәр менән үҙенең яҡын күргән бер хеҙмәтсеһен ебәрә. Ҡотлоҡай мырҙа, килгән илсенең һүҙҙәренә, ҡиммәтле бүләктәренә алданып, Шаһтимергә ҡарсығаларҙың бер нисә йомортҡаһын биреп ебәрә. Туҡтамыш хан был хыянатты белеп ҡалып, Ҡотлоҡайҙы һәм уның өй эсен ҡырып бөтөрөргә фарман сығара. Ҡотлоҡайҙың ҡыҙ ҡәрҙәше булған *Иҫәбе*, Туҡтамыштың бойороғон ишетеп, бик ҡурҡа. Ҡотлоҡай мырҙаның нәҫеле киҫелмәһен тип, төн менән Ҡотлоҡайҙың өйөнә килә, белдермәҫтән бишектә ятҡан *Иҙеукәйҙе* ала. Уның урынына үҙенең *Ҡобоғол* (Ҡоп уғыл) исемле улын ҡуйып ҡалдыра. *Иҙеукәй* ҙурайғас, Туҡтамыш ханда *Ҡобоғол* исеме менән хеҙмәт иткән, үҙенең ысын исемен йәшергән була. (Ҡар.: Семенов. Туземцы Северо-Восточного Кавказа. С. 18.)

Инде Ҡырым татарҙары (нуғайҙары) күсереге ҡаралһа, унда бындай һүҙҙәр бар:

«Суфыра йыраусы Ҡобоғолдо сыйнап» әйтә:

> Ит еңкәле күрненә
> Күрүк ужын Ҡобаҡол
> Ҡомға бөткән ҡубадал
> Батыр икән шул уғыл» —

тиелә. Ләкин бында Ҡобоғолдоң кем икәнлеге әйтелмәй.

Башҡорт күсерегендәге «Ҡобаһыр» һүҙе ошо Ҡоболғол, «Ҡобағол»дар менән бәйле булып, шуның үҙгәреше булырға оҡшай.

Инде башҡорт халыҡ әҙәбиәтенең ҙур бер бүлеге булған *«ҡобайыр»* ҙа бар. Был һүҙҙең тарихы беҙгә билдәле түгел. Ошо «Иҙеүкәй менән Мораҙым» күсереге баштан аяҡ ҡобайыр әйтешеү юлы менән бара. *Тамырҙары бик яҡын булған «ҡобайыр» — «ҡобаһыр» һүҙҙәренең яҡын бәйләнештәре юҡмы?* (Курсив минеке. — *Ә. С.*)

16 *Табаныңды теләр ул,*
*Телеп, ҡылын һалыр ул.*

Борон, әсирҙәр ҡасып китмәһен өсөн, уларҙың табандарын те-

леп, шунда туралған ат ҡылы һалыр булғандар: яра бөтәү яра булып ҡала, күп йөрөргә ирек бирмәй — туралған ҡыл сәнсә (Ә. С.).

[17]*Аҡ Урҙа* — Жучиҙың көнбайыш өлөшө, өлөшләтә Алтын Урҙа биләмәһе булған. XIV быуатта уға хәҙерге Оло Иҙел (Волга) буйҙары, Кавказдың төньяҡ-көнсығышы, Ҡаҙағстан һәм уларға тейеп ятҡан ерҙәр ингән. XV быуатта Аҡ Урҙа биләмәһендә Оло Урҙа хасил була. Нуғай Урҙаһы, Үзбәк ханлығы, Ҡырым ханлығы барлыҡҡа килә (Ә. С.).

[18] Энәкә-Күнәкә — Туҡтамыш хандың ҡыҙҙарының исемдәре. Ғ. Вилданов материалдарында *«Ғәнәкә менән Туҡай»* һәм *«Әнәк менән Күнмә»* тип күрһәтелә (Башҡорт аймағы. — № 4). Ҡырым татарҙары (нуғайҙары) дастанында *«Ханәкә — Күҙәкә»* тип йөрөтөлә:

«Саҡаулап сүләр сүз алтын,
Аҡ биләки сум алтын,
Ханәкәдәй арурым,
Күзәкәдәй күркәмнә
Аны да ҡайтдең (ҡая киттең) Нурадин.

(Ҡар.: Яңы донъя. — 1924. — № 21.)

Ҡырым нуғайҙарының был «Әҙәк» («Иҙеүкә») дастанынан башҡа, ҡырым татарҙары араһында (дөрөҫөрәге — ҡарамайҙар араһында) был *Ханәкә* ҡыҙ тураһында тағы бер легенда йөрөй. Быныһында ҡыҙҙың исеме *Энкә жан* тип йөрөтөлә. Ул шулай Туҡтамыш хандың Сәләхетдин исемле бер ғәскәр башлығы Энкә жанға ғашиҡ була. Ләкин Туҡтамыш хан был егетте ҡыҙына тиңһенмәгәс, Сәләхетдин бей үҙенең ҡырҡ егете менән килеп, ҡыҙҙы урлап китә. Артынан хандың туғандары сыға. Сәләхетдин бей хәҙерге Баҡса һарайҙан өс саҡрым ерҙә торған Чығут ҡала тауҙарының түбәһендәге Ҡарайым шәһәренә килә һәм хан ҡыҙы исеменән ҡапҡаны асырға һорай. Шул уҡ Энкә жанға ғашиҡ булған Ҡарайым руханиһе йәш Эрәбп уларҙы ҡалаға керетә. Был Чығут ҡала бейек ҡоймалары, таш ҡаялар менән әйләндерелгән булып, һуғыш өсөн ныҡлы крепость урынын тота. Сәләхетдин ҡырҡ егет менән Туҡтамыш хандың ғәскәренә ҡаршы тора. Ахырынан, теге Эрәби, Энкә жандың үҙенеке була алмауын күреп, ҡапҡаны аса. Шәһәр алына. Яраланған Сәләхетдинде тотоп шул уҡ Чығут ҡала башындағы Чикле ҡоба тигән ер аҫты мәғәрәһенә ябалар. Энкә жан таш ҡаянан ташланып үлә. Сәләхетдин әлеге мәғәрәлә үлтерелә (был мәғәрә хәҙер ҙә шунда). Туҡтамыш хан Чығут ҡала түбәһендәге Энкә жанға торба һалдырып, шунда күмдерә. Э Чығут ҡала — был ҡырҡ ир иҫтәлеге өсөн халыҡ араһында *Ҡырҡ ир* тип атала.

Энкә жандың торбаһы хәҙерге көндә лә Чығут ҡала башында ултыра. Хәҙер архитектураһы менән һалынған матур ғына бер бина булып, ишегендә *«Хыта çөлçө»* менән төрлө

хәҙистәр яҙылған. Торба эсендә мәрмәрҙән бер һандыҡ таш булып, ҙәмҙәндәр үҙеү менән, юйылған шул яҙыуҙар уҡыла: «Һеҙҙә рузиател мөләкәтел мыгҙиматы... Әнкә жан ханым бинте Туҡтамыш хан...»

Был эпитафиялағы исемде Ғ. Аҡчураҡлы. *«Ханәкә-Енәкә»* һәм *«Нәнкәжан»* рәүешендә уҡып була, ти. (Ҡар.: Ғ. Аҡчураҡлының «Ҡырым Раскупи» материалдарынан.) Шул уҡ юғарылағы легенда Ғ. Аҡчураҡлы тарафынан йыйналып, *«Нәнкә жан»* ханым торбаһы тигән хикәйә итеп, 1899 йыл Петербург, Бураганский тарафынан баҫтырылған. Шул уҡ легенданан алып, татар яҙыусыларынан Ғ. Шәрәфи «Нәнкә жан» тигән поэма яҙған (Аң. — № 191) һәм Ҡотой тарафынан *«Нәнкә жан»* тигән пьеса яҙылған.

Эпитафиянан күренгәнсә, «Нәнкә» йәки «Ханәкә» 841-се һижериҙә үлгән тиһә, ҡояш *биле* менән 1435 йылда үлгән була. Туҡтамыш хан үҙе 1405 йылда үлтерелгәнгә күрә, ҡыҙы үҙенән һуң 30 йыл һуң ҡалып, урта йәштәрендә йәки ҡартайып үлгән була. Шулай булғас, юғарылағы легенда тарихи факттар менән дөрөҫләнмәй. Ләкин Туҡтамыш хандың был исемендә бер ҡыҙы факт булып ҡала.

Инде «Ханәкә» тигән исем ул ваҡыттарҙа юғары синыф ҡыҙҙары араһында таралған булыуын башҡа миҫалдар менән дә күреп була. Мәҫәлән:

Ғосман бер хафиз ҡыҙ ине,
Ханәкә Солтан ата инем,
Сахниан кимәс аҙ инем,
Сабата тапмай барамын.

(Ҡар.: Һ. Атласов. — Ҡаҙаҡ тарихы.)

Былдарҙан башҡа, башҡорт араһында «Ҡырҡ егет» тигән бер күсерек тә йөрөй. Бының юғарыға мөнәсәбәте бармы — юҡмы, торғоҙолманы.

19 *Ҡырым нуғайҙарында*:

«Ҡабырғаңды сүкәрмен,
Ҡаныңды ергә түгәрмен,
Һыу урынына эсәрмен»,

— тиеләә Әбүбәкер Диваев материалдарында, «Тарча» иртәгесендә (иртәгендә түгелме икән. — *Ә. С.*):

«Һай-һай тазча, һай тазча,
Атаңа нәләт ҡыу тазча,
Башыңды ҡыуҙай кәсәрмен,
Ҡаныңды һыуҙай сәсәрмен», —

тиелә («Тартыу»: 5-се бит). Ошолай итеп, быңдай алым (приемдың) ҡәрҙәш халыҡтар араһында уртаҡ булыуы аңлашыла.

[20] Икенсе бер күсеректә яҙылыуынса, Иҙеүкәй Шаһ Тимер ханға (Сатмыр ханға, Аҡһаҡ Тимергә) барған сағында, юлда киң бер сахрәлә Кабардин исемле бер ҡалмаҡ ханына килеп сыға. Был хан Шаһ Тимерҙең ҡыҙы Фирдәүесте урлап ҡасып килә икән. Иҙеүкәй Фирдәүескә яҡынлашырға, нисек тә булһа, уны үҙенеке итергә теләй. Шул маҡсат менән хандың хеҙмәтенә аш бешереүсе булып керә. Фирдәүестең кәңәше менән Иҙеүкәй был хандың ғәскәрен үҙенә ҡаратып ала. Ханды үлтереп, Фирдәүесте үҙенә ала. (Ҡар.: Семеновтың юғарыла күрһәтелгән китабы — 435 б.)

Әбүбәкер Диваев материалдары буйынса, Иҙеүкәй юлда ен күрәҙәһе (Фасатин Алифҡа) килеп, уға кәңәшкә килә. Уның ҡатынына ғашиҡ булып, [ен күрәҙәсеһен] баҙға осороп үлтерәлә, ен ҡатынын үҙенә ҡатынлыҡҡа ала. Һуңынан был ҡатын өсөн Аҡһаҡ Тимер менән Иҙеүкәй араһында мажара тыуа. (Ҡар.: Иҙегә батыр // Шура. — 1917. — № 15—16.)

[21] *Тур тауы* — Туры сина (Турсина) — Фәләстин (Палестина. — *Ә. С.*) менән Мысыр (Египет) араһында Синай тауҙары. «Тәүрат»та, «Ҡөрьән»дә Муса бәйғәмбәрҙең тауҙан тороп, Алла менән һөйләшкәне хикәйә ҡылына. Шунан алып, был тау изгелекле булып, халыҡ легендаһына инә. (Ҡар.: Р. Нигмәти, Б. Бикбай һ. б. төҙөгән йыйылма текст. 27-се иҫкәрмә. — *Ә. С.*)

[22] Иҙеүкәйҙең төшө бәйән ителгән өҙөктә ҡош итенә ҡуныуҡунмау хаҡында — ләм-мим. Уның ҡарауы, оса торған ҡошҡа әүерелеүе әйтелгән. Шуға ла төштөң юралышында:

«Оса торған ҡош булһаң,
Күккә табан һин осһаң,
Фәрештә менән һөйләшеп,
Тур тауына һин менһәң», —

тигән һүҙҙәр булырға тейеш. Артабан иһә текст буйынса китеүе — урынлы (*Ә. С.*).

[23] Туҡтамыш хандың ҡайһы ҡыҙы һарайҙа ҡалыуы билдәле түгел. Ҡырым нуғайҙары дастанында был турала әйтелмәй. Сәгит Мирас материалдарында был ҡыҙ *Ҡыҙебәк* тип йөрөтөлә.

[24] Ҡырым дастандарында Иҙеүкәй менән Мораҙым араһын өҙөүсе кеше Янбай итеп күрһәтелә. Янбай ата менән ул араһын боҙмаҡ булып, ҡыҙға: «Ҡарыныңа кейеҙ бәйлә, Нуретдин [Мораҙым] килгәндә: «Был ни?» — тип һораһа: «Бабаңдан күргән гоманым», — тип әйтерһең», — ти. Мораҙым килеп ҡыҙҙы күргәс тә йөрәге алына. Атаһы ҡаршы сығып: «Хуш килдең, улым», — тигәнсе, Нуретдин [Мораҙым] ҡулындағы ҡамсыһы менән атаһының башына тарта. (Ҡар.: Яңы донъя. — 1924, № 21) (аныҡ түгел — *Ә. С.*)

[25] *Парыҫ* — Ҡар.: Р. Нигмәти, Б. Бикбай һ. б. төҙөгән йыйылма текст. 11-се иҫкәрмә.

[26] *Чаһар* — фарсыса дүрт тигән һүҙ. «Дүрт мәртәбә йондоҙло булып тыу» тигән теләккә тура килә. Йондоҙҙо (йәғни, йондоҙло. — *Ә. С.*) булыу — бәхетле, талигәле булыу мәғәнәһендә.

[27] «Ҡағыҙалыр был табын» һүҙе М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» ендә ҡағиҙәләләр был табын, йәғни был табындың ҡорҙоң үҙ тәртибе бар, тип бирелгән. (Өмөтбаев М. «Йәдкәр». Текстологик эштәрҙе башҡарыусы, төҙөүсе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсе Ғ. Ҡунафин; яуаплы мөхәрр. Ғ. Хөсәйенов. — Өфө, 1984. — 182 б.) тип әйләндерелгән (Справочная книга Уфим. губ. — 1883).

[28] *Кипп — Самур. Чернь. Саболь* — ҡараллыҡҡа миҫал килтергәндә, әле лә «кеше кеүек ҡара», тиҙәр. *Ф. К.* төйкәләр (Фазыл Туйкиндың. — *Ә. С.*) «Нардуған»ында был һүҙ яңылыш булараҡ *«ҡара кеше»*гә тип күсерелгән (бында һүҙ хеҙмәтсе йә ҡол хаҡында барғанға оҡшай. — *Ә. С.*).

[29] Билге(ле) төйөү (ҡаҙау, тигеү) — Ҡырым нуғайҙарында «тиндек» («тикрек»). «Мораҙым менән Буҡһын» тигән башҡорт ҡобайырында: «Билге төйҙөң, Мораҙым» (БХИ. 5-се том. — 208-се б.). Бында ла шулай булырға тейеш. Сағ.: «Шәүрә килен» тигән башҡорт халыҡ йырында:

«Билге лә генә сәнстем, ай, билгенгә,
Шәүрә килен, килдем дә, тигәнгә»,

тигән һүҙҙәр бар, йәғни һүҙ еғет исеменән осраныу осөн ориентир ҡуйыу тураһында алып барыла. Тимәк, эпоста Мораҙым яуабында ла билге хаҡында һүҙ бара (*Ә. С.*).

[30] *Тилеҙең* — «ебәреп ҡуя инек» мәғәнәһендә. Тилеү (*тилетеү.* — *Ә. С.*) — ҡолоно үлгән бейә. Икенсе ҡолондо имеҙеү. Был әйтемдәр бик мәшһүр булып, ҡырым күсерегендә лә бар. Һәм унда былай:

Ай бәш оя, бәш уба,
Бәлки, тикдең, Нуретдин.
Сән *тәлидең*, Нуретдин.
Ҡара ла ергә ҡан ҡойҙоң —
Һыуҙы ҡайҙан ейәрһең?
Ҡауҙанлы ергә ит (ут. — *Ә. С.*) бәрҙең —
Утты* ҡайҙан уттарсың?
Ҡара ласы[н] ҡороттоң —
Ҡошто ҡайҙан йыярсың?
Арғымаҡты ҡатырҙың —
Атты ҡайҙан менәрһең?

(Ҡар.: Яңы донъя. — 1924. — № 23.)

Сәғит Мирасов материалдарында былай:

Әҙәм етмәҫ ҡола яланға

Дошманбаш булыр, Мораҙым;
Ҡарға ҡуналмаҫ ҡара ағаҫҡа
Ҡаҙ ҡундырырһың, Мораҙым;
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың —
Атты ҡайҙан менәрһең?
Кәнизәктәр* энйеттең* —
Нуҡар* ҡайҙан ҡосарһың?
Күк ыласын ҡасырҙың,
Ҡошто ҡайҙан сөйәрһең?
Ҡара һыуға ҡан ҡойһаң,
Һыуҙы ҡайҙан ейәрһең?

[31]Алып батыр, бәһлеүән мәғәнәһендә. Боронғо уйғыр йырында:

Эрән алыбы оҡоштылар
Ҡыянгыр күзен баҡыштылар,
Ҡамуғ толомын туҡыштылар
Ҡылич ҡынға осон сигди.

(Ҡар.: М. Ҡашғари, «Диванлығәт терек»[1], мәлереп.) Йәғни «ирҙәр балданы бер-берен саҡырыштылар, ҡаңғыр күҙ менә ҡараштылар, бөтә ҡорал менән бәрелештеләр, ҡылыс ҡынға көскә-көскә генә һыйҙы», тигән мәғәнәлә.

[32] Был урында Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев материалдарында:

«Үҙе белеп үҙе киткән
Һейер һултан», —

тигән мисрағлар өҫтәлгән.

[33] *Гәуер* — урта йөҙҙәрҙә мосолман төрөктәр тарафынан сит диндәгеләргә бирелгән исем. Ғәрәпсә «кяфер»ҙән боҙолған был атама һүҙҙәр *төшлөк яҡ* (көньяҡ. — *Ә. С.*) төрөк телдәрендә һәм ҡаҙаҡтарҙа таралған булып, боронғораҡ башҡорт ҡобайырҙарында осрай, әммә һуңғараҡ халыҡ әҙәбиәтендә был һүҙҙәр урынына «кяфер» (*кафыр. — Ә. С.*) һүҙе йөрөй.

[34] *Иҙел — Волга, ти, Н. И.* Әммә был урында ул яңылыша. Халыҡ, «Ағиҙел», «Йүрүҙән» тип әйтәһе урынға, уларҙы Иҙел, Үҙән тип кенә атаусан. Бында ла Волга түгел, ә Ағиҙел күҙ уңында тотолған. Шулай булмаһа, Ҡәҙербирҙенең иленә ингән Мораҙым:

«Яйыҡ, Иҙел, Димдәрҙең,
Һаҡмар, Эйек, Әйҙәрҙең —
Атам барын мәҡан иткән ер», —

тимәҫ ине. Ни өсөн тигәндә, Ата йорто булған Уралының башҡа (вағыраҡ) йылғаларын телгә алғанда, уларҙың иң өлкәне

булған Ағиҙелде әйтмәй, Волганы күҙ уңында тотоп, Иҙел тип әйтеүе һис кенә лә мөмкин түгел (*Ә. С.*).

[35]*Төйәләҫ* — Йылыйыр кантонының (хәҙерге Баймаҡ районының. — *Ә. С.*) төньяғына табан бер йылға аға. Төр(ө)кмән ауылы янында (шул йылғаны хәҙер, ни өсөндөр, был яҡтарға аҙаҡ килгән рустарға эйәреп, *Худолас* тип йөрөтөүсәндәр. — *Ә. С.*).

[36]Хәҙерге Өфө тауҙары һәм Дим буйҙарында Нуғай хандарынан Төкләҫ һәм уның балалары йәшәгән. Бында *Баба Төкләҫ* йорто тип аталыуы шунан булһа кәрәк.

## «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының тағы бер йыйылма тексы хаҡында

Мөхәмәтша сәсән Буранғолов тарафынан төҙөлгән был текст ғилми архивта һаҡлана: ф. 3. оп. 12/220. — 232 б. Текст 1940 йылда, тәүҙә 26 апрелдән 23 майғаса «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә (№ 95—98, 100—101, 103—108, 110—116), шунан «Октябрь» (Өфө) журналында (№ 6, 7—8) баҫтырыла. Гәзиттә баҫтырылғанының — «Башҡорт халыҡ эпосы. Мөхәмәтша Буранғол тарафынан яҙып алынған варианттарҙың береһе» тигән, журналдағыһының *«Башҡорт халыҡ эпосы. Был вариант Дим һәм Туҡ, Соран буйҙарында йәшәүсе башҡорттарҙан, үҙҙәренең һөйләү теле буйынса, Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан яҙып алынған һәм шул телдә үҙгәртелмәй бирелә»* тигән иҫкәрмә менән бирелеүе беҙҙе: беренсенән, бынан Мөхәмәтша сәсән ҡулында «Иҙеүкәй менән Мораҙым»дың бер нисә варианты булыуы; икенсенән, беҙгә мәғлүм булғанының шул варианттарҙан төҙөлгән йыйылма текстан ғибәрәт икәне, унда Дим, Туҡ һәм Соран буйы башҡорттары һөйләштәренең фонетикаһына хас үҙенсәлектәр (әҙәби телдән айырмалы рәүештә, [һ] өнө урынына [ҫ], [л] урынына [ҙ], [т] өндәре ҡулланылыуы шуның менән аңлатылыуы) хаҡында иҫкәртә.

Мөхәмәтша Буранғолов «тарафынан яҙып алынған варианттарҙың береһе» булараҡ гәзиттә баҫылғанын оҙаҡ йылдар төрлө ҡаршылыҡтар менән алыша торғас (ә ул ҡаршылыҡтарға, нигеҙҙә, 1944—1945 йылдарҙа ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡабул иткән — «Татарстан партия ойошмаһында масса-сәйәси һәм идеологик эштәрҙең торошо һәм яҡшыртыу саралары», «Башҡортостан партия ойошмаларында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» тигән ҡарарға ярашлы «Иҙеүкәй менән Мораҙым» хандар, феодалдар эпосы тип нарыҡланыуы сәбәпсе булды), Нур Зарипов донъяға сығарҙы (Иҙеүкәй менән Мораҙым / Баҫырға әҙерләне Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәрр. Ә. И. Харисов, З. Ғ. Ураҡсин. — Өфө: Китап, 1994. — 47—230-сы б.; БХИ. 5-се том. Тарихи ҡобайырҙар /

Инеш мәҡ., аңлатмалар, һүҙл. авторы Нур Зарипов; Яуаплы мөхәрр. Әхнәф Харисов. — Өфө: Китап, 1994. — 39—170-се б.)

Ғилми архивта һаҡланған текст баҫылғанынан күп яҡтан айырыла. Сюжет ағышы, уның төп компоненттары йәһәтенән, дөйөм алғанда, баҫтырылғаны менән архивтағы вариант тап килһә лә, шул сюжеттың ғәмәлләшеүендә айырым айырмалыҡтар күҙәтелә. Тош-тош урында текстар һүҙмә-һүҙ тура килеп бармай. Юғарыла телгә алынған китаптарҙағы һымаҡ, архив варианты, мәҫәлән, «Алтын Урҙа башында» тигән һүҙбәйләнештән башлана. Әммә дүртәр юллыҡ ике строфанан һуң уҡ текста айырмалыҡ башлана. БХИ-ның 5-се томында IV бүлектәге хәлдәр ҡулъяҙманың икенсе бүлегендә тасуирлана, локин тулыһынса түгел: текстың 62—63-сө биттәрҙәге һәм 64-се биттә «хандың бар өс балаһы» тигәнгә тиклемге өлөшө ҡулъяҙмала теркәлмәгән. Әммә шул һүҙҙәр менән башланған строфанан һуң китаптағыһында ошондай юлдар килә:

Ынйы сыҡһа яланға,
Сәләхи уны һаҡлаған.
Ханға кейәү булырға
Ынйыһына ымһынып,
Һис тә ҡалмай йөрөгән.

Ҡулъяҙмала уларҙы түбәндәге юлдар алмаштыра:

Балаларын хан, бикә
Йәндәй итеп күргәндәр;
Алар сыҡҫа яланға,
Батырлары һағалап,
Бергә алып йөрөгәннәр...

Ҡулъяҙмала китаптағы Ынйы урынына — хандың бөтә балалары, Сәләхи урынына, ғөмүмән, хан батырҙары күҙ уңында тотола. Бының ише һәм бүтән төрлө лексик, фразеологик айырмалыҡ ҡулъяҙмала күп кенә урын ала: Һабрау / Ҫабрай; Ут ҡалдырып, көл иткән / ут ҫалдырған батыр ҫин; Ыласын ҡунмаҫ урҙаға / Ыласын ҡунмаҫ ҡарағас, бөтә / барлыҡ һ. б.

Китаптарҙа бирелгән вариантты XVII бүлегенән башлап ике текста ла һүҙмә-һүҙ тап килештәр өҫтөнләк итә.

Ошондай иҫкәрмәләргә лайыҡ булыуына ҡарамаҫтан, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының башҡорт фольклоры ерлегендә йәшәү рәүеше, формаһының ғына түгел, йөкмәткеһенең дә төрләнеүгә «әүәҫлек» кимәле хаҡында уҡыусыла тулыраҡ фекер уятыу ниәтенән уны М. Буранғолов теркәгән Дим буйы варианты менән дә таныштырыу урынлы булыр тигән уйға килende. Әммә юғарыла әйтелгән иҫкәрмәләрҙән сығып. һүҙ барған ҡулъяҙманың ошо томды төҙөүсе редакцияһындағы вариантының тәүге туғыҙ бүлеген тәҡдим итеү менән генә сикләнергә тура килде.

# ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ

## I. Ҡотло менән Иҫәнбайҙың Туҡтамышҡа баш бирмәгәне; Туҡтамыштың батырҙарын йыйҙыртҡаны; Иҙеүкәйҙең Уралда ҡалғаны

Алтын Урҙа башында
Туҡтамыш тигән хан булған,
Ҡул аҫтында күп илде
Ҡолдай итеп биләгән.
Яҫаҡ алған малынан,
Ҡолдар алған халҡынан.
Үҙ тигәнсә эш итеп,
Бер Хоҙайҙан йәшәгән.

Уралдағы етенән
Биш ырыуы бы ханға
Бик буйҫоноп бөтмәгән:
Яҫаҡ бирмәй серешкән;
Ҡоллар бирмәй тартышҡан;
Хандың яуы килгәндә,
Ҡаяларға сырышып,
Ҡаршы тороп һуғышып,
Күп саҡ ҡаршы кән иткән.
Хан ебәргән ҙур фарман:
Ҡол алмаҫҡа ҫүҙ ҡуйған, —
Ике ҫунарсы, бер йырсы,
Ете батыр биреүҙе
Бы ырыуға шарт иткән.

Ҡотло белән Иҫәнбай —
Бар ырыуҙа атаҡлы,
Иң данлыҡлы ҫунарсы
Булып икәү танылған.
Яуҙа үлеп атаҫы,
Аҫҡа үлеп инәҫе,
[Етем ҡалғас Иҫәнбай] —
Ҡотлобайҙың инәҫе
Бишектән үк үҙе алып,
Иҫәнбайҙы үҫтергән.
Ҡотло белән Иҫәнбай,
Игеҙ балалай булып,
Бергә тигеҙ үҫкәндәр;

Йәштән алар ҫунарға
Икәү бергә йөргәннәр.
Ҡайҫы ҡая битендә
Ниндәй йәнлек барлығын

Ус эсендәй белгәннәр.
Шуңа алар Уралда,
Бөтә ырыу эсендә
Данлы исем алғаннар.

Ҡыпсаҡ, Ҡатай — Уралда,
Табын — Яман тауында,
Юрматы — Иҙел буйында,
[Ҡырҡты мән Ҡыраҡала
Һәүәнәк таштың һыртында
Йәйләп ятҡан Тамъянда]
Данлы батырлар буған;
Туҡтамышҡа буйҫонмай,
Илдән яҫаҡ йыйҙыртмай,
Ил яҡлаусылар буған.

Ҫабрай тигән дан йырсы:
Моңо килҫә ҡолаҡҡа,
Ауырыу ятҫа түшәктә,
Ҫуңғы ҫулыш алғанда,
Тамаҡтары кипкәндә,
Аның йырын ишетҫә,
Ҫалҡын ҫыуҙы эскәндәй,
Йәнгә рәхәтен тапҡан.

Туҡтамыш хан быларҙы
Үҙенә данлап ҫораған,
Барына ла ҫарайҙа
Данлы урын бирергә
Ил алдында һүҙ ҡуйған.
Бары батыр ырыуын,
Ат саптырып, йыйҙырған,
«Яҫаҡ-ҫалымдан илем
Ҡотолор», — тип уйлаған.
Бары ырыу халыҡлары
Батырҙары уйларын
Кире ҡаҡмай хуп күргән.

Шул сағында йәш егет —
Ҡотло улы Иҙеүкәй
Быңа риза булмаған.
Бары батыр, ҫунарсы,
Ҫабрай тигән дан йырсы
Ҡатын, бала-сағаҫын
Бергә алып китҫә лә,
Иҙеүкәй тик яңғыҙы
Китмәй ҡалған Уралда.

Иҙеүкәй — батыр йөрәкле,
Үҙе көслө беләкле,
Үҙ çүҙендә тороҡло
Егет булғас, былар ҙа
Аңа ҡаршы кимәгән.

Былар барған çарайға,
Хан да, çүҙендә тороп,
Урын биргән быларға:
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Ҡатайҙы,
Тамъян, Табын батырҙы
Батыр иткән һарайҙа;
Ҡотло белән Иçәнде,
Ҡош сөйөүгә çунарҙа
Ҡошсо иткән çарайҙа.

Çабрайҙы үҙ илендә
Йырсы итеп билдәләп,
Менәренә ат биргән;
Йөрөрөнә яй ҡуйған;
Ҙур туй буçа, килеүҙе
Çабрайға шарт ҡылған.

* * *

Ике-өс йыл торғаннар,
Илдә данны булғаннар.
Çарайҙағы бар эшкә
Бара-тора күнгәннәр.

### II. Туҡтамыш хандың Энйебикә, Кинйәбикә тигән ҡыҙҙарына батырҙарының, ҡор башы Сәләхиҙең дуçы Ҡарабайҙың ымһыныл йөрөгәне; Урал буйы халкының хан яһаҡсыларына яһаҡ бирмәй зыулашҡаны

Хандың буған балаçы:
Ҡадирбирҙе — олоçо,
Энйебикә —уртаçы,
Кинйәбикә — кинйәçе.
Балаларын хан, бикә,
Йәндәй итеп, күргәннәр;
Алар сыҡçа яланға,
Батырлары, çағалап,
Бергә алып йөрөгәннәр.
Ҡыҙҙар булған бик иркә:
Уйын-көлкө кис, иртә,
Алтын, ебәк кейгәне;
Бәйләнмәгән ҡолондай,

Бер урынға бишп баҫып,
Батырларҙы елкетеп,
Уйын-көлкө белгәне.

Ҡыҙлар көн ҡанап үҫкән;
Батырҙар күҙ алдырған;
Бисәләре көнләшеп,
Хан ҡыҙлары турында
Төрлө ҫүҙҙәр ҫөйләнеп,
Ире белән әсәлешеп,
Был эштәрҙең барыһы ла
Хан ҡолағына төшкән.

Хан саҡыртып быларҙы,
Төрлө олпатлыҡ белән
Барҫыны ымһытҡан*
Аҙаҡ сиктә быларҙан
Бисәләрен айыртҡан,
Хан ҡыҙына алданған;
Аны алырға мөҫөрәгән
Бигерәк Ҡыпсаҡ батыр,
Ҡарабай белән икәүләп,
Хан ҡыҙына күңелен
Алдырыусан буғаннар.
Ҡарабай үҙе маҫайған,
Сәләх булғас ҡор башы,
Үҙе уның юлдашы;
Ҡара диңгеҙ буйында
Тыуып үҫкән илендә,
Бергә серҙәш Сәләхе,
Туҡтамыштың ҫарайында,
Ҡор баш булғас, бигерәк тә,
Ҡарабай аңа таяныш,
Үҙен алдын ҫанаған.

Быны хан ҫиҙҫә лә,
Ҡыҙын тағы быларға
Бирмәҫ уйы буҫа ла,
Хан йөҙәнә ҫытмаған;

Бы уйҙарын белгәс тә,
Ҡулға алыу иң килгәс,
Батырҙарҙың барын да
Үҙ иленә ебәреп,
Яҫаҡ-маҙар йыйҙыртҡан.

Урал буйы халҡы ла,
Батыр, йырсы бирҫә лә,
Оҙаҡ тынып тормаған;

Үҙ батырын үҙенә,
Урал халҡы эсенә,
Ясаҡ йыя ебәргәс,
Халыҡ түләгән аҙ-маҙын
Йәйәү-яланы булһа ла,
Ханға иткәннәр үҙләре
Йәйен, ҡышын, көҙ, яҙын.
Халыҡ оҙаҡҡа түҙмәгән;
Ясаҡ-маҙар түләргә
Килер еге булмағас:
«Тағы урман, тау буҫын,
Уҡ-һаҙағым ҡулымда,
Башым иҫән-һау буҫын!» —
Тип тағы ла һөйләшкән;
Ясаҡ бирмәй тартышҡан;
Иҙеүкәй батыр бы эштең
Уртаһында эш иткән.

## III. Иҙеүкәй Тора бейгә[1] килгәне, уны Туҡтамышҡа яу асырға күндергәне

Иҙеүкәй йәшрен ат менгән
Бер төн ташлап Уралды,
Иҙелдә ағып түбәнгә
Тора бейгә[1] юл тотҡан.

Тора бей ҙә данлы ир,
Туғыҙ йәштә әүлиә,
Утыҙ йәштә ил гиҙгән,
Ғәзиз баба улының,
Иң кинйәсе Төкләстән
Тыуып ҡалған дана ир,
Төкләс бабанан тыуып,
Төйәләс, Һаҡмар йәйләүҙә,
Данын сәскән ир булып.
Ахыр сиктә атаһын
Үҙ йәйләүенә ҡуйып,
Үҙе Иҙел буйлаған.
Тора бейҙең йәйләүе
Нәгөш, Иҙел тамағы,

[1]Тора бей — XIV—XV быуаттарҙа Ҡыпсаҡ, Бөрйән, Юрматы, Үҫәргән, Тамъян, Мең һ. б. ҡәбиләләрҙе ҡул аҫтында тотҡан башҡорт-нуғай ханы. Мәҡамы Стәрлетамаҡ эргәһендәге Торатау булған. Тора һүҙе Тәңре, раббы (божество) тигәнгә тиң. Боронғолар изгеләштергән, табынған «кешә һынлы» ташты тораташ тиҙәр.

Çәләүек, Нөгөш араһы,
Симдән тағы Димгәсә —
Аның буған төбәге.

Иҙеүкәй барғас, Тораға
Тел төбөнә аңлатҡас,
Туҡтамышҡа ҡаршы
Йөрөгәнен болаға,
Тора бей ҙә керешкән
Иҙеүкәйҙән çорарға.

*Тора бей:*

— Ағастың ҡыуғынындай,
Бейлек, байлыҡ ирләргә
Атанан мираç булып,
Быуын-быуын гел генә
Ҡалып килә электән.
Тоҡомо бейҙән бумаған
Атаçынан ҡалған һуң,
Илдең аңа ҡарата
Буйçонорға ант белән,
Мираç — бейлек ҡалмаçа,
Даны бумаç ир өсөн —
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Теле кәрәк ил өсөн;
Осҡан ҡошто һауала
Ауыҙы менән тоторҙай,
Алғыр булһын ил өсөн;
Тау-таш ауçа өçтөнә,
Ат башындай йөрәкле,
Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр итәр беләкле,
Батыр кәрәк ил өсөн.
Ундай тыуçа инәнән,
Мираç булып атанан
Бей тоҡомо килмәһә,
Анты белән иле лә
Быңа башын эймәгән.

Батыр егет бейлекте
Үҙе табыр яу белән.
Яйыҡ, Эйек çыулаған,
Бары Урал буйлаған,
Тимер, ҡорос, булатты
Ҡамыр итер бар микән?
Ил ҡайғыçын уртаҡлап,
Төн йоҡламай уйланып,

Аттан төшмәй төн буйы
Тибенгеҫен тирләтеп,
Арҡа-ялан утынан*
Ут утлатҡан бар микән?
Йөрәге ташып, асыуға,
Сая алғыр бүреләй,
Аҙна йөрөп аш эсмәй,
Бер уҡталып ашаһа,
Ялғыҙ үҙе бер ҡуйҙы
Ашап бөтөр данлы ир
Бы төбәктә бар микән?
Батырмын, тип, ат менгән
Сығар юлын тапмаһа,
Яйыҡ менән Иҙелдең
Билен быуып киҫәрлек,
Илдә батыр бар микән?
Ҡош тырнағын тейҙермәҫ
Күк ыласын типмәҫлек,
Йылғыр ҡоштай төбәктә
Ер ҡуйынына инеүҙән
Һис бауырын һыҙлатмаҫ —
Берәй батыр бар микән?
Быуын-быуын буйына
Хандан ханға йөрөгән,
Оҙон-оҙон юлларҙың
Осона сығып етерлек,
Уралда ат уйнатып,
Атын һынап менәрлек,
Илдә батыр бар микән?

*Иҙеүкәй:*

— Һаҙҙа үҫкән ағастың
Ҫуңғы үҫкән ҡыуғынын*
Тал ҡаплаһа үҫмәүен,
Урман ҡырҡмай, бей-буға,
Йәнлек тотмай, тун кейгән,
Барыр юлын белмәгән,
Ат башын үҙ ҡулы бelән
Бер сағын да тотмаған,
Үҙе утырған иленән,
Үҙенә башҡа тағы ла
Атаҫынан мираҫҡа
Бейлек алған мырҙаның
Ауыҙының эсендә,
Ил алдында һөйләгән,
Ил теленән айырым,
Бер ҫалмалай ит буҫа, —

Тимер, ҡорос, булатты
Ҡулында ҡамыр итәме?

Борон-борон замандан
Ил өҫтөндә ике юл.
Аны буйлар ике ир:
Икеҫендә ике уй,
Йөрөй-йөрөй ил буйлап,
Оҙон-оҙон ҫалған юл.
Уралда үҫкән ҡурайҙа
Икеһе лә уҙ моңон,
Моңлап-моңлап, елгән юл.
Икеһе лә ярышып,
Илдең көткән туйына
Бүләк тотоп ҡулына,
Өйөр-өйөр йылҡыҫын,
Көтөү-көтөү ҡуйҙарын
Ҡалын* итеп йыйынға,
Малын ҡыуған оҙон юл.
Береһе анын мираҫҡа
Атаһынан бей алған,
«Майҡы бейҙән[1] бүләк», — тип,
Алтын табаҡ яһатып,
Илдең йыйған туйында
Үҙенә башҡа аш ейгән;
Иле атҡа менгәндә,
Ҡырын ятҡан түшәктә,
Иле сығып һунарға
Оҫкан ҡоштоң күсенә
Ыласын, (шоңҡар) сөйгәндә,
«Мин — бей! — тигән, бей-мырҙа —
Майҡы бейҙән бирелгән;
Ҡошом минең — ҡарағош», —
Тиеп яңғыҙ бер үҙе
Ҡарағошон сөйгәндә,
Ҡайҫыҫы күсте тарҡатыр?

Урал ярып аҡҡан ҫыу:
Иҙел, Яйыҡ, Нөгөштән
Аҡҫа, көслә ағырҙай,
Ташҫа, тау-таш ярырҙай,
Йөҙә белмәҫ ирләргә
Атылып аҡҡан йылғалай,
Көлгә күмгән ҫүнмәҫкә,
Яныр утын көҫәгән*,

---

[1] Майҡы бей — 9-сы тексттың 15-се иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.

Төтөн еҫе сыҡмаған,
Бисәң ҡумгән торонбаштай,
Ил йылғаһын быуарға,
Торонбашҡа яғырға,
Кемдәр елек һайланыр?

Аттан төшмәй төн буйы,
Тибенгеһен тирләтеп,
Арҡа-ялан[1] утынан*
Ат утлатыр елгән ир,
Сая, алғыр бүреләй
Бер уҡталып ил менән,
Яңғыҙ түгел, көтеү ҡуй
Бер табаҡтан ашаған,
Ҡарағошҡа ҡарышы
Ыласын сөйгән ир генә —
Ил керәнен* йырыр ул!
Йылғаҫына ҡушыр ул!
Ил йылғаһы ташҡанда,
Һыу тирмәнен ҡорор у.
Туйҙан кигән ҡунаҡты,
Ҡаҙан аҫып, ҫыйлар у;
Атанан мираҫ бей булған,
Бай мырҙалар эсенән
Торонбаштың ҡуҙына
Утын ҫайлап йыяр у.
Күмәк телде бер итеп,
Илдең аһын ҫөйләҫә,
Ауыҙы белән ҡош тотар,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай
Ир булып у дан алыр.
Атанан мираҫ бей алып,
Быуын-быуын кигәндең,
Йәй ҡояшын — сыуаҡҡа,
Көнөн* — эңергә борар у.
«Ҡуян» йылын «Лыу»[2] белән
Алыштырыр йыл башын,
Яңы йылдың ҡояшы
«Әбей сыуағы»* сыҡҡандай,
«Эт сыуағы»* киткәндәй,
Урал битен йылытыр;
Атанан мираҫ бей алған
Ирҙең барын ҡыҙҙырып,
Түш йәйҙереп йөрөтмәй,

[1]Арҡа-ялан — башҡа варианттарҙа: «Арҡауылдың» (арҡа юлдың).
[2]Ҡуян, Лыу — 12 йылдан торған месәлдең ике йылы.

Ҡая ташлар эсенә —
Ярғанаттай сырғытыр.
Яңы йылдың йыл башы,
Ата торған таңының
Күтәрелгән Сулпаны
Оранын* биргән әтәстәй,
Атын менеп кигән ир —
Мин булырмын Иҙеүкәй!

*Тора бей:*

— Иҙеүкәй тигән атыңды
Ишетә беләм ҡолаҡтан*,
Ат тирләтеп елгәнсең;
Миңә төбәп килгәнсең;
Ырыуыңдан бер илсе,
Ил һүҙене әйтергә
Мәрәй итеп* һарайым,
Тоҫҡап туры килгәнсең.
Әйт һүҙеңде, тыңлайым,
Хәҙер ҡулдан кимәһә,
Кәңәш-төңәш итешеп,
Әйтер һүҙем уйлайым!

*Иҙеүкәй:*

— Һинән ырыуым, һаҡларға,
Яуға сығып йоҡларға,
Һаҙаҡ тотар бер ирең
Һорап һиңә кимәнем!
Илем яуын асҡанда,
Дошманға көс алалмай,
Берәй яры буҫҡанда,
Асыҡ йөҙлө илеңдә
Йылы ҡуйынын асҡандың,
Ҡыҙыл ҡанға күшеккән
Батырымды ҡосҡанһың,
Ҡаны кипкән батырға
Йылы ашын биргәндең,
Бейлек белән йөҙөнә
Яман ҡара япмаҫһың;
Ужар сәсеп барына
Йылы ҡуйынын ҡымтытып,
Ямғыр теләү уй белән
Ҡаҙандарын һыуға атып[1],

[1] Ҡаҙандарын һыуға атып — ҡоролоҡ булғанда, ярыҡ ҡаҙанды, һулмәкте һыуға һалалар: йәнәһе, ямғыр яуа.

Яуым баҫҫа, тупҫаңа,
Бейҙән кәртә ҡормаҫһың!

Кәңәш-төңәш иткән ҫуң,
Тора бей ҙә күнгән, ти;
Туҡтамышҡа яу асҫа,
Ике яҡ та ҡаҡшаҫа,
Был ырыуҙың барыҫын
Үҙемә ҡол итәрмен;
Теләгемә етәрмен, —
Тиеп уйлап ҡалған, ти.

## IV. Иҙеүкәйҙең яман менән яҡшыны үҙе күреп сыҡҡаны, уйҙа серҙәш булырлыҡ ирҙәр тапҡаны, атаһында һөнәргә өйрәнгәне, Туҡтамышҡа барғаны; ҡол ҡыҙҙан Иҙеүкәйҙең улы тыуғаны

Иҙеүкәй анан киткән ҫуң,
Ырыуҙан киткән батырҙар,
Атаҫы белән Ҫабрайҙы —
Барын барып күргән ҫуң;
Ҫарайҙағы серләрҙе,
Тотоп яҡкан уйҙарҙы,
Ишетеп, күреп белгән ҫуң;
Батырларҙың күбеҫе
Хан ҡушыуын эшләүсе,
Илде йөрөп талаусы —
Икәнлеген ҫиҙгән ҫуң;
Үҙе уйын берәүгә
Әйтмәй тороп ҡалған, ти,
Ил аралап йөрөгән, ти.
Яман, яҡшының барын
Үҙ күҙенән күргән, ти.
Үҙенә юлдаш булырлыҡ,
Ашы юҡта аш биреп,
Туны юҡҡа тун биреп,
Ат кәрәкҫә, ат биреп,
Уйҙа серҙәш булырлыҡ,
Ирләрҙе лә тапҡан, ти.

Ил аралап күп гиҙгәс,
Бары ил серен белгәс,
Атаҫына барған, ти.
Анда тора башлаған;
Ат өйрәтеп менеүҙә,
Ҫунарҙа ҡош сөйөүҙә,
Ҫүҙгә сәсән булыуҙа,

Ханға егет оҡшаған,
Хан саҡыртып үҙенә
Былай тиеп ҫүҙ асҡан.

*Туҡтамыш:*

— Эй, егетем, килгәнҫең,
Илең ташлап елгәнҫең,
Ҫарайҙа батыр булырҫың,
Күк толпарҙы менәрҫең.
Типкеҫенә бәйләнгән
Бауы тора ҫум алтын,
[Ҡойошҡаны, йүгәне,
Йәнә күмелдереге,
Көмөш ҡашлы эйәре —
Ни хаҡ, тиһәң, мең алтын].
Аҡ шоңҡарҙы алырҫың,
[Ауға алып барырҫың],
Эйәреңдең ҡашына
Ултыртып апарырҫың,
Йәйен килеп түлләгән
Ҡош күсенә сөйәрҫең!

Көмөш ҡәмәр быуарҫың;
Ҡуян ботло ҡаратҡа
Аҡыҡ ҡашлы, ҡумлы эйәр
Ҫалып тағы менәрҫең;
Илгә йөрөп әйләнеп,
Ил өҫтөнә яу киҫә,
Яуға ҡаршы сығарҫың!

Хандың ҫүҙен Иҙеүкәй
Ҡабул итеп, ҫарайҙа
Бүтән батырлар менән
Бер табында аш ашап,
Кигән ҡунаҡлар менән
Төрлө яҡтан серләшеп,
Китмәй, тора башлаған.

Бер-ике йыл торған у,
Хан ҫарайы эсендә
Ни барыны белгән у.
Ханда ҡолдар күп буған,
Араһында уларҙың
Һылыу ҡыҙлар ҙа буған.
Был ҡыҙларҙың берәүҫе
Иҙеүкәй менән араҫы
Яҡынлашып танышып,

Бере ала, бере килә,
Шулай йөрөй башлаған.
Бы ҡыҙ былай ҡалмаған,

Буйында булып, оялып:
«Зинасы, тип, әйтерләр,
Ҙур гонаһы эш, бы, тип,
Үҙем тотоп аҫырҙар», —
Тип, ҡыҙ ҡаҫҡан ҫарайҙан.

Ҡыҙ күп ҡасып йөрөгән,
Инә буған балаға,
Иҙеүкәй белән икәүләп,
Балаҫыны йәшергән.
[Хан бер ни ҙә һиҙмәгән] —
Иҙеүкәйгә теймәгән,
Хан шулай ҙа ҡуймаған,
Инәһе менән баланы
[Юллаған да юллаған],
Ҡыҙҙы, табып тотҡас та,
Үлтерергә уйлаған.
Иҙеүкәй быны белгәс тә,
Баланы нисек ҡотҡарыу
Тураҫында уйлашып,
Атаҫы белән ҫөйләшеп,
Иҫәнбайға килгән, ти.
Иҫәнбайҙың шу йәштә
Игеҙ балаҫы буған,
Былар килгән төн генә
Уның берәүһе үлгән.
Бисәҫе лә Иҫәнбай —
Шунан бүтән берәү ҙә
Бала үлемен белмәгән.

Иҙеүкәйҙең балаҫын
Иҫәнбайға ҡалдырып,
Үлек баланы алып,
Бала эҙләгән кешегә,
[«Ҡаҫҡын һарай ҡыҙынан
Тыуған ошо бала, тип
Асҡа үлгән бала» — тип],
Ебәргәндәр тотторол.

## V. Иҙеүкәне көнләүсе батырҙар һәм Сәләхиҙең уны ситләтергә маташҡаны; Ханбикәнең ялған төш һөйләп, уны үлтерергә ниәтләгәне; Иҫәнбай ярҙамында

### Иҙеүкәйҙең ҡасып ҡотолғаны

Хан ҡыҙыны ҫөйөүсе,
Иҙеүкәйҙән көнләүсе
Ҡара, Ҡыпсаҡ батырҙар,
Үҙен ҙурға һанаған,
Сәләх төҫлө ҡор баштар,
Иҙеүкәйҙе ситләтеп,
Бисә-сәсә өшкөтөп,
«Хан ҡыҙының берәүҫен,
Иҙеүкәй алыр үс итеп»,
Тигән төрлө ошаҡты
Ханбикәгә сискәндәр.
Ханбикә бик шашынған
Ҡапыл ханға әйтергә,
Иҙеүкәй бик ҫунарсы,
Ат уйнатып майҙанда,
Көрәшендә дан алғас,
Иҙеүкәйҙе ошаҡлап,
Хандан шелтә алыуҙан
Ханбикә лә айбанған*,
Тура әйтергә иренә.

Хан утырған аулаҡта,
Битен йыуып арыҡта,
Уйын ситләп әйтергә,
Яман бер төш күрҙем, тип,
Хандан төштө юратып,
Иҙеүкәйҙән биҙҙереп,
Ҫарайынан ҡыуҙырып,
Үсен алыу уй менән
Ханға килгән ханбикә.

*Ханбикә:*

— Эй, оло хан, оло хан,
Бөгәсә бер төш күрҙем;
У төшөмдө байҡаҫаң,
Ҫиңә хәтәр эш күрҙем,
Ҡара йылан буйындай
Ҡабырғала ҡан күрҙем;
Яуға сапҡан батырҙың
Тиргә сумған атындай,
Тибенгендә тир күрҙем!
Утҡа өткән ҡойҡалай,

Ҡарайып ҡалған суңҡалы,
Çөйәкçеҙ ҡалған башыңды;
Ҡарындыҡтай ҡурышып,
Йыйырылған битеңде;
Ат күҙендәй ҙур күҙең
Тонйороп бөтөп йомолған...
Шулай яман төш күрҙем.

*Туҡтамыш:*

— Бөгәсә һин күргән төш
Ни булыр у, ханбикә?
Батырларым эсендә
Тарҡаулыҡ юҡ, ханбикә.

*Ханбикә:*

— Батыр, батыр, тигәндең
Хан çарайы эсендә
Араçы тарҡау бумаçа,
Ханы белән батырҙың
Араçы тарҡау бумаçын.
Ханы белән утырып,
Бер çарайҙа аш эскән,
Ханы белән батырҙың
Йөрәге тарҡау бумаçын!
Çарай ҡыҙын çөйгән ир —
Аны ханы юйған ир;
Ханы аны тартçа ла,
Ҡонон эҙләп йөрөмәçен!
Бикә итәргә йөрөгәнен
Ханы аçып, тол иткәс,
Йөрәгендәй балаçын
Турап, ханы зар иткәс,
Шулар ҡонон алам тип,
Энйе менән Кинйәнең
Береһен урлап китмәçен.
Шу Иҙеүҙән ҡурҡамын;
Башың юйып, хан булып,
Тәхетең алып ҡуймаçын.
Ожмах çымаҡ көнөңдө
Йәһәннәмдәй ҡалдырып,
Башыңды хур ҡылмаçын!

Тигән çүҙен бөткәндә,
Кинйә килеп иркәләп,
Йәш балалай, çөйләнеп,
[Көлә-көлә йыраҡтан
Быларҙы албырғатҡан.

Йәшергән бына шулай
Сер белгәне икәнен].
Хан менән ханбикәнең,
Табын йыйып, эсереп,
Иҙеүкәйҙе үтереп,
Ҡотолорға, тиешеп,
Уйлашҡанын быларҙың
Тыңлап торған икән ул,
[Барын белгән икән ул].

Байтаҡ ваҡытлар үткәс,
Иҙеүкәйҙе ебәреп,
Илдән яҫаҡ йыйҙырып,
Илдә яуҙар астырып,
Яуҙа уны үтертеп,
Ҡотолорға уйлаған.
Ил таларға ат менеп,
Иҙеүкәй яуға бармағас,
Энйе менән Иҙеүкәйҙең
Уйы барып сыҡмағас,
Яҡын йөрөүен күргәс:
«Ханбикәнең төшөнөң
Башы ошо булыр», — тип,
Яҡын-серҙәш ярандың,
Ҫайлап барын саҡырған.
Бары бергә уйлашып,
Бер туй яһап, Иҙеүҙең
Туҫтағына бал ҡойоп,
Ағыу һалып эсереп,
Үлтертергә буғаннар.

Ҫарайҙа туй еткәндәй,
Хан, ханбикә — барыҫы
Иҙеүкәйҙең ҡайтҡанын
Дүрт күҙ менән көткәндәр,
Энйе менән икәүләп,
Иҙеүкәй ҡайтҡан ҫунарҙан;
Иҙеүкәй менән йөрөгәндә,
Ҫунар уңышлы булғас,
Энйе маҡтап Иҙеүкәйҙе,
Кинйәҫенә ҫөйләгән.
Апаһы ҫүҙен тыңлағас,
Уйнап, көлөп утырған
Кинйә ҡапыл туҡтаған;
Бер ҫүҙ әйтмәй баш баҫып,
Апаҫыны ҡосаҡлап,
Ошо ҫүҙҙәрен ҫөйләп,
Апаҫына илаған.

*Кинйәбикә:*

— Шаңҡып та шаңҡып моңлаған,
Аҡҡошлар ҙа китә, көҙ етсә;
Ҡыйғалап та осҡан, ай, ҡыйғыр ҡош
Йығылып та төшә, уҡ тейсә.

Батыр егетләр ҙә үлә икән,
Ата-инәкәй унан көнләшсә;
Ҡылыстар ҙа кисмәс батырларҙы
Сыусыннар ҙа үтерә, күп эссә.

Сөйгәнең дә батыр Иҙеүкәйгә,
Инәкәйем йырлап, бал бирсә,
Йәнең сөйгәс, апай, барып әйт, син,
Иҙеүкәйгә — үлем, уны эссә...

Тигән сүҙҙе ишеткәс,
Энйе торған урындан,
Төпсөп сорап Кинйәнән,
Йыйынға сығып йөгөргән.

Энйе анда барғансы,
Сала-сарпы ишеткән
Иҙеүкәйгә Исәнбай,
Кирәгене яғалап,
Йырын йырлап өлгөргән:

*Исәнбай:*

— Табаны ялпаҡ буҙ толпар
Эйәрләп бәйләп ҡуйылған;
Ҡарағоштоң батырҙар
Ыласынға сәйәргә
Бауын сисеп ҡуйғаннар.
Сунар юҡта яланда
Ҡарағошҡа сөйәргә
Ул ыласын сарайҙа,
Тиеп төбәп ҡуйғаннар.

Исәнбай йырын ишеткәс,
Иҙеүкәй бик шикләнгән;
Ҡапыл сығып йыйындан
Буҙ толпарға атланған.
Ҡыуа сыға батырлар,
Менәм генә тигәндә —
[Ауып төшкән атынан],
Таралғы кисек эйәрҙән.
[Теҙгендәрен тартһалар] —
Ауыҙлыҡһыҙ йүгәнден,

[Аттары тыңламаған,
Тартыуға ыжламаған].
Ни эшләргә белмәйсе:
— Иҙеүкәй ҡайҙан белгән? — тип,
Ҡыуа сығар батырлар
Таралғы, ауыҙлыҡһыҙ
Аптырауға ҡалғаннар.

## VI. Туҡтамыш хандың Иҙеүкәйҙе тоторға батырҙарына өндәшкәне, Ҫабрай сәсән һүҙен тыңлағаны

«Иҙеүкәй хәҙер һиҫкәнде,
Ни теләһә ҡылыр у,
Ҫарайҙағы бар серҙе
Ситкә барып түгәр у.
Өҫкә ҙур яу китерер,
Бары илде бөлдөрөр,
Берен ҡуймай батырҙың,
Барын ҡырып бөтөрөр», —
Тиеп ҙур хан уйлаған.

Шу сағында Энйеҫе
Тағы инеп илаған,
Иҙеүкәй ҡасыуының
Бар серене ҫораған.
Хан мыңа һис әйтмәгән,
Алдап-йолдап йыуатып,
Тирмәҫенә оҙатҡан.

[Ҡыҙын шулай оҙатҡас],
Батырларын туплаған.
«Иҙеүкәй йыраҡ китмәгән,
Урал ашып буҫмаған,
Ҡайтып оран ҫалмаған,
Бары серҙе сисмәгән», —
Тиеп, уйлап, ҙур хан да
Юл-ярағын күрергә,
Иҙеүкәйҙе тотарға —
Бар батырын димләгән.

*Туҡтамыш хандың Ҡыпсаҡ батырға әйткәне:*

— Урал, Яйыҡ батырҙың
Ҡотон йәйгән тоҡомдан
Батыр булып ир тыуған;
Бер ырыуға баш булып,
Ус төбөндә ил тотоп,
Даның киткән, Ҡыпсаҡ бей!

*Тамъян батырға әйткәне:*

— Синдә барып яу асып,
Яман тауҙан юл асып,
Илемә ырыуың төйнәгән,
Сөнгө осонда дошманды
Күбәләктәй уйнатҡан,
Тамъян батыр, һиңә әйтәм!

*Сәләхигә әйткәне:*

— Ҡара диңгеҙ буйында
Данын сәскән ҡор башым,
Илен бәйләп ҡулыма
Тотоп биргән юлбашсым,
Иле телен алмаған,
Бейенә буй бирмәгән,
Үҙ ырайы* булмаһа —
Бирүгә юл ҡуймаған,
Сәләх батыр, һиңә әйтәм!

*Ҡарабай батырға әйткәне:*

— Ҡырым иле эсендә,
Ҡараңғыла, юл тапҡан;
Бейе ятҡан һарайҙың
Ниргәһенә ут яҡҡан,
Ҡарабай батыр, һиңә әйтәм!

*Ҡатай батырға әйткәне:*

— Ҡая битенә юл һалып,
Яу килгәндә, тайшанмай,
Ат уйнатып юл сапҡан,
Ун мең кешем бер төндә
Һуйып буйын бирмәгән,
Ҡатай батыр, һиңә әйтәм!

*Юрматы батырға әйткәне:*

— Дошмандан һис тайшанмай,
Илең йыйып яланға,
Иҙел, Димдең типһәнен,
Үҙенә торлаҡ ҡылырға
Ат уйнатҡан туғайҙа,
Һаҙаҡ ҡайрап тағын да,
Ырыу тотҡан Юрматы,
Һиңә әйтәм тағы ла!

*Табын батырға әйткәне:*

— Янығ батмандан* ауыр,
Дүрт ҡарағас үтәнән
Ярып, уғың юғалған,
Ҡая эсендә ҡуш айыу[ҙы]
Ҡыбырҙатмай ҡаҙаған,
Батырҙарҙың эсендә
Иң ҡарты ла, ҫоллоҫо,
Табын батыр, ҫиңә әйтәм!

*Янбай батырға әйткәне:*

— Аму буйлап Хәзәргә
Ҡанҫыҙ илем йәйҙергән,
Буйҫындырып ҫарайға
Ҡул аҫтыма йыйҙырған,
Ҡыҙыл телең бал төҫлө
Булып илгә таралған,
Янбай тиеп дан алған,
Ҫиңә тағы шуны әйтәм:
Ҫаҙаҡ теймәй Иҙеүкәй
Батырларҙан ҡотолҫа,
Сөсө телең арбаҫын,
Ҡул аяғын бәйләҫен,
Дар ағаста аҫылған
Иҙеүкәйҙең кәүҙәҫен
Илем күреп ҫил булҫын!

Батырлар, ҡабат ат менеп:
«Иҙеүкәйҙең артынан
Ҡыуабыҙ!» — тип ҫүҙ биреп,
Берәүҫе лә китәргә
Баҙнат итә алмаған.
Саҡырылған йыйынға
Килә алмай ҫуңлаған;
Илдә йырсы, ҙур ҫынсы,
Күпте күреп, ишетеп,
Йөҙҙән артыҡ йәшәгән,
Тирә-яҡтың бар хәлен
Күҙ алдында күреүсе
Ҫабрай ҡарт килгәнен,
Ханға хәбәр биргәннәр,
Аяҡҡа баҫып барыҫы,
Ҫабрайҙың ингәнен
Ҙурлап ҡаршы алғаннар.

*Туҡтамыш:*

— Ҫабрай килә, тигәс тә,
Ҡарасҡынды күргәс тә,

Оҙон ҡолаҡ, ҫиҙгер күҙ,
Ауыҙы асыҡ, сапаҡ* ҫүҙ,
Ҫабрай килде, тигәс тә,
[Уйым, һүҙем бүлдерҙем].
Елгән аттан тир сығар,
Сәсән ирҙең өнөнән
Ҡыл ярырҙай ҫүҙ сығар;
Аҡыллы ир башынан
Донъя ҡорор уй сығар.

Йөҙҙән артыҡ йәшәгән,
Йәне, һөйәге ҡаҡшаған,
Аҙау теше ҡойолоп,
Берәм-берәм төшкән ҫуң;

Хыҙыр[1] йыйып, бер епкә
Теҙеп-теҙеп бәйләгән,
Һәр бер эште көйләүсе,
Ҫүҙҙе уйлап ҫөйләүсе,
Ил өлкәне, Ҫабрай ҡарт,
Кәңәш ҫиңә туҡтаны.

Алтын Урҙа[2] ҫарайы
Аптырауға әйләнде,
Табағымдан аш ейгән
Иҙеүкәй батыр тигәне
Ҡара йыланға әйләнде.
Тел өҫтөнә тел ҡуймай,
Кәңәшеңде әйтә бир!

*Ҫабрай:*

— Эй, ҡартыңмын, ҡартыңмын,
Күпте күргән ҡартыңмын,
Урал буйы даулы йорт
Аптырауға ҡалғанын,
Батырлары ил ҫаҡлап,
Ҡыҙыл ҡанға батҡанын,
Урал буйлап ханларҙың
Ат саптырып юртҡанын —
Аны ла күргән ҡартыңмын.

---

[1] Хыҙыр — 9-сы текстың 12-се иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.

[2] Алтын Урҙа — XIII быуаттың 40-сы йылдарында хан ойошторған монгол-татар дәүләте. Көнбайыш Себер, Хорезм, Волга Болғарстаны, Төньяҡ Кавказ, Ҡырым, Дәшт-и-Ҡыпсаҡ ерҙәрендә татар-монголдың Батый хан ойошторған дәүләте. Баш ҡалаһы Сарай Бату булған.

Аҡҡоломбәт ҡустыһы,
Ҡараҡоломбәт мырҙаһы,
Бала ҫуйып, хан булып,
Ун ике тотом уҡ тотҡан
Бабсаҡ бейҙе[3] үлтереп, —
Ырыуын юйғанын,
Аны ла күргән ҡартыңмын.

Ҡош сөйәлмәй ҡалтырап,
Ат менәлмәй аптырап,
Йәштә ҡошто сөймәгән,
Атта уйнап үҫмәгән,
Юлдаш булыр бурҙайын
Сит кешегә тилегән*,
Ҫылыуы булған Энйенең
Күңелен ситтән алдырған,
Кинйәҫе булған Кинйәнең
Атаҫы биргән балдағын —
Аны ла ситкә кейҙергән,
Тәхетеңә мираҫың,
Йәш булһа ла, баланды,
Ҡадирбирҙе мырҙаны, —
Аны ла күргән ҡартыңмын.

Йөҙҙән йәшем уҙғанда,
Ауыҙымда теш бөткәндә,
Ҡоро ҫөлдәрем йөрөгәндә,
Үҙ дәүерем үткәндә,
Ҫеҙҙең дәүер аҙаҡҡа
Тағы килеп еткәндә,
Быуын-быуын хан буған
Күп ханларҙы күргәнгә,
Атаҫынан ҡот ейеп,
Инәҫенән ҫөт имгән,
Бер Алланың бүләген,
Ошо йәшемә еткәндә,
Ҫинән киткән Иҙеүкәйҙәй,
Ғөмөрөмдә бер ирҙе
Күрмәй үҫкән ҡартыңмын.

Артынан килеп ҡараҫам,
Ике яурын араҫы —
Батыр йоҡлар саялай*;
Алдынан килеп ҡараҫам,

---

[1] Аҡҡоломбәт, Ҡараҡоломбәт, Бабсаҡ бей — бында Мең ырыуында тасуирланган бөтөнләй икенсе ыҙғышта һәм «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосында һүрәтләнгән ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан персонаждар.

Ҡарсыға ҡабаҡ, талғыр күҙ —
Йөрәгеңә ингәндәй.
Батырлығы йөҙөндә,
Ҡырҡыулығы ҫүҙендә,
Уйлап эшләр эшен дә,
Эйәрле ат эсендә,
Иҙеүкәй тигән батыр ир
Шу китеүҙән китәр у!

Оҙон-оҙон оло юл,
Быуат-быуат батырлар,
Шуны буйлап, сапҡан юл,
Шуны буйлап китәр у.

Сатмырханга[1] етәр у.
Сатмыр аңа ҡул бирер,
Теләгенә юл бирер,
Ас арыҫландай үкереп,
Ҡыйҡыу-ҫөрән ҫалыр у!
Ете батырҙы ниргә итеп,
Даннар ҡорған урҙаңны,
Иркәләтеп үҫтергән
Энйе беләң Кинйәңде —
Берен ҡуймай алыр у.
Көмөш йоҙаҡ ҫарайҙы,
Алтын тояҡ тәхетте,
Уйнап көлгән бәхетте —
Барын тар-мар итәр у!

Эй, оло хан, оло хан,
Ошо киткән китеүҙән,
Илеңде килеп баҫыр у;
Ҫарайыңа бей булып,
Хур ҡыҙындай күрекле,
Ҫандугастай ирекле,
Ҫиңә наҙлы Энйене,
Ҫиңә иркә Кинйәне —
Икеһен дә алыр у,
Түреңә түшәк ҫалыр у.
Ат өҫтөнә мендереп,
Алҫыу йөҙөн ҫулдырып,
Уралына итәр у;
Ҡаяла буҫҡан ырыуҙың
Ҡонон ҫинән алыр у;

---

1 Сатмырхан — Аҡһаҡ Тимер. Ҡар.: 10-сы текст, 14-се иҫкәрмә.

Ҡыҙларыңды алыр у,
Үҙ ырыуын йәйер у,
Һинең ҡорған һарайҙың
Барын утын итәр у;
Атаһының ҡонон да
Ҡуймай, һинән алыр у,
Табаныңды телер у,
Турап, ҡылын һалыр у;
Туҡһан бейле урҙаға
Килеп, ҡанат йәйер ул;
Өйөр-өйөр эркелеп,
Илдән йыйған малыңды —
Барын ҡыуып китәр у;
Шунда ла ары киткән юҡ,
Иҙелдән ары үткән юҡ,
Ете батыр тиҙ буһын,
Атҡа менеп елдерһен;
Теләген биреп күндерһә,
Иҙеүкәй шуңа буй бирһә,
Тыныс ғөмөр һөрөрһөң,
Аҙағын үҙең белерһең.

*Туҡтамыш:*

— Ете батыр тигәнем —
Етегеҙ ҙә бей ине;
Үҙегеҙ ырыу тотҡанда,
Ил тотарлыҡ бей ине;
Дошман белән дуҫтарҙы
Айырырлыҡ күҙ ине —
Барығыҙ ҙа ир ине.
Аралағы дошманды
Алар ҙа күрмәй һыйҙырған,
Һарайҙағы ҡыҙларым
Йөҙөк ҡашы Энйеләй,
Күҙ алмамдың ҡаралай,
Теләктәре юлымда,
Йөрәктәре ҡулымда,
Һис тайшанмай бер ине —
Алар ҙа күңел алдырған;
Барыһы ла һарайҙа
Мине ялғыҙ ҡалдырған.
Иҙеүкәйҙе эҙләүсе,
Уны тота барыусы,
Һарайҙа урын алыр у;
Мамыҡ түшәк йәйер у;
Күҙ ҡарамдай ҡыҙымдың
Һайлап берен алыр у.

Иҙеүкәйҙең артынан,
Янбай тигән батырҙан
Бүтән батыр китмәгән.
Янбай киткәс, Сәләх тә
Үҙ уйыны уйлаған.
Туҡтамыштың болала
Аптыраған сағында,
Туҡтамыштың янына
Сәләх ингән былай тип.

*Сәләх:*

— Өс йөҙ кеше эйәртеп,
Энйе менән икәүләп,
Иҙеүкәйҙең артынан
Барайыҡ беҙ, оло хан!
Йорттан сығып киткәнсе,
Иҙеүкәйгә еткәнсе,
Үҙең менән минән тыш,
Һис берәү ҙә белмәҫен.
Энйене күрһә Иҙеүкәй,
Ҫүҙен ҡушһа, Энйекәй
Килер беҙҙең яҡынға:
Тотоп ҡулын бәйләрбеҙ,
Ҡушҫаң, башын киҫәрбеҙ,
Тере, тиҫәң, терeләй
Алып ҡайтып бирербеҙ.

Ханы быны хуп күргән,
Энйене лә саҡырған;
[Саҡырылғас, оҙамай
Ҡыҙ атаҫына кергән].

*Туҡтамыш:*

— Сәләх менән яланға,
Сәләх барған ыңғайға,
Барып йөрөп ҡайтығыҙ!
Иҙеү күренҫә, әйтегеҙ,
Бергә алып ҡайтығыҙ!
Үҙен ҙур бей итәрмен,
Теләҫә, кейәү итәрмен;
Теләҫә, тәхетем биреп,
Үҙен ҙур хан итәрмен!

*Энйекәй:*

— Атаҡайым, Иҙеүкәй
Күк бурҙайын эйәртеп,
Буҙ толпарға атланып,

Ҡайтыр юлға китмәне;
Уны эҙләргә сыҡҫам да,
Кеше эйәртеп сыҡмамын, —
Тип, ҫүҙен кире ҡаҡҡас,
Ҡыҙы бармай ҡарышҡас,
Хан көсләшеп тормаған.

Иҙеүкәйҙе эҙләргә
Янбай яңғыҙы киткән.
Яйыҡты аша сыҡҡан,
Ямантауҙың итәге
Иҙел буйына еткән.

## VII. Иҙеүкәй менән Янбайҙың әйтешкәне:

Янбай барып еткәндә,
Оран ҫалып Уралға,
Йыйып бары ырыуҙы,
[Иҙеүкәй һүҙ асҡан, ти].

*Иҙеүкәй:*

— Бынан киткән биш батыр —
Аманат ҡалды Урҙала,
Атам, инәм аҫылды.
Иҫәнбайҙы белмәнем,
Нисек итеп ҡотолдо.

Атҡа менмәй илебеҙ,
Ҡанға батмай еребеҙ,
Ханға яҫаҡ түләүҙән
Арный алмаҫ көнөбөҙ, —
Тиеп ҫүҙен бөткәндә,
Янбай тыңлап торған да,
Халыҡтың бары ат менеп,
Яуға китергә буған.
Иҙеүкәй бер үҙе ҡалып,
Халыҡ таралып ҫил буғас,
Иҙеүкәйгә былай тип,
Янбай ҫүҙен башлаған.

*Янбай:*

— Иҙеүкәй ҡустым, улай тип,
Илгә яман уй ҫалма!
Хандан ҫиңә бер ҫүҙ юҡ!
Илде бушҡа дулатма!
Әшкәмәгә* алданып,
Юҡтан үҙең ҡурҡытма!

Эй, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Әйҙә, Урҙаға ҡайтҫана,
Ханға буйың бирҫәнә,
Иле данны Урҙаға,
Ҡайтып, сәләм бирҫәнә!

Ҡош оялар ҡаяңда
Яман уйың сәсмәсе!
Ҡанҫыраған Уралдың
Аҙаҡ ҡанын ҡоймасы!
Ҡыныға тыҡҡан бысағың
Илдең ҡабат ҫурмасы!
Ағас табаҡҡа ҫалып,
Ашың ҫоҫоп йөрөгәнсе,
Ап-аҡ көмөш табаҡтан
Хан ҫарҡынтыҫын ейҫәңсе!

Ҡыптыр тунға уралып,
Уралыңда йөрөгәнсе,
Алтын төймә тағылған,
Ҡама менән ҡыйылған,
Төймә бауы таҫмалы.
Ҡара ҫыуҫар тун кейеп,
Хан кейәүе булһаңсы!
Уралыңда ҡыҙ күҙләп,
Зарығып, алйып йөрөмәсе!
Ҫине көтөп зарыҡҡан,
Ҡарап күҙе талыҡҡан,
Ҫағынып йөҙө ҫарғайған
Әнйе белән Кинйәнең —
Береҫен ҫайлап ҡосҫана!

Уралыңда ҫунарҙа
Кейек ҡарсыға сөйгәнсе,
Ҫарайҙағы шоңҡарҙы
Күл әйләнә сөйҫәнә!

Уралыңдың буйында,
Ҡая ташлар өҫтөндә,
Арыҡ-турыҡ ат белән
Алпы-ҫалпы ҫәлпәңләп,
Салғыйларың ялбырап,
Яу асырға уйланып,
Ағас ҫаплы ҫөңгөнө
Ҡоралым тип йөрөгәнсе, —
Алтын арба эшләтеп,
Өҫтөңә янут тун* кейеп,
Ҡама белән тышлатып,

Ҡолон, тайҙа сағында,
Бәйләнмәйсе, ҫөт имгән;
Ҡонан*, дүнән* — тыу йөрөп,
Толпар тоҡомо буғанға,
Ҫәүрегендә* өйөрҙә,
Ҫайҙаҡ* итеп, дан белән
Алтыҫын да ат иткән;
Етеҫен дә өйрәтеп,
Йыйындарҙа йөгөрткән;
Ҡырас ялын матурлап,
Ҫылыу ҡыҙҙай тараған;
Маңлайында — ҡуш урай,
Толпарлыҡҡа билдә итеп,
Бер Хоҙайҙан бирелгән;
Маңлайында сәсәһе*
Шәлкем гөлдәй үрелгән;
Ҡалҡыу мунда, ҡарсыға түш,
Тилбер атлап йөрөүсән;
Ҡубаға ҡабырға*, тар бөйөр,
Йөгрөклөгө ҫыналған;
Туҙбаш йылан үҙәкле,
Башкүнәктәй танаулы,
Ҡамыш ҡолаҡ, ҫоҫа теш,
Атҡолаҡтай иренне,
Һарымҫаҡтай аҙаулы,
Ата бөркөт ҡабаҡлы,
Өкө сәсә, ҡуян бот,
Баҡыр күҙле, суртан ҫырт,
Асы яңаҡ, ырас йөн,
Ҡубаға тояҡ, ҡуш йөрәк —
Бары яҡтан ҫыналған;
Күп йыйында саптырып,
Йөгөрөклөктә дан алған
Тарлан буҙҙы менҫәнә!

Күмелдерек, ҡойошҡан,
Эйәр ҡашын, йүгәнен
Алтын белән биҙәтеп,
Данны Алтын урҙаның
Бары яуына баш булып,
Ҫөйәк ҫаплы ҫөнгөҫөн
Ҡулыңа алып торҫана!

Өйөр-өйөр йылҡыҫын
Йәйләүендә бәйләтеп,
Энйе белән Кинйәне
Елеләргә* эйәртеп,
Матау* ҫалған бейәгә

Ҡороҡ ҫалып ҫауҙырып,
Ҡымыҙ эсеп ятҫана!

Васыятҡа яҙҙырып,
Үҙе үлгәс, ҫин ҡалып,
Ҡыҙы менән икәүләп,
Шыбырлашып ҫөйләшеп,
Шарҡылдашып көлөшөп,
Киң ҫарайҙа ягалашып,
Ширбәт эсеп, серләшеп,
Ханбикәле хан булып,
Дәүрән* ғөмөр итҫәнә!
Үпкәң булҫа ҙур ханға,
Үҙ ауыҙыңдан әйтҫәнә!

*Иҙеукәй:*

— Урал буйы ҡая тау —
Батыр ҙа итеп үҫтергән;
Урал да буйы ҡанны юл
Урҙаға итеп еткергән;
Урал буйы күҙ йәше
Ханға мине үсле иткән;
Урал буйы — даулы ил,
Ҡанға батҡан шаулы ил,
Ҡаны менән һуғарып,
Миңә ҫаҙаҡ үҫтергән —
Ҫөйәк ҫаплы ҫөңгөнө
Ҡулыма мин тотмамын;
Урҙаға ҡайтып, баш эйеп,
Тарлан буҙын менмәмен;
Ханға кейәү булам тип,
Ҡыҙын ҫорап тормамын!

Урал иле бар булҫа;
Батырлары ҫау булҫа;
Уралым данлап үҫтергән,
Суҡмар ҡулымда булҫа;
Туҡтамышҡа эйелеп,
Мәңге сәләм бирмәмен!

Алла үҙе бирмәҫә,
Хан булам тип Урҙаға,
Илем ҫатып тормамын!
Ир булып атҡа менгән ҫуң,
Илем йыйып алған ҫуң,
Алпан-толпан булҫа ла,
Бер юл табып китәрмен!

Ураҙаға иткән* оло юл —
Сатмырханға итәр* у!
Хоҙа уңған юл бирсә,
Сатмырхан миңә ҡул бирсә,
Сатмырхандан көс алып,
Урал илемде туплап,
Башыма торға* кейеп,
Ҡорман* тағып билемә,
Барына күсәм* булыр,
Урҙа өстөнә барырмын;
Ҡалғып* торған иленде,
Шауҡына* салып барына,
Күмәгәйенән* матҡытып*,
Урман ҡыр(ы)ҡҡан балтаға
Сабы ярҙам биргәндәй,
Туҡтамыштың үҙ башын,
Үҙ иленән ҡыйҙырып,
Кеҙел* ханың ҡантарып*,
Ҡулат белән ҡырантнап*,
Туҡтамышҡа көйөк бәйләп,
Яуға сыҡса дау белән,
Ҡамайыл* ерен аямай
Ҡанны талҡан итәрмен!

Кәпрәйгән Сәләхен,
Илен сатса, Ҡыпсаҡты,
Аңа эйәрсә бүтәннәр —
Ас суртандай ҡарпырмын!

Уралымдан талатып,
Аяҡтарын тубырап,
Ҡыуып алған малдарын —
Барын улъя итәрмен!

Атасы башын юҡ итәр,
Инәсе ауыҙын кәмжәйтеп,
Энйе белән Кинйәне,
Етем ҡыҙ, тип сөйәрмен;
Түренә түшәк салырмын;
Тигәнемә* етәрмен!

Туҡтамыштың сарайын,
Аса асыл баласын* —
Барын күкшин* итәрмен!

Ошо үсте алмасам,
Тигәнемә етмәсәм,

Әйткәнемде ҡылмаһам,
Иҙеүкәй атым ҡороһон!

Мин-мин, тирмен, мин, тирмен,
Мин-мин тигән ирҙермен!
Асыуым уртлап, ат менеп,
Тауға оялар шоңҡармын;
Һуға ҡаршы асымын;
Ширбәттәйгә — сөсөмөн;
Байтирәктәй* тирәкмен;
Балта сапһа, айырылмаҫ,
Ҡайғырыуға һынмаҫтай,
Имәнгә үҫкән ботаҡмын!

Мин-мин тигән ирҙермен,
Дуҫтым йөрәгем ҡаплаған
Ялҡын утын һүндерермен,
Дошманымдың күләндә
Күмелеп ятҡан ҡуҙ утын
Елдәй өрөп яндырырмын!
Ат өҫтөндә уйнай тип,
Кәпәс кейгән ир у, тип,
Асылын һорамай, аш бирмәм,
Атаһын һорамай, дан бирмәм!

*Янбай:*

— Ай, Иҙеүкәй, Иҙеүкәй,
Бы уйыңдан ҡайтһана!
Ҡамсы теймәҫ муйыныңа
Ҡан һырғаһын төйнәмә!
Мал һуйып туйларҙай
Туйға үҙеңде һуйҙырма!

Ямғыр яуып, Уралың
Гөл атам тип торғанда,
Уралыңда ҡан ҡойоп,
Гөл-баҡсаңды һүндермә!

*Иҙеүкәй:*

— Кит, Янбай, кит, Янбай,
Яман өнөң быуармын;
Һөйләмә — телең киҫәрмен;
Асма күҙең — тишәрмен;
Тубарлатып башыңды,
Муйының бауҙай өҙәрмен!
Харамдан ташҡан ҡаныңды
Көрөндәй* итеп ҡоярмын;
Утауыңды* ауҙарып,

Буҫаған утың ҡылармын;
Сағарағыңды* ҫындырып,
Үҙеңде ҡурҙаҡ иткәндә,
Угыңды* шөшлә ҡылырмын!

Тигән ҫүҙҙе ишеткәс,
Янбай ҫүҙен асмағас,
Айҫыҙ ҡараңғы төндә
Урҙаға ҡарап ыҡлаған.
Иҙеүкәй Урал буйында
Ханда яҫаҡ йыйғандың —
Барын илдән ҡыуалаған.
Ханға яҫаҡ бирмәҫкә,
Ханға буй ҙа бирмәҫкә —
Бөтә ырыуҙы туплаған;
Уралдағы ырыуҙы
Яуға таярландырған.
Үҙе ярҙам һорарға,
Туҡтамыштан эйәргән,
Күк бурҙайын эйәртеп,
Сытмырханға юл тотҡан.

## VIII. Иҙеүкәйҙең Ҡалмыҡ ханында хеҙмәт иткәне, уны еңеп, Сатмырхандың ҡыҙы Фирдәүесте ҡотҡарғаны, уны кәләш иткәне, Туҡтамыштың иленә яу сапҡаны

Оҙон юлларҙы буйлап,
Сатмырханға барғанда,
Уйҫыу ерҙә бер ҡыҙҙың
Йоҡлап ятҡан егеттең,
Битенән себенен ҡыуып,
Еләҫләтеп утырған —
Ергә барып сыҡҡан у.
Иҙеүкәй, күргәс тә ҡыҙҙы,
Төҫө-башына ҡарап,
Йырлап-йырлап ҫөйләнеп,
Ҫылыулығы теҙелгән
Сатмырхандың ҡыҙы, тип,
Үҙ эсенән уйлаған.
Ҡыҙ егетте уятҡан,
Иҙеүкәй белән бы егет
Иҫән-ҫаулыҡ ҫорашып,
Торған саҡта тағы ла
Ҫунарсылай кейенгән
Талай егет йыйылған.

[Ҡыҙ алдында ятҡаны]
Ҡалмыҡ иле эсендә

Кабардин тигән хан икән;
Фирдәүес тигән сылыуҙы,
Ярты ил бирен сорап,
Ҡыҙ атаһы бирмәгәс,
Бер ай барып аңдыған;
Сатмырхандың иләндә,
Күңел аса сыҡҡанда,
Фирдәүестең юлында
Яуы белән тап булып,
Урлап алып киткәндә,
Яуҙан ҡайтҡан батырҙай
Ялға ятҡан сағы икән.

Иҙеүкәйҙең аты ла,
Эйәртелгән эте лә,
Сунарсы тип таныҡҡас,
Хан сораша башлаған;
Иҙеүкәй ҙә һүҙ асып,
Бер һөнәрен йәшермәй,
Барын теҙеп әйтһә лә,
Төп исемен әйтмәгән.
Ат уйнатҡан, ҡош сөйгән,
Күлдән осороп, ҡош атҡан,
Билбау тотҡан, көрәшкән —
Барында ла ал булып,
Ханды хайран ҡалдырғас,
Хан үҙенә саҡырған.
Бер аҙ тороп эш күргәс,
Ханға Иҙеүкәй оҡшағас,
Хан да Иҙеүҙе ҙурлап,
Сарайына баш ҡылған,
Кабардин һәр эшендә
Туҡтамышҡа таянған;
Ике ҙур хан бер булғас,
Сатмырхан да ҡыҙ юллап,
Шуңа күрә кимәгән.

Иҙеүкәй ҙә тик ятмай,
Кабардиндың асыуын
Туҡтамышҡа ыҡлаған.
Сапаҡ телле Иҙеүкәй,
Сәсән һүҙле Иҙеүкәй,
Кабардиндың бар яуын,
Күҙ терәгән бар илен, —
Барын үҙенә ҡаратып.
Сарайында тарҡаулыҡ
Оҙаҡламай тыуҙырған;
Арала яу ҡуҙғалған,

Өс көн, өс төн ҫуғышҡан,
Аҙаҡ сиктә Иҙеүкәй
Өҫтөн булып дан алып,
Хан ҫарайын баҫып,
Ханның үҙен үлтергән;
Үҙенә серҙәш ҡор башын
Ҡалмыҡ илгә хан иткән.
Сатмырханның ҡыҙыны
Үҙе менән бергә алып,
Атаҫына тапшырған.

Ҡыҙы ҡайтҡас, Сатмырхан
Илен йыйып, туй яҫап,
Иҙеүкәйҙе данлаған;
Ҡыҙын биреп тағы ла —
Бар эшкә лә баш итеп,
Аны вәзир яҫаған.

[Сатмырхандың илендә]
Аҙмы-күпме торған ҫуң,
Үҙен танытып дан сәскәс;
Туҡтамышҡа ханының
Дошманлығыны белгәс;
«Туҡтамыштың Уралға
Яҫаҡсылары барып,
Ҡан-яу асып илендә,
Яҫаҡ йыя, ил талай», —
Тигән хәбәр ишеткәс;
Сатмырханға ҡарата,
Уйын ҫөйләй башлаған.

*Иҙеүкәй:*

— Ата-инәнән ханлыҡты
Мираҫ итеп алманың!
Юлбаҫар ҙа буғанһың;
Үс алырға йөрөгәнҫең;
Сыңғыҙ тоҡомо хандарҙа
Хеҙмәттә лә булғанҫың,
Утыҙ йәшкә еткәнсе
Рәхәт тормош күрмәйсә,
Ханға хеҙмәт иткәндә,
Уң аяҡҫыҙ ҡалғанҫың;
Утыҙ дүрткә еткәндә
Күп ҫынауҙар күргән ҫуң,
Күп яуҙарҙа буған ҫуң,
Данны ҙур хан буғанҫың;
Сыңғыҙ ханның тоҡомон

Үҙ илеңдән ҡыуғанһың.
Бына мин дә, тап һиндәй,
Ауырлыҡта үҫтем мин;
Атам, инәм, һөйгәнем,
Ике күҙем ҡараһы
Баламды ла юғалттым;
Барыһынан баһалы —
Даны киткән Уралым
Туҡтамыштан талаттым!
Урманда һаҙаҡ юнғанда,
Атым тотоп менгәндә,
Илем илап ҡалғанда,
Һиңә төбәп сыҡтым мин.

Һиңә төбәп килгәндә,
Кабардинға яу асып,
«Һинең ҡыҙың алайым,
Үҙеңә кейәү булайым,
Тәхетенә менәйем,
Илеңә хужа булайым», —
Тигән уйҙа килмәнем!
Атыма менгән сағымда,
Илем илап ҡалғанда,
Йәш туҡырамаҫ күҙенә —
Ат урамал булайым;
Батырларын ҡол иткән,
Малын талап ҡыу иткән,
Яуыз хандан илемде,
Ҡотҡарырға ант иттем!
Уралымда илем бар,
Атҡа менәр ирем бар,
Ҡушымтаға шуларға
Көсөң һорар уйым бар!

Тигән уйҙы ишеткәс,
Сатмырхан да шатланған,
Яуға көндө билдәләп,
Бар яранын йыйҙырған.
Шу йыйында Иҙеүкәй
Төш күргәнен һөйҙәгән.

*Иҙеүкәй:*

— Бөгәсә бер төш күрҙем
Алтын эйәр, аҡбуҙ ат
Ялынан тотоп атландым,
Күктә остом ҡош булып,
Фәрештә белән һөйләшеп,
Түшен түшемә ҡуйып,

Тур тауына[1] мендем мин,
У ни булыр ярандар?

*Ярандар:*

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Аҡбуҙ атҡа һин менһәң,
Мораҙыңа етәрһең.
Фириштә менән һөйләшһәң
Тур тауына һин менһәң,
Туҡтамыш тәхетенә менәрһең,
Аның ҡыҙын ҡосарһың, —
Тиеп төштө юрағас,
Бары шунда шатланған.

Иҙеүкәй [батыр] яу белән
Туҡтамышҡа юл тотҡан;
Уралға ат саптырып,
Барын яуға саҡыртҡан.
Ара ҡунып, ай йөрөп,
Уралдан яулар килеп,
Туҡтамыштың иленең
Сигенә барып еткән.

## IX. Янбай кәңәше менән Туҡтамыштың Мораҙымды яу башы иткәне, Иҙеүкәйгә ҡаршы оҙатҡаны, Иһәнбай ярҙамында ата – улын, улы атаһын танығаны

Сатмырхандың яу белән
Үҙ иленә килгәнен,
Туҡтамыш та һиҙенеп
Бары батырын йыйған;
Сатмырхандың көсөнөң
Үҙ көсөнән күплеген,
Урал яғы тағы ла
Үҙенә асыу тотҡанын —
Барын йыйып һөйләгән,
Батыр булып сыҡҡанға
Һайлап ҡыҙын биреүҙе,
Баш вәзире ҡылыуҙы
Барыһына аңлатҡан.
[Иһәнбай ҙа бик иһле,
Буйы байтирәк төһлө,
Майҙан тотһа, майҙанда,
Барынан да иң көслө;
Ҡылыс тотһа, ҡылыссан,

[1] Тур тауы — 9-сы текстың 27-се иҫкәрмәһен ҡарағыҙ.

Унға яңғыҙ тороусан,
Киҫтән тотһа, бер һелтәп,
Унды бергә ороусан;
Һөңгө тотһа, һонолоп,
Дошман ҡаса боролоп,
Ул яу менән үткәндә,
Бары ҡала ҡырылып.
Аты, буғай, Мораҙым —
Минең әҙер ҡоралым!
Яу башы итһен уны,
Хандан шуны һорайым», —
Тиеп Янбай уйлаған,
Уйын уйҙа туйлаған,
Уйын ханға еткергән,
Уйҙап ҡына ҡуймаған].

*Янбай:*

— Эй оло хан, оло хан,
Ҫүҙем әйтәм тыңлаҫаң,
Нәҫелҫеҙ ул тимәҫәң,
Еңеп ҡайтҫа яуында,
Ҡыҙым алыр тимәҫәң.
Ҡошсо иҫән ҡолоңдан
Дана тыуған бер бала
Аҫау тота ҡороҡһоҙ,
Батыр белән көрәштә
Көрәше ҡалмай үлекҫеҙ,
Тимер белән тубылғы —
Бөгөү өсөн барыбер;
Арҡан белән тегәр еп
Өҙөү өсөн, барыбер,
Батман белән бармаҡсы
Күтәрергә бары бер,
Йөрәге шундай ҡуш йөрәк,
Йоҡо белән үлемең,
Анын өсөн барыбер.
Шуны саҡырып ат бирҫәң,
Барыр яуға ҡор итҫәң,
Илең яуҙан ҫаҡлар у;
Сатмырхандың яуыны
Ҡуйға килгән бүреләй,
Берен ҡуймаҫ, быуыр у —
Тигән ҫүҙҙе ишеткәс,
Бары шулай ҫөйҙәгәс,
Туҡтамыш хан ҡарыуҫыҙ
Мораҙымды саҡырған.
Яуға барыу шарттарын
Мораҙымға аңлатҡан.

Диңгеҙ буйы иленән
Сәләхиҙе ҡор башы,
Бүтән батырҙар белән
Мораҙымды мең башы
Итеп яуға оҙатҡан.

Сатмырхандың яу башы
Иҙеүкәй тип бераү ҙә
Күпкә саҡлы белмәгән.
Өс-дүрт көнләп яу булып,
Ҡанлы яулар булған çуң;
Туҡтамыштың яу башы
Батырларының бары
Иҙеүкәйҙе белгән çуң;
Ҡыпсаҡ батырҙар бере
Иҙеүкәйгә ҡар(ы)шы
Ҡылыс тотоп ҡулына,
Çыуçағандай ҡанына
[Ҡаршы тора алмаған].

Тарлан буҙға атланып,
Торҡа кейеп башына,
Ҡалҡан тотоп ҡулына,
Иҙеүкәйгә ҡарышы
Мораҙым сыҡҡан бер үҙе.
Ҡылыс уйнап сатылдап,
Ҡалҡандан ут йылтырап,
Яуҙың ҡыҙыу сағында,
Иçәнбай ҙа әлçерәп,
Иҙеүкәйгә: «Улың, — тип, —
[Мораҙымға, — атаң, — тип], —
Ҡан, барымта эҙләргә
Арағыҙҙа дау юҡ», — тип,
Ике араға ташланған.

Эштең барын аңлашып,
Икәү-ара çөйләшеп,
Ҡылыстарын ташлаған,
Туҡтамыштың яуҙары
Иҙеүкәйҙең кигәнен,
Мораҙымдың у яҡҡа
Тағы сығып киткәнен —
Барыçы ла аңлаған.
Туҡтамыштың күп көсө,
Уралдан килгән биш кеше*
Иҙеүкәйгә ыҡлағас;
Сәләхи ҙә яңғыҙлап
Туҡтамышҡа саптырған...

## 13. Ханбикәнең Туҡтамыш ханға икенсе төшөн һөйләгәне

Хәбибулла Ғәбитов. Башҡорт әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр // Яңы юл. — 1923. — № 2. — 61—62-се б. Эпостың был өҙөгөн Х. Ғәбитов (1886—1939) ҡобайырҙан бер үрнәк рәүешендә генә баҫтырған. Ул айырым исемләнмәгән дә. Әҫәрҙең ул файҙаланған тулы тексы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Тәҡдим ителгән өҙөккә Нур Зарипов (1925—1997) тарафынан ҡайһы бер аңлатмалар бирелгәйне инде (Ҡар.: БХИ. 5-се том. — 312-се, 334-се б.).

Үҙ башыңа ҡарт убыр,
(Үҙ башыңа ҡарт убыр)...

Нәҡи Иҫәнбәт төҙөгән йыйылма текста «Төш күреүсе» Ханбикәнең төшөнә Туҡтамыш хан һорау менән яуап бирә: «Ул ни булыр, байбисәм?» — ти. Күмәкләшеп төҙөлгән йыйылма текста ла Туҡтамыш хан үҙенең бисәһенә ошондайыраҡ һорау биреп, үҙе төшөн унын үҙенән юрата. Ә был өҙөктә ханбикәгә ундай бурысты атҡарырға форсат бирелмәгән. Күрәһең, «төштөң» башланышынан башҡорттоң «Аҡһаҡ ҡола» тигән мәғлүм мәшһүр эпосында Аҡһаҡ ҡола һөйләгән төшкә оҡшашлығы Х. Ғәбитов килтергән өҙөктөң дә һуңғы һүҙҙәренең «Аҡһаҡ ҡола»са яңғырауына сәбәп булған. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында өйөр айғыры бейәләргә:

— Бөгәсә мин төш күрҙем
Ҡанъяғалай шеш күрҙем... —

тип төш һөйләһә, бейәләр:

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡанъяғалай шеш күрһәң... —

тип, унын хәбәр һөйләм рәүешендә бәйән иткәнен шарт һөйләмгә әйләндереп, ҡабатлап сығаралар ҙа иң ахырҙа: «Үҙ башыңа, ҡарт ҡуҙаҡ!» (БХИ. 3-сө том. — 223-сө б.), йә «Үҙеңә булһын, ҡарт убыр!» (Шунда уҡ. — 244-се б.), йә «Үҙ башыңа булһын, ҡарт убыр!» (Шунда уҡ, 240-сы б.), тип бөтөрәләр.

## 14. Иҙеке менән Жанбай, Туҡтамыш менән ҡыҙғатау ҡош

Эпостың был өҙөктәре Ғәбделәхәт Вилданов (1880—1946) тарафынан әҙерләнгән «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән баҫманан алынды. Унда улар «Жанбайҙың ҡобайырҙары» тигән баш аҫтында бирелгән (Ҡар.: Башҡорт аймағы. — 1927. — № 4. — 47—48-се б.). Был өҙөктәр хаҡында йыйылмабыҙҙың Нур Зарипов (1925—1997) төҙөгән томының «Аңлатмалар»ында һүҙ булғайны инде (Ҡар.: БХИ. 5-се том. — 319—320-се, 325-се, 334-се б.).

[1] Ҡамсы (ла) етәр муйыныңа,
Ҡан сорғалыр ҡуйыныңа...

Был янау һүҙҙәре эпоста тотороҡло һаҡлана, М. Бурanғолов вариантында ла улар Туҡтамыш хан ауыҙынан әйттерелә. Хандың янауына ҡаршы, был вариант буйынса ҡыҙғатау ҙа һамаҡлай-һамаҡлай яуап бирә (Ҡар.: БХИ. 5-се том. — 127-се б.). Г. Потанин яҙып алған ҡаҙаҡ вариантында ул һүҙҙәрҙе Эдыге (Иҙеүкәй) Жанбайға әйтә (Ҡар.: шул уҡ баҫма. — 319-сы б.).

## 15. Иҙеүкәй менән Мораҙымдың әйтешкәне

Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы Өмөтбаев (1841—1907). Йәдкәр. — Ҡазан, 1897. — 83—84-се б.; Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. — 182—184-се б. Эпостың был өҙөгө ошо хәлдә 1876 йылда уҡ әҙер була. Ошо факт үҙе генә лә — «Иҙеүкәй менән Мораҙым»дың башҡорттар араһында борон-борондан яҙма текстары таралыуына дәлил ул. Мәғлүм булыуынса, 1910 йылда Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран — Табын уезы Үрге Ильяс ауылы кешеһе Ҡасҡынов Ғимаҙи Ғәләүетдин улында эпостың әле 1762 йылда уҡ аҡ ҡағыҙға теркәлгән бер варианты һаҡланған (Ҡар.: Зарипов Н. Т. Милли азатлыҡ, үҙ аллы дәүләтселек хыялдарын сағылдырған ҡобайыр // Иҙеүкәй менән Мораҙым: Тарихи ҡобайыр/ Баҫырға әҙерләне Н. Т. Зарипов; Яуаплы мөхәррирҙәре Ә. И. Харисов һәм З. Ғ. Ураҡсин. — Өфө: Китап, 1994. — 8-се б.).

## 16. Иҙеүкәйҙең Мораҙымға үпкәләгәне йәки «Иҙеүкәй менән Мораҙым» көйө

XX быуаттың 70-се йылдарында күренекле музыка белгесе Фәрит Хаснулла улы Камаев (1944—1993) Баймаҡ районы Өмөтбай ауылында йәшәүсе 70—80 йәштәрҙәге Ғүмәров Хәләфтән яҙып алынған // Мәшһүр ҡурайсы Юлай Ишбулды улы Ғәйнетдиновтың шәхси фондынан. Нотаға Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклор һәм сәнғәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре, музыка белгесе Лилиә Сәлмәнова һалды.

## 17. Аҡай яуы

«Аҡай яуы (тарихи хикәйәт)» тигән баш аҫтында тәүҙә Ғ. Б. Хөсәйенов тарафынан ташҡа баҫтырылған // Ватандаш. — 2004. — № 12. — 62 — 67-се б.

Эпостың тексы баҫтырыусының түбәндәге мәҡәләһе менән оҙатылған: «Тарихсылар һәм беҙ, әҙиптәр, XVIII быуаттың 1735—1736 йылдарындағы башҡорт ихтилалы, уның атаҡлы батырҙарының береһе Аҡай хаҡында, нигеҙҙә, Рәсәй хөкүмәтенең рәсми документтары, батша ғәскәрҙәре һәм администра-

ция башлыҡтарының рапорттары, уларҙың яуҙа ҡатнашыусыларҙы хөкөм итеү һәм язалау яҙмалары буйынса ғына беләбеҙ. Унда үҙ ил-йорттарын һаҡлап, иректәрен яҡлап ҡулдарына ҡорал алған, яу сапҡан башҡорттарҙы «яуыздар, ҡырағайҙар, бур-бунтарҙар»* тип яманлау, йәлләттәрсә ҡырыу, язалау мәғлүмәттәре өҫтөнлөк итә. Азатлыҡ хәрәкәтенең яулы, ҡанлы тарих бите, шулай ҡыйыҡ көҙгөләге шикелле, боҙоҡ һәм салыш сағыла.

Рәсәй администрацияһы халыҡтың ни өсөн яу сығырға мәжбүр булғанын аңлатҡан шикәйәт яҙмаларын, ил-йорттарын рәхимһеҙ талауҙарын, башбаштаҡлыҡтарын, язалауҙарын фашлаған хаттарын юҡ иткән, шулай тарих һәм халыҡ хәтеренән ҡанлы эҙҙәрен юйырға тырышҡан. Шул арҡала беҙ хәҙер бигерәк тә көнбайыш башҡорттарының 1735—1736 йылдарҙа яуҙарҙағы батырлыҡтары, күргән ыҙа-яфалары, ҡырағайҙарса язаланыуҙары, һөргөн ебәрелеүҙәре тураһында аҙ беләбеҙ, яу башлыҡтары, Аҡай батыр тураһында иҫтәлек йәки йырҙары буйынса мәғлүмәттәребеҙ юҡ тиерлек.

Беҙгә әле Аҡай батыр тураһында шағир Йософ Гәрәй үҙ атаһынан яҙып алған бер легенда ғына билдәле. Унда Аҡай, тарихи шәхес булыуҙан бигерәк, ҡөҙрәтле бер әкиәт батыры кеүегерәк сала-сарпы ғына хикәйәләнә, тоҫмал монарына төрөлә.

Мәғлүм булыуынса, Аҡай Күсем улы көнбайыш башҡорттарының атаҡлы яу батырҙары нәҫел-ырыуынан. Уның ҡартатаһы Түләкәй батыр — 1681—1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының күренекле етәкселәренең береһе. Үҙ атаһы Күсем Түләкәй улы иһә 1704—1711 йылдарҙағы ихтилалдың иң атаҡлы батырҙарынан. Аҡай батыр — ана шул ата-баба яу батырлыҡтарын, старшиналыҡ вазифаларын дауам иткән арҙаҡлы тарихи шәхес.

Аҡай старшина 1735 йылдың июнендә Өфө янындағы Ҡаратун (Чесноковка) тауы итәгендәге дөйөм башҡорт йыйынын ойоштороусыларҙан һәм 1735 йылғы ихтилалды Килмәк абыз Нурышев, Йософ Арыҡов батырҙар менән берлектә берҙәм башлап ебәреүселәрҙән.

Аҡай старшина Ыҡ йылғаһы буйындағы Тамъян ырыуҙары башлығы булып, Минзәлә ҡалаһына, Башҡортостан территорияһы өҫтөнән хакимлыҡ ҡылған батша администрацияһы үҙәгенә бер нисә тапҡыр сапҡын яһай, Ыҡ-Кама буйҙары төбәген яуға күтәрә.

Өфөнән көньяҡҡа, Яйыҡ буйына хәрби экспедиция менән юлға сыҡҡан Кириллов отрядының юлын бүлер һәм Килмәк абыз атлыларына ярҙам итер өсөн, урта Ағиҙел буйҙарына бер мең һыбайлылары менән килеп етә һәм 9 июлдә батша ғәскәренең Вологда полкына һөжүм итә.

Азатлыҡ өсөн көрәштең икенсе этабында Аҡай Күсемов отрядтары Ҡазан юлы территорияһында, Ыҡ — Кама буйҙа-

рында яуҙар алып бара. Минзәләгә, Шишмә, Кисеүсат ҡәлғәләренә бер нисә тапҡыр сапҡын ойоштора, Кириллов хәрби экспедицияһына ярҙамға килер батша ғәскәрҙәренең юлын бүлергә, туҡтатырға ынтыла.

Минзәлә батша администрацияһы, генерал А. И. Румянцев үҙе яу күтәреүселәрҙең талаптарын үтәргә, үҙҙәрен ярлыҡарға вәғәҙә итеп, Аҡай батырға бер нисә тапҡыр хат ебәрә. Шуларға ышанып, аҙаҡ Аҡай Минзәләгә үҙ ихтыяры менән килә һәм шул мәкер тоҙағына эләгеп, һуңынан бер нисә атаҡлы яу башлыҡтары менән рәхимһеҙ язаланып, дарға аҫтырыла.

«Аҡай яуы» тигән тарихи хикәйәттә 1735—1736 йылдарҙағы башҡорт яуҙарының бер нисә эпизоды һәм аҙаҡтан баш күтәреүселәрҙе нисек вәхшиҙәрсә тимер шештәргә ултыртып, балталар менән баш-ҡулдарын сабып үлтереп, дарҙарға аҫып язалау хәлдәре тасуирлана.

«Аҡай яуы» хикәйәте халыҡ хәтере буйынса яҙылған яҙма әҫәр. Ул үҙ асылы менән — 1735—1736 йылдарҙағы яуҙарҙы һәм баш күтәреүселәрҙе нисек язалауҙы, ил-йортто туҙҙырып, нисек бөлгөнлөккә төшөрөүҙе хикәйәләгән халыҡ хәтере ҡомартҡыһы ул.

Был яҙманың тарихы яҡынса былай.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған фаразы буйынса, был ҡомартҡы 1770 йылдар тирәһендә әлеге яуҙарҙы, язалауҙарҙы күргән йәки шулар хаҡында (ишетеп) белгән кеше тарафынан ғибрәти ҡанлы хәтирә рәүешлерәк яҙылған.

Был яҙма ҡайҙалыр йөҙ йылға яҡын йәшерен һаҡланып ятҡандан һуң, 1864 йылда Түбән Кама төбәгендә Өфө губернаһы Минзәлә өйәҙе Шәңгәле ауылында Нурмөхәммәт бине Мөхәммәтйән исемле кеше тарафынан яңынан күсереп алынған һәм аҙаҡтан бер ҡулъяҙма китап эсендә нисектер Ҡазан марксизм-ленинизм институтының архивына килеп эләккән. Шул китаптан ошо ҡулъяҙманың Аҡай яуы хаҡындағы төрки телендә яҙылған өлөшө руссаға тәржемә ителеп, «Акаевское восстание 1735—1741 гг. О восстании башкир под руководством Акая сына Кусюма» тигән исем менән 1937 йылда Мәскәүҙә нәшер ителгән «История Татарии в документах и материалах» исемле китапҡа индерелгән (402—406-сы биттәр). Ҡулъяҙманың бер бите иллюстрация рәүешендә китаптың 105-се битендә фотокопияла бирелгән. Ҡулъяҙманың төп нөсхәһе, күрәһең, марксизм-ленинизм институты бөтөрөлгән саҡта, архив фондында юҡҡа сыҡҡан. Берәй кешенең ҡулына инеп ҡайҙалыр ятыуы йәки бөтөнләй юғалыуы ихтимал.

Шуныһы ла хикмәтле: үткән быуаттың 30-сы йылдарында сыҡҡан әлеге документтар йыйынтығында баҫылған был ҡиммәтле материалға Башҡортостан, Татарстан, СССР тарихсылары ла илтифат итмәй, ул тәржемә текстҡа бер ниндәй һылтанмалар осрамай.

Унын̡ ҡарауы, үҙ ил-еренән ситтә йәшәгән башҡорт һәм төрки тарихсыһы Әхмәтзәки Вәлиди Төркиәлә ошо китапҡа тәү башлап иғтибар итә, үҙенең «Башҡорттарҙың тарихы» тигән лекциялар серияһында файҙалана һәм улар аҙаҡ бөйөк ғалимыбыҙҙың «Башҡорттарҙың тарихы. Төрк һәм татар тарихы» китабында башҡорт телендә тулы ғына иҫкә алынып үтелә.

Әхмәтзәки Вәлиди шул уҡ ваҡытта был хикәйәттең фарсы телендә яҙылған тулыраҡ варианты булыуын да күрһәтә (Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, 1994, 95-се, 157-се биттәр). Юғарылағы ҡулъяҙманың йәки тулыраҡ тағы бер вариантының фарсы теленә тәржемә ителеүе — йәнә хикмәтлерәк бер күренеш. Үҙендекеләр түгел, ситтәгеләр күрә һәм баһалай белгән был ҡиммәтле сығанаҡты.

Беҙ, әҙәбиәтселәр һәм телселәр өсөн, «Аҡай яуы» тарихи хикәйәте, мөһим тарихи сығанаҡ булыуҙан тыш, төрки телендәге XVIII быуат ҡомартҡыһы, тел-стиле, халыҡтың тарихи хәтерен һаҡлаған яҙма булыуы менән дә бик әһәмиәтле. Тик төп нөсхәнең тулыһынса һаҡланмауы ғына үкенесле.

Йылға һыуының түбән белер өсөн, бер ижауы ла етә тигәндәй, ҡулъяҙманың фотокүсермәлә бер бите булыуы XVIII быуат Урал-Волга буйы төрки яҙма теленең үҙенсәлектәрен, тел-стиль хәсиәттәрен асыҡларға тулы мөмкинлек бирә, тип әйтә алабыҙ.

Бына шул фотокүсермәне хәҙерге графикала транслитерацияла бирәбеҙ: «*...Өмид кистеләр. Монафиҡлар көлөшөп шат улдылар. Ул монафиҡлар күпләрдер: ишнең башында урыслыҡ булған Ҡаршин Мөхәммәд Шәриф, Тубалач Мәсгүд Казандан Аҡсар ауылына килгәндер. Ушандаҡ уҡ кемсәнә Нәдер бине Уразмәт, ошбуның охшашлы күп кешеләр мосолманларны (башҡорттарҙы. — Ә. С.) һәләк ҡылыуда урыс хедмәтенә бил бәйләгәннәрдер шул мәртәбәгә ирешделәр: Үзләре илән гәскәр хәзерләп, уҙ исемләре илән исемләндереп, бик ҡаты җәһед идуп меҫкен мосолманлардан тотоп гәүергә (кафырҙарға) тапшырдылар, вә Саратау, Түмән тарафындан ҡораллы-атлы ҡазаҡ мишәрләр, сәхралыҡ мосолманларны гәүер ҡулына төшерергә күп ярдәм ҡылдылар. Гәүер анларга вавинча (военщина) дип исем ҡуйды. Аның эшенең ахырында башҡорт йерендән ҡәһәр очра тордолар. Бу көн анлар күплердер. Шул чиктә Казан юлында башҡорт ауылларында һич кемне ҡалдырманылар. Әйтер, ошбу ваҡиғалардан суң башҡорт йортларында, хосусан Казан юлында әдәмләр аҙ ҡалдылар, һәр ауылда бер кеше йә ике кеше ҡалды дип; ун кешегә — бер тире тун, вә йиудән йиугә (өйҙән өйгә) бер балта тапмадылар, орлоҡ өзөлдө. Ашлыҡ чәчергә Казан йерендән орлоҡ китерделәр. Ушандаҡ ун өйгә бер сығыр (һыйыр), бер ат тапмадылар — ушандаҡ тарлыҡ вә ағырлыҡлар улды. Әйтмәслек лайыҡ ашарға һич нәрсә ҡалмады. Йердәге һәр төрлө хәшәрәтләрне йейделәр. Ачлыҡ*



«Акай яуы» иртәгенең кулъязмаһынан өзек (фотокүсермә)

*шул чиккә етте: әдәм итен йейделәр, дин һәм әйттеләр. Ачлык сәбәбендин, шул ук агырлык көндә үзләрен мирзаларга колпокка яздырдылар. Мирзалар кулында ушандак коллар күпдер, әл-гаязи билләһи.*

*Ушандаһ әйтелгән гәйре чан мазлум мосолманларны Минзәлгә жыйып килтерделәр. Барча аяклары, вә муйынлары, вә кулдарына тимер богаулар кидереп, мәхкәм, карауыллар куйдылар, һәммәсен зинданга салдылар. Гакыл әйәсе картларны вә сугыш кылган йегетләрне йер астына зинданладылар, караңгы урында.*

*Андан суң Минзәлә тышында алты почмаҡлы ғимарәтләр ҡуйдылар. Тирә-ягына тимер шешләр ҡуйдылар. Бер шеш уртада, ҡалған шешләр тикәсендә бик тағаннар ҡылдылар.*

*Буңдан суң батырларны килтерделәр, гәүер ғәскәре чолғап, һәр төрлө уйынлар, һәр төрлө көйләрне көйләр, мосолманлар Аллаһы тәғәләгә... тәүбә вә истиғфар ҡылырлар иде (ярлыҡау үтенеү).*

*Мондин суң указ уҡыдылар. Мосолманлар үч алмаҡ алмасын өчөн ... бер сәғәттә ике указ килеүе бәлки момтанигдыр (тыйылғандыр) көрәш ҡылмаҡ башларға...»*

(Күп нөктә ҡуйып киткән урындар фотокүсермәнең насар йә боҙоҡ сығыуы арҡаһында таныуы мөмкин булмаған текст урындары.)

Был тарихи хикәйәттең өс мөһим әһәмиәте бар. Беренсенән, ул халыҡтың тарихи хәтере, 1735—1736 йылдарҙағы башҡорт яуҙарының шаһитнамәһе. Шул яуҙарҙы, ҡанлы фажиғәләрҙе күреүсенең йәки ишетеүсенең һөйләгәндәре булыуы менән ул — халыҡ һүҙе, фольклор йәдкәре. Жанр тәбиғәте менән ул халыҡ тарихи хикәйәте. Уның теле лә халыҡсан ябай һәм аңлайышлы, стиле һөйләү, хикәйәләү һөрөлөшө. Шул йәһәттән был әҫәр халҡыбыҙҙың тарихи хәтер ҡаҙнаһын байыта.

*Икенсенән,* шул XVIII быуатта, үҙ заманында уҡ ҡағыҙға теркәп ҡуйылыуы менән ул яҙма йәдкәр рәүешен ала. Теленән, стиленән күренеүенсә, уны үҙ заманаһының белемле генә кешеһе төрки әҙәби телендә яҙған. Уның тарихи-әҙәби лексикабыҙ өсөн әһәмиәте ҙур.

*Өсөнсөнән,* был яҙма ҡомартҡы тарихсылар өсөн бик мөһим документ һәм сығанаҡ та. Унда батша администрацияһының, каратель отрядтары башлыҡтарының рәсми ҡағыҙҙарында, рапорттарында булмаған мәғлүмәттәрҙе, хөкөм һәм язаларҙың вәхшиҙәрсә эшләнеүен күрергә һәм тетрәнергә мөмкин. Был тарихи яҙма документтың һәр юлынан, шаһитлыҡҡа килтерелгән һәр эпизодынан, язалауҙың ҡырағай тамашаларынан эркелеп ҡан ағып, тимер шешкә ултыртылғандарҙың йөрәк өҙгөс аһызғыр өндәре иңрәп торғандай. Был яҙмаларҙы һалҡын аҡыл менән, тетрәнмәйенсә уҡыу мөмкин түгел.

«Аҡай яуы» исеме менән тарихҡа теркәлгән был ҡулъяҙма Аҡай батырҙың яу эшмәкәрлеген аҙыраҡ һөйләгән кеүек тойолһа ла, бында аталған күп яуҙар тап уның етәкселегендә бара. Унан, был әҫәр 1735—1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының Волга буйынаса, Кинель йылғаһы тармаҡтарында киң таралыуын раҫлауы менән дә әһәмиәтле.

Был ҡулъяҙма шул хәҡиҡәтте лә асыҡлай: бәғзе бер татар тарихсылары һәм М. Әхмәтйәнов иште, тарихты күрәләтә боҙоп, башҡорт ихтилалдарын татарҙыҡы тип әйтергә маташыусыларға татарҙарҙың (һәм мишәр казактарының. — *Ә. С.*) күпселеге был яуҙарға башҡорттар менән бергә ҡушылып китеүен

түгел, кирећенсә, шымсылыҡ итеүҙәрен, хыянатсыл юлға баҫыуҙарын һәм башҡорттарҙың 1735—1736 йылдарҙағы баш күтәреүҙәрен рәхимһеҙ рәүештә баҫтырыусылар, азатлыҡ яуын быуыусылар сафында икәнлеген дәлилләп әйтеп бирә. Ҡыпсаҡтар тураһында әйтелгән юлдар иһә башҡорттарҙың үҙҙәре араһында хыянатсылар осрауын, берҙәмлек булмауын күрһәтә. Ҡаҙаҡтар менән мөнәсәбәттәр ҙә хикәйәттә бик асыҡ тасуирлап күрһәтелә.

Йомғаҡлап әйткәндә, «Аҡай яуы» тарихи хикәйәте тарихи-әҙәби йәһәттән үтә әһәмиәтле яҙма ҡомартҡы һәм мөһим тарихи документ булараҡ, ғалимдарыбыҙҙың иғтибарын биләрлек һәм тейешле баһаһын алырлыҡ ҡиммәтле сығанаҡ ул» (Хөсәйенов Ғ. Б. «Аҡай яуы» тарихи хикәйәте тураһында // Ватандаш. — 2004. — № 12. — 69—73-сө б.).

[1] Ҡолһары бәк — Нуғай урҙаһының мөстәҡиллеге бөтөрөлгәндән һуң «аҡ батша»ға хеҙмәт иткән нуғайлы бәк. Ул XVI быуаттың урталарында Башҡортостанда йәшәгән күренекле бәктәрҙең береһе.

[2] Бында 1735 йылдың июнендә Ҡаратун тауы (хәҙерге Чесноковка тауы) итәгендә, Бәрһеүән буйында дүрт даруға[1] башҡорттары вәкилдәренең йыйыны хаҡында һүҙ бара.

[3] Түләкәй улы Күсем — Нуғай юлы, Тамъян ырыуы башҡорто, 1704—1711 йылдарҙағы ихтилал батыры.

[4] Урыҫтар иҙеүенән ҡасып, башҡорттар араһына һыйынған һәм арендаға ер алған әтәмбәйҙәр (припущенниктар, йәғни ебәрелмештәр) хаҡында һүҙ бара.

[5] Борон Тамъян ырыуы башҡорттарының күпселеге Волга, Кама йылғалары буйында йәшәй. Тамъян ырыуынан Түләкәй батырҙың йорт-ере Минзәлә өйәҙендә була, һуңыраҡ уларҙың бер өлөшө, шул иҫәптән Күсемдәр ил-йорто, Ыҡ буйҙарына күсә.

[6] Күсем Түләкәев батырҙың Ахта, Сыуаш исемле улдары хаҡында тарихи документтарҙа мәғлүмәт осрамай.

[7] Күсем Түләкәевты халыҡ Күсембәт тип тә йөрөткән. Уның вафат булыуы 1735 йылда тип күрһәтелә. Нәҡ ошо йылды уларҙың аттарын да урлайҙар.

[8] Ни өсөн яу башланыу, һәм Румянцевтың эшмәкәрлеге тураһында бында хата күҙәтелә? Аҡай Күсем етәкселегендәге яу Көнбайыш Башҡортостанда 1735 йылдың июлендә ҡыҙып ки-

---

[1] Даруга — юл түгел, ә Алтын Урҙа дәүләте заманындағы административ-территориаль бүленеш: Башҡортостан 4 даруғаға (көнбайышы һәм төньяҡ көнбайышы — Ҡазан, көньяғы — Нуғай, төньяҡ-көнсығышы менән көнсығышы — Себер, Өфөнән төньяҡ өлөшө — Уҫы даруғаларына бүленгән була. Юлай Аҙналин, мәҫәлән, 1722 йылда Себер даруғаһы Шайтан-Көҙөй улысы Тәкәй ауылында тыуған // Башҡортостан: Ҡыҫҡаса энциклопедия. — 262—263-сө, 682-се б.

тә, башҡорт атлылары бер нисә тапҡыр Минзәләнең үҙенә һөжүм итә, батша ғәскәрҙәрен ҡыйрата. Был төбәккә баш командир булып генерал А. И. Румянцев Минзәләгә 1735 йылдың 19 сентябрендә генә килә. Аҡай батырҙың үҙ ихтыяры менән Минзәләгә барыуы 1735 йылдағы яуҙарҙан аҙаҡ, 1736 йылға ҡарай.

[9] Аҡай батыр Күсемде тикшереү өсөн 1738 йылда Санкт-Петербургка оҙаталар.

[10] Бында 1735 йылдың июнендәге башҡорт йыйыны хаҡында һүҙ бара булһа кәрәк.

[11] Былар барыһы ла башҡорт ырыуҙары — күпселеге Көнбайыш Башҡортостан төбәгенән.

[12] Былар 1735—1736, 1738—1739 йылдарҙағы яуҙарҙың атаҡлы батырҙары, тарихи шәхестәр. Килмәк абыз — Нуғай юлы башҡорттары яуының башлығы Килмәк Нурышев.

[13] 1735—1736 йылдарҙағы яуҙар.

[14] Был тарихи хәл-ваҡиғалар 1735—1736, 1738—1739 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын баҫтырыуҙа Ҡазан татарҙарының, мишәрҙәрҙең батша яҡлы булғанын, күптәренең хыянатсылыҡ һәм шымсылыҡ эштәре хаҡында халыҡ ҡарашын белдерә.

[15] Башҡорт яу батырҙарын Минзәләлә шулай вәхшиҙәрсә язалау ваҡиғаһы тағы шунса ҡанһыҙлыҡ менән Ҡараһаҡал яуынан һуң, 1740 йылда Һаҡмар буйында һәм Өфөлә, хәҙерге Дуҫлыҡ монументы торған урында ҡабатлана (Хөсәйенов Ғ. Б. Аңлатмалар // Ватандаш. — № 12. — 68-се б.).

## 18. Ҡараһаҡал яуы

1973 йылда Ғайса Хөсәйенов Әбйәлил районы Асҡар ауылында Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәровтан яҙып алған // ТТЭИ, Ҡулъяҙмалар фонды («Тарихи легендалар» төпләмәһе). Әҫәр тәүге тапҡыр Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡараһаҡал батыр халыҡ хәтерендә» тигән хеҙмәтенә ҡушымта рәүешендә донъя күрҙе // Ватандаш. — 2000. — № 7. — 79—87-се (81—83-сө б.).

Үҙенең был хеҙмәтенең инеш өлөшөндә Ғайса Батыргәрәй улы был эпостың төп геройы Миңлеғол-Ҡараһаҡалдың шәхесенә ҡағылышлы тарихи мәғлүмәттәрҙе теркәгән, әҫәрҙе оҙатып килгән күҙәтеүҙәрендә иһә уның ҡара аты менән бергә чу сабыуы, үҙ ғәскәрендә хыянатҡа юл ҡуймауы ҡобайырға хас стиль, үлсәм мәсьәләләре ҡуҙғата. Түбәндә академиктың шул күҙәтеүҙәренең ҡыҫҡартылған варианты тәҡдим ителә (автор «Ҡараһаҡал яуы» әҫәренең жанрын риүәйәт тип билдәләһә лә, ул — асылда, мәғлүм «Ҡараһаҡал» йәки «Ҡара ат» эпосының бер вариантынан ғибәрәт. Анализ да шуға дәлил):

Халыҡтың йәнле хәтере — уның йырҙарында, ҡобайырҙарында, тарихи риүәйәттәрендә. Бер һүҙ менән әйткәндә, туплай, камиллаштыра килгән аҫыл аҡыл хазинаһында.

Халыҡ хәтеренең ни рәүешле йәшәүе һәм һаҡланыуы хаҡында тарихи шәхес Ҡараһаҡал батыр тураһындағы риүәйәттәр, йырҙар, ҡобайырҙар миҫалында байҡап ҡарамаҡсыбыҙ әле.

Башҡорт халыҡ ижадында был хәтер тарихының ниндәй жанрҙар, нисегерәк сағылышының һәм үҫеш-үҙгәрештәренең үҙ үҙенсәлектәре бар. Әйтәйек, батырҙар хаҡындағы хәтирәләрендә ул борон-борон замандарҙа миф-ҡарыһүҙҙәрендә, әкиәттәрендә мифик һәм фантастик формаларҙа бирелһә, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек ҡобайырҙарында камил поэтик эпос рәүешен алды, теҙмә һәм сәсмә хикәйәләү тығыҙ үрелеп китте, һуңыраҡ поэтик эпос фантастик нигеҙҙән реаллеккә табан эволюция кисерҙе. «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Мәргән менән Маянһылыу, «Сура батыр», «Ҡараһаҡал батыр», «Юлай менән Салауат»ише тарихи ҡобайырҙар барлыҡҡа килде. Киң эпик дәүерҙәр үтеп, халыҡтың тарих хәтеренең социаль-тарихи ерлеккә береккән вағыраҡ жанр формалары: риүәйәттәр, тарихи йырҙар, кесе эпостар тармаҡланды һәм тамыр йәйҙе.

Был хаҡта Ҡараһаҡал батыр тураһындағы ауыҙ-тел әҫәрҙәре күп нәмә һөйләй, тарих һәм фараз, тарихилыҡ һәм тасуирилыҡ, поэтика буйынса ғилми дөйөмләштереүҙәр өсөн мул мәғлүмәттәр бирә.

Ҡараһаҡал — Башҡортостан тарихындағы атаҡлы шәхес. Ул 1740 йылғы башҡорт ихтилалы башлығы. Заманында уның батыр, уҡымышлы, аҫыл зат тигән даны ла киң таралған. Хан тигән исеме лә ҡалған. Илгиҙәр тигән исем-аты мәғлүм. Ҡаҙағстанды, Урта Азияны, Волга буйҙарын, Кубанде, Яҡын Көнсығыш илдәрен, Ғәрәбстанды гиҙеп сыҡҡан. Мәккә-Мәҙинәлә хажда булған, мәҙрәсә һабағы алған. Ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡалмыҡ, ғәрәп, фарсы телдәрен туған теле кеүек белгән; тейеш урынында хафиз, кәрәк сағында илселек ҡылған. Ханлыҡ вазифаларын дәғүәләгән. Яҙмыш елдәре уны көтөүсенән аяныс ҡолға, ҡолдан ғәййәр батырға, батырҙан затлы ханға тиклем күтәреп-төшөрөп өйрәлтеп йөрөткән. Уны башҡорттар ғына түгел, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, ҡалмыҡ хан, солтандары ла хан нәҫеле тип һанаған. Урыҫ батшалары, губернаторҙары унан ҡурҡыр булған. Башҡорттар өсөн ул яу батыры, сәсән кеше. (Ҡараһаҡал хаҡында тулыраҡ мәғлүмәтте беҙҙең «Ил азаматтары» тигән китаптан «Ҡараһаҡал хан» мәҡәләһенән алырға мөмкин, Өфө, 1998, 249—274-се биттәр.)

Ҡараһаҡал батыр үҙ заманында бик данлыҡлы булған. Халыҡ уның хаҡында йырҙар, легендалар сығарған, бәйеттәр һөйләгән, хатта уга бағышланған ҡобайырҙар беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Әле бынан 100—150 йылдар элек кенә урыҫ, ҡаҙаҡ ғалимдары уның тураһында ғилми-тикшеренеү эштәре яҙғандар, ҡайһы бер йырҙарҙы, риүәйәттәрҙе ташҡа баҫтырып ҡалдырғандар.

«Ҡараһаҡал тураһында башҡорттарҙа иҫ киткес хикәйәттәр йөрөнө, йырҙар сығарылды, — тип яҙҙы ил өйрәнеүсе ғалим Руф Гаврилович Игнатьев «Ҡараһаҡал — Башҡортостандың дәғи ханы» тигән хеҙмәтендә (1880 й.). Руссаға юлға-юл тәржемәлә бер йырҙан миҫал килтерә:

Карасакал батыр,
Каких мало в свете,
В белой чалме,
На черном коне —
Быстр он, как ветер,
Грозен, как божья гроза,
Богом хранимый не боится врагов,
Он их побивает
Острой саблей,
Копьем и стрелами:
Они ему в Мекке даны.
Карасакал батыр,
Карасакал батыр,
Каких мало на свете,
Он богом храним,
Ему нипочем сотни врагов.

В. Н. Витевскийҙың «И. И. Неплюев и Оренбургский край в прежнем его составе до 1758 г.» тигән китабында тағы шундай юлдар бар:

Один идет на сто человек,
Один побивает сто человек,
Он — батыр да батыр.
Божья гроза, погубя неверных
Он богом храним.
Хан и хан Карасакал
Едет, смотрите:
В белой чалме, на черном коне.
Грозно он саблею машет
И громко правоверных скликает
Идти на врагов,
идти против неверных.
С ним биться никому невозможно
Его не вредят ни пули, ни стрелы,
Ни копья, ни сабли —
Он богом храним.

(167—168-се б.)

Был текстарҙы ошо типтағы ҡобайыр үрнәктәренә эйәреп, башҡортса кире ҡайтарғанда шулайыраҡ булыр кеүек:

Ҡараһаҡал батыр ир ине,
Уға тиңдәр юҡ ине.
Башына салма ураған,
Ҡара атҡа атланған.
Батыр ҙа батыр ине,
Елдән тиҙ елер ине,
Күктән нығ күкрәр ине
(Баҫһа, ер тетрәр ине) —
Шундай батыр ир ине.
Хоҙайы һаҡлағанға
Дошмандан ҡурҡмаҫ ине.
Ҡылыс менән дә сапты,
Һөңгө менән дә сәнсте,
Уҡтары менән атты
Үҙенең яу дошманын.
Мәккәнән ҡөҙрәт алған
Ҡараһаҡал батыр ине,
Уға тиңдәр юҡ ине.
Хоҙай уны һаҡланы,
Дошманға бирешмәне,
Йөҙәрләп ҡырыр ине —
Шундай батыр ир ине.
Йөҙ кешегә ҡаршы сығыр,
Йөҙ кешене ҡырып һалыр
Батыр ҙа батыр ир ине.
Хоҙайы үҙен һаҡлаған,
Кафырҙарҙы ҡырҙырған
Ҡеүәте ине Тәңренең.
Ҡараһаҡал хан ине,
Килеүҙәрен ҡарағыҙ:
Башына салма ураған,
Ҡара атҡа атланған,
Ҡылысын ҡалай һелтәй,
Оранлап яуҙарға саҡыра
Дошманға ташланырға,
Кафырҙарҙы ҡырырға
Уны еңеү мөмкинме ни,
Пүлә лә уны алмай,
Уҡтар ҙа уны алмай,
Һөңгө лә уны алмай,
Ҡылыс та уны алмай,
Хоҙайы уны һаҡлай.

Былдай йырҙар (дөрөҫөрәге, ҡобайырҙар) Ҡараһаҡал хаҡындағы ҡобайырҙың бер кескәй киҫәге булыуы ла бик мөмкин. Р. Г. Игнатьев йәнә Ҡараһаҡалдың изге кеше, көс эйәһе, ҡөҙрәте хаҡында хикәйәттәр барлығын да хәбәр итә. Улары ла

элек бер бөтөн булып йөрөгән ҙур әҫәрҙең киҫәк-ҡоҫаҡ булып хәтерҙә ҡалған өлөштәрелер, бәлки.

Хәҙерге көндә бынан 260—300 йыл элек булып үткән тарихи хәл-ваҡиғалар, Ҡараһаҡал батыр хаҡында бер нисә риүәйәт, ике шаҡтай ҙур ҡобайыр һаҡланып ҡалған. Ҡобайырҙары шул батыр хаҡындағы эпостың ҙур өлөшө булыуы ихтимал...

Тел-стиленән үк күренеүенсә, был риүәйәттең сюжеты һәм мәғлүмәттәре заманса уҡымышлы, башҡорт тарихын һәм халыҡ ижадын яҡшы белгән мөғәллим кеше тарафынан ойоштороп бирелеше ярылып ята. Унда халыҡ хәтеренән килгән һыҙыҡтар һәм билгеләр китаби мәғлүмәттәр менән аралаша. Мөғәлләм ағай Мирхәйҙәров (1900—1980) үҙ хәтерендәген һәм Ҡараһаҡал хаҡында белгәндәрен риүәйәткә әйләндерә кеүек. Үткәнде хәҙергесә аңлауы менән дә иғтибарҙы biләй ул. Р. Г. Игнатьев ишеткән хикәйәт-риүәйәттәр менән оҡшаш мотивтарҙың осрауы ҡыҙыҡлы.

Ҡараһаҡал хаҡындағы ҡобайырҙар иһә поэтик эпос үрнәге булыуы менән ҡиммәтле.

Бер-береһен тултырышырға һәм төп геройҙы киңерәк асырға ярҙам итешкән был күсермә әҫәрҙәр араһында тулылығы һәм бөтөнлөгө менән, әлбиттә, Мөхәммәтша Буранғоловтың Ғәбит сәсән Арғынбаевтан яҙып алған «Ҡараһаҡал» ҡобайыры айырылып тора.

Башта уҡ шуны айырып әйтергә кәрәк, «Ҡараһаҡал» ҡобайыры башҡа классик башҡорт ҡобайырҙары — милли поэтик эпос традициялары нигеҙендә ижад ителгән эпик әҫәр. Был шул традицияларҙы һаҡлаусы Ғәбит сәсән Арғынбаев исеме менән тығыҙ бәйләнгән.

Мәғлүм булыуынса, Мөхәммәтша Буранғолов 1907—1920 йылдарҙа Ғәбит сәсәндән «Урал батыр», «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат», «Күсәк бей», «Тамъян», «Ҡараһаҡал», «Салауат», «Һары мулла» эпик ҡобайырҙарын яҙып алған. Былар башҡорт поэтик эпосының аҫыл әҫәрҙәренән. Ғәбит сәсән шундай меңәр юллыҡ ҡобайырҙарҙы көндәр буйы яттан һөйләй алған. Шул һөнәрҙе һәм бай репертуарҙы, үҙе әйтеүенсә, остазы Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаевтан (1781—1878) ҡат-ҡат тыңлап отҡан. Ишмөхәмәт сәсән үҙ сиратында быларҙы XVIII быуатта йәшәгән Байыҡ сәсәндән аманат кеүек ятлай-ятлай ҡабул иткән (Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Беренсе китап, Өфө, 1972, 297-се бит)...

Унан инде «Күсем батыр еңелгәс, юлдаштары таралғас, Юрматы атлы ырыуҙа» Нияз батыр ғаиләһендә Миңдеғол исемле ул тыуып, батыр булып үҫеп етеп, бәхет һәм үҙенә тиң батырҙар, яуҙаштар эҙләп, ғилем эстәп ситкә сығып китеүҙәре, ҡаҙаҡтар, ҡалмыҡтар, ҡарағалпаҡтар араһында йөрөүҙәре бәйән ителә. Ары «үҙе батыр бер яҡтан, белем алған һәр яҡтан, Ҡараһаҡал тип даны ишетелгән йыраҡтан». Аҙаҡ

Ҡараһаҡал ҡаҙаҡ хан-солтандарынан ярҙам алып, кескәй нөгәр туплап тыуған Уралына әйләнеп ҡайтҡан, халҡына хат яҙып, аттар саптырып ил-йортон яуға күтәргән. «Ҡараһаҡал яу асҡан, бөтә тархан, баярҙың, янарал һәм батшаның йөрәгенә шау һалған». «Ҡараһаҡал ораны Урал илен туплаған; Иҙел буйы, Нөгөштө, Дим, Ашҡаҙар яланын, Ҡара Иҙел тамағын дошмандарҙан әрсегән». Әммә күпме ҡыйыу һуғышмаһындар, Ҡараһаҡалдың уҡ-һөңгөләр менән генә ҡоралланған атлылары аҡ батшаның туп-мылтыҡлы регуляр ғәскәренән еңелгән, батырҙары яуҙарҙа үлеп ҡалған, ҡайһылары әсир ителгән, язаланған, бер аҙы ғына Ҡараһаҡал менән ҡаҙаҡтар араһына ҡасҡан. Ҡобайырҙың фабула һыҙығы шундай.

Хәлбуки ғәмәлдә ҡобайыр традицияһы ул фабуланы шиғыр юлдарына һалып, ҡобайыр алым-ысулдары менән тасуирлап, йәнле хәл-ваҡиғалар, персонаждарын төрлө характерҙар итеп һүрәтләп биргән. Реалистик тасуирлауҙарҙан бигерәк, бында ҡобайыр поэтикаһының әкиәти, гиперболик тасуир саралары өҫтөнлөк ала.

Миңдеғол-Ҡараһаҡалдың тыуыуын-үҫеүен һүрәтләү ҙә әкиәт, ҡобайыр батырҙары кеүегерәк бирелгән. Уға бишек йырҙарын, халыҡ йолаларын ҡушып тасуирлауҙар ингән. Батырға йәр эҙләүҙәр, ат һайлауҙар тап эпостарҙағыса. Ил-ерҙәр гиҙеп йөрөүҙәре лә хас ҡаһармандарҙыҡынса. Батырҙың яу юлдашы ат та эпос ҡаһарманы.

«Ҡараһаҡал» ҡобайырының бер варианты «Ҡара ат» тип аталыуы ла һис осраҡлы түгел. Ҡараһаҡал батырға данлыҡлы ҡара ат бүләк итеп бирелә. Ҡара ат затлы тоҡомдан. Уның үҙ шанлы юлы бар. «Ҡара ат» ҡобайырында әйтелгәнсә, «Юрматы ырыуҙары ҡара атты элек Килмәк батырға бүләк иткәндәр. Ул ҡулға алынғас, йәшергәндәр. Аҙаҡ Ҡараһаҡал батыр килеп сыҡҡас, уға бүләк иткәндәр». Урал батырҙың Аҡбуҙаты үҙенән һуң килгән батырҙарға бүләк ителгән, йә юллап, яулап табылған кеүек, Ҡараһаҡалдың ҡара аты ла, ҡылысы ла батырҙарҙан ҡалған аманаттай бүләк. Ҡараһаҡал батыр менән ҡара аты ла әкиәттәй ҡаһармандар түгелме ни:

Батыр һөңгө күтәрһә,
Ҡанатлы ҡоштай осҡан,
Ҡара ат менән батырға
Бөтә дошман таң ҡалған.
Кейек менмәҫ ҡаянан
Ҡара толпар юл һалған.
Ҡараһаҡал яу аcһа,
Ҡаҙға осҡан ыласындай,
Батша яуын айҡаған.
Ҡара ат сабып киткәндә,
Ҡая таштар онталып,

Еленән ағас йығылған.
Алдында яу күргәндә,
Йән аямай ынтылып,
Батша яуын тапаған.
Ҡараһаҡал ҡылысы
Йөҙ мең дошманды ҡырғас,
Бөтә дошман таң ҡалған...

Ҡобайырҙа Ҡараһаҡал батыр хажи, мосолман ҡаһарманы кеүегерәк тә күҙ алдына килтерелә. Морат мулла уға былай ти:

Солтангәрәй атың бар,
Дөлдөлдән ҡара атта
Ултырырҙай һының бар.
Мәккәлә лә булғанһың,
Унда хаж да ҡылғанһың,
Пәйғәмбәрҙең юлынан
Ҡәғбәгә лә барғанһың.
Атҡа мен һин, алға, тип,
Ҡылыс тот һин, яуға, тип,
Ислам динен йәйергә,
Күктән төшөр Байсаның
Ислам динен көсәйтеп,
Юлын асып бирергә,
Йәжүз-мәжүстәрҙе ҡырырға,
Өлөшлөнән булырға,
Ҡөрьән менән йөрөргә
Ебәрелгән илсе һин.

Эпоста был эпизод та һис осраҡлы түгел, буғай. Р. Г. Игнатьев Ҡараһаҡал тураһындағы хеҙмәтендә уның хажға барғас, имамдар үҙенә Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡәбер тупрағы ҡөҙрәте менән һуғарылған ҡорал биргәндәр, имеш, тигән хикәйәтте лә иҫкә ала. Унан тыш Ҡараһаҡалды изге йән һәм тылсымлы көскә эйә, тигән хикәйәттәр ҙә бар, ти ул. Ул шундай «исме әғзәм» доғаһын белә, шуны берәй кешегә бағышлап уҡыһа, шул утта ла янмай, һыуҙа ла батмай, ти. Бер ҡорал да үҙен ала алмай икән.

Р. Г. Игнатьев Ҡараһаҡал батыр хаҡында йәнә шундай хикәйәттәрҙе ишетә «Бер саҡ кафырҙар менән һуғышып йөрөгәндә Ҡараһаҡал батырға бер шайтан ҡаршы тормаҡ булып, өс башлы аждаһаға әүерелгән икән, батыр бының өс башын да әлеге зөлфәҡәрҙәй ҡылысы менән өҙгән дә ташлаған, ти. Аждаһа урынында бары яман һаҫыҡ еҫ кенә таралып ҡалған, ти. Икенсе осраҡта тағы бер шайтан батыр егет ҡиәфәтенә инеп, ут бөркөп торған атта Ҡараһаҡалға ябырылып килә ятһа, батыр «исме әғзәм» доғаһын уҡып ебәргәйне, шайтан аты-ние менән ғәйеп булды ла көл булып күккә осто, ти».

Ҡобайырҙа йәнә шундай эпизод бар. Әлеге Морат мулла менән Мәсғүт старшина Ҡараһаҡалға Теләүкәй тигән бер яуыз әҙәмде тотоп алып килгәндәр һәм уны ислам диненә ҡаршы зобаный, Ҡөрьәнде яндырған гонаһлы бәндә тип, яза биреүен үтенгәндәр. (Былар өсөһө лә тарихи шәхестәр. Ҡараһаҡалды батша түрәләренә тотоп бирергә тип хасланған Теләүкәй Ҡатай волосы Теләүкәй Улатимеровтың прототибы.)

Тарихтан билдәле булыуынса, Ҡараһаҡал батыр үҙен үлтерергә йә батша түрәләренә тотоп бирергә тип яман ниәт менән килгән Теләүкәй Улатимеровты язаламай, киреһенсә, уны һынар өсөн яу башлығы итә һәм аҙаҡ батырҙың тоғро яуҙашы булып китә ул.

Ҡобайырҙа ла Ҡараһаҡал Теләүкәйҙе хыянатсыл ниәте өсөн язалатаһы урында Морат мулла, Мәсғүт старшина һәм яуҙаштары алдында былай ти:

Ҡөрьән хаты, азамат,
Алла хаҡы тип беләм:
Алла өсөн ғәйепле
Гүрҙә бирер яуабын.
Егет менән алланың
Араһына инмәгеҙ...
Уралды яу баҫҡанда
Батырҙарҙың көҙенә
Иле ҡарап торғанда...
Яу сабырҙай егетте,
Уҡ атырҙай егетте
Әрәм итеп буламы?
Дүрт аяҡлы толпар ҙа
Һөрөнмәйсә буламы?
Ирмен тигән ирҙәр ҙә
Яңылышмайса буламы? —

тип яуап бирә һәм ярлыҡап яу сафына ала. Әйтергә кәрәк, был ҡобайырҙа әлеге Дыуан волосы старшинаһы мулла Морат Кәсәйев, Тамъян волосы старшинаһы Мәсғүт Кәбәсов, Бөрйән волосы батыры Яҡшығол, Ҡараһаҡалдың атаһы Ныязғол, старшина Абдулла Аҡаев, Кесе урҙа ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер, ҡалмыҡ батыры Суна, Солтан хан кеүек тарихи шәхестәр һүрәтләнә; Себер юлы старшинаһы Тағанай Бауырһаҡов, Тамъян-Ҡатай старшинаһы Таймаҫ Шайымов, Сәйет батыр, Күсем батыр, Аҡай батырҙар, яуыз Тәфтиләү һ. б. тарихи шәхестәр телгә алына. Улар ҡобайырҙа, асылда, тарихи фонды билдәләтер, Ҡараһаҡал батыр образын ҡалҡытыбыраҡ кәүҙәләндерер өсөн индерелгәндәр.

Сәйет батыр, Күсем батыр исемдәре уларҙың азатлыҡ өсөн көрәш-яу традицияларын Ҡараһаҡал батырҙың дауам итеүе, яу ҡылысын улар ҡулынан алыуы рәүешендәрәк ҡулланыла.

Батыр булып йәшәһен,
Сәйет, Күсемгә оҡшаһын,
Йөрәктәре ҡуш булһын,
Аҫау менеп, һаҙаҡ алып,
Илде яуҙан һаҡлаһын, —

тип теләй Миңдеғолдоң әсәһе улын бишегенән үк. «Сәйет батыр ҡаны бар, Күсем батыр ҡоно бар, яуға сапмай ҡалмаҫҡа олатайҙар йыры бар», — ти атаһы. Ә Ҡараһаҡалдың сит илдәргә сығып киткәндә һәм яуға күтәрелерҙән алда Сәйет батыр менән Күсем батырҙар ҡәберенә барып зыярат ҡылыуы, иле-халҡы өсөн йәнен фиҙа итергә лә әҙер булыуы хаҡында хәрби ант биреүе ошо батырлыҡ йолаһын ҡеүәтләй.

Ҡараһаҡалдың образы, яу батырлығы, аҡыл ҡеүәһе яу күренештәрен йәки дау тамашаларын хикәйәләү юлы менән түгел, бәлки халыҡтың батырлыҡ, сәсәнлек традицияларын, ыҙан-йолаларын тасуирлау, ҡобайырса һамаҡлап өндәшеү-монолог, ҡара-ҡаршы әйтеш, диалог, хат алымдарын тасуири ҡулланыу, һарнауҙар аша сағыла.

Ҡобайырҙарҙың хәҙер йә фәҡәт теҙмә (шиғыр), йә теҙмә менән сәсмә (проза) формаларының аралашыуы рәүешендә йәшәп килеүе һәм һаҡланыуы тәбиғи. Уларҙың «Урал батыр», «Мәргән менән Маянһылыу», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпостарынан күренеүенсә, боронораҡ йәки мәғлүм дәүрән дәүерҙәр эсендә гел теҙмә формала, поэтик ҡобайыр рәүешендә булғандыр, могайын. Дәүерҙәр үтә-үтә хәл-ваҡиғалар хикәйәләнгән шиғри өлөштәрҙең юлға-юл хәтерҙән юйылып, аҙаҡ хәбәр, сюжет ағышы ара-тирә сәсмә рәүештә аңлатып уҙыуға ҡайтып ҡалғандыр; шулай ирекһеҙҙән сәсмә һәм теҙмә өлөштәр бүленеп, алмаш-тилмәш киткәндер. Ҡайһы бер ҡобайыр сюжеттарының ҡыҫҡа сәсмә формаға әйләнеп ҡалыуы ла шуны раҫлай. «Ҡараһаҡал» ҡобайырының ике вариантында нәҡ шундай хәл күҙәтелә.

Ауыҙ-тел ижады ҡобайыр шиғыры яҙма шиғыр менән дә бер түгел. Ҡобайыр шиғыры тәбиғәте, ритм-интонация хәсиәте менән һөйләү һөрөлөшөнә көйләнгән. Ул яҙма шиғырҙың ҡәтғи ҡанундарына, ҡалыплашҡан ритм-интонацияларына, рифмалар, строфалар системаһына һис тә генә һыйып бөтмәй, уның үҙ иркен үлсәмдәре, үҙ ритм-интонациялары бар. Ябай һөйләү телмәренән ул һамаҡлабыраҡ һөйләүгә, хатта һарнауға ҡоролған үҙ ритм-интонациялары менән бер ҡәҙәр айырыла.

Бына «Урал батыр» ҡобайырын асып ебәргән тәүге һөйләм: «Борон-борон борондан, / кеше-маҙар булмаған, / ул тирәлә ҡоро ер барлығын һис кем белмәгән,/ дүрт ягын диңгеҙ уратҡан / булған, ти, бер урын. / Унда булған, ти, борон Йәнбирҙе тигән ҡарт менән Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ...» Был юлдар сәсмә теҙемдә проза кеүек. Асыҡ ритм-интонация менән уҡыһаң йә тыңлаһаң ғына үҙенсәлеген тойомларға мөмкин.

Ҡайһы бер ҡобайырҙарҙың да хәл-ваҡиғаларҙы хикәйәләгән урындарын шиғри ҡобайыр теҙмәһенән юлға-юл һуҙып яҙһаң, прозаға әйләнеүенән шиғыр икәнлеген ҡапылда һиҙеп булмай...

Ҡобайыр шиғырына ҡалыплашҡан структуралар, бер бөтөн тирадалар, йәғни поэтик клишелар-ҡалыптар характерлы күренеш. Хәҙер кесе ҡобайыр формалары булып йөрөгән «Ишет быны ҡартыңдан», «Бейек тауҙың үлгәне», «Ни яман» ише ҡобайыр тирадалары, Уралға бағышланған ҡобайырҙарҙың байтаҡ өлөштәре шундайҙар. Уралға, батырҙарға бәйле быңдай поэтик клише-ҡалыптарҙың «Ҡараһаҡал» ҡобайырына ла килеп ингәнен күрәбеҙ. Быға, бәлки, бер үк сәсәндең ижад мәйеле, билдәле бер репертуары, уларҙы яҙып алған, баҫмаға әҙерләгән икенсе сәсәндең ҡәләм тыҡҡылауы ла сәбәплелер. Һәр хәлдә, хәҙергәсә һаҡланған ҡулъяҙмаларҙа, күсеректәрҙә, баҫылып сыҡҡан өлгөләрҙә быңдай поэтик ҡалыптар, берләштереү, контаминациялау күренештәре йыш осрай. Ҡобайырҙар өсөн циклизация ла хас. Шуның өсөн ҡайһы бер текстарға тәнҡит күҙлегенән ҡарарға нигеҙле, тәнҡитле (критик) текстарын төҙөргә, йыйылма текстарын ижади ҡороу юлына ла барырға тура килә. Ләкин был ғилми нигеҙле, тулы аңлатмалы булырға тейеш.

«Ҡараһаҡал» ҡобайырына ла, мәҫәлән, «Ҡараһаҡал»дың бер варианты йә бәр киҫәге рәүешендә бергә өлөшсә ҡушып ебәрелеүе бик мөмкин. Уны асыҡлау, ғөмүмән, контаминация ысулы, йыйылма текстар төҙөү мәсьәләһе ғилми нигеҙгә ҡуйылышы йәһәтенән әле киләсәк эш.

Халыҡ хәтерендәге аҡҡа күсергәндә, тарихи хәтер өлгөләрен баҫмаға әҙерләгәндә ғилми текстологик принциптарҙы яҡшы үҙләштереп, ижади нигеҙле эш итеү бик мөһим.

[1] Ҡараһаҡал — Юнаев Миңдеғол (?—1749) 1739—1740 йылдарҙағы башҡорт күтәрелеше етәксеһе.

## 19. Ҡара ат

Ошондай исем аҫтында журналда баҫылған варианты алынды // Ағиҙел. — 1987. — № 6. — 126—131-се биттәр. Әҫәрҙе баҫырға әҙерләүсе Башҡортостан фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, философия фәндәре докторы, профессор Дамир Вәлиев (1940 — 2002) менән Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты, республикабыҙҙың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың халыҡ артисы Юлай Ишбулды улы Ғәйнетдинов үҙҙәренең инеш мәҡәләһендә шулай тип яҙған: «Ағиҙел» журналы уҡыусыларына беҙ әлегә тиклем билдәле булмаған эпосты (ҡобайырҙы) тәҡдим итәбеҙ. Был әҫәр Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинетында һаҡлана. Уны Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған. М. Буранғолов был ҡомартҡыны «Ҡара ат тарихы» тип атаған.

Шул уҡ әҫәр «Октябрь» журналының 1939 йылғы 8—9-сы һандарында, ныҡ ҡыҫҡартылып, «Ҡараһаҡал менән ҡара ат көйөнөң тарихы һәм йырҙары» тигән баш менән баҫылған. Беҙҙең уйыбыҙса, был әҫәрҙе «Ҡара ат» эпосы тип атарға була. Дөрөҫөрәге, эпос ҡына түгел, ә тарихи эпос.

«Ҡара ат» эпосы үҙенең тарихи ерлеге менән башҡа ҡобайырҙарҙан нык айырылып тора. Бында XVIII быуаттың 30—40-сы йылдарында Башҡортостанда булған ваҡиғалар һәм билдәле шәхестәрҙең эшмәкәрлеге сағылыш таба. Уларға, иҙелгән халыҡ күҙлегенән сығып, дөрөҫ баһа бирелә.

Әҫәрҙә батша ғәскәрҙәре яғында йөрөгән һәм халыҡты рәнйеткән башҡорт старшиналары — Таймаҫ' Шаимов, Мәсғүт Кәбәсов, Морат Кәсеев, Абдулла Аҡаев, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы батырҙар — Аҡай, Килмәк, Йосоп, Йәнбәк һәм башҡалар күҙ алдына килеп баҫа.

Ҡобайырҙа Ҡараһаҡал батыр ыңғай шәхес итеп күрһәтелә. Ул аҡыллы, абруйлы һәм көслө кеше, арымай-талмай халыҡты иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә күтәрә. Ҡараһаҡал батыр дини фанатизмдан һәм милли сикләнгәнлектән юғары тора. Быны беҙ эпостағы бер нисә эпизод аша күҙ алдына килтерә алабыҙ.

Тәҡдим ителгән ҡобайырҙың бер өлөшө халыҡта «Ҡара ат» йыры тип йөрөтөлә. Уның Рәшит Шәкүр тарафынан уҡытыусы-пенсионер Хәмзә Күскилдиндән яҙып алынған бер варианты 60-сы йылдар аҙағында «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫылып сыҡты. Был тарихи йырҙы беҙ Ишембай районының Кинйәбулат ауылында йәшәүсе Шәмсиҡәмәр Ғәлимова һәм Ғәмбәрә Дусалина апайҙарҙың башҡарыуында килтерәбеҙ».

[1] Аҡай, Килмәт, Йосоп, Миңлеяр батырҙар — 1735—1740 йылдарҙа булған башҡорт күтәрелештәренең башлыҡтары.

[2] Сәйет — 1681—1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәксеһе.

[3] Тәфкиләү (йәки Тәфтиләү) — Тәвкилев Ҡотломөхәммәт (суҡынып, Алексей Иванович булып киткән) мырҙа (XVII б. башы — 1711 й.) Петр I төрөктәр (1711), фарсылар (1722) менән һуғышҡанда, уның тәржемәсеһе була. Ҡаҙаҡтың кесе йөҙө... Рәсәйгә ҡушылыуына булыша, Ырымбур экспедицияһы начальнигы И. К. Кирилловтың ярҙамсыһы була. XVIII быуаттың 50-се йылдарындағы башҡорт ихтилалдарын ҡанһыҙ баҫтырып, бригадир, генерал-майор дәрәжәләренә ирешә.

*Вариант:*

## Турат

1954 йылдағы диалектология экспедицияһы ваҡытында К. А. Тимирязев исемендәге БДПИ-ның IV курс студенты Нурғәли Харунов Маҡар (хәҙерге Ишембай) районында яҙып алған // БДУ: БӘФК ФФ — 60. — 261—262-се б.

Ҡасандыр башҡорттар менән башҡа халыҡтар һуғышҡан саҡта дан алған йөҙ егерме башҡорт егете була. Улар көслө һуғышалар. Ләкин нисектер ул батырҙар рустар тарафынан ҡулға алыналар. Шул саҡта башҡорт батырҙарының башы уларҙан үҙенең батырҙарын һорап килә. Рустарҙың башы:

— Һин миңә минең аттарымдан да шәп сапҡан ат килтерһәң, ул саҡта һинең башҡорттарың иҫән ҡалырҙар, ә таба алмаһаң, уларҙың башы киҫеләсәк, — тигән.

Башҡорттарҙың башы шәп сабыусы ат эҙләгән, бик оҙаҡ эҙләгән һәм аҙаҡ сиктә ниндәйҙер ырыуҙан бер бәләкәй генә туры ат тапҡан. Ул ат ишәктән саҡ ҡына ҡалҡыу булған.

Атты килтергәс, рустарҙың башлығы:

— Ҡарап ҡарайыҡ, — тигән.

Майҙанға бөтә халыҡ йыйылған. Ҡулға алынған башҡорттар ҙа сығып түңәрәк майҙанға теҙелеп ултырғандар.

Ат сабыштырыу башланған. Башта Турат иң артта ҡалған. Тотҡон башҡорттар уға оҙон ендәренең осо, салғыйҙары менән һуғып ҡалғандар.

Икенсе мәртәбә түңәрәк уратҡанда ла, Турат алға сыға алмай һаман артта барған. Шул саҡта башҡорттар:

— Әллә аяғыңды ер тарттымы?
Ниҙәр булды икән Туратҡа.., —

тип йырлағандар һәм тағы ла салғыйҙары менән һуҡҡылап ебәргәндәр. Шул саҡ Турат үҙенән алда барған аттарҙы берәм-берәм уҙа башлаған, ти. Иң һуңғы түңәрәктә ул ярты ат кәүҙәһе тиклем алдан килеп етә.

Башҡорттар ҡотҡарыла, ә Турат рустар ҡулында ҡала.

# Ҡушымта

## ИДИГӘ БАТЫР

1917 йылда «Әбүбәкер әфәнде Диваевтың этнографияға ғаид әҫәренән тәржемә» тигән аңлатма менән Ырымбурҙа сыҡҡан «Шура» журналында баҫтырыла. Ҡар.: № 15. — 357—360-сы б.; № 16. — 382—384-се б.

Текстың аҙағында «Тәржемәсе Әхмәт Сардар Ишкубаев» тигән имза бар. Әммә Урта Азия, Ҡаҙағстан халыҡтары ижады белгесе башҡорт сығышлы Әбүбәкер Әхмәтйән улы Диваев (1965—1933), эпостың был версияһын кемдән яҙып алған, Ә. С. Ишкубаев уны ҡайһы телдән татарсаға тәржемә иткән — беҙгә мәғлүм түгел. (Ғилми баҫмаларҙа ҡаҙаҡтан икәне әйтелеүгә әйтелә былай. Ҡар.: БХИ. 5-се том. Эпос. — 354-се б.; Урманче Фатых. Народный эпос «Идегей». — Казань: Фән, 1999. — С. 8.) Сөнки журнал мөхәрририәте лә, тәржемәсе лә был хаҡта бер һүҙ ҙә әйтмәгән, бәлки, Әбүбәкер әфәнде уны башҡорттан ишетеп, ҡаҙаҡса яҙып алған булғандыр, бәлки, киреһенсә, ҡаҙаҡтан ишетеп, ҡаҙаҡ телендә теркәгәндер. Шуға күрә, эпостың Диваев версияһы ла тик башҡорттоҡо ғына, тип дәғүәләшеү урынһыҙ. Шулай ҙа яҙып алыусыһының милли сығышын, ул тәҡдим иткән версия менән башҡорттар араһында таралған версия һәм уның варианттары араһында оҡшашлыҡтар булыуын иҫәпкә алып, уны, ҡушымта рәүешендә булһа ла, ошо томға индереү зыян булмаҫ, тигән фекергә киленелде. Диваев ҡалдырған текст бик үк күләмле булмаһа ла, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының башҡорт версияһын баҫтырғанда, уны шартлы рәүештә бүлектәргә бүлеү традицияһы был баҫмала ла күҙәтелде.

Текстың аҙағында, «*Ә. Д.*» — тип тамғалай-тамғалай, Әбүбәкер Диваев үҙ ҡулы менән яҙған алты аңлатма бар. Улар ҙа һис бер үҙгәртеүһеҙ түбәндә тәҡдим ителә:

1) Иҙигә 795-се быуат һижриҙә Туҡтамыш хан тарафынан Яғайлоға бирелгән ярлыҡта ҙикер ителә*. Ҡарағыҙ: 1888 йылда императорский, русский аҫар гәтикә йәмғиәтенең 3-сө жилдендә*

Радловтың «Туҡтамыш һәм Тимер ҡытлыҡтың ярлығы» исемле мәҡәләһен (6-сы һәм 10-сы б.). Идигә, Туҡтамыш хан мәмләкәтендә Ҡарт амитҡа исемле бер көтөүсе тарафынан табылған. Көтөүсенең бала-сағаһы булмаған. Далала йөрөгән ваҡытында бер аҡ сепрәк менән сорналған хәлдә табып, итегенең ҡуңысына һалған. Өйөнә килтергәс, ҡайҙан тапҡаны, нисек килтергәне тураһында һорағандар. (Ҡарт амит): «Итектең ҡуңысына тығып килтерҙем», — тигән. Һәм икенсе риүәйәттә: Туҡтамыш хан мәсеткә барғанда, итек эсенә һалынған бер бала тапҡан. Был балаға шул мөнәсәбәт менән Иҙигә тип исем бирелгән (тиелә). (Ҡарағыҙ: Радлов. Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири и Дзунгарской степи. — Ч. 4.) *Ә. Д.*

2) Нуғайсанан алынған монгол дастанында беҙ күрәбеҙ, Иҙигә Ҡотлоҡай мырҙаның улы булған. Ҡотлоҡай мырҙа Туҡтамыш хандың һарайында ҡоштар тәрбиәләгән булған. Туҡтамыштың бик ҡиммәтле, ҡәҙерле ҡарсығалары булған. Ҡотлоҡай мырҙа ошо надир булған* һис бер мәмләкәттә, һис бер ханлыҡта табылмай торған ҡоштарҙы бик диҡҡәт менән тәрбиәләп үҫтерергә, бер кемгә лә бирмәҫкә, мөкәлләф* булған был ҡарсығаларҙың үҙен түгел, хатта бул йомортҡаһын да һис бер кешегә бирмәҫкә тейеш. Берәй кеше ҡулына төшөп китә ҡалһа, Туҡтамыш өсөн һәләкәт ул. Туҡтамыштың ошондай миҫлеһеҙ* ҡоштары тураһында Азияның ҙур хакимы булған Шаһ Тимер (Тамерлан) ишетеп, Ҡотлоҡайға бик ҡиммәтле бүләктәр менән үҙенең яҡын күргән бер хеҙмәтсеһен ебәрә. Ҡотлоҡай килгән илсенең һүҙҙәренә, уның ҡиммәтле бүләктәренә алданып, Шаһ Тимергә ҡарсығаларҙың йомортҡаларының бер нисәһен биреп ебәрә. Туҡтамыш был хыянатты белеп ҡалып, Ҡотлоҡайҙы һәм уның өй эсен ҡырып бөтөрөргә фарман сығара. Ҡотлоҡайҙың һөт ҡәрҙәше булған Иҫәбей, Туҡтамыштың бойороғон ишетеп, бик ҡурҡа. Ҡотлоҡай мырҙаның нәҫеле бөтөп китеү хәүефе бар булғанға, төн менән Ҡотлоҡайҙың өйөнә килә лә, белдермәҫтән, бишектә ятҡан Иҙигәне ала. Уның урынына үҙенең Күбуғыл исемле улын ҡуйып ҡалдыра. Иҙигә ҙурайғас, Туҡтамыш ханда Күбуғыл исеме менән хеҙмәт иткән. Үҙенең ысын исемен йәшергән. (Ҡарағыҙ: Семенов. Туземцы Северо-восточного Кавказа. — 418-се б.) *Ә. Д.*

3) Семенов әҫәрендә был хатын Данабикә исемендә. *Ә. Д.*

4) Семенов китабында ҡарт бабай 180 йәшлек бер йырсы иттерелеп тасуир ителә. Исеме Фираздәк бин Шабан булып, үҙе Хиуалы. *Ә. Д.*

5) Икенсе бер риүәйәттә Иҙигә Шаһ Тимер ханға барған ваҡытта, юлда киң бер сәхрәлә, Ҡабарҙин исемле бер ҡалмыҡ ханына килеп сыҡҡан. Был хан, Шаһ Тимерҙең ҡыҙы Фирдәүесте урлап ҡасып килә икән. Иҙигә Фирдәүескә яҡынлашырға, (уны) нисек тә булһа үҙенеке итергә теләй. Шул маҡсат менән хандың хеҙмәтенә аш бешереүсе булып керә. Фирдәүестең кәңәше менән Иҙигә, хандың ғәскәрен үҙенә ҡаратыуға моуәффәк* була. Ханды үлтереп Фирдәүесте үҙенә ала. (Ҡарағыҙ: Семеновтың әҫәре. — 435-се б.) *Ә. Д.*

6) Семеновтың китабында Нур Ғәли Нур Ғадил тип яҙылған. (Сәхифә* 433). *Ә. Д.*

# ҺҮҘЛЕК

Ағасай (ағасаҡ) — һыуҙың ағын ерендә генә була торған аҡ балыҡ (*М. Б.*).

Ағындағы ағасайҙай — шаршылап ятҡан ағасаҡ балығылай.

Ағың — аҡ ризығың.

Адәмзәдә — әҙәм балаһы.

Аҙаҡ ҡанын — һуңғы тамсы ҡанын.

Аҙамай — аптырамай (баҙамай — тартынмай).

Аҙамам — юғалып ҡалмам.

Аҙауы — аҙау теше. Бында төп көсө мәғәнәһендә.

Аҙыра — ала ҡар сағында ҡар аҫтынан сыҡҡан иҫке үләндәр.

Айбанған — тартынған.

Айбар һалайым — ғәйрәтен ҡуҙғытмайым.

Айбары — ғәйрәте.

Айҙарлы — ир балаларҙың түбә өҫтөндә ҡалдырылған сәсе (*М. Б.*).

Аймаҡ — ара, тармаҡ (ырыуҙың эске этник төркөмсәһе). Бында ырыу мәғәнәһендә.

Айыра белмәне — таныманы.

Айыры ла үҫкән — айырым-айырым илдәрҙән ойошторолған дәүләт.

Аҡ нарға — аҡ дөйәгә.

Аҡ тирәк — уйын исеме.

Аҡһаҡалы — бында ханға тоғро кеше (вельможа).

Аҡ шоңҡар — һуң дәрәжәлә үткән, ҡош тибә торған бер зирәк ҡош. Үткен кешегә лә шоңҡар тиҙәр (*Н. И.*).

Ал — Н. Иҫәнбәттә аңлашылмаған тыра тигән һүҙ ҡулланған: бәлки, ул файҙаланған нөсхәлә торма булғандыр.

Алап — бер хәбәрҙе ысынбарлығынан арттырып һөйләү (*М. Б.*).

Алғаҫҡы — ғәскәрҙең алғы сафы (*М. Б.*).

Алдыр — ағас һауыт (туҫтаҡ).

Алдына килә — төп нөсхәлә еренә еткерелә.

Ал килмәһен мораҙың — ниәт-маҡсатың алдыңа килмәһен (ғәмәлгә ашмаһын).

Алпатлан — яҡынса: олпатлан.

Ал урамал ир — данлы ир.

Алып — баһадир (алпамышалай батыр).

Ал яй ҙа был яй итәрмен — тетеп һалырмын, үҙ яйына килтерермен.

Анасылар — бала ҡараусы инәләр (Рәми Ғарипов А. С. Пушкиндың «К няне» тигәнен «Ағымсыма» тип тәржемә иткән).

Аны ҡыҙғарып — уны йәлләп.

Ап-аҡ — ҡар мәғәнәһендә.

Арғымағынан илеп — арғымағынан төшөп булырға тейеш.

Арҙа — ике-өс йәшкәсә имеүсе ҡолон (йә башмаҡ), сит бейәләрҙе талап имеп йөрөгән тай (*М. Б.*).

Арҙаҡланған — данланған, тәрбиәләнгән.

Арҙаҡланыу — тәрбиәләнеү (*М. Б.*).
Арҙын — йыртҡыс хайуан.
Арзуһыны — ҡыҙыҡһыныуын.
Артлап — иҫкереп (әсегән бал артлаһа, эсеүгә эшкинмәй).
Аса аҫыл балаҫын — аҫалы балаҫын.
Асылын һорамай — зат-ырыуын, нәҫелен белешмәйенсә.
Аҫау — өйрәтелмәгән йылҡы малы (*М. Б.*), баш бирмәҫ өйөр айғыры.
Атаҡлыһы — атаҡлылығы (данлы, шөһрәтле булыуы).
Атай, тиргә — атай, тип әйтергә.
Атас! — атаһына оҡшаған.
Атҡалаҡ йәки атҡолаҡ — бер үлән исеме. Башҡорт йыры башында:

«Алыҫтарҙан ҡарап ай күренгән
Атҡолаҡтай тигән япраҡ.
Алыҫтарға китеп ғәйеп булды,
Баҫты микән әллә тупраҡ», —

тиелә (*Н. И.*) (Атҡолаҡ көрөк кеүек ҡойроҡло, уҡ башағы кеүек осло, һелтәнмә яу ҡоралы булған. Аҙаҡ ул балалар уйынсығына әйләнгән. — *Ә. С.*).
Атауына — утрауға (йәшәгән еренә), ҡар.: утау.
Атҡолаҡтай телдәре — теле атҡолаҡ үләне кеүек (атҡолаҡ яҫы япраҡлы үлән). Н. Иҫәнбәттә «иренле» (иренде яҫы япраҡлы үләнгә оҡшатыу ситен).
Атҡы — туҙ ҡолаҡлы уҡ (*Н. И.*). Дөрөҫөрәге: атҡолаҡ. Уның ҡойрого ҡоймаҡ ҡалағы кеүек итеп юныла (*Н. И.*), күҙ уңында тотҡаны — ситҡый уҡ кеүек, осло башлы итеп эшләнгән был ҡоралдың ҡойроғона ромбикты киҫелешендә йәки әүрәнә тамғаны (+) хәтерләткән йәки ҡуш ҡанат ромбик рәүешендә туҙ ҡыҫтырыла. Уны ян менән атмайҙар, ә ос яғы осланған ике ҡарыштан оҙонораҡ таяҡтың ҡап уртаһындағы ҡыя киртелгән йырығына нәҙек кенә бауҙың төйөнөн ҡыҫтырып, бауҙың беләк оҙонлоҡ һабын баш осонда болғап-болғап, атҡолаҡты ырғытҡан һымаҡ, кәрәкле йүнәлештә ырғыталар.
Атһынар — һынсыл кеше, ат һынаусы.
Ауырҙай — 1. Ауып китерҙәй. 2. Көс етмәҫлек.
Ауырым — төп нөсхәлә балам.
Аш юяр — ашауҙан (тамаҡтан) яҙыр.
Аяғын — эсемлек һалынған һауытын.
Аяҡ — ағас туҫтаҡ.
Аяҡ биргән — эсемлек тотторған.
Бабаһының (төрөксә) — атаһының.
Бапһыҙ — тәрбиәһе килмәгән (*Н. И.*).
Баг — баҡса: — баг — таг (баҡсатау) һүҙҙәренең был рәүешле әйтелештәре төшлөк яҡ төрөк телендәге ри төркөмөнә хас булып (Самойльевич материалдары ҡаралһын), был төркөмдән булмаған башҡорт теленә бындай әйтелештәрҙең килеп кереүе был күсеректең төшлөк яҡ төрөк нугайҙарҙан килеүен күрһәтә. (*Н. И.*)
Бағауыл — етәксе, ил ағаһы, бағыусы, ҡарауылсы.
Бағы — баҡсаһы.
Байман — рәхәтлек, бәхет (*М. Б.*).
Байтирәк — ҙур, йәйенке, ботаҡлы (*М. Б.*).
Балдар (һөйл.). — балалар.
Барлыҡтар — йән эйәләре, мәхлүктәр (существа).
Бары — бөтә (*М. Б.*).
Барымта — мал-монаят талау өсөн, күршеләргә (күрше ырыуға) яһалған сапҡын.
Барың-барың — барығыҙ ҙа барығыҙ.
Батмандан батман — ауырлыҡ үлсәме: бер батман ҡаҙаҡҡа тиң.
Батыр йоҡлар саялай — батыр һымаҡ ажар.
Бауырыңды күтәрмәй — егет ҡорона керер-кермәҫтән.
Баһат — дәһшәт, ҡурҡыныс (*М. Б.*).
Башкүнәк — ауыҙы йыйыла торған күн һауыт, ат янына тағыла торған турыҡ (*Н. И.*). (Дөрөҫө: йылҡы малының баш тиреһен бөтөн килеш һуйып алып,

шунан эшләнгән турһыҡ. — Ә. С.) Уны эйәр ҡанъяғаһына бәйләп алып йөрөгәндәр.)
Башлыҡ-башлыҡ — хандар ханы.
Баш ярауын — башты һаҡлау сараһын.
Бейбисә — башҡорт туйында (һырға туйҙа) ойошторолған көрәштә ҡыҙ яғынан сыҡҡан егет кейәү малайҙың көрәшсеһен еңһә, ул ҡыҙ киләсәктә бейбисә була; ире уның өҫтөнән тағы кәләш ала алмай.
Бер-берәүҙән (һөйл.) — берәйһенән.
Берҙән-берҙәм — бер ауыҙҙан.
Берегеҙ — тәүге ижеккә баҫым яһап, интонация менән әйткәндә, берегеҙ ҙә мәғәнәһен бирә.
Биҙәл — авторитет, халыҡ араһында ҡәҙерле булыу (М. Б.).
Бикәр — бушҡа, бушты-бушҡа.
Билбау тотҡан ир батыр — көрәштә еңеүсе.
Бил типкән — ат уйнатыу.
Биләнсек — тәпәш билән билә билтер, йәғни бейек булмаған тау (бил).
Бир — бирән ҡорһаҡ (ашамһаҡ).
Бирә лә — бирә лә баһаң.
Битемдәге ҡабымды — маскамды.
Бишбүләк — дөрөҫө: Биш болаҡ (йылға).
Бишлеһендә — биш йәшендә.
Боға күҙ — буға (үгеҙ) күҙле (Н. Иҫәнбәттә: бога).
Болаҡтың — бәләкәй йылғаның.
Бөгәсә — бөгөн төндә.
Бөркөт ҡабаҡлы — күҙ ҡабағы бөркөттөкөләй.
Бөтөн әтрафты — тирә-яҡты.
Буҙ баланы — ҡәҙерле (һөйкөмлө, ыласындай) баланы.
Буй ташлатыр янымда Серҙәшем дә бар ине — ауырыңдан арын, тип, кәңәш биреүсем дә бар ине.
Булат ҡылысын иң башына кейәрһең — ҡылыс бауын иң башына кейерһең...
Бура — оло ата дөйә.
Буралай — бура һымаҡ (ҙур).
Бураланған төйәләй — асыуланып, ужарланған дөйә кеүек.
Буралап болап үкерҙе — ужарланып, балан үкерҙе.
Бута — дөйә балаһы (башҡорттар баланы иркәләткәндә: «Балам—бутаным!» — тиҙәр.
Бутакүҙ тигән һүҙбәйләнеш тә ҡулланыла. Сөнки дөйә балаһы уның күҙе матур була).
Бутлы — көслө, мускуллы беләк (М. Б.).
Бүленә үҫкән — бүлек-бүлек өлкәләрҙән торған.
Бүлтеректән — йәйгә, көҙгә ҡалып бәрәсләүсе малдан.
Бүләгем — дөрөҫөрәге: бүләге.
Быларҙы Иҙел ҡараған — бар йән эйәһен Агиҙел туйындырып торған.
Быларсы — былар (шулай).
Был ҡылышты — был ҡыланышты.
Бәлдәү — йәйәне кәкрәйтә тартыу.
Бәхетең китәр арҡылып — бәхетең китер артылып (өҫкә ҡалҡып).
Вәли Аллаһ (ғәр.) — яҡлаусы (бер) Алла.
Гурында — гүреңдә.
Гәүҙәле — кәүҙәле.
Ғәййүр әҙәмде — гәйрәтләнеүсе әҙәмде.
Ғәрлеге килеп — Н. Иҫәнбәттә ғәйрәте килеп тиелгән. Урынһыҙ.
Ғәүер — исламға ят ҡәүем, кафыр.
Дана егет — берҙән-бер генә (яңғыҙ) тиңдәшһеҙ егет.
Дан булһын — яҡшы (гәҙел) булһын.
Дан бирмәм — маҡтамам.
Диҡҡәтене — иғтибарын.
Домбойоҡтай (һөйл.) — томбойоҡтай.
Дошмандарына галиб (ғәр.) — дошмандарын еңеп сығыуы.
Дуҫымдың утын һүндермәм; Дошмандың утын яндырмам — дуҫымды йәшәтермен, дошманыма көн күрһәтмәм (ут — йәшәү сығанағы).
Дүнән — дүрт йәшлек йылҡы малы.
Дәғүәһе батыл (ғәр.) — дәғүәһе ялған.
Дауран (дәвран, ғәр.) — 1. Тирәләй әйләнеп йөроү, гиҙеп сығыу. 2. Дәүер, осор, ғүмер, заман.
Зикер ителә — иҫкә алына.
Ейгән — ашаған.

Ейәнсәләй — ейәндәй (ейәнсәрҙәй). (Бәлки, «ейәнсә кеүек» тер. Ҡар.: ейәнсә).
Ейәнсә — ҡатындың үҙе тыуған йортона ҡыҙ балалары һәм өсөнсө быуындың ҡыҙ балаһы беренсе быуынға ҡарата шулай ти (*М. Б.*).
Еле — билдә (ориентир).
Еләләргә — билдәләргә.
Ел моронлап емһенеп — ел аҫтынан еҫкәнеп.
Ер булдым — хур булдым.
Еҫер — етем.
Зарурат — теләк менән эшләнә торған эш.
Заһир — яҡты, нурлы.
Зинасы — уйнаш итеүсе.
Жилде (ғәр.) — 1. Китаптың ҡатырға тышлығы. 2. Том. 3. Дана.
Жәмиғ (ғәр.) — барлыҡ, бөтөн.
Жәс — саманан тыш иҫереү (*М. Б.*).
Иғтираф (ғәр.) — үҙ гәйебенде таныу.
Иҙекем, Иҙәгем — Иҙеүкәйҙе яратып, кесерәйтеп әйтеү (*Н. И.*).
Иҙел — иҙеүе — Урал өсөн Ағиҙел күлдәк иҙеүе кеүек.
Иҙән башы — ике иҙән Ике араһына ҡунмаһам — аңлашылып бөтмәгән фразеологизм (идиоматик берәмек). «Еңмәһәм, тармар итмәһәм», тигәнгә тартым.
Изен алды — рөхсәт (хуплау) алды.
Икеһен дә йоп ҡылып — икеһен ҡауыштырып.
Илгә дана — ил таянысы (илдең ише).
Илемдең — халҡымдың.
Илтимаҫ итерһегеҙ (ғәр.) — үтенерһегеҙ.
Илтимаҫтарым — үтенестәрем.
Ил уйыны — халыҡтың фекерен.
Имәгән — эймәгән (еленгә яңынан һөт йыйылмаған).
Ингән берәүҙе — ингән береһен.
Инйеттең (ынйыттың) — интектерҙең, яфаланың.
Инҫәҙе (инһөҙе) бейек буҙырҙан — һауыт (?).
Инъяр ҡашына — яңылыш баҫылғанға оҡшай. Дөрөҫө: эйәр ҡашына булырға тейеш.
Иңбашынан ялғашып — иңбашынан иркәләп.

Ирәбе — үҙ иптәштәре араһында кәүҙәгә ҙурыраҡ кеше (*М. Б.*).
Истиҡбал (ғәр.) — алдағы көн, киләсәк.
Иҫауал (һөйл.) — иҫәүән, уйламай эш ҡылыусы.
Иҫәнләшә — хушлаша.
Иткән, итәр — илткән, илтер.
Ишетә белөм ҡолаҡтан — имешмимеш буйынса белем.
Йоб — ҡуш (*Н. И.*), иш.
Йолалары әйтеүсә — йолаларынса.
Йолармын — аҡлармын, эҙләп табырмын.
Йорт — ил.
Йоҫоҡ — ярарлыҡ ҡупшы (*Н. И.*).
Йөҙ түбән — йөҙ һыуын түгәм (кеше көнләмен).
Йөндө (һөйл.) — йөнлө.
Йөрөк — етеҙерәк, тиҙ йөрөүсән.
Йөрөклөгө — йөрөк ат икәне (йөрөк — аттың йөрөү төрө).
Йүшән — әрем төҫлө үҫкән ҡаты үлән. Уны бигерәк тә дөйә менән йылҡы яратып ашауса н (*М. Б.*).
Йылдымда — йылдамлыҡта.
Йылҡы бәйләп — бейә бәйләп (йәғни һауып).
Йәьжүздәр — дингә ҡаршы кешеләр.
Йәйек — йәйенке; ҡарағайҙан ярпайып торған ботағы.
Йәйеү — йәйелеп (түшәү).
Йәлсеү — мандыу менән икеһе бер мәғәнәлә. Рәхәтлек, изгелек күреү (*М. Б.*).
Казамат — каземат.
Камил — тулыһынса, бөтөнләйгә.
Кеҙел (кеҙе) — тиҫкәреләнеүсән (*М. Б.*).
Кеҙәү — һыйырҙы, бейәне һауғанда, типмәһен өсөн, артҡы ике аяғын тышаулау.
Халыҡ теләгән быуыуға ла әйтелә. Был урында һуңғы мәғәнәһендә алына (*М. Б.*).
Кемдең эске күмһегән — кем көнләшкән (төп даналы ни өсөндөр. Кем йөрәге күмһегән рәүешендә бирелгән).
Кемдәр елек һайланыр? — кемдәр ил елеге (ил терәге) була алыр?
Киҙәк һорағансы — йәрәбә һалышып, нәүбәтләшеп атышҡаны.
Кикел — толом. Бында ат ялының

икегә бүленеп, ҡабарып тороуы. Үзбәк йырҙарында:

Кәкеленңне гәнбәрур (р) ян әжиҙә янан ҡыҙ,

Йөҙләреңме әхтәрур (р) йәки маһи табан ҡыҙ (*Н. И.*).

Килешкә -- бер фекергә, килешеүгә.

Килтә — дошман яуына зарар килтереү (*М. Б.*).

Ким инем — кәм инем (был форма халыҡ йырҙарында ҡулланыусан: «Йырламай ҙа тороп, йырлап уҡ эйһәм, бик күп йыраусынан ким түгел»).

Киргә—тирмә стенаһы кейеҙе (*М. Б.*).

Кишкә — балалар биләүсе (М.Б).

Кәрамәт (гәр.) — мөғжизә.

Көйөк — ваҡытығыҙ нәҫел тaратмаһын өсөн, тәкәгә бәйләй торған нәмә (*М. Б.*).

«Тәкә бестереү» тигәнде әле лә, боронгоса, «тәкә көйҙөртөү» тиҙәр.

Көнгә — көньяҡҡа.

Көндән — ҡояштан.

Көндәрҙә бер көн — Н. Иҫәнбәт нөсхәһендә: бер көндә, йә көндәрҙең береһендә, йә бер көн.

Көнөн — 1. Ҡояшын. 2. Көндөҙөн.

Көрөндәй — яҙғы ҡар һыуы (*М. Б.*).

Көрөнөн — яҙын йырғанаҡ (ямғыр һуңынан) ағыусы һыу.

Көрәштә һырт бирмәнем — яуҙа сигенмәнем.

Көс бирмәй — бирешмәй.

Көҫәгән — теләгән (*М. Б.*).

Крамға — крепосҡа (*М. Б.*).

Кум — ыңғырсаҡ йә эйәр атына тегелгән кейеҙ (*М. Б.*).

Күбемдән — халҡымдан (илемдән).

Күҙҙән ғәйеп була — күҙҙән юғала.

Күҙ ҡарауын илендә бар батырға бей иткән — ышаныслыһын бөтә батырҙарға башлыҡ иткән.

Күбәләк, Тиләү — хәҙерге Башҡортостандың Әбйәлил, Учалы төбәгендә йәшәгән башҡорт ырыуҙары.

Күгиҙел — Дим.

Күк тарлан — ат исеме. Ҡаҙаҡса: үләндә.

Тарпан ат ман күбекте, артынан етте барҡырап (*Н. И.*).

Тау сыуындай сарҡыр ап-аҡ һауыты ярҡырап,

Күкшин — иҫке-оҫҡо итеү (*М. Б.*).

Күлдең сәхилендә — күл ситендә (ярында).

Күмелдереге — ике осо эйәрҙең ике табансаһының ал ягына беркетелеп, аттың түше тәңгәленә ике тармағы бергә нығытылып, алғы ике бото араһынан үткәрелеп, өсөнсө осо айылға тоташтырылған ҡайыш. Тау менгәндә, эйәрҙе артҡа шылыуҙан шул һаҡлай.

Күмәгәйенән — тамаҡтағы кимерсәк төйөнөнән (*М. Б.*).

Күңеленән тартһа ла — күңеленән хуп күрһә лә.

Күп эшеңде сүкерер — күмәк көс бөтә өлгәшкәнеңде юҡ итер.

Күрекле — күркәм.

Күсәм (вожак) — юл башы (*М. Б.*). Был һүҙ күсеүгә әүәҫ мәғәнәһендә лә ҡулланыла.

Кәйеп китһә лә — ҡасып китһә лә.

Кәлсер-Табын — Оло Табын ҡәбиләһенең бер ырыуы (хәҙерге Ғафури районы тирәһендә йәшәй).

Кәнизәк — ҡол ҡатын (харам һарайындағы, йәғни гаремдағы. — *Ә. С.*), ярпә, хеҙмәтсе ҡыҙ мәғәнәһендә (фарсыса — книз — көнәзәк һүҙҙәренән алынған). Төйкәләр материалдарында Кәникә (*Н. И.*).

Кәнизәктәр энйеттең — харам ҡыҙҙар (гаремыңды) үрсеттең.

Ҡабаҡлы -- күҙ ҡабағы.

Ҡабымды — маскамды.

Ҡайта Иҙел кисһәнә — Агиҙелде ҡайтыу яғына кире кисһәнә, йәғни кире борол.

Ҡайта тупһа баҫмамын — ҡабат тупһаң аша баҫмамын (ҡабат йортоңа ҡайтмамын).

Ҡаҡһыр — иҫкергән.

Ҡалғынып — сайҡалып, баш сайҡап.

Ҡалғыу — йоҡомһорап, ауа яҙып ултырыу (*М. Б.*).

Ҡалҡа — балалар түшәге (*М. Б.*).

Ҡалҡай — ҡалҡыу (М. Ө.), ҡалҡандай.

Ҡалҡалай — ҡалҡандай (ҡалҡан кеүек).

Ҡалын (һөйл.) — егет яғы ҡыҙ яғына бирә торған мал.

Ҡамайыл — ҡом аралаш балсыҡ (*М. Б.*).

Ҡамҡа — 1. Ҡалын тире йәки киндер. Ҡамҡа тун — яға, сабыу еңдәренә әйләндерә ҡамҡа тотоп теккән аҫыл тун. Радлов буйынса, ҡамҡа — ҡытай ебәк материалы (ҡарағыҙ: төрөк шиүәләре һүҙлегенән. — 2-се том. — 490-сы б. (*Н. И.*). 2. Ҡамҡа тип ҡара ебәк тышланып, ең һәм итәктәре ҡама менән уратылған тунға, бөтә ере лә тире — доха тунға ла әйтелә (*М. Б.*).

Ҡамҡалы күл — күл атамаһы.

Ҡантарап — тирләгән атты, ашатмай, таңға саҡлы бәйләү (*М. Б.*).

Ҡанъяғанды — эйәр табансаларының артҡы өләшөнә тағылып, ике яҡлап икешәр осо һалынып торған нәҙек ҡайыш бау. Атҡа йөк артмаҡлағанда, уны бәйләйҙәр, артмаҡлайҙар.

Ҡаңғырып үҫкән ҡараны ҡара кишкә биләттем — ыҙа күреп үҫкән ҡара халыҡ (хеҙмәтсе, ҡол) затын әҙәм иттем.

Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың — ҡара арғымаҡты (менге атын) эштән сығарҙың.

Ҡара бир — ҡара төҫлөнән бир.

Ҡарағас — черный бор (*Н. И.*): *Н. И.* бында ҡара ағас тигәнде күҙ уңында тотҡан, буғай. Ә ҡарағас — русса лиственница.

Ҡарағым (ҡаҙ.) — ҡәҙерлем.

Ҡараҡланған ҡашҡалар — ҡарыуы бөткән (көсө) батырҙар.

Ҡарасайҙай — ҡарасалай, ҡыр өйрәгеләй.

Ҡарасайы — 1. Ҡараҡайы; 2. Ҡыр өйрәге.

Ҡарғыланған — ҡарғыш алған.

Ҡарт-ҡорҙар — ҡарт-ҡоро.

Ҡартлығынан ҡашҡарып — ҡартлығы арҡаһында, ҡаҡшаған.

Ҡарһаҡ — ҡарһаҡ төлкө, ваҡ дала төлкөһө.

Ҡаршы бар — *Н. И.*, татарсалап «ҡаршы йөр» тип биргән.

Ҡарыуға ужарың ни? — ҡаршылашырға (талашырға, алышыражарың (хәлең) етерлекме?

Ҡарыулыҡ — ҡаршылыҡ.

Ҡау итеү йәки ҡыу итеү — ҡурҡытыу (ҡоро үләнде ҡау тиҙәр. — *Н. И.*).

Ҡаһырҙан (ғәр. каһирҙан) — көрәштә (алышта) өҫтөн булыу сағында.

Ҡашҡарған — үкергән (ырылдаған).

Ҡашҡа — 1. Аҡ һыйыр, аттан бүтән төҫтәрҙәге малдарҙың маңлайындағы аҡ. Оҙон булһа — яра ҡашҡа, уйым булһа — йондоҙ ҡашҡа, тиҙәр. 2. Был урында ҡашҡа һүҙе илдә күп кешеләр араһында берҙән-бер ир, даналы яңғыҙ ир мәғәнәһендә (*М. Б.*). 3. Ҡашҡа — батырлыҡ дәрәжәһе.

Ҡашынын — ҡашын.

Ҡобаға — Уртаһы улаҡланып торған нәмә. Ҡаты ҡайырынан уҡты шыма юныу өсөн (тимер йышҡы ағасы һымаҡ) бысаҡ йөҙөнә ҡуйып яһайҙар. Ҡалын текә тояҡлы атҡа ла ҡобаға тояҡлы тип әйтәләр (*М. Б.*).

Ҡола сүл — буш ятҡан сүллек (сағ.: ҡола ялан)

Ҡолонда — ҡолон сағында.

Ҡонан — өс йәшлек йылҡы малы.

Ҡораҡташ — замандаш бер йәштәш кешеләрҙең бер-береһенә әйтә торған атамалары (*М. Б.*), ҡорҙаш (*Ә. С.*).

Ҡорбаш — ҡор башы.

Ҡорман — уҡ-һаҙаҡ һала торған күн һауыт (*М. Б.*).

Ҡоҫоғона — ҡоҫҡолоғона.

Ҡош телен — һунар ҡошон осорғанда әйтелә торған теләкте (ҡара: доғаны).

Ҡубаға ҡабырға — ҡобаға (улаҡлы) ҡабырға.

Ҡуҙағай — кейеменә маһайып ҡына йөрөүсе ҡупшы кеше (щеголь) (*М. Б.*).
Ҡуйытыу — ҡатырыу йәки һөнәрек онотторою, оҙағыраҡ сөймәйенсә аҫраһаң ыласын һауалап, ҡош тибеүен һәм әйләнеп килеп, ҡулға ҡуныуын онота башлай. Хужаһы ас аҫраһа, ыласындың ҡанаттары һәм ҡойроғо һынып ҡорой башлай. Ул ваҡытта, ыласындың ҡанат-ҡойроғо быуылыҡҡан, тиҙәр (*М. Ө.*).
Ҡулат — тибә торған уҫал аттың аяғына һуға торған нәмә (*М. Б.*).
Ҡул булды — ҡулай (оҫта) булды.
Ҡул ҡыҫышмай — танышмайынса.
Ҡул тартыу — баш тартыу.
Ҡумды эйәр — ҡапталына күн тышлы кейеҙ тегелгән эйәр.
Ҡунаҡсының итеге тар — үтә ҡунаҡсыл кеше фәҡир булыр.
Ҡуныш — төйәк.
Ҡур — утлы күмер. Ғосманлы телендә лә ошолай (ҡарағыҙ: Радлов һүҙлеге. — 2-се том. — 550-се б. — *Н. И.*).
Ҡусҡар — ҡусҡар мөгөҙлө һарыҡ тәкәһе.
Ҡуш айҙарлы — түбәһендәге өлтөк сәсе; бында үтә дәрәжәле мәғәнәһендә.
Ҡыҙаш — йоҙаҡ, самауыр, ваҡ-төйәк төҙәтеүсе — һалҡын тимерсе (*М. Б.*).
Ҡыҙғаныл — йәлләп мәғәнәһендә.
Ҡыҙғатау — ҡыҙыл түшле күл ҡошо.
Ҡыҙыл мал — мануфактура.
Ҡыҙын туйлаған — ҡыҙын кейәүгә биргән.
Ҡылыс уктатһын өсөн — ҡылысы менән уҡталһын өсөн.
Ҡыңылағы — ҡыйындағы.
Ҡыран — аҫтын-өҫкә әйләндереүсе (*М. Б.*).
Ҡырҡ меңе (ырыу) — Ҡырҡ өйлө меңе ырыуы.
Ҡыртан — кеше араһында һүҙ йөрөтөп, үс алыусы ғәйбәтсе (*М. Б.*).
Ҡыртым — юҡ һүҙҙе һөйләп, кеше араһын боҙоусы (*М. Б.*).
Ҡыртымға — һүҙ менән әүрәтеп, халыҡты ыҙғытыусыға.

Ҡырымдан — Ҡырым ярымутрауы аңлашылмаһын. Ҡыр, ҡырай — ситтәре, яҡ мәғәнәләрендә (*Н. И.*).
Ҡырынан яу — ситтән яу.
Ҡыуараһын ҡасырып — ҡобараһын осороп.
Ҡыуғындай — үҫентеләрҙәй.
Ҡыуҙай — ҡыу таяҡ һымаҡ.
Ҡыуҙыртыу иҫәбенә төшә — ҡыуҙыртырға ниәтләнә...
Ҡыулан (ҡаулан) — уҙған йылдан ҡалған иҫке ҡылғандың яҙ көнө йәшел ҡылған менән ҡатыш үҫеп ултырған сағы (*М. Б.*).
Ҡышыны — ҡышты.
Ҡәғбә (Ҡәғбәтулла) — мосолмандарҙың Мәккә ҡалаһындағы табыныу ташы. Уны ете ҡат урап сыҡһаң, ҡылған гонаһтарың юйыла була.
Ҡәмәр — болғар күнгә йәки ҡайышҡа көмөштән биҙәктәр ҡуйып эшләнгән билбау (*М. Б.*).
Ҡәмәр (фарсы) — бил ҡыҫа. Билбау (*Н. И.*).
Ҡәрәмат (ғәр.) — могжизә.
Ҡәмәр ҡашы билбау ҡаптырмаһының ҡашы.
Малик (ғәр.) — нимәгәлер эйә булыу.
Мас итеп — иҫертеп.
Матау (һөйл.) — тышау.
Матҡытыу — быуып тотоу (*М. Б.*).
Маяҡтарын муртайтып — күҙгә күренгән таяныстың бөҫөн алып.
Маяҡ теккән биләнгә — ил башлығына (Иҙеүкәйгә).
Мең башы — мең һаҙаҡлы сиреү башлығы (командиры).
Микләнгән — бөлгән.
Минеке булһаң — минең яҡлы булһаң.
Мин тыуғандай тыу көнөн — мин тыуған саҡтағыса, бәхетһеҙ көнитмеш.
Миҫле — кеүек, шикелле.
Миҫләһеҙ — тиңһеҙ.
Монда — аттың ыңғырсаҡлыҡ менән ҡамытлыҡ араһындағы ҡалҡыу һөйәге (*М. Б.*).
Мораҙым — морадым — маҡсатым.
Мөбтәлә (ғәр.) — юҡҡа сыҡты.
Мәғәттәсәәссаф йән (ғәр.) — әҙәмгә ят зат мәғәнәһендә.

Мөдәт — мөҙҙәт — ваҡыт (срок), форсат.
Мөҡәлләф — мөҡәлләд (ғәр.) — эйәргән нәмә, яҡшы нәмә булыуы ихтимал.
Мөҫөргән — булмаҫ эшкә өмөт итеү (*М. Б.*).
Мөтәәҫҫир (ғәр.) — ҡайғы-хәсрәткә төшкән.
Мырҙаның — Мораҙымдың тип уҡыу кәрәк.
Мәғкүл күрә — оҡшата, хуп күрә.
Мәҙе — ҡайғы, илгә ҡараңғылыҡ төшөү. (*М. Б.*)
Мәҙкүр (ғәр.) — юғарыла әйтелгән (күрһәтелгән).
Мәҡан (ғәр.) — төйәк тартҡан (торған) урын.
Мәҡсудема (ғәр.) — маҡсатыма.
Мәмләкәт — дәүләт (государство).
Мәрҙәш — молодец, маҡтаулы булыу (*М. Б.*).
Мәрәй итеп — маҡсат итеп.
Мәслихәтте (ғәр.) — кәңәште (бер фекергә килеү).
Надир (ғәр.) булған — берҙән-бер, һирәк осрай торған.
Наҙырһыҙ ямал эйәһе (ғәр.) — тиңе юҡ матурлыҡ эйәһе.
Налә ҡылып (ғәр.) — илап, ялбарып.
Нан — икмәк.
Нар — бер (тоташ) үркәсле дөйә (*Н. И.*, *М. Б.*).
Низағаһы — бәхәсе.
Ниһайәһеҙ бай — сикһеҙ бай.
Ниһаяһыҙ ямалын (ғәр.) — тиңһеҙ сибәрлеген.
Ноҡар — һылыу (*М. Б.*).
Нөкөр — кәләш (*М. Ө.*).
Нөлдәр — ябығып, ҡоро һөйәккә ҡалыу.
Нөкәр (монг. нөгәр) — батыр, хан эргәһендәге һаҡсы, кейәү.
Нөкәр (фарсы нүкри) — аҫрау, хеҙмәтсе ҡатын мәғәнәһендәге һүҙҙе килтерелеү мантики түгел, бәлки нөкәр (никар — нигар)ҙан боҙолған булырға тейешле. Никар һүҙе — һылыу, матур рәсем, тәре... мәғәнәһендә булып, төрөк юғары синыф ҡатын-ҡыҙҙары араһында бөгөнгө көндә лә яратып ҡушыла торған исем. Унан һуң нүгәр һүҙенең башҡортта — төркөмдәш, арҡа таянысы (арҡадаш. — *Ә. С.*) тигән мәғәнәләрҙә йөрөүе лә бар. Ҡайһы бер башҡорт ырыуҙарында «нүгәр» кейәү егете мәғәнәһендә, ә ҡай берендә — бикәс мәғәнәһендә (*Н. И.*). (Ҡар.: нуҡар).
Нурани (ғәр.) — нурлы.
Нәбирә — ул, ҡыҙының балалары (*М. Б.*).
Нәмигә — яҡын ҡәрҙәш.
Оҙон ҡолаҡтар — хәбәрҙе алдан ишеттереүселәр, хәбәр ташыусылар.
Оҙон тороҡ(ло) — оҙон ботло (бейек) һонтор ат.
Оҡшатып яратҡан — бер-береһенә оҡшаш итеп, бар ҡылған.
Оло Иҙел — Волга.
Омпайыу, һымтайыу — алданыу.
Орғанда — бәргәндә.
Орлогондо тоҡом ҡылырмын — «тоҡом ҡалдырғысынды өҙөрмөн» мәғәнәһендә.
Осҡат — ваҡ ҡына ҡаты ағас, ҡыҙыл емеше була (*М. Б.*), өсҡат.
Өҙлөгөү — биртенеү.
Өҙән һыу — үҙән һыу.
Өсҡат менән юшаны — үҫемлектәр.
Өшкәмә — ялған ҡотҡо, ялған хәбәр.
Падачинең бүлеге боҙолмайды — аңлашылып бөтмәй.
Разый булып — ризалашып.
Рисвай — мыҫҡыл итеү, хурлау (*М. Б.*).
Рисуай итеп — фаш итеп.
Рәғиәтенә — биләмәһендәге халыҡҡа.
Рәжем — гонаһлы кешене таштар менән бәргеләп үлтереү.
Сабар — сапҡын.
Саға — бала. Мәҫ.: балалар баҡсаһы — төрөкмәнсә — чағалар бакчасы.
Сағарағынды — тирмәндең төндөгөн (сағараҡ тирмә түбәһендәге түңәрәк тишектең тирәсәһе). Ҡар.: саңыраҡ.
Сағыра тау — ташлыҡ, урман аша үтергә мөмкин булмаған яман юл (*М. Б.*).

Садиҡмын (ғәр.) — тоғромон.
Сай — тигеҙ ерҙәге соҡорһыу ер (*М. Б.*).
Сайғар — түрәләр тарафынан бүләк итеп бирелгән һауыт-һаба. Ә халыҡ телендә етлекмәгән мәғәнәһендә лә йөрөтөлә. (*М. Б.*).
Сайран — ватылыу.
Сайраған — сатнаған.
Саҡ булған — талған булған.
Саңрыҡ (һөйл.) — сағараҡ, тирмә ҡыйығы. Ҡар.: сағараҡ.
Сапаҡ — телгә оҫта кеше.
Сап иренле — сапылдаҡ (шапылдыҡ, ҙур) иренле (һалбыр иренле).
Сапҡындар йүнәтте — сапҡын ебәреү хәстәрен күрҙе.
Сауылдан — sауҡанан.
Сая-сая һайланың — сай артынан сай (һыу артынан һыу) һайланың мәғәнәһендә, бугай.
Сергеһенән — эйәр аҫтына һалына торған түшәктән.
Сиреү — ғәскәр.
Сойорғотоу, сорғы — ғәҙәттән тыш ырғытыу, сөйөү. Үҙлегенән сығып, һиҫкәнеп ырғыуға ла әйтелә (*М. Б.*).
Солтанат — солтанлыҡ дәрәжәһе.
Соңҡа — баштың арт һөйәге (*Н. И.*).
Сор ҡурай — тышы ташланған ҡурай. Тышлыҡ итеп һарыҡтың арытылған ас эсәген йә екән ҡамышын файҙаланғандар: тәүгеһен — кейҙереп, икенсеһен урап көнтөшмәҫ ерҙә киптерәләр.
Сөйөү — ҡарсыға, ыласынды ҡош күсенә осороп ебәреү (*М. Б.*).
Сөмбәй — бала йүргәге (*М. Б.*).
Сулпаны оранын — Сулпан йондоҙ хәбәрен (юрау).
Сылым — йәш балаларҙың баш өҫтөнөң ҡатмаған, йомшаҡ сағы (*М. Б.*).
Сымтырмыр (Сатмыр, Сытмыр, Тимерхан) — Аҡһаҡ Тимер (Әмир Тимур).
Сымыры — йыйнаҡ, бында йүнле мәғәнәһендә.
Сыпыш ҡойроҡ — сонтор ҡойроҡ.
Сырағым — сыраҡ — күҙ мәғәнәһендә.
Сыуаҡҡа — Салтыковта «Сувaку» тип бирелгән. Ихтимал, был исем Айсыуаҡ тигән исемдең ҡыҫҡартылған вариантылыр.
Сәмләнеү — намыҫланыу, кемуҙарҙан ярышыу.
Сәрхәт — яландың хәтфә төҫлө, матурланып ятыуы (*М. Б.*).
Сәсәнлектә йәр булды — сәсәндәргә иш булды.
Сәсәһе — кикеле (аттың маңлай сәсе).
Сәхидә (ғәр) — китап бите, яҙыу яҙа торған ҡағыҙ йә бүтән нәмәнең йөҙө.
Ҫыйҙаҡ (һөйл.) — һайҙаҡ — тоҡом малы.
Ҫараяҡҡа — ағас һауытҡа, күнәккә (информатор дөрөҫ аңлатмаған. Унынса: был һауыт — алдыр, туҫтаҡ. Унда бал әсеткеләйҙәр).
Ҫоллоһо — оһоллоһо.
Ҫәүрегендә — һәүрек (әле үҙенә өйөр алыу кимәленә етмәгән йәш айғыр) сағында.
Табаныңды теләр ул, Телеп, ҡылын һалыр ул — борон, әсир кеше ҡасмаһын өсөн уның табанын телеп, шунда туралған ат ҡылы һалыр булғандар.
Табаны ялпаҡ (ат) — тиҙ арымаҫ (ат).
Тағ, таҡ — тәхет мәғәнәһендә (*М. Б.*).
Тайҙа — тай сағында.
Талай — байтаҡ.
Таралғы — айыл осондағы тимер, элмәк (ҡаптырма).
Тарлан — аҡҡа күк төшкән төҫтәге күк-буҙ атҡа әйтелә (*М. Б.*)
Тарпан буҙ — буҙ төҫтәге ҡырағай ат.
Тел аҫтына тел ҡуймай — сер йәшермәй, ике төрлө һөйләмәй.
Тернәксел — эшсән, кәсепсән (*М. Б.*)
Тибенгенән — Н. Иҫәнбәттә: тибелгән аттан.
Тибенгеһен — шпорын.
Тибәргән — ситләткән.
Тигентен — тиңенән (кимәленән).
Тигәненә еткергән — ниәт-маҡсатына ирештергән.
Тигән һүҙен — «әйтер һүҙен» мәғәнәһендә, бугай. Юҡһа, тура телмәрҙән һуң ремарка рәүешендә («сказал» мәғәнәһендә)

әйтелгән һүҙ тип белһәк, бер ниндәй ҡағиҙәгә һыймай.
Тием, собар — ымлыҡ, алғышлау һүҙе.
Тикһеҙ — затһыҙ, баһаһыҙ, бәҫһеҙ.
Тилегән — тилмергән.
Тилеү — быҙауы, ҡолоно үлгән малға бүтән малдың балаһын эйәләштереп имеҙеү (*М. Б.*).
Тимә бере яусылар — ҡулдан-ҡулға йөрөтөлөр.
Типһән — ҙур тауҙар өҫтөндәге тигеҙлек (*М. Б.*).
Тиҫтер — йәштәш (*М. Б.*).
Тойғоном — тойғон — бөркөттөң бер төрө.
Толҡа — күңелдең тыныслыҡ тапмауы (*М. Б.*).
Торба — төрбә (мавзолей).
Торға (торҡа) — башҡа кейә торған яу кейеме (*М. Б.*).
Торомтай — осло ҡанатлы ыласын.
Торҡып — тороп.
Торо — оторо.
Торон — торонбаш (торомбаш).
Торомтай — төҫө-һыны ҡарсығаға оҡшаған, ҡарсығанан бәләкәйерәк йыртҡыс ҡош. Турғайҙан бүтән ҡошто тибә алмай (*М. Б.*).
Тотор бауы (*Н. И.*) — теҙген (татар кешеһе булараҡ, Н. Иҫәнбәт аңламаған булһа кәрәк).
Төйә (һөйл.) — дөйә.
Төнгә — төньяҡҡа.
Төн ҡайтыуға, көн һиңә — төн үтһә, һиңә көнө бар.
Төп йортта — төп нөсхәлә был урында «тап йортта» тиелгән.
Төпһә — ағасты ҡырҡып алғандан һуң ҡалған төбө (пень) (*М. Б.*).
Төҫө һаҡсы — төҫө уларға һаҡланырға мөмкинселек бирә.
Тубарып — тупарлап.
Туғыҙ ай күтәрмәле — төп нөсхәлә туғыҙ айлыҡ балам.
Туҡмаҡ тағылған айғыр — көтөүгә ирек бирмәй, гел өйөрөп йөрөгән айғырҙың маңлайына туҡмаҡ тағып ебәрәләр. Ул, туҡмаҡ бәрелеүҙән ҡурҡып, тынислана (*М. Б.*).
Туҡмыш — Туҡтамыш тигән исемдең боҙоп әйтелеше.
Туҡһан йортло — илдең айырым административ бүленеше (мәҫәлән, башҡортта бер нисә ауыл йорт иҫәпләнеп, уның хакимиәт башлығы йорт старшинаһы тип йөрөтөлгән).
Турғай ҙа тибеп, ҡаҙ алмаҫ торомтай — ваҡ кимереүселәр һәм бөжәк менән туҡланыусы йыртҡыс ҡош.
Турыҡҡан — инәһен имеп туйған (?).
Турылғынды — тирмәнең өҫкө кейеҙе, бугай.
Түҙгәк — яңынан үрсем ебәрмәҫлек рәүештә серегән типһә (*М. Б.*).
Түл — тоҡом үрсеүе, ҡоштарҙың эсендәге йомортҡа түлдәренә әйтелә. Хайуандарҙың күҙгә күренгән түленә (приплодына) лә әйтелә. «Малы үрсегән», тигән урынға «малы түлләнгән» тип тә йөрөтөлә (*М. Б.*).
Түргә ултырталар — Н.Иҫәнбәттә: юғарыға индерәләр (башҡортса түгел). Хөрмәтләп, үргәрәк ултыртыу.
Түш аҫтына алыр ул — көсләр ул.
Түшәге уртаҡ — серҙәре уртаҡ.
Тыныша алмаған — татыу йәшәй алмаған.
Тыңнаныып (һөйл.) — тыңлап-тыңлап.
Тыуаса — беренсе быуындың дүртенсе быуын ир балаға ҡарата әйтелә (*М. Б.*).
Тыуға — ҡош тубына.
Тыумағыр — тыумағыр — һүгенеү һүҙе.
Тыума бала (тума) — уйнаштан (никахһыҙ) тыуған бала.
Тәғриф итеү (ғәр.) — аңлатып биреү.
Тәкәүер — ыласын һәм этәстәрҙең типкесе (*М. Б.*).
Тәкәүеренә бәйләнгән — типкесенә бәйләнгән.
Тәҡсир (ғәр.) — дәрәжәле кешегә ололап өндәшеү һүҙе.
Тәҡүә (ғәр.) — диндар (дини йола буйынса ғына йәшәүсе).
Тәл була — тап була (осрата).
Тәлтермәс — балалар өсөн уйынсыҡ уҡ, борон яуҙа ла, ауҙа ла

еңел уҡ бурысын үтәр булған (*М. Б.*).
Тәсәлла (ғәр.) — күңел йыуатыу.
Уғыңды — бында тирмәнең сағарағы менән ҡанаттары араһындағы (ҡыйыҡтағы) ҡыя тероүҙәр (таяҡтар) күҙ уңында тотола.
Уғыңды төтөн ҡылырмын — тирмә уғыңды утҡа ягырмын.
Уҙаман — йәшкә өлкән ир-атҡа хөрмәтләп әйтеү һүҙе (*М. Б.*).
Ужар — уҫал телле, асыусан кеше (*М. Б.*).
Уй — уя (соҡор) (*М. Б.*).
Уйпат — ҙурыраҡ тигеҙлек, тугайлыҡтарҙа ярһыҙ ғына, бер яҡ ситенән ҡарағанда, уртаһы уйып алынған һымаҡ күренеп ятҡан соҡорһыу ер (*М. Б.*).
Уйын бирмәгән — серен асмаған.
Улиә, улъя, улйә — ғәнимәт, һуғышта ҡулға төшкән мал (трофей) (*Н. И.*).
Ул яй ҙа был яй игәрмен — ата-әсәһе алдында үҙемдеке итәрмен.
Уп-тап — башбаштаҡлыҡ.
Ур — янған ергә сығҡан үлән (*М. Б.*).
Урал күсте — Урал икенсе кеше ҡулына ҡалды.
Ураңлап — бер тирәлә уралып.
Урап-сорап — уратып-суратып.
Урдыға — ғәскәргә.
Урт өсөн — тупраҡ өйөмө һәм тәрән соҡор рәүешендәге яу нығытмаһы күҙ уңында тотолған, буғай: ур — тупраҡ нығытма, - т (монгол) күплек ялғауы.
Утау, атау — яландағы ҡыуыш, ҡура, өй, утар мәғәнәләрендә.
Утлау — малдың ашап йөрөүе.
Утты — мәғәнәһе буйынса: утлап йөрөүсе малды булырға тейеш.
Утты ҡайҙан утларһың — мал утлатыр (ашатыр) утлауҙы ҡайҙан табырһың?
Ут урындай — М. Буранғоловта саҡма таштай. Асылда иһә, йылҡысы башҡорт күҙлегенән ҡарағанда, усаҡ яҡҡан урын киңлеге мәғәнәһендә булғанға оҡшай.
Утынан — үләненән (*М. Б.*).
Үҙ башыма күс иттем — үҙ башыма бәлә алдым.

Үҙҙе-үҙе (һөйл.) — һәр береһе бер башҡа.
Үҙ ырайы — үҙ теләге.
Үнгәнле (үңгә — башҡа, бүтән) башҡа-башҡа.
Үртәндән — үртәлгәндән.
Үтә — аша.
Форсаты менән — күрәҙәлек ҡеүәһе менән.
Фәрзәнде (фарсы) — ир баланы, сабыйҙы.
Халыҡтың гәмен кем йыйыр — халыҡты кем ҡайғыртыр.
Хам булды (фарсы) — сейле-бешле, еткереп үтәлмәгән.
Хан кинйәһе — хандың кесе улы.
Хаяты — ғүмере (тере ҡалыуы).
Хозурына — янына.
Хөрмәт итеп — һыйлай-һыйлай мәғәнәһендә.
Хөрмәт күрҙеләр — һыйландылар мәғәнәһендә лә.
Хөфөйә (ғәр.) — йәшерен сер. (Һарай интригаһында йәшерен кәңәш. — *Н. И.*).
Хәҙистә (ғәр.) — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең нәсихәтендә.
Хәрефе — өнө булырға тейеш.
Һаба — ҡымыҙ һауыты. Уны ағастан өңөп эшләйҙәр.
Һабрау — һалбыр ауыҙ (ирен) тигәндән хасил булған ҡушамат.
Һағалдырыҡ — аттың башынан һыпырылмаһын өсөн, йүгәнде аттың ягы артынан, тамағы тиҙенән тарттырып бәйләй торған бау.
Һаҙаҡ — уҡ һәм ян һала торған күн һауыт, ҡай урында — йәйә, ян мәғәнәһендә йә колчан мәғәнәләрендә лә йөрөй. «Ҡылыч садағыны буйнина асип, килеп мылазмат ҡылып ҡырғанны тапшырҙы» (Радловтың «Төрөк шиүәләре һүҙлегендә». — 4-се том. — 383 — 384-се б. — *Н. И.*)
Һайҙа — һеңгө.
Һайҙаҡ — һайланма ат (*М. Б.*)
Һайҙап (һөйл.) — һайлап.
Һалҡын төшмәй — һыуынышмаҫ элек.
Һанһынмай — тиңһенмәй.
Һаңғырау юлдың — йәшерен юлдың.

Һарауыс — 1. Ебәк менән биҙәп тегелгән тирмә (*М. Б.*). 2. Ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеү-төҙәнеү әйбере. Ус аяһындай аҡ сепрәкте (киндерҙе) нағышлап уға орнамент төшөрәләр ҙә шуны маңлай тәңгәленә ҡашмау аҫтына ҡыҫтырып йөрөйҙәр.

Һарҡыт — эсемлек.

Һарна — һуған һымаҡ ҡатлы-ҡатлы, әммә сөсө һәм татлы (*Ә. С.*), тамыры ашала торған бер үлән. (Татарса — сәрәнә — *Н. И.*). Һарнанан бутҡа бешереп ашайҙар.

Һары аяҡты (һөйл.) — алтын һауытты.

Һарымһаҡтай аҙаулы — аҙау теше һарымһаҡ һымаҡ.

Һатифуән (ғәр.) — серле тауыш биреүсе.

Һауыр — бер төр йәнлек (сурок).

Һауыр — оса ите, арт һан (*М. Б.*).

Һеҙ ҡара — ҡара халыҡ.

Һеңдергәнсе һуҡмағы — һеңлегәнсе һуға торған.

Һигеҙ күҙҙән ҡоморо — һигеҙ күҙҙән.

Һикһән һөйәм — һигеҙ ҡарыш.

Һил — үтә тынлыҡ, тирегә сыҡҡан майға ла әйтелә (*М. Б.*).

Һин теләнең — дөрөҫө: һин тилеттең.

Һиңә хәтәрле — һиңә яманлыҡ килерен иҫкәртеүсе.

Һис төгәнмәҫ — һис тарҡалмаҫ.

Һөңгөгә кеше мендергән — һөңгөһөнә ҡаҙап, кешене башы аша алып ташлай алған (йәғни көслө).

Һуйҡалап — кәйелеп.

Һулдырып — һулытып.

Һум тимер — бөтөн тимер, ҡалын тимер.

Һур (һөйл.) — ҙур.

Һүҙ әйтмәйем — һүҙем юҡ, һүҙһеҙ, ҡаршы түгелмен.

Һынап бир — һынсыллығың менән юрап бир.

Һын булды — һынсыл булды.

Һыҡмыр хан — һаран хан.

Һыптыра — шиптыра.

Һыуыр — тейен кеүек, кимереүселәр төркөмөнә ҡараған, әммә өң яһаған, ерҙә йәшәгән йәнлек.

Һәмәрен (һомор) — кәйеф-сафа, күңел асыу (*М. Б.*).

Һәрпәндәшеп — әрһеҙләнеп йөрөү.

Һәүетемсә — ныҡ ҡына, яҡшы ғына итеп.

Чәһар — дүрт йондоҙ: Сулпан, Етегән, Тимер ҡаҙыҡ, Өлкәр (*М. Б.*).

Чупанга — сулпан йондоҙона.

Шайҡан — асыу, үпкә ташыу, ҡабарыныу, зар мәғәнәләрендә йөрөй (*М. Б.*).

Шаршы — ҡар аҫтында туңмай ятҡан тәрән һыу ағымы (*М. Б.*).

Шауҡыныу — уҫаллыҡ менән йоғонто яһау (*М. Б.*).

Шихан — текә булмаған ҙур тау.

Шунда ла — шулай ҙа.

Шәр — шәрә.

Шәрбәт ҡушылһа, сөсөшөп — яҡшы мөғәләмә иткән кешегә мин дә яҡшымын.

Шәһит — изге эш өсөн ҡорбан булыусы.

Шәһит ҡылыу — теләктәш, фекерҙәш булыу.

Ылаш — ҡорот, эремсек киптереү өсөн дүрт бағанаға ҡағып, ваҡ талдан ситән үреп, йәки балыҡ тота торған мурҙа, шаран һымаҡ бәйләп яһалған кәштә — шүрлек (*М. Б.*).

Ымһытҡан — ымһындырған, өмөтләндергән.

Ынйытҡан — ҡуҙғытҡан.

Ырай — күңел теләүе, кәйеф, настроение (*Н. И.*). Мәҫәлән: ырая ғына — теләр-теләмәҫ кенә.

Ыу — ағыу.

Эйәр ҡашын — Н. Иҫәнбәттә: Инйәр ҡашына (эйәр ҡашы, күрәһең уға аңлашылмаған).

Энйе (һөйл.) — ынйы.

Энйеләй (һөйл.) — ынйылай.

Энйетеү — буталышыу (*М. Б.*)

Эс-бауырың тараған — сер уртаҡлашҡан.

Эсе туҙмай — эсе туҙмайынса.

Эс тартҡан — шикләнгән, серен сисмәгән.

Эт сыуағы — көҙгө ҡояшлы һалҡын көн (*М. Б.*): көн төшкән ерҙә йылы, күләгәлә һалҡын була.

Әҙәрнә ян — һыртына бүре тармышы ҡуйып, мөгөҙҙән яһалған йәйә.

Эбей сыуағы — көҙгө сыуаҡ көн.

Эйләнсек — ҡуй, һарыҡ ауырыуы (ул сир тейһә, мал әйләнә лә әйләнә).

Эйләнәһе ҡуғалы — тирә-яғы ваҡ башаҡлы ҡамыш.

Экә аяҡ — ялбыр тояҡлы.

Элпе — ҡылған башындағы аҡ сәскә. Аттың бәкәл, маңлай сәсе айырым, бүтән аттарҙыҡына ҡарағанда, өлтәйеп торһа, әлпе сәсе, тип әйтелә (*М. Б.*).

Эләмән бул — имен бул (гел имен бул).

Эрсәләргә (әрәсәләргә) — ҡурсаларға, ярҙам итергә.

Эселәнеү — асыуланыу, үпкәләшеү, асыуланышыу (*М. Б.*).

Эсәнән тыуып ҡалһа ла — әсәнән етем ҡалһа ла.

Эшкәмә — этлек.

Эшкәр итте — белгертте, иғлан итте.

Юлаҡтан — ектән (тишектән).

Юл башыны һораны — юл башын (ҡайҙан килеүҙәрен) һораны.

Юлларһың — дөрөҫө: юярһың (бөтөрөрһөң).

Юлым бар — хаҡым бар.

Яғаһында — янында, ситендә.

Яҙғы ҡауға — яҙғы ҡауланға (уҙған йылдан ҡалған ҡыу үләнгә).

Яй ҡорған — ял итергә туҡтаған.

Яй ҡуйған — ирек биргән (*М. Б.*).

Яйырап (һөйл.) — йәйрәп.

Яллад — йәллә̄т (палач).

Ямғыр теләү — теләккә сығыу, йолаһын атҡарып, Тәңренән ямғыр һорау.

Янут тун — янут (ағасҡа үрмәләүсе ҡарағусҡыл һары төҫтәге кескәй януарҙың) тиреһенән тегелгән тун.

Ян — уҡ ата торған йәйә (*Н. И.*).

Япан — ситтә.

Япраҡтарын — тармаҡтарын.

Ярандар — хандар янында йөрөгән кешеләр (*М. Б.*).

Ярпы-ярпы япраҡлы — (күп тармаҡлы).

Ясаҡ — бер хөкүмәт кешеһенең айырым, халыҡ өҫтөнә һалдырған ауыр һалым (*М. Б.*).

Ятҡа йоҫоҡ булһана — яттарға (дошманға) хәүеф һалыусы, ҡотон алыусы булсы мәғәнәһендә.

Яу — бында яуҙаштар, ғәскәр мәғәнәһендә. Яуға таярланған — яуға әҙерләнгән.

Яуға таярланғандар — яуға киткәндәр.

Яурын — ҡулбаш, ҡалаҡ һөйәге (ҡарағыҙ: Радлов. Словарь. — 3-сө том, 18-се б.). Бында арҡа мәғәнәһендә (*Н. И.*).

Яусылар бында илселәр мәғәнәһендә

Яуыҡ — яҡын. Боронғо уйғыр легәтендә: «Тикмә кеше үҙ булмаҫ, ят-яуыҡ үҙ булмаҫ» (Ҡарағыҙ: М. Ҡашғари. Диван лөғ. 1. — 362-се б.) «Һәр кеше үҙ булмаҫ, ят яҡын (тигеҙ) булмаҫ» тигән мәғәнәлә (*Н. И.*).

Яуымда — яу (һуғыш) ваҡытында.

Яуымды — бында ғәскәремде мәғәнәһендә.

Яу яраҡтарын — яу ҡоралдарын.

## ҺЫҒЫМТА

«Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының был томы логик яҡтан да, туранан-тура ла ошо серияла сыҡҡан өсөнсө — етенсе томдар менән бәйләнешле. Әгәр «Иҙел менән Яйыҡ» тигән эпик ҡобайырҙың ҡаһармандары, Урал батырҙың уландары булараҡ ул әйтеп ҡалдырған васыят буйынса эш итеп, кешелек бәхете хаҡына яҡшылыҡ ҡылып, яуыз мифик заттар менән алыша йөрөһә, Алып батыр («Алып батыр»), Урал батыр һәм уның уландары яулап алған ерҙә ете башҡорт ырыуы йәйелеп китергә шарттар тыуҙыра. Алпамыша, Барсынһылыу, Кәртә Мәргән («Алпамыша», «Барсынһылыу», «Кәртә Мәргән») иһә шәхес бәхете мөхәббәткә нигеҙләнгән гаиләлә икәнен раҫлай. «Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының версия, варианттары һәм уның йыйылма тексттарының йөкмәткеһе тыуған ер — Урал батыр һәм уның уландары хасил иткән Урал, Иҙел менән ғорурланыу, уларҙың яҙмышын ҡайғыртып, көрәшкә күтәрелеү, социаль ғәҙеллек идеяһы менән һуғарылған. Һуңғыһы, бигерәк тә «Аҡай яуы», «Ҡараһаҡал яуы» ише эпостарҙа асыҡ үткәрелә: улар икеһе лә башҡорттарҙың быуаттарға һуҙылған милли азатлыҡ хаҡына күп ҡорбандар килтереүен бәйән итә. Инеш мәҡәләлә шул эпостарға ҡыҫҡаса күҙәтеүҙәр яһала. Том бөтә тулылыҡҡа ынтылыусы аңлатмалар һәм һүҙлек менән йыһазландырылған.

## РЕЗЮМЕ

Этот том свода «Башкирское народное творчество» имеет логическую и прямую связь с предыдущими томами, посвященным эпосам. Если герои эпоса «Идель и Яик», будучи сыновьями Урал-батыра, верные заветам отца своего, совершают только добрые дела ради счастья человечества, уничтожая темные

силы в лице таких мифических существ как Езтырнак, дэв, ялмауз, то герой эпоса «Алып-батыр» осваивает завоеванную ими землю, чтобы его потомки — семь башкирских племен могли жить на ней и продолжить свою родословную. Алпамыша, Барсынхылу и Кэртэ Мэргэн как бы конкретизируют эту идею («Алпамыша», «Барсынхылу», «Кэртэ Мэргэн»). Ради реализации этой идеи они борятся за брак, основанный на любви и выступают против тех, кто отрицает эту истину. Содержание же таких эпосов как «Батыры Илеукяй, Келяйле, Яик», версии и варианты эпоса «Идукай и Мурадым», в том числе и сводных, проникнуто идеями гордости за землю, обретенную Урал-батыром и его потомками, и борьбы за освобождение ее от неприятеля и торжество социальной справедливости на ней. Последнее особенно четко прослеживается в таких эпосах, как «Восстание Акая» и «Восстание Карасакала», повествующих о том, как много жертв приносил башкирский народ на алтарь победы в ходе национально-освободительной борьбы, продолжающейся в течение нескольких веков. Во введении делается краткий обзор эпосов, вошедших в этот том. Книга снабжена обширными комментариями и глоссарием.

## ÖZET

Başkurt Halk Edebiyatı Kulliyatının bu cildi mantıgı yönünden seride yayımlanan üçüncü, yedinci ciltler ile bağlıdır. Eger «idil ile Yayık» adlı destanın kahramanları Ural Batır'ın oğulları olarak, onun vasiyetlerini gerçekleştirip, insanlığın mutluluğu için iyilik yapıp, kötü mitolojik şahıslar ile savaşıyorsa, Alıp Batır («Alıp Batır») Ural Batır ve onun oğulları yasayan yerde yedi başkurt boyunun hayat sürdürmesine ön şartlar doğurmuştur.

Alpamışa, Barsınsılıv, Kerte Mergen («Alpamışa», «Barsınsılıv», «Kerte Mergen») ise şahış muflulugu sevgiye esaslanan aile olduğunu ispatlıyor. «İlevkey, Keleyle, Yayık Batırlar», «İzevkey ile Muradım» destanının versiyonu, varyantları metninin mana anlamları ana vatan, Ural Batır onun oğulları Ural, İdil ile övünmek onların hayatını, sosyal hakkını korumak için savaş ana konudur.

Ayrıca son konuyu «Акау savaşı», «Karasakal savaşı» gibi destanlarda açıkça görebiliriz. Onlar ikisi de başkurtların asırlar boyunca milli özgürlük için savaşarak çok şehitler verdiğini söylüyor.

Giriş kısmıda bu destanlara değerlendirmeler yaplıyor. Ciltte açıklamalar ve sözlük verilmiştir.

## ENGLISH SUMMARY

This volume of the sequel «The Bashkir National Creative art» has logic and a direct communication with the previous volumes, to the

ones devoted to the epic poems. If the heroes of the epos «Idel and Jaik», being sons of Ural-batyr, true to their father's precepts, do only kindly acts for the sake of happiness of mankind, destroying dark forces on behalf of such mythical creatures as *Yeztyrnak*, *dev*, *Yalmauz*, the hero of the «Alyp batyr» epos masters the ground won by them, so that his descendants — seven Bashkir tribes could live on it and continue the family tree. *Alpamysha*, *Barsynhylyu* and *Kärtä Märgan* as if concretize this idea (see «Alpamysha», «Barsynhylyu» and «Kärtä Märgän»). For the sake of realizing this idea they struggle for marriage based on love and oppose those who deny this truth. The content of such epic poets as «Ileykay, Kelayle, Jaik-batyrs, vesions and variants of the epos «Ithukay and Morathym» including aggregate ones, is imbued by idea of pride for the tereir land, recovered by Ural-batyr and his descendants, and the struggle for liberating it of the enemy and a triumph of social justice on it. The latter is especially clearly emphasized in such epics as «The Revolt of Akay» and «Revolt of Karasakal», narrating of how many victims has Bashkir people suffered for the sake of victory during the national-liberation struggle havinq continued in the course of several centuries. In the introduction a brief review of the epic poems which have been entered into this volume is done. The book is supplied with extensive comments and a glossary.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Оҡшаш булмаған эпик ҡомартҡыларыбыҙҙағы уртаҡлыҡтар (*Әхмәт Сөләймәнов*) . . . . . 6
1. Иҙел менән Яйыҡ . . . . . 57
2. Алып батыр . . . . . 75
3. Барсынһылыу . . . . . 77
4. Алпамыша . . . . . 81
5. Кәртә Мәргән . . . . . 102
6. Илеүкәй, Келәйле, Яйыҡ батырҙар . . . . . 106
7. Иҙеге . . . . . 111
8. Туҡтамыш хан менән Иҙеүкәй . . . . . 115
9. Иҙеүкә менән Мораҙым (*Әхмәт Сөләймәнов тәржемәһе*) . . . . . 120
10. Едигә батыр (*Әхмәт Сөләймәнов тәржемәһе*) . . . . . 138
11. Иҙеүкәй менән Мораҙым . . . . . 145
12. Иҙеүкәй менән Мораҙым . . . . . 311
13. Ханбикәнең Туҡтамыш ханға икенсе төшөн һөйләгәне (*Эпостан өҙөк*) . . . . . 332
14. Иҙекә менән Жанбай, Туҡтамыш менән ҡыҙғатау ҡош (*Эпостан өҙөк*) . . . . . 333
15. Иҙеүкәй менән Мораҙымдың әйтешкәне (*Эпостан өҙөк*) . . . . . 335
16. Иҙеүкәйҙең Мораҙымға үпкәләгәне йәки «Иҙеүкәй менән Мораҙым» көйө (*Эпостан өҙөк*) . . . . . 336
17. Аҡай яуы . . . . . 338
18. Ҡараһаҡал яуы . . . . . 348
19. Ҡара ат . . . . . 353
Ҡушымта. Идигә батыр . . . . . 366
Аңлатмалар . . . . . 377
Һүҙлек . . . . . 475
Һығымта . . . . . 488

*«Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығы*
*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө ғилми үҙәге «Почет билдәһе» орденлы*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында*
*әҙерләнде һәм институттың*
*ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды*

Литературно-художественное издание

**Башкирское народное творчество**

**Том 8**

**Иртэки и эпические кубаиры**

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Эльвира Ниғмәтуллина*
Биҙәлеш мөхәррире *Азат Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Зәйтүнә Сынғыҙова*
Корректорҙары *Гөлсинә Попова, Ләйсән Шаймарҙанова, Дилә Аптекова, Альбина Баязитова*

Йыйырға бирелде 03.10.06. Баҫырға ҡул ҡуйылды 08.12.06. Форматы 60x90 1/16. Офсет ҡағыҙы № 1. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 30,75+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 31,0. Иҫәп-баҫма таб. 29,92+0,45 форз. Тиражы 5000 дана. Заказ № 1.0160.06.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте»
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.